# БАШКОРТ ТЕЛЕНЕҢ АҢЛАТМАЛЫ ҺҮҘЛЕГЕ



Н. Ф. Суфьянова, З. Ә. Сиразитдинов, З. Ғ. Ураҡсин

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ АҢЛАТМАЛЫ ҺҮҘЛЕГЕ

**урта һәм юғары класс уҡыусылары өсөн**

*Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде*

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ · 2011

К 811.512.141 (038)
К 81.4 Баш-3
С 47

Яуаплы мөхәррире
Башҡортостан Республикаһы
Фәндәр академияһы академигы *З. Ғ. Ураҡсин*

Рецензенттар
Филология фәндәре докторы, профессор *Э. Ф. Ишбирҙин,*
филология фәндәре кандидаты *Р. А. Сөләймәнова*

**Суфьянова Н. Ф., Сиразитдинов З. Ә., Урактсин З. Ғ.**

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2011. – 336 бит.

ISBN 978-5-295-05215-6

Был һүҙлек урта мәктәп дәреслектәре һәм программа буйынса тәҡдим ителгән әҫәрҙәр нигеҙендә төҙөлдө. Башҡорт мәктәптәренең юғары класс уҡыусылары һәм, ғөмүмән, башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн тәғәйенләнә.

**УДК 811.512.141 (038)**
**ББК 81.4 Баш-3**

**– 71/2011**

**N 978-5-295-05215-6**

© Суфьянова Н. Ф., Сиразитдинов З. Ә.,
Урактсин З. Ғ., 2011
© Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан
«Китап» нәшриәте, 2011

## БАШ ҺҮҘ

1999 йылда Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы ҡабул ителде. Был Закон Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм тиң хоҡуҡлы үҫтереү шарттарын билдәләй. Телдәрҙең хоҡуҡи хәле буйынса, Башҡортостан Республикаһының бөтә территорияһында башҡорт теле, рус теле менән бер рәттән, дәүләт теле булып тора. Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте ҡарары менән, дәүләт теле буларак, башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү һәм башҡа халыҡтарҙың туған телен һаҡлау маҡсатында 2000–2005 һәм 2006–2010 йылдарға Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү буйынса Дәүләт программаһы ҡабул ителде.

Ошондай үҙгәрештәр нигеҙендә башҡорт теле буйынса һүҙлектәргә ихтыяж арта. Башланғыс кластар өсөн уларҙың дәреслектәрендә йыш ҡулланылған һүҙҙәр буйынса башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге төҙөлдө һәм 2005 йылда донъя күрҙе. Әле тәҡдим ителгән һүҙлек юғары класс уҡыусыларына тәғәйенләнә һәм уны төҙөр алдынан да дәреслектәрҙә ҡулланылған һүҙҙәрҙең ҡулланылыш йышлығы тикшерелде. Ул уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыуҙа, әҙәби нормаларҙы билдәләүҙә, һүҙҙең мәғәнә нескәлектәренә төшөнөүҙә, тел үҫешен өйрәнеүҙә мөһим урын алыр тигән өмөттәбеҙ.

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

Һүҙлеккә алынған бөтә баш һүҙҙәр алфавит тәртибендә бирелә. Һүҙлек статьяһы түбәндәгесә төҙөлдө:

1. Баш һүҙ (улар һүҙ төркөмдәре формаларында ҡалын шрифт менән бирелә).

2. Һүҙгә грамматик билдә ҡуйыла, йәғни ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауы ҡыҫҡартып бирелә: **абруй** *и.* **башлау** *ҡ.* (шартлы ҡыҫҡартмалар исемлеген ҡарағыҙ).

3. Һүҙҙең аңлатмаһы. Күп мәғәнәле һүҙҙәрҙә һәр мәғәнә ғәрәп цифрҙары менән айырым күрһәтелә: **айран** *и.* **1.** Ҡатыҡ йәки ҡоротто һыуға иҙеп яһаған шыйыҡлыҡ. **2.** Май бешкәндә ҡаймаҡтан айырылып сыҡҡан әскелтем шыйыҡлыҡ.

4. Омонимдар (яңғырашы, яҙылышы бер төрлө, мәғәнәһе башҡа һүҙҙәр) баш һүҙ итеп, аңлатып айырым бирелә: **ай**[1] *и.* **1.** Ер тирәһендә әйләнгән һәм уға иң яҡын күк есеме. **2.** Йылды ун ике өлөшкә бүлгән ваҡыт берәмеге. *Ай аҙағы. Ай башы* **ай**[2] *ымл.* Ҡурҡыуҙы, аптырауҙы, һоҡланыуҙы белдерә. *Ай, теймә сынаяҡҡа, ватаһың.*

5. Ялғау ҡушылғанда аҙаҡҡы ижеге үҙгәргән һүҙҙәрҙең яҙылышы йәйә эсендә күрһәтелә: **аҙыҡ (аҙығы)**; **яуап (яуабы)** һ. б.

6. Һүҙҙең мәғәнәһен аңлатҡас, уның мәғәнәләш (синоним), ҡапма-ҡаршы мәғәнәле (антоним) һүҙҙәре бирелә. Был һүҙҙең мәғәнәһен тулыраҡ асыу өсөн эшләнә.

7. Һүҙҙең ҡулланылыш даирәһен күрһәтеү өсөн иң киң таралған һүҙбәйләнештәр бирелә, айырым осраҡтарҙа мәҡәлдәр, әйтемдәр алына.

8. Фразеологик берәмектәр ромб билдәһе [♦] артынан бирелә. Уларҙың мәғәнәһе лә аңлатыла. Бындай тотороҡло берәмектәрҙең халыҡ телендә киң ҡулланылышлы булғандары ғына алынды.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

*а.* алмаш
*анат.* анатомия
*астр.* астрономия
*билд.* билдәләү (алмашы)
*биол.* биология
*бот.* ботаника
*бүл.* бүлеү (һаны, теркәүесе)
*бәйл.* бәйләүес
*грам.* грамматика
*дини* дини (һүҙ)
*зат* зат (алмашы)
*и.* исем
*иҡт.* иҡтисад
*инш.* инеш (һүҙ)
*ирк.* иркәләү (формаһы йәки мәғәнәһендә
*иҫк.* иҫкергән (һүҙ)
*йыйн.* йыйнау исеме
*киҫ.* киҫәксә
*кит.* китап (телендәге һүҙ)
*клш.* килеш
*күпл.* күплек (формаһында)
*күрһ.* күрһәтеү (алмашы)
*күсм.* күсмә мәғәнәлә
*кәмһ.* кәмһетеү (һүҙе)
*ҡ.* ҡылым
*ҡар.* ҡарағыҙ
*ҡыу.* ҡыуыу (һүҙе)
*лингв.* лингвистика
*мат.* математика
*махс.* махсус (термин)
*миф.* мифология
*мөн.* мөнәсәбәт (һүҙе)
*мыҫҡ.* мыҫҡыллау (һүҙе)
*мәғ.* мәғәнәһендә
*оҡш.* оҡшатыу (һүҙе)
*р.* рәүеш
*с.* сифат
*ситл.* ситләтеп әйтелгән (һүҙ)
*спорт* спорт
*сығн.* сығанаҡ (килеш)
*сәнғ.* сәнғәт
*тар.* тарихи (һүҙ)
*театр.* театр (термины)
*терк.* теркәүес
*тех.* техник (термин)
*төш.* төшөм (йүнәлеше, килеше)
*ф.* форма
*физ.* физика
*һ.* һан
*һ. б.* һәм башҡалар
*һор.* һорау (алмашы)
*һөйл.* һөйләү телендәге һүҙ
*ымл.* ымлыҡ
*эйл.* эйәлек (алмашы, килеше)
*әҙ.* әҙәби (термин)
*ярҙ.* ярҙамлыҡ функцияһында

# А

**абаға** *и.* Эре ҡауырһын япраҡлы күп йыллыҡ үҫемлек (ағаслыҡта, дымлы ›ҙә үҫә). *Абағалы урман. Абаға һабағы.*

**абалау (абала-)** *ҡ.* Ынтылып-ынтылып, ярһып өрөү. *Эт абалай.*

**абзац** *и.* **1.** Эскәрәк индереп яҙылған юл башы: ҡыҙыл юл. *Абзацты айырып ыу.* **2.** Тексттың бер ҡыҙыл юлдан икенсеһенә тиклемге өлөшө. *Беренсе ҙзац. Абзацтарға бүлеү.*

**абруй** *и.* Халыҡ алдында ҡаҙанған ихтирам. *Абруйҙы күтәреү. Абруйҙы эшөрөү.*

**август** *и.* Йылдың һигеҙенсе айы. *Август етте. Уҡытыусыларҙың август ңәшмәһе.*

**автобус** *и.* Кешеләрҙе йөрөтә торған күп урынлы автомашина. *Автобусҡа тырыу. Автобуста барыу. Автобус хәрәкәте.*

**автомобиль (автомобилгә)** *и.* Рельсһыҙ юлдарҙа йөк һәм кеше ташый рған үҙе йөрөмәле машина. *Еңел автомобиль. Йөк автомобиле. Автомобиль ›рөтөү.*

**автономия** *и.* Дәүләтселектең эске идара эштәрен үҙ алдына хәл итеү ›ҡуғы. *Ерле автономия. Милли-мәҙәни автономия. Автономия алыу. Автомия биреү.*

**автор** *и.* Әҙәби һәм сәнғәт әҫәре, ғилми эш һ. б. ижад итеүсе кеше. *Романың авторы. Проекттың авторы. Рәсемдең авторы. Авторлыҡ хоҡуғы.*

**авторучка** *и.* Эсенә ҡара йәки паста тултырылған яҙыу ҡоралы. *Шариклы торучка. Авторучка менән яҙыу.*

**агроном** *и.* Ер, игенселек эше белгесе. *Баш агроном. Агроном булып эшләү.*

**ағай** *и.* **1.** Үҙеңдән оло булған бер туған ир-ат. *Оло ағайым. Кесе ағайым. Ике ўған ағай. Ғәли ағай.* **2.** Үҙеңдән оло, атай-әсәйеңдән кесе булған һәр ир-ат. *р ағай килеп инде.*

**ағартыу (ағарт-)** *ҡ.* **1.** Аҡҡа буяу; аҡлау. *Мейес ағартыу. Өй ағартыу.* **2.** Керен, бысрағын бөтөрөү; таҙартыу. *Керҙе йыуып ағартыу.* **3.** *күсм.* Аңбелем таратыу, аңлы-белемле итеү. *Халыҡты ағартыу. Ағартыу эше.*

**ағарыу (ағар-)** *ҡ.* **1.** Аҡ төҫкә инеү. *Ағарып ятыу. Арыш ағарған.* **2.** Керҙән, бысраҡтан таҙарыу. *Таҫтамал, ҡайнатҡас, ағарҙы.* **3.** Сал төҫкә инеү; салланыу. *Сәс ағарыу.*

**ағас** *и.* **1.** Ҡаты олонло, ботаҡлы күп йыллыҡ үҫемлек. *Ылыҫлы ағас. Япраҡлы ағас. Емеш ағасы. Ағас ултыртыу. Ағас ҡырҡыу.* **2.** Шул ағастың хужалыҡта ҡулланыу өсөн ҡырҡып алынған өлөшө. *Төҙөлөш ағасы. Утын ағасы. Ағас әҙерләү. Ағас эшкәртеү.*

**ағыҙыу (ағыҙ-)** *ҡ.* **1.** Ағыуҙы хасил итеү. *Быуаны ағыҙыу. Самауырҙың һыуын ағыҙыу. Нефть ағыҙыу.* **2.** Йылға ағышы ыңғайына ниҙелер ебәреү. *Һал ағыҙыу. Сүп-сар ағыҙыу.* **3.** Ҡан, йәш һ. б. түгеү. *Йәш ағыҙыу. Тир ағыҙыу.*

**ағым** *и.* **1.** Һыуҙың, һауаның бер йүнәлештәге хәрәкәте. *Түбәнге ағым. Урта ағым. Һауа ағымы.* **2.** Бер йүнәлештәге талғын хәрәкәт (болот, күк есемдәренә ҡарата). *Болоттар ағымы.* **3.** Күмәк төркөмдөң бер йүнәлештәге хәрәкәте. *Халыҡ ағымы.*

**ағын** *с.* Ағып ятҡан, аҡҡан (һыуға ҡарата). *Ағын һыу.*

**ағыу[1] (аҡ-)** *ҡ.* **1.** Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү, һарҡып төшөү (шыйыҡлыҡтарға ҡарата). *Йылға аға. Йәш аға. Һыу ағыр, таш ҡалыр.* (Мәҡәл.) **2.** Һыу менән ҡуша хәрәкәт итеү. *Бүрәнә аға.* **3.** Өҙлөкһөҙ үтеп тороу (ваҡытҡа ҡарата). *Көндәр аға, йылдар аға.* ♦ **Аҡмаһа ла тама** әҙ-мәҙ булһа ла эләгеп тора, ҡулға төшә (мал, аҡса тураһында).

**ағыу[2]** *и.* Тереклек өсөн зәһәрле булған матдә; ыу. *Йылан ағыуы. Химик ағыу.*

**ағыш** *и.* **1.** Һыу, һауаның һиҙелгән хәрәкәте. *Ағиҙелдең ағышы.* **2.** Эшхәлдең барышы; ағым. *Ваҡиғалар ағышы. Тормош ағышы.*

**адвокат** *и.* Ғәйепләнгән кешене судта яҡлаусы йәки хоҡуҡтар буйынса кәңәш биреүсе юрист. *Адвокат булып эшләү. Адвокат кәңәше.*

**адмирал** *и.* Хәрби диңгеҙ флотында иң юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше. *Флот адмиралы. Адмирал дәрәжәһе.*

**адрес** *и.* Почта аша ебәрелгән нәмәләрҙең тәғәйенләнгән урынын һәм кешеһен күрһәткән яҙыу. *Адрес яҙыу. Адрестар бюроһы. Хаттың адресы.*

**аҙ** *р.* **1.** Һаны, күләме ғәҙәттәгенән кәм. *Аҙ белеү. Аҙ күреү. Аҙ йәшәү. Аҙ һөйләү. Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар.* (Әйтем.) **2.** *с. мәғ.* Һаны, күләме, дауамлығы бәләкәй; әҙ. *Аҙ аҡса. Аҙ ваҡыт. Аҙ һүҙле.* ♦ **Аҙ тигәндә** кәм тигәндә, кәмендә. **Бер аҙ** бер ни тиклем. *Бер аҙ уйлап ҡара.*

**аҙайыу (аҙай-)** *ҡ.* Күләм йәки һан яғынан кәмеү. *Аҙыҡ аҙая бара. Ваҡыт аайҙы.*

**аҙаҡ**[1] **(аҙағы)** *и.* Билдәле бер ваҡыттың, миҙгелдең, эш-хәлдең бөтөп арған өлөшө; һуң. *Йыл аҙағы. Ай аҙағы. Эш аҙағы.*

**аҙаҡ**[2] *р.* **1.** Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, һуңыраҡ. *Аҙаҡ ҡайтыу. Аҙаҡ эйләшербеҙ. Аҙағыраҡ килерһең.* **2.** Берәй эш-хәл булғас, шунан һуң. *Концерт-ан аҙаҡ. Минән аҙаҡ. Яуҙан аҙаҡ йоҙроҡ күтәргән.* (Мәҡәл.)

**аҙан** *и. дини* Намаҙға саҡырғанда йәки балаға исем ҡушҡанда әйтелгән ыҫҡа доға. *Иртәнге аҙан. Киске аҙан. Аҙан әйтеү.*

**аҙаш** *и.* Бер исемде йөрөткән ике йәки бер нисә кеше (бер-береһенә арата). *Беҙ аҙаштар. Аҙаш ағай.*

**аҙашыу (аҙаш-)** *ҡ.* **1.** Юлдан ситкә китеү, юл юғалтыу. *Аҙашып йөрөү. ҙашып ҡалыу. Буранда аҙашыу. Урманда аҙашыу.* **2.** *күсм.* Яңылыш юлға ыҫыу; хаталаныу. *Тормошта аҙашмаҫҡа кәрәк.*

**аҙбар** *и.* Мал бикләй торған ябыулы кәртә; һарай. *Ат аҙбары. Һыйыр бары. Аҙбар арты. Малды аҙбарға ябыу.*

**аҙна** *и.* Дүшәмбенән йәкшәмбегә тиклемге ете көндө эсенә алған ваҡыт. ҙна буйы. Аҙна һайын. Аҙна аҙағы. Аҙна башы. Аҙнаға бер. Биш көнлөк эш наһы.*

**аҙналыҡ (аҙналығы)** *и.* **1.** Аҙна буйына дауам иткән йәки аҙнаһына бер улған. *Аҙналыҡ эш. Аҙналыҡ ризыҡ. Аҙналыҡ газета.* **2.** Берәй ваҡиға, эшкә ғышланған аҙна. *Китап аҙналығы. Шиғриәт аҙналығы. Музыка аҙналығы ошторору.*

**аҙыҡ (аҙығы)** *и.* **1.** Туҡланыуға файҙаланылған нәмә; ашамлыҡ, ризыҡ. ыҡ магазины. Аҙыҡ туплау. Аҙыҡ әҙерләү.* **2.** Хайуандар туҡлана торған нәмә. *эшел аҙыҡ. Ҡатнаш аҙыҡ. Мал аҙығы. Тамыр аҙыҡ. Аҙыҡ рационы.* **3.** *күсм.* үңелде ҡәнәғәтләндергән нәмә. *Рухи аҙыҡ. Күңел аҙығы. Йәнгә аҙыҡ табыу.*

**аҙыҡ-түлек** *и. йыйн.* Кешегә ашарға яраған бөтә ашамлыҡ; ризыҡ. *Аҙыҡ-үлек магазины. Аҙыҡ-түлек туплау.*

**аҙым** *и.* **1.** Атлағандағы ике аяҡ баҫымы араһы. *Ваҡ аҙым. Эре аҙым. Аҙым-ы йышайтыу. Бер аҙым.* **2.** Атлап барыш, йөрөш. *Етеҙ аҙым. Һалмаҡ аҙым.* *күсм.* Берәй эшкә йүнәлтелгән хәрәкәт. *Ҡыйыу аҙым. Киләсәккә аҙым.* **Аҙым һайын** әленән-әле, гел генә.

**ажау** *и.* Һаҙандар төркөмөнә ингән яҫы моронло, итләс эре балыҡ; ҡуш-ш. *Ажау тотоу.*

**аждаһа** *и.* Бер нисә башлы ҙур йылан ҡиәфәтендәге мифик зат. ♦ **Аждаһа ылы** ун ике йыллыҡ иҫәптең бишенсе йылы. **Аждаһа күтәрелеү** ырым буйына, көслө ҡойондан күл, йылға һыуының күккә ашыуы (аждаһа бергә үтәрелә, имеш).

**азат** *с.* Үҙ ихтыярлы, ирекле; бойондороҡһоҙ. *Азат ил. Азат халыҡ. Азат улыу. Азат итеү.*

**азот** *и.* Янмай торған, төҫһөҙ, еҫһеҙ газ, химик элемент. *Азот кислотаһы.*

**ай** *и.* **1.** Ер тирәһендә әйләнгән һәм уға иң яҡын күк есеме, Ерҙең эйәрсене. *Іҫке ай. Тулған ай. Яңы ай. Ярты ай. Ай яҡтыһы. Ай тыуыу.* **2.** Йылды ун ике өлөшкә бүлгән ваҡыт берәмәге. *Ай аҙағы. Ай башы. Йәй айҙары. Ҡыш айҙары. Бер ай. Алты ай.* ♦ **Ай ҙа ҡояш булыу** һәр саҡ көлөп, йылмайып ҡына тороу. **й күрҙе, ҡояш алды** күҙ алдынан ҡапыл юғалған кешегә ҡарата әйтелә. **й тотолоу** Айҙың Ер күләгәһенә инеп ҡараңғыланыуынан торған астрономик күренеш.

**ай-бай** *ымл.* Берәй эш-хәлгә, күренешкә ғәжәпләнгәндә әйтелә. *Ай-бай, ыл ни эш был!*

**айғолаҡ (айғолағы)** *и.* Балыҡтың тын алыу ағзаһы.

**айғыр** *и.* Бестерелмәгән йылҡы малы. *Өйөр айғыры. Тоҡом айғыры. Аҙау йғыр.*

**айныу (айны-)** *ҡ.* **1.** Иҫереклектән сығыу, ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу. *Араҡынан йныу. Айнып уяныу.* **2.** Көс-ҡеүәте кәмеү (төрлө иҫерткес шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Бал айныған.* **3.** *күсм.* Ниҙең дә булһа көслө тәьҫиренән, берәй хәлдән арыныу, әҙәттәге хәлгә ҡайтыу. *Йоҡонан айныу. Ауыр уйҙарҙан айныу. Хыялдан айныу.*

**айран** *и.* **1.** Ҡатыҡ йәки ҡоротто һыуға шыйыҡлап яһаған эсемлек. *Айран иуҡыу. Айран һыулау. Айран яһау. Айран эсеү.* **2.** Май бешкәндә ҡаймаҡтан йырылып сыҡҡан әскелтем шыйыҡлыҡ. *Айран һарҡытыу.*

**ай-һай** *ымл.* **1.** Аптырағанда, һоҡланғанда һәм башҡа тойғолар белергәндә әйтелә. *Ай-һай, уңған да һуң!* **2.** Берәй эш-хәлгә шик белдергәндә, келәнгәндә әйтелә. *Ай-һай, ышанырғамы икән уға?*

**айыл** *и.* **1.** Ыңғырсаҡты бауыр аҫтынан тарттырып нығыта торған яҫы бау. *йылды тартыу.* **2.** Эйәрҙең сандырҙан алып тартыла торған ҡайышы.

**айырма**[1] *и.* Бер нәмәне икенсенән айырып торған сифат; үҙенсәлек. *Айырма булыу. Айырмаһын табыу.*

**айырма**[2] *и.* Алыу ғәмәле һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан һан. *Айырманы илдәләү.*

**айырылыу (айырыл-)** *к.* **1.** Бер урындан бер нисә тармаҡҡа бүленеү. *Юлдар ырылды.* **2.** Төркөмдән йәки бергә булғандарҙан бер башҡа бүленеү, тләтеү. *Айырылып ҡалыу. Кешеләрҙән айырылыу. Айырылғанды айыу ашар, ленгәнде бүре ашар.* (Мәҡәл.) **3.** Хужалыҡтан йәки ғаиләнән бүленеп сығыу, шҡаланыу. *Ирҙән айырылыу. Айырылып сығыу.* **4.** Үҙенсәлекле булып күреп тороу. *Уның йорто ауылда айырылып тора.*

**айырым (айырым-айырым)** *с.* **1.** Бүтән нәмәләр менән бергә ҡушылмаған, енә бер башҡа. *Айырым бүлмә. Айырым фатир. Айырым һауыттан ашау.* Үҙенә башҡа бер сифатҡа эйә булған, үҙенә бер төрлө. *Айырым ҡағиҙәләр. ырым бер төҫ.*

**айырымланыу (айырымлан-)** *к.* Айырылып бүленеп сығыу; башҡаланыу. *ырымланып йәшәү.*

**айырыу (айыр-)** *к.* **1.** Башҡа-башҡа өлөш йәки төркөм итеү; бүлеү. *лоҡто ҡыйҙан айырыу. Сәсте икегә айырыу.* **2.** Бер төрлө йәки бөтөн мәнең өлөшөн бүлеп алыу. *Эш кейемдәрен айырып ҡуйыу.* **3.** Араны өҙөп, тләшергә мәжбүр итеү. *Башҡайҙарға төшкән ауыр нужа тыуған илдән беҙҙе ырҙы.* (Халыҡ йырынан.) **4.** Ҡатыны менән никахты боҙоу. *Ҡатынды айып ебәреү.* **5.** Нимәнәндер мәхрүм итеү. *Бәхеттән айырыу. Байлыҡтан айыу.* ♦ **Аҡты ҡаранан айырыу** яҡшы менән насар араһындағы айырманы күреү. **ше айырыу** төрлө кешегә төрлөсә ҡарау, тигеҙ күрмәү. **Унды-һулды айырыу** эмошто дөрөҫ аңлау. **Хәреф айырыу** әҙ-мәҙ булһа ла уҡый-яҙа белеү.

**айырыуса** *р.* Айырым бер дәрәжәлә; бигерәк тә. *Айырыуса матур. Айырыуса һим.*

**айыу** *и.* **1.** Ауыр ҙур кәүҙәле, йыуан ҡыҫҡа аяҡлы имеҙеүсе йыртҡыс нлек. *Аҡ айыу. Көрән айыу. Ҡара айыу. Инә айыу. Бала айыу. Айыу алыу. Айыу ғыу. Айыу ите. Айыу тиреһе. Айыу өңө.* **2.** *күсм.* Килбәтһеҙ ҙур кәүҙәле, һалк хәрәкәтле, көслө кеше. ♦ **Айыу баланы** ҡыҙыл сәскәле, ҡыҙыл емешле уаҡ. **Айыуҙан ҡасҡан бүрегә** бер хәлдән ҡотолоп, икенсе бер ауырыраҡ ггә тарыған кешегә ҡарата әйтелә. **Айыу майы һөртөү** нимәнелер шым ғына, рауһыҙ алып китеү; урлау, сәлдереү.

**академик (академигы)** *и.* Фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы м унын ағзалыҡ исеме. *Академик итеп һайлау. Танылған академик. Академик дәрәжәһе.*

**академия** *и.* **1.** Фән һәм сәнғәтте үҫтереү бурысын үтәгән дәүләт ойошмаһы. *ғәй фәндәр академияһы. Башҡортостан Республикаһы фәндәр академияһы. дицина фәндәр академияһы.* **2.** Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттарының маһы. *Ауыл хужалығы академияһы. Хәрби академия.*

**акварель (акварелде)** *и.* **1.** Һыуҙа ебей торған буяу һәм шул буяу менән һүрәт төшөрөү алымы. *Акварель менән һүрәт төшөрөү. Акварель техникаһы.* **2.** Шул буяу менән яһалған һүрәт. *Акварель күргәҙмәһе.*

**аквариум** *и.* Һыу тереклектәрен, үҫемлектәрен аҫрау, үрсетеү өсөн файҙаланылған махсус һауыт йәки быуа. *Аквариумда балыҡ тотоу. Аквариумды таҙартыу.*

**акула** *и.* Оҙон йомро кәүҙәле, осло моронло эре йыртҡыс диңгеҙ балығы. *Аҡ акула. Акулаға һунар.*

**аҡ**[1] *с.* **1.** Ҡар, һөт төҫөндәге; *киреһе* ҡара. *Аҡ төҫ. Аҡ кейем. Аҡ ҡағыҙ. Аҡ болот. Аҡ төлкө. Аҡ ҡуян.* **2.** Ҡәҙерлегә тотола торған. *Аҡ өй. Аҡ келәт.* **3.** *күсм.* Насарлығы, уҫаллығы булмаған; саф. *Аҡ теләк. Аҡ уй. Аҡ бәхет. Аҡ көндәр.* **4.** *күсм.* Совет власына ҡаршы булған; контрреволюцион. *Аҡ армия. Аҡ офицер.*

**аҡ**[2] **(ағы)** *и.* Һөттән әҙерләнгән төрлө ашамлыҡ. *Ағы барҙың туғы бар.* (Әйтем.)

**аҡбуҙ** **1.** *с.* Күкһел (ат төҫөнә ҡарата). **2.** *и.* Әкиәттәрҙәге толпар исеме.

**аҡбур** *и.* Аҡ төҫтәге йомшаҡ таш. *Аҡбур ташы. Аҡбур менән яҙыу.*

**аҡҡош** *и.* Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған күберәк аҡ төҫлө, һомғол оҙон муйынлы иң эре һыу ҡошо. *Ата аҡҡош. Инә аҡҡош. Аҡҡоштар килеүе. Аҡҡош тауышы.*

**аҡлан** *и.* Урман, ағаслыҡ араһындағы асыҡ урын. *Ҙур аҡлан. Аҡланда бесән сабыу.*

**аҡлау (аҡла-)** *к.* **1.** Аҡҡа буяу, аҡ төҫ биреү; ағартыу. *Өйҙө аҡлау.* **2.** *күсм.* Ғәйепһеҙгә сығарыу, ғәйепһеҙ тип табыу. *Аҡлап ҡалдырыу.* **3.** *күсм.* Эш менән раҫлау, дөрөҫкә сығарыу. *Ышаныстарды аҡлау.*

**аҡса** *и.* Алыш-бирештә хаҡ бәрәмәге булып хеҙмәт иткән ҡиммәтле ҡағыҙ йәки металл. *Алтын аҡса. Көмөш аҡса. Баҡыр аҡса. Ҡағыҙ аҡса. Яңы аҡса. Йөҙ һум аҡса. Аҡса алмаштырыу. Аҡсаға һатыу.*

**аҡсарлаҡ (аҡсарлағы)** *и.* Оҙон суҡышлы, ҡыйғас ҡанатлы, уртаса ҙурлыҡтағы, балыҡ менән туҡланған һыу ҡошо. *Диңгеҙ аҡсарлағы. Аҡсарлаҡ йомортҡаһы.*

**аҡтамыр** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған, таралып үҫә торған оҙон аҡ тамырлы күп йыллыҡ үлән. *Аҡтамырҙы утау. Түтәлде аҡтамыр баҫҡан.*

**аҡтарыу (аҡтар-)** *ҡ.* **1.** Аҫтын-өҫкә әйләндереү. *Һандыҡты аҡтарыу. ҡтарып ташлау. Аҡтарып бөтөү.* **2.** Төбө-тамыры менән йолҡоу, ҡуптарыу. *асты аҡтарыу. Ерҙе аҡтарыу.*

**аҡһаҡ** *с.* Аяғы зәғиф; сатан. *Аҡһаҡ эт. Аҡһаҡ булып ҡалыу. Аҡһаҡ күп рөр, һуҡыр күп күрер.* (Әйтем.)

**аҡһаҡал** *и.* Күпте күргән, күпте белгән хөрмәтле оло кеше. *Ырыу ҡһаҡалы. Аҡһаҡалдар йыйыны. Тел белеменең аҡһаҡалы.*

**аҡһау (аҡһа-)** *ҡ.* Аяҡ зәғифлегенән тигеҙ баҫа алмау; сатанлау. *Аҡһап рөү. Ат аҡһаны. Ике аяҡҡа аҡһау.*

**аҡһыл** *с.* Тоноғораҡ аҡ, аҡҡа тартым. *Аҡһыл тауҙар. Аҡһыл томан. Аҡһыл л. Аҡһыл күк. Аҡһыл ҡара. Аҡһыл һары.*

**аҡһым** *и.* Тере матдәнең даими һәм иң мөһим өлөшө булып, төҙөлөш һәм ımәкәрлек нигеҙен тәшкил иткән ҡатмарлы органик матдә. *Аҙыҡтағы ҡһым. Үҫемлек аҡһымы. Аҡһым матдәләре.*

**аҡшам** *и.* Ҡояш байығандан ҡараңғы төшкәнгә тиклемге ваҡыт. *Аҡшам ҡыты. Аҡшам намаҙы.*

**аҡыл** *и.* **1.** Кешенең фекер йөрөтөү, уйлау һәләте. *Аҡылға бай. Аҡылы үәл. Аҡыл хеҙмәте. Аҡыл һәләте. Аҡылы камил. Аҡылға зәғиф. Дөйәләй алтың булғансы, төймәләй аҡылың булһын.* (Мәҡәл.) **2.** Берәй нәмәгә, эш-хәлгә рата булған уй, фекер. *Аҡыл һорау. Башҡа аҡыл килеү. Аҡыл биреү. Аҡыл әтеү.* ♦ **Аҡылға бер төрлө (еңел)** ахмағыраҡ, уйлау һәләте түбән. **Аҡылға леү** 1) иҫкә килеү, иҫте йыйыу; 2) дөрөҫ юлға баҫыу, аҡыллыға әйләнеү. **ҡылға ултырыу** 1) ҡабат эш боҙмаҫлыҡ булып һабаҡ алыу; 2) аҡылһыҙлыҡты шлау. **Аҡылдан шашыу (яҙыу)** дөрөҫ фекерләй алмаҫлыҡ хәлгә төшөү, ялыйланыу.

**аҡылланыу (аҡыллан-)** *ҡ.* Аҡыллыға әйләнеү, аҡыллы булып китеү. *Бала ылланды. Аҡыллана барыу.*

**аҡыллы** *с.* **1.** Уйлап эш итә белеүсән, фекере камил, аңлы. *Аҡыллы кеше. ҡыллы булыу.* **2.** Дөрөҫ фекер йөрөтөүҙең һөҙөмтәһе булған. *Аҡыллы кәңәш. ыллы тәҡдим. Аҡыллы һүҙ.*

**аҡырыу (аҡыр-)** *ҡ.* Яман тауыш менән ҡысҡырыу йәки илау. *Айыу аҡыра. ырып ебәреү.*

**ал**[1] *и.* **1.** Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған тараф; *киреһе* арт. *Ал менән барыу. Ал нән боролоу. Ҡапҡа алды. Өй алды.* **2.** Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған яҡтағы өшө. *Арбаның алды. Ал төрән.* **3.** Берәй эш-хәл башланыуҙан элекке ваҡыт. *йрам алды. Ураҡ алды.*

**ал**[2] *с.* Аҡһыл, асыҡ ҡыҙыл. *Ал байраҡ. Ал яулыҡ. Ал таң.* ♦ **Ал да гөл** бик шәп, бик яҡшы.

**ала** *с.* Аҡ менән ҡара йәки башҡа төҫ аралашҡан. *Ала ҡаҙ. Ала һыйыр. Күк ала.*

**алабуға** *и.* Сәнске ҡанатлылар төркөмөнә ингән йәшкелт ала тәнле, ҡыҙыл ҡанатлы, һырты сәнскеле йыртҡыс балыҡ. *Диңгеҙ алабуғаһы. Йылға алабуғаһы. Алабуға тотоу.*

**алабута** *и.* Сыбар япраҡлы, ваҡ йылтыр орлоҡло, тарбаҡ һабаҡлы сүп үләне. *Алабута утау. Алабута орлоғо.*

**алама** *с.* **1.** Иҫкереп туҙған, тишек-тошоҡ; йыртыҡ. *Алама килдәк. Алама юрған. Алама кейенеү. Алама йыйыу.* **2.** Насар, яман. *Алама ғәҙәт. Алама кеше. Алама сир.*

**аларыу (алар-)** *ҡ.* Алаға әйләнеү, ала төҫкә инеү. *Ҡар аларҙы.*

**аласаҡ (аласағы)** *и.* Бурысҡа бирелгән аҡса йәки башҡа нәмә; *киреһе* бирәсәк. *Аласаҡты алыу. Аласаҡты һорау.*

**аласыҡ (аласығы)** *и.* **1.** Йәйләүҙә көн итеү өсөн ҡабыҡ йәки ситәндән эшләнгән ҡаралты. *Аласыҡ ҡороу. Аласыҡта йәшәү.* **2.** (*йәки* **ут аласығы**) Ишек алдындағы йәйге аш өйө. *Аласыҡта аш бешереү.*

**алгебра** *и.* Дәүмәлдәрҙең һан күрһәткесен иҫәпкә алмай, дөйөм ғәмәл ысулдарын өйрәнә торған математика бүлеге. *Алгебра дәресе. Алгебра өйрәнеү. Алгебра тигеҙләмәһе.*

**алдаҡсы** *и.* Алдай торған кеше.

**алдан** *и.* **1.** Башлап, беренсе булып. *Алдан йөрөү. Алдан килеү.* **2.** Ваҡытынан элек, көн элгәре. *Алдан белеп тороу. Алдан билдәләү. Алдан иғлан итеү.* ♦ **Алдан күреү** ни булырын ваҡытынан алда белеп тороу.

**алдау (алда-)** *ҡ.* **1.** Дөрөҫ булмағанды ысын итеп һөйләү; ялғанлау. *Алдап алыу. Алдап ышандырыу. Үҙеңде үҙең алдау.* **2.** Биргән һүҙҙе, вәғәҙәне боҙоу. *Халыҡты алдау.*

**алдынғы** *с.* **1.** Хеҙмәте, эше менән башҡаларҙан өҫтөн. *Алдынғы эшсе. Алдынғы булыу.* **2.** Үҫеш кимәле юғарыраҡ. *Алдынғы йәмғиәт. Алдынғы кеше. Алдынғы фән.*

**алйот** *с.* **1.** Аҡылы камил түгел; ахмаҡ, иҫәр. *Алйот кеше. Алйот булыу.* **2.** Уйлап, аҡыл менән эшләй белмәгән.

**алйыу (алйы-)** *ҡ.* **1.** Бик ҡартайып, аҡыл теүәллеген юғалтыу. *Алйыған ҡарсыҡ.* **2.** Хәтер тарҡалыу; аптырау. *Алйып бөтөү.*

**алҡа** *и.* Ҡолаҡҡа таға торған биҙәүес. *Алтын алҡа. Көмөш алҡа.*

**Алла** *и.* Дини ҡараш буйынса, бөтә донъяны яратҡан, унын менән идара иткән юғары зат; Хоҙай, Тәңре. *Аллаға табыныу. Аллаға ышаныу. Аллаға сыйыныу.* ♦ **Алла бирһә (бойорһа, теләһә)** берәй эшкә ниәтләгәндә, өмөт белдергәндә әйтелә. **Аллаға тапшырыу** берәй эште башлағанда, уңыш теләп тәүәккәлләү. **Аллаға (Алланың биргәненә) шөкөр** тормоштан риза булғанды белдерә.

**алма** *и.* Алһыу йәки аҡ сәскәле, итләс емешле ағас һәм шул ағастың емеше. *Баҡса алмаһы. Ҡырағай алма. Алма сәскәһе. Эре алма. Ваҡ алма. Алма ашау. Алма үҫтереү. Алма ҡайнатмаһы. Алма ҡағы.* ♦ **Алма беш, ауыҙыма төш** әҙерҙе генә көтөп ятҡан кешегә ҡарата әйтелә. **Алма кеүек** матур, таҙа (бала-сағаға, йәштәргә ҡарата әйтелә).

**алмағас** *и.* Алманың ағасы. *Алмағас сорттары. Алмағас ултыртыу.*

**алмас** *и.* **1.** Башҡа аҫыл таштарҙан үтә ҡатылығы, йылтырлығы менән айырылып торған үтә күренмәле аҫыл таш. *Алмас ташы. Алмас табыу. Алмас эшкәртеү. Алмасты алмас менән ҡырҡалар.* (Мәҡәл.) *Алмас ятҡылығы.* **2.** Быяла ҡырҡҡыс. *Алмас менән быяла ҡырҡыу.*

**алмаш** *и.* **1.** Кемдеңдер урынына килеп, эшен дауам иткән кеше йәки кешеләр төркөмө. *Алмашы эшкә сыҡманы.* **2.** *күсм.* Оло быуындың эшен дауам итерлек йәш быуын. *Алмаш үҫеү. Алмаш әҙерләү.*

**алмашлау (алмашла-)** *ҡ.* Берегһен-берегһе алмаштырыу; сиратлау. *Алмашлап ял итеү. Аяҡтарҙы алмашлау.*

**алмаштырыу (алмаштыр-)** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара урындарын үҙгәртеп, берегһе урынына икенсеһен күсереү йәки ҡуйыу. *Аяҡ кейемен алмаштырыу. Исем алмаштырыу. Алмаштырып ҡуйыу. Фатир алмаштырыу. Эш алмаштырыу. Тауарҙы аҡсаға алмаштырыу.* **2.** Берәй нәмәнән баш тартып, икенсеһенә күсеү, үҙгәртеү. *Ҡарашты үҙгәртеү.*

**алмашыу (алмаш-)** *ҡ.* Бер нәмә биреп, икенсеһен алыу. *Тауар алмашыу. Урын алмашыу.*

**алтын** *и.* **1.** Һары төҫтәге йомшаҡ, затлы металл. *Саф алтын. Һары алтын. Алтын йыуыу. Алтын сығарыу. Алтын табыу. Алтын оҫтаһы. Алтын ятҡылығы. Алтын аҡса. Алтын балдаҡ.* **2.** *күсм.* Асыҡ һары. *Алтын ҡырҙар. Алтын сәс.* **3.** **алтыным** яратып өндәшеү һүҙе. ♦ **Аҡ алтын** платина. **Алтын ҡуллы, ҡулы алтын** эшкә, һөнәргә бик оҫта. **Алтын туй** ир менән ҡатындың илле йыл бергә йәшәүен билдәләгән байрам. **Ҡулынан алтын тама** бик оҫта, эшлекле кеше.

**алтын-көмөш** *и. йыйн.* Затлы металдар һәм уларҙан эшләнгән ҡиммәтле нәмәләр. *Алтын-көмөш сыҡҡан ерендә ҡәҙерле.* (Мәҡәл.)

**алфавит** *и.* Яҙма телдәге хәрефтәрҙең билдәле бер тәртип буйынса теҙмәһе; азбука. *Ғәрәп алфавиты. Латин алфавиты. Алфавитты өйрәнеү. Алфавит буйынса яҙыу.*

**алһыу** *с.* Аҡһыл ал. *Алһыу сәскә. Алһыу таң.*

**алъяпҡыс** *и.* Өҫ кейеме бысрамаһын өсөн, алға бәйләй торған япма. *Аҡ алъяпҡыс. Сигеүле алъяпҡыс. Алъяпҡыс бәйләү.*

**алыҫ** *с.* **1.** Оҙон ара менән айырылған; йыраҡ; *киреһе* яҡын. *Алыҫ ара. Алыҫ ер. Алыҫ сәйәхәт. Алыҫ юл. Алыҫ ҡалыу. Алыҫта ятыу.* **2.** Күп ваҡыт араһы менән айырылған. *Алыҫ киләсәк. Алыҫ йылдар.*

**алыҫлыҡ (алыҫлығы)** *и.* Ике нәмәне айырған ара, аралыҡ. *Аралар алыҫлығы. Алыҫлыҡ үлсәү бермәгеге. Биш километр алыҫлыҡ.*

**алыу (ал-)** *ҡ.* **1.** Ҡул йәки башҡа нәмә менән тотоп үҙеңә ҡабул итеү. *Ҡулға алыу. Китапты алыу. Ат башынан алыу. Һыу алыу. Билдән алыу. Яғанан алыу. Тартып алыу. Бүләк алыу. Телеграмма алыу. Хат алыу. Хәбәр алыу. Бойороҡ алыу. Күрһәтмә алыу.* **2.** Билдәле бер мәғәнәлә уйға, күңелгә ҡабул итеү. *Ғәйепкә алыу. Насарға алыу. Уйынға алыу. Ысынға алыу.* **3.** Үҙ яуаплылығына, өҫтөңә ҡабул итеү. *Йөкләмә алыу. Мәшәҡәт алыу. Эш алыу. Яуаплылыҡ алыу.* **4.** Көс түгеп, ниндәйҙер килешеүгә ирешеү. *Килем алыу. Уңыш алыу. Файҙа алыу.* **5.** Кеше ҡулынан һалдырып, эйә булыу. *Малды алыу. Урынды алыу.* **6.** Аҡсаға алмашып, аҡса биреп үҙеңдеке итеү. *Магазиндан алыу. Тауар алыу. Һатып алыу.* **7.** Эшләй, уҡый торған ергә йәки ойошмаға ҡабул итеү. *Университетҡа алыу. Партияға алыу.* **8.** Йәнлек аулап тотоу. *Айыу алыу. Бүре алыу. Өйрәк алыу.* **9.** Тотош таралып, биләү, солғау. *Өйҙө ут алған. Тимерҙе тут алған. Тәнде һыуыҡ алды.* **10.** Бер һанды икенсе һан дәүмәленә кәметеү. *Биштән икене алыу. Алыу билдәһе.*

**алыш** *и.* Көс һынаш, ярыш, көрәш. *Алышҡа сығыу. Алыш башлау. Алыш майҙаны.*

**алыш-биреш** *и.* Һатыу-алыу эше; сауҙа. *Алыш-биреш итеү. Алыш-биреш өлкәһе.*

**алышыу (алыш-)** *ҡ.* Бер-береңә бирешеү; уртаҡлашыу. *Фекер алышыу. Һүҙ алышыу.*

**альбом** *и.* Төрлө һүрәт йәки шиғырҙар өсөн эшләнгән ҡалын дәфтәр. *Маркалар альбомы. Һүрәттәр альбомы. Альбомға яҙыу. Альбом бите.*

**алюмин** *и.* Химик элемент, аҡ төҫтәге йомшаҡ металл. *Саф алюмин. Алюмин иретеү. Алюмин сәнәғәте. Алюмин һауыт.*

**аманат** *и.* **1.** Һаҡларға ҡушып бирелгән нәмә. *Аманат итеп һаҡлау. ...анатҡа алыу.* **2.** Әйтеп ҡалдырылған һүҙ, үтәлергә тейеш васыят. *Аманат ...еп әйтеү.*

**анализ** *и.* **1.** Бөтөндө өлөштәргә тарҡатып өйрәнеүгә нигеҙләнгән ғилми ...ул; *киреһе* синтез. *Анализ яһау. Анализ биреү.* **2.** Матдә составының, ...нсәлектәренең билдәләнеше. *Ҡан анализы. Химик анализ.*

**андыҙ** *и.* Дымҡыл ерҙә үҫә торған эре, киң япраҡлы, һары сәскәле бейек ...эн. *Андыҙ тамыры. Андыҙ барҙа ат үлмәҫ.* (Әйтем.)

**ант** *и.* Ҡәтғи, тантаналы һүҙ менән нығытылған вәғәҙә. *Ант биреү. Ант ...еү. Антты боҙоу. Антты тотоу.* ♦ **Ант башҡа етеү** боҙолған анттың ...һорон күреү.

**антенна** *и.* Электромагнит тулҡындарын тотоу һәм таратыу өсөн хеҙмәт ...кән ҡулайлама. *Радио антеннаһы. Телевизор антеннаһы. Антенна ҡуйыу.*

**анһат** *с.* Артыҡ көс, ҙур көсөргәнеш талап итмәгән; еңел; *киреһе* ҡыйын. *...һат мәсьәлә. Анһат эш. Анһат ҡына еңеү.*

**аныҡ** *с.* Асылы билдәле; асыҡ; *Аныҡ һүҙ. Аныҡ яуап. Аныҡ һөйләү. Аныҡ ...ап биреү.*

**аныҡлаусы** *и. грам.* Һөйләмдә һәм һүҙбәйләнештә бер һүҙҙе асыҡлап ...лгән эйәрсән киҫәк. *Аныҡлаусы табыу. Аныҡлаусылар төркөмө.*

**аң**[1] *и.* **1.** Үҙ-үҙеңде, тирә-йүнде тойоу, ҡабул итеү һәләте; иҫ. *Аңды юғалтыу. ...ға килеү.* **2.** Кешенең ысынбарлыҡты төшөнөү, белеү, фекер йөрөтөү ...ләте. *Аң менән эш итеү. Аң үҫеү. Аңды үҫтереү. Аң уяныу.*

**аң**[2] *с.* Һаҡ, уяу, һиҙгер. *Аң кеше. Аң булыу.*

**аң-белем** *и. йыйн.* Уҡыу-яҙыу, мәғрифәт, фән буйынса дөйөм мәғлүмәт. *...-белем алыу. Аң-белем таратыу. Аң-белем – мәңгелек ғилем.* (Әйтем.)

**аңғармаҫтан** *р.* Һис тә көтмәгәндә, уйламағанда; абайламаҫтан. *Аңғар-...ҫтан барып сығыу. Аңғармаҫтан әйтеп һалыу.*

**аңҡыу (аңҡы-)** *ҡ.* Көслө еҫ бөркөлөү. *Сәскә еҫе аңҡый. Тәмәке еҫе аңҡыны.*

**аңлайышлы** *с.* Аңлашылып торған, аңлауға еңел булған. *Аңлайышлы фекер. ...лайышлы итеп әйтеү. Аңлайышлы булыу.*

**аңлатма** *и.* Эш-хәл, мәсьәлә һ. б. нәмәнең асылын төшөндөрөп, мәғәнәһен ...ып биргән һүҙ йәки яҙма. *Фәнни аңлатма. Аңлатма биреү.*

**аңлатмалы** *с.* Аңлатма биргән, аңлатмаһы булған. *Аңлатмалы һүҙлек.*

**аңлатыу (аңлат-)** *к.* **1.** Ниҙең дә булһа асылын, мәғәнәһен асып биреү; төшөндөрөү. *Мәсьәләне аңлатыу. Һүҙҙең мәғәнәһен аңлатыу.* **2.** Уй-тойғоно, фекерҙе, ниәтте белдереү. *Ҡайғыны йыр менән аңлатыу.*

**аңлау (аңла-)** *к.* **1.** Нимәнендер мәғәнәһен, асылын төшөнөү. *Мәсьәләне аңлау. Дәресте аңлау. Һүҙҙе аңлау. Аңлап етмәү.* **2.** Уй-тойғоно, фекерҙе, ниәтте һиҙеү, төшөнөү. *Бер-береңде аңлау. Дошмандың ниәтен аңлау. Мин һине аңлайым.* **3.** Икенсе бер телдә һөйләгәнде төшөнөү. *Инглизсә аңлау.*

**аңлы** *с.* **1.** Фекер итеү, уйлау һәләте булған. *Кеше – аңлы йән эйәһе.* **2.** Аңлап, белеп эш итә алған. *Аңлы ҡараш. Аңлы булыу.*

**аңра** *с.* Тейешенсә уйлау, фекер йөрөтөү һәләтенән мәхрүм; аҡылы самалы; иҫәр. *Аңра кеше.*

**апай** *и.* **1.** Йәшкә үҙеңдән оло булған бер туған ҡатын-ҡыҙ. *Оло апай. Кесе апай. Уртансы апай. Апай булыу.* **2.** Үҙеңдән оло, атай-әсәңдән кесе булған һәр ҡатын-ҡыҙ. *Бер апай килеп инде.*

**аппарат** *и.* Билдәле бер эш башҡарыу өсөн хеҙмәт иткән ҡорамал. *Кино аппараты. Телефон аппараты.*

**апрель (апрелгә)** *и.* Календарь йылының дүртенсе айы. *Апрель аҙағы. Апрель башы. Апрель етеү.*

**аптырау (аптыра-)** *к.* **1.** Ниҙелер ғәҙәттәгенән ят күреү; хайран ҡалыу; ғәжәпләнеү. *Аптырап китеү. Аптырап тороу. Һүҙенә аптырау.* **2.** Ниҙелер хәл итергә сара тапмай уйға ҡалыу; уйланыу. *Аптырап ҡалыу.* **3.** Берәй ҡыйын хәлдән интегеү; йонсоу, яфаланыу. *Йоҡлай алмай аптырау. Һыуһыҙ аптырау.*

**ара** *и.* **1.** Ике нәмәнең уртаһы, ике нәмәне айырған урын. *Бармаҡ араһы. Рәт араһы. Тау араһы.* **2.** Бер ерҙән икенсе ергә тиклем булған алыҫлыҡ. *Алыҫ ара. Биш саҡрым ара. Ике көнлөк ара.* **3.** Күпмелер дауам иткән ваҡыт өҙөгө. *Бер арала. Буш ара. Был арала. Ҡайһы арала. Эш араһында.* ♦ **Ер менән күк араһы** нығ айырылғанлыҡ, яҡынлыҡ һәм оҡшашлыҡ юҡ. **Ни ике арала** бик тиҙ (аптырау белдергәндә). **Ул арала (булмай)** бер-бер артлы башҡарылған эш-хәл тураһында.

**аралаш** *с.* Төрлө нәмә үҙ-ара ҡатнаш, алмаш-тилмәш. *Аралаш ағас. Арыш аралаш бойҙай. Аралаш үҫеү. Аралаш ултыртыу. Йәш аралаш көлөү.*

**аралашыу (аралаш-)** *к.* **1.** Бергә ҡушылып, ҡатнашып буталыу. *Бесән ҡар менән аралашҡан. Аралашып үҫеү.* **2.** Үҙ-ара бәйләнеш тотоп йәшәү; ҡатнашыу. *Кеше менән аралашыу. Аралашып йәшәү.*

**аралыҡ (аралығы)** *и.* **1.** Бер нәмә менән икенсе нәмә уртаһындағы буш ҙын; ара. *Тауҙар аралығы. Аралыҡ ҡалдырыу.* **2.** Бер ерҙән икенсе ергә тиклем улған алыҫлыҡ. *Ауылдар аралығы. Биш саҡрым аралыҡты үтеү.*

**аран** *и.* Ергә ҡаҙып эшләнгән ваҡ мал торлағы. *Бүре аранға төшкән.*

**ара-тирә** *р.* Ваҡыт-ваҡыты менән, һирәкләп. *Ара-тирә йыйылышыу. Ара-ирә генә ямғыр яуа.*

**арба** *и.* Егеп, нимәгәлер тағып йәки һөйрәп йөрөтөлә торған тәгәрмәсле ҙрамал. *Ҡыҫҡа арба. Оҙон арба. Тағылма арба. Йөк арбаһы. Арба яһау. Бәләкәй рба.* ♦ **Арба менән ҡуян ҡыуыу** килешмәгән, хилаф эш эшләү. **Ни арба, ни сана** ығы юл өҙөгө.

**арбау (арба-)** *ҡ.* **1.** Сихри көс, тылсымлы һүҙ менән үҙеңә буйһондороу. *ылан арбау. Ҡараш менән арбау.* **2.** *күсм.* Кемделер үҙеңә ҡаратыу, күңелен иләү, әүрәтеү. *Күңелен арбау. Ҡыҙҙы арбау.*

**арғымаҡ (арғымағы)** *и.* Яҡшы тоҡомло йүгерек ат. *Арғымаҡҡа атланыу. рғымаҡ аттың билдәһе – аҙ утлар ҙа күп юшар.* (Мәҡәл.)

**арҙаҡлы** *с.* Хөрмәтле, ихтирамлы. *Арҙаҡлы ул. Арҙаҡлы шәхестәр. Арҙаҡлы лыу.*

**арзан** *с.* Хаҡы билдәле бер кимәлдән түбән; осһоҙ; *киреһе* ҡиммәт. *Арзан ауар. Арзан хаҡ. Арзанға алыу.*

**арзанайыу (арзанай-)** *ҡ.* Ниҙең дә булһа хаҡы төшөү, кәмеү. *Мал арза-айыу.*

**арифметика** *и.* Математиканың һандарҙың иң ябай сифаттарын һәм дүрт мәлен өйрәнә торған бүлеге. *Арифметика бүлеге. Арифметиканы яҡшы белеү.*

**арҡа** *и.* **1.** Кеше кәүҙәһенең яурындан билгә тиклем һәм хайуандарҙың уйынынан ҡойроҡҡа тиклем булған һырты. *Арҡа һөйәге. Елгә арҡа ҡуйыу. рҡанан һөйөү. Арҡа зымбырлау.* **2.** Тау һырты. *Арҡаға менеү. Арҡа буйлап рыу.* ♦ **Арҡа биреү** арт менән боролоу, артҡа боролоп ҡасыу. **Арҡанан оймәҫтәр** берәй эш-ҡылыҡтың яҡшы түгеллеген белдергәндә әйтелә.

**арҡалыҡ (арҡалығы)** *и.* Ҡамытты, дуғаны күтәртеү өсөн ыңғырсаҡ аша ртәнән тәртәгә тарттырыла торған бау. *Ҡайыш арҡалыҡ. Сүс арҡалыҡ. рҡалыҡты тартыу. Арҡалыҡты төшөрөү.*

**арҡан** *и.* Йыуан итеп ишелгән оҙон бау. *Ҡорос арҡан. Ҡыл арҡан. Йүкә ҡан. Арҡан ишеү. Арҡан менән йөк тарттырыу.*

**арҡыры** *р.* Буйға киҫә йүнәлештәге. *Арҡыры бәйләү. Арҡыры ҡырҡыу. рҡыры сығыу. Арҡыры ятыу. Арҡыры ағас. Арҡыры урам.* ♦ **Арҡыры ятҡанды**

**буй һалмау** бер ни ҙә эшләмәү, ҡыл да ҡыбырлатмау. **Арҡыры төшөү** ҡырҡа ҡаршы килеү, риза булмау.

**арлан** *и.* Ата енесле эт.

**арлы-бирле** *с.* Мөһим булмаған, ваҡ-төйәк. *Арлы-бирле эш. Арлы-бирле һүҙ. Арлы-бирле эшләү. Арлы-бирле генә ашап алыу.*

**арманһыҙ** *с.* Көс-хәлдән тайҙырған, ауыр. *Арманһыҙ эш. Арманһыҙ булыу.*

**армия** *и.* Дәүләттең барлыҡ ҡоралды көстәре һәм хәрби берәмек; ғәскәр. *Армия ойоштороу. Армияға алыу. Армияла хеҙмәт итеү. Танк армияһы.*

**арнау (арна-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне кемгәлер биреү, бүләк итеү өсөн алдан билдәләү. *Аҡса арнау. Фатирҙы балаға арнап ҡуйыу.* **2.** Берәй нәмәне кемдеңдер йәки ниҙеңдер хөрмәтенә тәғәйенләү; бағышлау. *Китапты әсәйгә арнау. Һөйгәнеңә арнап шиғыр яҙыу.*

**арпа**[1] *и.* Орлоғо ярма, һыра һәм мал аҙығы әҙерләүгә тотонола торған оҙон ҡылсыҡлы ашлыҡ һәм уның орлоғо. *Ике ҡырлы арпа. Дүрт ҡырлы арпа. Арпа ярмаһы. Арпа оно.*

**арпа**[2] *и.* Керпек төбөнә сыға торған эренле шешек. *Арпа сығыу. Арпаны имләү.*

**арт** *и.* **1.** Йөҙгә, күҙгә кире тараф, кире яҡтағы урын; *киреһе* ал. *Артҡа ҡарау. Арт менән боролоу. Мейес арты. Өй арты. Һарай арты.* **2.** Ниҙең дә булһа йөҙөнә ҡаршы өлөшө. *Күлдәктең арты. Арт күсәр.* **3.** Төрлө нәмәләрҙең арҡа терәге булған өлөшө. *Дивандың арты. Сананың арты. Ултырғыстың арты.* ♦ **Артынан төшөү** 1) эҙәрләп баҫтырыу; 2) ҡыҫымға алыу. **Ҡулы артына етмәй** ишекте, ҡапҡаны япмай йөрөгән кешегә асыу белдереп әйтелә.

**артабан** *р.* Билдәле бер тәңгәлдән, мәлдән ары; арыға табан. *Артабан китеү. Фекерҙе артабан дауам итеү. Бынан артабан өндәшмәм.*

**артабанғы** *с.* Артабанда, тегендәрәк торған йәки киләсәктә булған. *Артабанғы тормош. Артабанғы яҙмыш.*

**артист (артисы)** *и.* **1.** Сәнғәт әҫәрен тамашасылар алдында башҡарыусы оҫта. *Атҡаҙанған артист. Опера артисы. Эстрада артисы. Артист оҫталығы.* **2.** *күсм. һөйл.* Яһалма ҡылана торған кеше.

**арттырыу (арттыр-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәнең күләмен, һанын күбәйтеү. *Мал һанын арттырыу. Һөт һауып алыуҙы арттырыу. Хаҡты арттырыу.* **2.** Булмағанды үҙеңдән өҫтәү; шаштырыу. *Арттырып һөйләү.*

**артыҡ** *с.* **1.** Кәрәктән тыш. *Артыҡ кейем. Артыҡ мал. Артыҡ маҡтаныу. Артыҡ тырышыу. Артыҡ һөйләнеү. Артыҡ күп.* **2.** *күсм.* Тейешһеҙ, урынһыҙ.

*ртык һүҙ. Артыҡ хәбәр. Артыҡ күреү.* ♦ **Биш артыҡ** бер нәмәне йәки хәлде кенсеһенән яҡшыраҡ күргәндә әйтелә.

**артылыу (артыл-)** *ҡ.* **1.** Тулып ташып сығыу; ашыу. *Ваннаның һыуы ртылған.* **2.** Күтәрелеп аша сығыу (тауҙы һ. б.); ашыу. *Түбәне артылыу.*

**артынса** *р.* Артынан уҡ, эҙенән үк. *Артынса уҡ килеп инеү. Ямғыр артынса ояш ҡалҡты.*

**артыу (арт-)** *ҡ.* **1.** Һан, күләм яғынан үҫеү; күбәйеү, ишәйеү. *Көс артыу. Өлкәт артыу. Эш артыу. Йылдан артыу.* **2.** Көс-ҡеүәт алып шәбәйеү; эсәйеү, үҫеү. *Бәхет артыу. Дәрт артыу. Хәл артыу.* **3.** Кәрәктән, саманан тыҡ булыу. *Кулдәктән тауар артты. Ярма артып ҡалды.*

**артыш** *и.* Кипарис һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, мәңге йәшел ваҡ ылыҫлы ыуаҡ йәки ағас. *Артыш майы. Артыш ағасы. Артыш төтәтеү.*

**аръяҡ (арьяғы)** *и.* **1.** Нимәгәлер ҡаршы булған яҡ; *киреһе* бирьяҡ. *Арьяҡта ашау. Арьяҡҡа сығыу. Арьяҡ урам.* **2.** Ниҙең дә булһа артындараҡ ятҡан урын-. *Тауҙың арьяғы. Ағиҙелдең арьяғында бер энәгә бер һыйыр.* (Әйтем.)

**ары** *р.* **1.** Билдәле бер тәңгәлде үтеп; артабан. *Ары китеү. Арыраҡ булыу.* Билдәле бер мәлдән һуң; йәнә, тағы. *Ары уҡымау. Бынан ары.*

**арыҫлан** *и.* **1.** Бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, һорғолт һары төҫлө эре ыртҡыс йәнлек. *Ата арыҫлан. Инә арыҫлан. Арыҫлан балаһы.* **2.** *күсм.* Ҡурҡыу лмәгән батыр ир. *Ир арыҫланы. Арыҫлан йөрәкле.*

**арыу**[1] **(ары-)** *ҡ.* Көс-хәлдән яҙыу, хәлһеҙләнеү. *Тауға менә-менә арыу. шитән арыу. Аҙыҡлы ат арымаҫ.* (Мәҡәл.)

**арыу**[2] *с.* Яҡшы, һәйбәт; ярарлыҡ. *Арыу ниәт. Арыу хәл. Арыу кеше. Арыу ашәү. Арыу булыу. Арыу йөрөү.*

**арыш** *и.* Оҙонса нәҙек орлоҡло, ҡыяҡ япраҡлы ашлыҡ һәм унын орлоғо. *эҙгө арыш. Яҙғы арыш. Арыш сәсеү. Арыш урыу. Арыш бөртөгө. Арыш икмәге.*

**ас** *с.* Оҙаҡ ашамай асыҡҡан, тамағы туҡ түгел; *киреһе* туҡ. *Ас бүре. Ас кеше. булыу. Ас йәшәү. Асҡа интегеү.*

**асҡыс** *и.* Йоҙаҡты аса, биклəй, механизмдарҙы бора-бушата, көйләй рған ҡорал. *Өй асҡысы. Гайка асҡысы. Асҡыс менән бороу. Асҡыс эшләтеү.*

**аслыҡ (аслығы)** *и.* Ашарға юҡлыҡтан булған ауыр хәл; йотлоҡ. *Аслыҡ ілеу. Аслыҡ күреү. Аслыҡты үткәреү. Аслыҡ йыл.*

**асфальт** *и.* Юлдарға түшәү өсөн ҡулланылған һорғолт ҡара төҫтәге ҙөлөш материалы. *Асфальт түшәү. Асфальт эҫетеү. Асфальт юл.*

**асығыу (асыҡ-)** *ҡ.* Ас хәлгә килеү, аслыҡ кисереү. *Асығып хәлдән тайыу. Асыға башлау. Асығып йәшәү.*

**асыҡ** *с.* **1.** Асып ҡуйылған, ябыуһыҙ; *киреһе* ябыҡ. *Асыҡ ишек. Асыҡ тәҙрә. Асыҡ булыу. Асыҡ тороу. Асыҡ ҡалдырыу. Асыҡ магазин.* **2.** Төҫө баҙыҡ, яҡты. *Асыҡ зәңгәр. Асыҡ ҡыҙыл.* **3.** *күсм.* Кешегә яҡшы мөғәмәләле; алсаҡ, көләс. *Асыҡ йөҙ. Асыҡ кеше. Асыҡ булыу.*

**асыҡлау (асыҡла-)** *ҡ.* Берәй эш-хәлдең асылын билдәләү. *Мәсьәләне асыҡлау. Хәлде асыҡлау. Асыҡлап әйтеү. Асыҡлап ҡуйыу.*

**асыл** *и.* Ниҙҙәндер төп мәғәнәһе, булмышы. *Эштең асылы. Мәсьәләнең асылына төшөнөү. Асылын аңлау.*

**асылыу (асыл-)** *ҡ.* **1.** Сәскә атыу, япраҡланыу. *Гөлдәр асылды.* **2.** Ҡаплап, ябып торған нәмәнән әрселеү, таҙарыныу. *Йылғалар боҙҙан асыла. Күк йөҙө асылды.* **3.** *күсм.* Күренеү, билдәле булыу. *Сер асылды.*

**асыу**[1] *и.* Ныҡ нәфрәтләнеп, йән көйөү, ярһыу хисе. *Асыу ҡалҡыу. Асыу баҫылыу. Асыу килеү. Асыу ҡабарыу. Асыу һаҡлау. Асыу китеү.* ♦ **Асыуым да килмәһә** нимәгәлер йән көйгәндә, кәмһетеп әйтеләә.

**асыу**[2] **(ас-)** *ҡ.* **1.** Ишекте, ҡапҡасты ябыҡ булмаған хәлгә килтереү, биген ысҡындырыу. *Ишекте асыу. Тәҙрәне асыу. Ҡапҡаны асыу. Һандыҡты асыу.* **2.** Ябыҡ, йомоҡ хәлдән асыҡ хәлгә килтереү. *Ауыҙҙы асыу. Газды асыу. Күҙҙе асыу. Асып алыу. Асып ебәреү.* **3.** Ниҙәндер эшмәкәрлеген башлап ебәреү. *Магазин асыу. Мәктәп асыу. Күргәҙмә асыу. Йыйылышты асыу.* **4.** Берәй нәмәнең барлығын белеү, табыу. *Алтын ятҡылығын асыу. Күмер байлыҡтарын асыу.* **5.** *күсм.* Билдәле итеү, фашлау. *Ғәйепте асыу. Етешһеҙлектәрҙе асып һалыу.*

**асыуланыу (асыулан-)** *ҡ.* Асыу тойғоһонда булыу, асыу кисереү. *Балаға асыуланыу. Асыуланып йөрөү. Асыуланып ҡарау.*

**асыш** *и.* Фән, әҙәбиәт һ. б. өлкәлә табылған яңылыҡ. *Ҙур асыш. Донъя кимәлендәге асыш. Асыш яһау.*

**аҫ** *и.* **1.** Билдәле бер кимәлдән түбән булған тараф; *киреһе* өҫ. *Аҫҡа төшөү. Аҫта ҡалыу. Аҫта тороу. Аҫ яҡ.* **2.** Бер нәмәнең түбәнге яғындағы урын йәки түбәнге яғы. *Аяҡ аҫты. Өҫтәл аҫты. Тау аҫты. Яр аҫты. Аҫтындағын алты ай эҙләгән.* (Әйтем.)

**аҫҡы** *с.* Аҫ яҡтағы, аҫта урынлашҡан; *киреһе* өҫкө. *Аҫҡы ҡат. Аҫҡы теш. Аҫҡы урамда йәшәү.*

**аçрау (аçра-)** *ҡ.* **1.** Ашатып-эсереп тәрбиәләү; ҡарау. *Бала аçрау. Ҡарт кешене аçрау.* **2.** Хужалыҡта мал, ҡош-ҡорт тотоу. *Ат аçрау. Ҡаҙ аçрау. Һарыҡ-сәзә аçрау.*

**аçыл** *с.* **1.** Бик матур һәм ҡиммәтле; затлы. *Аçыл кейем. Аçыл таш.* **2.** *күсм.* Иң юғары сифатҡа, баһаға эйә булған. *Аçыл зат. Аçыл ир.*

**аçыу (аç-)** *ҡ.* **1.** Һалындырып тағып ҡуйыу, күтәреп бәйләү. *Арҡаға тоҡсай аçыу. Утҡа сәйнүк аçыу. Ҡылыс аçып йөрөү.* **2.** Муйынға бау һалып күтәреү үлтереү язаһы). *Аçырға бойороу. Аçып үлтереү.*

**ат** *и.* Йомро тояҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, яллы эре йорт хайуаны. *Ерән ат. Ҡара ат. Йөк аты. Менге ат. Эш аты. Ат һарайы. Ат егеү. Ат менеү. Ат сабыштырыу. Ат ҡарау. Ат — юлда, ир яуҙа һынала.* (Мәҡәл.) ♦ **Ат башындай** үҙ самаһынан ҙур булған бәләкәй нәмәгә ҡарата әйтелә. **Ат менгәндәй булыу** бик ныҡ ҡыуаныу.

**ата** *и.* **1.** Балаһы булған ир кеше (үҙ балаһына ҡарата). *Ата йорто. Яҡшы ата балаһы. Бер ата, бер әсә (бер туған).* **2.** Ҡайһы бер йән эйәләренең һәм үсемлектәренең ир енеслеһе. *Ата бесәй. Ата ҡаҙ. Ата сәскә.*

**ата-баба** *йыйн.* Хәҙергенән оло быуындар. *Ата-баба йолаһы. Ата-бабаны иçкә алыу.*

**ата-инә** *и. ҡар.* **ата-әсә.**

**атаҡ (атаҡ-атаҡ)** *ымл.* Ғәжәпкә ҡалғанда, аптырағанда әйтелә. *Атаҡ-атаҡ, ни һөйләйһең һин?!*

**атаҡлы** *с.* Илгә, халыҡҡа исеме таралған; данлы. *Атаҡлы ғалим. Атаҡлы йырсы. Атаҡлы булып китеү.*

**атама** *и.* Ниҙендер үҙенә ҡушҡан исем. *Ер-һыу атамалары. Халыҡ атамаһы.*

**атаман** *и.* **1.** Башҡаларға өçтөнлөк иткән кеше; башлыҡ. *Урам атаманы.* **2.** Атлы казактарҙа ғәскәр һәм ауыл башлығы. *Атаман булыу. Атаман итеп һайлау.*

**атау (ата-)** *ҡ.* Кешегә йәки берәй нәмәгә исем ҡушыу; исемләү. *Исем атау. Малайҙы Ғәли тип атау.*

**ата-әсә** *и. йыйн.* Ата менән әсә (үҙ балаларына ҡарата). *Ата-әсәһе бар. Ата-әсәләр теләге. Ата-әсә һөйөүе.*

**атҡаҙанған** *с.* Хеҙмәте менән дан һәм исем алған. *Атҡаҙанған уҡытыусы. Атҡаҙанған фән эшмәкәре.*

**аткълаҡ (аткълағы)** *и.* Оҙонса япраҡлы, оҙон яланғас һабаҡлы, көрән суҡ орлоҡло ҡыр үләне. *Аткълаҡ бешереү. Аткълаҡ орлоғо.*

**атлау (атла-)** *ҡ.* Аҙымлап хәрәкәт итеү. *Шәп атлау. Әкрен атлау. Атлап ҡайтыу.*

**атланыу (атлан-)** *ҡ.* Аяҡты аша һалып ултырыу; менеү. *Атҡа атланыу. Өҫтөнә атланыу.*

**атлас** *и.* Географик карталар йыйынтығы. *Донъя атласы. Тимер юл атласы. Атлас төҙөү.*

**атлығыу (атлыҡ-)** *ҡ.* **1.** Ҙур тиҙлек менән алға ынтылыу, атылыу. *Атлығып килеп сығыу.* **2.** *күсм.* Ҙур теләк менән ҡайҙалыр ашҡыныу. *Эшкә атлығып тороу.*

**атмосфера** *и.* Ер шарын һәм ҡайһы бер планеталарҙы солғап алған газ хәлендәге ҡатлам. *Ер атмосфераһы. Атмосфера баҫымы.*

**аттестат** *и.* Уҡыу йортон тамамлау хаҡындағы йәки башҡа рәсми документ. *Аттестат алыу. Профессор аттестаты.*

**атыу (ат-)** *ҡ.* **1.** Көс менән һелтәп ырғытыу; бәреү. *Таш атыу. Туп атыу.* **2.** Ҡоралдың уҡ-яһағын осортоу, ебәреү. *Мылтыҡтан атыу. Атып үлтереү. Уҡ атыу. Атыу ҡоралы.* **3.** Тейеп зарарлау (йәшенгә ҡарата). *Йәшен атыу.*

**ау**[1] *и.* **1.** Ҡош, йәнлек, балыҡ тота торған селтәр рәүешендәге төрлө ҡорал. *Ҡош ауы. Суртан ауы. Ваҡ ау. Эре ау. Ауға эләгеү. Ау бәйләү.* **2.** *күсм.* Яуыз, хәйлә, мәкер. *Ау ҡороу. Ауға эләктереү.* ♦ **Үрмәксе ауы** үрмәксе үргән селтәр.

**ау**[2] *и.* Йәнлек тотоу шөғөлө, һунар. *Ауға сығыу.*

**ауаз** *и. кит.* Өн, тауыш. *Ауаз биреү. Ауаз һалыу.*

**аулаҡ** *с.* Кеше-ҡаранан буш булған, тыныс. *Аулаҡ ваҡыт. Аулаҡ урын.*

**аулау (аула-)** *ҡ.* Һунар итеп йәки ауға эләктереү, тотоу. *Балыҡ аулау. Бүре аулау.*

**аунау (ауна-)** *ҡ.* **1.** Ятҡан килеш тегеләй-былай ауғылау, аунаҡлау. *Балалар ерҙә аунай. Аунап ятыу.* **2.** Салҡан ятып ышҡыныу (йәнлек, малға ҡарата). *Айыу ерҙә аунай. Ат аунаны.*

**аусы** *и.* Ҡош, кейек тотоусы; һунарсы.

**ауыҙ** *и.* **1.** Аҫҡы һәм өҫкө яңаҡтар менән йотҡолоҡ араһындағы ҡыуышлыҡтан торған тауыш биреү һәм аҙыҡланыу ағзаһы. *Ҙур ауыҙ. Ауыҙ эсе. Ауыҙҙы асыу. Ауыҙҙы ябыу. Ауыҙға ҡабыу. Ауыҙ менән тын алыу.* **2.** Һауыт-һабаның һәм башҡа нәмәләрҙең тарайып бөткән урыны. *Көршәктең ауыҙы. Урман ауыҙы. Әрәмәлек ауыҙы.* ♦ **Ауыҙ асыу** 1) һүҙ башлау, ниҙер әйтеү; 2) дини йола

уйынса: ураҙала кис ашар алдынан ниҙер ҡабып алыу. **Ауыҙға алғыһыҙ** ашарыҡ түгел; бик тәмһеҙ. **Ауыҙға йөҙөк ҡабыу** өндәшер ерҙә өндәшмәй ҡалыу. **Ауыҙға ҡарап тороу** ни әйткәнде көтөп, тыңларға әҙер тороу. **Ауыҙға ҡаратыу** үҙгә әүрәтеп, бөтә иғтибарҙы алыу. **Ауыҙ ҙа астырмау** һүҙ әйтергә ирек ирмәү. **Ауыҙҙа һүҙ тормау** сер һаҡламау. **Ауыҙ итеү** тәмләп, ашап ҡарау. **Ауыҙ омоу** өндәшмәҫ булыу. **Ауыҙ йырыу** бушҡа көлөү. **Ауыҙ ҡолаҡҡа етеү** ныҡ атлыҡтан йылмайыу. **Ауыҙ һыуы ҡойолоу** бик ашағы килеү. **Ауыҙыңа бал да ай!** Яҡшы хәбәр килтергән кешегә ҡарата әйтелә. **Ауыҙыңдан ел алһын!** Насар әбәр килтергәндә ҡаршы әйтелә.

**ауыҙлыҡ (ауыҙлығы)** *и.* Йүгәндең ат ауыҙына кейҙерә торған быуынлы имере. *Аттың ауыҙлығын һалдырыу. Ауыҙлыҡ кейҙереү.*

**ауыл** *и.* Ер эше, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе кешеләр йәшәгән урын. *Бәләкәй ауыл. Ҙур ауыл. Тыуған ауыл. Күрше ауыл. Ауыл тормошо. Ауылда йәшәү. Ауыл советы.* ♦ **Ауыл хужалығы** материаль етештереүҙең игенселек һәм малылыҡ менән шөғөлләнгән төп тармағы.

**ауылдаш** *и.* Бер ауылдан булған кешеләр (бер-береһенә ҡарата). *Ауылдаш улыу. Беҙ ауылдаштар. Ауылдаштар йыйыны.*

**ауыр** *с.* **1.** Ауырлығы ҙур; һәлмәк, тос; *киреһе* еңел. *Ауыр йөк. Ауыр таш. Ауыр кәүҙә. Ауыр булыу. Ауыр күтәреү.* **2.** Башҡарыуға ҡыйын; ҡатмарлы. *Ауыр мәсьәлә. Ауыр эш. Ауыр хәл итеү.* **3.** Ҡыйын кисерелгән; күңелгә ҡыйын, ҡайылы булған. *Ауыр һуғыш. Ауыр тормош. Ауыр яҙмыш. Ауыр тойғо. Ауыр тәьҫир. Ауыр кисереү.* **4.** Һулыш өсөн насар, тынсыу. *Ауыр һауа. Ауыр еҫ.* ♦ **Ауырға алыу** әберһенеү, үпкәләү.

**ауырайыу (ауырай-)** *ҡ.* **1.** Ауырға әйләнеү, ауыр булыу. *Йөк ауырайҙы.* **2.** Ҡыйынға әйләнеү; ҡыйынлашыу. *Ағас ташыу ауырайҙы.* **3.** Етешһеҙгә, мохтажға әйләнеү. *Тормош хәлдәре ауырая.*

**ауырлыҡ (ауырлығы)** *и.* **1.** *физ.* Есемдең ергә тартыу көсө менән билдәләнгән үҙенсәлеге. *Ауырлыҡ көсө. Ауырлыҡты билдәләү. Ауырлыҡ күтәреү.* **2.** Башҡарыуҙағы ҡыйынлыҡ, ҡатмарлылыҡ, этлек. *Эштәге ауырлыҡ. Ауырлыҡ күреү. Тормош ауырлыҡтары.* ♦ **Ауырлыҡ юғалыу** *физ.* тоҡкарлыҡһыҙ эшкән есемдең ерҙең тартыу көсөнән ҡотолоу хәле. **Удель ауырлыҡ** *физ.* есем ауырлығының булған нисбәте.

**ауыртыу (ауырт-)** *ҡ.* Тән ғазабы кисереү. *Бил ауыртыу. Эс ауыртыу. Ауыртҡан ер.*

**ауырыу**[1] **(ауыры-)** *ҡ.* Һауһыҙ хәлгә төшөү, һауһыҙ булыу; һауһыҙланыу. *Баш ауырыу. Ҡаты ауырыу. Ауырып ятыу.*

**ауырыу**[2] *и.* Организмдың ғәҙәти эшмәкәрлеге боҙолған хәл; һауһыҙлыҡ, сир. *Йоғошло ауырыу. Балалар ауырыуы. Мал ауырыуы. Ауырыу булыу. Ауырыуға һабышыу. Ауырыу бала. Ауырыу кеше.*

**ауыу (ау-)** *ҡ.* **1.** Торған ерҙән ҡолау йәки арып, хәлдән тайып йығылыу. *Ергә ауыу. Тирәк ауған. Бағана ауҙы. Түшәккә ауыу. Арып ауыу.* **2.** Билдәле бер тәңгәлдән үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Көн кискә ауыу. Төш ауыу.*

**ауыш** *с.* Торошо бер яҡҡа ҡарай ҡыйыш; иңкеү. *Ауыш бағана. Ауыш иҙән. Ауыш булыу.*

**ауышыу (ауыш-)** *ҡ.* **1.** Тура мөйөштән тайыу, ауышҡа әйләнеү; ҡыйшайыу. *Өй ауышҡан. Ауышҡан бағана.* **2.** *күсм.* Көн йәки төн үҙәгенән үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Көн кискә ауышты. Төн ауышыу.*

**афиша** *и.* Тамаша тураһындағы ҙур белдереү. *Концерт афишаһы. Афиша элеү. Афишаны ҡарау.*

**ах** *ымл.* **1.** Үкенгәндә әйтелә. *Ах, был ғүмер!* **2.** Асыуланған, янаған, әрләгән саҡта әйтелә. *Ах, һеҙҙе!*

**ахмаҡ (ахмағы)** *и.* Аҡылы кәм кеше; алйот, иҫәр. *Аҡыллы тәкә һуйғанда, ахмаҡ йүкә һуйыр.* (Мәҡәл.)

**ахыр** *и.* Эш-хәлдең, ваҡыттың тамамланған мәле; аҙаҡ. *Көндөң ахыры. Эштең ахыры. Ахырына етеү.* ♦ **Ахыр сиктә** күпмелер ваҡыт үткәс.

**ахыры**[1] *р.* Ниндәйҙер эш, мәлдән һуң; һуңынан. *Бынан ахыры алдашма.*

**ахыры**[2] *инш.* Икеләнеүҙе, фараз итеүҙе белдерә. *Беҙҙе көтәләр, ахыры.*

**аһ (аһ, аһ)** *ымл.* **1.** Ғазап-зарҙы белдерә. *Аһ, был ни заман!* **2.** Ауыртыуҙы, ғәжәпкә ҡалыуҙы белдерә. *Аһ, һиңә ни булды?*

**аш** *и.* **1.** Кеше туҡлана торған һәр төрлө нәмә; аҙыҡ, ашамлыҡ. *Иртәнге аш. Киске аш. Төшкө аш. Ҡунаҡ ашы. Тәмле аш.* **2.** Һурпалы ашамлыҡ. *Ит ашы. Һөт ашы. Аш ашау. Аш бешереү. Аш һалыу. Аш өлгөртөү.*

**ашамлыҡ (ашамлығы)** *и.* Ашай торған нәмә; аҙыҡ, ризыҡ. *Ашамлыҡ һатып алыу.*

**ашатыу (ашат-)** *ҡ.* Ашарға биреп, аҙыҡ менән тәьмин итеп туйындырыу, аҙыҡландырыу. *Баланы ашатыу. Атты ашатып алыу.*

**ашау (аша-)** *ҡ.* **1.** Туҡлыҡ өсөн аҙыҡ ҡабул итеү; аҙыҡланыу, туҡланыу. *Аш ашау. Икмәк ашау. Тамаҡҡа ашау. Ашау ваҡыты.* **2.** Кимереп, ҡырҡып тишкеләү. *Алманы ҡорт ашай. Кейемде көйә ашаған.* **3.** *күсм. һөйл.* Үҙенә тейеш түгелде үҙләштереү. *Кеше хаҡын ашау.* ♦ **Ашап туйғыһыҙ** бик тәмле.

**ашҡаҙан** *и.* Кеше һәм хайуандарҙың аҙыҡ эшкәртеү ағзаһы. *Ашҡаҙан ауыртыу. Ашҡаҙан һуты. Ашҡаҙан эшмәкәрлеге.*

**ашлама** *и.* Үҫемлектәрҙе туҡландырыу, уңышын күтәреү өсөн тупраҡҡа индерелә торған матдә. *Минераль ашлама. Органик ашлама. Ашлама биреү.*

**ашлыҡ (ашлығы)** *и.* Он, ярма һ. б. өсөн үҫтерелгән үҫемлек һәм шуның орлоғо; иген. *Ашлыҡ сабыу. Ашлыҡ һуғыу. Көҙгө ашлыҡ. Яҙғы ашлыҡ. Киләткә ашлыҡ һалыу. Тоҡҡа ашлыҡ тултырыу.*

**ашхана** *и.* Күмәк халыҡ туҡлана торған урын. *Диетик ашхана. Ашханала ашау. Ашханалар тресы.*

**ашъяулыҡ (ашъяулығы)** *и. йыйн.* Аш-һыу ҡуйыу өсөн табынға түшәлә торған йәймә. *Ашъяулыҡты йәйеү. Ашъяулыҡты йыйып алыу. Ашъяулыҡ янына ултырыу.*

**ашығыс** *с.* Етеҙлек, тиҙлек менән башҡарылған. *Ашығыс эш. Ашығыс хәбәр. Ашығыс ярҙам.*

**ашығыу (ашыҡ-)** *ҡ.* Етеҙ, тиҙ ҡуҙғалыу, тиҙ булырға тырышыу; ҡабаланыу. *Ашыға башлау. Ашығып килеү. Ашыҡҡан – ашҡа бешкән.* (Мәҡәл.)

**ашыҡ (ашығы)** *и.* **1.** Малдың бәкәл буйындағы ваҡ һөйәк; бәкәлсәй. **2.** Шул һөйәк менән уйналған балалар уйыны. *Ашыҡ уйнау. Ашыҡ һуғыу.* ♦ **Алтын ашыҡ** бик ҡәҙерле, ҡиммәтле нәмә. **Шайтан ашығы** кеше аяғының түбәндәге сурайып торған һөйәге; бәкәл.

**ашыу (аш-)** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер сиктән, күләмдән артыу. *Саманан ашыу. Үлсәмдән ашыу.* **2.** Ниндәйҙер кимәлдән юғары күтәрелеү, үрләү. *Болоттан ашыу. Ярҙан ашыу. Күккә ашыу.* **3.** Үрләп, аша сығыу. *Тауҙы ашыу.*

**аэродром** *и.* Осҡос аппараттарҙы осора, ултырта, ҡарай һәм хеҙмәтләндерә торған махсус майҙан. *Аэродромға ултыртыу. Аэродром хеҙмәткәрҙәре.*

**ая** *и.* Дебетте таҙартыу, тетеү өсөн ҡулланылған энә тараҡлы ҡорал. *Ая менән аялау.*

**аяҙ** *с.* Болотһоҙ, асыҡ (һауа тураһында). *Аяҙ көн. Аяҙ күк. Салт аяҙ. Аяҙға тартыу.*

**аяҙыу (аяҙы-)** *ҡ.* Аяҙға ултырыу, асылыу. *Көн аяҙыу.*

**аяҡ (аяғы)** *и.* **1.** Кешенең, ҡош-ҡорттоң һәм хайуандарҙың баҫып тороу өсөн хеҙмәт итә торған ағзаһы. *Алғы аяҡ. Артҡы аяҡ. Уң аяҡ. Һул аяҡ. Сатан аяҡ. Тайыш аяҡ. Аяҡ табаны. Аяҡҡа баҫыу.* **2.** Ултырмалы нәмәләрҙең аҫтағы терәге; тояҡ. *Өҫтәл аяғы. Ултырғыс аяғы. Тумбочканың аяғы ҡаҡшаған.* ♦ **Аяҡ аҫтында** 1) яҡында ғына, эргәлә; 2) кемдеңдер хакимлығында. **Аяҡҡа баҫты-**

**рыу** ауыр хәлдән сығарыу, шәбәйтеү *(мәҫ.,* ауырыуҙы, хужалыҡты һ. б.) **Аяҡ баҫыр урын юҡ** тығылыш, һыйып булмағанлыҡтан (кеше күплектән). **Аяҡ баҫыу** 1) берәй ергә баҫыу; 2) берәй эш-хәлде башҡарыуға аҙым яһау. **Аяҡ ергә теймәү** бик шәп барыу, елдереү. **Аяҡҡа баҫыу** ауыр хәлдән сығыу, шәбәйеү. **Аяҡ салыу** эшкә, тормошҡа ҡамасау эшләү, зыян килтереү. **Аяҡтан йығыу** 1) тора алмаҫлыҡ итеп һалыу; 2) ауыр хәлгә төшөрөү, сараһыҙ итеү. **Аяҡ һуҙыу (һоноу)** үлеү.

**аяҡлау (аяҡла-)** *ҡ.* Аяҡ менән тәрән һыуҙың төбөнә етеү, буйлау (тәрәнлеген үлсәү өсөн). *Күлде аяҡлау.*

**аяу (ая-)** *ҡ.* Йәлләү, ҡыҙғаныу. *Дошман һис аямай.*

**аяуһыҙ** *с.* Ҡыҙғана белмәгән, ҡаты бәғерле. *Аяуһыҙ кеше. Аяуһыҙ һуғыш. Аяуһыҙ булыу. Аяуһыҙ тотоноу.*

# Б

**баба**[1] *и.* Оло йәштәге хөрмәтле ир кеше. **2.** Нәҫел-ырыуҙың боронғо быуыны. *Бабалар аманаты.* ♦ **Баба ҡошо** оҙон йыуан моронло, муйын аҫты тоҡсайлы эре һыу ҡошо.

**баба**[2] *и.* **1.** Сөннәткә ултыртыусы; бабасы. **2.** Ир балаларҙың ҡаҫаһын ҡырҡыу йолаһы, сөннәт. *Бабаға биреү.*

**бабай** *и.* **1.** Оло йәштәге ир кеше; ҡарт. **2.** Атайҙың йәки әсәйҙең ағаһы һәм уларҙан оло ир кеше. **3.** Шул кешегә өндәшеү һүҙе. **4.** Өлкән йәштәге ир (ҡатынына ҡарата). ♦ **Ҡыш бабай** Яңы йыл байрамында ҡышты кәүҙәләндергән персонаж. **Нужа бабай** ярлы, ауыр тормошҡа ҡарата әйтелә.

**багаж** *и.* **1.** Юлсының үҙе менән юлға төрөп алған нәмәләре. *Ҡул багажы.* **2.** Вагон, карап һәм самолеттың махсус бүлмәһенә оҙатылған юлсылар йөгө. *Багажға һалыу. Багаж менән оҙатыу.*

**бағана** *и.* **1.** Ергә ҡаҙып ултыртылған бүрәнә. *Ҡойма бағанаһы. Электр бағанаһы. Бағана ултыртыу.* **2.** *күсм.* Ялғауҙың йәки һандарҙың өҫтән аҫҡа төшкән тар буйы. *Газета бағанаһы.*

**бағыр** *и.* Һыртына төрлө төҫтәр төшкән затлы балыҡ (ваҡ тау йылғаларында, саф һыуҙа була). *Бағыр ыуылдырығы.*

**баҙ** *и.* Аҙыҡ, йәшелсә һаҡлау өсөн иҙән аҫтына йәки тышҡа ҡаҙылған соҡор. *Картуф баҙы. Баҙ ҡаҙыу.* **Ҡар баҙы** йәйгелеккә ҡар, боҙ һалып ҡалдырған баҙ. ♦ **Баҙ ҡаҙыу** этлек эшләү. *Кешегә баҙ ҡаҙыма – үҙең төшөрһөң.* (Мәҡәл.)

**баҙар** *и.* **1.** Күмәк кешенең үҙе эшләгән йәки етештереп алып килгән нәмә менән һатыу иткән шәхси сауҙаһы һәм шул сауҙа урыны. *Иген баҙары. Баҙар хаҡы. Баҙар көнө. Баҙар таралыу.* **2.** Ваҡыты-ваҡыты менән халыҡ алдына сығарып ойошторолған махсус сауҙа. *Китап баҙары. Мәктәп баҙары.* **3.** *иҡт.* Тауар әйләнеше өлкәһе. *Донъя баҙары. Тышҡы баҙар. Эске баҙар. Баҙар мөнәсәбәттәре.* ♦ **Ҡош баҙары** диңгеҙ яры буйҙарындағы күсәр ҡоштар тупланған ер. **Әүен** (*йәки* **төнәй) баҙарына китеү** йоҡоға талыу.

**баҙыҡ** *с.* **1.** Һәр төрлө нәмәгә бирешеп бармаған; ныҡлы, төҙөк. *Баҙыҡ бағана. Баҙыҡ теш.* **2.** Йыуантыҡ, ныҡлы, көслө. *Баҙыҡ бала. Баҙыҡ кәүҙәле. Баҙыҡ булыу.* **3.** Ышаныслы, ныҡлы. *Баҙыҡ аҙым. Баҙыҡ хәрәкәт.*

**баҙыя** *и.* Ҡалын тимерҙән йәки ағастан эшләнгән ҙур күнәк.

**бажа** *и.* Апалы-һеңлеле ҡатындарҙың ирҙәре (бер-береһенә ҡарата).

**база** *и.* **1.** Нимәгәлер шарт, мөмкинлек биргән таяныс; нигеҙ. *Иҡтисади база. Техник база. Матди база. Аҙыҡ базаһы.* **2.** Ниҙе лә булһа хеҙмәтләндереү өсөн булған запас һәм махсус ҡоролмалар тупланған урын. *Геологик экспедиция базаһы. Туристик база.* **3.** Төрлө тәьминәт кәрәк-ярағы һаҡланған урын. *Аҙыҡ-түлек базаһы. Яғыулыҡ базаһы.*

**бай**[1] **I.** *с.* **1.** Мал-мөлкәте күп; мул, етеш. *Бай кеше. Бай ил. Бай йәшәү. Иртә торған бай булған, һуңлап торған хур булған.* (Әйтем.) **2.** Сифаты, эшләнеше яҡшы; йәмле, гүзәл. *Бай эстәлекле әҫәр. Бай тәбиғәт.* **II.** *и.* **1.** Мал-мөлкәте күп булған, мул, етеш йәшәгән кеше. *Байға ялланыу.* **2.** Ҡатындың ире.

**бай**[2] *и.* **1.** Ниндәйҙер эш-хеҙмәтте, хаҡты ҡайтарырлыҡ нәмә; бәрәбәр. *Эшләгән байын түләү.* **2.** Ниҙелер үлсәгәндә һуңынан кәмеү иҫәбенә артығыраҡ итеп ҡалдырылған өлөш. *Кейемдең тегеү байын ҡалдырыу.* ♦ **Алдың байына (байыңды)** ниҙеңдер аҙағы насар булып бөткәндә әйтелә.

**балсыҡ (балсығы)** *и.* Һыуҙа иҙелеп, яҙылып торған йомшаҡ тау тоҡомо. *Аҡ балсыҡ. Ҡара балсыҡ. Һары балсыҡ. Балсыҡ ҡаҙыу.*

**балта** *и.* Сабып ҡырҡыу, юныу өсөн хеҙмәт иткән үткер йөҙлө, ялпаҡ төйҙәле, оҙон һаплы ҡорал. *Балта йөҙө. Балта төйҙәһе. Балта менән сабыу.* ♦ **Сәкен балта** 1) ныҡ ағастан яһалған оҙон һаплы, нәҙек билле һуғыш балтаһы; 2) шәкәр вата торған бәләкәй балта. **Балта оҫтаһы** ағастан йорт-ҡура һалыу менән шөғөлләнгән оҫта; балтасы. **Балтаһы һыуға төшкән** кәйефе төшөп күңелһеҙләнеп торған кешегә ҡарата әйтелә.

**балтыр** *и.* Аяҡ енесенең йыуан ере; бурбай. *Балтыр ите.*

**балтырған** *и.* Көпшә һабаҡлы, киң киртләс япраҡлы, сатыр сәскәле күп йыллыҡ үлән (йәш сағында япрағын, көпшәһен ашайҙар).

**балыҡ (балығы)** *и.* Айғолаҡлы, йөҙгөс ҡойроҡло, һалҡын ҡанлы, умыртҡалы һыу тереклеге. *Балыҡ ите. Балыҡ майы. Балыҡ тотоу. Балыҡ үрсетеү.*

**балыҡсы** *и.* Балыҡ тотоу менән шөғөлләнгән кеше.

**балыҡсылыҡ (балыҡсылығы)** *и.* Хужалыҡтың балыҡ үрсетеү, тотоу менән шөғөлләнгән тармағы. *Балыҡсылыҡ хужалығы.*

**бандит** *и.* Кеше талап, үлтереп йөрөгән башкиҫәр. *Бандиттар шайкаһы.*

**банка** *и.* **1.** Түңәрәк ҡабырғалы быяла ҡалай һауыт. *Консерва банкаһы.* **2.** Дауалау өсөн тәнгә уптырыла торған бәләкәй генә быяла һауыт. *Банка ултыртыу.*

**бапаҡ (бапағы)** *и.* Балаларҙы ҡурҡыта торған уйҙырма яман зат.

**бар 1.** Кемдең йәки ниҙеңдер ғәмәлдә булмағанын белдерә. *Әсәйем бар, атайым юҡ. Бар яраштырыр, юҡ талаштырыр.* (Әйтем.) *Барҙың барлығы тейер, юҡтың тарлығы тейер.* (Әйтем.) **2.** Хәбәр функцияһында килеп, ниҙеңдер булырға ихтималлығын йәки тейешлеген белдерә. *Ауырып ҡайтыуы бар. Иртә тораһы бар.* ♦ **Бар тип тә белмәү** нимәнелер иҫәпкә алмау, ҡайғыртмау.

**барабан** *и.* **1.** Ике яғы тире менән тарттырып эшләнгән ҡыуыш цилиндр рәүешендәге дөңгөрләк һуҡма музыка ҡоралы. *Барабан таяҡтары. Барабан ҡағыу.* **2.** Төрлө машина һәм механизмдың цилиндр кеүек детале. *Комбайн барабаны. Сепаратор барабаны.* ♦ **Ярыҡ барабан** ауыҙында һүҙ тормаған кешегә ҡарата әйтелә.

**барабансы** *и.* Барабан ҡағыусы.

**барельеф** *и.* Йөҙлөгөнән ҡабартып эшләнгән скульптура һүрәте.

**бармаҡ (бармағы)** *и.* Ҡул, аяҡ осондағы быуынтыҡлы хәрәкәтсән ағза. *Баш бармаҡ. Йыуан бармаҡ. Сығанаҡ бармаҡ. Урта бармаҡ. Бармаҡ бите.* ♦ **Бармаҡ менән генә һанарлыҡ** бик әҙ. **Бармаҡ осондай** саҡ ҡына, әҙ генә. **Урта бармаҡ кеүек** бик шәп (кешегә ҡарата).

**барометр** *и.* Атмосфера баҫымын үлсәй торған ҡорамал. *Терегөмөшлө барометр.*

**баррикада** *и.* Урам һуғышында һәр төрлө нәмәнән өйөлгән ныҒытма. *Баррикада ҡороу.*

**барыбер** *р.* **1.** Нисек кенә булмаһын, ни булһа ла. *Барыбер ҡасып ҡотола алмаҫһың.* **2.** Айырмаһы, әһәмиәте юҡ, бер тигеҙ; берҙәй. *Кем булһа ла миңә барыбер.*

**барыу (бар-)** *к.* **1.** Бер йүнәлештә маҡсат менән хәрәкәт итеү. *Йәйәү барыу. Поезд менән барыу. Шәп барыу. Эшкә барыу. Театрға барыу.* **2.** Дауам итеү (эшкә, әңгәмәгә һ. б. ҡарата). *Йыйылыш бара. Тормош алға бара.* **3.** Кейәүгә сығыу. *Кейәүгә барыу.* **4.** *күсм.* Яраҡлы булыу; ярау. *Был туҡыма пальтоға бара.* **5.** *күсм.* Үтемле булыу; үтеү. *Тамаҡҡа аш бармай.*

**барышлай** *р.* Барған ыңғайҙа. *Үтеп барышлай.*

**баскетбол** *и.* Ике команда ярышып, ике яҡ бағаналагы селтәр кәрзиндәргә туп ырғытыша торған спорт уйыны. *Баскетбол ярышы. Баскетбол уйнау.*

**бассейн** *и.* **1.** Йөҙөү, һыу инеү өсөн йәки төрлө һынау үткәреү өсөн хеҙмәт иткән махсус ҡоролма. *Асыҡ бассейн. Ябыҡ бассейн.* **2.** Йылға һәм уның ҡушылдыҡтары биләгән майҙан. *Ағиҙел йылғаһының бассейны.* **3.** Билдәле бер ҡаҙылма байлыҡтар ятҡан өлкә. *Күмер бассейны.*

**баҫалҡы** *с.* Тыныс, һалҡын тәбиғәтле; *Баҫалҡы кеше. Баҫалҡы булыу.*

**баҫҡыс** *и.* **1.** Менеү, төшөү өсөн араталы йәки киртләсле итеп эшләнгән ҡоролма. *Тимер баҫҡыс. Баҫҡыс буйлап менеү.* **2.** *күсм.* Ниҙендер үҫешендәге ҡоролош тәртибендәге билдәле бер кимәл. *Тормош баҫҡыстары. Беренсе баҫҡыс мәктәп.*

**баҫлығыу (баҫлыҡ-)** *к.* Йоҡлағанда яман һаташып, тын ҡыҫылып уяныу. *Баҫлығып ятыу.*

**баҫма**[1] *и.* **1.** Йылға, соҡор аша йәйәүле кеше өсөн эшләнгән тар ҡоролма. *Баҫма һалыу. Баҫманан сығыу.* **2.** Һыу ситенә кер сайҡау, кәмә туҡтау һ. б. өсөн ағастан эшләнгән майҙансыҡ. *Баҫмаға баҫып һыу алыу.*

**баҫма**[2] *с.* Типографик ысул менән яҙылған; ташҡа баҫҡан. *Баҫма хәреф.*

**баҫтырыу (баҫтыр-)** *к.* Арттан ҡыуыу. *Һыбай баҫтырыу. Баҫтырып тотоу.*

**баҫым** *и.* **1.** Газ һәм шыйыҡлыҡтың баҫыу һәм ян-яҡҡа этеү көсө. *Һауа баҫымы. Һыу баҫымы. Атмосфера баҫымы.* **2.** Һүҙҙәге бер ижектең көслөрәк тауыш менән айырылыуы һәм шуны күрһәткән билдә. *Баҫым ҡуйыу. Баҫым төшөү.*

**баҫырау** *и.* Бесән, һалам йөгөн өҫтән баҫтырып тарттыра торған һайғау. *Йөккә баҫырау һалыу.*

**баҫырыу (баҫыр-)** *к.* Өйөп, өҫтән ауыр нәмә менән баҫтырыу. *Силос баҫырыу.* **2.** *күсм.* Кешенән йәшереп, өндәшмәй үткәреү. *Ғәйепте баҫырыу. Баҫырып ҡалдырыу.*

**баҫыу**[1] **(баҫ-)** *к.* **1.** Аяҡ үрә тороу, атлау, барыу. *Ергә баҫыу. Баҫып ҡарап тороу. Аяҡ ослап баҫыу. Аҡрын баҫыу. Ваҡ-ваҡ баҫыу.* **2.** Өҫтән көс төшөрөү,

ауырлыҡ һалыу. *Күреккә баҫыу.* **3.** *күсм.* Ауыр хәлгә килтереү. *Етемлек баҫты. Ҡартлыҡ баҫты.* **4.** Осоп, туҙып тормаҫлыҡ хәлгә килтереү. *Ямғыр саңды баҫты.* **5.** Тыныс хәлгә килтереү, тәьҫирен кәметеү; тынысландырыу. *Асыуҙы баҫыу. Күңелде баҫыу. Йөрәкте баҫыу.* **6.** Түшәлеп, йәйелеп ҡаплап алыу. *Көрт баҫыу. Һыу баҫыу.* **7.** Тотош солғап алып томалау. *Томан баҫыу. Төтөн баҫыу.* **8.** Бала сығарыу өсөн йомортҡа өҫтөндә ултырыу. *Йомортҡа баҫыу. Тауыҡ баҫып ултыра.* **9.** Иҙеп йомшартыу. *Балсыҡ баҫыу. Ҡамыр баҫыу. Ҡорот баҫыу. Тиҙәк баҫыу.* **10.** Нәшриәт, матбуғаттан сығарыу. *Китап баҫыу. Хикәйә баҫыу.*

**баҫыу**[2] *и.* Ашлыҡ сәскән ер. *Бойҙай баҫыуы. Ужым баҫыуы. Баҫыу юлы.*

**батҡаҡ (батҡағы)** *и.* Һыуҙа ебеп, иҙелеп ятҡан балсыҡ. *Батҡаҡҡа батыу. Батҡаҡ урын.*

**батмус** *и.* Һауыт-һаба, ашамлыҡ ташыу, ҡуйыу өсөн эшләнгән йәйенке һауыт. *Еҙ батмус. Батмус менән ташыу.*

**батша** *и.* **1.** Дәүләт башындағы сикләнмәгән хоҡуҡлы юғары хаким. *Рәсәй батшаһы. Батша заманы. Аҡ батша.* **2.** Әкиәттәге төрлө йәнлек, тәбиғәт башлығы. *Күл батшаһы.*

**батыр**[1] *с.* **1.** Ҡурҡыу белмәҫ; ҡыйыу. *Батыр егет.* **2.** Эштә, тормошта тәүәккәл; ҡыйыу. *Эшкә батыр. Батыр һөйләшеү.*

**батыр**[2] *и.* **1.** Ҡыйыулығы, көсө менән танылған кеше. *Яу батыры.* **2.** Яуҙа дан алған кешегә халыҡ биргән исем. *Салауат батыр.* **3.** Фиҙаҡәр хеҙмәте менән танылған кеше. *Хеҙмәт батыры.*

**батырыу (батыр-)** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер эсенә тығыу, индереү; күмелеү. *Ҡомға батырыу. Ҡарға батырыу.* **2.** Һыу төбөнә ебәреү. *Кәмәләрҙе батырыу.* **3.** Сәнсеп, ҡаҙап индереү. *Эт тештәрен ҡуян түшенә батырҙы.* **4.** Һыу эсенә төшөрөп һалыу (ебетеү, шешендереү, серетеү өсөн). *Миҫкә батырыу. Һалабаш батырыу.*

**батыу (бат-)** *ҡ.* **1.** Баҫҡан ауырлыҡты күтәрмәй убылыу. *Ҡар бата. Батҡаҡҡа батыу.* **2.** Соҡорайып эсенә инеү (күҙгә, яңаҡҡа ҡарата). *Күҙҙәре эскә батҡан.* **3.** Һыу аҫтына китеү. *Һыуға батыу. Батып үлеү.* **4.** *күсм.* Нимәгәлер тотош бирелеү, сумыу. *Ҡайғыға батыу. Уйға батыу.* **5.** Офоҡ артына инеү (күк есемдәренә ҡарата). *Ай батты.*

**бау** *и.* **1.** Ҡуша беркетеп, уратып бәйләү өсөн ишеп, үреп йәки бороп эшләнгән оҙон нәмә; бәй. *Ботинка бауы. Көлтә бауы. Бау менән бәйләү.* **2.** Ҡайһы бер нәмәләрҙең үлсәү берәмеге. *Бер бау һуған. Өс бау балан. Ике бау керәндил.*

**бауыр** *и.* **1.** Кеше һәм хайуан организмында үт эшләй торған эске ағза. *Бауыр ите. Бауыр ауырыуы.* **2.** *күсм.* Кешенең хис-тойғо тупланған урыны;

ләрәк. *Бауырға баҫыу.* **3.** Йәнлек, хайуандың ҡорһаҡ-сандыры. *Бауыр аҫты. Көрт ат бауырынан.* ♦ **Таш бауыр** ҡаты күңелле, рәхимһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Ят (сит) бауыр** туған түгел, яҡын булмаған кешегә ҡарата әйтелә.

**бауырлыҡ (бауырлығы)** *и.* Аттың бауыр аҫтынан үткәреп, ике тәртәгә тарып бәйләгән бау (һарҡыу тотоу өсөн). *Бауырлыҡ ҡуйып егеү.*

**бауырһаҡ (бауырһағы)** *и.* Йоморткаға баҫып, йоморсаҡ итеп майҙа бешерелгән сәй ризығы. *Бауырһаҡ бешереү. Бауырһаҡ менән һыйлау.*

**бахыр** *с.* Ҡыҙғаныс, аяныс хәлдәге; меҫкен. *Бахыр кеше. Бахыр булыу.*

**баһа** *и.* **1.** Аҡсалата хаҡ. *Баһа ҡуйыу. Баһаһын төшөрөү.* **2.** Ниҙеңдер сифатын, әһәмиәтен билдәләгән фекер. *Баһа биреү. Уҡ баһаһы – атылғандан һуң, һүҙ баһаһы – әйтелгәндән һуң.* (Мәҡәл.)

**баш** *и.* **1.** Кеше йәки башҡа йән эйәләренең кәүҙәһенең мейе урынлашҡан өлөшө. *Кеше башы. Ҡош башы. Башҡа бүрек кейеү. Баш һөйәге.* **2.** *күсм.* Аҡыл, зиһен. *Баш эше. Башты эшләтеү. Иҫәр баш.* **3.** Аяҡтың, аяҡ кейеменең бәкәлдән түбәнге өлөшө. *Быйма башы. Итек башы.* **4.** Оҙон йәки һабаҡлы нәмәләрҙең түмалаҡланып торған осо. *Бармаҡ башы. Сөй башы. Һуған башы. Шырпы башы.* **5.** Ҡайһы бер нәмәләрҙең иҫәп берәмеге. *Бер баш ҡорот. Биш баш һарыҡ. Ике баш һуған.* **6.** Ниҙеңдер өҫкө осо. *Ағас башы. Бағана башы. Тау башы.* **7.** Йылға, юл һәм башҡаларҙың юл алған урыны. *Ағиҙел башы. Шишмә башы.* **8.** Хәл-ваҡиғаның, шулай уҡ миҙгелдең башланған мәле. *Ғүмер башы. Туй башы. Ураҡ башы. Йыл башы. Яҙ башы.* **9.** Етәксе урын һәм етәкселек итеүсе. *Ил башы. Ғәскәр башы. Баш булыу. Эш башына белемле кешене ҡуялар.* **10.** *с.* Беренсе, тәүге. *Баш ҡала.* **11.** *с.* Урыны, вазифаһы буйынса оло. *Баш белгес. Баш инженер. Баш хужа.* ♦ **Баш ватыу** ҡыйын бер мәсьәләне ныҡ уйлау. **Баш күккә тейеү** бик ныҡ шатланыу, һөйөнөү. **Баш күтәреү** кемгәлер ҡаршы ҡуҙғалыу. **Баш ҡайнатыу** ниндәйҙер бер мәсьәләне хәл итә алмай ныҡ уйланыу. **Баш ҡоҫоу (ебәреү)** башаҡ ебәреү (игенгә ҡарата). **Башты ашау** һәләк итеү, харап итеү.

**башаҡ[1] (башағы)** *и.* Ҡыяҡлы үҫемлектең емле башы. *Ҡылсыҡлы башаҡ. Башаҡ ебәреү. Башаҡҡа ултырыу. Башаҡ йыйыу.*

**башаҡ[2] (башағы)** *и.* Уҡ башына ҡуйылған үткер ос. *Еҙ башаҡ. Мөгөҙ башаҡ.*

**башаҡланыу (башаҡла-)** *ҡ.* Башаҡ ебәреү, башаҡҡа ултырыу. *Бойҙай башаҡланған.*

**башалтай** *и.* Ҡыҫҡа ҡуныслы йөн ойоҡ. *Йөн башалтай. Башалтай бәйләү. Башалтай кейеү.*

**башҡа** *с.* **1.** Үҙенә бер яры; айырым. *Башҡа ашау. Башҡа тороу. Башҡа сығарыу.* **2.** Икенсе төрлө; бүтән. *Башҡа ваҡыт. Башҡа кешеләр.* **3.** *р.* Бынан тыш; бүтән. *Башҡа эшләмәй. Башҡа һөйләшмәне.*

**башҡарыу (башҡар-)** *ҡ.* **1.** Бойомға ашырыу, үтәү. *Бурысты башҡарыу.* **2.** Тамаша өсөн сәнғәт әҫәрен үтәү. *Йыр башҡарыу. Роль башҡарыу.*

**башҡаса** *р.* **1.** Башҡа төрлө, икенсе бер төрлө; бүтәнсә. *Башҡаса кейенеү. Башҡаса эшләү.* **2.** Бынан ары; бүтән, ҡабат. *Башҡаса уҡымайым.*

**башҡорт** *и.* Башҡортостандың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә). *Башҡорт ҡыҙы. Башҡорт балы. Башҡорт йыры. Башҡорт ғаиләһе.*

**башҡортса** *р.* **1.** Башҡорт телендә. *Башҡортса һөйләшеү. Башҡортса яҙыу.* **2.** Башҡорттар кеүек, башҡорт халҡына хас. *Башҡортса бейеү.*

**башланғыс** *и.* **1.** Ниҙелер башлап ебәргән нәмә. *Яңылыҡтың башланғысы.* **2.** *с.* Ниҙеңдер башы, беренсе баҫҡысы булған. *Башланғыс мәктәп. Башланғыс класс.*

**башланыу (башлан-)** *ҡ.* **1.** Хәрәкәт, йәшәйеш һ. б. өсөн баш алыу. *Ағиҙел Уралдан башлана.* **2.** Ғәмәлләшә башлау. *Эш башланды. Ямғыр башланды.* **3.** Тотонола башлау. *Башланған дәфтәр. Икмәк башланған булып сыҡты.*

**башлау (башла-)** *ҡ.* **1.** Эш-хәлгә билдәле бер урындан, ваҡыттан тотоноп китеү; керешеү. *Ҡабаттан башлау. Башлап китеү.* **2.** Эш-хәрәкәткә керешеү. *Йыйылыш башлау. Һөжүм башлау. Һүҙ башлау.* **3.** Тотоноп алып китеү. *Бер тоҡ шәкәрҙе башлау.*

**башлыҡ[1] (башлығы)** *и.* Берәй төркөмгә, хужалыҡҡа етәкселек итеүсе; етәксе. *Ғаилә башлығы. Ғәскәр башлығы. Башлыҡ булып алыу.*

**башлыҡ[2] (башлығы)** *и.* Еңел баш кейеме. *Бәйләнгән башлыҡ. Башлыҡ кейеү.*

**башмаҡ (башмағы)** *и.* Ярты йәштән алып йәш ярымға тиклемге һыйыр малы. *Орғасы башмаҡ. Үгеҙ башмаҡ. Башмаҡ аҫрау.*

**башта** *р.* Иң элек, тәүҙә. *Мин башта ышанманым.*

**баштан-аяҡ** *р.* **1.** Баштан аяҡҡа тиклем. *Баштан-аяҡ бысраныу.* **2.** Баштан аяҡҡа тиклем; тотош. *Хәбәрҙе баштан-аяҡ һөйләү. Баштан-аяҡ ризалашыу.*

**бая** *р.* Бынан бер аҙ элек, күптән түгел; яңыраҡ. *Баянан бирле. Бая килде.*

**баян** *и.* Күп телле ҙур гармун. *Баянға бейеү. Баянда уйнау.*

**баяр** *и. тар.* Боронғо Рәсәйҙә юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. **2.** Боронғо Рәсәйҙә һәм Мәскәү дәүләтендә эре ер биләүсе, юғары ҡатлам феодалдарҙың вәкиле; алпауыт.

**бегемот** *и.* Экваториаль Африканың йылға, күл буйында була торған бик ҙур башлы, яланғас тәнле, айырым тояҡлы эре һөтимәр хайуан, һыу айғыры.

**без¹ (беҙҙең, беҙгә, беҙҙе, беҙҙән, беҙҙә)** *зат а.* Һөйләүсе һәм унын менән бергә булған бер нисә шәхесте белдерә. *Беҙ урманға киттек.*

**беҙ²** *и.* Сәнсеп тишә торған эш ҡоралы. *Йыуан беҙ. Кәкре беҙ. Беҙ менән тишеү. Беҙ ҡапсыҡта ятмай.* (Мәҡәл.)

**бейек** *с.* Түбәндән юғарыға үлсәме ҙур; *киреһе* тәпәшәк. *Бейек ағас. Бейек йорт. Бейек ҡойма. Бейек булыу.*

**бейеклек (бейеклеге)** *и.* Аҫтан өҫкә тиклемге ике аралағы алыҫлыҡ. *Йорттоң бейеклеге. Бейеклеккә һикереү.*

**бейеү¹ (бейе-)** *ҡ.* Көй ыңғайына кәүҙә, аяҡ-ҡулдар менән матур, нәфис хәрәкәттәр яһау. *Ҡурайға бейеү. Бейергә төшөү.*

**бейеү²** *и.* Көй ыңғайына башҡарылған матур, нәфис хәрәкәт. *Күмәк бейеү. Һалмаҡ бейеү. Яңғыҙ бейеү. Бейеү ансамбле. Бейеү оҫтаһы. Бейеү сәнғәте.*

**бейеүсе** *и.* Бейей белгән кеше; бейеү оҫтаһы. *Оҫта бейеүсе. Бейеүсе хәрәкәттәре.*

**бейә** *и.* Инә йылҡы малы. *Быуаҙ бейә. Ҡолонло бейә. Тыу бейә. Бейә һөтө. Һауын бейә.* ♦ **Бейә бәйләү** бейә тотоп, ҡымыҙ эшләү.

**бейәләй** *и.* Баш бармағын ғына айырым сығарып эшләнгән ҡул кейеме. *Йорон бейәләй. Йөн бейәләй. Күн бейәләй. Бейәләй бәйләү.*

**белдереү** *и.* **1.** Ниҙер хаҡында мәғлүм итеп эленгән яҙма; иғлан. *Белдереү элеү. Белдереү яҙыу. Белдереү уҡыу.* **2.** Ҡәтғи рәүештә мәғлүм ителгән рәсми хәбәр. *Хөкүмәт белдереүе. Белдереү яһау.*

**белем** *и.* **1.** Уҡыу, тәжрибә нигеҙендә тупланған мәғлүмәт. *Дөйөм белем. Урта белем. Политехник белем.* **2.** Кешенең бөтә тәбиғәт, йәмғиәт тураһында быуын-быуындан туплай килгән мәғлүмәттәре; ғилем. *Йәмғиәт белеме. Тәбиғәт белеме.*

**белемле** *с.* Ҙур белемгә, мәғлүмәткә эйә; уҡымышлы, ғилемле. *Белемле кеше. Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ.* (Мәҡәл.) *Тубылғы ҙур булмаҫ, белемле хур булмаҫ.* (Мәҡәл.)

**беленеү (белен-)** *ҡ.* **1.** Һиҙелеү, тойолоу. *Көн уҙғаны беленмәй ҙә ҡалды.* **2.** Билдәле булыу, асыҡланыу. *Кем икәнлеге беленде. Батыр яуҙа беленер, сәсән дауҙа беленер.* (Әйтем.) *Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә.* (Мәҡәл.) **3.** Күҙгә ташланыу; күренеү. *Ямауы беленмәй.*

**белеү (бел-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки ниҙер хаҡында мәғлүмәтле йәки хәбәрҙар булыу. *Тарихты белеү. Уй-теләкте белеү. Хәлде белеү.* **2.** Үҙләштереп, аңзиһендә тотоу; мәғлүмәтле булыу. *Телде белеү. Эшен белеү. Белгән белеменә*

*ышаныр, белмәгән беләгенә ышаныр.* (Әйтем.) **3.** Күреп таныу, таныш булыу. *Мин ул кешене белмәйем.*

**белешмә** *и.* **1.** Кем йәки нимә хаҡындағы мәғлүмәт. *Белешмә бүлеге. Белешмә алыу. Белешмә биреү.* **2.** Эш-хәл хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биргән әсбап. *Белешмә әҙәбиәт.*

**беләҙек (беләҙеге)** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың беләккә кейә торған биҙәүесе. *Алтын беләҙек. Ҡашлы беләҙек. Ҡуш беләҙек. Беләҙек кейеү.*

**беләк (беләге)** *и.* Ҡулдың иңбаштан ҡушҡарға тиклемге өлөшө. *Йыуан беләк. Көслө беләк. Беләктән тотоу.*

**бензин** *и.* Нефтте ҡыуғанда алынған төҫһеҙ шыйыҡ яғыулыҡ. *Авиация бензины. Машинаға бензин һалыу.*

**бергә** *р.* Үҙ-ара берлектә, айырым түгел. *Бергә йәшәү. Бергә эшләү.*

**бергәләп** *р.* Үҙ-ара берлектә; бергә. *Бергәләп уҡыу. Бергәләп эшләү.*

**берҙәм** *с.* **1.** Бер бөтөн. *Уҡытыу менән тәрбиә – берҙәм процесс.* **2.** Бер уй, ниәт менән ойошҡан. *Берҙәм ғаилә. Берҙәм коллектив. Берҙәм эш итеү.*

**беренселек (беренселеге)** *и.* Берәй нәмәләге беренсе урын. *Команда беренселеге. Беренселекте алыу.*

**беркетеү (беркет-)** *и.* **1.** Ҡуша йәбештереү, тоташтырыу. *Стенаға беркетеү.* **2.** Эшкә, урынға тәғәйенләнеү. *Агитатор итеп беркетеү. Тәрбиәсе итеп беркетеү.*

**берлек (берлеге)** *и.* **1.** Ун иҫәбе эсендәге иң бәләкәй һәм беренсе һан. **2.** Бер һумлыҡ аҡса. *Эш хаҡын берлектәрҙән генә бирҙеләр.* **3.** *грам.* Һүҙ бер кеше йәки нәмә хаҡында барғанда ҡулланыла торған килеш һәм зат, заман, һан менән үҙгәреү формалары.

**берәмек (берәмеге)** *и.* **1.** Үлсәм итеп билдәләнгән күләм, дәүмәл. *Аҡса берәмеге. Ауырлыҡ берәмеге.* **2.** Бер бөтөн нәмәнең үҙ аллы бер өлөшө. *Хужалыҡ берәмеге. Ғәскәри берәмек.*

**бесеү (бес-)** *ҡ.* Кейем тегеү өсөн тауарҙы үлсәп ҡырҡыу. *Күлдәк бесеү. Атанан күргән уҡ юныр, инәнән күргән тун бесер.* (Әйтем.) ♦ **Хаҡ бесеү** һатыулашып, хаҡ ҡуйыу.

**бесәй** *и.* Сысҡан тота торған йыртҡыс ҡылыҡлы йорт йәнлеге. *Ата бесәй. Инә бесәй. Бесәй тотоу.* ♦ **Утҡа (ҡуҙға) баҫҡан бесәй кеүек** сыҙамай, өтәләнеп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. **Эт менән бесәй кеүек** үҙ-ара талашып, ыҙғышып йәшәгән кешеләргә ҡарата әйтелә.

**бесән** *и.* Малға ашатыу өсөн сабылған үлән. *Йәш бесән. Япраҡ бесән. Бесән ваҡыты. Бесән ҡубәләү. Бесән сабыу.* ♦ **Дуға менән бесән сабыу** килешмәгән, мәғәнәһеҙ эш эшләү.

**бесәнлек (бесәнлеге)** *и.* Йорт янындағы бесән өйөлгән урын.

**бесәнсе** *и.* Бесән эшендәге кеше. *Бесәнселәр ярышы.*

**бет** *и.* **1.** Кеше, ҡош, йәнлек тәнендә ҡан һурып йәшәгән бәләкәй генә ҡанатһыҙ бөжәк. *Баш бете. Кейем бете. Ҡаҙ бете. Һарыҡ бете.* **2.** Үҫемлектең һутын һурып ҡорота торған йәшел төҫтәге ваҡ ҡына ҡанатһыҙ бөжәк; кеблә.

**бетон** *и.* Цементҡа ҡом, ҡырсын ҡушып, һыуҙа иҙгән төҙөлөш материалы. *Бетон иҙеү. Бетон стена.* ♦ **Бетон иҙгес** бетон иҙеү машинаһы.

**беше** *с.* **1.** Тығыҙ, ныҡ. *Беше ағас. Беше тауар. Беше булыу.* **2.** *күсм.* Эшкә ныҡ, бирешмәй торған; түҙемле. *Беше малай.* ♦ **Беше баш** аҡыллы кешегә ҡарата әйтелә.

**бешегеү**[1] **(бешек-)** *ҡ.* Эҫеләп тирләү. *Бала бешегеп киткән.*

**бешегеү**[2] **(бешек-)** *ҡ.* **1.** Бешегә әйләнеү. *Ағас бешегеп киткән.* **2.** *күсм.* Көскә ныҡыу; сыныҡыу. *Эшкә бешегеү.*

**бешереү (бешер-)** *ҡ.* **1.** Ҡайнатып йәки юғары эҫелектә тотоп, ашамлыҡ-эсемлек әҙерләү. *Аш бешереү. Икмәк бешереү. Мейестә бешереү.* **2.** Ҡайнатып йәки ҡайнар һыуға һалып, тәмен, шифаһын сығарыу. *Андыҙ бешереү. Мәтрүшкә бешереү. Сәй бешереү.* **3.** Утҡа, ҡайнар нәмәгә ҡағылып зарарланыу. *Ауыҙҙы бешереү. Ҡулды бешереп алыу.* **4.** *күсм.* Пыр туҙҙырып әрләү; ҡыҙҙырыу. *Уҡыусыларҙы бешереп алдым.*

**бешеү**[1] **(беш-)** *ҡ.* **1.** Ҡайнап йәки юғары эҫелектә тотолоп, ашау-эсеү өсөн әҙер булыу. *Ит бешкән. Картуф бешкән. Бишбармаҡ беште.* **2.** Ҡайнап йәки ҡайнар һыуҙа ебеп, тәме, шифаһы сығыу. *Сәй бешкән.* **3.** Утҡа, ҡайнар нәмәгә тейеп, зарарланыу (тәнгә ҡарата). *Ҡул беште.* **4.** Үҫеп, ашарлыҡ, файҙаланырлыҡ хәлгә етешеү; өлгөрөү. *Еләк бешкән. Үлән бешкән.*

**бешеү**[2] **(беш-)** *ҡ.* **1.** Көбөгә йәки башҡа һауытҡа һалып, аҫҡа-өҫкә табан болғатыу. *Ҡымыҙ бешеү. Май бешеү.* **2.** *күсм.* Ныҡ әрләү; бешереү. *Балаларҙы бешеп алдым.*

**бешә** *и.* Йәш ҡарағай.

**бигерәк, бигерәк тә** *р.* **1.** Саманан тыш, кәрәктән артыҡ, артыҡ дәрәжәлә. *Бигерәк зирәк. Бигерәк матур. Бигерәк күп. Бигерәк эшсән.* **2.** Беренсе нәүбәттә, иң элек. *Бигерәк һине һағынып килдем.*

**биҙрә** *и.* Һыу йәки бүтән нәмә ташый торған ҡылыслы һауыт; күнәк. *Һыу биҙрәһе. Биҙрә ҡолағы. Биҙрә ҡылысы. Бер биҙрә картуф.*

**биҙәк (биҙәге)** *и.* Матурлыҡ өсөн төшөрөлгән төрлө-төрлө һүрәт. *Алма биҙәк. Сәскә биҙәк. Эре биҙәк. Биҙәк төшөрөү.*

**биҙәкләү (биҙәклә-)** *ҡ.* Биҙәк һалыу. *Биҙәкләп буяу. Биҙәкләп сигеү.*

**биҙәнеү (биҙән-)** *ҡ.* **1.** Күҙгә, биткә буяҡ, кершән һ. б. яғып, матурланыу. *Көҙгө алдында биҙәнеү. Биҙәнеп йөрөү.* **2.** Биҙәүестәр тағып, кейенеп-яһанып, матурланыу. *Биҙәнеү нәмәләре. Биҙәүестәр менән биҙәнеү.*

**биҙәү (биҙә-)** *ҡ.* **1.** Күҙгә, биткә буяҡ, кершән һ. б. һөртөп матурлау. **2.** Төҫ, йәм бирерлек нәмәләр менән матурлау; күркәм итеү. *Бүлмәне биҙәү. Сәхнәне биҙәү.*

**бизнес** *и.* Табыш алыу өсөн башҡарылған кәсеп. *Бизнес эше. Бизнес менән шөғөлләнеү.*

**бизнесмен** *и.* Бизнес менән шөғөлләнгән кеше.

**бик[1] (биге)** *и.* Ишек, ҡапҡаны, ҡапҡасты кеше аса алмаһын өсөн, эләктереп ҡуя торған ҡулайлама. *Ишеккә бик ҡуйыу. Ҡапҡаға бик һалыу.*

**бик[2]** *р.* Сиктән тыш, саманан тыш дәрәжәлә; үтә, ғәйәт. *Бик матур. Бик күп. Бик йәш.*

**бикләү (биклә-)** *ҡ.* **1.** Ябып бик һалыу. *Ишекте бикләү. Ҡапҡаны бикләү.* **2.** Кемде йәки ниҙелер бик һалып тыштан ябыу. *Бикләп тотоу. Һарайҙа бикләп ҡуйыу.*

**бил** *и.* **1.** Кәүҙәнең арҡа менән янбаш араһындағы нәҙек өлөшө. *Билдән бөгөлөү. Билде ауырттырыу. Билде быуыу.* **2.** Кейемдең шул тәңгәлдәге өлөшө. *Билһеҙ пальто. Оҙон билле күлдәк.* ♦ **Бил бөгөү** көс түгеп эшләү. **Билгә һуғыу** ҡыйынлыҡ килтереү; тотҡарлыҡ яһау. **Билде биштән быуып** ҙур тырышлыҡ менән, дәрт һалып. **Бил яҙмай** туҡтау белмәй, алһыҙ-ялһыҙ (ниҙер эшләү).

**билғау** *и.* Билде быуа торған оҙон тауар киҫәге. *Ебәк билғау. Билғау быуыу.*

**билдә** *и.* **1.** Айырып күрһәтеү өсөн ҡуйылған тамға. *Билдә ҡуйыу. Билдә һалыу.* **2.** Шартлы рәүештә бер мәғәнә аңлатҡан тамға. *Ҡушыу билдәһе. Һорау билдәһе. Тыныш билдәһе.* **3.** Уҡыусының белем кимәлен һәм тәртибен күрһәткән баһа. *Биш билдәһе. Насар билдә.*

**билдәле** *с.* **1.** Ни һәм ниндәй икәне мәғлүм, таныш; билгеле. *Билдәле сәбәп. Билдәле мәсьәлә.* **2.** Эше, хеҙмәте менән танылған. *Билдәле артист. Билдәле уҡытыусы.*

**билдәләү (билдәлә-)** *к.* **1.** Билдә ҡуйыу, билдә һалыу. **2.** Кем йәки ниҙер хөрмәтенә тантана ойоштороу. *Юбилей билдәләү.* **3.** Алдан уйлап тәғәйенләү. *Ваҡыт билдәләү.*

**билет** *и.* **1.** Ниҙәндер файҙаланыу өсөн түләп алынған документ. *Поезд билеты. Трамвай билеты.* **2.** Берәй ойошмала, фирҡәлә ағзалыҡты, вазифаға мөнәсәбәтлекте күрһәткән документ. *Профсоюз билеты. Хәрби билет. Билет алыу.* **3.** Имтихан тапшырғандағы һорауҙар яҙылған ҡағыҙ. *Билеттағы һорау.*

**билмән** *и.* Тапаған, тәмләткестәр ҡушҡан итте йоҡа сөсө ҡамырҙа төрөп һыуҙа бешергән аш. *Билмән яһау. Билмән бешереү.*

**билсән** *и.* Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк япраҡлы ҡый үләне. *Ҡара билсән.*

**биләү[1] (билә-)** *к.* **1.** Ниҙелер үҙ милкендә, үҙ ҡарамағында тотоу. *Ер биләү.* **2.** *күсм.* Кешенең уй, күңелен үҙенә йәлеп итеү. *Күңелде биләү.*

**биләү[2] (билә-)** *к.* Йәш баланы йүргәккә урап бәйләү. *Бала биләү.*

**биләүес** *и.* Йәш баланы аяҡ-ҡулын йыйып, йүргәк тышынан бәйләй торған оҙон сепрәк. *Ебәк биләүес.*

**бимазалау (бимазала-)** *к.* Тынғы бирмәй ҡамасаулау; мәшәҡәтләү, борсоу. *Күршеләрҙе бимазалау. Бимазалап йөрөү.*

**бинокль (биноклде)** *и.* Алыҫтағын яҡынайтып күрһәтә торған ике параллель торбалы оптик прибор. *Театр бинокле. Хәрби бинокль. Биноклдән ҡарау.*

**бинт** *и.* Ауыртҡан, яраланған ерҙе бәйләй торған марля; бәй. *Яраны бинт менән бәйләү.*

**биография** *и.* Кемдеңдер тормош юлын һүрәтләгән яҙма. *З. Вәлиди биографияһы. Биографияны һөйләү.*

**биолог** *и.* Биология буйынса белгес.

**биология** *и.* Тере тәбиғәтте, органик донъяны өйрәнә торған фән. *Биология дәресе.*

**биреү (бир-)** *к.* **1.** Ҡулға тапшырыу, тоттороу. *Асҡыс биреү. Китап биреү.* **2.** Төбәү килештәге исем менән килеп, көс менән ныҡ итеп һуҡҡанды белдерә. *Елкәгә биреү. Яңаҡҡа биреү. Атҡа ҡамсы менән биреү.* **3.** Халыҡ алдында концерт, спектакль һ. б. менән сығыш яһау. *Концерт биреү. Спектакль биреү.* **4.** Эшкә, хеҙмәткә һ. б. тапшырыу. *Уҡырға биреү. Һалдатҡа биреү.* **5.** Ниндәйҙер бер сифатҡа, ҡиәфәткә килтереү. *Ашҡа тәм биреү. Кейемгә төҫ биреү. Тынға олпатлыҡ биреү. Өйгә йәм биреү.*

**бирсәткә** *и.* Биш бармаҡлы ҡул кейеме. *Күн бирсәткә. Йөн бирсәткә. Бирсәткә кейеү.*

**бисура** *и.* Ялбыр һары сәсле ҡурҡыныс ҡатын-ҡыҙ һүрәтендәге мифик зат.

**бисә** *и.* **1.** Ирҙең ғаиләә иптәше; ҡатын, йәмәғәт, иш. *Бисә алыу. Бисә менән йәшәү.* **2.** Иргә барған, ире булған ҡатын-ҡыҙ; ҡатын. *Бисә кеше.*

**бит**[1] *и.* **1.** Кеше башының алғы яғы; йөҙ. *Оҙонса бит. Түңәрәк бит. Бит осо.* **2.** Йөҙҙөң яңаҡ өлөшө, яңаҡ. *Бит алмаһы.* **3.** Тау, ҡалҡыулыҡтың һ. б. һарҡыу өлөшө. *Тау бите.* ♦ **Бит йыртыу** намыҫты рәнйетеү.

**бит**[2] *и.* Китаптағы, дәфтәрҙәге һ. б. ҡағыҙҙың бер яғы. *Дәфтәр бите. Китаптың битен асыу.*

**битһеҙ** *с.* Оялыу, тартыныуҙы белмәгән намыҫһыҙ; ояттһыҙ. *Битһеҙ кеше.*

**бишбармаҡ (бишбармағы)** *и.* Тураған ит менән эре һалманан торған тоҙлоҡло аш; ҡуллама. *Бишбармаҡ бешереү. Бишбармаҡ менән һыйлау.*

**бишек (бишеге)** *и.* **1.** *ҡар.* **сәңгелдәк. 2.** *күсм.* Кемде йәки ниҙелер тыуҙырған, үҫтергән ер. *Тыуған ер – алтын бишек.*

**бишмәт** *и.* Мамыҡты, йөндө һырып тегелгән оҙон итәкле, оҙон еңле йылы өҫ кейеме. *Бишмәт кейеү.*

**боғаҙ** *и.* **1.** Муйындың ҡыҙыл үңәсте һәм боғарлыҡты эсенә алған алғы өлөшө. *Боғаҙҙы быуыу.* **2.** Ике күл йәки диңгеҙҙе бер-береһенә тоташтырып торған тар һыу. ♦ **Боғаҙҙан алыу** нығ ҡыҫыу.

**боҙ** *и.* Туңған һыу. *Күҙгә боҙ. Боҙ китеү.*

**боҙватҡыс** *и.* Боҙҙо ярып йөрөй торған карап.

**боҙлауыҡ (боҙлауығы)** *и.* **1.** Бөрсөк-бөрсөк боҙ булып төшкән яуын. *Боҙлауыҡ яуа.* **2.** Ерҙе ҡаплап туңған боҙ. *Ишек алды боҙлауыҡ.*

**боҙоҡ** *с.* **1.** Берәй механизмы боҙолоп, яраҡһыҙға әйләнгән. *Боҙоҡ сәғәт. Боҙоҡ булыу.* **2.** Зарарланып сифатһыҙға әйләнгән. *Боҙоҡ алма. Боҙоҡ картуф.*

**боҙоу (боҙ-)** *ҡ.* **1.** Төҙөк нәмәне кире таратыу. *Мейесте боҙоу. Өйҙө боҙоу.* **2.** Файҙалана алмаҫлыҡ хәлгә килтереү. *Машинаны боҙоу. Сәғәтте боҙоу. Ҡаршы кеше уйын боҙор, тиҫкәре кеше йыйын боҙор.* (Мәҡәл.) **3.** Насар яҡҡа табан үҙгәртеү. *Кәйефте боҙоу. Холоҡто боҙоу.*

**бойҙай** *и.* Орлоғонан аҡ икмәк һәм башҡа ҡамыр аштары бешереү өсөн он әҙерләй торған башаҡлы үҫемлек һәм шунын орлоғо. *Яҙғы бойҙай. Ужым бойҙайы. Ҡылсыҡлы бойҙай. Бойҙай оно. Бойҙай икмәк.*

**бойоғоу (бойоҡ-)** *ҡ.* Бойоҡ, насар кәйефле булыу. *Бойоғоп йәшәү. Бойоғоп тороу.*

**бойоҡ** *с.* **1.** Күңеле төшөнкө, кәйефе насар булған. *Бойоҡ кеше. Бойоҡ булыу.* **2.** Күңелһеҙлек, төшөнкөлөк сағылған. *Бойоҡ ҡиәфәт. Бойоҡ тауыш.*

**бойороҡ (бойороғо)** *и.* Ниҙелер эшләргә, башҡарырға ҡушҡан ҡәтғи күрһәтмә; әмер. *Бойороҡ биреү. Бойороҡто үтәү.*

**бойороу (бойор-)** *ҡ.* Ниҙелер эшләргә, башҡарырға ҡәтғи рәүештә ҡушыу; бойороҡ биреү.

**бола** *и.* **1.** Бөтә нәмәһе теләһә нисек туҙҙырылған, йыйнаҡ булмаған хәл. *Өй эсе бола.* **2.** Талаш, һуғышлы ғауға. *Бола сығарыу.* **3.** Баҫым, ҡыҫымға ҡаршы күтәрелгән хәрәкәт. *Бола күтәрелеү. Боланы баҫтырыу.*

**болан** *и.* Айыры тояҡлы, тармаҡ мөгөҙлө, көйөшлө эре хайуан. *Болан мөгөҙө. Болан балаһы. Болан аҫрау.*

**болғаҡ** *с.* Ара бутап йөрөй торған. *Болғаҡ кеше.*

**болғансыҡ** *с.* **1.** Ләм, бысраҡ ҡатыш; буръяҡ. *Болғансыҡ йылға. Болғансыҡ һыу.* **2.** *күсм.* Ығы-зығылы, тыныcһыҙ. *Болғансыҡ заман.*

**болғатыу (болғат-)** *ҡ.* **1.** Ни менәндер аҡтарып, аҫтын-өҫкә килтереү; бутау. *Бутҡаны болғатыу.* **2.** Бергә ҡушып аралаштырыу; болғау. *Сәйҙе болғатыу.*

**болғау (болға-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне өҫкә күтәреп тегеләй-былай һелтәү. *Ҡул болғау. Яулыҡ болғау.* **2.** Нимә менәндер аҡтарып, аҫтын-өҫкә килтереү; бутау, болғатыу. *Көлдө болғау. Күмерҙе болғау. Боламыҡ болғау.*

**болон** *и.* Үлән менән ҡапланған асыҡ тигеҙ урын. *Болон бесәне. Болон үләне. Болонда мал көтөү.*

**болот** *и.* Ваҡ ҡына һыу бөртөктәре йәки боҙ кристалдарының бергә тупланыуынан хасил булған атмосфераның түбәнге өлөшөндәге ҡатлам. *Аҡ болот. Ямғыр болото. Ҡар болото. Болот ҡабарыу. Болот таралыу.*

**болотлау (болотла-)** *ҡ.* Болотло булыу, болот ҡаплау. *Көн болотлап тора.*

**бомба** *и.* Һауанан ташлап шартлата торған ҙур туп. *Атом бомбаһы. Бомба ташлау.*

**борғо** *и.* Көслө, сағыу тауышлы, баҫмаҡһыҙ тынлы музыка ҡоралы. *Еҙ борғо.*

**борҡотоу (борҡот-)** *ҡ.* **1.** Борҡ итеп осороу, ҡуйы итеп бөркөү. *Йөн борҡотоу. Саң борҡотоу.* **2.** Көслө итеп аңҡытыу. *Хушбуй еҫен борҡотоу.*

**борҡоу (борҡо-)** *к.* **1.** Борҡ итеп осоу, ҡуйы булып бөркөлөү. *Борҡоп сыҡҡан ҡара төтөн.* **2.** Бик ныҡ аңҡыу. *Кейеменән бензин еҫе борҡоп тора.*

**боролма** *и.* Һыуҙың, юлдың боролған урыны; бөгөл. *Юл боролмаһы.*

**боролоу (борол-)** *к.* **1.** Башты, кәүҙәне бороу; әйләнеү. *Артҡа боролоу. Боролоп ултырыу.* **2.** Йүнәлеште ҡырҡа үҙгәртеү. *Боролоп кире ҡайтып китте.*

**боронғо** *с.* Бик күптән булған, борон замандан һаҡланған. *Боронғо йолалар. Боронғо ҡульяҙма.*

**борос** *и.* **1.** Тропик үҫемлек һәм шул үҫемлектең әсе орлоғо. *Ҡара борос. Борос үҫтереү.* **2.** Ҡырҡыу тәмле йәшелсә, уның ҡуҙаҡлы орлоғо һәм онтағы. *Болгар боросо. Ҡыҙыл борос. Әсе борос.*

**борослау (боросла-)** *к.* Борösло итеү; борос һалыу. *Ашты борослау.*

**бороу (бор-)** *к.* **1.** Бер урында өйрөлтөп әйләндереү. *Асҡысты бороу. Шөрөптө бороп индереү.* **2.** Бер урында әйләндереп, икенсе тарафҡа ҡаратыу. *Башты бороу. Кәүҙәне бороу.* **3.** Йүнәлешен үҙгәртеү. *Машинаны бороу. Атты бороу.*

**борсаҡ**[1] **(борсағы)** *и.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, баҡсала йәки яланда үҫтерелә торған йомро орлоҡло бер йыллыҡ үҫемлек һәм шунын ашай торған орлоғо. *Борсаҡ сәсеү. Борсаҡ сабыу. Борсаҡ буtҡаһы. Борсаҡ ҡурыу.*

**борсаҡ**[2] **(борсағы)** *и.* Йомро боҙ рәүешендәге яуым-төшөм. *Борсаҡ яуыу. Игенде борсаҡ һуҡҡан.*

**борсолоу (борсол-)** *к.* **1.** Тыныслыҡты юғалтыу, тыныcһыҙланыу. *Бала өсөн борсолоу.* **2.** Ыҙа сигеү; мәшәҡәтләнеү. *Оҙата сығып, борсолмағыҙ.*

**борсоу**[1] **(борсо-)** *к.* **1.** Хафаға һалыу, хафаландырыу. *Әсәйҙе борсоу.* **2.** Мәшәҡәт һалып тынғыһыҙлау; маҙаһыҙлау. *Төрлө һорауҙар менән борсоу.*

**борсоу**[2] *и.* Тынғыһыҙлыҡ; мәшәҡәт; хафа. *Борсоу һалыу. Борсоуға төшөү.*

**боҫ** *и.* **1.** Газ хәленә килгән шыйыҡлыҡ; быу, пар. *Картуф боҫо. Боҫ борҡолоу.* **2.** Йылы һәм һыуыҡ һауа аралашыуҙан барлыҡҡа килгән ҡуйы аҡ быу. *Тышҡы ишектән боҫ инеп тора.*

**боҫоу (боҫ-)** *к.* **1.** Башты, кәүҙәне аҫҡа баҫып йәшенеү. *Боҫоп ултырыу. Боҫоп ятыу.* **2.** *күсм.* Шым булып, ситтә ҡалыу; ҡасыу. *Көрәштән боҫоп ҡалыу.*

**бот**[1] *и.* Аяҡтың тубыҡтан юғары өлөшө. *Бот ите. Бот һөйәге. Бот ауыртыу.*

**бот**[2] *и.* Ун алты килограмға торошло ауырлыҡ үлсәү берәмеге. *Бер бот бал. Ике бот он.*

**ботаҡ (ботағы)** *и.* Үсемлек һабағынан сыҡҡан үсенте. *Ағас ботағы. Ботаҡҡа элэгеү. Ботаҡ ҡырҡыу. Ботаҡ сығыу.*

**ботаника** *и.* Үсемлектәрҙе өйрәнә торған фән. *Ботаника дәресе. Ботаника аҡсаһы.*

**ботарлау (ботарла-)** *ҡ.* **1.** Бот, ҡанатын, һөйәк-һаяғын айырғылау. *Түшкәне ботарлау.* **2.** Ботаҡтарын айырыу, һындырғылау. *Муйылды ботарлау.*

**ботау (бота-)** *ҡ.* Ҡырҡып ботаҡтан таҙартыу. *Ағас ботау.*

**ботинка** *и.* Ҡыҫҡа ҡуныслы, баулы йәки замоклы аяҡ кейеме. *Кун ботинка. Ботинка теле. Ботинка кейеү.*

**бошонҡо** *с.* Кәйефе булмаған, күңеле төшөнкө; бойоҡ. *Бошонҡо кеше. Бошонҡо йөрөү.*

**бошоноу (бошон-)** *ҡ.* Күңелһеҙ тойғоға бирелеү, күңелһеҙләнеү. *Бошоноп ултырыу.*

**бошоу (бош-)** *ҡ.* Күңелһеҙ тойғоға бирелеү, хәсрәтләнеү, ҡайғырыу. *Бошма, ул хәҙер килер.* ♦ **Эс бошоу** 1) юҡһынып, һағынып яманһыуланыу; 2) асыу килеү, йән көйөү.

**бөгөл** *и.* Һыуҙың, юлдың боролған ере; боролма. *Юл бөгөлө.*

**бөгөлөү (бөгөл-)** *ҡ.* **1.** Һығылып кәкрәйеү. *Таяҡ яҡшы бөгөлә.* **2.** Быуын тәңгәленән ҡуҙғалыу. *Аяҡ бөгөлөү. Бил бөгөлөү.* **3.** Ос йәки баш яҡ менән аҫҡа ҡарай иңкәйеү; эйелеү. *Ағас елгә бөгөлә.*

**бөгөн** *р.* Ошо, әлеге көн; был көн. *Бөгөн кис. Бөгөн төндә. Бөгөндән алып.*

**бөгөнгө** *с.* Ошо, әлеге көнгө. *Бөгөнгө газета. Бөгөнгө эш.*

**бөгөү (бөк-)** *ҡ.* **1.** Кәкре хәлгә килтереү; кәкрәйтеү. *Ағасты бөгөү. Дуға бөгөү.* **2.** Быуын тәңгәленән ҡуҙғалтыу. *Аяҡты бөгөү. Тубыҡты бөгөү.* **3.** *күсм.* Һыҡлығын ҡаҡшатыу; бирештереү. *Ауырыу кешене бөгә.* **4.** Ситен ҡайтарып тегеү. *Күлдәк итәген бөгөү. Яулыҡ ситен бөгөү.*

**бөгәр** *и.* Тубыҡтың бөгөлгән аҫ яғы. *Аяҡты бөгәр тәңгәленән бәйләү.*

**бөгәрләнеү (бөгәрлән-)** *ҡ.* **1.** Сит-сите эскә ҡайтарылыу; төрөлөү. *Һыуыҡҡа япраҡтар бөгәрләнгән.* **2.** Дүңгәләкләнеп йомарланыу; уралыу. *Бөгәрләнеп ятҡан йылан.*

**бөгәрләү (бөгәрлә-)** *ҡ.* Сит-ситен эскә ҡайтарыу; төрөү. *Газетаны бөгәрләп алыу.*

**бөгәсә** *р.* Бөгөн төндә. *Бөгәсә ямғыр яуҙы.*

**бөҙрә** *с.* **1.** Дүңгәләкләнеп төрөлөп-төрөлөп торған (сәскә ҡарата). *Бөҙрә сәс.* **2.** Ҡабарып, уралып-уралып торған. *Бөҙрә болот. Бөҙрә төтөн.* **3.** Ҡабарып торған ҡуйы япраҡлы. *Бөҙрә ҡайын. Бөҙрә тал.*

**бөжәк (бөжәге)** *и.* Быуынтыҡ аяҡлы, умыртҡаһыҙ ваҡ ҡына йән эйәһе. *Зарарлы бөжәктәр. Файҙалы бөжәктәр.*

**бөйөк** *с.* Әһәмиәте, тотҡан урыны, дәрәжәһе ҙур булған; оло. *Бөйөк ваҡиға. Бөйөк Ватан һуғышы. Бөйөк ғалим. Бөйөк яҙыусы.*

**бөйөр** *и.* **1.** Бәүел айырып сығара торған ҡуш ағза. *Уң бөйөр. Һул бөйөр. Бөйөр ташы.* **2.** Кәүҙәнең шул ағза тәңгәлендәге урыны. *Бөйөргә таяныу. Бөйөр тапҡыры.*

**бөкләү (бөклә-)** *ҡ.* **1.** Сит-ситен бөгөп, кирегә ҡайтарыу. *Ҡағыҙҙы бөкләү.* **2.** Быуын тәңгәленән бөгөп үҙенә тартыу. *Аяҡты бөкләп ултырыу.*

**бөкө** *и.* Мискәнең һ. б. тығыны.

**бөкрө** *с.* **1.** Арҡаһы сыҡҡан; бөкөс. *Бөкрө кеше.* **2.** *и.* Арҡаның сурайып сыҡҡан ере. *Бөкрөһө сыҡҡан.*

**бөлгөнлөк (бөлгөнлөгө)** *и.* Етешһеҙ тормош; ярлылыҡ. *Бөлгөнлөккә төшөү. Бөлгөнлөктә йәшәү.*

**бөлөү (бөл-)** *ҡ.* **1.** Бөлгөнлөккә төшөү. *Ауыл бөлөп ҡалған.* **2.** Ауырлыҡҡа бирешеү. *Ауырыуҙан һуң ныҡ бөлдөм.*

**бөркөт** *и.* **1.** Ыласындар ғаиләһенә ҡараған иң эре йыртҡыс ҡош. *Дала бөркөтө. Тау бөркөтө. Бөркөт балаһы. Бөркөт ояһы.* **2.** *күсм.* Ҡыйыу, көслө кешегә ҡарата әйтелә.

**бөркөү[1] (бөрк-)** *ҡ.* **1.** Шыйыҡсаны ауыҙға алып өрөп борҡотоу. *Хушбуй бөркөү.* **2.** Көслө итеп борҡотоу; ныҡ аңҡытыу. *Һаҙлыҡ дымлы еҫ бөркөп тора.*

**бөркөү[2]** *с.* Һауаһы ауыр; тынсыу. *Бөркөү бүлмә. Көн бөркөү.*

**бөркәнеү (бөркән-)** *ҡ.* **1.** Башты тотош ҡаплап ябыныу. *Юрған бөркәнеү. Бөркәнеп ятыу.* **2.** Башҡа ябыныу. *Ҡушъяулыҡ бөркәнеү. Шәл бөркәнеү.*

**бөркәү (бөркә-)** *ҡ.* Баштан аша ҡаплап ябыу. *Юрған менән бөркәп ятҡырыу.*

**бөрлөгән** *и.* **1.** (*йәки* **ҡара бөрлөгән**). Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскеле үрмә һабаҡлы туғай үҫемлеге һәм шунын емеше. *Бөрлөгән һабағы. Бөрлөгән сәскәһе. Бөрлөгән йыйыу.* **2.** (*йәки* **ҡыҙыл бөрлөгән**) Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған өсәр-өсәр япраҡлы урман үҫемлеге һәм шунын емеше. *Ҡыҙыл бөрлөгән сәскәһе. Ҡыҙыл бөрлөгән һуты.*

**бөрө** *и.* Үҫемлектең япраҡҡа тумалған бәбәге. *Ағас бөрөһө. Бөрө ярыу.*

**бөрсә** *и.* **1.** Һикереп йөрөй торған ваҡ ҡына ҡан һурғыс паразит бөжәк. . *кусм.* Бәләкәй кәүҙәле етеҙ кешегә әйтелә. ♦ **Ут бөрсәһе** бәләкәй кәүҙәле бик теҙ кеше.

**бөртөк (бөртөгө)** *и.* **1.** Бер төрлө ваҡ өлөшсәләрҙән торған нәмәнең берәмеге. *оиҙай бөртөгө. Ҡар бөртөгө. Тары бөртөгө.* **2.** Һанау-иҫәпләү берәмеге. *Өс өртөк бала. Ике бөртөк аҡ сәс.*

**бөртөклө** *с.* Бөртөк-бөртөк булып таралып торған, бөртөктәрҙән торған. *өртөклө ашлыҡ. Бөртөклө сәй.*

**бөтмөр** *с.* Эште ентекләп, урынына еткереп эшләүсән. *Бөтмөр кеше.*

**бөтөн** *с.* **1.** Киләме, дәүмәле кәмемәгән; теүәл. *Бөтөн алма. Бөтөн икмәк.* . Иҫкереп эштән сыҡмаған; туҙмаған, төҙөк. *Кәртә-ҡураһы бөтөн. Өҫ-башы өтөн.* **3.** Кәсергә бүленмәгән; теүәл. *Бөтөн һан.*

**бөтөнләй** *р.* **1.** Бөтөн көйө; тулы килеш. *Бөтөнләй ҡабыу.* **2.** Тулыһы менән; отош, тулыһынса. *Бөтөнләй үҙгәреү. Бөтөнләй шәбәйеү.* **3.** Бик нык; тамам. *өтөнләй шашып китеү. Бөтөнләй яҡын.*

**бөтөрөү (бөтөр-)** *ҡ.* **1.** Аҙағына еткереү; тамамлау. *Уҡыуҙы бөтөрөү. Эште өтөрөү.* **2.** Кәметә-кәметә юҡ итеү; тамам итеү. *Аҙыҡты бөтөрөү. Һыуҙы өтөрөү.* **3.** Сик ҡуйыу; туҡтатыу. *Бәхәсте бөтөрөү. Һуғышты бөтөрөү.* **4.** Тар-ар итеү; юҡ итеү. *Дошманды бөтөрөү.* **5.** Зыян килтереү; эшлектән сығарыу. *аулыҡты бөтөрөү. Шәм яҡтыһы күҙҙе бөтөрә.*

**бөтөү (бөт-)** *ҡ.* **1.** Аҙағына етеү, тамам булыу. *Ай бөттө. Ултырыш бөттө. ш бөттө.* **2.** Кәмей-кәмей юҡ булыу; тамам булыу. *Аҙыҡ бөтөү. Аҡса бөтөү.* . Тар-мар булыу; юҡҡа сығыу. *Дошман бөттө.* **4.** Яраҡһыҙ хәлгә килеү, шлектән сығыу. *Күп уҡыуҙан күҙҙәрем бөттө.*

**бөхтә** *с.* **1.** Эшкә, донъя көтөүгә тәрбиәле, йыйнаҡ, таҙа. *Бөхтә кеше. өхтә булыу.* **2.** Тышҡы күренеше, ҡиәфәте матур, ыҫпай. *Бөхтә кейем. Бөхтә ейенеү.*

**бригада** *и.* Билдәле бер эш башҡарған төркөм. *Комплекслы бригада. өҙөлөш бригадаһы. Поезд бригадаһы.*

**бригадир** *и.* Бригада етәксеһе. *Төҙөүселәр бригадиры.*

**буҙа** *и.* Һоло, арпа йәки бойҙай ярмаһынан ҡайнатып яһалған эсемлек. *уҙа ҡойоу.*

**буй** *и.* **1.** Нәмәнең оҙонлоҡҡа булған һуҙымы; оҙонлоҡ. *Буйы бер метр. уйға үлсәү.* **2.** Кешенең йәки берәй нәмәнең бейеклеккә булған үлсәме; ейеклек. *Буйға үҫеү. Дөйәләй буйың булғансы, төймәләй аҡылың булһын.* Эйтем.)

**буйлау (буйла-)** *к.* **1.** Буй йүнәлештә хәрәкәт итеү. *Яландарҙы буйлау.* **2.** Үрмәләп менеү. *Арҡан буйлау.*

**буйһоноу (буйһон-)** *к.* **1.** Кемдеңдер хакимлығы алдында баш эйеү; теҙ сүгеү. *Хужаға буйһоноу.* **2.** Кемдеңдер иркенә, ниҙеңдер яйына күнеү. *Законға буйһоноу. Тәртипкә буйһоноу.* **3.** Ниндәйҙер бер етәкселек аҫтында булыу. *Урындағы советтарға буйһонған ойошма.*

**булат** *и.* Ҡорал өсөн ҡойолған боронғо ҡорос. *Уҡ башын булаттан ҡойоу. Булат хәнйәр.*

**булдыҡлы** *с.* Ҡулынан эш килгән, эшкә уңған; эшлекле. *Булдыҡлы кеше.*

**булдырыу (булдыр-)** *к.* **1.** Барлыҡҡа, ғәмәлгә килтереү; бар итеү. *Аҡса булдырыу. Бәйләнеш булдырыу.* **2.** Эшкәртә-эшкәртә тейешле сифатҡа еткереү. *Балсыҡты булдырыу. Ҡамырҙы булдырыу.*

**булыу (бул-)** *к.* **1.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, берәй нәмәнең барлығын, эш-хәлдең ғәмәлгә ашасағын белдерә. *Аҡса булды. Дәрес була. Эргәлә кеше булды. Тауҙа йылан була. Туй буласаҡ.* **2.** Ваҡыты етеү; башланыу. *Йәй булды. Кис булды. Төн булды.* **3.** Ниндәйҙер бер сифатҡа өлгәшеү. *Егет булыу. Табип булыу. Булыр бала биләүҙән.* (Әйтем.) **4.** Берәй эш менән шөғөлләнеү. *Уҡыу менән булыу. Хужалыҡ менән булыу.* **5.** Маҙаһына тейеү. *Кеше менән булыу. Юҡ менән булыу.*

**бумала** *и.* Буяу, таҙартыу өсөн ҡулланылған ҡыл йәки йүкә суҡ.

**бур** *и.* Аҡ төҫтәге эзбиз ташы. *Бур менән яҙыу.*

**бура** *и.* **1.** Бүрәнәләрҙең баш-башын киртеп, өҫтө-өҫтөнә һалып күтәргән ҡоролма. *Ҡоҙоҡ бураһы. Өй бураһы. Бура бурау.* **2.** Келәттә ашлыҡ, он кеүек нәмә һалыу өсөн бүлеп ҡуйылған урын. *Иген бураға һалынды.*

**бураҙна** *и.* Ер һөргәндә һабан йырған эҙ. *Бураҙна ярыу.*

**бураҙналау (бураҙнала-)** *к.* Бураҙна һалыу. *Ерҙе бураҙналау.*

**буран** *и.* Ойоҡһотоп өргән ҡарлы ел. *Епшек буран. Әсе буран. Буран сығыу. Буран тымыу.*

**бурау (бура-)** *к.* Бүрәнәләрҙе өҫтө-өҫтөнә һалып күтәргән ҡоролма. *Өй бурау.*

**бурбай** *и.* Аяҡтың бөгәрҙән түбән яғындағы йыуан ите, балтыр.

**бурһыҡ (бурһығы)** *и.* Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙонса башлы, осло томшоҡло, йыуан кәүҙәле, ҡыҫҡа ҡойроҡло, шырт йөнлө йыртҡыс йәнлек. *Бурһыҡ майы. Бурһыҡҡа һунар итеү.*

**буръяк** *с.* Ком, балсыҡ ҡатнашып болғанған; болғансыҡ. *Буръяк һыу.*

**бурыс** *и.* **1.** Үтәлеүе мотлаҡ булған намыҫ эше. *Изге бурыс. Бурысты үтәү.* . Алға ҡуйылған маҡсат. *Бурыс итеп алыу. Бурысты аңлатыу.* **3.** Кире ҡайта-ыу шарты менән алынған аҡса йәки нәмә; үтес. *Бурысҡа алыу. Бурысҡа биреү. Бурысты түләү.*

**буталсыҡ** *с.* Билдәле бер тәртибе юғалған; сыуалсыҡ. *Буталсыҡ төш. Буталсыҡ уйҙар.* **2.** Эҙмә-эҙлекһеҙ, аңлайышһыҙ. *Буталсыҡ тормош. Буталсыҡ эш.*

**бутау (бута-)** *ҡ.* **1.** Аҫтын-өҫкә килтереү; аҡтарыу. *Йәшник эсен бутау.* . Болғап аралаштырыу; болғатыу. *Бутҡаны бутау.* **3.** Мөнәсәбәтте боҙоу; болартыу. *Араны бутау. Ғаиләне бутау.* **4.** Эҙмә-эҙлектән яҙҙырыу; сыуалтыу. *Фекерҙе бутау. Башты бутау.* **5.** Үҙ-ара яңылыштырыу. *Исемдәрен бутау.*

**бутҡа** *и.* **1.** Ярманы һөткә йәки һыуға һалып бешергән ашамлыҡ. *Дөгө бутҡаһы. Бутҡа ашау.* **2.** Болғанып, иҙелеп ятҡан нәмә. *Аяҡ аҫты бутҡаға әйләнгән.*

**бухгалтер** *и.* Аҡса, етештерелгән нәмә эшендә иҫәп-хисап алып барыусы белгес. *Баш бухгалтер. Бухгалтер булып эшләй.*

**буш** *с.* **1.** Эсендә бер кем дә йәки бер нәмә лә булмаған. *Буш аҙбар. Буш лоҡ. Буш һауыт. Буш урын. Буш тороу.* **2.** Эш-шөғөл менән мәшғүл булмаған; эшһеҙ. *Буш ваҡыт. Буш кеше. Буш йөрөү.* **3.** Хаҡ түләтелмәгән; түләүһеҙ. *Буш бирелгән мал. Буш эшләү.* **4.** *күсм.* Нигеҙендә дөрөҫлөк булмаған; ялған. *Буш хәбәр. Буш һүҙ.* **5.** *күсм.* Бер ниндәй ҙә файҙа килтермәгән, файҙаһыҙ. *Буш хеҙмәт. Буш мәҡәлә. Буш әҫәр.* ♦ **Бушты бушҡа бушатыу** файҙаһыҙ эш менән шөғөлләнеү.

**бушатыу (бушат-)** *ҡ.* **1.** Эсен буш ҡалдырыу. *Вагонды бушатыу. Һауытты бушатыу.* **2.** Йөктәге нәмәне алыу, икенсе ергә ҡуйыу. *Картуфты бушатыу. Утынды бушатыу.* **3.** Икенсе ергә күсенеп, буш ҡалдырыу. *Фатирҙы бушатыу.* . Эш урынынан алыу; урынынан төшөрөү. *Эшенән бушатыу.*

**бушау (буша-)** *ҡ.* **1.** Буш ҡалыу, бушҡа әйләнеү. *Урам бушаны. Һандыҡ бушаны.* **2.** Йөгө алынып, йөкһөҙ ҡалыу. *Бушаған вагон.* **3.** Хужаһыҙ, буш ҡалыу. *Йорт бушаны. Бушаған урын.* **4.** Эш-шөғөлдән арыныу. *Донъя мәшәҡәттәренән бушау.*

**бушҡа** *р.* **1.** Һис бер файҙаһыҙға, кәрәкһеҙгә. *Бушҡа аҡса түгеү.* **2.** Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ; юҡҡа. *Бушҡа ҡайғырыу.*

**бушлай** *р.* Бер ниндәй хаҡһыҙ, буш көйө. *Бушлай алыу.*

**бушлыҡ (бушлығы)** *и.* **1.** Бер нәмәһе лә булмаған буш, киң арауыҡ. *Дала бушлығы.* **2.** Эсе буш, ҡыуыш урын. *Мәмерйә бушлығы.* **3.** *күсм.* Бошонҡолоҡ тойғоһо. *Күңел бушлығы.*

**буялыу (буял-)** *ҡ.* Тейеп бысрау. *Ҡоромға буялыу. Өҫ буялыу.*

**буяныу (буян-)** *ҡ.* Биткә, күҙгә буяу яғыу; биҙәнеү. *Буянып ултырыу.*

**буяу**[1] **(буя-)** *ҡ.* **1.** Буяу менән ҡаплау, буяу һеңдереү. *Иҙәнде буяу. Күлдәкте буяу. Сәсте буяу.* **2.** Нимә менәндер бысратыу. *Кейемде майға буяу.*

**буяу**[2] *и.* Нәмәгә ниндәйҙер төҫ бирә торған матдә. *Иҙән буяу. Йөн буяу.*

**бүҙәнә** *и.* Һорғолт сыбар төҫлө, оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, күгәрсен ҙурлығындағы ялан ҡошо; бытбылдаҡ. *Ата бүҙәнә. Инә бүҙәнә.*

**бүкән** *и.* Бүрәнәнән бысып алып ултыртылған ҡыҫҡа түмәр, бағана. *Итте бүкәндә сабалар. Нигеҙ бүкәне. Бүкән ултыртыу.*

**бүлек (бүлеге)** *и.* **1.** Бөтөндөң бүленгән бер өлөшө. *Сумка бүлеге. Шкаф бүлеге.* **2.** Китаптың, газетаның үҙенә башҡа бер йүнәлешле өлөшө. *Китаптың тәүге бүлеге. Газетаның юмор бүлеге.* **3.** Төрлө тамашаның айырым бер өлөшө. *Концерттың икенсе бүлеге.*

**бүлендек (бүлендеге)** *и.* Бер һанды икенсе бер һанға бүлгәндән барлыҡҡа килгән һан.

**бүленеүсе** *и.* Икенсе бер һанға бүленә торған һан. *Уртаҡ бүленеүсе.*

**бүлеү**[1] **(бүл-)** *ҡ.* **1.** Бөтөндө өлөштәргә айырыу. *Ҡарбуз бүлеү. Аш бүлеү.* **2.** Араға ниҙер ҡуйып айырыу. *Бүлмә бүлеү. Өйҙө таҡта менән бүлеү.*

**бүлеү**[2] *и.* Бер һанды икенсе һан иҫәбенә бүлеүҙән ғибәрәт булған математик ғәмәл. *Бүлеү билдәһе. Бүлеү ғәмәле.*

**бүлеүсе** *и.* Икенсе бер һанды бүлә торған һан. *Иң ҙур уртаҡ бүлеүсе.*

**бүлкә** *и.* **1.** Бер бөтөн нәмәнең айырым өлөшө; бүлек. *Портфелдең бер бүлкәһе. Тартма бүлкәһе.* **2.** Һыу йәки һауа карабындағы айырым герметик бүлмә.

**бүлкәт** *и.* **1.** Ер йөҙөнөң ике меридиан араһындағы өлөшө. *Бүлкәт ваҡыты.* **2.** Ер йөҙөнөң айырым бер климатик зонаны тәшкил иткән өлөшө. *Уртаса бүлкәт. Һыуыҡ бүлкәт.*

**бүлмә** *и.* Өйҙөң, бинаның стена менән бүленгән айырым өлөшө. *Йоҡо бүлмәһе. Эш бүлмәһе.*

**бүләк (бүләге)** *и.* Кемгәлер ниндәйҙер тантана уңайы менән хөрмәтләп бирелгән нәмә. *Иҫтәлекле бүләк. Ҡәҙерле бүләк. Бүләк биреү. Бүләк алыу.*

**бүләкләү (бүләклә-)** *к.* Бүләк биреү. *Миҙал менән бүләкләү.*

**бүре** *и.* Эт нәҫеленән булған ҡырағай йәнлек; *Ата бүре. Бүре балаһы. Бүре ө. Бүре һунары.* ♦ **Ҡарт бүре** күпте күреп, йышылған кешегә ҡарата әйтелә. **тә (ас) бүреләр олоу** бик ныҡ асығыу.

**бүрек (бүрке)** *и.* **1.** Һырып, тышлап тегелгән баш кейеме. *Ҡама бүрек. олаҡсынлы бүрек. Бүрек кейеү.* **2.** Ҡайһы бер ҡоштарҙың түбәһендәге өлтәйеп рған йөнө; супай. *Бүрекле тауыҡ.*

**бүрәнә** *и.* Ҡырҡып боталған оҙон йыуан ағас. *Бүрәнә башы. Таҡта бүрәнәһе. рәнә күпер.* ♦ **Бүрәнә аша бүре күреү** белмәгән, күрмәгән көйө белгән булып йләү.

**бүҫер** *и.* Эс итен тишеп, тире араһына бүлтәйеп эсәк сыға торған ауырыу; ҫер ҡалҡыу. Бүҫер имләтеү.*

**бүҫкә** *с.* Тулынан ҡайтыш, тулыр-тулмаҫ. *Бүҫкә һауыт. Бүҫкә итеп ҡойоу.*

**бүтән** *с.* **1.** Икенсе төрлө; башҡа. *Бүтән кеше. Бүтән һүҙҙәр әйтеү.* **2.** *р.* ынан ары, бынан башҡа; башҡа. *Бүтән бармайым.*

**бығау** *и.* **1.** Тотҡондағы кешеләрҙең аяҡ-ҡулына кейҙерә торған тимер ршау. *Бығау һалыу.* **2.** Яланға ебәрелгән аттың алғы аяғына кейҙереп ҙаҡлай торған тимер тышау. *Бығау асҡысы.*

**бығаулау (бығаула-)** *к.* Бығау менән ҡоршау. *Аяҡты бығаулау.*

**быҙау** *и.* **1.** Ярты йәшкә тиклемге һыйыр малы; *Орғасы быҙау. Быҙаулы йыр.* **2.** *кусм.* Йомшаҡ, йыуаш кешегә ҡарата хурлап әйтелә.

**быҙаулау (быҙаула-)** *к.* Быҙау килтереү. *Һыйыр быҙауланы.*

**быйма** *и.* Йөндән баҫылған ҡуныслы ҡышҡы аяҡ кейеме. *Калушлы быйма. йма баҫыу. Быйма кейеү. Быйма төпләү.*

**быйыл** *р.* Ошо йыл. *Быйыл ҡыш һыуыҡ булды.*

**был (бының, быға, бынан, бында;** күпл. **былар)** *а.* **1.** Нимәгәлер айырып рһәтеү йәки билдәләү өсөн ҡулланыла. *Был кеше. Бында үтте бала саҡ.* Билдәле бер нәмәгә, затҡа тоҫҡап, зат алмашы урынына килә. *Бер бабай нән бер әбей йәшәгән, ти. Быларҙың берҙән-бер ҡыҙҙары булған, ти.*

**былай** *р.* **1.** Был рәүешле. *Былай илама. Былай ярамай.* **2.** Был яҡҡа. *Былай тәбеҙ. Былай ҡара.*

**былау** *и.* Дөгө менән иттән махсус ысул менән бешерелгән ашамлыҡ.

**былбыл** *и.* Турғайҙар төркөмөнә ҡараған һорғолт төҫтәге бик матур һайрай рған бәләкәй генә күсәр ҡош; һандуғас.

**былтыр** *р.* Үткән йыл. *Былтыр уҡырға инде.*

**бында** *р.* **1.** Был урында, ошо ерҙә; ошонда. *Бында йоҡлау. Бында эшләү.* **2.** Ошо урынға, ошо ергә. *Бында килегеҙ. Бында ҡайтығыҙ.*

**бындай** *а.* Ошоға оҡшаған, ошоноң кеүек. *Бындай ерҙе күргәнем юҡ.*

**бырау** *и.* Бороп тишек тишә торған ҡорал.

**бысаҡ (бысағы)** *и.* Ҡырҡыу, турау, телеү өсөн ҡулланылған, ҡыҫҡа һаплы, йоҡа йөҙлө үткер ҡорал. *Икмәк бысағы. Ит бысағы. Бысаҡ йөҙө. Бысаҡ һырты. Бысаҡ үткерләү. Ит турағыс бысағы.* ♦ **Бысаҡҡа бысаҡ килеү** нығ талашыу, яманлашыу.

**бысҡы** *и.* Ағас, тимер, таш ҡырҡа торған үткер тешле ҡорал. *Арҡыры бысҡы. Буй бысҡы. Бысҡы теше. Ҡул бысҡыһы.*

**бысраҡ**[1] **(бысрағы)** *и.* **1.** Һыуға ебегән тупраҡ; батҡаҡ. *Бысраҡҡа батыу.* **2.** Яғылып, һеңеп бысратҡан нәмә; кер. *Ең осона бысраҡ ҡатҡан.* **3.** *күсм.* Ялғанға ҡоролған ҡылыҡ; алдаҡ, насарлыҡ. *Бысраҡ ташлау.*

**бысраҡ**[2] *с.* **1.** Ебеп, иҙелеп ятҡан. *Бысраҡ урам. Бысраҡ юл.* **2.** Кер тейеп ҡарайған; керләнгән. *Бысраҡ кейем.*

**бысраныу (бысран-)** *ҡ.* **1.** Бысраҡҡа буялыу. *Батҡаҡҡа бысраныу.* **2.** *күсм.* Насар, намыҫһыҙ эшкә ҡатнашыу. *Юҡҡа бысраныу.*

**бысратыу (бысрат-)** *ҡ.* **1.** Аяҡ аҫтын еүешләп батҡаҡҡа әйләндереү. *Аяҡ аҫтын бысратыу.* **2.** Бысраҡ тейҙереү, бысраҡлау. *Китапты бысратыу. Күлдәкте бысратыу.*

**бысыу (быс-)** *ҡ.* Бысҡы менән ҡырҡыу. *Утын бысыу. Бысып төшөрөү.*

**быҫҡаҡ** *с.* Йай ғына яуып торған, ваҡ ҡына күҙле. *Быҫҡаҡ ямғыр.*

**быҫҡаҡлау (быҫҡаҡла-)** *ҡ.* Ваҡ ҡына күҙле булып йай ғына һибәләү. *Быҫҡаҡлап яуыу.*

**быҫҡыу (быҫҡы-)** *ҡ.* **1.** Ялҡынһыҙ ғына төтәү. *Быҫҡып яныу.* **2.** *күсм.* Бик һүлпән, дәртһеҙ булыу. *Өйҙә быҫҡып ятыу.*

**бытбылдыҡ (бытбылдығы)** *и.* Һорғолт сыбар төҫлө, оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡа ғына ҡойроҡло, күгәрсен ҙурлығындағы ялан ҡошо; бүҙәнә.

**быу** *и.* **1.** Еүеш нәмәнән земберләп күтәрелгән шыйыҡ томан. *Быу бөркөү. Быу күтәрелеү.* **2.** Ҡайнар һыуҙан күтәрелгән боҫ. *Быуға тотоу.* **3.** Йыш ҡына йылы һауа менән һыуыҡ һауа аралашҡанда хасил булған аҡ томан. *Ишектән быу сығып тора.*

**быуа** *и.* **1.** Быуып яһаған һыу һаҡлағыс. *Тирмән быуаһы.* **2.** Шул һыу һаҡлағысты тотоу өсөн ағас, таш менән нығытып яһалған кәртә. *Быуа быуыу.* ♦ **Быуа быуырлыҡ** бик күп.

**быуат** *и.* **1.** Йөҙ йыл иҫәбе менән йөрөтөлгән ваҡыт арауығы. *Ярты быуат.* **2.** Билдәле бер тарихи осор. *Таш быуаты. Урта быуаттар.*

**быуын**[1] *и.* **1.** Кеше, шулай уҡ хайуан организмындағы һөйәктәрҙең йәки кимерсәктәрҙең бер-береһенә тоташҡан урыны. *Бармаҡ быуыны. Быуын сығарыу. Быуын ултыртыу.* **2.** *күсм.* Тәндә булған көс; хәл. *Быуын бөтөү. Быуын ҡалмау.* **3.** Башаҡлылар һабағының йәки ҡайһы бер үҫемлектәр олононоң йөй менән бүленеп торған бер өлөшө; быуынтыҡ. *Бер быуынға ҡалҡты бойҙайҙар.* **4.** Сикләүһеҙ унарлы кәсерҙәге ҡабатланып килгән һандар төркөмө. *Оҡшаш быуындарҙы берләштереү.* ♦ **Быуыны йомшаҡ** эшкә булдыҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Быуынға төшөү** 1) хәлде алыу, хәлһеҙ итеү; 2) ныҡ йәнгә тейеү.

**быуын**[2] *и.* **1.** Туғанлыҡ дәрәжәһендә бер үк кимәлдә торған кешеләр. **2.** Бер осорҙа йәшәгән кешеләр. *Бер быуын кешеләре. Йәш быуын.*

**быуыу (быу-)** *ҡ.* **1.** Бау йәки башҡа нәмә менән уратып бәйләү. *Билгә ҡайыш быуыу.* **2.** Берәй нәмәнең хәрәкәтен кәртәләү. *Йылғаны быуыу. Яман тыуыр, юлды быуыр.* (Әйтем.) **3.** Ныҡ ҡыҫып, тын юлын ҡаплау. *Муйындан быуыу. Быуып алыу.*

**бышҡырыу (бышҡыр-)** *ҡ.* Танауҙан һауа өрөү (атҡа, боланға ҡарата).

**быяла** *и.* Кварц ҡомон иретеп, махсус ысул менән эшкәртеп яһаған үтә күренмәле ҡаты матдә. *Аҡ быяла. Күҙлек быялаһы. Быяла иретеү.*

**бәбәк (бәбәге)** *и.* **1.** Үҫә торған һәр нәмәнең башланғыс яралғыһы. *Үҫемлек бәбәге.* **2.** Сәскәнең үҙәгендәге емешлек.

**бәй** *и.* **1.** Нимәгәлер бәйләү йәки ҡуша нығытыу өсөн файҙаланылған еп; бау. *Ҡыл бәй. Сүс бәй.* **2.** Мал-тыуарҙы, эт-ҡошто бәйләй торған арҡан йәки сынйыр; бау. *Бәйгә ҡуйыу. Бәйҙәге эт.* ♦ **Бәйҙән ысҡынған эт кеүек** бик шашҡан, ҡоторған кешегә ҡарата әйтелә.

**бәйге** *и.* **1.** Менге аттарының сабыш, юртышта һәләтен һынау өсөн үткәрелгән ярыш. *Бәйге аты. Бәйге сабыу.* **2.** Шул ярышта еңгән кешегә йәки атҡа бирелә торған бүләк. *Бәйге алыу. Бәйге таратыу.*

**бәйет** *и.* Ғибрәтле йәки хәсрәтле бер ваҡиғаға, яҙмышҡа арналған шиғри хикәйәт. *Бәйет сығарыу. Бәйет әйтеү.*

**бәйләм** *и.* **1.** Ҡуша бәйләнгән бер төрлө нәмәләр йыйымы. *Асҡыстар бәйләме. Ике бәйләм китап.* **2.** Бер бәйгә һыйырлыҡ күләм. *Ике бәйләм йүкә.*

**бәйләнеү (бәйлән-)** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара яҡынлыҡта булыу. *Ваҡиғалар бер-береһенә бәйләнгән.* **2.** *күсм.* Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға мөнәсәбәте, ҡатнашы булыу. *Ғүмере фәнгә бәйләнгән.* **3.** *күсм.* Йөҙәтеп, маҙаһына тейеү. *Кешегә бәйләнеү.*

**бәйләнеш** *и.* **1.** Ике араларғы ҡатнашлыҡ. *Диалектик бәйләнеш.* **2.** Үҙ-ара хәбәрләшеү мөмкинлеге; элемтә. *Бәйләнеш өҙөлдө. Телефон бәйләнеше.* **3.** Берәй эш-хәлгә булған мөнәсәбәт; ҡатнашлыҡ. *Дуҫлыҡ бәйләнеше. Иҡтисади бәйләнеш.*

**бәйләү (бәйлә-)** *ҡ.* **1.** Бауҙың остарын бергә ҡушып төйнәү. *Сейәлдереп бәйләү. Элмәкләп бәйләү. Тоҡто бәйләү.* **2.** Бау менән тартып ҡуша беркетеү. *Йөктө бәйләү. Ҡапҡаны бәйләү.* **3.** Кейеү, тағыу, ябыныу. *Алъяпҡыс бәйләү. Галстук бәйләү. Яулыҡ бәйләү.* **4.** Ҡуҙғала алмаҫлыҡ итеп ҡыҫып сырмау. *Аяҡ-ҡулын бәйләү. Бәйләп ташлау.* **5.** Йөндән, ептән махсус энә менән үреп, берәй нәмә эшләү. *Бейәләй бәйләү. Селтәр бәйләү. Шәл бәйләү.*

**бәйләүес** *и.* Исемдең, алмаштың, һандың икенсе һүҙгә булған мөнәсәбәтен күрһәтә торған ярҙамсы һүҙ (мәҫәлән: өсөн, менән, тиклем һ. б.).

**бәке** *и.* Япмалы бәләкәй бысаҡ. *Ике йәпле бәке. Сәс бәкеһе. Бәке менән ҡырыу.*

**бәкәл** *и.* Аяҡ башын тоташтырып, сурайып сығып торған быуын һөйәге. *Бәкәл быуыны.*

**бәкәлсәй** *и.* **1.** Малдың бәкәл быуынындағы ваҡ тупар һөйәк; ашыҡ. *Бәкәлсәй һөйәге.* **2.** Шул һөйәктәр менән уйнай торған уйын исеме. *Бәкәлсәй уйнау.*

**бәлеш** *и.* **1.** Эсенә емеш-еләк йәки башҡа нәмә һалып табала йәки тимерҙә бешерелгән ҡамыр ашы. *Балан бәлеше. Ит бәлеше. Бәлеш төбө. Бәлеш менән һыйлау.* **2.** *с мәғ. күсм.* Булдыҡһыҙ, йомшаҡ.

**бәлә** *и.* **1.** Тормош именлеген, тыныслыҡты боҙған ҡайғылы хәл-ваҡиға. *Бәләгә осрау. Бәләнән ҡотолоу.* **2.** Кемгәлер тағылған ғәйеп. *Нахаҡ бәлә. Бәлә яғыу.* ♦ **Мең бәлә менән** бик ҙур ҡыйынлыҡ менән.

**бәләкәй** *с.* **1.** Дәүмәл-күләме, һаны яғынан ҡайтыш булған; *киреһе ҙур. Бәләкәй ауыл. Бәләкәй бүлмә. Бәләкәй ғаилә.* **2.** Буйы, кәүҙәһе ҙур булмаған. *Бәләкәй кәүҙәле кеше.* **3.** Йәш яғынан ҙур булмаған, кесе йәштәге. *Бәләкәй ҡыҙ. Бәләкәйҙән эшкә өйрәнеү.*

**бәлә-ҡаза** *и. йыйн.* Мал-мөлкәткә, һаулыҡ-сәләмәтлеккә зыян килтергән ауыр ҡаза. *Бәлә-ҡазаға тарыу. Бәлә-ҡазаны еңеп сығыу.*

**бәпембә** *и.* Ҡыуыш һабаҡлы, һары сыҡ сәскәле, туҙғаҡ орлоҡло ваҡ үлән.

**бәпес** *и.* Сабый бала; бәпәй.

**бәпесләү (бәпеслә-)** *ҡ.* Бала табыу.

**бәпкә**[1] *и.* Ҡаҙ, өйрәк себеше. *Ҡаҙ бәпкәһе.*

**бәпкә**[2] *и.* Балтырғандың яңы шытып сыҡҡан йәш япрағы. *Бәпкә ашы.*

**бәрҙе** *и.* Һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған сөсө һыу балығы; *Аҡ бәрҙе. Ҡара бәрҙе. Бәрҙе тотоу.*

**бәрелеү (бәрел-)** *ҡ.* **1.** Көс менән барып йәки килеп һуғылыу. *Туп ҡапҡаға бәрелде.* **2.** Һауа менән килеп ҡағылыу. *Еҫ бәрелә. Ялҡын бәрелә.* **3.** *күсм.* Кешегә һүҙ менән ҡағылыу. *Әсәһе балаға ҡаты бәрелде.*

**бәрелеш** *и.* **1.** Ҡара-ҡаршы төкәлеш. *Йылы һауа ағымы менән һалҡын ағым бәрелеше.* **2.** Ике арала килеп тыуған ыҙғыш; талаш-тартыш. *Күрше менән булған бәрелеш.* **3.** Ике арала булған ҡораллы һуғыш. *Ҡораллы бәрелеш.*

**бәреү (бәр-)** *ҡ.* **1.** Ҡулға тотоп берәй тарафҡа ырғытыу. *Таш бәреү. Күтәреп бәреү.* **2.** Һауа менән килеп ҡағылыу. *Еҫ бәреү. Йылы бәреү.* **3.** Аяҡ-ҡулды һәм башҡа ағзаны берәй нәмәгә абайламаҫтан һуғыу; төкөү. *Башты бәреү. Тубыҡты бәреү.* **4.** *күсм.* Ҡорал менән атыу. *Самолетты бәреп төшөрөү.*

**бәрхәт** *и.* Ҡуйы йомшаҡ өбөрөлө ебәк туҡыма. *Йәшел бәрхәт. Бәрхәт камзул.*

**бәрәкәт** *и.* **1.** Тормош, көнкүрештәге матди муллыҡ. *Бәрәкәтте ебәреү.* **2.** Берәй нәмәгә муллыҡ теләгәндә әйтелә. *Йортҡа бәрәкәт. Көрәгәгә бәрәкәт.*

**бәрәмес** *и.* Ауыҙын асыҡ итеп бешергән эремсек йәки картуф бәлеше. *Картуф бәрәмесе.*

**бәрән** *и.* Имеп туҡтағандан һуң икенсе бәрәсләгәнгә тиклемге кәзә, һарыҡ. *Бәрән йөнө. Бәрән һарыҡ. Бәрән кәзә.*

**бәрәңге** *и.* Эт ҡарағаты кеүектәр ғаиләһенә ҡараған крахмалға бай бүлбеһе ер аҫтында үҫкән йәшелсә; картуф. *Бәрәңге ултыртыу. Бәрәңге күмеү. Бәрәңге ҡаҙыу. Бәрәңге баҙы.*

**бәрәс** *и.* Тыуғандан имеп туҡтағанға тиклемге кәзә, һарыҡ. *Кәзә бәрәсе. Көҙгө бәрәс. Яҙғы бәрәс.*

**бәрәсләү (бәрәслә-)** *ҡ.* Бәрәс килтереү. *Һарыҡ бәрәсләгән.*

**бәҫ** *и.* Сасҡау һыуыҡта ағасҡа йәки башҡа нәмәгә өрпәк кенә булып ҡуна торған ҡырау. *Бәҫ ҡаплау. Бәҫ ҡуныу.*

**бәҫләнеү (бәҫлән-)** *ҡ.* Бәҫ менән ҡапланыу. *Ағастар бәҫләнгән.*

**бәүел** *и.* Матдәләр алмашыныу нәтижәһендә организмдан бөйөр айырған һәм кесе яраү аша сыға торған шыйыҡлыҡ; һейлек. *Бәүел ҡыуығы. Бәүел юлы.*

**бәүелеү (бәүел-)** *ҡ.* **1.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа сайҡалыу. *Бәүелсәктә бәүелеү.* **2.** Торған йәки ултырған ерҙән ян-яҡҡа сайҡалыу. *Ағас елгә бәүелә.*

**бәүетеү (бәүет-)** *ҡ.* Ян-яҡҡа сайҡалдырыу; тирбәтеү. *Баланы бәүетеү. Сәңгелдәкте бәүетеү.*

**бәхет** *и.* **1.** Йәшәйешкә һәр яҡлап ҡәнәғәтлек биргән тормош хәле; ырыҫ. *Ил бәхете. Кеше бәхете. Бәхет теләү.* **2.** Эштәге, тормоштағы һәр төрлө уңыш. *Бәхетең бар икән. Көтмәгәндә килеп сыҡҡан бәхет.* ♦ **Бәхеткә ҡаршы** берәй нәмәгә ҡарата ҡәнәғәтлек белдергәндә әйтелә.

**бәхетле** *с.* **1.** Бәхете булған, бәхете бар. *Бәхетле кеше. Бәхетле булыу.* **2.** Уңыш, шатлыҡ бирерҙәй булған. *Бәхетле көн. Бәхетле яҙмыш.*

**бәхетһеҙ** *с.* Бәхеттән мәхрүм булған. *Бәхетһеҙ бала. Бәхетһеҙ булыу.*

**бәхәс** *и.* **1.** Берәй мәсьәлә тирәһендәге төрлө фекер; һүҙ көрәше. *Бәхәс асыу. Бәхәскә килеү.* **2.** Мал-мөлкәт, хаҡ-хоҡуҡ өлкәһендәге үҙ-ара тартыш. *Хеҙмәт бәхәстәре. Сик буйы бәхәстәре.*

**бәхәсләшеү (бәхәсләш-)** *ҡ.* Берәй мәсьәлә буйынса үҙ-ара төрлө фекер белдереп, һүҙ көрәштереү. *Конференцияла бәхәсләшеү.*

**бәһлеүән** *и.* **1.** Сиктән тыш көслө, ғәйрәтле кеше. **2.** Бәйгеләрҙә көрәшкән кеше; батыр, көрәшсе.

**бәшмәк (бәшмәге)** *и.* Саң-һеркә ярҙамында үрсей торған хлорофилһыҙ иң ябай үҫемлек. *Ағыулы бәшмәк. Тоҙло бәшмәк. Бәшмәк йыйыу.* ♦ **Аҡ бәшмәк** тығыҙ үңәҙле иң затлы бәшмәк. **Ҡайын бәшмәге** көңгөрт һоро ҡалпаҡлы, аҫты түнгәкле ашауға яраҡлы бәшмәк. **Ҡыу бәшмәк** ағасҡа йәбешеп үҫкән тояҡ һымаҡ ҡаты бәшмәк. **Уҫаҡ бәшмәге** ҡыҙғылт һоро ҡалпаҡлы ашауға яраҡлы бәшмәк. **Һаңғырау бәшмәк** ап-аҡ йомро бәшмәк (өлгөргәс, эсе һоро саңға әйләнә).

# В

**вагон** *и.* Тимер юлдан йөк йәки кеше йөрөтөү өсөн ҡулайлаштырылған ҡоролма. *Йомшаҡ вагон. Йөк вагоны. Пассажирҙар вагоны. Почта вагоны. Трамвай вагоны. Вагондар эшләү заводы.*

**ваза** *и.* Емеш-еләк һалыу, сәскә ҡуйыу йәки бүлмәне биҙәү өсөн ҡулланыла торған матур һауыт. *Гәлсәр ваза. Вазаға алма һалыу.*

**вазелин** *и.* Нефттән алынған һарғылт май (техника һәм медицинала ҡулланыла). *Техник вазелин. Вазелин һөртөү.*

**ваҡ** *с.* **1.** Күләме, дәүмәле бәләкәй берәмектәрҙән торған; *киреһе* эре. *Ваҡ ком. Ваҡ тоҙ. Ваҡ ярма.* **2.** Буй-һыны, дәүмәле бәләкәй булған, ҙур түгел; *киреһе* эре. *Ваҡ ағаслыҡ. Ваҡ балалар. Ваҡ балыҡ.* **3.** Милке, мөлкәте бәләкәй.

*Вак хужалык.* **4.** Йөкмәткеһе, әһәмиәте бәләкәй. *Вак мәсьәлә. Вак эш.* **5.** Киммәте бәләкәй (аксаға карата). *Вак акса.*

**вакиға** *и.* Булып үткән иҫтә ҡалырлыҡ эш-хәл. *Ауыр вакиға. Ғәжәп вакиға. Ҡыҙыҡ вакиға. Оло вакиға.*

**ваклау (вакла-)** *ҡ.* **1.** Вак-вак киҫәктәргә, өлөштәргә бүлгеләү; вак итеү. *Икмәкте ваклау. Ташты ваклау.* **2.** Бәләкәй төркөмдәргә айырыу. *Хужалыкты ваклау.* **3.** Киммәтен тигеҙ итеп вакка алмаштырыу (аксаны). *Аксаны ваклау.*

**вак-төйәк (вак-төйәге)** *и. йыйн.* **1.** Күләме яғынан сағыштырмаса бәләкәй булған бөтә кәрәк-ярак. *Вак-төйәк нәмә. Донъя вак-төйәге. Вак-төйәк алыу.* **2.** Әһәмиәте бәләкәй булған эш-хәл. *Вак-төйәк мәсьәлә. Вак-төйәк эш. Вак-төйәкте күреү.*

**вакыт** *и.* **1.** Быуат, йыл, сәғәт, минут һ. б. менән иҫәпләнгән дауамлы араушк һәм уларҙың бер-бер артлы алмашыныуы. *Дүрт ай вакыт. Мәскәү вакыты. Урындағы вакыт. Вакыт тиҙ үтә.* **2.** Ай, көн, тәүлек араһындағы бер өҙөк. *Каникул вакыты. Эш вакыты. Ял вакыты. Вакыт үткәреү.* **3.** Кешелек йәмғиәтендәге, ниндәйҙер дәүләт, халыҡ һ. б. тормошондағы билдәле бер мөһим осор; заман. *Аслыҡ вакыты. Һуғыш вакыты.*

**вакытлы** *с.* **1.** Вакытлыса ғына булған, оҙаҡҡа иҫәпләнелмәгән. *Вакытлы тынлыҡ. Вакытлы ярашыу.* **2.** Билдәле бер вакытка тәғәйенләнгән. *Вакытлы хөкүмәт. Вакытлы эш.*

**вакытлыса** *р.* Билдәле бер вакыт менән сикләнеп. *Вакытлыса мәктәпкә йөрөмәү. Вакытлыса эшләү.*

**вакытында** *р.* **1.** Тейешле, кәрәкле вакытта. *Вакытында дәрес әҙерләү. Вакытында йоҡларға ятыу.* **2.** Касандыр бер вакытта; заманында, элек. *Вакытында яҡшы уҡыған. Вакытында данлыҡлы булған.*

**валсыҡ (валсығы)** *и.* Берәй нәмәнең бик вак, бик бәләкәй киҫәге. *Икмәк валсығы.*

**вальс** *и.* Өс ритмлы, һалмаҡ ишле бейеү һәм шул бейеүҙең көйө. *Вальс бейеү. Вальс уйнау.*

**ванна** *и.* Йыуыу, йыуыныу йәки дауаланыу өсөн махсус эшләнгән оҙонса ҙур һауыт. *Эмалле ванна. Балалар ваннаһы. Ваннала йыуыныу.*

**варан** *и.* Көньякта тереклек иткән ҙур кеҫәртке төрө.

**васыят** *и.* **1.** Үлер алдынан белдерелгән теләк, үтенес. *Васыят әйтеү. Васыят яҙыу.* **2.** *юғары* Киләсәк быуынға, уҡыусыларына, эште дауам итеүселәргә ҡалдырылған һүҙ, кәңәш, теләк һ. б. *Ата-бабалар васыяты. Өлкән*

*быуындың изге васыяты.* ♦ **Васыят итеү** 1) үлер алдынан ниндәйҙер теләк белдереү; 2) үлер алдынан бер кешегә нимәнелер исемләп ҡалдырыу.

**Ватан** *и.* Тыуып үҫкән ата-бабалар ере; тыуған ил. *Ватан тупрағы. Ватанды һаҡлау.* ♦ **Ватан һуғышы** илбаҫарҙарға ҡаршы күтәрелгән бөтә ил һуғышы.

**ватандаш** *и.* Бер илдә тыуып үҫкән һәм йәшәгән кешеләр. *Ватандаштары батырҙы хөрмәт менән иҫкә ала.*

**ватыҡ** *с.* **1.** Ватылған, ярыҡ. *Ватыҡ көҙгө. Ватыҡ сынаяҡ.* **2.** Төҙөк булмаған, ватылған; боҙоҡ. *Ватыҡ йоҙаҡ. Ватыҡ машина.* **3.** Ватылған нәмәнең ярсығы, киҫәге. *Быяла ватығы.*

**ватыу (ват-)** *ҡ.* **1.** Сатнатып ярыу. *Сынаяҡты ватыу. Төшөрөп ватыу.* **2.** Яраҡһыҙ хәлгә килтереү; боҙоу. *Машинаны ватыу.* ♦ **Баш ватыу** ниҙәләр аңларға, хәл итергә тырышып бик ныҡ уйлау. *Мәсьәләне сисә алмай баш ватыу.*

**вафат** *и.* Үлем. *Ул инде күптән вафат.* ♦ **Вафат булыу** үлеү.

**велосипед** *и.* Аяҡтар ярҙамында хәрәкәткә килтерелә торған ике йәки өс тәгәрмәсле машина. *Балалар велосипеды. Ярыш велосипеды. Велосипед менән йөрөү.*

**веранда** *и.* Өйҙө уратып йәки бер яҡ стенаһы буйлап эшләнгән бүлмә. *Верандалы өй. Верандала ял итеү.*

**вермишель (вермишелде)** *и.* Фабрикала эшләнгән йомро нәҙек туҡмас. *Ашҡа вермишель һалыу. Вермишель бешереү.*

**вертикаль** *с.* Тура төшкән, текә. *Вертикаль һыҙыҡ.*

**вертолет** *и.* Һауаға туп-тура күтәрелә һәм шул уҡ рәүештә ергә төшә торған оскос. *Вертолетҡа ултырыу. Вертолет заводы.*

**ветеран** *и.* **1.** Өлкән йәштәге тәжрибәле һуғышсы. *Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Граждандар һуғышы ветераны.* **2.** Берәй эштә, өлкәлә оҙаҡ йылдар эшләгән тәжрибәле кеше. *Хеҙмәт ветераны.*

**ветеринар** *и.* Ветеринария буйынса белгес; мал табибы.

**ветеринария** *и.* Хайуан, мал ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау юлдарын өйрәтә торған фәндәр системаһы һәм дауалау эше. *Ветеринария институты. Ветеринария пункты.*

**викторина** *и.* Төрлө һорау менән яуаптарҙан торған уйын. *Әҙәби викторина. Викторина уйнау.*

**винегрет** *и.* Төрлө йәшелсәне турап, үсемлек майы, һеркә ҡойоп ҡатнаштырған һалҡын ашамлыҡ. *Винегрет әҙерләү.*

**винтовка** *и.* Көбәк эсе борма һыҙыҡлы мылтыҡ.

**витамин** *и.* Кеше һәм хайуандар аҙығында йәшәү, шулай уҡ матдәләр алмашыныуы өсөн кәрәк булған төрлө химик составлы органик матдә. *Витаминға бай емеш. Витамин заводы.*

**власть (власы)** *и.* **1.** Дәүләт менән идара итеү хоҡуғы. *Власҡа килеү.* **2.** Етәкселек итеү хоҡуғы. *Власты үҙ ҡулына алыу.*

**водолаз** *и.* Махсус кейем кейеп һыу аҫтында эшләй торған кеше. *Водолаз кейеме. Водолаз булып эшләү.*

**водород** *и.* Химик элемент, кислород менән ҡушылып, һыу яһай торған еңел газ. ♦ **Водород бомбаһы** термоядро реакцияһына ҡоролған, шартлағыс һәм емергес көсө ифрат ҙур булған бомба.

**вокзал** *и.* Тимер юл станциялары һәм пристандәрҙәге юлсыларҙы хеҙмәтләндереүгә тәғәйенләнгән бина. *Ҙур вокзал. Өфө тимер юл вокзалы. Вокзалда ултырыу.*

**волейбол** *и.* Тартып ҡуйылған селтәр аша туп һуғып уйнай торған спорт уйыны. *Волейбол уйнау. Волейбол майҙаны.*

**вуз** *и.* Юғары уҡыу йорто. *Вуз белеме. Вузда уҡыу.*

**выждан** *и.* Күңел инсафлығынан килгән яуаплылыҡ тойғоһо; намыҫ. *Выждан ғазабы. Выждан ҡушыу.*

**вышка** *и.* Билдәле маҡсат өсөн төҙөлгән тар бейек ҡоролма. *Баҫыу вышкаһы. Быраулау вышкаһы.*

**вәғәҙә** *и.* Берәй нәмәне эшләргә, үтәргә ышандырып әйтелгән, йөкләмә рәүешендәге һүҙ. *Буш вәғәҙә. Вәғәҙә биреү. Вәғәҙә итеү. Вәғәҙәлә тороу. Вәғәҙә – ярты иман.*

**вәғәз** *и.* **1.** Дин әһелдәренең халыҡты өйрәтеп, өгөтләп һөйләгән һүҙе. *Вәғәз уҡыу. Вәғәз һөйләү.* **2.** *күсм.* Аҡыл өйрәтеп һөйләгән һүҙ; өгөт-нәсихәт.

**вәкил** *и.* **1.** Дәүләт, ойошма, төркөм исеменән эш алып барған кеше. *Райондан килгән вәкил. Хөкүмәт вәкиле.* **2.** Теге йәки был төркөмгә ҡараған кешеләрҙән берәү. *Башҡорт милләтенең бер вәкиле. Йәш быуын вәкиле.*

**вәл** *и.* Һирәк итеп бәйләнгән үтә күренмәле селтәр шәл. *Аҡ вәл. Вәл бәйләү. Вәл ябыныу.*

# Г

**гагара** *и.* Төньяҡ диңгеҙҙәрҙәге ҡуйы йөнлө эре һыу ҡошо.

**газ** *и.* **1.** Матдәнең айырым өлөшсәләре үҙ-ара тартылыу көсө менән бәйләнмәү сәбәпле тирә-яҡҡа, һауаға тиҙ һәм еңел таралып, осоп торған хәле. *Ағыулы газ. Шартлатҡыс газ. Янар газ.* **2.** Яғыу, яҡтыртыу һ. б. маҡсатта ҡулланылған, таралып, осоп торған йәки пар хәлендәге матдәләрҙең дөйөм исеме. *Тәбиғи газ. Газ баҫымы. Газ ятҡылығы. Газ үткәреү. Газ яғыу.*

**газета** *и.* Көндәлек ваҡиға һәм яңылыҡтар баҫыла торған ваҡытлы матбуғат. *Газета алдырыу. Газетаға яҙылыу. Газета уҡыу.* ♦ **Стена газетаһы** стенаға элеп ҡуйыла торған ҡулъяҙма газета. *Стена газетаһы сығарыу.*

**газон** *и.* Баҡса, урам, йорт буйына сәсеп үҫтергән үләнле, сәскәле ер. *Газондарҙа матур сәскәләр үҫә.*

**газсы** *и.* Газ сәнәғәтендә эшләгән, газ үткәреп, уның ҡорамалдарын ҡарап, йүнәтеп йөрөгән эшсе.

**гайка** *и.* Винт, болт кеүек һырлы нәмәләргә бороп индерелә торған төрлө формалағы деталь; шөрөптөң алынмалы башы. *Гайканы бороу. Гайканы нығытыу.*

**галстук (галстугы)** *и.* Тамаҡ эргәһенә төйөн яһап күлдәктең яғаһы аҫтынан кейә торған таҫма; муйын бауы. *Ирҙәр галстугы. Галстук бәйләү. Галстук тағыу.*

**гамаш** *и.* Башһыҙ йылы ойоҡ.

**гараж** *и.* Төрлө машиналарҙы ремонтлау һәм һаҡлау өсөн эшләнгән махсус ҡоролма. *Ер аҫтындағы гараж. Гараж төҙөү. Машинаны гаражға ҡуйыу.*

**гардероб** *и.* Йәмәғәт йорттарындағы кейем элә торған махсус урын. *Гардеробта эшләү.*

**гармун** *и.* Баҫмаҡлы, күрекле музыка ҡоралы. *Гармун күреге. Гармун тауышы. Гармун уйнау. Гармун теле.* ♦ **Ауыҙ гармуны** ауыҙға ҡуйып, өрөп уйнай торған бәләкәй музыка ҡоралы.

**гармунсы** *и.* Гармун уйнаусы. *Гармунсы булыу. Гармунсы итеү.*

**гвардия** *и.* **1.** Ғәскәрҙең һуғышта танылған иң һәйбәт частары. **2.** *күсм.* Эш, көрәштә алдын барған кешеләр. *Йәш гвардия.* ♦ **Аҡ гвардия** граждандар һуғышында ҡатнашҡан революцияға ҡаршы ғәскәрҙәр. **Ҡыҙыл гвардия** революцияны яҡлап һуғышҡан эшселәрҙең ҡоралды отряды.

**гектар** *и.* Метрик системаның ун мең кв. метрға тиң булған ер үлсәү берәмеге.

**гел** *р.* Һәр ваҡыт. *Гел булыу. Гел шулай.*

**генерал** *и.* Полковниктан юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Генерал булыу.* ♦ **Армия генералы** иң юғары генерал дәрәжәһе.

**генералиссимус** *и.* Ғәскәри кешегә бирелә торған иң юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Генералиссимус Суворов.*

**генератор** *и.* Механик энергияны электр энергияһына әйләндерә торған машина. *Генератор электр тогы эшләп сығара.*

**географ** *и.* География буйынса белгес.

**географик** *с.* Географияға мөнәсәбәтле. *Географик карта.*

**география** *и.* **1.** Ер өҫтөн, ундағы тәбиғи шарттарҙы, халыҡтарҙың урынлашыуын һәм экологик сығанаҡтарҙы өйрәнә торған фәндәр комплексы. *География уҡытыусыһы. География картаһы.* **2.** Ер йөҙөндә йәки айырым бер урында нимәнең дә булһа таралыу күренешен өйрәнеү эше. *Лингвистик география. Үҫемлектәр географияһы.* ♦ **Физик география** ер өҫтөн һәм уның төҙөлөшөн өйрәнә торған фән.

**геометрия** *и.* Математиканың арауыҡтағы формаларҙы һәм есемдәрҙең бер-береһенә булған мөнәсәбәтен өйрәнә торған бүлеге. *Башланғыс геометрия. Һыҙма геометрия. Геометрия дәресе.*

**гер** *и.* **1.** Билдәле ауырлыҡ биреп, үлсәүгә ҡуйыр өсөн яһалған нәмә. *Бер килолыҡ гер. Гер менән үлсәү.* **2.** Механизмды хәрәкәткә килтереү өсөн тағылған ауырлыҡ. *Сәғәт гере.*

**герб** *и.* Дәүләт, ҡала, ижтимағи төркөмдөң рәсми тамғаһы. *Башҡортостан Республикаһының гербы.*

**герой** *и.* **1.** Батыр, ҡаһарман. *Бөйөк Ватан һуғышы геройы.* **2.** Роман, пьеса, кино һ. б. әҫәрҙәрҙә төп урынды тотҡан ир-ат персонажы. *Ыңғай герой. Кире герой. Лирик герой.* ♦ **Герой ҡала** Бөйөк Ватан һуғышындағы ҙур батырлығы өсөн айырым ҡалаларға бирелгән исем. *Петербург – герой ҡала.* **Герой әсә** ун йәки унан артыҡ бала тәрбиәләп үҫтергән ҡатын-ҡыҙға бирелә торған маҡтаулы исем.

**геройлыҡ** *и.* Батырлыҡтар эшләүгә булған һәләтлек; батырлыҡ. *Геройлыҡ күрһәтеү.*

**геү (геү-геү)** *оҡш.* **1.** Туҡтауһыҙ бер төрлө генә булып сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Геү итеү.* **2.** Күмәк кеше шаулашҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ, шау. *Геү килеп эшләү.*

**геүләү (геүлә-)** *к.* **1.** Геү итеү, геү килеү. *Бал ҡорттары геүләй. Телефон бағаналары геүләй.* **2.** Геү итеп ныҡ шаулау. *Балалар геүләй. Халыҡ геүләй.*

**гидроэлектростанция** *и.* Һыу көсө ярҙамында барлыҡҡа килгән энергияны электр энергияһына әүерелдерә торған электростанция. *Гидроэлектростанциялар төҙөү.*

**гиҙеү (гиҙ-)** *к.* Күреп-белеп, ҡыҙырып йөрөү; сәйәхәт итеү. *Донъя гиҙеү. Ил гиҙеү.*

**гильза** *и.* **1.** Атыу ҡоралдарында (туп, мылтыҡ һ. б.) ябыҡ яғына дары яһағы һалынған, икенсе асыҡ яғы пуля йәки снаряд ҡуйыу өсөн ҡулайлаштырылған көпсәк; патрон төбө. *Мылтыҡ гильзаһы. Туп гильзаһы.* **2.** *тех.* Көпшә рәүешендәге төрлө деталь.

**гимн** *и.* **1.** Дәүләт йәки социаль берҙәмлек символы булып ҡабул ителгән тантаналы йыр. *Башҡортостан гимны.* **2.** Дан йыры; маҡтау. *Хеҙмәт гимны. Гимн булып яңғырау.*

**гимназия** *и.* Төрлө яҡлы тәрән белем бирә торған урта мәктәп.

**гимнастика** *и.* Физик күнекмәләр йыйылмаһы. *Иртәнге гимнастика. Дауалау гимнастикаһы. Художестволы гимнастика.*

**гипс** *и.* **1.** Аҡ йәки һарғылт төҫтәге эзбизлы минерал. *Көнбайыш Башҡортостан гипсҡа бай. Гипс ятҡылығы.* **2.** Һынған, сыҡҡан һөйәккә шул минералды ҡатырып бәйләп ҡоршау. *Гипс һалыу. Гипста ятыу.*

**гитара** *и.* Оҙон грифлы, һигеҙгә оҡшаған корпуслы сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы. *Ете ҡыллы гитара. Гитара уйнау. Электр гитараһы.*

**глобус** *и.* Ер шарының йәки башҡа күк есеменең үҙ күсәре тирәһендә әйләнмәле итеп эшләнгән бәләкәй моделе. *Ер шары глобусы. Глобус яһау.*

**гөбөргәйел** *и.* Ҡалын ҡабырсаҡ көплө (аяҡтарын, башын шунда йәшерә алған) һөйрәлеүселәр ғаиләһенә ҡараған бик яй хәрәкәтле ер-һыу йәнлеге; ташбаҡа. *Һаҙ гөбөргәйеле. Ялан гөбөргәйеле.*

**гөбәҙиә** *и.* Эсенә ҡыҙыл эремсек, дөгө ярмаһы, ит-йөҙөм, кишер һ. б. ҡатлап, сөсө ҡамырҙан бешерелгән бәлеш. *Гөбәҙиә бешереү. Гөбәҙиә менән һыйлау.*

**гөл** *и.* Матурлыҡ өсөн өйҙә, баҡсала үҫтергән ваҡ һабаҡлы үҫемлек; сәскә. *Гөл баҡсаһы. Гөл ултыртыу. Гөл үҫтереү. Алҡалы гөл. Зәғфран гөлө. Еҫле гөл. Ҡамыш гөл. Ҡына гөлө. Сәнскеле гөл. Тал гөлө. Тамсы гөл. Үрмәле гөл. Әрем гөлө. Яран гөлө.*

**гөлйемеш** *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскеле ҡыуаҡ үҫемлек һәм шул үҫемлектең емеше; әлморон. *Гөлйемеш ҡыуағы. Гөлйемеш сәскәһе.*

**гөлләмә** *и.* Гөл бәйләме; букет. *Гөлләмә бүләк итеү.*

**гөмбөр** *и.* Балыҡ өшкөтә торған башы йомро оҙон таяҡ.

**гөнаһ** *и.* **1.** Хоҙай тарафынан хупланмай тип иҫәпләнгән эш; яҙыҡ. *Гөнаһ булыу. Гөнаһ ҡылыу.* **2.** Ғәҙәткә һыймаған эш; ғәйеп. *Гөнаһты ярлыҡау.*

**гөр (гөр-гөр)** *оҡш.* **1.** Күгәрсен гөлдөрләүен һәм шуға оҡшаған тауышты белдергән һүҙ. *Гөр килеү. Гөр итеү.* **2.** Күмәк халыҡ тауышын белдергән һүҙ. *Мәктәп эсе балалар тауышынан гөр килә. Гөр килеп эшләү.*

**гөргөлдәк (гөргөлдәге)** *и.* Йәшенеп уйнай торған балалар уйыны; йәшенмәк (бер төркөм бала һанашып, берәүҙе көтөүсе итеп ҡалдыра; көтөүсе күҙен ҡаплап, гөр-гөр тип көйләп, башҡалар йәшенеп бөткәнсе тора; кемде башта тапһа, артабан шул көтөүсе була һәм уйын яңынан дауам итә). *Гөргөлдәк уйнау.*

**гөрләү (гөрлә-)** *ҡ.* **1.** Гөр итеү. *Күгәрсен гөрләй. Гөрләп тороу.* **2.** Күмәкләп шаулау; гөр килеү. *Ҡала гөрләй. Тормош гөрләй.*

**гөрләүек (гөрләүеге)** *и.* Яҙ көнө ҡар иреүҙән йәки көслө ямғырҙан барлыҡҡа килеп, шаулап аҡҡан һыу. *Гөрләүектәр гөрләп аға.*

**гөрҫ (гөрҫ-гөрҫ)** *оҡш.* Ҙур, ауыр нәмә юғарынан ауып төшкәндә сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Гөрҫ итеп ҡалыу.*

**градус** *и.* **1.** Геометрик мөйөш һәм дуғаның дәүмәлен үлсәй торған берәмек (түңәрәктең 1/360 өлөшөнә тигеҙ) *20 градусҡа тигеҙ мөйөш.* **2.** Һыу, һауа, тән һ. б. температураһын үлсәй торған берәмек. *Ауырыу 39 градус температура менән ята. Тышта минус 25 градус.*

**градусник (градуснигы)** *и.* Температураны үлсәй торған прибор; термометр. *Градусник ҡуйыу.*

**граждан** *и.* **1.** Билдәле бер дәүләттә даими рәүештә йәшәп, шул дәүләттең законлары нигеҙендә бөтә хоҡуҡ менән файҙаланған һәм закондағы бөтә бурысты үтәгән кеше. *Башҡортостан гражданы.* **2.** *юғары* Үҙ тормошон ил мәнфәғәттәренә буйһондорған кеше; йәмғиәттең юғары аңлы ағзаһы. *Граждан булыу.*

**гражданлыҡ (гражданлығы)** *и.* Билдәле бер дәүләттең гражданы булған хәл. *Гражданлыҡ бурысы. Гражданлыҡ тойғоһо. Гражданлыҡ алыу.*

**грамм** *и.* Метрик үлсәү системаһындағы ауырлыҡ берәмеге. *Ике йөҙ грамм кәнфит.*

**грамматик** *с.* Грамматикаға мөнәсәбәтле, грамматикаға бәйле. *Грамматик ҡағиҙә. Грамматик хата.*

**грамматика** *и.* **1.** Тел ғилеменең һүҙ һәм һөйләм төҙөлөшөн өйрәнә торған бүлеге. *Сағыштырма грамматика. Тарихи грамматика.* **2.** Теге йәки был телдә һөйләм эсендәге һүҙҙәрҙең үҙгәреү һәм үҙ-ара бәйләнешкә инеү тәртибе һәм ошо ҡағиҙәләр яҙылған дәреслек. *Башҡорт теленең грамматикаһы. Мәктәп грамматикаһы.*

**граната** *и.* Шартлай торған артиллерия һәм ҡул тубы. *Ярсыҡлы граната. Граната ташлау.*

**гранит** *и.* Кварц, ялан шпаты һәм слюда ҡушымтаһынан торған ҡаты таш. *Ҡара гранит. Ҡыҙыл гранит. Гранит менән биҙәү.*

**графин** *и.* Быяланан йәки гәлсәрҙән эшләнгән тар оҙон муйынлы эсемлек һала торған һауыт. *Графинға һыу һалыу.*

**грим** *и.* **1.** Роль башҡарыу өсөн эшләнгән яһалма төҫ, ҡиәфәт (буяу, һаҡалмыйыҡ һәм башҡа). *Грим бүлмәһе.* **2.** Яһалма төҫ булдырыу өсөн ҡулланылған төрлө буяу. *Грим һалыу. Грим һөртөү.*

**гроссмейстер** *и.* Шахмат спортындағы иң юғары оҫталыҡ дәрәжәһе һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше. *Гроссмейстер булыу.*

**груша** *и.* Йылы яҡта үҫә торған роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған алһыу аҡ сәскәле ағас һәм шунын емеше; армыт. *Груша ултыртыу. Груша компоты. Груша ҡайнатмаһы.*

**гудок (гудогы)** *и.* **1.** Сигнал бирә торған механик һыҙғыртҡыс. *Гудок тауышы.* **2.** Механик һыҙғыртҡыс ярҙамында бирелгән тауыш; сигнал. *Гудок биреү.*

**гүзәл** *с.* **1.** Бик матур; сибәр, һылыу. *Гүзәл ҡыҙ. Гүзәл булыу.* **2.** Шәп, яҡты, һәйбәт. *Гүзәл йырҙар. Гүзәл кеше.*

**гүйә** *т. кит.* Бер нәмәне, хәлде икенсеһенә сағыштырғанда, оҡшатҡанда ҡулланылып, «әйтерһең дә, кеүек, шикелле» тигән мәғәнә бирә.

**гүр** *и.* Үлгән кешене ҡуйыр өсөн ергә ҡаҙып эшләнгән урын; ҡәбер. ♦ **Гүргә инеү** үлеү. **Гүр эйәһе булыу** үлеү.

**гәлсәр** *и.* Юғары сифатлы быяла төрө; бәлләүер. *Гәлсәр һымаҡ. Гәлсәр ваза. Гәлсәр һауыт.*

**гәп** *и.* Үҙ-ара һөйләшкән һүҙ, әңгәмә. *Гәпкә әүрәү.* ♦ **Гәп һатыу** онотолоп китеп хәбәр һөйләшеү.

**гәпләшеү (гәпләш-)** *ҡ.* Әңгәмәләшеү, һөйләшеү. *Гәпләшеп ултырыу.*

**гәүһәр** *и.* **1.** Ҡырлап, шымартып эшләнгән алмас; бриллиант. *Гәүһәр ҡыры. Гәүһәр ҡашлы йөҙөк.* **2.** *күсм.* Ижад әҫәрҙәренең һ. б. нәмәләрҙең иң яҡшы, һәйбәт өлгөләре. *Халыҡ ижады гәүһәрҙәре.*

# Ғ

**ғазап (ғазабы)** *и.* Кешене ныҡ интектергән ауырлыҡ; ыҙа, яфа. *Выждан ғазабы. Юл ғазабы. Мең ғазап менән.* ♦ **Ғазап сигеү** ғазапланыу, ыҙаланыу, интегеү.

**ғазаплау (ғазапла-)** *ҡ.* Яфалау, ыҙалау, интектереү. *Көңөлдө ғазаплау. Ғазаплап бөтөрөү.*

**ғаилә** *и.* **1.** Атай, әсәй, балаларҙан һәм башҡа яҡын туғандарынан торған кешеләр. *Ҙур ғаилә. Татыу ғаилә. Ғаилә башлығы. Ғаилә ҡороу.* **2.** Сығышы һәм төҙөлөшө менән яҡын булған хайуан һәм үҫемлектәрҙең бер нисә төркөмөнән торған нәҫел берәмеге. *Бесәй һымаҡтар ғаиләһе. Ҡуҙаҡлылар ғаиләһе.*

**ғалим** *и.* Фән өлкәһендә эшләгән уҡымышлы кеше. *Ҙур ғалим. Ғалим булыу. Ғалимдың хеҙмәте.*

**ғаләм** *и.* Бөтә ер һәм күк йөҙө; йыһан. *Ғаләмде өйрәнеү. Ғаләмдең сикһеҙлеге.*

**ғариза** *и.* Үтенес белдереп яҙылған рәсми ҡағыҙ. *Ғариза биреү. Ғариза яҙыу. Ғаризаға ҡул ҡуйыу.*

**ғауға** *и.* Күмәк кеше ҡатнашлығындағы тәртипһеҙ ҡысҡырыш, шау-шыу; бола. *Ғауға ҡуптарыу. Ғауға сығарыу.*

**ғилем** *и.* Ниндәйҙер өлкәләге мәғлүмәттәр йыйылмаһы; белем. *Тел ғилеме. Әҙәбиәт ғилеме. Ғилем алыу. Ғилем эйәһе. Ғилем китаптың эсендә лә, тышында ла.* (Әйтем.) *Ғилем – ҡош, аҡыл – ҡанат.* (Әйтем.)

**ғилемле** *с.* Ғилемгә эйә; уҡымышлы, белемле. *Ғилемле кеше. Ғилемле булыу.*

**ғилми** *с.* Ғилемгә бәйле, ғилемгә мөнәсәбәтле; фәнни. *Ғилми дәрәжә. Ғилми конференция. Ғилми хеҙмәт. Ғилми яҙмалар.*

**ғинуар** *и.* Календарь йылының беренсе айы. *Ғинуар айы. Ғинуар башы. Ғинуар һыуығы.*

**ғишыҡ** *и.* Кемгәлер булған көслө яратыу, һөйөү тойғоһо; мөхәббәт. *Ғишыҡ тотоу. Ғишыҡ уты.*

**ғорур** *с.* **1.** Үҙ баһаһын яҡшы белгән, намыҫына кәмселек килтермәй торған. *Ғорур кеше. Ғорур тәбиғәтле. Ғорур булыу.* **2.** *күсм.* Мөһабәт, мәғрур. *Ғорур ҡарағай. Ғорур тауҙар.*

**ғорурланыу (ғорурлан-)** *ҡ.* Ғорурлыҡ кисереү, ғорур булыу. *Тыуған ил менән ғорурланыу. Халҡыңдың тарихы менән ғорурланыу.*

**ғорурлыҡ (ғорурлығы)** *и.* Нимәнәндер ныҡ ҡәнәғәт булыу, маһайыу тойғоһо; ғорур булыу. *Ғорурлыҡ тойғоһо. Ғорурлыҡ хисе. Ғорурлыҡ уяныу.*

**ғөмүмән** *р. инш.* Йомғаҡлап төп бер фекергә килгәнде аңлата; дөйөм алғанда, йомғаҡлап әйткәндә. *Ғөмүмән алғанда. Мин, ғөмүмән, ҡаршы түгел.*

**ғөрөф** *и.* Тарихи үҫеш, йәшәйеш тәжрибәһендә барлыҡҡа килгән халыҡ тарафынан ҡабул ителеп, быуындан быуынға күсә килә дөйөм ҡағиҙәгә әйләнгән тәртип, аң, ҡараш, зауыҡ; йола. *Ғөрөф буйынса. Ғөрөфтө тотоу.*

**ғөрөф-ғәҙәт** *и. йыйн.* Дөйөм халыҡ тарафынан ҡабул ителеп, ҡағиҙәгә әйләнгән тәртип, йолалар. *Башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса.*

**ғүмер** *и.* **1.** Кеше, йәнлек һәм үҫемлектәрҙең ғәмәлдә барлыҡҡа килгәндән алып үлгәнгә тиклем йәшәгән ваҡыты. *Ҡыҫҡа ғүмер. Оҙон ғүмер. Кеше ғүмере. Ғүмер буйы. Ғүмер юлы. Ғүмер итеү.* **2.** Йәшәгән осорҙоң бер дәүере. *Йәш ғүмер.* ♦ **Ғүмер эсендә бер** әллә ниҙә бер, бер тапҡыр ғына. **Үҙе бер ғүмер** ниндәйҙер бер хәл, ваҡиға һ. б. менән ныҡ ҡәнәғәт булыуҙы белдерә.

**ғүмерҙә** *р.* Бер ваҡытта ла, һис ваҡыт; ғүмере. *Ғүмерҙә булмаған хәл. Ғүмерҙә артта ҡалманы.*

**ғүмерле** *с.* Оҙон ғүмергә эйә, ғүмере оҙаҡ. *Оҙон ғүмерле булыу.*

**ғүмерлек (ғүмерлеге)** *с.* Ғүмер буйына барған, һуҙылған; мәңгелек. *Ғүмерлек дуҫ. Ғүмерлек юлдаш. Аманатҡа итһәң хыянат, алырһың ғүмерлек яманат.* (Әйтем.)

**ғырылдау (ғырылда-)** *ҡ.* Ғыр-ғыр итеү, ғыр-ғыр килеү. *Ғырылдап сыҡҡан тауыш. Ғырылдап йоҡлау.*

**ғәҙел** *с.* Дөрөҫлөккә ярашлы, дөрөҫлөк яҡлы. *Ғәҙел кеше. Ғәҙел хөкөм. Ғәҙел булыу. Ғәскәр башы ғәҙел булһа, дошман — аяҡ аҫтында.* (Әйтем.)

**ғәҙеллек (ғәҙеллеге)** *и.* Дөрөҫлөк, хаҡлыҡ. *Ғәҙеллек һаҡлау.*

**ғәҙәт** *и.* **1.** Кешенең тәбиғи һыҙатына әйләнгән сифат; ҡылыҡ. *Ғәҙәт буйынса. Ғәҙәткә инеү. Ғәҙәт итеү.* **2.** Йәмғиәттең, халыҡтың тормош-көнкүрешенә инеп урынлашҡан, ҡағиҙәгә әйләнеп, быуындан быуынға күсә килгән тәртип; ғөрөф. *Ғәҙәткә әйләнеү.* ♦ **Ғәҙәттән тыш** бик, үтә, ныҡ. *Ғәҙәттән тыш асыулы. Ғәҙәттән тыш уҫал.*

**ғәҙәти** *с.* Ябай, ғәҙәттәге. *Ғәҙәти дәрес. Ғәҙәти хәл.*

**ғәҙәтләнеү (ғәҙәтлән-)** *ҡ.* Ғәҙәт итеү, өйрәнеү. *Гимнастика яһарға ғәҙәтләнеү. Ғәҙәтләнеп китеү.*

**ғәҙәттә** *р.* Ҡағиҙә булараҡ, күп ваҡыт. *Ғәҙәттә кис китап уҡыйбыҙ.*

**ғәжәп** *с.* **1.** Иҫ киткес, таң ҡалырлыҡ, аптырарлыҡ. *Ғәжәп ҡыҙ. Ғәжәп хәл.* **2.** *р. мәғ.* Бик, ныҡ, үтә, сикһеҙ. *Ғәжәп аҡыллы бала. Ғәжәп матур ҡыҙ.* ♦ **Ғәжәп итеү** аптырау, иҫ китеү.

**ғәжәпләнеү (ғәжәплән-)** *ҡ.* Ғәҙәттән тыш тип һанау, аптырау, хайран ҡалыу. *Ғәжәпләнеп ҡарап тороу.*

**ғәзиз** *с.* Бик ҡәҙерле, иң яҡын, берҙән-бер, аяулы. *Ғәзиз бала. Ғәзиз ер. Ғәзиз ил. Ғәзиз булыу.*

**ғәйбәт** *и.* Кешене артында яманлап, насарлап һөйләгән хәбәр; яман һүҙ. *Ғәйбәт һөйләү.* ♦ **Ғәйбәт һатыу** кешене насарлап һөйләү, яман һүҙ таратыу.

**ғәйбәтсе** *и.* Ғәйбәт таратҡан кеше. *Ғәйбәтсе кеше.*

**ғәйеп (ғәйебе)** *и.* Кәмселек, етешһеҙлек. *Ҙур ғәйеп. Ғәйеп табыу. Ғәйепте асыу. Ғәйепте кешегә япһарыу. Ғәйеп һанау.*

**ғәйепле** *с.* Насар, ярамаған эш ҡылған, ғәйебе булған. *Ғәйепле уҡыусы. Ғәйепле булыу. Ғәйепле һанау.*

**ғәйет** *и.* Намаҙ уҡып үткәрелә торған дини байрам. *Ғәйет көнө. Ғәйет намаҙы.* ♦ **Ҡорбан ғәйете** мосолмандарҙа Зөлхизә айының унынсы көнөндә ҡорбан салып үткәрелә торған байрам һәм шунда уҡыла торған намаҙ. **Ураҙа ғәйете** ураҙа бөтөү менән үткәрелә торған байрам.

**ғәйрәт** *и.* Дәрт, көс, ҡеүәт. *Ғәйрәт артыу. Ғәйрәт күрһәтеү.* ♦ **Ғәйрәт сәсеү** ныҡ ғәйрәтләнеү, ажарланыу.

**ғәйрәтләнеү (ғәйрәтлән-)** *ҡ.* Дәрт, ҡеүәт менән тоҡаныу, ярһыу. *Ғәйрәтләнеп эшкә тотоноу.*

**ғәмәл** *и.* **1.** Эш, тормош булмышы. *Ғәмәлгә ярашлы булыу.* **2.** *мат.* Математикала хисаплауҙың төп төрө. *Дүрт ғәмәл. Алыу ғәмәле. Ҡушыу ғәмәле.* ♦ **Ғәмәлдә ҡалыу** ҡулланылышта йөрөү. **Ғәмәлдән сығыу** ҡулланылышта бөтөү, ҡулланыуҙан сығыу.

**ғәр** *и.* Намыҫ хисе. *Егет ғәре. Тәнен һатҡан ғәрен һатыр.* (Әйтем.)

**ғәрип** *с.* Берәр ере, ағзаһы имгәнгән; зәғиф. *Тыумыштан ғәрип. Ғәрип булыу.*

**ғәриплек (ғәриплеге)** *и.* Ғәрип булған хәл. *Рухи ғәриплек. Ғәриплекте дауалау.*

**ғәрипләнеү (ғәриплән-)** *ҡ.* Ғәрипкә әйләнеү, ғәрип булыу. *Һуғыштан ғәрипләнеп ҡайтыу.*

**ғәрле** *с.* Ояла белгән, намыҫсан. *Ғәрле булыу.*

**ғәрлек (ғәрлеге)** *и.* Намыҫланыу, хурланыу тойғоһо; оят, хурлыҡ. *Ғәрлек тойғоһо. Ғәрлек кисереү.* ♦ **Ғәрлеге ни тора!** Нимәгәлер үтә ғәрләнгәндә, ныҡ намыҫланғанда әйтелә. **Ғәрлек килеү** намыҫ уяныу, хурланыу.

**ғәрләнеү (ғәрлән-)** *ҡ.* Ғәрлек тойғоһо кисереү; намыҫланыу. *Ныҡ ғәрләнеү. Ғәрләнеп илау.*

**ғәрсел** *с.* Тиҙ ғәрләнә торған, намыҫланыусан, ғәрләнеп барыусан. *Ғәрсел кеше. Ғәрсел булыу.*

**ғәрәсәт** *и.* Бик көслө ел-дауыл. *Көслө ғәрәсәт. Ғәрәсәт ҡубыу. Һуғыш ғәрәсәте.*

**ғәскәр** *и.* **1.** Дәүләттең бөтә ҡоралды көстәре; армия. *Рәсәй ғәскәре. Ғәскәргә алыныу. Ғәскәрҙән ҡайтыу.* **2.** Ҡоралды көстәрҙең айырым бер төрө, бүлеге. *Атлы ғәскәр. Йәйәүле ғәскәр. Сик буйы ғәскәрҙәре.*

**ғәскәри** *с.* **1.** Ғәскәргә ҡараған; хәрби. *Ғәскәри байраҡ. Ғәскәри тәртип. Ғәскәри хеҙмәт.* **2.** *и. мәғ.* Хәрби хеҙмәткәр. *Ғәскәриҙәр маршы.*

**ғәфү; ғәфү итеү (ҡылыу)** кемдеңдер ғәйебен кисереү; ярлыҡау. **Ғәфү ит(егеҙ)** мөрәжәғәт иткәндә ҡулланыла торған әҙәп һүҙе. **Ғәфү үтенеү** кемдәндер ғәйепләмәүҙе, кисереүҙе һорау.

# Д

**дағa** *и.***1.** Тайыуҙан һәм зарарланыуҙан һаҡлау өсөн ат тояғына ҡағыла торған тешле тимер. *Ат дағаһы. Тимер даға. Даға сөйө. Даға ҡағыу.* **2.** Аяҡ кейеменең үксәһенә ҡағыла торған тимер. *Еҙ даға. Даға ҡаҡтырыу.*

**дағалау (дағала-)** *ҡ.* Даға ҡуйыу, даға ҡағыу. *Ат дағалау.*

**дадан, дадан умарта** *и.* Таҡтанан яһалған дүрткел умарта.

**даими** *с.* Һәр ваҡыттағы, туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ булып торған. *Даими хәстәрлек. Даими үҫеш. Даими эш. Даими семинар.*

**дала** *и.* Тауһыҙ, урманһыҙ, үлән менән ҡапланған, тигеҙ, киң ер; ялан. *Иркен дала. Ҡылғанлы дала. Осоҡ-ҡырыйһыҙ дала. Дала еле. Дала үҫемлектәре.*

**дан** *и.* Батырлыҡ, хеҙмәт, һөнәр, талант һ. б. ҡаҙаныштар һөҙөмтәһендә халыҡ араһына таралған хөрмәтле танылыҡ, билдәлелек. *Хеҙмәт даны. Данға күмелеү. Батырҙарға дан! Ат даны егет ҡулында, егет даны үҙ ҡулында.* (Мәҡәл.) *Яҡшыларҙан зат ҡалыр, батырҙарҙан дан ҡалыр.* (Әйтем.) ♦ **Дан алыу** яҡшылыҡ йәки киреһенсә, насарлыҡ менән илдә танылыу, билдәле булыу.

**данлау (данла-)** *ҡ.* Кемдең йәки ниҙеңдер данын таратыу; маҡтау. *Илде данлау. Данлап йырлау.*

**данлы** *с.* Дан ҡаҙанған; атаҡлы. *Данлы армия. Данлы егет.*

**дарья** *и.* **1.** Бик ҙур һыу. *Дарья киңгек күл. Һыу һыуға ҡойор, һыу дарьяға ҡойор.* (Мәҡәл.) **2.** *күсм.* Нимәнеңдер күплеге, сикһеҙлеге. *Күҙ йәштәре дарья булып аҡты.*

**дары** *и.* Снаряд һәм патрон эсенә һалына торған шартлатҡыс матдә. *Дары баҙы. Дары йәшниге. Дары төтөнө.*

**дарыу** *и.* **1.** Ауырыуҙы дауалау өсөн файҙаланылған шыйыҡ йәки онтаҡ хәлдәге матдә; дауа. *Баш дарыуы. Йөрәк дарыуы. Дарыу эсеү. Дарыу эшләү. Дарыу үләне.* **2.** *күсм.* Сара, ысул. *Дарыуын табыу.* ♦ **Әжәл дарыуы** 1) тормошта бөтә осраҡта ла ярҙам итеүсе сара; 2) һирәк һәм кәрәкле нәмә.

**дарыухана** *и.* Дарыуҙар һәм башҡа медицина әйберҙәре һатыла торған махсус урын.

**дау** *и.* Талаш, ыҙғыш, әрләш. *Дау сығарыу. Дау ҡуптарыу. Дау һалыу. Дауға барғансы, яуға бар.* (Әйтем.)

**дауа** *и.* **1.** Ауырыуҙы бөтөрөү өсөн ҡулланыла торған шифалы нәмә; дарыу. *Баш дауаһы. Дауа ярҙамы.* **2.** *күсм.* Ауыр, ҡатмарлы хәлдән сығыуға ярҙам иткән сара, әмәл. *Дауаһын табыу. Дәртһеҙгә дауа юҡ.* (Әйтем.)

**дауаланыу (дауалан-)** *ҡ.* Ауырыуҙан шәбәйеү өсөн дауа ҡулланыу; дарыуланыу. *Дауаланып алыу. Дауаланырға ҡушыу.*

**дауалау (дауала-)** *ҡ.* Ауырыуҙан шәбәйтеү өсөн дауа биреү; дарыулау. *Дауалап алыу. Ҡымыҙ менән дауалау. Дауалау гимнастикаһы. Дауалау саралары.*

**дауам** *и.* **1.** Эш-хәрәкәт, процесс, хәл-ваҡиғаның ваҡыт эсендәге һуҙымы. *Эштең дауамы. Ғүмер дауамы.* **2.** Берәй нәмәнән һуң килгән, урынлашҡан һуҙым. *Әкиәттең дауамы бар. Дауам итеү.*

**дауахана** *и.* Ауырыуҙы дауалай торған йорт. *Күҙ дауаханаһы.*

**даулау (даула-)** *ҡ.* Талап итеү, дәғүә ҡуйыу; бәхәсләшеп үҙеңдекенә ирешеү. *Ирек даулау. Хоҡуҡ даулау.*

**дауыл** *и.* **1.** Бик ныҡ көслө емергес ел. *Дауыл ҡубыу. Дауыл сығыу. Дауыл болото.* **2.** *күсм.* Илде шаулатҡан ҙур тарихи ваҡиға. *Инҡилап дауылы.* ♦ **Дауыл ҡошо** кәкре суҡышлы, оҙон тар ҡанатлы йөҙгөс диңгеҙ ҡошо.

**дауыллау (дауылла-)** *ҡ.* **1.** Дауыллы булыу. *Дауыллап ямғыр яуа. Диңгеҙ дауыллай.* **2.** *күсм.* Илде шаулатҡан ҙур ваҡиғалар булыу, тормош тынғыһыҙ булыу. *Ғүмер дауыллап үтә.*

**даһи** *и.* Зирәк, аҡыллы, юғары кимәлдәге ижади һәләтле кеше. *Даһи булыу. Даһи аҡыл. Даһи кеше.*

**дебет** *и.* Кәзә мамығы. *Дебет тарау. Дебет иләү. Дебет шәл. Дебет шарф. Дебет кәзәһе.*

**девиз** *и.* Эштәге, тормоштағы төп идея, маҡсатты сағылдырған өндәмә рәүешендәге ҡыҫҡа һүҙ. *Йәштәр девизы. Девизға әйләнеү.*

**дегет** *и.* Ғәҙәттә ҡайын туҙы, торф йәки таш күмерҙән ҡыуып алынған ҡуйы ҡара, еҫле шыйыҡлыҡ. *Ағас дегете. Сайыр дегете. Дегет ҡайнатыу. Дегет еҫе. Дегет заводы.* ♦ **Дегет баҙы** дегет ҡайната торған урын. **Дегет силәге** дегет һалып, арбаға тағып йөрөтә торған силәк. **Дегет һымаҡ (кеүек)** үтә ҡара, ялтырап торған (төҫкә ҡарата).

**дегәнәк (дегәнәге)** *и.* **1.** Эре киң япраҡлы, һандал сәскәле, йәбешкәк тумалаҡ орлоҡло үҫемлек. *Дегәнәк һырыу. Дегәнәк майы. Дегәнәк орлоғо.* **2.** *күсм.* Кешегә бәйләнеп, һырлығып барған кешегә әйтәләр. *Дегәнәк кеүек йәбешеү.*

**дежур**[1] *с.* Ниндәйҙер ижтимағи вазифаны йәки хеҙмәтте сиратлап башҡара торған. *Дежур дарыухана. Дежур табип. Дежур машина. Дежур булыу.*

**дежур**[2] *и.* Сиратлап башҡарылған ижтимағи вазифа йәки эш. *Дежурҙа булыу. Дежур тороу.*

**дежурный** *и. һөйл.* Ниндәйҙер вазифаны, эште сират тәртибендә башҡарыусы. *Дежурный булыу. Дежурныйҙар исемлеге.*

**дейеү** *и.*, **дейеү пәрейе.** Әкиәттәге яуыз, яман мифик зат (Көнсығыш мифологияһында киң таралған). *Өс башлы дейеү. Дейеү менән алышыу. Дейеүҙәр батшалығы.*

**декабрь (декабрҙә)** *и.* Календарь йылының ун икенсе айы. *Декабрь башы. Декабрь һыуыҡтары. Декабрь тамамланыу.*

**декада** *и.* **1.** Ун көнгә тигеҙ ваҡыт, айҙың өстән бер өлөшө; ун көн. *Айҙың беренсе декадаһы.* **2.** Нимәгәлер арналған ун көнлөк. *Башҡортостандың әҙәбиәт һәм сәнғәт декадаһы. Музыка декадаһы.*

**декларация** *и.* **1.** Хөкүмәт исеменән ниндәйҙер ҡарарҙың тантаналы рәүештә белдерелеүе һәм шул белдереү яҙылған ҡағыҙ. *Декларацияға ҡул ҡуйыу. Мөстәҡиллек тураһында декларация.* **2.** Кәрәкле мәғлүмәттәр бирә торған ҡайһы бер рәсми документтарҙың атамаһы. *Хоҡуҡ декларацияһы. Сауҙа декларацияһы.*

**декрет** *и.* Юғары властың закон көсөндәге ҡарары; указ, ҡанун. *Ер тураһындағы декрет. Декрет сығарыу. Декрет тәртибендә.* ♦ **Декрет отпускыһы** ауырлы ҡатындарға бирелә торған махсус ял ваҡыты.

**делегат** *и.* Ойошма, коллектив һ. б. исеменән ҡайҙалыр һайланған йәк тәғәйенләнгән кеше; вәкил. *Конференция делегаты. Делегат һайлау. Делега танытмаһы.*

**делегация** *и.* Ниндәйҙер ойошма, коллектив, дәүләт һ. б. исеменән вәки итеп ебәргән делегаттар төркөмө. *Сит ил делегацияһы. Хөкүмәт делегацияһы*

**дельфин** *и.* **1.** Тешле киттар төркөмөнә ҡараған һөтимәр диңгеҙ хайуань *Дельфин көтөүе. Дельфин майы.* **2.** *спорт.* Йөҙөү ысулының бер төрө. *Дельфи ысулы менән йөҙөү.*

**демократ** *и.* **1.** Демократия яҡлы кеше. *Рус революцион демократтарь* **2.** Демократик партия ағзаһы. *Демократтар йыйылышы.*

**демократизм** *и.* Демократияны таныу һәм тормошҡа ашырыу. *Проф союздар демократизмы. Демократизм принциптары.*

**демократия** *и.* **1.** Йәмғиәттең власть башында халыҡ тороуына, халыҡты дәүләт эштәренә идара итеүенә нигеҙләнгән сәйәси ҡоролош формаһы. *Халы демократияһы.* **2.** Бөтә коллектив ҡатнашлығында тормошҡа ашырыл торған етәкселек формаһы.

**демонстрант** *и.* Демонстрацияла ҡатнашҡан кеше. *Демонстрантта үтеүе. Демонстранттар төркөмө.*

**демонстрация** *и.* Ижтимағи-сәйәси уй-тойғоно белдереү йөҙөнән күмәклә сығып йөрөү (урамда һ. б.). *Демонстрацияға сығыу. Эшселәр демонстрацияһы*

**депо** *с.* Локомотив, вагон һ. б. ҡуйыу һәм ремонт үткәреү өсөн ҡулайлаш тырылған махсус бина. *Троллейбус депоһы. Депо эшсеһе. Депо оҫтаханаһь*
♦ **Пожар депоһы** янғын һүндереү машиналары ҡуйыла торған урын.

**депутат** *и.* Дәүләт ойошмаларына халыҡ тарафынан һайлап ҡуйылған ағза һайланған вәкил. *Дәүләт Думаһы депутаты. Депутат итеп һайлау. Депутат танытмаһы.*

**дер (дер-дер)** *оҡш.* Ваҡ итеп ҡалтыранған хәрәкәтте һәм шуның тауышы белдергән һүҙ. *Дер-дер итеү.*

**дерелдәү (дерелдә-)** *ҡ.* **1.** Дер-дер һелкенеү, ҡалтырау. *Тән дерелдә Дерелдәп өшөү.* **2.** *күсм.* Ҡурҡып ҡалтыраныу. *Хужа алдында дерелдәп тороу.*

**деталь (деталде)** *и.* **1.** Машинаның, механизмдың бер өлөшө. *Яңы детал Деталь ҡуйыу.* **2.** Айырым бер бәләкәй өлөш. *Эштең бөтә деталдәрен белеү.*

**дефис** *и.* Ике һүҙҙе тоташтырған ҡыҫҡа һыҙыҡ; һыҙыҡса. (*мәҫ.* халыҡ-ара *Дефис аша яҙыу. Дефис ҡуйыу.*

**дефицит** *и.* **1.** Сығымдың килемдән артыуы. *Бюджет дефициты. Дефицитты кәметеү.* **2.** Ниҙеңдер етешмәүе. *Яғыулыҡ дефициты. Дефицит тауар.*

**дециметр** *и.* Метрҙың ундан бер өлөшөнә тиң булған үлсәү берәмеге, ун сантиметр.

**джаз** *и.***1.** Күңел асыу өсөн тәғәйенләнгән еңел, күберәк бейеү көйө. *Джаз музыкаһы.* **2.** Күбеһе тынлы һәм һуғып уйнау ҡоралдарынан торған ҡатнаш оркестр. *Джаз оркестры. Джаз уйыны.*

**джемпер** *и.* Баштан кейелә торған элмәкһеҙ, яғаһыҙ бәйләнгән кофта. *Ирҙәр джемперы. Джемпер бәйләү.*

**джунгли** *и.* Кеше үтә алмаçлыҡ һаҙлыҡлы ҡуйы тропик урман.

**дзот** *и.* Дошман утынан ышыҡланып атыу өсөн бүрәнә менән тупраҡтан эшләнгән һаҡланыу ҡоролмаһы. *Дзот төҙөү. Дзоттан атыу.*

**диагноз** *и.* Ауырыуҙың төрө, асылы, хәле тураһында табип билдәләмәһе. *Диагноз ҡуйыу. Клиниканың диагноз бүлеге.*

**диалект** *и. лингв.* Дөйөм халыҡ теленән айырылып торған ерле һөйләш. *Башҡорт теленең диалекттары. Диалект һүҙе.*

**диалектизм** *и.* Берәй диалектта, һөйләштә генә ҡулланыла торған һүҙ (дөйөм әҙәби телгә ҡарата). *Лексик диалектизм.*

**диаметр** *и.* Үҙәк аша үтеп, түңәрәк есемдең ике нөктәһен тоташтырған тура һыҙыҡ. *Түңәрәктең диаметры. Ағас олононоң диаметры.*

**диафильм** *и.* Диапозитивтарҙан төҙөлгән фильм. *Диафильм ҡарау.*

**диван** *и.* Һөйәлеп ултырыу һәм ятыу өсөн йомшаҡ итеп эшләнгән өй ҡаралдыһы. *Диванға ултырыу. Диван мендәре.*

**дивизия** *и.* Бер нисә полк йәки бригаданан торған ҙур ғәскәри берләшмә. *Танк дивизияһы. Дивизия врачы. Дивизия командиры.*

**диктант** *и.* Дөрөç яҙырға күнектереү өсөн әйтеп яҙҙырыла торған яҙма эш. *Диктант яҙҙыртыу. Диктант дәфтәре.*

**диктор** *и.* Радио һәм телевидение тапшырыуҙарының тексын микрофон алдында уҡыусы. *Диктор булып эшләү. Диктор телмәре.*

**диҡҡәт** *и.* Нимәгәлер ныҡ йүнәлтелгән күңел, уй; иғтибар. *Диҡҡәт биреү. Диҡҡәтте йәлеп итеү. Диҡҡәт менән тыңлау. Диҡҡәт менән уҡыу.*

**дилбегә** *и.* Егелгән ат менән идара итеү өсөн йүгәнгә ике яҡлап беркетелгән оҙон бау. *Ҡайыш дилбегә. Сүс дилбегә. Дилбегә тотоу.* ♦ **Дилбегәне ҡулда тотоу** идара итеүҙә хужалыҡты бирмәү.

**димләү (димлә-)** *к.* **1.** Кешене нимәгәлер күндерергә тырышыу; өгөтлә *Уҡырға димләү. Димләп күндереү.* **2.** Кемделер кейәүгә йәки кәләшкә тәҡди итеп өгөтләү. *Ҡыҙ димләү.*

**дин** *и.* Донъяның барлыҡҡа килеүен һәм булмышын тәбиғәттән тыш көск генә ҡайтарып ҡалдырған ҡараш һәм шуға нигеҙләнгән йолалар системаһ *Ислам дине. Христиан дине. Дингә ышаныу.* ♦ **Дин тотоу** дингә ышанып, дин йолаларҙы үтәү.

**диндар** *с.* Динле, дин тотҡан. *Диндар булыу.*

**дини** *с.* Дингә ышаныуға нигеҙләнгән, дин менән бәйле. *Дини ҡараш. Дин мәктәп.*

**диңгеҙ** *и.* Ниндәйҙер кимәлдә ҡоро ер менән уратып алынған донъя океа ының бер өлөшө. *Аҡ диңгеҙ. Ҡара диңгеҙ. Асыҡ диңгеҙ. Диңгеҙ балығы. Диңге һыуы. Диңгеҙ бесәйе. Диңгеҙ кәбеҫтәһе. Диңгеҙ һыйыры.* ♦ **Диңгеҙ тубыҡта** ҡурҡып-нитеп тормау. **Ете диңгеҙ аръяғында** бик алыҫта.

**диплом** *и.* **1.** Уҡыу йортон тамамлау йәки ниндәйҙер исем һәм дәрәж бирелеү тураһындағы рәсми документ; таныҡлыҡ. *Диплом алыу. Филологи фәндәре кандидаты дипломы.* **2.** Конкурс, күргәҙмә һ. б. ерҙә яулаған уңыш яҡшы эш һөҙөмтәһе өсөн бирелгән маҡтау ҡағыҙы. *Беренсе дәрәжәле диплом Еңеүсе дипломы.* ♦ **Диплом эше** уҡыу йортон тамамлағанда башҡарыла торға үҙ аллы эш.

**дипломат** *и.* **1.** Сит илдәр менән дәүләт-ара бәйләнеш тәьмин итеү өсө хөкүмәт тарафынан билдәләнгән вазифалы кеше. *Профессиональ дипломат Дипломат вазифаһы.* **2.** *һөйл.* Кешеләр менән бик оҫта мөғәмәлә итә белгә кешегә ҡарата әйтелә. *Дипломат булыу.* **3.** *һөйл.* Китап кеүек ваҡ-төйәк нәм һалып йөрөтә торған бәләкәй сумаҙан. *Күн дипломат.*

**дипломатия** *и.* Хөкүмәттең халыҡ-ара дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашыр торған рәсми эшмәкәрлеге. *Дипломатия өлкәһендәге оҫталыҡ.*

**директор** *и.* Берәй предприятие, ойошма йәки уҡыу йортоноң етәксеһе башлыҡ. *Завод директоры. Мәктәп директоры. Директор итеп тәғәйенләү.*

**дирижабль** *и.* Газ тултырылған корпуслы, винты һауа менән хәрәкәтк килә торған двигателле еңел осҡос һауа аппараты. *Дирижаблдә осоу.*

**дирижер** *и.* Оркестр, хор, опера һәм балет спектаклдәренә етәкселек иткә кеше. *Баш дирижер. Оркестр дирижеры. Дирижер таяғы.*

**диспут** *и.* Фәнни, әҙәби һ. б. тема буйынса халыҡ алдында үткәрелгән һү көрәше; бәхәс. *Әҙәби диспут. Диспут ойоштороу. Диспутта ҡатнашыу.*

**диуана** *с.* Аҡылы кәм; йүләр, тиле. *Диуана кеше. Диуана булыу.*

**доға** *и. дини.* Аллаға һыйынғанда йәки дини йолаларҙы башҡарғанда уҡыла торған билдәле бер дини текст. *Доға уҡыу. Доға ятлау.* ♦ **Доға ҡылыу** доға уҡып, ҡуш ус менән битте һыйпау.

**доклад** *и.* Билдәле бер темаға халыҡ алдында һөйләгән телмәр. *Хисап доклады. Доклад һөйләү. Доклад яҙыу.* ♦ **Өҫтәлмә доклад** төп докладҡа өҫтәп һөйләнгән бәләкәй доклад.

**докладной** *и. һөйл.* Етәксегә эш тураһында яҙып биргән рәсми белдереү. *Докладной яҙыу.*

**докладсы** *и.* Доклад һөйләүсе. *Докладсыны тыңлау.*

**доктор** *и. һөйл.* Табип. *Теш докторы. Докторға күренеү. Доктор ҡушыуы.*

**документ** *и.* **1.** Берәй нәмәне раҫлаған, нимәгәлер хоҡуҡ бирә торған рәсми эш ҡағыҙы. *Технологик документ.* **2.** Кешенең шәхесен раҫлаған ҡағыҙ; таныҡлыҡ. *Документ күрһәтеү. Документ тултырыу.* **3.** *кит.* Тарихи әһәмиәткә эйә булған әҙәби әҫәр, һүрәт, яҙма һ. б. *Тарихи документтар.*

**доллар** *и.* АҠШ, Канада, Австралия һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙәге аҡса берәмеге. *Америка доллары. Долларҙы һумға алмаштырыу. Доллар курсы.*

**домино** *и.* Өҫкө яғына мәрәй һаны яҙылған 28 шаҡмаҡ һәм шул шаҡмаҡтар менән уйнай торған уйын. *Домино уйнау. Домино һуғыу.*

**донъя** *и.* **1.** Сикһеҙ киң арауыҡтағы бөтә матди есемдәр берәмеге; йыһан. *Донъяның барлыҡҡа килеүе. Донъя яралыу.* **2.** Ер шарының бөтә булған өҫтө, унда булған барлыҡ тәбиғәт, кешелек донъяһы, мөхит. *Донъя йөҙө. Кешелек донъяһы. Донъя әйләнәләй сәйәхәт. Донъяның һәр тарафында булыу. Донъяла йәшәү. Донъя яҡшырып китеү. Донъя баҙары. Беренсе донъя.* **3.** Йәнле тәбиғәттең айырым бер өлкәһе. *Үҫемлектәр донъяһы. Хайуандар донъяһы.* **4.** *күсм.* Кеше йәшәгән тормош. *Донъяла йәшәү. Донъя көтөү. Донъяны аңлау. Донъянан туйыу. Донъя күргән. Донъя мәшәҡәттәре.* ♦ **Донъяға килеү** тыуыу. **Донъя йөгөн тартыу** тормош көтөүҙәге төп эштәрҙе башҡарыу. **Донъя күреү** 1) ил, ер-һыу күреп йөрөү; 2) күпте күреп, баштан күпте кисереү. **Донъя ҡороу** башлы-күҙле булып йәшәй башлау. **Донъя ҡуйыу** вафат булыу, үлеү. **Донъяһын онотоу** төп эшен онотоп, икенсе нәмә менән мәшғүл булыу. **Донъяһы теүәл (теүәлләнеү)** күңел ҡәнәғәтлеге, хуш күңеллелек. **Теге донъяға китеү** вафат булыу, үлеү.

**дороп** *и.* Һунар мылтығынан атыу өсөн ҡулланылған ваҡ ҡына йомро ҡурғаш. *Ваҡ дороп. Эре дороп. Дороп менән атыу.*

**дошман** *и.* **1.** Үслек, хаслыҡ тотҡан, насар мөнәсәбәттә булған кеше. *Дошман булыу.* **2.** Һуғышта ҡапма-ҡаршы торған яҡ. *Дошманды еңеү. Дошман ғәскәре. Дошман позицияһы.* **3.** Ижтимағи ҡарашы һәм синфи булмышы менән ҡапма-ҡаршы кеше. *Синфи дошман. Халыҡ дошманы.* ♦ **Дошман күреү** дошман

тип иҫәпләү. **Дошман эше (һүҙе)** насарлыҡҡа, яуызлыҡ эшләүгә ҡоролған эш йәки һүҙ.

**дөбөр (дөбөр-дөбөр, дөбөр-дабыр, дөбөр ҙә дабыр)** *оҡш.* Һуғылып-бәрелеп сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Дөбөр итеп күк дөһөрләне.*

**дөбөрләү (дөбөрлә-)** *ҡ.* Дөбөр-дөбөр итеү, дөбөр-дөбөр килеү. *Күк дөбөрләй.*

**дөгө** *и.* Йылы яҡтарҙа һуғарып үҫтерелә торған, ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған башаҡлы, аҡ оҙонсараҡ орлоҡло үҫемлек һәм шул үҫемлектең туҡланыу өсөн ҡулланылған орлоғо. *Дөгө сәсеү. Дөгө үҫтереү. Дөгө бутҡаһы. Дөгө ярмаһы.*

**дөйөм** *с.* **1.** Бөтәһенә лә ҡағылышлы, мөнәсәбәтле; бөтәһен дә эсенә алған. *Дөйөм етешһеҙлек. Дөйөм ҡағиҙә. Дөйөм хәл. Дөйөм эш.* **2.** Бөтәһенә лә ҡараған, уртаҡ файҙаланыуға булған. *Дөйөм ер. Дөйөм милек. Дөйөм һығымта. Дөйөм план. Дөйөм тәьҫорат.* ♦ **Дөйөм белем** махсус булмаған белем. **Дөйөм йыйылыш** бер коллектив, предприятие, ойошманың бөтә ағзалары ҡатнашҡан йыйылыш. **Дөйөм ятаҡ** бер коллектив, предприятие, уртаҡ ойошмала эшләүселәр йәки уҡыусылар бергә йәшәй торған йорт.

**дөйә** *и.* Бер йәки ике үркәсле, сүл, дала яҡтарында аҫралған, сыҙамлығы менән айырылып торған ҡуш тояҡлы эре көйөшлө мал. *Бер үркәсле дөйә. Дөйә балаһы. Дөйә ите. Дөйә аҫрау. Дөйә йөнө.* ♦ **Дөйә ҡойроғо ергә еткәс** бик оҙаҡ ваҡыттан һуң (үтәлеү). **Төймәләйҙе (энәләйҙе) дөйәләй итеү** нимәнелер ныҡ арттырып, ҡабартып һөйләү (йәки күрһәтергә тырышыу). *Дөйәләй буйың булғансы, төймәләй аҡылың булһын.* (Әйтем.)

**дөйәғош** *и.* Осмай, шәп йүгерә торған оҙон аяҡлы, оҙон муйынлы, ҙур кәүҙәле Африкала йәшәгән ҡош. *Дөйәғош ҡауырһыны.*

**дөмөгөү (дөмөк-)** *ҡ. тупаҫ.* Үлеү, юҡ булыу. *Дошман дөмөктө.* ♦ **Дөмөгөп киткер (дөмөк, дөмөкһөн, дөмөгөп кит)** үлһәң ярар ине, юҡ булһаң ине (ҡарғау һүҙе).

**дөп (дөп-дөп)** *оҡш.* **1.** Ауыр нәмә төшкәндә ҡаты ергә бәрелгән тауышты белдергән һүҙ. *Дөп-дөп итеп йүгерештеләр.* **2.** *күсм.* Көтөлмәгән хәлдән ҡурҡыуҙан йөрәктең йыш тибеүен белдерә. *Йөрәге дөп-дөп тибә.*

**дөрөҫ** *с.* **1.** Ысынбарлыҡты теүәл күрһәткән, хәҡиҡәткә тура килгән; ысын, хаҡ. *Дөрөҫ һүҙ. Дөрөҫ эш. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.* (Әйтем.) *Дөрөҫөн һөйләү. Дөрөҫтө әйтеү. Дөрөҫ яуап биреү. Дөрөҫ уҡыу.* **2.** Ғәҙәттәге хәл-торошҡа ярашлы, аныҡ, сәләмәт (кеше хәленә ҡарата). *Иҫе дөрөҫ. Дөрөҫ аңлау.*

**дөрөҫлөк (дөрөҫлөгө)** *и.* Дөрөҫ булған хәл. *Дөрөҫлөгөн белеү. Дөрөҫлөгөн тикшереү. Дөрөҫлөккә барыу. Дөрөҫлөктө эҙләү. Үҙеңдә булмаған дөрөҫлөктө кешенән эҙләмә.* (Әйтем.)

**драма** *и.* **1.** Сәхнәлә башҡарыу өсөн диалог формаһында яҙылған әҙәби әҫәр төрө. *Өс шаршаулы драма. Драма театры. Драма әҫәре. Драма артисы. Драма түңәрәге.* **2.** Шул төрҙәге етди эстәлекле әҫәр (комедия һәм трагедиянан айырмалы). *Флорид Бүләков драмалары.*

**драматургия** *и.* **1.** Драматик сәнғәт. *Драматургия әҫәрҙәре. Драматургия мәсьәләләре. Драматургия оҫталығы.* **2.** *йыйн. әҙ.* Драма әҫәрҙәре йыйылмаһы (ниндәйҙер яҙыусының, халыҡтың, осорҙоң һ. б. драматик әҫәрҙәре). *Башҡорт драматургияһы. Б. Бикбай драматургияһы.*

**дуға** *и.* **1.** Ике тәртәне ҡамытҡа нығытып ҡуйыу өсөн, нәҙек ағастан бөгөп, ярым түңәрәк итеп эшләнгән ат егеү ҡорамалы. *Ҡайын дуғаһы. Тал дуға.* **2.** Түңәрәк өлөшө йәки кәкре һыҙыҡ өлөшө. *Циркуль менән дуға яһау.*

**думбыра** *и.* Ҡайһы бер төрки халыҡтарында сиртеп уйнай торған оҙон тотҡалы ҡыллы музыка ҡоралы. *Башҡорт думбыраһы. Думбыра сиртеү.*

**дуңғыҙ** *и.* Хужалыҡта ит, май, тиреһе өсөн аҫралған ҡыҫҡа аяҡлы, тоташ кәүҙәле, томшоғо йомро, айыры тояҡлы хайуан; сусҡа. *Ата дуңғыҙ. Инә дуңғыҙ. Дуңғыҙ майы.*

**дусар** *с.* Ниндәйҙер бер хәлгә төшкән, юлыҡҡан. *Бәхетһеҙлеккә дусар кеше.* ♦ **Дусар булыу** 1) ниндәйҙер бер хәлгә юлығыу; 2) кемгәлер юлығыу, йөҙгә-йөҙ килеү, осрау. **Дусар итеү** 1) ниндәйҙер бер хәлгә юлыҡтырыу; 2) кемгәлер юлыҡтырыу, осратыу.

**дуҫ** *и.* **1.** Үҙ-ара яҡын, ышаныс мөнәсәбәттәре менән бәйле кеше, яҡын иптәш; *киреһе* дошман. *Йән дуҫ. Ҡәҙерле дуҫ. Тоғро дуҫ. Ысын дуҫ. Йәшлек дуҫы. Дуҫ булыу. Дуҫ итеү. Дуҫ күреү. Айырылмаҫ дуҫыңа онотолмаҫ һүҙ әйтмә.* (Әйтем.) *Дошманыңды һөйөндөрмә, дуҫыңды көйөндөрмә.* (Мәҡәл.) **2.** *с. мәғ.* Бик яҡын, йылы мөнәсәбәтле. *Дуҫ егет. Дуҫ ҡыҙ. Дуҫ күреү. Дуҫ йәшәү.*

**дуҫлашыу (дуҫлаш-)** *ҡ.* Үҙ-ара дуҫлыҡ мөнәсәбәтенә инеү, дуҫ булыу. *Дуҫлашып алыу. Дуҫлашып бөтөү.*

**дуҫлыҡ (дуҫлығы)** *и.* **1.** Дуҫтарға хас мөнәсәбәт. *Ысын дуҫлыҡ. Дуҫлыҡ тойғоһо. Дуҫлыҡ бәйләнеше. Дуҫлыҡ сәләме.* **2.** Теләктәшлек, берҙәмлек. *Милләттәр дуҫлығы. Халыҡ-ара дуҫлыҡ.*

**душ** *и.* **1.** Һыу һиптереп ҡойона торған ҡулайлама. *Һыуыҡ душ. Йылы душ. Душ бүлмәһе. Душта йыуыныу.* **2.** Тәнгә һыу һиптереп дауалай торған гигиена һәм һыу дауаһы процедураһы. *Шарко душы.*

**дүңгәләк** *и.* **1.** Түңәрәк яһап остары тоташтырылған йомро тимер; ҡулса *Көрәк дүңгәләге. Сыйыр дүңгәләге.* **2.** Шуға оҡшаш һәр төрлө түңәрәк нәмәләр *Төтөн дүңгәләктәре. Дүңгәләк һымаҡ.*

**дүрткел** *с.* **1.** Дүрт яғы бер тигеҙ. *Дүрткел өҫтәл. Дүрткел шәл. Дүрткел булыу. Дүрткел итеү.* **2.** *и. мәғ.* Дүрт яғы бер тигеҙ геометрик фигура; квадрат *Дүрткел рәүешендә.*

**дүшәмбе** *и.* Аҙнаның беренсе көнө, йәкшәмбе менән шишәмбе араһындағы көн. *Дүшәмбе көн. Дүшәмбелә эш башлау.*

**дым** *и.* Нимәгәлер әҙ генә һеңешкән һыу; еүешлек. *Тупраҡ дымы. Дым тартыу.* ♦ **Дым ҡаплау** көҙҙән һөрөлгән ерҙе яҙ көнө өҫтән тырматып сығыу

**дымланыу (дымлан-)** *ҡ.* **1.** Дым һеңеү, дымлы булыу. *Иген дымлана. То дымланған.* **2.** Күҙгә бер аҙ йәш килеү, йәшләнеү. *Уның күҙҙәре дымланды.*

**дымлы** *с.* Дымланған, еүеш. *Дымлы ашлыҡ. Дымлы һауа. Дымлы булыу.*

**дымлылыҡ (дымлылығы)** *и.* Нимәнеңдер дымлы булыу кимәле. *Орлоҡтон дымлылығы. Һауаның дымлылығы. Дымлылыҡ үлсәүесе.*

**дымҡыл** *с.* Әҙерәк еүеш, бер аҙ дымлы. *Дымҡыл һауа.*

**дырылдау (дырылда-)** *ҡ.* Дыр-дыр итеү, дыр-дыр килеү. *Машина дырылдай.*

**дыуамал** *с.* Күп уйлап тормай, ҡыҙыулыҡ менән эш итеүсән; еңел холоҡло *Дыуамал кеше. Дыуамал уй. Дыуамал булыу.*

**дәлил** *и.* Берәй эш-хәлде раҫлай, дөрөҫләй торған нигеҙ, фекер. *Матди дәлил. Дәлил булыу. Дәлил килтереү.*

**дәрес** *и.* **1.** Берәй предмет буйынса уҡыу-уҡытыуға бүленгән ваҡыт; һабаҡ. *Башҡорт теле дәресе. Биш дәрес уҡыу. Дәрес биреү.* **2.** *һөйл.* Уҡыусыға киләһе һабаҡҡа әҙерләп килеү өсөн өйгә бирелгән эш; өйгә эш. *Дәрес әҙерләү.* ♦ **Асыҡ дәрес** тәжрибә уртаҡлашыр өсөн уҡытыусылар алдында үткәрелгән дәрес.

**дәреслек (дәреслеге)** *и.* Билдәле бер фәнде уҡытыу, өйрәтеү өсөн тәғәйенләнгән китап. *Математика дәреслеге. Дәреслек сығарыу. Дәреслек төҙөү. Дәреслек авторы.*

**дәррәү** *р.* **1.** Бер юлы, берҙәм. *Дәррәү көлөп ебәреү. Дәррәү ҡуҙғалыу.* **2.** Ырамлы, тиҙ, шәп. *Эш дәррәү китте.*

**дәрт** *и.* Йәшәргә, эшкә, уҡыуға һ. б. булған күңел күтәренкелеге, көслө ынтылыш, ҙур теләк; илһам. *Йәшлек дәрте. Уҡыу дәрте. Дәрт менән эшләү. Дәрт биреү. Күңелгә дәрт һалыу. Дәрт итеү. Дәрт уяныу.*

**дәртле** *с.* Дәртле, илһамы булған. *Дәртле кеше. Дәртле бейеү. Дәртле булыу.*

**дәртләндереү (дәртләндер-)** Дәрт биреү, дәрт уятыу. *Эшкә дәртләндереү.*

**дәртләнеү (дәртлән-)** *к.* Дәрт итеү, дәрт уяныу, ашҡыныу, рухланыу. *Эшкә дәртләнеү. Дәртләнеп йырлап ебәреү. Дәртләнеп уҡыу.*

**дәрәжә** *и.* **1.** Йәмғиәттә тотҡан урын, ижтимағи кимәл; абруй. *Дәрәжәһе булыу. Дәрәжәһе төшөү. Юғары дәрәжәгә күтәрелеү.* **2.** Рәсми бирелә торған эш-хеҙмәт баҫҡысын күрһәткән исем. *Ғилми дәрәжә. Профессор дәрәжәһен алыу.* **3.** Нимәнеңдер сағыштырма үлсәм кимәле. *Белем дәрәжәһе. Дымлылыҡ дәрәжәһе. Беренсе дәрәжәле диплом.* **4.** Эш-хәлдең булмыш кимәле. *Ғәйептең дәрәжәһе. Илар дәрәжәгә етеү. Тейешле дәрәжәлә өйрәнеү.*

**дәүер** *и.* **1.** Йәмғиәт тормошоноң үҙенә хас ваҡиғалар менән билдәләнгән бер ваҡыты; осор. *Тарихи дәүер. Хәҙерге дәүер.* **2.** Билдәле бер ваҡыт араһы; заман. *Балалыҡ дәүере. Йәшлек дәүере.*

**дәүләт** *и.* **1.** Илдә тәртип һаҡлау, ундағы ҡаршылыҡтарҙы булдырмау һәм үҙ власын ғәмәлгә ашырыу өсөн башында хөкүмәт, уның органдары торған сәйәси ойошма һәм ошондай сәйәси ойошмаһы булған ил. *Буржуаз дәүләт. Дәүләт власы. Дәүләт законы. Дәүләт милке. Дәүләт органдары.* ♦ **Дәүләт имтихандары** юғары уҡыу йорттарында сығарылыш һынауҙары. **2.** Байлыҡ, мал-мөлкәт. *Дәүләт туплау. Киң дәүләт менән йәшәү.*

**дәүмәл** *и.* **1.** Ниҙеңдер күләме, ҙурлығы. *Есемдең дәүмәле. Эштең дәүмәле.* **2.** Үлсәргә һәм иҫәпләргә мөмкин булған һәр төрлө нәмә. *Даими дәүмәл. Тиҙлек дәүмәле. Һандың абсолют дәүмәле.*

**дәфтәр** *и.* Яҙыу, рәсем төшөрөү өсөн тышлап бергә беркетелгән таҙа ҡағыҙ биттәре. *Буйлы дәфтәр. Шаҡмаҡлы дәфтәр. Дәфтәр бите. Көндәлек дәфтәре. Иҫтәлек дәфтәре.* ♦ **Ҡуйын дәфтәре** бәләкәй генә дәфтәр; блокнот.

# Ҙ

**ҙур** *с.* **1.** Дәүмәле, күләме, ҡеүәте, көсө саманан артыҡ; *киреһе* бәләкәй. *Ҙур ағас. Ҙур алма. Ҙур йылға. Ҙур маҡсат. Ҙур тәнәфес. Ҙур теләк. Ҙур уңыш. Ҙур шатлыҡ. Ҙур ышаныс.* **2.** Йәш яғынан оло; өлкән. *Ҙур ҡыҙым. Ҙур улы. Ҙур малайҙар.* **3.** Әһәмиәткә, дәрәжәгә эйә булған; мөһим, оло. *Ҙур байрам. Ҙур ваҡиға. Ҙур мәсьәлә. Ҙур түрә. Ҙур урын. Ҙур яҙыусы.*

**ҙурайыу (ҙурай-)** *к.* **1.** Дәүмәл, күләм үлсәме, көс-кимәле артыу. *Ҡыҙҙың күҙҙәре ҙурайған. Ғаилә ҙурая.* **2.** Йәш үҫеү, өлкәнәйеү. *Ҙурайып китеү.*

**ҙурлау (ҙурла-)** *к.* Ҡәҙер-хөрмәт итеү, ололау, хөрмәтләү. *Ҙурлап ҡаршы алыу. Батырлығы өсөн ҙурлау.*

**ҙурлыҡ (ҙурлығы)** *и.* Нимәнеңдер дәүмәл, күләм үлсәме. *Бүлмәнең ҙурлығы. Кәмәнең ҙурлығы.*

# Е

**ебегән** *с.* **1.** Шыйыҡ, һыу һымаҡ нәмә тейеү арҡаһында йомшаҡҡа әйләнгән, йомшаған. *Ебегән икмәк.* **2.** *күсм.* Үтә йомшаҡ тәбиғәтле; булдыҡһыҙ. *Ебегән малай.*

**ебеткәк** *с.* Йылыға ирегән; епшек, еүеш. *Ебеткәк буран. Ебеткәк көн. Ебеткәк ҡар.*

**ебеү (ебе-)** *ҡ.* **1.** Һыуға еүешләнеп, йомшау. *Ебегән икмәк.* **2.** *күсм.* Ихтыяр көсөн юғалтып, йомшарыу. *Ебегән егет. Ебеп китеү.*

**ебәк (ебәге)** *и.* **1.** Тут ағасы ҡорто бүлеп сығарған һәм һауала еп һымаҡ булып ҡата торған матдә. *Ебәк ҡорто.* **2.** Шул матдәнән йәки яһалма сүстән эшләнгән еп һәм нәфис туҡыма. *Ебәк менән сигеү. Ебәккә мәрйен теҙеү. Аҡ ебәк. Ебәктән күлдәк тегеү.* **3.** *с. мәғ.* Шундай туҡымаларҙан тегелгән, яһалған. *Ебәк бау. Ебәк билбау. Ебәк яулыҡ.*

**ебәреү (ебәр-)** *ҡ.* **1.** Кемделер билдәле бер урынға ниндәйҙер маҡсат, эш-йомош менән оҙатыу. *Уҡырға ебәреү. Эшкә ебәреү. Вәкил итеп ебәреү. Илсе ебәреү.* **2.** Ҡайҙалыр китергә, йүнәлергә мөмкинлек биреү, ирек биреү. *Дәрестән ебәреү. Ҡошто ситлектән сығарып ебәреү. Яҡын ебәреү.* **3.** Нимәнелер икенсе урындағы кешегә тапшырыу өсөн оҙатыу. *Аҡса ебәреү. Күстәнәс ебәреү. Сәләм ебәреү. Хат ебәреү.* **4.** Хәрәкәткә килтереү, бер йүнәлештә хәрәкәт иттереү. *Газ ебәреү. Сәғәтте ебәреү.*

**егет** *и.* **1.** Өлгөргәнлек осорона еткән, әлегә өйләнмәгән ир кеше. *Батыр егет. Дәртле егет. Йәш егет. Егет булыу.* **2.** *күсм.* Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, уңғанлыҡ һымаҡ ыңғай сифаттарға эйә булған шәп кеше; ир. *Ысын егет икәнһең. Илдә бер егет. Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға.* (Әйтем.) *Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.* (Мәҡәл.) *Егет һүҙе бер булыр.* (Әйтем.)

**егетлек (егетлеге)** *и.* **1.** Егет булыу осоро, егет саҡ. *Егетлек осоро.* **2.** Ысын ирҙәргә хас булған батырлыҡ, уңғанлыҡ, тоғролоҡ, тәүәккәллек һ. б. *Егетлек күрһәтеү. Егетлек эшләү.*

**егеү (ек-)** *ҡ.* **1.** Екке малға арба, сана һ. б. тағыу. *Ат егеү. Үгеҙ егеү. Арбаға егеү. Һабанға егеү.* **2.** *күсм.* Эшкә ҡушыу; нык эшләтеү. *Эшкә егеү. Техниканы егеү.*

**егәрле** *с.* Эш һөйөүсән, уңған, булдыҡлы. *Егәрле кеше. Егәрле булыу. Егәрле булып үҫеү. Егәрленең ҡулы ете.* (Әйтем.)

**еҙ** *и.* Ҡурғаш ҡушылған баҡыр иретмәһе. *Еҙҙән эшләнгән. Еҙ батмус. Еҙ ҡурай. Еҙ ҡыңғырау.*

**еҙнә** *и.* Апайҙың ире һәм уға өндәшеү һүҙе. *Еҙнә булыу. Кем еҙнәһе? Еҙнә кеше.*

**ейән** *и.* Ҡыҙыңдың йәки улыңдың улы. *Ейәнде ҡарап үҫтереү.*

**ейәнсәр** *и.* Ҡыҙыңдың йәки улыңдың ҡыҙы. *Ейәнсәре өләсәһенә һыу ташый.*

**ек (еге)** *и.* Үҙ-ара тығыҙ ятҡан бүрәнә, таҡта, таш һ. б. нәмәләр араһындағы тар асыҡлыҡ. *Бүрәнә еге. Иҙән еге. Екә инеү. Екә ҡыҫтырыу.* ♦ **Тау еге** ике тау араһындағы тар ғына үҙәк.

**екереү (екер-)** *ҡ.* Асыуланып ҡысҡырыу. *Екереп өндәшеү.*

**екән** *и.* Күрән һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, көрән, оҙонса башлы ялпаҡ күл ҡамышы һәм шуның йөнтәҫ башы. *Екән башлы ҡамыш.*

**ел** *и.* **1.** Һауа ағымының хәрәкәте. *Йомшаҡ ел. Көслө ел. Талғын ел. Әсе ел. Ел ыңғайы. Ел сығыу. Елгә ҡаршы барыу.* **2.** *күсм.* Ниҙендер көслө тәьҫире, йоғонтоһо. *Заман еле. Йәшлек еле.* ♦ **Бәхетһеҙгә (хәйерсегә) ел ҡаршы** нимәнеләр эшләгәндә ҡаршылыҡҡа осрағанда әйтелә. **Елгә китеү (осоу)** бушҡа сығыу. **Ел-ямғыр тейҙермәү** бик нық һаҡлау, ҡурсалау.

**елберләү (елберлә-)** *ҡ.* Осонан еңел генә елпелдәтеү; елбер-елбер итеү. *Елгә елберләү. Байраҡ елберләй.*

**елбәгәй** *и.* Лютик һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған һәм иртә яҙ сыға торған һары төҫтәге ваҡ урман сәскәһе. *Елбәгәйҙәр сәскә атҡан.*

**елбәҙәк** *с.* **1.** Елберләп осоп торған, еңел. *Елбәҙәк ҡар. Елбәҙәк япраҡ.* **2.** *күсм.* Осоп-төшөп торған, еңел ҡылыҡлы. *Елбәҙәк күңел. Елбәҙәк ҡыҙ.*

**елгәргес** *и.* Ашлыҡ елгәрә торған машина. *Елгәргескә һалыу.*

**елгәреү (елгәр-)** *ҡ.* **1.** Ашлыҡты ел йәки машина менән өрҙөрөп сүптән таҙартыу. *Орлоҡто елгәреү.* **2.** *күсм.* Ташлап ебәреү, ырғытыу. *Балыҡты яр ситенә елгәреү.* **3.** *күсм.* Ҡолас ташлап нық итеп һуғыу. *Берҙе елгәреп ебәреү.*

**елғыуар** *с.* Эш һөймәҫ, еңел холоҡло. *Елғыуар кеше. Елғыуар булып үҫеү.*

**елдереү (елдер-)** *ҡ.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү; елеү. *Елдереп барып етеү. Елдереп ҡайтыу. Машинала елдереү.*

**еле** *и.* **1.** Епкә күп итеп теҙгән эре ҡармаҡ. *Йылғаға еле һалыу.* **2.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең ергә һырығып үҫкән оҙон һабағы. *Еле ебәреү. Ҡыяр еле һуҙған.*

**елек (елеге)** *и.* Һөйәк ҡыуышлығындағы майлы матдә. *Елек һурыу. Елек майы.*

**елем** *и.* Йәбештерә торған шыйыҡса. *Ағас елеме. Ҡағыҙ елеме. Елем менән йәбештереү.*

**елемләү (елемлә-)** *к.* Елем һөртөү. *Елемләп йәбештереү.*

**елен** *и.* Һөтимәр инә хайуандарҙың һөт биҙҙәренән торған һөт биреү ағзаһы. *Һыйыр елене. Елен шешеү.*

**еленләү (еленлә-)** *к.* Елен тулышыу (быҙаулау, ҡолонлау, бәрәсләү һ. б. алдынан). *Тана еленләгән.*

**елеү (ел-)** *к.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү. *Атта елеү. Елеп килеү.*

**елкенеү (елкен-)** *к.* **1.** Ҡанат ҡағып үргә ынтылыу, елпенеү, талпыныу. *Елкенеп осоп китеү.* **2.** *күсм.* Нимәлер эшләргә дәртләнеп, ашҡынып китеү, ярһыу. *Йөрәк елкенә. Күңел елкенә. Елкенеп эшләү. Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен.* (Мәҡәл.)

**елкетеү (елкет-)** *к.* Хис, дәрткә тултырып ярһытыу, ашҡындырыу, елкендереү. *Күңелде елкетеү.*

**елкә** *и.* **1.** Муйындың артҡы яғы. *Елкә тамыры. Елкә соҡоро.* **2.** Өҫ кейеменең шул урынға тура килгән өлөшө. *Күлдәктең елкәһе. Кейемдең елкәһе туҙыу.* ♦ **Елкәгә менеү (ултырыу)** еңеп алыу, буйһондороу. **Елкәгә тейеү** 1) ашаған ашамлыҡ ныҡ майлы булыу сәбәпле ауыр ҡабул ителеү, күңелгә тейеү; 2) эштең ауырлығы, бер төрлөлөгө, ныҡ йонсотоу; ялҡытыу. **Елкәһе ҡалын** *йәки* **ҡалын елкә** мал-мөлкәтле, бай. **Елкәһе соҡор** *йәки* **соҡор елкә** ялҡау.

**елкән** *и.* Карапты, кәмәне ел менән йөрөтөү өсөн махсус кирелгән туҡыма. *Елкән ҡороу. Елкән яһау.*

**елкәнле** *с.* Елкән ҡуйылған. *Елкәнле кәмә.*

**елле**[1] *с.* Еле көслө булған, ел иҫеп торған. *Елле төн. Елле ямғыр.*

**елле**[2] *с.* Ҙур, яҡшы, шәп. *Елле ағас. Елле егет. Елле китап. Елле өй.*

**елләнеү (еллән-)** *к.* Елдән еләҫ алыу, елгә һыуыныу. *Һауаға сығып елләнеү.*

**елләтеү (елләт-)** *к.* Ел өрҙөрөп, һауаны яңыртыу. *Бүлмәне елләтеү. Елләтеп киптереү. Кейемде елләтеү. Елләтергә элеү.*

**елләү (еллә-)** *к.* **1.** Елле булыу, ел сығыу, ел өрөү. *Көн елләп тора.* **2.** Дымы бөтөү, кибеү. *Бесән бер аҙ елләгән.*

**елп** *оҡш.* Киҫкен хәрәкәт менән ҡапыл ҡуҙғалғанды, ҡапыл күренгәнде йәки юҡ булғанды белдергән һүҙ. *Елп итеү. Елп итеп сығып китеү.*

**елпелдәү (елпелдә-)** *к.* **1.** Елп-елп итеп тирбәлеү. *Уҫаҡ япраҡтары елпелдәй.* **2.** *р. мәғ.* Енел хәрәкәт менән, тиҙ генә, ҡапыл. *Елпелдәп килеп инеү.*

**елпеү (елпе-)** *к.* **1.** Талпынып ҡағыу (ҡанатты); һелкеү. *Ҡанат елпеп ҡағыныу. Ҡанаттарҙы елпеп ҡоштар оса.* **2.** Ел ҡуҙғатып нимәнелер һелкеү. *Ҡулъяулыҡты елпеү.*

**елтерәтеү (елтерәт-)** *к.* Тиҙ-тиҙ ҡабаландырып атлатыу, ҡапыл ҡуҙғатыу. *Елтерәтеп алып китеү. Елтерәтеп сығарып ебәреү.*

**еләк (еләге)** *и.* Роза сәскәләр ғаиләһенә ҡараған, тамырынан сыҡҡан мыйыҡтары ярҙамында үрсей торған аҡ сәскәле, тәмле ҡыҙыл емешле үҫемлек һәм уның емеше. *Ер еләге. Еләк сәскәһе. Еләк ултыртыу. Еләк йыйыу.* ♦ **Еләк кеүек** *йәки* **еләктәй** үҫеп буйға еткән таҙа, матур йәш ҡыҙҙарға ҡарата әйтелә. **Ҡайын еләге** роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған өсәр япраҡлы, тәпәшәк һабаҡлы, аҡ сәскәле, алһыу ҡыҙыл төҫтәге хуш еҫле оҙонсараҡ еләк. **Ҡурай еләге** роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек һәм шул ҡыуаҡтың хуш еҫле алһыу емеше.

**еләк-емеш** *и. йыйн.* Һәр төрлө еләк һәм емештәр. *Еләк-емеш баҡсаһы. Еләк-емеш магазины. Еләк-емеш ултыртыу.*

**еләклек (еләклеге)** *и.* Еләк күп үҫкән урын. *Еләклеккә тап булыу. Еләклектә йөрөү.*

**еләң** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙарға биҙәп, ситенә уҡа, түш-яурыны, бөйөрҙәренә тәңкә-мәрйен, уҡа-суҡтар баҫып, ҡашлы ҡаптырма ҡуйып, ә ирҙәргә ҡара тауарҙан киң, билһеҙ итеп тегелә торған эсе мамыҡһыҙ, оҙон өҫ кейеме. *Атлас еләң. Бәрхәт еләң. Тәңкәле еләң. Уҡалы еләң. Еләң кейеү. Еләң тегеү.*

**еләҫ** *с.* Һалҡынса ғына еле булған, тынсыу булмаған. *Еләҫ ел. Еләҫ көн. Еләҫ булыу.*

**ем** *и.* **1.** Ҡош-ҡорт, балыҡ ашай торған һәр төрлө аҙыҡ. *Балыҡ еме. Тауыҡ еме. Ем сүпләү. Ем һибеү.* **2.** Ҡаты ҡабыҡлы төрлө орлоҡтоң эске өлөшө. *Көнбағыш еме. Ҡабаҡ еме.*

**емелдәү (емелдә-)** *к.* Ем-ем итеү. *Йондоҙҙар емелдәй.*

**емерек** *с.* Емерелеп, ҡыйрап төшкән. *Емерек йорт. Емерек мейес. Емерек көйө ятыу.*

**емерелеү (емерел-)** *к.* Боҙолоп, ватылып ауыу. *Ҡалалар емерелгән. Өй емерелгән.*

**емереү (емер-)** *к.* Боҙоп, ватып ауҙарыу; ҡыйратыу. *Дошман нығытмаларын емереү. Өйҙө емереү.*

**емеш** *и.* **1.** Үҫемлектең сәскә емешененән үҫкән, эсендә орлоғо булған өлөшө. *Баҡса емеше. Ҡыр емеше. Емеш ағасы. Емеш баҡсаһы. Емеш йыйыу.* **2.** *күсм.* Берәй эш-хәлдең һөҙөмтәһе. *Хеҙмәттең емешен күреү.*

**емтек (емтеге)** *и.* Үлеп ятҡан хайуан; үләкһә. *Емтек соҡоро.*

**ен** *и.* Хөрәфәт буйынса төрлө һүрәткә инә ала торған мәкерле зат. *Ен балаһы.* ♦ **Ене кеүек күреү** бик ныҡ яратмау. **Ене һөймәү** ныҡ яратмау. **Ен ҡағылыу (һуғылыу)** төрлө насар тәьҫир, шауҡымдан ауырыуға әйләнеү.

**енес** *и.* Организмдың аталыҡ һәм инәлек билдәләре. *Енес ағзаһы. Ир енесе. Ҡатын-ҡыҙ енесе.*

**енсек (енсеге)** *и.*, **енсек һөйәге. 1.** Аяҡтың тубыҡ менән бәкәле араһындағы ҡуш һөйәк. *Аяҡ енсеге.* **2.** Ҡулдың терһәге менән ҡушҡары араһындағы ҡуш һөйәк. *Ҡул енсеге.*

**ентекле** *с.* Бөтә яғы, ваҡ нескәлектәре иҫәпкә алынған, тулы. *Ентекле мәғлүмәт. Ентекле итеп һөйләү.*

**енәйәт** *и.* Йәмғиәттә кешелек өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыу менән бәйле булған, ғәмәлдәге тәртипте боҙған һәм закон тарафынан тыйылған эш. *Ҙур енәйәт. Енәйәт яуаплылығы. Енәйәт эшләү. Енәйәтте фашлау.*

**ең** *и.* Өҫ кейеменең beләкте ҡаплай торған өлөшө. *Оҙон ең. Ең осо. Ең төбө. Күлдәктең еңе. Ең ултыртыу.* ♦ **Ең һыҙғаныу** бөтә ихласлыҡты һалып тырышыу. *Ең һыҙғанып эшләү.*

**еңгә** *и.* Ағайҙың ҡатыны. *Йәш еңгә. Оло еңгә. Еңгә булыу.* ♦ **Еңгәне һыуға башлау** яңы оҙатылып килгән киленгә ҡыҙҙарҙың һыу юлы күрһәтеү йолаһы.

**еңгәсәй** *и.* Арҡаһы ҡыҙыл, ҡара түрткөлө ҡуңыҙҙар ғаиләһенә ҡараған бөжәк. *Өйҙөң нигеҙен еңгәсәйҙәр һырып алған.*

**еңел** *с.* **1.** Күтәрергә, тартырға ауыр түгел; *киреһе* ауыр. *Еңел йөк. Еңел арба. Еңел булыу.* **2.** Йылдам, етеҙ, тиҙ хәрәкәт иткән; *киреһе* һалмаҡ, яй. *Еңел аҙым. Еңел хәрәкәт. Еңел атлау. Еңел йөрөү.* **3.** Үҙләштереүгә, аңлауға, башҡарыуға, үтәүгә ҡыйын түгел; анһат. *Еңел дәрес. Еңел тема. Еңел мәсьәлә. Еңел һорау.* ♦ **Ауыр тупрағы еңел булһын** мәйетте ерләгәндә йәки һуңынан иҫкә алғанда әйтелә торған һүҙ. **Еңел аяҡлы (аяғы еңел)** берәй кеше килгәндән һуң эш уңһа, әйтелә торған һүҙ.

**еңелеү (еңел-)** *ҡ.* Еңергә мөмкинлек биреү. *Алышта еңелеү.*

**еңеләйеү (еңеләй-)** *ҡ.* **1.** Еңелгә әйләнеү. *Йөк еңеләйҙе.* **2.** Ауыр хәлдән анһатҡа әйләнеү. *Уҡыуҙар еңеләйҙе. Хәл еңеләйҙе.*

**еңеләйтеү (еңеләйт-)** *ҡ.* Еңелгә әйләндереү. *Тоҡто еңеләйтеү.*

**еңеү[1] (ең-)** *ҡ.* **1.** Һуғышта, яуҙа ҡаршы яҡты буйһонорға мәжбүр итеү. *Дошманды еңеү. Һуғышта еңеү.* **2.** Берәй төрлө ярышта, көрәштә беренселеккә сығыу, уңыш ҡаҙаныу. *Көрәштә еңеү. Ярышта еңеү.* **3.** *күсм.* Тормоштағы

төрлө хәлдәрҙән тырышлыҡ, ихтыяр көсө менән өҫкә сығыу, бирешмәү, сыҙау. *Ауырлыҡты еңеү. Ҡаршылыҡты еңеү. Алйот, еңдем, тиер, аҡыллы, ҡуйҙым, тиер.* (Әйтем.)

**еңеү**[2] *и.* Һуғышта, көрәштә, эш-хеҙмәттә яуланған уңыш. *Еңеү байрамы. Еңеү шатлығы. Хеҙмәт еңеүе.*

**еңеүсе** *и.* Һуғышта, көрәштә, эш-хеҙмәттә һ. б. өҫтөн сыҡҡан кеше. *Еңеүсе булып ҡайтыу. Ярышта еңеүсе. Еңеүсе ил.*

**еп (ебе)** *и.* Тегеү, бәйләү, ниҙер тағыу өсөн тәғәйенләнгән нәҙек бау. *Йыуан еп. Нәҙек еп. Сүреле еп. Еп иләү. Еп тағыу. Еп урау.* ♦ **Еп өҙөрлөк тә хәл ҡалмау** ныҡ арыу, хәлдән тайыу. **Энәһенән ебенә тиклем** бөтә ваҡлыҡтарын да иҫәпкә алыу.

**епшек** *с.* Йылыға бер аҙ йомшаған, еүешләнгән. *Епшек буран. Епшек ҡар.*

**ер** *и.* **1.** *(баш хәреф менән)* Ҡояш системаһындағы өсөнсө торған кеше йәшәгән планета. *Ер йөҙө. Ер шары. Ер күсәрендә һәм ҡояш тирәләй әйләнә.* **2.** Шул планетаның өҫкө ҡаты ҡатламы. *Ер өҫтө.* **3.** Үҙенә хас үҙенсәлеге менән айырылып торған урын. *Тигеҙ ер. Уйһыу ер. Ялан ер. Йылғаның тар ере.* **4.** Хужалыҡтың ашлыҡ сәсә һ. б. файҙалана торған майҙаны. *Сиҙәм ер. Ер ашлау. Колхоз ере. Ер бүлеү.* **5.** Нимәнеңдер бер өлөшө, киҫәге, урыны. *Ҡаланың матур ере. Тәҙрәнең ватылған ере. Һынған ер.* ♦ **Ауыртҡан ер** йомшаҡ, зыян күреп барған урын. **Ер аяғы – ер башы** бик алыҫ. **Еренә еткереү** тейешенсә башҡарыу, тулыһынса үтәү. **Ер менән күк араһы** ҙур айырма. **Ер юлдашы** орбита буйлап Ер тирәһендә әйләнә торған хәрәкәт итеүсе йыһан аппараты. **Ер тетрәү** ер эсендә барған төрлө процестар, вулкандар һ. б. сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килгән ер аҫты һелкенеүҙәре.

**ерек (ереге)** *и.* Ҡайындар ғаиләһенә ҡараған еүеш, һыулы ерҙә, яр буйҙарында үҫә торған мурт ағас. *Аҡ ерек. Ҡара ерек.* ♦ **Ерек тәртә (тәртәһе ерек)** үсексән кешегә ҡарата әйтелә.

**ерләү (ерлә-)** *ҡ.* Үлгән кешене ергә күмеү. *Мәйетте ерләү.*

**ерһенеү (ерһен-)** *ҡ.* Берәй ерҙе, урынды үҙ итеү. *Уралды ерһенеү. Һаҡмар буйын ерһенеү.*

**ер-һыу** *и. йыйн.* **1.** Ил, халыҡ билән йәшәгән ҙур урын. *Ер-һыуҙы һаҡлау. Ер-һыу хайуандары.* **2.** Ерҙә лә, һыуҙа ла йәшәй алған умыртҡалы хайуандар.

**ерән** *с.* Ҡыҙыл менән һары ҡатыш; ҡыҙғылт һары. *Ерән сәс. Ерән һаҡал.*

**ерәнес** *с.* Бысраҡлығы менән ерәнеү хисе уятҡан; сикәнес. *Ерәнес кеше. Ерәнес булыу.*

**ерәнеү (ерән-)** *ҡ.* Бысраҡҡа һанап ытырғаныу; сикәнеү. *Тараҡандан ерәнеү. Ерәнеү тойғоһо.*

**есем** *и. физ.* Арауыҡтың билдәле бер өлөшөн биләп торған матди нәмә; арауыҡтағы айырым бер предмет. *Ҡаты есем. Шыйыҡ есем. Геометрик есем.* ♦ **Күк есеме** астрономия фәне өйрәнә торған планета, комета, йондоҙ һ. б. йыһан объекттары.

**еҫ** *и.* **1.** Төрлө нәмәләрҙең танауға һиҙелгән сифаты. *Һаҫыҡ еҫ. Хуш еҫ. Аш еҫе. Бензин еҫе. Сәскә еҫе. Еҫе сығыу.* **2.** Углерод янып бөтмәү сәбәпле сыҡҡан ағыулы газ. *Самауыр еҫе. Еҫ тейеү.*

**еҫкәү (еҫкә-)** *ҡ.* Берәй нәмәнең еҫен танауға тартыу. *Сәскә еҫкәү. Хушбуй еҫкәү.*

**етди** *с.* **1.** Тыныс аҡыл менән уйлап эш итеүсән, эшкә яуаплы ҡараған. *Етди егет. Етди булыу.* **2.** Ҙур әһәмиәткә эйә; мөһим. *Етди мәсьәлә. Етди эш. Етди ҡараш. Етди сырай.* **3.** Ҡиәфәтендә ныҡлы иғтибар, талапсанлыҡ сағылған.

**етегән,** *йәки* **Етегән йондоҙ** Күктең төньяғында сүмес һымаҡ урынлашҡан ете яҡты йондоҙҙан торған йондоҙлоҡ. *Оло Етегән. Кесе Етегән.*

**етеҙ** *с.* Өлгөр, уңған. *Етеҙ ҡыҙ. Етеҙ атлау.*

**етем** *и.* **1.** Ата-әсәһе йәки икеһененең береһе булмаған бала. *Етем бала. Етем ҡыҙ. Етем булыу. Етем ҡалыу. Етемдәрҙе ҡарау.* **2.** Ире үлгән, ирһеҙ, тол. *Етем ҡатын.*

**етен** *и.* Һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған үҫемлек һәм шул үҫемлектең сүсе. *Оҙон етен. Етен майы. Етен иләү. Етен күлдәк.*

**етеү[1] (ет-)** *ҡ.* **1.** Кемделер, нимәнелер ҡыуып килеп тигеҙләшеү. *Йүгереп етеү. Ҡыуып етеү. Ҡапҡа төбөнә етеү.* **2.** Ниндәйҙер ғәмәлгә килеү, булыу. *Көҙ етте. Сират етте. Төш етте. Яҙ етте.* **3.** Билдәле бер йәшкә яҡынлашыу, билдәле бер йәште тултырыу. *Иллегә етеү. Йәше йөҙгә етте.*

**етеү[2] (ет-)** *ҡ.* Һан, күләм йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек, кәрәк саҡлы булыу. *Аҡса етә. Арҡан бәйләргә етә. Көс етеү. Урын етә.*

**етеш** *с.* Кәрәк тиклем; мул. *Етеш тормош. Донъяһы етеш.*

**етештереү (етештер-)** *ҡ.* Әҙерләп сығарыу; әҙерләү. *Иген етештереү. Ит етештереү. Һөт етештереү. Етештереү көстәре.*

**етешһеҙлек (етешһеҙлеге)** *и.* Тейешле сифатҡа, кимәлгә, талапҡа тап килмәгән урын; кәмселек. *Етешһеҙлектәр булыу. Етешһеҙлекте бөтөрөү.*

**еткереү (еткер-)** *к.* **1.** Билдәле урынға, эш-хәлгә өлгәштереү. *Ниәткә еткереү. Ауылға еткереү. Һүҙ еткереү.* **2.** Ниндәйҙер бер ваҡытҡа ҡәҙәр түҙеп, шул ваҡытты көтөп алыу. *Йәйҙе еткереү. Каникулды еткереү.* **3.** Билдәле бер кимәлгә өлгәштереү. *Йөҙгә еткереү. Ошо көнгә килтереп еткереү.*

**етәкләү (етәклә-)** *к.* Кешене ҡулынан, малды теҙгененән йәки муйынсағынан тартып эйәртеү. *Аттарҙы етәкләү. Баланы етәкләү. Етәкләп йөрөү.*

**етәксе** *и.* Баш булып, йүнәлеш биреүсе, идара итеүсе, башлыҡ. *Класс етәксеһе. Район етәксеһе.*

**еүеш** *с.* Дымы күп, һыулы. *Еүеш ер. Еүеш кейем. Еүеш сәс.*

**еүешләнеү (еүешлән-)** *и.* Еүеш хәлгә килеү. *Өҫ-башы еүешләнгән.*

**еүешләү (еүешлә-)** *к.* Еүеш итеү, дымлау, һыулау. *Кейемде еүешләү. Ямғыр ерҙе еүешләне.*

# Ж

**жираф** *и.* Оҙон муйынлы, оҙон аяҡлы сыбар төҫтәге хайуан (Африкала йәшәй).

**журнал** *и.* **1.** Китап һымаҡ итеп сығарылған ваҡытлы баҫма. *Ҡалын журнал. Балалар журналы. Журнал сығарыу. Журнал уҡыу.* **2.** Көндәлек хәлде теркәп бара торған ҡалын дәфтәр. *Класс журналы. Журналға яҙып барыу.*

**журналист (журналисы)** *и.* Журналистика менән шөғөлләнгән профессиональ хеҙмәткәр. *Журналист булыу.*

# З

**завод** *и.* Сәнәғәт хужалығы, сәнәғәт тауарҙары етештергән предприятие. *Ауыл хужалығы машиналары етештереү заводы. Завод идараһы. Завод хужаһы. Кирбес заводы.*

**закон** *и.* **1.** Дәүләт власының юғары органы тарафынан ҡабул ителеп, юридик көскә эйә булған норматив акт; ҡанун. *Закондар йыйынтығы. Законға ҡаршы эш.* **2.** Төрлө күренеш араһындағы объектив бәйләнеш. *Йәмғиәт закондары. Тәбиғәт закондары.*

**зал** *и.* **1.** Йыйылыш йәки башҡа күмәк сара өсөн тәғәйенләнгән ҙур бүлмә. *Ҙур зал. Спорт залы. Тамаша залы. Ултырыштар залы.* **2.** Ҡунаҡ, тантана өсөн тәғәйенләнгән киң бүлмә. *Залға табын әҙерләү.*

**заман** *и.* **1.** Оҙайлы ваҡыт; осор. *Боронғо заман. Иҫке заман. Яңы заман. Элекке заман.* **2.** *грам.* Ҡылымдың эш-хәрәкәттең һөйләү моментына ҡарата ваҡыт мөнәсәбәтен күрһәтә торған формаһы. *Киләсәк заман. Хәҙерге заман. Үткән заман.* ♦ **Ахыры заман** дини ҡарашса, тереклек донъяһы юҡҡа сығасаҡ ваҡыт.

**замандаш** *и.* Кем менәндер бер тарихи осорҙа йәшәгән йәки йәшәүсе кеше. *Беҙҙең замандаштар. Замандаш булыу. Замандаштар осрашыуы.*

**зарар** *и.* **1.** Насар һөҙөмтә биргән тәьҫир. *Зарары тейеү. Тәмәке тартыуҙың зарары.* **2.** Ниндәйҙер материаль юғалтыуға килтергән тәьҫир; зыян, ҡаза. *Зарар килтереү. Зарар күреү.*

**зарарлау (зарарла-)** *ҡ.* Зарар, зыян, ҡаза килтереү. *Дауыл сәсеүлектәрҙе зарарланы. Тәмәке үпкәне зарарлай.*

**зарарлы** *с.* Насар йоғонтоло, зыянлы. *Зарарлы матдә. Тәмәке тартыу зарарлы.*

**зарланыу (зарлан-)** *ҡ.* Ҡайғы-хәсрәтте кемгәлер еткереү. *Зарланып һөйләү. Яҙмышҡа зарланыу.*

**зарядка** *и.* Тәнде сыныҡтырыу маҡсатында яһалған физик күнекмә. *Иртәнге зарядка. Зарядка яһау.*

**зат** *и.* **1.** Быуын-быуындан килгән ҡан ҡәрҙәш; нәҫел. *Заты яҡшы. Заттары насар. Заты ҡороу.* **2.** Дөйөм билдәләре булған төркөм, нәмә. *Әҙәм заты. Ир заты.* **3.** Ниндәйҙер сифаты менән айырылып торған кеше (йәки нәмә).

**затлы** *с.* Юғары сифатлы, ҡиммәтле. *Затлы нәмә. Затлы металл. Затлы тауар.*

**зиннәт** *и.* **1.** Ҡиммәтле аҫыл нәмә. *Уралдағы зиннәттәр. Зиннәт әйберҙәр.* **2.** Матурлыҡ, йәм, күрк. *Зиннәттә йәшәү. Зиннәт биреү.*

**зиннәтле** *с.* Ҡиммәтле, аҫыл. *Зиннәтле таш. Зиннәтле булыу.*

**зинһар** *ҡ.* Үтенеп ниҙер һорағанда әйтелә; берүк. *Зинһар, мине ҡотҡарығыҙ.*

**зирәк** *с.* Тиҙ генә аңлап, отоп барыусан; сос, аҡыллы башлы. *Зирәк бала. Зирәк булыу.*

**зифа** *с.* Һылыу, һомғол. *Зифа буйлы ҡыҙ. Зифа тал.*

**зиһен** *и.* **1.** Кешенең аң, аҡыл һәләте. *Зиһен артыу. Зиһен томаланыу.* **2.** Хәтер, иҫ. *Зиһен таралыу. Зиһене яҡшы. Зиһенде йыйыу.*

**зоология** *и.* Хайуандар донъяһын өйрәнә торған фән. *Зоология дәресе. Зоология кабинеты. Зоология уҡытыусыһы.*

**зоопарк** *и.* Йәнлектәрҙе яһалма шарттарҙа күргәҙмә өсөн аҫрай торған урын. *Күсмә зоопарк. Зоопаркка барыу.*

**зый** *оҡш.* Шәп осоп, елеп үткән нәмәнең ҡыҫҡа өҙөк тауышын белдергән һүҙ. *Зый итеп ҡалыу.*

**зыйт** *оҡш.* Бик шәп осоп, елеп үткән нәмәнең киҫкен хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Зыйт итеп сығып китеү.*

**зыҡ: зыҡ ҡубыу** Шау-шыу, ығы-зығы килеү. *Балалар зыҡ ҡуба.*

**зыр** *оҡш.* Шәп әйләнгән нәмәнән сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Зыр итеү. Зыр әйләнеү.*

**зырлау (зырла-)** *ҡ.* Зыр итеү, зыр-зыр килеү. *Машиналар зырлап эшләп тора.*

**зыян** *и.* **1.** Насар һөҙөмтә биргән кире тәьҫир; зарар. *Зыян тейеү. Зыян эшләү. Зыяны юҡ.* **2.** Ниндәйҙер материаль юғалтыуға килтергән һөҙөмтә; ҡаза, зарар. *Зыян күреү. Бер тинлек ҡуян, ун тинлек зыян.* (Мәҡәл.)

**зыярат** *и.* Үлгән кешеләрҙе күмә торған урын; ҡәберлек. *Зыяратҡа барыу. Зыяратты кәртәләү.* Мосолман зыяраты.

**зәғиф** *с.* Тәненең берәй ағзаһы имгәнгән; ғәрип. *Зәғиф кеше. Зәғифкә әйләнеү.*

**зәңгәр** *с.* Спектрҙа йәшел менән күк араһындағы төҫкә тап килгән. *Аҡһыл зәңгәр. Асыҡ зәңгәр. Зәңгәр күҙ. Зәңгәр күлдәк.*

**зәңгәрһыу** *с.* Аҡһыл зәңгәр, зәңгәргә тартым. *Зәңгәрһыу төҫ.*

**зәхмәт** *и.* **1.** Тән һәм йән ғазабы; ыҙа, яфа. *Зәхмәт сигеү.* **2.** *иҫк.* Ен, шайтандан килгән ауырыу; сир. *Зәхмәт ҡағылыу. Зәхмәттән әмәлләү.*

**зәһәр** *и.* **1.** Ағыу. *Зәһәр һалынған һыу.* **2.** Көслө нәфрәт, асыу. *Зәһәр сәсеү.* **3.** *с. мәғ. күсм.* Бик, бик ныҡ, үтә. *Зәһәр күп. Зәһәр уҫал. Зәһәр үткер.*

# И

**игеҙ** *с.* Бер инәнән бер юлы тыуған (кеше йәки хайуан балаларына ҡарата). *Игеҙ бала. Игеҙ быҙау. Игеҙҙең һыңары.*

**игеҙәк (игеҙәге)** *и.* Игеҙ балалар. *Кәримә менән Вәлимә – игеҙәктәр.*

**иген** *и.* **1.** Үҫеп ултырған бөртөклө ашлыҡ. *Иген игеү. Иген уңыу. Иген урыу. Иген һуғыу.* **2.** Һуғылған бөртөклө ашлыҡ. *Иген елгәреү. Иген келәте.*

**игенсе** *и.* Иген үҫтереү эше менән шөғөлләнгән кеше; иген игеүсе. *Игенсе эше. Эшсән игенселәр.*

**игенселек (игенселеге)** *и.* Иген игеү эше. *Игенселек менән шөғөлләнеү. Игенселек культуралары.*

**игеү (ик-)** *ҡ.* Иген үҫтереү эше менән шөғөлләнеү. *Иген игеү.*

**игәү**[1] *ҡ.* Игәү менән ышҡыу. *Тимерҙе игәү. Игәп шымартыу.* **2.** *күсм.* Кешене шелтәләп, өҙлөкһөҙ әрләү, ыжыу. *Игәп тороу.*

**игәү**[2] **(игә-)** *и.* Нимәнелер ышҡып ҡырыу өсөн файҙаланыла торған ваҡ тешле ҡорос ҡорамал. *Ҡырлы игәү. Ялпаҡ игәү. Игәү менән үткерләү.*

**иғтибар** *и.* Күңелдең, уйҙың һәм ишетеү һәләтенең берәй нәмәгә, кешегә йүнәлеше. *Иғтибар итеү. Иғтибар менән тыңлау. Иғтибар үҙәгендә булыу.* **2.** Кешегә ҡарата хәстәрлекле; ҡайғыртыусан. *Иғтибарлы табип.*

**идара** *и.* Эшкә етәкселек үҙәге һәм шул етәкселектең эш урыны. *Идара йорто. Идара ултырышы. Идара итеү.*

**идеаль** *с.* Һәр йәһәттән яҡшы, һоҡландырғыс, тиңһеҙ. *Идеаль герой. Идеаль кеше.*

**иҙеү**[1] **(иҙ-)** *ҡ.* **1.** Ҡаты йәки онтаҡ нәмәне шыйыҡлыҡ ҡушып болғатыу. *Балсыҡ иҙеү. Ҡамыр иҙеү. Ҡорот иҙеү.* **2.** Йомшаҡ, һутлы, һыулы нәмәне төйөү, һытыу. *Еләкте иҙеү. Картуфты иҙеү.* **3.** *күсм.* Кешене хоҡуҡһыҙға әйләндереп, ирекһеҙ хәлдә эшләтеү. *Ҡолдарҙы иҙеү.* ♦ **Иҙмәһен иҙеү** бик ҡаты туҡмау.

**иҙән** *и.* Төрлө ҡоролманың баҫып йөрөү өсөн йәйелгән түшәмәһе. *Таш иҙән. Иҙән аҫты. Иҙән таҡтаһы. Иҙән йыуыу. Иҙән һеперeү.*

**ижад** *и.* Фән һәм мәҙәниәт байлыҡтарын тыуҙырыу өлкәһендәге эшмәкәрлек. *Ижад кешеһе. Ижад итеү. Зәйнәб Биишева ижады.* ♦ **Халыҡ ижады** халыҡтың билдәле булмаған ижадсылары тарафынан барлыҡҡа килтерелеп, быуындан быуынға күсеп килгән мәҙәниәт ҡомартҡылары.

**ижади** *с.* Ижад эше менән бәйле. *Ижади процесс. Ижади эш. Ижади эҙләнеүҙәр.*

**ижадсы** *и.* Ижад итеүсе. *Ижадсы фекере.*

**ижек (ижеге)** *и.* Һүҙҙең бер тын менән әйтелгән быуыны. *Баҫымлы ижек. Баҫымһыҙ ижек. Бер ижекле һүҙ. Ижеккә бүлеү.* ♦ **Асыҡ ижек** һуҙынҡы өнгә бөткән ижек (*мәҫ.* ба-ла). **Ябыҡ ижек** тартынҡы өнгә бөткән ижек (*мәҫ.* ат-тар, баш-лыҡ).

**ижекләү (ижеклә-)** *ҡ.* Ижектәргә бүлеү, һәр ижекте айырыу. *Ижекләп уҡыу.*

**изге** *с.* **1.** Йөрәк түрендә һаҡлана торған, иң ҡәҙерле, бөйөк. *Изге ҡатын. Изге бурыс. Изге ер. Изге теләк. Изге һанау.* **2.** Башҡаларға һәр ваҡыт яҡшылыҡ ҡыла торған, һәйбәт күңелле. *Изге бала. Изге кеше. Изге күңелле.* **3.** Күңелгә ярашлы, яҡшы, һәйбәт. *Изге хәбәр. Изге эш.*

**изгелек (изгелеге)** *и.* Кеше өсөн саф күңелдән эшләнгән яҡшы эш; яҡшылыҡ. *Изгелек итеү. Изгелек күреү. Изгелек эшләү. Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ.* (Әйтем.) *Ҡояш янында – йылылыҡ, әсә янында – изгелек.* (Мәҡәл.)

**икеләнеү (икеләнн-)** *ҡ.* Бер фекергә килә алмай төрлөсә уйлау; шикләнеү. *Икеләнеп тороу. Барырға икеләнеү.*

**икмәк (икмәге)** *и.* Ҡамырҙан йомарлап мейестә бешерелгән ашамлыҡ. *Аҡ икмәк. Арыш икмәге. Сөсө икмәк. Әсе икмәк. Икмәк бешереү. Икмәк һалыу. Икмәк магазины.*

**икһеҙ-сикһеҙ** *с.* Осо-ҡырыйы күренмәгән, иге-сиге билдәһеҙ; иркен, киң. *Икһеҙ-сикһеҙ ялан.*

**икән** *ярҙ.* *ҡ.* Төрлө һүҙ төркөмдәре менән яһалған ҡушма хәбәр составында ҡулланыла. *Дөрөҫ икән. Ҡайтырмы икән? Ҡайҙа икән? Тәмле икән.*

**ил** *и.* **1.** Үҙ сиге, халҡы, идараһы булған дәүләт. *Башҡортостан иле. Ил сиге.* **Сит ил** 1) сит дәүләт; 2) ят урын. **2.** (*йәки* **тыуған ил**) Тыуып үҫкән, йәшәгән ер; ватан. *Урал тигән илем бар.* (Ҡобайырҙан.). *Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.* (Мәҡәл.) ♦ **Ил ағаһы** оло дәрәжәле абруйлы ир кеше. **Ил ҡарттары** күп йәшәп, күпте күреп, халыҡ араһында хөрмәт ҡаҙанған аҡыллы ҡарттар; аҡһаҡалдар.

**илаҡ** *с.* Юҡҡа-барға илап барыусан. *Илаҡ бала. Илаҡ булыу.*

**илау (ила-)** *ҡ.* Күҙҙән йәш түгеү (ҡайғы-хәсрәттән, ауыртыу-һыҙланыуҙан йәки башҡа ауыр хистән). *Быуылып илау. Сеңләп илау. Үкһеп илау. Һулҡылдап илау. Илап ебәреү.*

**илаһи** *с.* **1.** *дини* Аллаға бәйләнешле, Аллаға мөнәсәбәтле. *Илаһи донъя.* **2.** *күсм.* Тәбиғәттән өҫтөн; серле, тылсымлы. *Илаһи көс. Илаһи моң.*

**илбаҫар** *и.* Башҡа илгә ҡорал көсө менән баҫып ингән халыҡ, төркөм йәки шәхес. *Илде илбаҫарҙарҙан һаҡлау.*

**илгиҙәр** *и.* Донъя гиҙеп, ил өйрәнеп, ил күреп йөрөгән кеше; сәйәхәтсе. *Илгиҙәр булыу.*

**илсе** *и.* **1.** Юғары дәрәжәле дипломатик вәкил. *Дәүләт илсеһе. Илсе ебәреү.* **2.** *тар.* Мөһим йомош, маҡсат менән халыҡтар төркөмөнән ебәрелгән вәкил. *Илсе булып килеү. Илсегә үлем юҡ.* (Мәҡәл.)

**илселек (илселеге)** *и.* Бер илдең икенсе илдәге дипломатик вәкәләте һәм шул вәкәләт урынлашҡан йорт. *Рәсәй илселеге.*

**илтеү (илт-)** *ҡ.* Билдәле бер ергә алып барыу. *Илтеп биреү. Илтеп ҡуйыу. Тейәп илтеү.*

**илһам** *и.* Эшкә, ижадҡа көс, дәрт уятыу. *Илһам алыу. Илһам биреү. Илһам уяныу.*

**илһөйәр** *и.* Илен яратҡан, ил мәнфәғәтен яҡлаған кеше. *Илһөйәр булып үҫеү.*

**иләк (иләге)** *и.* Он, ашлыҡ һ. б. таҙартыу өсөн ваҡ селтәр менән төпләп, тирәсләп эшләнгән ҡорамал. *Еҙ иләк. Ҡыл иләк. Ваҡ иләк. Эре иләк.* ♦ **Иләк ауыҙ** ауыҙында һүҙ тормаған кешегә әйтелә. **Иләк менән һыу ташыу** буш эш менән булыу.

**иләҫ-миләҫ** *с.* **1.** Тиҙ генә үҙгәреүсән (уй-тойғоға ҡарата). *Иләҫ-миләҫ уй. Иләҫ-миләҫ булыу.* **2.** Инәле-сығалы (аң-хәтергә ҡарата). *Иләҫ-миләҫ йоҡлау.*

**иләү**[1] **(илә-)** *ҡ.* Иләк аша үткәреү, сүп-сарҙан таҙартыу. *Он иләү. Ҡом иләү.*

**иләү**[2] **(илә-)** *ҡ.* Йөн, киндер һ. б. орсоҡ ярҙамында һуҙып, ишеп еп итеү. *Дебет иләү. Еп иләү. Етен иләү. Йөн иләү.*

**иләү**[3]**: ҡырмыҫҡа иләүе** *и.* Төрлө сүп-сар, ағас, тупраҡ һ. б. өйөп эшләгән ҡырмыҫҡа ояһы. *Ҡырмыҫҡа иләүен күреү.*

**имгәкләү (имгәклә-)** *ҡ.* Ҡулдарға таянып, дүрт тағанлап йөрөү. *Имгәкләп йөрөү.*

**имгәнеү (имгән-)** *ҡ.* Берәй ағза һынып, быуын сығып һ. б. сәбәптән зәғифләнеү. *Аяҡ имгәнеү. Ҡул имгәнеү. Йығылып имгәнеү.*

**имгәтеү (имгәт-)** *ҡ.* Берәй ағзаны ғәриплəндереү, зәғифләү. *Аяҡты имгәтеү. Ҡоштоң ҡанатын имгәтеү.*

**имеҙеү (имеҙ-)** *ҡ.* Имсәк һөтөн һурҙырыу; имсәк биреү. *Бала имеҙеү. Ҡолон имеҙеү.*

**имеҙеүселәр** *и.* Балаларын һөт имеҙеп аҫраған умыртҡалы хайуандар; һөтимәрҙәр.

**имеҙлек (имеҙлеге)** *и.* Йәш балаға, бәрәскә, быҙауға һ. б. имеҙеү өсөн имсәк һымаҡ итеп эшләнгән нәмә. *Имеҙлек имеҙеү.*

**имен** *с.* Иҫән-һау, зыянһыҙ, хәүеф-хәтәрһеҙ, сәләмәт. *Имен йөрөп ҡайтыу. Имен тороу.*

**имеү (им-)** *ҡ.* **1.** Тел, ирен ярҙамында имсәктең һөтөн һурыу. *Бала имә. Быҙау имә.* **2.** Ниҙе лә булһа ауыҙға алып һурыу. *Бармаҡ имеү. Кәнфит имеү.*

**имеш** *мөн.* **1.** Ишеткән хәбәрҙең дөрөҫлөгөн шиккә алғанда, ысын йәки буш булыуы асыҡ түгел икәнен белдереү өсөн әйтелә. *Ҡайтҡан, имеш, тип ишеттем.* **2.** Уй-хыялды күҙ алдына килтергән йәки төштә күргәнде һөйләгәндә әйтелә.

**имза** *и.* Кешенең үҙ шәхесен белдереп ҡуйған тамғаһы; ҡултамға. *Имза ҡуйыу. Имза һалыу. Имзаһы бар.*

**имсәк (имсәге)** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙың һөт биҙҙәре. *Имсәк имеү.* **2.** Елендең ослайып сыҡҡан имеҙлеге. *Кәзә имсәге. Ҡаты имсәкле һыйыр.*

**имтихан** *и.* Белем кимәлен билдәләү өсөн алынған һорау; һынау. *Имтихан алыу.*

**имән** *и.* Олоно ҡаты ағас. *Ваҡ имән. Имән тамыры. Имән сәтләүеге. Имән урманы.*

**ин** *и.* Малдың ҡолағына, ҡош-ҡорттоң тәпәй ярыһына ҡырҡып һалынған тамға. *Ин һалыу. Ине булыу.*

**инде** *киҫ.* **1.** Һүҙҙе йәки һөйләмдәге фекерҙе айырым баҫым менән көсәйтеп ҡуя. *Инде әйтһәгеҙ ҙә була.* **2.** Өндәү, саҡырыу, бойороу, үтенеүҙе, хис-тойғоларҙы h. б. белдергән һөйләштәргә йомшаҡлыҡ бирә. *Кил инде. Ярар инде. Ҡарар инде ҡара күҙҙәре менән.*

**ине** *ярҙ. ҡ.* Төрлө һүҙ төркөмө менән килеп, һөйләмдә хәбәр ролен үтәй. *Барған инем. Бай ине. Бала ғына ине.*

**инеү (ин-)** *ҡ.* **1.** Хәрәкәт итеп, тишеп берәй нәмәнең эсенә үтеү; кереү. *Инеп китеү. Ишектән инеү. Күршеләргә инеү. Өйгә инеү. Тыштан инеү. Суп инеү. Шырау инеү.* **2.** Эш, хеҙмәт, уҡыу h. б. урынға ҡабул ителеү; урынлашыу. *Уҡырға инеү. Эшкә инеү. Партияға инеү. Исемлеккә инеү.* **3.** *күсм.* Ниндәйҙер бер рәүеш, сифат алыу. *Кеше төҫөнә инеү. Ҡалаға байрам төҫө ингән.* **4.** Исемдәр менән йәнәшә килеп, уларҙың ныҡлап урын алыуын йәки башҡарыла башлауын белдерә. *Бәйләнешкә инеү. Ғәҙәткә инеү. Модаға инеү.* **5.** Берәй сифатты, хәлде h. б. белдергән исем менән килеп, шул сифат, хәл h. б. барлыҡҡа килеүен белдерә. *Дәрт инеү. Көс инеү. Хәл инеү.*

**инеш**' *и.* Ер аҫтынан урғылып сығып, ағып ятҡан бәләкәй һыу сығанағы; шишмә. *Инеш һыуы.*

**инеш**[2] *и.* Телмәрҙең, яҙма хеҙмәттәрҙең йәки музыкаль әҫәрҙең башланғыс өлөшө. *Инеште яҙыу. Инеш өлөш. Инеш әңгәмә.*

**инженер** *и.* Юғары техник белеме булған белгес. *Инженер булып эшләү. Хәрби инженер.*

**институт** *и.* Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттарының һәм ғилми-тикшеренеү ойошмаларының атамаһы. *Ғилми тикшеренеү институты. Педагогия институты.*

**интегеү (интек-)** *ҡ.* Ауыр эштән, насар тормоштан, ҡайғы-хәсрәттән, мохтажлыҡтан һ. б. тән һәм йән ғазабы кисереү; ыҙа сигеү, йонсоу. *Ауырыуҙан интегеү. Интегеп йәшәү. Интегеп эшләү. Һыуһыҙ интегеү.*

**интернат** *и.* **1.** Дәүләттән өлөшләтә ярҙам алып уҡый торған ятаҡлы мәктәп. *Музыка интернаты.* **2.** Мәктәп эргәһендәге уҡыусылар ятағы. *Интернатта йәшәү.*

**интернационализм** *и.* Төрлө милләт, раса кешеләренең хәл һәм мәнфәғәт уртаҡлығын белдергән халыҡ-ара берҙәмлеге. *Интернационализм идеяһы. Интернационализм яҡлы булыу.*

**интонация** *и. кит.* Һөйләүсенең эске тойғоһон, кисерешен сағылдырған тауыш үҙенсәлеге. *Юғары интонация.*

**инша** *и.* Уҡыусыны фекер йөрөтөргә өйрәтеү маҡсатында билдәле бер темаға үткәрелә торған яҙма эш. *Ирекле инша. Инша яҙыу.*

**инә** *и.* **1.** Балаһы булған ҡатын (үҙ балаһына ҡарата); әсә. *Инә тәрбиәһе. Инә һөтө. Инә ҡуйынында үҫеү.* **2.** *с. мәғ.* Ҡайһы бер йән эйәһе һәм үҫемлектәрҙең ата енеслеһенә ҡаршы булғаны. *Инә айыу. Инә ҡаҙ. Инә һырғанаҡ.* ♦ **Кендек инәһе** бала тыуғанда ҡабул итеп, кендеген ҡырҡҡан ҡатын-ҡыҙ.

**инәй** *и.* **1.** *ҡар.* **әсәй. 2.** Ата-әсәнән оло ҡатын-ҡыҙ һәм уларға өндәшеү һүҙе. *Инәй булыу.*

**инәлеү (инәл-)** *ҡ.* Бик ныҡ үтенеү; ялыныу. *Инәлеп һорау.*

**инәлтеү (инәлт-)** *ҡ.* Инәлергә мәжбүр итеү. *Йырсы инәлтеп тормай.*

**иңкеш** *и.* Бал ҡорттары ғаиләһенә ҡараған йомро, йөнтәҫ эре бөжәк. *Ҡара иңкеш. Һары иңкеш. Иңкеш ояһы. Иңкеш сағыу.*

**иңкәйеү (иңкәй-)** *ҡ.* Алға табан бөгөлөү, эйелеү. *Иңкәйеп йөрөү. Нык иңкәйеү.*

**ипле** *с.* **1.** Эшләүгә, файҙаланыуға ҡулайлы. *Ипле балта. Ҡулы эшкә ипле.* **2.** Эш-ҡылығы, хәрәкәте киҫкен түгел. *Ипле йөрөү. Ипле тотоноу.*

**иптәш** *и.* **1.** Бергә аралашып йәшәгән кешеләр (бер-береһенә ҡарата). *Иптәш булыу. Иптәшкә яҡшы кеше. Иптәш ҡыҙ.* **2.** Рәсми рәүештә өндәшеү һүҙе. *Иптәш Ғәлиев!*

**ир** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙ затына ҡапма-ҡаршы енестән булған кеше. *Баһадир ир. Ир заты. Ир бала. Ир кеше. Ат – юлда, ир яуҙа һынала.* (Әйтем.) *Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай.* (Әйтем.) **2.** Шул енестең малай, үҫмер йәшенән үткән кешеһе. *Ир йәшенә етеү.* **3.** Батыр, ғәйрәтле, булдыҡлы, тоғро һ. б. иң яҡшы сифаттарға эйә булған кеше. *Ир икәнһең. Ир егет.* **4.** Ҡатын менән никахта булған, өйләнгән кеше (ҡатынына ҡарата). *Ире бар. Ирґә сығыу. Ир менән тороу. Ире тураһында һорашыу.* ♦ **Ир етеү** малай, үҫмер йәшенән сығып үҫеп етеү. **Ир ҡорона инеү** үҫмерлектән үтеп, мөһим, ҙур эш башҡарыр ирҙәр иҫәбенә инеү.

**ир-егет** *и. йыйн.* Булдыҡлы, батыр, ҙур эштәргә һәләтле, ғәйрәтле ирҙәр. *Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.* (Әйтем.)

**ирек (ирке)** *и.* **1.** Бер кемгә буйһонмаған, төрлө сикләүҙәр булмаған азат хәл. *Ирек алыу. Иректә йәшәү. Ирекҡә сығыу. Ирек ҡуйыу.* **2.** Иҙеү, ҡыҫыуҙар булмағанлыҡ; азатлыҡ, хөрриәт. *Ирек һөйөүсе халыҡ. Ирек бөтөү. Ирекҡә йөрөү. Ирекҡә сығарыу.*

**ирен** *и.* Ауыҙҙың аҫтын-өҫтөн ҡымтып торған хәрәкәтсән өлөшө. *Аҫҡы ирен. Өҫкө ирен. Ҡалын ирен. Ирен ҡымтыу. Ирен ослайтыу.*

**иренеү (ирен-)** *ҡ.* Ҡуҙғалырға, ниҙер башҡарырға ауырһыныу; йыбаныу. *Иренеп тороу. Иренеп ятыу.*

**иретмә** *и.* **1.** Бер нисә металды бергә иретеп яһаған ҡушымта. *Баҡыр менән алтын иретмәһе.* **2.** Ниндәй ҙә булһа бер матдә һалып иретелгән шыйыҡлыҡ. *Тоҙ иретмәһе. Шыйыҡ иретмә.*

**иреү (ире-)** *ҡ.* **1.** Йылылыҡ, эҫелек тәьҫирендә шыйыҡ хәлгә килеү. *Боҙ ирей. Ҡар ирей. Ҡурғаш ирей. Шәкәр ирей.* **2.** *күсм.* Рәхәтләнеп, кинәнеп йомшарыу. *Күңел ирей. Йылыла тән ирей китте.*

**ирешеү**[1] **(ирештә-)** *ҡ.* Көс, тырышлыҡ менән ниҙендер ғәмәлгә ашыуына килеү, нимәгәлер өлгәшеү. *Еңеүгә ирешеү. Маҡсатҡа ирешеү. Теләккә ирешеү. Уңышҡа ирешеү.*

**ирешеү**[2] **(ирештә-)** *ҡ.* Һүҙгә килешеү, әрләшеү. *Ирешеп йәшәү. Ирешеп китеү.*

**иркен** *с.* **1.** Иңе, буйы ҙур; киң. *Иркен бүлмә. Иркен дала.* **2.** Ҡыҫылмаған, тулы мөмкинлекле; киң. *Иркен тауыш. Иркен һулыш. Русса иркен һөйләшеү.* **3.** *күсм.* Етешһеҙлеге булмаған. *Иркен тормош.*

**иркә** *с.* **1.** Һөйөлгән, ҡәҙерле, яратҡан. *Иркә ҡыҙ. Иркә булыу.* **2.** *күсм.* Ягымлы, йомшаҡ, наҙлы. *Ҡояштың иркә нурҙары.*

**иркәләнеү (иркәлән-)** *ҡ.* Яраттырыу өсөн кемгәлер һырлыгыу, наҙланыу. *Әсәйгә иркәләнеү. Эргәлә иркәләнеп йөрөү.*

**иркәләү (иркәлә-)** *ҡ.* **1.** Ҡәҙерләп, наҙлап яратыу. *Әсә балаһын иркәләй.* **2.** *күсм.* Йылы, наҙлы тәьҫир менән ләззәтләндереү. *Таң елдәре иркәләй.*

**ирлән** *и.* Игенгә һәм баҡса емештәренә зыян килтергән ала төҫтәге, өңдә йәшәй торган кимереүсе йәнлек; алйырҙан. *Ала ирлән. Ирлән тотоу.*

**иртә**[1] *и.* Көндөң тәүге мәле, башы. *Йәйге иртә. Иртә менән. Иртәнән бирле.* ♦ **Хәйерле иртә!** Иртә менән кешегә сәләмләү һүҙе.

**иртә**[2] *с.* **1.** Ғәҙәттәгенән алда, билдәле бер ваҡыттан элек булган. *Иртә таңдан тороу. Иртә яҙ. Иртә уяныу. Иртә торған – бай булған, һуңлап торған – хур булған.* (Мәҡәл.) **2.** Ваҡытынан алда булган. *Баланың иртә үҫеше. Иртә үлем. Иртә ҡартайыу. Иртә барһаң, ит бешә, һуңга ҡалһаң, бит бешә.* (Әйтем.) *Иртә килгән урын өсөн, һуң килгән тамаҡ өсөн.* (Әйтем.) ♦ **Иртәнән һуң** киләһе көндөң иртәгәһе; бер көндән һуң.

**иртәгә** *р.* Бөгөндән һуң килгән көндә, бөгөндөң иртәгәһенә. *Иртәгә иртүк. Иртәгә китәләр.*

**иртән** *р.* Алдагы, тәүге көндә. *Иртән иртә торорбоҙ.*

**иртәнге** *с.* **1.** Иртәгә була торган; иртәге. *Иртәнге дәрестәргә әҙерләнеү. Иртәнге көндө уйлау. Иртәнге күнәгеңде бөгөн әҙерлә.* (Әйтем.) **2.** Иртә менән булган; иртәнсәкке. *Иртәнге аш. Иртәнге дәрес. Иртәнге һалҡын.*

**иртәнсәк (иртәнсәге)** *и.* **1.** Көндөң башланган ваҡыты. *Иртәнсәктән бирле. Иртәнсәккә тиклем.* **2.** *р. мәғ.* Көн башланғандан һуңгы бер аҙ ваҡыт эсендә. *Иртәнсәк тороу.*

**исем** *и.* **1.** Кешегә тыуғас та бирелә торган атама; ат. *Матур исем. Исемең кем? Балаға исем һайлау.* **2.** Төрлө предмет, күренеш, нәмә һ. б. атамаһы. *Ауылдың исеме. Журналдың исеме. Китаптың исеме. Тауҙың исеме. Шиғырҙың исеме. Исем биреү.* **3.** Кешегә берәй өлкәләге тырышлыгы, оҫталыгы, белем һ. б. ҡарап бирелгән атама; дәрәжә. *Маҡтаулы исем. Хөрмәтле исем. Исем алыу. Атаҡлы йырсы исеме.* **4.** Танылганлыҡ, дан, шөһрәт. *Исеме билдәле. Исеме киң таралған. Исемең ҡалһын мәңгегә.* ♦ **Исем сығарыу (сығыу)** насар эш, ҡылыҡ тураһында хәбәр таратыу. **Исем һатыу** яманат, насар дан таратыу.

**исемлек (исемлеге)** *и.* Кешеләрҙең исеме, атамаһын теҙеп яҙган ҡағыҙ. *Балалар исемлеге. Китаптар исемлеге. Исемлек төҙөү.*

**ислам** *и.* Донъялағы киң таралыш алған диндәрҙең береһе; мосолман. *Ислам дине. Исламға инаныу.*

**исмаһам 1.** *инш.* Бәләкәй генә бер нәмәгә өмөт, теләк белдергәндә әйтелә. *Исмаһам, уҡып ҡара.* **2.** *инш.* Кемгә йәки нимәгәлер бәләкәй генә бер өҫтөнлөк биреп, айырып ҡарау өсөн ҡулланыла. *Һинең, исмаһам, яҙыуың матур.* **3.** *киҫ.* Юҡлыҡ формаһындағы хәбәр менән килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә. *Исмаһам, көлмәй ҙә.* **4.** *ымл.* Күберәк «бына» алмашы менән килеп, маҡтауҙы, хуплауҙы белдерә. *Бына, исмаһам, көслө!*

**иҫ** *и.* **1.** Хәтер, зиһен. *Иҫе юҡ. Иҫкә төшөрөү. Иҫтә ҡалдырыу. Иҫтә тотоу. Иҫтән сығыу.* **2.** Аң, һуш. *Иҫе ауыу. Иҫкә килеү. Иҫте юғалтыу. Иҫте китереү.* ♦ **Ике иҫле** аҡылы самалы; ахмағыраҡ. **Иҫ киткес** ғәжәп итерлек; аптырарлыҡ.

**иҫбатлау (иҫбатла-)** *ҡ.* Дәлилдәр менән раҫлау. *Иҫбатларға тырышыу. Иҫбатлау өсөн.*

**иҫерек (иҫерекге)** *с.* Иҫерткес эсемлек тәьҫирендә булған; айныҡ түгел. *Иҫерек кеше. Иҫерек хәлгә төшөү.*

**иҫереү (иҫер-)** *ҡ.* **1.** Иҫерек булыу, иҫереккә әйләнеү. *Иҫереп йығылыу. Эсеп иҫереү.* **2.** Еҫ, газ һ. б. тәьҫиренән ағыуланыу. *Төтөнгә иҫереү.* **3.** *күсм.* Ниндәйҙер хис-тойғонан, хуш еҫтән рәхәтләнеү. *Мөхәббәттән иҫереү. Шатлыҡтан иҫереү.*

**иҫеү (иҫ-)** *ҡ.* Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү (елгә ҡарата); өрөү. *Йомшаҡ ел иҫте. Әкрен иҫкән ел.*

**иҫке** *с.* **1.** Ваҡыт үтеү, күп тотоноу арҡаһында таушалған, туҙған; *киреһе* яңы. *Иҫке күлдәк. Иҫке салбар. Иҫке өй.* **2.** Электән булған, элекке, күптәнге. *Иҫке адрес. Иҫке ғәҙәт. Иҫке йыр. Иҫке тәртип. Иҫке хәбәр. Иҫке ысул.*

**иҫкереү (иҫкер-)** *ҡ.* **1.** Оҙаҡ файҙаланыу һәм күп ваҡыт үтеү сәбәпле таушалыу, туҙыу. *Кейем иҫкереү. Өй иҫкергән.* **2.** Оҙаҡ һаҡланып, боҙолоу. *Май иҫкергән.* **3.** Заман талабына яуап бирмәй башлау. *Иҫкергән ҡараш. Был мода иҫкергән.*

**иҫкәртеү (иҫкәрт-)** *ҡ.* **1.** Берәй эш-хәлде белдереү, иҫкә төшөрөү. *Иҫкәртеп ҡуйыу.* **2.** Берәй эш хаҡында алдан әйтеп ҡуйыу, киҫәтеү. *Һеҙҙе иҫкәрттеләрме? Йәнә бер иҫкәртәм.* **3.** Ниҙелер булдырмаҫ өсөн алдан сара күреү. *Ауырыуҙы иҫкәртеү. Енәйәтте иҫкәртеү.*

**иҫләү (иҫлә-)** *ҡ.* **1.** Онотмау, хәтерҙә тотоу. *Бала саҡты иҫләү. Иҫләй алмау.* **2.** Иғтибар итеп, хәтерҙә, иҫтә ҡалдырыу. *Иҫләп барыу.*

**иҫтәлек (иҫтәлеге)** *и.* **1.** Үткән көндәрҙән иҫтә ҡалған хәл, ваҡиға, күренеш һ. б. *Матур иҫтәлек. Атайымдың иҫтәлеге. Данлы йылдар иҫтәлеге.* **2.** Үлгән кешенең хәтирәһе. *Мәңге юйылмаҫлыҡ иҫтәлек. Шағир иҫтәлегенә арналған*

*кисә.* ♦ **Иҫтәлек дәфтәре** йәштәрҙең йәшлек хәтирәһе итеп үҙ-ара йыр, шиғыр яҙышыр һ. б. өсөн тотҡан махсус дәфтәре.

**иҫән** *с.* **1.** Донъяла бар, һау-сәләмәт. *Иҫән булыу. Иҫән йөрөү. Иҫән тороу. Иҫән кеше.* **2.** Зыян-зарарһыҙ, теүәл, бөтөн. *Йорт-ҡаралды иҫән. Ҡағыҙҙар иҫән ҡалған.* ♦ **Иҫән бул(ығыҙ)!** хушлашҡанда әйтелә. **Иҫәнме(һегеҙ)!** иҫәнләшкәндә әйтелә.

**иҫәнләшеү (иҫәнләш-)** *ҡ.* Осрашҡанда һаулыҡ һорашыу, сәләм биреү. *Ҡул биреп иҫәнләшеү.*

**иҫәп (иҫәбе)** *и.* **1.** Ниҙеңдер берәмекләп билдәләнгән һаны; хисап. *Мал иҫәбе. Иҫәбен алыу. Иҫәбен белеү. Иҫәбенә сығыу.* **2.** Эшләнгән эш өсөн түләү ғәмәле, түләнгән хаҡ. *Иҫәп алыу. Тулы иҫәп яһау.* **3.** Ниҙер эшләргә уйланған уй; ниәт. *Иҫәбе ҙур. Иҫәбем бар. Иҫәбе юҡ. Иҫәп тотоу.* ♦ **Иҫәбе юҡ** бик күп. **Иҫәпкә бар, һанға юҡ** булдыҡһыҙ, эшкә яраҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Иҫәпкә һан** исем өсөн. **Хужалыҡ иҫәбе** *иҡт.* хужалыҡты үҙенә килгән файҙа менән тотоу ысулы. **Юҡҡа иҫәп** юҡ менән бер.

**иҫәпләү (иҫәплә-)** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер һанын билдәләү; һанау, хисаплау. *Аҡса иҫәпләү. Иҫәпләп биреү. Иҫәпләп сығарыу. Көңелдән иҫәпләү. Яҙып иҫәпләү.* **2.** *күсм.* Ниндәйҙер баһа менән билдәләү, шулай тип ҡабул итеү; һанау. *Дуҫ итеп иҫәпләү. Үҙеңде бәхетле иҫәпләү.*

**иҫәпһеҙ-һанһыҙ** *с. йыйн.* Иҫәбе булмаған, бик күп. *Иҫәпһеҙ-һанһыҙ машиналар. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ булыу.*

**иҫәр** *с.* **1.** Аҡыл һәләте юҡ, аҡылы зәғиф; ахмаҡ, алйот. *Иҫәр кеше. Иҫәр булыу.* **2.** Еңел генә уйлаған, аҡылһыҙ. *Иҫәр уй.*

**ит** *и.* Мал, төрлө йәнлек йәки ҡош-ҡорттоң ашау өсөн тәғәйенләп ҡуйылған түшкәһе йәки шул түшкәнең берәй киҫәге. *Һимеҙ ит. Ҡаҡлаған ит. Йылҡы ите. Ҡаҙ ите. Һыйыр ите. Ит өләшеү.*

**итек (итеге)** *и.* Оҙон ҡунысլы, ҡаты үксәле күн аяҡ кейеме. *Дағалы итек. Күн итек. Итек кейеү. Итек таҙартыу.*

**итексе** *и.* Аяҡ кейемдәре тегеүсе һәм төҙәтеүсе оҫта. *Итексе булып эшләү.*

**итеү (ит-)** *ҡ.* **1.** Исем, сифат, рәүеш һ. б. һүҙ төркөмдәре менән килеп, шул һүҙҙәрҙән аңлашылған эште башҡарыу, эшләү мәғәнәһен бирә. *Ант итеү. Аһ итеү. Идара итеү. Ғәйеп итеү. Ҡабул итеү. Өмөт итеү. Әсир итеү. Шәп итеү.* **2.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында **-рға** формаһындағы ҡылым менән килеп, ниәтте, маҡсатты белдерә. *Барырға итеү. Иларға итеү. Китергә итеү.* ♦ **Ауыҙ итеү** ашап ҡарау, тәмләү. **Серем итеү** әҙ генә йоҡлап алыу. **Үҙ итеү** ныҡ яҡын һанау.

**итәк (итәге)** *и.* **1.** Өҫ кейеменең билдән түбәнге өлөшө. *Киң итәк. Күлдәк итәге. Иркә бала итәк бысрата.* (Әйтем.) **2.** Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең осона ҡатлап тегелгән тар өлөшө; ҡатмар, мәскәү. *Итәк һалыу. Итәк тотоу.* **3.** Тауҙың, түбәнең күтәрелә башлаған иң аҫҡы өлөшө. *Тау итәге.* ♦ **Итәк ҡырҡып, eң ялғау** етмәгәнде тартып-һуҙып еткерергә тырышыу. **Итәк тулы** бик күп (бала-сағаға ҡарата әйтелә).

**ихата** *и.* Ишек алды. *Ихата эсе. Ихатала ат тора.*

**ихахайлау (ихахайла-)** *ҡ.* Ҡысҡырып көлөү. *Ҡыҙҙар ихахайлап көлөшөп алды.*

**ихлас** *с.* **1.** Саф күңелле, эскерһеҙ. *Ихлас кеше. Ихлас күңелдән. Ихлас ярҙам. Ихлас яуап. Ихлас уҡыу. Ихлас эшләү.* **2.** *и. мәғ.* Нимәнелер эшләүгә ысын теләк, эскерһеҙ мөнәсәбәт. *Ихлас һалыу. Ихласы юҡ. Ихласһыҙ эшләү.*

**ихтимал** *и.* **1.** Берәй эш-хәлдең булыу, үтәлеү, эшләнеү мөмкинлеге. *Ауырыу ихтималы булыу.* **2.** *с. мәғ.* Ихтимал хәл. *Килеп ҡуйыуҙары ихтимал.* **3.** *инш. мәғ.* Бәлки. *Ихтимал, бөгөн килерҙәр.*

**ихтирам** *и.* Ҡәҙер, хөрмәт. *Ихтирам итеү. Ихтирам күрһәтеү.*

**ихтирамлы** *с.* **1.** Хөрмәтле, ихтирам ителгән. *Ихтирамлы кеше. Ихтирамлы булыу.* **2.** Хөрмәт итеүсән, ихтирам күрһәтеүсән. *Ихтирамлы бала. Ихтирамлы һөйләшеү.*

**ихтыяр** *и.* **1.** Теләк, ирек. *Ихтыяр биреү. Ихтыярға ҡуйыу. Үҙ ихтыяры менән.* **2.** Маҡсатты үтәү һәләтлеге, рухи көс. *Көслө ихтыяр. Ихтыяры ныҡ. Ихтыяр тәрбиәләү.*

**иһә** *ярҙ. ҡ.* **1.** Ҡылымдың үткән заман формаһына ҡушылып, шарт ҡылым яһай. *Ҡайтты иһә, мәктәпкә барһын.* **2.** Ҡаршы ҡуйыуҙы белдерә. *Белде иһә, һөйләр ине.*

**иһәнәү (иһәнә-)** *ҡ.* Йоҡо баҫҡанда, ирекһеҙҙән, ауыҙҙы киң асып, бик тәрән тын алыу; иҫнәү.

**иш** *и.* **1.** Булмышы, дәрәжәһе менән бер үк кимәлдәге тиң; тиңдәш. *Иш булыу. Иш күреү. Иш һанау.* **2.** Ниҙеңдер төҫ-сифат яғынан оҡшаған тиңе. *Күлдәгемдең ише. Бер иш булыу.* ♦ **Иш янына ҡуш (булыу)** нимәгәлер өҫтәмә ҡушымта (булыу).

**ишан** *и.* Мосолмандарҙа шәкерттәрҙе уҡытып тәрбиәләй торған дин әһеле. *Ишан хәҙрәттәре. Ишан булыу.*

**ишара** *и.* Һүҙһеҙ аңлатыу өсөн яһалған төрлө ҡул, баш һ. б. хәрәкәте; ым. *Ишара яһау. Ишара итеү.*

**ишаралау (ишарала-)** *к.* **1.** Ишара яһау, ымлау. *Ишаралап саҡырыу.* **2.** *күсм.* Ситләтеп аңлатыу, нимәгәлер фекерҙе йүнәлтеү.

**ишек (ишеге)** *и.* Йорт һәм башҡа ҡоролманың эсенә инеп-сығып йөрөү өсөн стенаһына яһалған уйым һәм уға беркетелгән асылмалы-ябылмалы ҡапҡас. *Артҡы ишек. Өй ишеге. Машина ишеге. Ишек тупһаһы. Ишекте асыу. Ишек бикләү. Ишектән инеү.*

**ишелеү (ишел-)** *к.* **1.** Таралып емерелеү, күп булып ауыу. *Тау ишелә. Яр ишелә.* **2.** Хәл-ҡылымдың **-п** формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, «бик күп», «мул» тигән мәғәнәне аңлата. *Ишелеп уңыу. Ишелеп үҫеү. Ишелеп ятыу.*

**ишетелеү (ишетел-)** *к. төш. ҡар.* **ишетеү.** *Йыр ишетелә. Тауыш ишетелә. Асыҡ ишетелә. Ишетелеп тороу.*

**ишетеү (ишет-)** *к.* **1.** Төрлө тауыштарҙы, өндәрҙе ҡолаҡ менән һиҙеү, ҡабул итеү. *Ишетеп ҡалыу. Ҡолағы ишетмәй.* **2.** Ниҙер хаҡында хәбәр алыу. *Ишетеп белеү. Уның һәләк булғанын ишеттем.* ♦ **Һүҙ ишетеү** кемдер тарафынан әрләнеү, тиргәлеү.

**ишеү**[1] **(иш-)** *к.* Ике-өс ҡаттан алмаш-тилмәш салып, бороп бау яһау. *Арҡан ишеү. Бау ишеү.* ♦ **Ҡомдан арҡан ишеү** мәғәнәһеҙ, файҙаһыҙ эш менән булыу.

**ишеү**[2] **(иш-)** *к.* Кәмә йәки башҡа нәмәлә йөҙөү өсөн ишкәк йәки башҡа нәмә менән һыуҙы ярып этеү. *Ишкәк менән ишеү. Ҡул менән ишеү. Ярға табан ишеү. Шәп ишеү.*

**ишеү**[3] **(иш-)** *к.* Тотош-тотош, күп-күп итеп аҫҡа ауҙарыу (таш, тупраҡ һымаҡ нәмәне). *Ишеп төшөрөү. Таш ишеү.*

**ишкәк (ишкәге)** *и.* Ишеү өсөн файҙаланылған, бер башы яҫы итеп яһалған ҡулайлама. *Кәмә ишкәге. Ишкәк ишеү.*

**ишәк (ишәге)** *и.* Йомро тояҡлы, оҙон ҡолаҡлы, көлһыу төҫтәге, ат һымағыраҡ бәләкәй кәүҙәле эш хайуаны. *Ҡырағай ишәк. Ишәк менеп йөрөү. Ишәк менән йөк ташыу.*

**июль (июлдә)** *и.* Календарь йылының етенсе айы. *Июль айы. Июль – йәй уртаһы. Июлдә еләк бешә.*

**июнь (июндә)** *и.* Календарь йылының алтынсы айы. *Июнь айы. Беренсе июнь. 22 июндә иң оҙон көн һәм иң ҡыҫҡа төн була.*

# Й

**йоғонто** *и.* Кемдеңдер, нимәнеңдер кем йәки нимәгәлер булған тәьҫире, шул тәьҫирҙең шауҡымы. *Кире йоғонто. Ыңғай йоғонто. Йоғонто яһау.*

**йоғоу (йоҡ-)** *ҡ.* **1.** Тейеп, һыланып, эҙ ҡалдырыу. *Бысраҡ йоға. Стенаның ағы йоға. Үләндең йәшеле йоға.* **2.** Берәүҙән берәүгә күсеү (ауырыуға ҡарата). *Атаһының ауырыуы йоҡҡан. Йәнлектәрҙән йоҡҡан сир.* ♦ **Теле телгә йоҡмау** *ҡар.* **тел.**

**йод** *и.* **1.** Химик элемент, ҡара буҙ төҫтәге кристаллик матдә. **2.** Шул матдәнең спирттағы иретмәһе (медицинала ҡулланыла). *Йод һөртөү. Йод эретмәһе.*

**йоҙаҡ (йоҙағы)** *и.* Нимәнелер бикләү өсөн эшләнгән асҡыслы ҡулайлама; бик. *Аҫмалы йоҙаҡ. Бығау йоҙаҡ. Ишек йоҙағы. Йоҙаҡ асҡысы. Йоҙаҡ менән бикләү. Йоҙаҡты асыу.*

**йоҙаҡлау (йоҙаҡла-)** *ҡ.* Йоҙаҡ менән бикләү. *Йоҙаҡлап алыу. Йоҙаҡлап китеү. Йоҙаҡлап ҡуйыу.*

**йоҙроҡ (йоҙроғо)** *и.* Бармаҡтары уҫҡа ҡыҫып йомолған ҡул осо. *Йоҙроҡ күрһәтеү. Йоҙроҡ менән һуғыу. Йоҙроҡ төйөү.*

**йоҡа** *с.* **1.** Арҡыры киҫеме тар, ҡалынлығы ҙур түгел; *киреһе* ҡалын. *Йоҡа боҙ. Йоҡа ирен. Йоҡа ҡағыҙ. Йоҡа таҡта.* **2.** Еңел (кейемгә ҡарата). *Йоҡа пальто. Йоҡа кейенеү.* **3.** Һирәк булып үҫкән; ҡуйы түгел. *Йоҡа сәсле. Үләне йоҡа сабынлыҡ.*

**йоҡлау (йоҡла-)** *ҡ.* Йоҡо хәлендә булыу. *Ҡаты йоҡлау. Иҙрәп йоҡлау. Йоҡларға ҡалыу.*

**йоҡо** *и.* Билдәле бер ваҡыт араһында ҡабатланып торған аң эшмәкәрлегенең тулыһынса йәки өлөшләтә туҡталып тороуы менән бәйләнешле физиологик яҡтан тыныслыҡ, организмдың ял итеү хәле. *Иртәнге йоҡо. Татлы йоҡо. Төнгө йоҡо. Тыныс йоҡо. Йоҡо бирмәү. Йоҡо бөтөү. Йоҡонан тороу. Йоҡонан уяныу.* ♦ **Йоҡо ҡасыу (осоу, асылыу)** йоҡо теләге бөтөү. **Йоҡо баҫыу** ныҡ йоҡлағы килеү. **Тыныс йоҡо** йоҡо алдынан кешегә әйтелә торған теләк һүҙе.

**йоҡомһорау (йоҡомһора-)** *ҡ.* Йоҡо килә башлау. *Йоҡомһорап китеү. Йоҡомһорап ултырыу.*

**йола** *и.* Быуындан быуынға килеп, халыҡ араһында ҡағиҙәгә әйләнеп киткән ғөрөф-ғәҙәт. *Дини йола. Туй йолалары. Йоланы тотоу.*

**йома** *и.* **1.** Аҙнаның бишенсе көнө. *Йома арты. Йомаға ҡаршы.* **2. Йома намаҙы** аҙнаның бишенсе көнөндә уҡыла торған оло намаҙ.

4 – 1.0136.10

**йомаҡ (йомағы)** *и.* Төп мәғәнәһен уйлап табыу өсөн нимәнелер кинәйә менән йәки һүҙ уйнатып һүрәтләп әйткән һүҙ. *Йомаҡ ҡойоу. Йомаҡ әйтеү. Йомаҡ сисеү.*

**йомарлау (йомарла-)** *ҡ.* **1.** Әүәләп, йомро, тумалаҡ хәлгә килтереү. *Балсыҡ йомарлау.* **2.** Ныҡ ҡыҫыу (йоҙроҡто). *Йоҙроҡто йомарлау.* **3.** Теләһә нисек бөкләп ойпалау. *Ҡағыҙҙы йомарлау. Йомарлап ташлау.* **4.** Йомғаҡ итеп урау; йомғаҡлау. *Йөндө йомарлау.*

**йомарт** *с.* Бар нәмәһен кеше менән бүлешкән; *киреһе* һаран. *Йомарт ҡыҙ. Йомарт булыу.*

**йомғаҡ (йомғағы)** *и.* **1.** Тумалаҡлап уралған еп. *Йомғаҡҡа урау. Йомғаҡты тағатыу. Еп йомғағы.* **2.** *күсм.* Башта буталған уй, фекер. *Уйҙар йомғағы. Хәтирәләр йомғағы.* **3.** Бер сама ҙурлыҡта итеп йомарланған нәмә; йомарлам. *Бер йомғаҡ май.* **4.** *күсм.* Ниндәйҙер эштең, хеҙмәттең нәтижәһе; һөҙөмтә. *Эшкә йомғаҡ яһау. Ярыш йомғағы.*

**йомғаҡлау (йомғаҡла-)** *ҡ.* **1.** Тумалаҡлап урау (епте). *Епте йомғаҡлау. Иләнгән йөндө йомғаҡлау.* **2.** Билдәле ҙурлыҡта тумалаҡ итеп йомарлау. *Балсыҡты йомғаҡлау. Майҙы йомғаҡлау.* **3.** *күсм.* Дөйөмләштереп һөҙөмтә сығарыу. *Эште йомғаҡлау. Йомғаҡлау һүҙе.*

**йомортҡа** *и.* **1.** Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең (*мәҫ.,* гөбөргәйел, крокодилдың) ҡабыҡлы оҙонса түңәрәк яралғыһы. *Ҡаҙ йомортҡаһы. Йомортҡа ҡабығы. Йомортҡа һарыһы. Йомортҡа һалыу.* **2.** Ҡайһы бер бөжәк, селәүсендәрҙең оҙонсараҡ ваҡ бөртөксәләрҙән торған яралғыһы. *Күбәләк йомортҡаһы. Ҡырмыҫҡа йомортҡаһы.*

**йомоу (йом-)** *ҡ.* Ҡымтып ябыу (ауыҙ, күҙ, усты). *Ауыҙҙы йомоу. Күҙҙе йомоу. Усҡа йомоу.*

**йомош** *и.* **1.** Кемгә булһа ла эшләргә, башҡарырға ҡушылған эш. *Йомош ҡушыу. Йомошҡа йөрөү. Йомошҡа ярау.* **2.** Кәрәк булған нәмә, эшләй торған эш. *Йомош булыу. Йомош менән килеү.*

**йомран** *и.* Тейендәр ғаиләһенә ҡараған кимереүсе дала йәнлеге. *Йомран өңө. Йомран тиреһе. Йомран тотоу.*

**йомро** *с.* **1.** Тумалаҡ рәүешле. *Йомро таш. Йомро булыу.* **2.** Арҡыры киҫелеше түңәрәк (оҙонса нәмәгә ҡарата). *Йомро таяҡ. Йомро тимер мейес.*

**йомшаҡ** *с.* **1.** Тығыҙ түгел, ҡабарып торған; *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ диван. Йомшаҡ ҡар. Йомшаҡ мамыҡ. Йомшаҡ мендәр. Йомшаҡ сәс.* **2.** Физик тәьҫиргә, эшкәртеүгә бирешеүсән; *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ ағас. Йомшаҡ балсыҡ. Йомшаҡ ер.* **3.** Яҡшы мөнәсәбәтле, ыңғайға килеүсән, ҡаты түгел. *Йомшаҡ кеше. Йомшаҡ мөғәмәлә. Йомшаҡ тәбиғәтле. Йомшаҡ күңелле.*

**4.** Кешегә ҡарата киҫкен, талапсан булмаған, *киреһе* ҡаты. *Йомшаҡ яза. Йомшаҡ шелтә. Йомшаҡ булыу.*

**йомшартыу (йомшарт-)** *ҡ.* **1.** Нимәлер эшләп йомшаҡ итеү, йомшаҡҡа әйләндереү. *Ағас төбөн йомшартыу. Балауыҙҙы иретеп йомшартыу. Тимерҙе утта ҡыҙҙырып йомшартыу. Түтәлде йомшартыу.* **2.** Күңелгә хуш килерлек, яғымлы итеп. *Ҡарашты йомшартыу. Тауышты йомшартыу.* **3.** Ниҙеңдер көсөн, киҫкен тәьҫирен кәметеү. *Иғтибарҙы йомшартыу. Хөкөмдө йомшартыу.*

**йомшарыу (йомшар-)** *ҡ.* **1.** Йомшаҡҡа әйләнеү, йомшаҡ хәлгә килеү. *Балсыҡ йомшарҙы. Күн йомшарҙы. Ямғыр яуғас, ер йомшара.* **2.** Күңелгә хуш килерлек яғымлыға әйләнеү. *Ҡараш йомшарыу. Тауыш йомшарыу.*

**йондоҙ** *и.* **1.** Тәбиғәте менән Ҡояшҡа оҡшаған, төнөн күктә яҡты нөктә кеүек күренгән күк есеме. *Таң йондоҙо. Етегән йондоҙо. Тимерҡаҙыҡ йондоҙо. Өлкәр йондоҙлоғо. Йондоҙ атылыу.* **2.** Геометрик фигура. *Биш мөйөшлө йондоҙ. Кремль йондоҙо. Йондоҙ тағыу.* **3.** *күсм.* Берәй өлкәлә дан ҡаҙанған, атаҡлы кешегә ҡарата әйтелә. *Кино йондоҙо. Эстрада йондоҙо. Сәхнә йондоҙо.*

**йонсоу[1] (йонсо-)** *ҡ.* **1.** Тән һәм йән ыҙаһы кисереү; ыҙалатыу, интегеү. *Ауыр эштән йонсоу. Йоҡлай алмай йонсоу.* **2.** Мохтажлыҡ кисереү. *Утынға йонсоу. Аҡсаға йонсоу.*

**йонсоу[2]** *с.* **1.** Ыҙа сигеп арыған, талсыҡҡан, йонсоған. *Йонсоу кеше. Йонсоу күренеш. Йонсоу булыу.* **2.** Ыҙалы, яфалы, йонсоған, мәшәҡәтле. *Йонсоу тормош.* **3.** Ямғырлы, һыуыҡ елле, буранлы (көнгә, һауаға ҡарата). *Йонсоу көндәр.*

**йоп** *с.* Икегә тигеҙ бүленгән; *киреһе* таҡ. *Йоп һан. Йоп булыу.*

**йор** *с.* **1.** Етеҙ, тиҙ хәрәкәтле. *Йор егет. Йор йылға.* **2.** Шаян, үткер, тапҡыр (һүҙгә һәм шундай һүҙле кешегә ҡарата). *Йор кеше. Йор һүҙле.*

**йорт** *и.* **1.** Йәшәү, төрлө ойошма һ. б. урынлаштырыу өсөн тәғәйенләнгән ҡоролма; бина, өй. *Ағас йорт. Таш йорт. Ике ҡатлы йорт. Йорт һалыу. Мәҙәниәт йорто.* **2.** Айырым бер ғаиләнең хужалығы. *Йорт кәрәк-ярағы. Йорт ҡаралдыһы. Йорт хужаһы. Йорт эштәре. Йорт ҡарау.* ♦ **Йорт идаралығы** билдәле бер нисә йортто көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү бурысын үтәгән ойошма. **Балалар йорто** етем балалар тәрбиәләнә торған махсус биналы ойошма.

**йотом** *и.* Бер йоторлоҡ күләм. *Бер йотом һыу. Ике генә йотом һыу.*

**йотоу (йот-)** *ҡ.* **1.** Нимәнелер (ашамлыҡ, эсемлек һ. б.) ауыҙҙан ҡыҙыл үңәскә һәм ашҡаҙанға оҙатыу. *Дарыу йотоу. Һыу йотоу. Йотоп ебәреү. Сәйнәп йотоу. Йотоу хәрәкәттәре.* **2.** Үҙ эсенә һурып алыу, батырыу. *Диңгеҙ утрауҙы йотҡан. Һаҙ малды йота.* ♦ **Телде йоторлоҡ** бик тәмле.

**йөҙ** *и.* **1.** Кеше башының алғы яғы; бит. *Матур йөҙ. Оҙонса йөҙ. Туңәрәк йөҙ. Йөҙҙө йәшереү. Йөҙ ҡыҙарыу.* **2.** Ниҙең дә булһа өҫкө яғы, өҫтө. *Икмәктең йөҙө. Ер йөҙө.* **3.** Ҡырҡа торған ҡоралдың үткер ҡыры. *Бысаҡтың йөҙө. Ҡылыстың йөҙө. Йөҙөн ҡайтарыу. Йөҙөн сығарыу.* ♦ **Ике йөҙлө** төрлө һүҙ һөйләп йөрөгән ихлас булмаған. **Йөҙ асылыу** кәйеф күтәрелеп, сырайҙа шатлыҡ сағылыу, йылмайыу. **Йөҙгә ҡара ягыу** ояtҡа ҡалдырыу, хурлау. **Йөҙ ҡыҙарыу** ояtҡа ҡалыу. **Йөҙөн асыу** кемлеген фаш итеү. **Йөҙ һыуын түгеү** оятлы булыу, кәмһенеү.

**йөҙөк (йөҙөгө)** *и.* Ҡашлы балдаҡ. *Алтын йөҙөк. Көмөш йөҙөк. Йөҙөк ҡашы. Йөҙөк кейеү.*

**йөҙөм** *и.* Йылы яҡта үҫә торған үрмәле емеш ағасы һәм шул ағастың тәлгәшле емеше. *Йөҙөм баҡсаһы. Йөҙөм һуты. Йөҙөм йыйыу. Йөҙөм үҫтереү.*

**йөҙөү (йөҙ-)** *ҡ.* **1.** Ҡул, аяҡ, тәнде ҡыбырлатып, һыуҙа хәрәкәт итеү. *Йөҙөп сығыу. Ҡолас ташлап йөҙөү. Салҡан йөҙөү. Йөҙөү буйынса ярыш.* **2.** Һыу транспортында хәрәкәт итеү. *Кәмәлә йөҙөү. Теплоход йөҙә.*

**йөҙәтеү (йөҙәт-)** *ҡ.* **1.** Ыҙалатыу, ыҙа сиктереү. *Ауыр эш йөҙәтте. Сир йөҙәтте.* **2.** Теңкәне ҡоротоу, аптыратыу. *Юҡҡа бәйләнеп йөҙәтеү.*

**йөҙәү (йөҙә-)** *ҡ.* **1.** Ыҙа, яфа сигеү; йонсоу. *Йөҙәп бөтөү. Аслыҡтан йөҙәү. Ауыр эштән йөҙәү.* **2.** Теңкә ҡороу, аптырау. *Кәрәк китапты таба алмай йөҙәү.*

**йөк (йөгө)** *и.* **1.** Юл өсөн тейәлгән, йөкмәлгән нәмә. *Ауыр йөк. Йөк тейәлгән вагон. Йөк аты. Йөк машинаһы. Йөк тейәү. Йөк ташыу.* **2.** *күсм.* Өҫкә төшкән ауыр эш, ҡыйынлыҡ. *Тормош йөгө. Өҫтә йөк булып тороу.*

**йөкләмә** *и.* Эш буйынса үҙ өҫтөнә алған йәки йөкмәтелгән бурыс. *Йөкләмә алыу. Йөкләмә ҡуйыу. Йөкләмә биреү. Йөкләмә үтәү.*

**йөкмәтеү (йөкмәт-)** *ҡ.* **1.** Яурынға һалып кемгәлер күтәртеү. *Тоҡ йөкмәтеү.* **2.** Үтәр өсөн кемгәлер тапшырыу. *Бурыс йөкмәтеү. Эш йөкмәтеү.*

**йөкмәтке** *и.* Яҙылған нәмәнең асылы; эстәлек. *Әҫәрҙең йөкмәткеһе. Һүрәттең йөкмәткеһе. Хаттың йөкмәткеһе.*

**йөкмәү (йөкмә-)** *ҡ.* **1.** Иңгә һалып күтәреү. *Бала йөкмәү. Тоҡ йөкмәү. Йөкмәп алып килеү.* **2.** *күсм.* Үҙенде яуаплы һанап, үҙ өҫтөнә алыу. *Донъя ауырлығын йөкмәү. Ил бурысын йөкмәү.*

**йөн** *и.* Тереклек, хайуандарҙың тәнен ҡаплап торған сәс кеүек төктәр. *Ҡуйы йөн. Ҡалын йөн. Ҡыҫҡа йөн. Йөнө ҡойолоу. Кәҙгө йөн. Яҙғы йөн. Кәзә йөнө. Һарыҡ йөнө. Йөн иләү. Йөн тетеү. Йөн бейәләй. Йөн ойоҡбаш. Йөн юрған.* ♦ **Йөн тибеү** эшһеҙ, бушҡа ваҡыт үткәреү.

**йөнтәҫ** *с.* **1.** Йөн менән ҡапланған. *Йөнтәҫ кеше. Йөнтәҫ ҡул.* **2.** Өбөрөлө. *Йөнтәҫ балаҫ. Йөнтәҫ тауар.*

**йөрөтөү (йөрөт-)** *ҡ.* **1.** Хәрәкәтләндереү, хәрәкәт иттереү. *Атты йөрөтөү. Аяҡты йөрөтөү. Ҡулды йөрөтөү. Саф һауала йөрөтөү.* **2.** Хәрәкәткә килә торған нәмәгә идара итеү. *Комбайн йөрөтөү. Трактор йөрөтөү. Троллейбус йөрөтөү.* **3.** Берәй маҡсат менән ҡайҙалыр алып барыу, үҙең менән бергә йөрөтөү. *Балыҡҡа йөрөтөү. Бергә йөрөтөү. Етәкләп йөрөтөү. Кеҫәгә һалып йөрөтөү. Һаҡлап йөрөтөү. Эшкә йөрөтөү.* **4.** *күсм.* Уйҙа, күңелдә һаҡлау. *Башта йөрөтөү. Күңелдә йөрөтөү. Өмөт йөрөтөү.* **5.** Һыҙып, һырлап биҙәү. *Алтын йөрөткән сынаяҡ. Көмөш йөрөткән сынаяҡ.* **6.** Берәй исем аталыу. *Колхоз Хоҙайбирҙин исемен йөрөтә. Мәктәп Аҡмулла исемен йөрөтә. «Ҡыҙҙар тауы» тип йөрөтәләр.*

**йөрөү (йөрө-)** *ҡ.* **1.** Аяҡҡа баҫып атлау, хәрәкәт итеү. *Алдан йөрөү. Йөрөп эшләү.* **2.** Хәрәкәтләнеү, эшләү. *Машина йөрөй. Сәғәт йөрөй.* **3.** Ниндәйҙер сара ярҙамында хәрәкәт итеү. *Ат менән йөрөү. Машинала йөрөү.* **4.** Берәй маҡсат менән ҡайҙалыр барыу. *Донъя гиҙеп йөрөү. Уҡырға йөрөү. Эшкә йөрөү.* **5.** Сират буйынса шылдырыу йәки һалыу (уйында). *Пешка менән йөрөү. Туз менән йөрөү.* **6.** Хәрәкәт иткәндә үҙең менән бергә булыу. *Кеҫәлә ҡәләм йөрөй. Күңелдә йөрөгән тойғо.*

**йөрәк (йөрәге)** *и.* **1.** *анат.* Ҡан әйләнешен тәьмин итә торған мускуллы ҡапсыҡ кеүек үҙәк ағза (кешелә күкрәк ҡыуышлығының һул яғында урынлашҡан). *Йөрәк алды. Йөрәк ҡапҡасы. Йөрәк ауырыуы. Йөрәк тибеше. Йөрәк ҡыҫылыу. Йөрәк шартлау.* **2.** *күсм.* Кешенең эске донъяһы, хис-тойғолары; күңел. *Йөрәк йылыһы. Йөрәк сере. Йөрәк елкенеү. Йөрәкте асып һалыу.* ♦ **Арыҫлан йөрәкле** бик ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ кешегә ҡарата әйтелә. **Бөтә йөрәктән** ысын күңелдән. **Йөрәк етеү** батырсылыҡ итеү. **Йөрәккә инеү** йылы һүҙ менән ышаныс, хөрмәт ҡаҙаныу. **Йөрәккә ҡан һауыу** ауыр ҡайғы баҫыу. **Йөрәккә төшөү** бик ныҡ яфалау, интектереү. **Йөрәккә ут һалыу** ярһытыу, елкендереү. **Йөрәк урынында түгел** күңел тыныслығы юҡ. **Йөрәккә ял булыу** күңелгә рәхәт булыу. **Ҡуш йөрәк(ле)** ҡурҡаҡ. **Таш йөрәк** ҡаты күңелле.

**йүгерек** *с.* **1.** Йүгереүгә, сабыуға шәп. *Йүгерек юрға. Йүгеректәр ярышы.* **2.** *күсм.* Етеҙ, йылдам хәрәкәтле. *Йүгерек һыу. Йүгерек ҡул. Күҙҙәр йүгерек.*

**йүгереү (йүгер-)** *ҡ.* **1.** Аяҡтарҙы тиҙ-тиҙ алмашлап, ҡыҙыу хәрәкәт итеү. *Шәп йүгереү. Йүгереп барыу. Йүгереп етеү. Сығып йүгереү. Тороп йүгереү.* **2.** Тәнгә таралып, тәьҫир итеү. *Биткә ҡан йүгереү. Эскә йылы йүгерҙе.*

**йүгерешеү (йүгереш-)** *ҡ.* Йүгереп ярышыу. *Йүгерешеп уйнау.*

**йүгән** *и.* Менге һәм екке малдың башын тотор өсөн, ауыҙлыҡлы итеп ҡайыштан һ. б. эшләнгән нәмә. *Ҡайыш йүгән. Йүгән теҙгене. Йүгәнен һыпырыу. Атҡа йүгән кейҙереү.*

**йүкә** *и.* **1.** Киртләс япраҡлы, сәскәһе һарғылт, хуш еҫле, баллы ағас. *Йүкә ағасы. Йүкә сәскәһе. Йүкә балы.* **2.** Шул ағастың ҡабығын һыуҙа ебетеп һыҙырып алынған эске ҡатлауы. *Йомшаҡ йүкә. Ҡаты йүкә. Йүкә серетеү. Йүкә йыуғыс. Йүкә йүгән. Йүкә сыбыртҡы.* ♦ **Йүкә сөй (шына) ҡағыу** нимәгәле ыңғайлатыр, ниҙер эшләтер өсөн юрамал маҡтау, юхалау.

**йүләр** *с.* Аҡылға кәм; ахмаҡ, алйот. *Йүләр кеше. Башты йүләргә һалыу.*

**йүн** *и.* **1.** Кешенең физик көсө, рухи асылы, эш башҡарыу мөмкинселеге. *Был малайҙың йүне юҡ.* **2.** Тейешле тәртип, рәт. *Йүне сығыу. Йүне булыу. Йүнен күреү.*

**йүнле** *с.* Һәйбәт, арыу, яҡшы. *Йүнле аш. Йүнле булыу. Йүнле уңыш. Йүнле хәбәр.*

**йүнләү (йүнлә-)** *ҡ.* Нимәнелер булдырыу өсөн тырышыу; хәстәрләү. *Аҡса йүнләү. Ашарға йүнләү. Утын йүнләү.*

**йүнәлеү (йүнәл-)** *ҡ.* **1.** Берәй тарафҡа юл алыу. *Ауыл яғына йүнәлеү. Ҡайтырға йүнәлеү.* **2.** *күсм.* Ниндәйҙер эш йәки мәсьәләгә бирелеү. *Бөтә иғтибары уҡыуға йүнәлгән.*

**йүнәлеш** *и.* **1.** Тараф. *Вертикаль йүнәлеш. Билдәле бер йүнәлештә барыу.* **2.** *күсм.* Берәй эш, күренештең үҫеш юлы. *Төп йүнәлеш. Йүнәлеш алыу.* **3.** Ғилми, ижтимағи ағым. *Әҙәби йүнәлештәр.* ♦ **Ҡылым йүнәлештәре** эш-хәрәкәттең субъектҡа йәки объектҡа булған мөнәсәбәттәрен белдергән ҡылым категорияһы. *Төп йүнәлеш. Ҡайтым йүнәлеше. Төшөм йүнәлеше. Уртаҡлыҡ йүнәлеше. Йөкмәтеү йүнәлеше.*

**йүнәтеү (йүнәт-)** *ҡ.* **1.** Боҙолған, туҙған нәмәне эшкә яраҡлы итеү; төҙәтеү. *Машинаны йүнәтеү. Ҡапҡаны йүнәтеү. Юлды йүнәтеү.* **2.** Алып, хәстәрләп бар итеү. *Бесән йүнәтеп алыу. Тамаҡҡа йүнәтеү. Утын йүнәтеү.*

**йүргәк (йүргәге)** *и.* Йәш баланы урай торған сепрәк. *Йүргәген алмаштырыу. Йүргәк йыуыу.*

**йүткереү (йүткер-)** *ҡ.* Үпкәнән үҙ иркеңдән тыш өҙөп-өҙөп көслө тын сығарыу. *Быуылып йүткереү. Ҡыж-ҡыж йүткереү. Сәсәп йүткереү.*

**йүтәл** *и.* Һыуыҡ тейеп, ныҡ йүткереп ауырыу. *Йүтәл тейеү. Йүтәлде дауалау.*

**йығылыу (йығыл-)** *ҡ.* Торған ерҙән йәки юғарынан ауыу; ҡолау, тәгәрәү. *Артҡа йығылыу. Тайып йығылыу. Хәлһеҙ булып йығылыу. Эләгеп йығылыу.*

◆ **Аяҡҡа йығылыу** инәлеп, ялбарып мөрәжәғәт итеү. **Түшәккә йығылыу** ныҡ ауырып китеү.

**йығыу (йыҡ-)** *к.* **1.** Торған ерҙән ауҙарыу; ҡолатыу, тәгәрәтеү. *Артҡа йығыу. Ергә йығыу. Этеп йығыу.* **2.** Күпләп ауҙарыу, ҡырҡыу (үҫеп ултырғанды). *Ағас йығыу. Урман йығыу.*

**йыйнаҡ** *с.* **1.** Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылған, йыйыштырылған; бөхтә. *Йыйнаҡ бүлмә.* **2.** Эшкә тәрбиәле, бөхтә. *Йыйнаҡ бала. Йыйнаҡ булыу.*

**йыйылыу (йыйыл-)** *к.* Күмәкләп бер ергә килеү; тупланыу. *Бүлмәгә йыйылыу. Уйынға йыйылыу. Йыйылып һөйләшеү. Халыҡ йыйылған.*

**йыйылыш** *и.* Төрлө мәсьәләне бергәләшеп ҡарау өсөн тупланған күмәк ултырыш. *Ата-әсәләр йыйылышы. Дөйөм йыйылыш. Йыйылышҡа йөрөү. Йыйылыш үткәреү.*

**йыйын** *и.* **1.** Күмәк ырыуҙың ил, донъя хәлдәрен һөйләшеп, һүҙ, кәңәш беректереү өсөн саҡырылған оло йыйылышы. *Йыйын йыйыу. Халыҡ йыйыны. Ырыу йыйыны.* **2.** Яҡын-тирә ауылдарҙы йыйып, һый, уйын, төрлө ярыш менән үткәрелә торған йәйге байрам. *Йыйынға әҙерләнеү. Йыйындарҙа көрәшеп беренселекте алыу. Йыйын үткәреү.*

**йыйынтыҡ (йыйынтығы)** *и.* Бер иш нәмәләрҙе тәртипкә килтереп, йыйып баҫтырған китап. *Йырҙар йыйынтығы. Шиғырҙар йыйынтығы. Хикәйәләр йыйынтығы. Йыйынтыҡ сығарыу.*

**йыйыныу (йыйын-)** *к.* Кәрәк-яраҡты йыйып, китергә йәки юлға әҙерләнеү. *Йыйына башлау. Йыйынып бөтөү. Ҡунаҡҡа йыйыныу. Мәктәпкә йыйыныу.*

**йыйырсыҡ (йыйырсығы)** *и.* Тиреләге, тәндәге юл-юл булып батып торған эреле-ваҡлы һыҙыҡ; һыр. *Тәрән йыйырсыҡтар. Күҙ төбөндәге йыйырсыҡтар. Маңлайҙағы йыйырсыҡтар.*

**йыйырыу (йыйыр-)** *к.* Йыйырсыҡлы итеү; сырыштырыу. *Йөҙҙө йыйырыу. Маңлайҙы йыйырыу. Танауҙы йыйырыу.*

**йыйыу (йый-)** *к.* **1.** Таралып ятҡан нәмәләрҙе, төрлө ерҙә булған кешеләрҙе бергә туплау, өйөү. *Бер урынға йыйыу. Бесәнде йыйыу. Дуҫтарҙы йыйыу.* **2.** Айырым өлөштәрҙе бер бөтөнгә берләштереү. *Деталдәрҙе йыйыу. Йыйыу цехы.* **3.** Һибелеп, таралып ятҡан нәмәләрҙе берәмләп сүпләү, берәм-берәм алыу. *Алма йыйыу. Еләк йыйыу. Сытыр йыйыу. Сәскә йыйыу.* **4.** Ышаныслы, йәшерен урынға алып ҡуйыу, йәшереү. *Алып йыйыу. Йыйып ҡуйыу.*

**йыйыштырыу (йыйыштыр-)** *к.* **1.** Таралған, сәселгән нәмәне йыйып, үҙ урынына ҡуйыу; йыйыу. *Китап-ҡағыҙҙарҙы йыйыштырыу. Мәктәпте йыйыш-*

*тырыу. Өҫтәлде йыйыштырыу.* **2.** Үлгән кешене күмеү; ерләү. *Мәйетт йыйыштырыу.*

**йыл** *и.* **1.** Ерҙең Ҡояш тирәһендә бер әйләнеп сығыуына тиң булған ваҡыт берәмеге (1 ғинуарҙан башланып 12 айҙы эсенә ала). *Алдағы йыл. Үткән йыл Элекке йыл. Йыл һайын. Һәр йыл. Йылға бер. Йыл эсендә.* **2.** *күпл.* Шул бер нис берәмекте эсенә алған ваҡыт араһы. *Йәшлек йылдары. Һуғыш йылдары.* ♦ **Ai йылы** ай календары менән иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо (ҡояш йылынан 11 көнг кәм). **Ҡояш йылы** ҡояш календары менән иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо.

**йылан** *и.* **1.** Аяҡһыҙ, нәҙек оҙон, ҡайһы берҙәренең ағыулы теше булған һөйрәлеүсе йәнлек. *Быуар йылан. Ағыулы йылан. Ҡара йылан. Туҙбаш йылан* **2.** *күсм.* Бик яуыз, хәйләле, мәкерле кешегә ҡарата әйтелә. ♦ **Ер аҫтында йылан көйшәгәнен белеү** бөтә нәмәне белеп, һиҙеп тороу. **Йылан аяғын киҫкә** хәйләгә өйрәнгән, бик үткер. **Йылан йылы** ун ике йыллыҡ иҫәптең алтынсы йылы.

**йылға** *и.* Үҙ үҙәне буйлап ағып ятҡан, ер аҫты һәм ер өҫтөндәге һыуҙа иҫәбенә тулышып торған тәбиғи һыу. *Ҙур йылға. Киң йылға. Тәрән йылға Йылға башы. Йылға тамағы. Йылға яры.*

**йылғыр** *с.* Хәрәкәткә бик етеҙ; йылдам. *Йылғыр малай. Йылғыр хәрәкәт Йылғыр булыу. Йылғыр эшләү.*

**йылҡы** *и.* Кешене, йөктө һ. б. йөрөтөү, ташыу өсөн файҙаланыла торған йомро тояҡлы эре йорт малы; ат. *Йылҡы көтөүе. Йылҡы көтөүсеһе. Йылҡы өйөрө. Йылҡы ите.*

**йылҡысылыҡ (йылҡысылығы)** *и.* Йылҡы аҫрау, йылҡы үрсетеү эше *Йылҡысылыҡ хужалығы. Йылҡысылыҡты үҫтереү.*

**йыллыҡ** *с.* **1.** Күпмелер йыл дауам иткән, күпмелер йыл менән иҫәпләнгән *Йөҙ йыллыҡ тарих. Утыҙ йыллыҡ ғүмер.* **2.** Күпмелер йылға тәғәйенләнгән билдәләнгән. *Йыллыҡ план. Ун йыллыҡ мәктәп.* **3.** *и. мәғ.* Берәй ваҡиғаға нисәлер йыл тулыуын билдәләгән көн. *Еңеүҙең 50 йыллығы. «Тамыр» студияһының 5 йыллығын билдәләү.*

**йылмайыу (йылмай-)** *ҡ.* Йөҙгә көлөү билдәһе сығарыу; көлөмһөрәү. *Йылмайып ҡарау. Йылмайып ҡаршы алыу. Мыҫҡыллы йылмайыу.*

**йылы**[1] *с.* **1.** Ғәҙәттәгенән юғары температуралы; эҫегә яҡын; *киреһе* һыуыҡ. *Йылы мейес. Йылы көн. Йылы һыу. Төн йылы.* **2.** Тәнде һыуыҡтан яҡшы һаҡлай торған. *Йылы кейем. Йылы тун. Йылы шәл. Йылы юрған.* **3.** *күсм.* Күңелгә хуш килерлек; яғымлы. *Йылы ҡараш. Йылы мөнәсәбәт. Йылы һүҙ. Йылы ҡаршылау. Йылы итеп йылмайыу.*

**йылы**[2] *и.* **1.** Эҫе менән һыуыҡ араһындағы хәл; ниҙендер юғары температураһы. *Ҡояш йылыһы. Ҡул йылыһы. Усаҡ йылыһы. Яҙ йылыһы. Йылыла йоҡлау.* **2.** *күсм.* Яғымлы, яҡын тойғоноң тәьҫире. *Йөрәк йылыһы. Күңелгә йылы инеү. Йылыға йылан эйәләй.* (Әйтем.) *Йылы һөйәк һындырмай.* (Әйтем.)

**йылыныу (йылын-)** *ҡ.* **1.** Йылы булып китеү, өшөүҙән туҡтау. *Өйгә инеп йылыныу. Йылынып йоҡлап китеү.* **2.** Һыуыҡтан йылыға әйләнеү. *Аш йылынды. Өй йылынған. Һауа йылынған.*

**йылытыу (йылыт-)** *ҡ.* **1.** Үҙ йылыһын биреү. *Ерҙе ҡояш йылыта. Мейес өйҙө йылыта. Усаҡ йылыта.* **2.** Өшөгәнен бөтөрөү; йылындырыу. *Аяҡты йылытыу. Ҡулдарҙы йылытыу.* **3.** Ут, эҫелек менән һыуыҡтан йылыға әйләндереү; йылы итеү. *Аш йылытыу. Һурпа йылытыу.*

**йыр** *и.* Көй менән башҡарыла торған шиғри әҫәр. *Моңло йыр. Шаян йыр. Халыҡ йыры. Йыр йырлау. Йыр сығарыу.*

**йырғанаҡ (йырғанағы)** *и.* Һыу йырған тәрән соҡор. *Йырғанаҡтар тәрән һыу менән тулды. Йырғанаҡ йырыу.*

**йырлау (йырла-)** *ҡ.* Тауыш ярылары ярҙамында көй сығарыу, йыр башҡарыу. *Йырҙар йырлау. Күмәкләп йырлау. Ҡушылып йырлау. Моңло йырлау. Йырлап ебәреү.*

**йырсы** *и.* Йыр оҫтаһы. *Танылған йырсы. Йырсыны тыңлау.*

**йыртҡыс** *и.* **1.** Башҡа хайуандарҙы тотоп, ашап йәшәгән хайуан. *Уҫал йыртҡыс. Йыртҡысты эҙәрләү. Йыртҡыс олоуы. Йыртҡыс йәнлек. Йыртҡыс ҡош.* **2.** *күсм.* Ҡаты бәғерле, мәрхәмәтһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**йыртыҡ** *с.* **1.** Элләгеп, тартылып һ. б. сәбәп менән айырылып сыҡҡан нәмә. *Йыртыҡ итек. Йыртыҡ кейем.* **2.** Йыртылған урын. *Йыртыҡты тегеп ҡуйыу. Йыртыҡ тишектән көлгән.* (Әйтем.)

**йыртылыу (йыртыл-)** *ҡ.* Элләгеп, тартылып һ. б. сәбәп менән айырылыу (йоҡа, йомшаҡ нәмәгә ҡарата). *Йыртылып бөтөү. Йыртылып китеү. Элләгеп йыртылыу.*

**йыртыу (йырт-)** *ҡ.* Эләктереп, тартып айырыу (ҡағыҙ, туҡыма кеүек нәмәләрҙе). *Еңде йыртыу. Тартып йыртыу. Йыртып ташлау.*

**йырын** *и.* Һыу йырған үҙән. *Тәрән йырын. Йырын башы.*

**йырыу (йыр-)** *ҡ.* **1.** Ниҙелер өңөп, ашап юл ярыу. *Йылға тауҙарҙы йырып аға.* **2.** Быуылып ятҡан нәмәгә юл ярыу. *Быуаны йырыу. Балалар йылға йыра.*

**йыуа** *и.* Һуғанбаш үҫемлектәр төркөмөнә ингән, кеше ашай торған әсе ҡыяҡ япраҡлы үләндәрҙең дөйөм исеме. ♦ **Ҡул йыуаһы** һыулы, һаҙлыҡлы ерҙә

үҫә торған йомшаҡ сөсө йыуа. **Оҫҡон йыуаһы** тау битләүҙәрендә үҫә торған эр
һабаҡлы йыуа.

**йыуан** *с.* **1.** Әйләнәһе ҙур, арҡырыға киң; *киреһе* нәҙек. *Йыуан ағас. Йыуа*
*бүрәнә. Йыуан түмәр.* **2.** Кәүҙәгә ҡалын; һимеҙ, таҙа. *Йыуан кеше. Йыуан булыу*

**йыуанайыу (йыуанай-)** *ҡ.* Йыуанға әйләнеү. *Ағас йыуанайған.*

**йыуаш** *с.* Йомшаҡ тәбиғәтле; *киреһе* уҫал. *Йыуаш кеше. Йыуаш малай*
*Йыуаш күренеү.*

**йыуашайыу (йыуашай-)** *ҡ.* Йомшаҡ тәбиғәтлегә әйләнеү, йыуашҡа
әйләнеү. *Малайҙар йыуашайып ҡалған.*

**йыуғыс** *и.* Ниҙелер ышҡып йыуыу өсөн тотолған махсус нәмә. *Йүк*
*йыуғыс. Ҡыл йыуғыс. Сепрәк йыуғыс. Иҙән йыуғысы.*

**йыуыныу (йыуын-)** *ҡ.* Бит, ҡулды йәки тотош тәнде йыуыу. *Йыуынып алыу*
*Мунсала йыуыныу.*

**йыуыу (йыу-)** *ҡ.* **1.** Һыу йәки бүтән шыйыҡлыҡ менән бысраҡтан таҙартыу
*Битте йыуыу. Кер йыуыу. Ҡулды йыуыу. Һабынлап йыуыу. Йыуған күлдәк*
**2.** *күсм.* Кешенең күңелен арбап иретеү, юхалау. *Тел менән йыуыу. Кешене йыуа*
*белеү.*

**йыһан** *и.* Ҡояш, йондоҙҙарҙы эсенә алған бөтә донъя, ғаләм. *Йыһан*
*арауығы. Йыһанды өйрәнеү.*

**йыш** *с.* **1.** Бер-береһе яҡын урынлашҡан бер төрлө нәмәләрҙән йәки
өлөштәрҙән торған. *Йыш рәшәткә. Йыш тараҡ. Йыш сәселгән иген.* **2.** Ҡыҫҡа
ваҡыт һайын ҡабатланып, булып торған. *Йыш һулыш. Йыш осрашыу ойошто-*
*роу. Йыш барыу. Йыш күреү. Йыш ҡайтыу.*

**йышайыу (йышай-)** *ҡ.* **1.** Бер төрлө нәмәләрҙең йәки бер нәмә өлөштәренең
урынлашыу аралары кәмеү; тығыҙланыу. *Ағастар йышайҙы. Өйҙәр йышая бара*
**2.** Ҡабатланып, булып торған күренештәрҙең ваҡыт араһы кәмеү; тиҙ-тиҙ
ҡабатланыу. *Йөрәк тибеше йышайҙы.*

**йышҡы** *и.* Ағас әйберҙәрҙең өҫтөн юнып шымарта торған ҡорал.

**йышыу (йыш-)** *ҡ.* **1.** Ағас нәмәләрҙең өҫтөн юнып шымартыу. *Йышҡы*
*менән йышыу. Таҡта йышыу.* **2.** Ҡом, көл кеүек онтаҡ нәмә менән ышҡып
йылтыратыу; ағартыу. *Самауыр йышыу. Йышып ағартыу.*

**йәбешеү (йәбеш-)** *ҡ.* **1.** Ҡуша һыланышып, тығыҙ булып тоташыу. *Ныҡ*
*йәбешеү. Йәбешеп ҡатыу.* **2.** Ҡаҙалып, сәнселеп эләгеү. *Дегәнәк йәбеште. Тал-*
*пан йәбешкән.* **3.** Ыҫҡынмаҫлыҡ итеп эләктереү; тотоноу. *Йәбешеп ултырыу*
*Ҡулға йәбешеү. Салғыйға йәбешеү.* ♦ **Теш-тырнаҡ менән йәбешеү** бик ныҡ күңел
һалып тотоноу.

**йәбештереү (йәбештер-)** *к.* Ҡуша йәки өҫтөнә һалып, беркетеү. *Балсыҡ йәбештереү. Белдереү йәбештереү. Иретеп йәбештереү. Тәҙрә йәбештереү.*

**йәғни** *аныҡ. терк.* Әйтелгән һүҙҙе сисеп, асыҡлап биргән һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла. *Имзаңды, йәғни ҡултамғаңды, ҡуй.*

**йәдкәр** *и.* Кемдеңдер йәки нимәнеңдер хәтирәһен һаҡлаған нәмә. *Йәдкәр итеп ҡалдырыу. Йәдкәр дәфтәре.*

**йәй** *и.* Йылдың яҙ менән көҙ араһындағы иң йылы миҙгеле. *Йәй айҙары. Йәй уртаһы. Йәй көнө. Йәй ял итеү.*

**йәйге** *с.* **1.** Йәй көнөндәге, йәйгә хас. *Йәйге кис. Йәйге ҡояш. Йәйге ямғыр.* **2.** Йәй өсөн тәғәйенләнгән. *Йәйге кейем. Йәйге күлдәк.*

**йәйғор** *и.* Һауалағы ямғыр бөртөктәрендә ҡояш нуры сағылғандан яһалған, төрлө төҫтәге буй-буй дуға һыҙат. *Йәйғор ҡалҡыу. Йәйғор төҫтәре. Йәйғор сағылышы.*

**йәйен** *и.* Киң ялпаҡ ауыҙлы, оҙон мыйыҡлы, шыма тәнле, тәңкәһеҙ, сөсө һыуҙа йәшәгән эре йыртҡыс балыҡ. *Йәйен ҡармағы. Йәйен тотоу.*

**йәйеү (йәй-)** *к.* **1.** Ян-яҡҡа иркен итеп һуҙыу. *Ҡолас йәйеү. Ҡулды йәйеү. Ҡош ҡанатын йәйгән.* **2.** Киң нәмәне тағатыу; яҙыу, түшәү. *Ашъяулыҡ йәйеү. Балаҫты йәйеү. Түшәк йәйеү. Һыҙмаларҙы йәйеп һалыу.* **3.** Киптереү өсөн таратып һалыу. *Бесәнде йәйеү. Иген өйөмөн йәйеү. Таратып йәйеү.* **4.** Тәгәрләтеп йоҡартыу. *Туҡмас йәйеү. Һалма йәйеү.*

**йәйләү (йәйлә-)** *к.* Ҡайҙалыр йәй тороу. *Ауылда йәйләү. Тирмәләр ҡороп йәйләү.*

**йәйә** *и.* **1.** Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тартҡан ҡорал, ян. *Йәйә тартыу. Йәйәнән атыу.* **2.** Ярым түңәрәк йәки ярым квадрат рәүешендәге тыныш билдәһе. *Йәйә асыу. Йәйә эсенә алыу.*

**йәйәү** *р.* Үҙ аяғы менән атлап. *Йәйәү барыу. Йәйәү йөрөү. Йәйәү китеү.*

**йәйәүле** *с.* Йәйәү барған, йәйәү йөрөгән. *Йәйәүле кеше.*

**йәйәүләү (йәйәүлә-)** *к.* Йәйәү атлау. *Йәйәүләп килеү. Йәйәүләп ҡайтыу. Биш саҡрым йәйәүләү.*

**йәки** *бүл. терк.* Мәғәнә яғынан береһен-береһе алмаштырған ике һөйләм йәки һөйләм киҫәген алмаштырып теркәү өсөн ҡулланыла. *Бөгөн йәки иртәгә. Мин йәки һин.*

**йәкшәмбе** *и.* Аҙнаның һуңғы, етенсе көнө. *Йәкшәмбегә ҡайтыу. Йәкшәмбе килеп етте.*

**йәлләү (йәллә-)** *ҡ.* **1.** Аяныс хәлдә күреп әсенеү, ҡыҙғаныу. *Балаларҙы йәлләү. Йәлләп илау.* **2.** Бирергә, исраф итергә йәл күреү, ҡыҙғаныу. *Аҡсаны йәлләү.*

**йәм** *и.* **1.** Төҫтә, күренештә матурлаған сифат; *курк. Йәм биреү. Йәм өҫтәү. Йәмен күреү.* **2.** Күңелгә ҡыуаныс, рәхәтлек биргән сифат. *Донъя йәме. Йәм табыу. Күп аштың тәме юҡ, күп һүҙҙең йәме юҡ.* (Мәҡәл.)

**йәмғиәт** *и.* **1.** Материаль тормоштоң дөйөм булған конкрет-тарихи шарттары ерлегендә күмәге бер бөтөнгә берләшкән халыҡ. *Йәмғиәт ҡоролошо. Йәмғиәт тормошо. Кешелек йәмғиәте.* **2.** Уртаҡ эш, уртаҡ маҡсат йәки башҡа нәмә нигеҙендә берләшкән кешеләр төркөмө. *Географик йәмғиәт. Ирекле йәмғиәт. Спорт йәмғиәте.*

**йәмле** *с.* Ҡарар күҙгә, күңелгә йыуаныс бирерлек төҫө, күренеше булған, күркәм. *Йәмле баҡса. Йәмле йәй. Йәмле тормош.*

**йәмләндереү (йәмләндер-)** *ҡ.* Йәмлегә, күркәмгә әйләндереү, йәмле итеү, йәмләү. *Баҡсаны йәмләндереү. Тормошто йәмләндереү.*

**йәмләнеү (йәмлән-)** *ҡ.* Йәмлегә, күркәмгә әйләнеү, йәмле булыу. *Донъя йәмләнде. Тирә-яҡ йәмләнә.*

**йәмһеҙ** *с.* Ҡарар күҙгә, күңелгә йыуаныс бирерлек төҫө, күрке, сифаты булмаған. *Йәмһеҙ ҡараш. Йәмһеҙ булыу. Йәмһеҙ күренеш. Йәмһеҙ итеү.*

**йәмшек** *с.* Рәүеше боҙолған, йәлпәшкән. *Йәмшек танау. Мороно йәмшек ҡомған. Түбәһе йәмшек эшләпә.*

**йәмшәйеү (йәмшәй-)** *ҡ.* Йәмшеккә әйләнеү, йәмшек булыу. *Йәмшәйеп бөтөү. Самауыр йәмшәйгән.*

**йәмәғәт** *и.* **1.** Үҙ-ара ниндәйҙер мөнәсәбәте, бәйләнеше булған халыҡ төркөмө. *Йәмәғәт вәкиле. Йәмәғәт милке. Йәмәғәт ойошмаһы. Йәмәғәт эше.* **2.** Иргә сыҡҡан ҡатын. *Йәмәғәт алыу. Йәмәғәтле кеше.*

**йән** *и.* **1.** Кешенең эске донъяһы, уй-фекере, кисереше, тойғоһо; күңел. *Йән рәхәтлеге. Йән теләгән нәмә.* **2.** Кеше һәм башҡа тереклектәрҙең йәшәүе, ғүмере. *Йән аямау. Йәнде йәлләү. Йән ҡәҙерле.* **3.** Кем дә булһа берәү. *Уралҡайҙы һөймәҫ йән булмаҫ.* (Халыҡ йырынан.) **4.** Кешенең тәбиғәте, холҡо. *Изге йәнле кеше.* **5.** *с. күсм. мәғ.* Иң яҡын. *Йән дуҫ.* ♦ **Йән атыу** бик нык теләү, елкенеү. **Йән биреү** 1) донъяны яратыу; 2) үлеү. **Йәнгә тейеү** теңкәгә тейеү, йонсотоу. **Йәнде алыу** 1) үлтереү; 2) нык йонсотоу, яралау. **Йәндән артыҡ** бик ҡәҙерле. **Йән киҫәге** ҡәҙерле, һөйөклө. **Йән көйөү** асыу килеү, уртәнеү. **Йән сығыу** үлеү. **Йән эйәһе** кеше һәм бөтә тереклек.

**йәнлек (йәнлеге)** *и.* Бөтә булған һөтимәр йән эйәһе. *Йыртҡыс йәнлек. Ҡыр йәнлектәре. Йәнлек тиреһе.*

**йәнләнеү (йәнлән-)** *ҡ.* **1.** Йәнлегә әйләнеү, йәнле булыу. *Йәнләнеү һиҙелеү. Тәбиғәт йәнләнде.* **2.** Күңелле төҫ алыу, күңелләнеү. *Балалар ҡыуанып, йәнләнеп китте.*

**йәнһүрәт** *и.* Һүрәттәр йәки ҡурсаҡтар ярҙамында төшөрөлгән фильм; мультфильм. *Йәнһүрәт ҡарау. Йәнһүрәт төшөрөү.*

**йәншишмә** *и.* Әкиәттәге тереклек шишмәһе. *Йәншишмә һыуы. Йәншишмәнән көс алыу.*

**йәнә** *р.* **1.** Яңынан, ҡабаттан. *Йәнә килеү. Йәнә осрашыу.* **2.** Тағы ла, өҫтәмә рәүештә. *Йәнә бер көн ҡалды.* **3.** *йыйн. терк. мәғ.* Һәм, тағы. *Мин йәнә ике ҡыҙ.*

**йәнәш(ә)** *р.* Берәй кеше йәки нәмә менән бер рәттән. *Йәнәш атлау. Йәнәш ултырыу.*

**йәп (йәбе)** *и.* Осо тармаҡланып торған нәмәнең бер айырсаһы; сата. *Һәнәк йәбе. Ике йәпле бәке.*

**йәрәхәт** *и.* Тәндең йәки эске бер ағзаның яраһы. *Ауыр йәрәхәт. Йәрәхәтте бәйләү. Йәрәхәтте дауалау.*

**йәрәхәтләү (йәрәхәтлә-)** *ҡ.* Тәнде ни менәндер яралау, йәрәхәтле итеү. *Аяҡты йәрәхәтләү. Ҡулды йәрәхәтләү.*

**йәтим** *с.* **1.** Ата-инәһе йәки икеһененең береһе булмаған. *Йәтим бала. Йәтим ҡалыу.* **2.** Ата-инәһе йәки икеһененең береһе булмаған бала. *Йәтим йорто. Йәтим яҙмышы.* ♦ **Үкһеҙ йәтим** бөтөнләй ата-әсәһеҙ ҡалған.

**йәтсә** *и.* Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған бәләкәй генә нәҙек оҙон йыртҡыс йәнлек. *Аҡ йәтсә. Йәтсә өңө.*

**йәтәс** *и.* Ҡоштоң саталы түш һөйәге. *Тауыҡ йәтәсе.* ♦ **Йәтәс айырышыу** шул һөйәкте айырышып уйнай торған отош уйыны.

**йәһәт** *р.* Тиҙ хәрәкәт менән, тиҙ генә; етеҙ, тиҙ. *Йәһәт кенә килеп етеү. Йәһәт ҡуҙғалыу. Йәһәт эшләү.*

**йәш**[1] *с.* **1.** Ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере әле әҙ; *киреһе* ҡарт. *Йәш быуын. Йәш кеше. Йәш саҡ. Йәш булыу. Йәш күренеү.* **2.** Күптән түгел барлыҡҡа килгән; күптән түгел йәшәй, үҫә башлаған. *Йәш ағас. Йәш белгес.* **3.** Кибеп ҡатмаған, ҡоромаған, сей. *Йәш утын. Йәш үлән.*

**йәш**[2] *и.* Йәшәгән ғүмер оҙонлоғон билдәләгән йыл иҫәбе. *Оло йәш. Урта йәш. Мәктәп йәшендәге бала. Йәште иҫәпләү.*

**йәш**[3] *и.*, **күҙ йәше**. Хисләнгәндә күҙ биҙҙәренән һығылып сыҡҡан әскелтем шыйыҡлыҡ. *Йәште һөртөү. Күҙгә йәш килеү.*

**йәшел** *с.* **1.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе – һары менән зәңгәр араһындағы төҫ; үлән, йәш япраҡ төҫө. *Асыҡ йәшел. Ҡара йәшел. Йәшел кәләм. Йәшел шыршы.* **2.** Кибеп һарғаймаған; *йәш. Йәшел бесән. Йәшел сиҙәм. Йәшел япраҡ.*

**йәшеллек (йәшеллеге)** *и.* **1.** Йәшел төҫ. *Тәбиғәт йәшеллеккә сумды.* **2.** Йәшел үҫемлек. *Йәшеллеккә күмелгән урам.*

**йәшелсә** *и.* Ашамлыҡ өсөн баҡсала үҫтерелгән төрлө үлән үҫемлек һәм уның емештәре (ҡыяр, кишер, сөгөлдөр, һуған, помидор һ. б.). *Тоҙланған йәшелсә. Йәшелсә ашы. Йәшелсә баҡсаһы. Йәшелсә ултыртыу.*

**йәшен** *и.* Атмосфералағы электрҙың һауала зарядһыҙланыуы ваҡытында ялтылдап киткән яҡты һыҙат. *Йәшен атыу. Йәшен тубы. Йәшен уты. Йәшенле ямғыр. Йәшен йәшнәү.*

**йәшенеү (йәшен-)** *ҡ.* Ҡасып ышыҡланыу, ышыҡланып боҫоу. *Бала йәшенде. Йәшенеп тороу. Йәшенеп ятыу.*

**йәшенмәк (йәшенмәге)** *и.* Балалар уйыны (берәү күҙен баҫып, гөргөлдәй, бүтәндәре йәшенә; табылғандарҙың ҡайһыныһы алдан килеп туҡылдатып өлгөрмәй, икенсе юлы шул гөргөлдәй). *Йәшенмәк уйнау.*

**йәшерен** *с.* **1.** Күптәргә билдәле булмаған, йәшерелә торған. *Йәшерен эш. Йәшерен хат. Йәшерен итеү.* **2.** Закон тарафынан рөхсәт ителмәй торған, йәшереп кенә эш итә торған. *Йәшерен йыйылыш. Йәшерен йәмғиәт. Йәшерен түңәрәк.*

**йәшереү (йәшер-)** *ҡ.* **1.** Башҡалар күрмәҫлек итеп йыйыу, сит күҙҙән ҡасырыу. *Йәшереп ҡуйыу. Йәшереп тороу. Ҡулды артҡа йәшереү.* **2.** Кешегә белдермәй йөрөү. *Ҡайғыны йәшереү. Серҙе йәшереү.*

**йәшкелт** *с.* Йәшелгә яҡын, йәшел төҫ ҡатыш. *Йәшкелт күҙ. Йәшкелт итеү.*

**йәшлек (йәшлеге)** *и.* Үҫмер саҡтан алып үҫеп еткәнгә тиклемге саҡ; йәш саҡ; *киреһе* ҡартлыҡ. *Йәшлек дәрте. Йәшлек йылдары. Йәшлек үтеү.*

**йәшник (йәшниге)** *и.* Берәй нәмә һалыу, һаҡлау өсөн таҡта, ҡатырға кеүек нәмәнән дүрткелләп яһаған төрлө ҙурлыҡтағы һауыт. *Почта йәшниге. Бер йәшник алма.*

**йәшнәү (йәшнә-)** *ҡ.* **1.** Сатҡы уйнатыу, яҡты һыҙат булып ялтылдау (йәшенгә ҡарата). *Йәшен йәшнәне.* **2.** *күсм.* Дәрт, кеүәт сәсеү. *Йәшнәп үтте йәш ғүмер.*

**йәштәш** *и.* Кем менән булһа ла бер йәштәге, бер йылғы кеше. *Минең йәштәшем. Йәштәштәр осрашыуы.*

**йәшәү (йәшә-)** *ҡ.* Тереклек итеү, ғүмер үткәреү. *Ауылда йәшәү. Бергә йәшәү. Рәхәт йәшәү. Хәлле йәшәү.* ♦ **Йөҙ йәшә** кешене ныҡ маҡтағанда, ҡотлағанда әйтелә. **Тиң йәшәгеҙ** өйләнешкән кешеләргә теләк һүҙе.

# К

**кабинет** *и.* **1.** Өйҙә йәки эш урынындағы махсус эш бүлмәһе. *Директор кабинеты.* **2.** Айырым бер эш өсөн йыһазландырылған бүлмә. *Биология кабинеты. Химия кабинеты.* **3.** Хөкүмәттәге министрҙар составы. *Министрҙар кабинеты.*

**кактус** *и.* Итләс һабаҡлы, сәнскәкле көньяҡ үҫемлеге. *Кактус үҫтереү. Кактус сәскәһе.*

**календарь (календарҙар)** *и.* Йылдың һәр көнөн тәртип менән теҙеп, айға, аҙнаға бүлеп төҙөгән белешмә. *Башҡортса календарь. Йыртмалы календарь. Өҫтәл календары.*

**калуш** *и.* Һыу үтмәһен өсөн аяҡ кейеме өҫтөнән кейелә торған йәки тиҙ генә эләктереп кейергә уңайлы булған резина аяҡ кейеме. *Бойма калушы. Ҡуныслы калуш. Һай калуш.*

**камил** *с.* Сифаты тейешле дәрәжәлә булған, бөтә яҡтан да килгән. *Камил булыу. Камил кеше.*

**канал** *и.* Айырым һыу ятҡылыҡтарын тоташтырыу йәки ер һуғарыу өсөн эшләнгән яһалма һыу юлы. *Волга – Дон каналы. Канал ҡаҙыу.*

**каникул** *и.* Уҡыусыларҙың уҡыуҙан туҡтап ял иткән ваҡыты. *Йәйге каникул. Ҡышҡы каникул. Яҙғы каникул. Каникул көндәре. Каникулға туҡтау.*

**капитан** *и.* **1.** Өлкән лейтенанттан юғары офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. **2.** Карап командиры. *Теплоход капитаны. Капитан ярҙамсыһы.* **3.** Спорт командаһының башлығы. *Хоккей командаһы капитаны.*

**капрон** *и.* **1.** Синтетик ептең бер төрө. *Нәҙек капрон. Капрон бау.* **2.** Шул эптән эшләнгән туҡыма һәм бәйләнгән ойоҡ. *Аҡ капрон. Капрон таҫма. Капрон ойоҡ кейеү.*

**карап (карабы)** *и.* **1.** Диңгеҙҙә йөҙә торған ҙур судно. *Елкәнле карап. Хәрби карап.* **2.** Ҙур осҡос аппарат. *Йыһан карабы.*

**каратэ** *и.* Үҙ-үҙенде ҡоралһыҙ һаҡлау көрәшенең япондар системаһы *Каратэ менән шөғөлләнеү.*

**карауат** *и.* Бер йәки ике кеше ятырлыҡ ял урыны. *Ағас карауат. Тимер карауат. Йыйылмалы карауат. Карауатта йоҡлау.*

**карта** *и.* **1.** Ер йөҙөн төрлө билдәләр менән сағылдырған һыҙма. *Географи карта. Физик карта. Карта төҙөү.* **2.** Төрлө мәғлүмәт яҙыу өсөн тәғәйен ләнгән графалы ҡағыҙ. *Курорт картаһы.*

**картуф** *и.* **1.** Эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, тамырында крах малға бай бүлбеләре булған баҡса үҫемлеге; бәрәңге. *Картуф сәскәһе. Картуф күмеү. Картуф ҡаҙыу. Картуф утау.* **2.** Ошо йәшелсәнең ашауға яраҡлы бүлбеһе. *Ҡыҙыл картуф. Эре картуф. Ярмалы картуф. Картуф бешереү Картуф ҡурыу.*

**каруан** *и.* Сүл-даланан йөк артып, аллы-артлы теҙелеп барған хайуандар һәм кешеләр төркөмө. *Дөйә каруаны. Каруан башлығы. Каруан менән юлға сығыу.*

**касса** *и.* **1.** Аҡса һәм ҡиммәтле нәмәләр ятҡан махсус тимер ҡумта. *Кассаға бикләү. Кассаны асыу.* **2.** Предприятие, учреждениеның аҡса алыу-биреү билет һатыу кеүек эштәрҙе башҡарған бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан бүлмә. *Театр кассаһы. Тимер юл кассаһы.* **3.** Төрлө кредит ойошмаларының исеме составында ҡулланыла. *Страховка кассаһы. Һаҡлыҡ кассаһы.*

**кассир** *и.* Кассала эшләүсе, аҡса һәм ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙы алыу-биреү билет һатыу эшен башҡарыусы хеҙмәткәр. *Кассир булып эшләү.*

**каток (катогы)** *и.* **1.** Конькиҙа йөрөү өсөн махсус эшләнгән боҙ. *Катокта шыуыу. Каток эшләү.* **2.** Ерҙе, юлды тигеҙләй торған ауыр цилиндр тәгәрмәсле машина.

**кафедра** *и.* **1.** Телмәр тотоу өсөн тәғәйенләнгән ҡалҡыу урын. *Кафедраға сығыу. Кафедранан һөйләү.* **2.** Юғары уҡыу йортондағы айырым бер фән йүнәлеше һәм шул фән тирәһендә тупланған уҡытыусылар төркөмө *Башҡорт теле кафедраһы. Кафедра ултырышы.*

**квадрат** *и.* **1.** Тигеҙ яҡлы дүртмөйөш; дүрткел. *Квадрат майҙаны.* **2.** Һан дың үҙенә үҙен арттырған ҡабатландығы. *Квадратҡа күтәреү. Квадрат та мыр.* ♦ **Квадрат метр** майҙан үлсәү берәмеге (иңе һәм буйы берәр метр булған майҙан). **Квадрат йәйә** [ ] формаһындағы йәйә.

**кейҙереү (кейҙер-)** *ҡ.* **1.** Өҫкө кейем кейергә ярҙам итеү. *Йылы күлдәк кейҙереү. Балаға пальто кейҙереү.* **2.** Берәй нәмәне өҫтән ҡаплау, тышлау *Мендәргә тыш кейҙереү.* **3.** Үткәреп, эләктереп өҫтән ҡуйыу. *Балдаҡ кейҙереү Күҙлек кейҙереү. Атҡа йүгән кейҙереү.*

**кейеҙ** *и.* Һарыҡ йөнөнән йәйеп баҫылған ҡаралды әйбере. *Кейеҙ баҫыу. Кейеҙ менән көпләнгән ишек. Кейеҙ түшәү.*

**кейем** *и.* Өҫ-башҡа кейеп йөрөй торған нәмә. *Йәйге кейем. Ҡышҡы кейем. Ҡалын кейем. Яңы кейем. Хәрби кейем. Аяҡ кейеме. Баш кейеме.*

**кейем-һалым** *и. йыйн.* Һәр төрлө өҫ кейеме. *Ҡышҡа кейем-һалым әҙерләү.*

**кейендереү (кейендер-)** *ҡ.* **1.** Кейем кейҙереү, кейенергә ярҙам итеү. *Баланы кейендереү.* **2.** Кейем менән тәьмин итеү. *Яҡшы итеп кейендереү. Баштан-аяҡ кейендереү. Матур кейендереү.*

**кейенеү (кейен-)** *ҡ.* **1.** Үҙ өҫтөнә кейеү. *Боронғоса кейенеү. Йылы кейенеү. Ыҫпай кейенеү.* **2.** Өҫ-башты бөтәйтеү, яҡшы кейем кейеү. *Кейенергә яратыу. Кейенеп алыу. Кейенеп йөрөү.*

**кейеү (кей-)** *ҡ.* **1.** Тәндә кейем менән ҡаплау. *Аяҡҡа кейеү. Башҡа кейеү. Ҡулға бейәләй кейеү.* **2.** Үткәреп, эләктереп, үҙенә беркетеп ҡуйыу. *Йөҙөк кейеү. Күҙлек кейеү. Саңғы кейеү.*

**кейәү** *и.* **1.** Өйләнеп йөрөгән егет. *Кейәү булыу. Кейәү егет.* **2.** Ир (яңы өйләнешкән йылдарҙа – ҡатынына ҡарата). *Кейәүгә биреү. Кейәүгә сығыу. Кейәү итеү.* **3.** Ҡыҙ йәки һеңле тейеш ҡатын-ҡыҙҙың ире. *Кейәү тейеш кеше. Кейәүҙе хөрмәт итеү.* ♦ **Кейәү егете (нөгәре)** кейәүҙең туй ваҡытында янында йөрөгән дуҫ егете.

**келә** *и.* Ниҙелер бикләй торған элгес, бик. *Ишек келәһе. Келәне ысҡындырыу. Келә һалыу.*

**келәм** *и.* Өбөрөләп, биҙәкләп, йөндән һуғылған ҡаралды әйбере. *Келәм һуғыу. Келәм йәйеү. Келәм биҙәге.*

**келәт** *и.* Иген һала, аҙыҡ-түлек йәки башҡа нәмә тота торған йорт ҡаралтыһы. *Аҡ келәт. Таш келәт. Келәт бурау.*

**кендек[1] (кендеге)** *и.* **1.** Ҡарындағы баланы, яралғыны инә ҡарынына тоташтырып, уны туҡландырыу хеҙмәтен үтәгән нәҙек кенә эсәк. *Кендек бәйләү. Кендек ҡырҡыу.* ♦ **Кендек инәһе (әбейе)** баланы ҡабул итеп, кендеген ҡырҡҡан ҡатын-ҡыҙ. **2.** Ҡорһаҡ уртаһында соҡорайып торған урын. *Кендек соҡоро.*

**кендек[2] (кендеге)** *и.* Арбаны алтәкмәккә тоташтырған үҙәк. *Ағас кендек. Тимер кендек. Арба кендеге.*

**кер[1]** *и.* Тәндәге, кейемдәге бысраҡ. *Тән кере. Кергә ҡатҡан күлдәк.* ♦ **Кер күтәреү** керләнгәне һиҙелмәй торған булыу. **Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләү** юҡ ғәйепте табырға тырышыу.

**кер**[2] *и.* Йыуылған йәки йыуырға ҡуйылған кейем, әйбер. *Йыуылмаған кер. Кипкән кер. Кер йыуыу. Кер үтекләү.*

**кереш** *и.* Яндың сирткес бауы. *Ебәк кереш. Кереш тартыу.*

**керләнеү (керлән-)** *ҡ.* Кер тейеп ҡарайыу, керлегә әйләнеү, бысрау. *Керләнгән яулыҡ. Тиҙ керләнеү.*

**керләү (керлә-)** *ҡ.* Керле итеү, бысратыу. *Күлдәкте керләү.*

**керпек (керпеге)** *и.* Күҙҙе кәртәләп торған шырт йөн төктәре. *Оҙон керпек. Ҡара керпектәр. Керпек буяу.* ♦ **Керпек тә ҡаҡмау** бөтөнләй йоҡламау, серем дә итмәү.

**керәндил** *и.* Тәмләткестәр ҡушҡан сөсө ҡамырҙан дүңгәләк итеп бешерелгән икмәк. *Ваҡ керәндил. Мәкле керәндил. Бер бәйләм керәндил.*

**кесаҙна** *и.* Аҙнаның дүртенсе көнө. *Кесаҙна көнө. Кесаҙна етеү.*

**кесе** *с.* **1.** Кемдәндер йәше бәләкәй; *кireһе* оло. *Ике йәшкә кесе булыу. Кесе йәштәге балалар.* **2.** Вазифаһы, дәрәжәһе яғынан бәләкәй. *Кесе лейтенант.*

**кеселек (кеселеге)** *и.* Түбәнселекле, ихтирамлы мөғәмәлә. *Кеселек менән өндәшеү. Кеселек күрһәтеү.*

**кесерткән** *и.* Киртләс япраҡлы, оҙон ҡаты һабаҡлы саға торған үҫемлек. *Ата кесерткән. Инә кесерткән. Кесерткән япрағы. Кесерткәндән сағылыу. Кесерткән ашы.*

**кеҫә** *и.* Әйбер һалыу өсөн кейемгә ҡуша  тегелгән моҡсай. *Эске кеҫә. Ян кеҫә. Түш кеҫәһе. Ҡулды кеҫәгә тығыу. Кеҫәле салбар.* ♦ **Кеҫәһе ҡалын (ҡалын кеҫә)** байлығы күп, аҡсалы.

**кеҫәл** *и.* Крахмалға шәкәр, емеш һуты ҡушып ҡайнатылған эсемлек. *Алма кеҫәле. Кеҫәл ҡайнатыу. Кеҫәл эсеү.*

**кеҫәртке** *и.* Оҙонса кәүҙәһе ҡаты тәңкә ҡау менән ҡапланған оҙон ҡойроҡло, йылғыр хәрәкәтле, һөйрәлеүсе ваҡ йәнлек. *Йәшел кеҫәртке. Һары кеҫәртке.*

**кетәк (кетәге)** *и.* **1.** Тауыҡтар төнәй торған урын. *Кетәккә ҡунаҡлау. Кетәк яһап ҡуйыу.* **2.** Тауыҡтар торған бәләкәй өй. *Тауыҡтарҙы кетәккә индереү.*

**кеүек** *бәйл.* **1.** Кемде йәки нимәнелер икенсе менән сағыштырғанда, уға оҡшатҡанда ҡулланыла; һымаҡ, шикелле. *Көҙгө кеүек ялтырау. Ынйы кеүек тештәр.* **2.** Икеләнеп әйткәндә ҡулланыла. *Бәләкәй кеүек күренә. Килмәҫ кеүек.*

**кеүәҫ** *и.* Арыш оно йәки арыш икмәге иҙелгән сүпрә, шәкәр һалып әсетелгән эсемлек. *Кеүәҫ әсетеү.*

**кеше** *и.* **1.** Фекерләй, һөйләшә, эш ҡоралдары яһай, уны файҙалана белгән, иң юғары аҡылы булған йән эйәһе; әҙәм. *Бала кеше. Белемле кеше. Бер кеше. Дуҫ кеше. Ҙур кеше. Ҡатын кеше. Оло кеше. Тырыш кеше. Ят кеше.* **2.** Юғары рухи һәм мораль сифаттарға эйә булған шәхес. *Кеше булыу. Кеше итеү. Кеше сығыу.* **3.** Күмәк халыҡ. *Кеше алдына сығыу. Кеше йыйылған.*

**кешелек (кешелеге)** *и.* **1.** Бөтә булған кешеләр, кешеләр йәмғиәте. *Кешелек донъяһы. Кешелек йәмғиәте.* **2.** Кешене аяу, ҡыҙғаныу тойғоһо, йомшаҡ күңеллелек. *Кешелек тойғоһо.*

**кешелекле** *с.* Кешегә ярҙамсыл, мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле. *Кешелекле кеше. Кешелекле булыу.*

**кешнәү (кешнә-)** *ҡ.* Үҙенсә тауыш биреү (йылҡы малына ҡарата). *Кешнәп ебәреү.*

**кибеү (кип-)** *ҡ.* **1.** Һыуы, дымы бөтөп еүеш хәлдән ҡороға әйләнеү. *Ауыҙ кипте. Еләк кипкән. Тупраҡ кибә.* **2.** Ҡорошоп ҡыуарыу, ҡороу. *Ағастар кипте. Ашлыҡ кипкән.*

**киҙәнеү (киҙән-)** *ҡ.* Һуғырға уҡталып, ҡулды һелтәү. *Кешегә киҙәнеү. Киҙәнде лә һуҡманы.*

**кикрек (кикреге)** *и.* Ҡайһы бер ҡоштарҙың башындағы киртләсләнеп торған тажы. *Күркә кикреге. Әтәс кикреге. Кикрекле тауыҡ.* ♦ **Кикрек төшөү** *күңелһеҙләнеү, дәрт китеү.*

**кикрикүк** *оҡш.* Әтәс ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ.

**килбәт** *и.* Тышҡы ҡиәфәт; төҫ-баш. *Килбәте килешле.*

**киле** *и.* Төрлө нәмәне онтау, йомшартыу өсөн төйә торған оҙонса сөм һауыт. *Ағас киле. Суйын киле. Киләлә тары төйөү.*

**килем** *и.* Хеҙмәттән, йыйымдан төшкән файҙа. *Килем алыу. Килем артыу. Килемгә йәшәү.*

**килен** *и.* Улдың йәки ененең ҡатыны. *Йәш килен. Оло килен. Килен алыу. Килен булып төшөү.*

**килеү (кил-)** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер янына яҡынлау, хәрәкәт итеү. *Кемдер килә. Көтөү килә. Поезд килә. Һыбай килеү. Йүгереп килеү. Торбанан газ килә. Эҫе һыу килә. Ишектән һыуыҡ килә.* **2.** Хәрәкәт итеп, билдәле бер урынға барып етеү. *Килеп етеү. Ҡунаҡҡа килеү. Ҡалаға уҡырға килеү.* **3.** Ҡайҙандыр ебәрелеп, эргәгә етеү (хат, хәбәр, аҡса һ. б.). *Күстәнәс килде. Пенсия килеү. Хат килде.* **4.** Төбәү килештәге исемгә эйәреп, уй-фекерҙең аңда тыуыуын, билдәле бер фекергә туҡталыуҙы аңлата. *Иҫкә килеү. Ҡарарға килеү. Һығымтаға килеү.* **5.** Төп килештәге исемгә эйәреп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәле

һүҙбәйләнеш яһай. *Ауырлыҡ килеү. Асыу килеү. Ғәрлек килеү. Зыян килеү. Ялҡау килеү.* **6.-ғы** формаһындағы ҡылымға ҡушылып теләкте белдерә. *Ашағы килеү. Белге килеү. Күрге килеү. Ҡайтҡы килеү.*

**килеш** *и.* Исемдәрҙең башҡа һөйләм киҫәктәренә бәйләнешен күрһәткән, үҙенә башҡа ялғауҙар менән билдәләнгән грамматик категория. *Төп килеш. Килеш менән үҙгәреү. Килеш ялғауы.*

**килешеү**[1] **(килеш-)** *ҡ.* **1.** Төҫ-башҡа, буй-һынға матур булып ярап тороу. *Кейем килешеү. Төҫкә килешеү. Кәүҙәһе бейергә килешеп тора.* **2.** Урынлы, файҙалы булыу. *Саф һауа килеште.*

**килешеү**[2] **(килеш-)** *ҡ.* Һөйләшеп, аңлашып уртаҡ фекергә килеү. *Килешеп эшләү. Үҙ-ара килешеү. Йөҙ меңгә килешеү.*

**килешеү**[3] *и.* Ил йәки ойошмаларҙың үҙ-ара һөйләшеп төҙөгән йөкләмә ҡағыҙы. *Сауҙа килешеүе. Килешеүгә ҡул ҡуйыу. Килешеү төҙөү.*

**килештереү**[1] **(килештер-)** *ҡ.* **1.** Матур, килешле итеү; еренә еткереү. *Килештереп бейеү. Килештереп тегеү. Килештереп һөйләү.* **2.** Кем йәки нимәнеңдер ҡылығын оҡшатып, оҫта итеп ҡабатлау. *Ҡош булып килештереп һайрау.*

**килештереү**[2] **(килештер-)** *ҡ.* Үҙ-ара яраштырыу, татыулаштырыу. *Балаларҙы килештереү. Килештерергә тырышыу.*

**килограмм (килограмлы)** *и.* Ауырлыҡ үлсәү берәмеге (1000 грамға тиң). *Бер килограмм шәкәр.*

**километр** *и.* Алыҫлыҡ үлсәү берәмеге (1000 метрға тиң). *Йөҙ километр ара. Ун километр үтеү.*

**килтереү (килтер-)** *ҡ.* **1.** Ҡулға тотоп, күтәреп, етәкләп, эйәртеп йәки нимәгәлер һалып эргәгә, янға алып килеү. *Ат менән килтереү. Етәкләп килтереү. Бесән килтереү. Утын килтереү.* **2.** Алып килеп еткереү, тапшырыу. *Бүләк килтереү. Ғариза килтереү. Хәбәр килтереү.* **3.** Фекерҙе иҫбатлау, нығытыу маҡсатында әйтеү; күрһәтеү. *Дәлилдәр килтереү. Миҫал килтереү. Факттар килтереп һөйләү.* **4.** Ниндәйҙер хәлгә дусар итеү, нимәгәлер сәбәпсе булыу. *Бәлә килтереү. Ҡаза килтереү. Зыян килтереү. Һәләкәткә килтереү.* **5.** Донъяға тыуҙырыу. *Һарыҡ ике бәрәс килтерҙе.* **6.** Төп йәки төшөм килештәге исем менән ниндәйҙер теләкте, уй-тойғоно аңлата. *Асыу(ҙы) килтереү. Йоҡо(но) килтереү. Ҡоҫҡо(но) килтереү.*

**киләсәк** *с.* **1.** Алда буласаҡ, киләһе. *Киләсәк быуын. Киләсәк йылдар. Киләсәк көндәр. Киләсәк яҙмыш.* **2.** *и. мәғ.* **(киләсәге)** Алдағы ваҡыт, алда буласаҡ тормош, ғүмер дауамы. *Яҡты киләсәк. Яҡын киләсәк. Киләсәккә ышаныс менән йәшәү.*

**кимереү (кимер-)** *ҡ.* Ҡаты нәмәне теш менән ҡырыу. *Кимереп ашау. Ағасты ҡуян кимергән. Эт һөйәк кимерә.*

**кимереүсе** *и.* Алғы тештәре ныҡ үҫешкән һәм кимереү өсөн яраҡлашҡан йәнлек (ҡуян, тейен, йомран, сысҡан һ. б.). *Кимереүселәр отряды.*

**кимәл** *и.* **1.** Юғарылыҡ сиген белдергән шартлы һыҙыҡ. *Һыуҙың кимәле артты. Юғары кимәлгә етеү.* **2.** *күсм.* Үҫештәге үҙгәреш күләмен, ирешелгән юғарылыҡ дәүмәлен күрһәткән билдә. *Белем кимәле. Үҫеш кимәле. Фәнни-теоретик кимәл.*

**киндер** *и.* Һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған тарбағай ботаҡлы бейек үлән; тарма. *Киндер орлоғо. Киндер майы. Киндер сәсеү. Киндер йолҡоу. Киндер иләү. Киндер еп. Киндер күлдәк.*

**кинйә** *с.* Ғаиләлә иң бәләкәй булған бала. *Кинйә бала. Кинйә ҡыҙ. Кинйә ул.*

**кино** *и.* Экранда күрһәтеү өсөн махсус төшөрөп алынған таҫмалағы әҫәр; фильм. *Кино ҡарау. Кино төшөрөү. Киноға барыу.*

**кинотеатр** *и.* Кинофильмдар күрһәтә торған махсус бина.

**кинәнес** *и.* Берәй нәмәнән ҡәнәғәт булғанда, рәхәтлек тапҡанда килгән ҡыуаныс. *Ҙур кинәнес. Эштән кинәнес табыу. Кинәнескә сумыу.*

**кинәнеү (кинән-)** *ҡ.* **1.** Иркенлек, рәхәтлек тойоу. *Кинәнеп уйнау. Кинәнеп йүгереү.* **2.** Ҡәнәғәт булып ҡыуаныу. *Атаһы малайына кинәнеп бөтә алманы. Кинәнеп йәшәү.*

**киң** *с.* **1.** Иңе, арҡырыһы ҙур; *киреһе* тар. *Киң йылға. Киң таҡта. Киң таҫма. Киң аҙым. Киң баҫып атлау.* **2.** Иркен (кейемгә ҡарата). *Киң итәк. Киң күлдәк.* **3.** Күп урынды биләгән, йәйрәп ятҡан. *Киң дала. Киң майҙан.*

**киңлек (киңлеге)** *и.* **1.** Киң булыу сифаты, тирә-яҡҡа йәйелгәнлек. *Донъя киңлеге.* **2.** Берәй нәмәнең иңе, арҡыры үлсәме. *Бүлмәнең киңлеге. Йылғаның киңлеге.* **3.** Йәйрәп ятҡан иркен ер. *Баҫыу киңлеге. Дала киңлеге.*

**киңәйеү (киңәй-)** *ҡ.* **1.** Киңгә әйләнеү, киң булыу. *Йылға үҙәне киңәйгән. Күлдәк киңәйеп киткән.* **2.** *күсм.* Йөкмәткеһе менән байыу, артыу. *Аң-белем киңәйеү. Ҡараш киңәйҙе.*

**киңәйтеү (киңәйт-)** *ҡ.* **1.** Киңлеккә арттырыу, киң итеү. *Юлды киңәйтеү. Күлдәкте киңәйтеү.* **2.** *күсм.* Йөкмәтке яғынан байытыу, арттырыу. *Уҡыусыларҙың аң кимәлен киңәйтеү.*

**киптергес** *и.* Ҡара һурҙыра торған ҡағыҙ. *Дәфтәрҙең эсендә киптергес бар.*

**киптереү (киптер-)** *ҡ.* **1.** Дымлы, һыулы нәмәләрҙең дымын бөтөрөү; ҡоро итеү. *Кер киптереү. Ҡояшҡа киптереү. Һаҙлыҡты киптереү.* **2.** Һаҡлау өсөн ҡоро итеү. *Бесән киптереү. Еләк киптереү. Ҡорот киптереү.*

**кирбес** *и.* Балсыҡ менән ҡомдан иҙеп ҡалыпҡа һуғып эшләнгән төҙөлөш материалы. *Ҡыҙыл кирбес. Кирбес заводы. Кирбес һуғыу. Кирбес өй.*

**кире** *с.* **1.** Тейешле йәки төп тарафҡа ҡаршы. *Кире йүнәлеш. Кире яҡ.* **2.** Көткәнгә ҡапма-ҡаршы булған, ҡапма-ҡаршы эстәлекле. *Кире яуап. Кирењен һөйләү. Кирењен эшләү.* **3.** Ыңғай булмаған, тиҫкәре сифатлы, насар. *Кире образ. Кире кеше.* ♦ **Кире ҡағыу** үҙ өҫтөнә алмай, дөрөҫкә һанамау. **Кире уйлау** тәүге уйҙан ҡайтыу, дүнеү.

**киреү (кир-)** *ҡ.* **1.** Нимәнелер тартып, йәйеп яҡ-яғынан, ситенән нығытыу. *Шәл киреү. Тирене киреү.* **2.** Ныҡ һуҙып тартыу. *Янды киреү. Аяҡты киреп баҫыу.*

**кирәм** *и.* Ағас башына менеү өсөн ҡулланылған яҫы оҙон бау. *Кирәм ташлап менеү.*

**кис** *и.* Тәүлектең көн менән төн араһындағы бер мәле, ҡараңғы төшә башлаған ваҡыт. *Айлы кис. Кискә табан. Кис булыу. Кискә ҡалыу.*

**кисекмәҫтән** *р.* Оҙаҡҡа һуҙмай, тотҡарлыҡһыҙ, тиҙ. *Һис кисекмәҫтән.*

**кисереү (кисер-)** *ҡ.* Шелтәһеҙ, язаһыҙ ҡалдырыу, ғәфү итеү. *Ғәйебен кисереү. Кисерегеҙ инде.*

**кисереш** *и.* Ниҙендер тәьҫиренән килгән көслө уй-тойғо. *Шатлыҡлы кисерештәр. Эске кисереш.*

**кисеү**[1] **(кис-)** *ҡ.* **1.** Һыуға төшөп алға атлау, аша сығыу. *Кисеп йөрөү. Кисеп сығыу.* **2.** Ниҙер эсенән йырып хәрәкәт итеү, йырып атлау. *Ҡар кисеү. Ысыҡ кисеп йөрөү.* **3.** *күсм.* Үҙ башында татып үткәреү, күреү. *Ғүмер кисеү. Ҡайғы кисеү.* ♦ **Ут-һыу кисеү** бик күп ауырлыҡ күреү; күпте күреү.

**кисеү**[2] *и.* Һыуҙың кисеп аша сығып йөрөй торған һай урыны. *Һай кисеү. Кисеүҙе сығыу. Кисеү бирмәҫ йылға юҡ, батыр еңмәҫ дошман юҡ.* (Мәҡәл.)

**киске** *с.* Көн аҙағындағы, кис ваҡытындағы. *Киске аш. Киске ел. Киске һалҡын. Киске уҡыу. Киске уйын.*

**кислород** *и.* Химик элемент, тын алыу һәм яныу өсөн кәрәк булған, водород менән ҡушылғанда һыу барлыҡҡа килтергән, һауа составындағы еҫһеҙ, төҫһөҙ газ. *Кислород берләшмәләре. Кислород етешмәү.*

**кисә**[1] *и.* Берәй ваҡиғаға бағышланған киске йыйылыш. *Байрам кисәһе. Тантаналы кисә. Шиғыр кисәһе. Кисә үткәреү.*

**кисә**[2] *р.* Үткән көндө, бөгөнгөнән алдағы көндө. *Кисә кис. Кисә генә килделәр.*

**киҫеү (киҫ-)** *ҡ.* **1.** Ярып, телеп үтеп инеү, ҡырҡыу (үткер нәмәгә ҡарата). *Ҡайсы менән киҫеү. Быялаға ҡулды киҫеү. Яңылыш киҫеү.* **2.** Үткер ҡорал менән өҙөү, өлөштәргә һәм киҫәктәргә бүлеү; ҡырҡыу. *Киҫеп алыу. Киҫеп төшөрөү. Туҡмас киҫеү. Утын киҫеү.* **3.** Ниҙер аша үтеп, икегә айырыу, арҡыры үтеү. *Юлды киҫеү. Киҫеп үтеү.* ♦ **Аҫтан киҫеп өҫтән ямау** аҫтыртын рәүештә яуызлыҡ эшләү.

**киҫәк (киҫәге)** *и.* **1.** Бөтөндән бүленгән бер өлөш. *Ике киҫәк һабын. Икмәк киҫәге. Ҡағыҙ киҫәге. Таш киҫәге. Киҫәктәргә бүлеү.* **2.** Әҫәрҙең бер өлөшө, бүлеге. *Романдың беренсе киҫәге.* **3.** *грам.* Һүҙ йәки һөйләмдең грамматик функцияға эйә булған бер өлөшө. *Һөйләмдең баш киҫәктәре. Тиң киҫәктәр. Эйәрсән киҫәк.*

**киҫәксә** *и. лингв.* Айырым һүҙ йәки һөйләмгә ниндәй ҙә булһа бер мәғәнә үҙенсәлеге өҫтәй торған ярҙамлыҡ һүҙ (*мәҫ.*, бит, кенә, да һ. б.). *Көсәйтеү киҫәксәләре. Сикләү киҫәксәләре.*

**киҫәтеү (киҫәт-)** *ҡ.* Алдан әйтеп иҫкәртеү. *Киҫәтеп ҡуйыу. Киҫәтеп тороу. Киҫәтеп әйтеү.*

**кит** *и.* Һыны менән балыҡҡа оҡшаған иң ҙур имеҙеүсе диңгеҙ хайуаны. *Кит майы. Кит мыйығы. Кит аулау.*

**китап (китабы)** *и.* Биттәре билдәле бер тәртиптә йыйылып, тышлап төпләнгән баҫма әҫәр. *Боронғо китап. Рәсемле китап. Китап бите. Китап кәштәһе. Китап уҡыу. Әҙәби китап. Китап – белем шишмәһе.* (Әйтем.)

**китапхана** *и.* Төрлө баҫма йәки яҙма әсбаптарҙы йыя, һаҡлай һәм уҡырға биреп тора торған ойошма. *Мәктәп китапханаһы. Шәхси китапхана. Китапхана йорто. Китапханала эшләү.*

**китек** *с.* **1.** Сите уйылып сыҡҡан. *Китек ҡалаҡ. Китек сынаяҡ. Китек теш.* **2.** *күсм.* Теүәллеген юғалтҡан, кәмегән, етешһеҙ. *Һин юҡта өйҙөң бер яғы китек кеүек.* ♦ **Күңел китек булыу** ниҙер етмәгән итеп һиҙеү, кәмһенеү.

**китеү**[1] **(кит-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер янынан ситкә йүнәлеү, ҡуҙғалыу. *Балалар йүгереп китте. Көтөү китте. Поезд китте. Ҡунаҡҡа китеү. Һөнәргә китеү.* **2.** Йәшәгән, эшләгән урынды ҡалдырыу. *Ауылдан китеү. Күсенеп китеү. Ситкә китеү. Эштән китеү. Ялға китеү.* **3.** Нимәнеңдер эсенә буйлап үтеү, үтеп инеү (зарарлы, хәүефле нәмәләргә ҡарата). *Тын юлына китеү. Шеш мейегә киткән.* **4.** Сарыф ителеү, тотолоу. *Аҡса күп китте. Юлға ике көн китте. Көс бушҡа китте.* **5.** Билдәле бер исемдәр менән килеп, шул һүҙҙән аңлашылған төшөнсәнең юҡҡа сығыуын, бөтөүен аңлата. *Бәхет китте. Дуҫлыҡ китте. Йәм китеү. Көс китеү.* **6.** *күсм.* Вафат булыу, үлеү. *Үпкә ауырыуынан китеү.*

**китеү**[2] **(кит-)** *ҡ.* Берәй нәмәнең ситен киртләс итеп уйыу. *Сынаяҡты китеү. Китеп алыу. Китеп сығарыу.*

**кишер** *и.* Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған баҡса үҫемлеге, йәшелсә һәм шунын ашай торған тамыры. *Кишер орлоғо. Кишер түтәле. Кишер ултыртыу. Ҡыҙыл кишер. Кишер һуты.*

**класс (класта)** *и.* **1.** *ҡар.* **синыф. 2.** Бер иш нәмәләрҙең төркөмдәрен билдәләгән сифат күрһәткесе. *Беренсе класлы орлоҡтар. Хоккейсыларҙың «А» класы.*

**клуб** *и.* Бергә ял итеү, күңел асыу, үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә, спортта ҡатнашыу өсөн уртаҡ бер эш йәки һөнәр кешеләрен берләштергән ойошма һәм шул ойошма урынлашҡан йорт, бина. *Йәштәр клубы. Спорт клубы. Ауыл клубы. Клуб мөдире. Клуб сәхнәһе.*

**колбаса** *и.* Төйөлгән итте ас эсәккә йәки эсәк рәүешендәге көпкә тултырып, тәм-том һалып, махсус рәүештә эшкәрткән аҙыҡ. *Бешкән колбаса. Ыҫланған колбаса. Колбаса цехы.*

**колледж** *и.* Ҡайһы бер юғары һәм урта махсус уҡыу йорто атамаһы. *Педагогик колледж. Колледжда уҡыу.*

**коллектив** *и.* Дөйөм бер эш башҡарған, маҡсаттары бер булған кешеләр төркөмө. *Уҡыусылар коллективы. Хеҙмәт коллективы. Хор коллективы. Коллектив йыйылышы.*

**коллектив** *с.* Күмәк кеше башҡарған. *Коллектив ижад. Коллектив эш.*

**колхоз** *и.* Күмәк хужалыҡ. *Колхоз идараһы. Колхоз милке. Колхоз төҙөү.*

**колхозсы** *и.* Колхоз ағзаһы. *Колхозсылар йыйылышы. Колхозсылар уңышы.*

**команда** *и.* **1.** Командир биргән ҡыҫҡа бойороҡ. *Команда биреү. «Алға!» командаһы яңғыраны.* **2.** Айырым бер маҡсат менән төҙөлгән хәрби бүлем. *Пулеметсылар командаһы. Янғын һүндереүселәр командаһы.* **3.** Судно экипажы. *Судно командаһы.* **4.** Капитан етәкселегендә берәй спорт менән шөғөлләнгән кешеләр төркөмө. *Футболсылар командаһы. Хоккейсылар командаһы. Командалар ярышы.*

**командир** *и.* Ғәскәри берәмектең, хәрби судноның башлығы. *Отряд командиры. Полк командиры.*

**комбайн** *и.* Бер үк ваҡытта бер нисә төрлө эш башҡара торған ҡатмарлы машина. *Ашлыҡ комбайны. Силос комбайны. Тау эштәре комбайны. Үҙе йөрөмәле комбайн.*

**комбайнсы** *и.* Комбайнды эшләтеүсе. *Алдынғы комбайнсы. Комбайнсылар курсы.*

**комиссия** *и.* Айырым рәсми хоҡуҡ менән билдәле бер вазифа башҡарған кешеләр төркөмө. *Закондар сығарыу комиссияһы. Ҡабул итеү комиссияһы. Һайлау комиссияһы.*

**комитет** *и.* Берәй эшкә етәкселек итеү өсөн ойошторолған, һайлап ҡуйылған орган. *Дәүләт комитеты. Профсоюз комитеты.*

**компас** *и.* Донъя тарафтарын билдәләү өсөн ҡулланылған, һәр ваҡыт төньяҡты күрһәтеүсе магнитлы теле булған прибор. *Компас теле. Компасҡа ҡарап барыу.*

**композитор** *и.* Музыкаль әҫәр ижад иткән кеше. *Йәш композитор. Һәүәҫкәр композитор. Композиторҙың яңы көйө.*

**компот** *и.* Төрлө емеште шәкәрле һыуҙа ҡайнатып әҙерләгән эсемлек. *Алма компоты. Компот ҡайнатыу.*

**компьютер** *и.* Электронлы иҫәпләү, яҙыу машинаһының атамаһы. *Компьютерҙа баҫыу. Компьютерға индереү. Компьютер программаһы.*

**конверт** *и.* Ҡағыҙҙан дүртмөйөшләп эшләнгән, хат, документ кеүек нәмәләрҙе һалып ебәреү өсөн файҙаланылған пакет. *Хатты конвертҡа һалыу.*

**конкурс** *и.* Ҡатнашыусылар араһынан иң лайыҡлыһын һайлап алырға мөмкинлек биргән ярыш. *Конкурс иғлан итеү. Конкурста ҡатнашыу. Конкурстан үтеү.*

**консерва** *и.* Махсус эшкәртеп, быяла йәки ҡалай һауытҡа ҡаплап ҡуйылған ашамлыҡ. *Балыҡ консерваһы. Ит консерваһы. Йәшелсә консерваһы.*

**конституция** *и.* Илдәге йәмғиәт һәм дәүләт ҡоролошон, һайлау системаһын, дәүләт органдарының төҙөлөш һәм эш принциптарын, граждандарҙың хоҡуҡтарын, бурыстарын билдәләгән төп закон. *Конституция закондары. Республиканың конституцияһы. Конституция ҡабул итеү.*

**конструктор** *и.* **1.** Нимәнеңдер конструкцияһын төҙөгән белгес. *Баш конструктор. Конструкторҙар бюроһы.* **2.** Балаларға төрлө уйынсыҡ нәмәләр төҙөү, ҡороу өсөн эшләнгән деталдәр йыйылмаһы.

**конструкция** *и.* **1.** Төрлө өлөштәрҙән торған ҡатмарлы машина һәм ҡоролмаларҙың төҙөлөшө. *Күперҙең конструкцияһы. Машинаның конструкцияһы.* **2.** Ҡатмарлы ҡоролма һәм уның айырым киҫәктәре. *Тимерле бетон конструкция. Йыйылма конструкция.*

**концерт** *и.* Төрлө музыкаль, әҙәби, хореографик һ. б. номерҙарҙан тороп, билдәле бер программа буйынса алып барылған тамаша. *Концерт программаһы. Концерт ҡуйыу. Концерт тыңлау.*

**коньки (конькийы)** *и.* Аяҡ кейеменә беркетеп боҙҙа шыуыу өсөн эшләнгән үткер ҡырлы тимер табан. *Коньки менән йөрөү. Балалар коньки шыуа.*

**коридор** *и.* Йорттоң, бинаның айырым өлөштәрен, фатирҙың бүлмәләрен тоташтырған оҙон аралыҡ. *Киң коридор. Мәктәп коридоры. Коридор ишеге.*

**король (короле)** *и.* **1.** Ҡайһы бер илдәрҙәге батша титулы һәм шул титулдағы кеше. *Англия короле. Дания короле.* **2.** Шахмат уйынындағы төп фигура. *Король менән йөрөү.*

**космодром** *и.* Йыһанға осоу аппараттарын ҡороу, осорға әҙерләү һәм осороу өсөн тәғәйенләнгән ҡоролмалар һәм техник саралар. *Байконур космодромы.*

**космонавт (космонавы)** *и.* Ғилми тикшеренеүҙәр алып барыу һәм космос техникаһын һынау өсөн йыһанға осҡан кеше. *Беренсе космонавт. Космонавт булыу. Космонавт кейеме.*

**космонавтика** *и.* Йыһанға осоу теорияһы һәм практикаһы.

**космос** *и.* Йыһан киңлеге; ғаләм, йыһан. *Космосҡа осоу. Космос станцияһы.*

**костюм** *и.* **1.** Бер пар итеп тегелгән салбар менән пинжәк йәки юбка менән жакет. *Костюм кейеү. Костюм һатып алыу.* **2.** Кейем. *Милли костюм. Спорт костюмы.* **3.** Сәхнә йәки маскарад өсөн әҙерләнгән кейем. *Карнавал костюмы.*

**котлет** *и.* Тапалған ит йәки балыҡтан ҡыҙҙырып йә быҡтырып бешерелгән ашамлыҡ. *Котлет бешереү. Котлет менән һыйлау.*

**кофта** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙың бил тәңгәленән булған еңел өҫ кейеме. *Еңһеҙ кофта. Сигеүле кофта.* **2.** Ҡатын-ҡыҙҙың йөндән йәки кизенән бәйләнгән йылы өҫ кейеме. *Йылы кофта. Кофта кейеү.*

**көбәк (көбәге)** *и.* Атыу ҡоралының йәҙрә, пуляға йүнәлеш бирә торған ҡорос көпшәһе йәки торбаһы. *Мылтыҡ көбәге.*

**көҙ** *и.* Йәй менән ҡыш араһындағы миҙгел. *Сыуаҡ көҙ. Көҙ етеү. Көҙгө көн. Алтын көҙ арты – һалҡын көҙ.* (Әйтем.) *Яҙ йәме сәскә менән, көҙ йәме көлтә менән.* (Мәҡәл.) ♦ **Алтын көҙ** көҙҙөң тәүге сыуаҡ мәле, япраҡтар һарғайған саҡ.

**көҙгө'** *и.* **1.** Сағылдырып күрһәтеү өсөн махсус эшкәртелгән шыма быяла. *Ҙур көҙгө. Ултырмалы көҙгө. Көҙгөлө шкаф. Дуҫ – дуҫтың көҙгөһө.* (Мәҡәл.)

*Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.* (Әйтем.) **2.** *күсм.* Кемдең йәки нимәнең дә булһа сағылышы. *Бишле билдәһе – белем көҙгөһө.*

**көҙгө**[2] *с.* Көҙ көнө була торған. *Көҙгө ҡараңғы төн. Көҙгө һыуыҡ. Көҙгө ямғыр.*

**көҙән** *и.* **1.** Һуҫарҙар ғаиләһенә ҡараған, йомшаҡ оҙон йөнлө, затлы тиреле йыртҡыс йәнлек. *Аҡ көҙән. Ҡара көҙән.* **2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Көҙән бүрек.*

**көй** *и.* **1.** Бер бөтөн йөкмәткегә эйә булған аһәңле тауыштар теҙмәһе. *Башҡорт көйө. Бейеү көйө. Моңло көй.* **2.** Музыка ҡоралдарында: тауыш төҙөклөгө. *Скрипканың көйө юҡ.* **3.** *күсм.* Күңел теүәллеге, кәйеф. *Баланың көйө юҡ. Кешенең көйөн көйләү. Көйө китеү.* ♦ **Ҡыҫҡа көй** йыш ритм менән ҡыҫҡа итеп йырлана торған көй. **Оҙон көй** һирәк, яй ритм менән һуҙып йырлана торған көй. **Көйгә һалыу** шиғри әҫәрҙе көй менән йырлай торған итеү.

**көйҙөрөү (көйҙөр-)** *ҡ.* **1.** Яндырғансы бешереү, өтөү. *Көйҙөрөп бешереү.* **2.** Ҡояш ныҡ ҡыҙҙырыу. *Ҡояш көйҙөрөп алып бара.*

**көйлө** *с.* **1.** Көйгә һалып уҡый торған. *Көйлө доға. Көйлө китап.* **2.** Көйгә килтерелгән (музыка ҡоралдарына ҡарата). *Мандолина көйлө.* **3.** Боҙоҡ түгел, төҙөк. *Машиналар көйлө булғанда, эш яҡшы бара.*

**көйләү (көйлә-)** *ҡ.* **1.** Көйгә һалып йырлау, көй уйнау. **2.** Көйөн төҙәтеү (музыка ҡоралдарына ҡарата). *Скрипканы көйләү.* **3.** Ҡорамалды, механизмды төҙәтеп, эшләрлек итеү; йүнәтеү. *Машинаны көйләү.*

**көйөк (көйөгө )** *и.* **1.** Утта көйгән нәмә. *Икмәк көйөгө. Көйөк еҫе. Көйөк тәме.* **2.** *күсм.* Рухи ғазап, ҡайғы. *Көйөк булыу.* ♦ **Йән көйөгө** асыуҙы килтергән кеше.

**көйөлдө** *и.* Оҙон аяҡлы, оҙон, төҙ, нәҙек суҡышлы, һоро сыбар ҡош (йылға-күл буйында йәшәй). *Ҙур көйөлдө. Көйөлдө кәйелеп оса.*

**көйөнөс** *и.* Борсолоу, әсенеү хисе. *Көйөнөс килтереү.*

**көйөнөү (көйөн-)** *ҡ.* Борсолоу, хафаланыу, ҡайғырыу. *Бала өсөн көйөнөү.*

**көйөү (көй-)** *ҡ.* **1.** Утта янып тышы ҡарайыу. *Утта көйөү. Көйгән икмәк.* **2.** Ҡояш тәьҫирендә кибеү. *Тауҙа үләндәр көйә.* **3.** *күсм.* Рухи яҡтан ғазап сигеү; ҡайғырыу, борсолоу. *Бала өсөн көйөү.*

**көйшәү (көйшә-)** *ҡ.* **1.** Йотҡан аҙыҡты кире сығарып сәйнәү (көйөшлө малдарға ҡарата). *Һыйыр көйшәй.* **2.** *һөйл.* Оҙаҡ итеп, яйлап ашау. *Икмәк көйшәү.*

**көйә** *и.* Йөн әйберҙәрҙе, ҡайһы бер үҫемлектәрҙең япрағын һ. б. ашай торған ваҡ ҡына күбәләк һәм уның ҡарышлауығы. *Балауыҙ көйәһе. Иген көйәһе. Көйә күбәләге. Кейемде көйә ҡырҡҡан.*

**көйәнтә** *и.* **1.** Ике башына күнәк, кәрзин элеп, яурынға күтәреп йөрөү өсөн бөгөп йәтешләнгән ағас. *Биҙәкле көйәнтә. Көйәнтә яһау. Көйәнтәгә элеү.* **2.** Ике күнәк менән ташыған нәмәләрҙе үлсәү берәмеге. *Дүрт көйәнтә һыу. Ике көйәнтә картуф.*

**көкөрт** *и.* Химик элемент, һары төҫтәге тиҙ тоҡаныусан матдә (техника, медицина һәм ауыл хужалығында ҡулланыла). *Көкөрт газы. Көкөрт иретеү.*

**көл** *и. Ниҙер янғандан ҡалған күкһел һоро төҫтәге онтаҡ. Самауыр көлө. Усаҡ көлө. Көл менән ашлау.* ♦ **Артыңа көл** ҡабат килеп йөрөмә тигән мәғәнәлә асыу менән әйтелә. **Көл итеү** юҡҡа сығарыу, ҡырып бөтөрөү. **Көлөн күккә осороу** 1) үртәп, юҡҡа сығарыу; 2) донъя йөҙөнән юҡ итеү.

**көлдөрөү (көлдөр-)** *ҡ.* Көлөргә мәжбүр итеү. *Көләмәс һөйләп көлдөрөү.*

**көлкө** *и.* Ҡыҙыҡ, шатлыҡ, ҡыуаныс тойғоларын белдергәндә сыҡҡан ҡыҫҡа, өҙөк тауыш. *Көлкө килеү. Көлкө күренеү.* ♦ **Көлкөгә алыу** ысынды бушҡа, мәрәкәгә ауҙарыу. **Көлкөгә ҡалыу** кеше көлөрлөк хәлгә төшөү. **Көлкө кисәһе** шаян номерҙарҙан торған кисә. **Көлкөгә һабыштырыу** ысынды көлкөгә әйләндереү. **Көлкө түгел** эштең етдилегенә иғтибар итергә өндәп әйтелә. **Көлкөң яңырыр әле** көлгән кешегә иҫкәртеп йәки янап әйтелә. **Әҙәм көлкөһө** мыҫҡыллап көлөрлөк эш, нәмә, кеше.

**көлөмһөрәү (көлөмһөрә-)** *ҡ.* Саҡ ҡына көлөү, сырайға көлөү билдәһе сығарыу. *Ҡыҙ көлөмһөрәп ҡарай. Көлөмһөрәп ҡуйыу.*

**көлөү (көл-)** *ҡ.* **1.** Ниҙелер ҡыҙыҡ күргән, шатланған саҡтағы тойғоно йөҙ һәм үҙенсәлекле тауыш аша сағылдырыу. *Кеткелдәп көлөү. Ҡысҡырып көлөү. Тыйыла алмай көлөү. Шарҡылдап көлөү.* **2.** Кемдендер эш-ҡылығынан, төҫ-ҡиәфәтенән һ. б. көлкө яһау. *Кешенән көлөү. Дуҫтарса көлөү.*

**көлсә** *и.* Әсе ҡамырҙан табала бешергән йәймә. *Көлсә бешереү.*

**көлтә** *и.* Иген, етен, киндерҙәрҙең билдәле бер сама менән яһалған бәйләме. *Арыш көлтәһе. Етен көлтәһе. Көлтә бәйләү. Көлтә бауы.*

**көләмәс** *и.* Тапҡыр мәғәнәле, ҡыҫҡа ғына көлкөлө әҫәр. *Көләмәс һөйләү. Хужа Насретдин көләмәстәре.*

**көләс** *с.* **1.** Көлөп, йылмайып торған; асыҡ, яҡты. *Көләс йөҙ. Көләс ҡыҙ. Көләс булыу.* **2.** *күсм.* Йәмле, матур; яҡты. *Көләс донья.*

**көмбәҙ** *и.* Ярымшар рәүешендә түңәрәкләнеп торған түбә. *Мәсет көмбәҙе. Тирмә көмбәҙе.*

**көмөш** *и.* **1.** Химик элемент, йылтыр аҡ төҫтәге затлы металл (төрлө биҙәү әйберҙәре, һауыт-һаба, аҡса һ. б. яһау өсөн ҡулланыла). *Көмөш мәғдәне. Көмөш табыу. Көмөш төҫөндәге. Көмөш балдаҡ. Көмөш беләҙек.* **2.** Шул метал-

дан йәки унының ҡатышмаһынан ҡойолған аҡса. *Илле тин көмөш. Ун тин көмөш. Көмөш аҡса. Көмөш тәңкә.* **3.** *с. мәғ.* Саф, таҙа (йылға, һыуға ҡарата). *Көмөш һыулы шишмә. Ҡыҙҙың көмөш тауышы яңғыраны.* ♦ **Көмөш кеүек (һымаҡ), көмөштәй** берәй нәмәнең төҫөн, таҙалығын, тауыш сафлығын сағыштырып биреү өсөн ҡулланыла. *Көмөш кеүек аҡ. Көмөш кеүек саф.*

**көмрө** *с.* **1.** Дуғаланып сығып, кәкрәйеп ҡалҡып торған. *Көмрө таҡта.* **2.** Яурыны, елкәһе сығынҡырап, дуғаланып торған. *Көмрө кеше. Көмрө елкә.*

**көн**[1] *и.* **1.** Ҡояш ҡалҡҡандан байығанға тиклемге ваҡыт. *Ҡыҫҡа көн. Көн буйы. Көн оҙоно. Көн үткәреү.* **2.** 24 сәғәтте эсенә алған ваҡыт берәмеге; тәүлек. *Бер көн. Көн һайын. Һәр көн. Ике көн элек.* **3.** Айырым бер ваҡиғаға бағышланған дата. *Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. Еңеү көнө.* **4.** Билдәле бер миҙгел. *Йәй көнө. Көҙ көнө. Яҙ көнө.* ♦ **Көн итеү** етешһеҙ тормошта йәшәү. **Көн төшөү** берәүҙең ярҙамына мохтаж булып ҡалыу. **Көн тәртибе** йыйылышҡа тикшереү өсөн ҡуйылған мәсьәләләр. **Оҙайтылған көн** тәрбиә эшен яҡшыртыу ниәтендә уҡыусы балаларҙы дәрестән һуң эш көнө бөткәнсе уҡытыусылар ҡарамағында тотоу тәртибе.

**көн**[2] *и.* Ҡояш һәм ҡояш эҫеһе. Көн нуры. *Көн байыу. Көн тыуыу. Көнгә бешеү. Көнгә яныу. Көн ашау.* ♦ **Бер бите ай, бер бите көн** бик матур (ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә). **Көн һуғыу (тейеү)** ҡояш эҫеһенең зарары тейеү.

**көн**[3] *и.* Билдәле бер ваҡыттағы һауа хәле. *Аяҙ көн. Болотло көн. Йонсоу көн. Көндәр боҙолоу. Көн һыуытты.*

**көнбағыш** *и.* Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән, орлоғонан май алына торған, оҙон һабаҡлы, таҡыя башлы, һары сәскәле үҫемлек һәм шул үҫемлектең орлоғо. *Көнбағыш башы. Көнбағыш сәскәһе. Көнбағыш һабағы. Көнбағыш баҫыуы. Киптерелгән көнбағыш. Ҡурған көнбағыш. Көнбағыш майы. Көнбағыш ярыу.*

**көнбайыш** *и.* **1.** Көнсығышҡа ҡапма-ҡаршы ятҡан, ҡояш байыған тараф. *Көнбайыш еле. Көнбайыш яғы.* **2.** (баш хәреф менән) Ҡояш байыған тарафтағы ер һәм илдәр. *Көнбайыш Европа, Көнбайыш Европа илдәре. Көнбайыш әҙәбиәте классиктары.*

**көндөҙ** *и.* Иртә менән кис араһындағы ваҡытта, көн яҡты саҡта. *Көндөҙ эҫе. Көндөҙ һыу инергә барыу.*

**көндәлек**[1] *с.* Һәр көн була торған, көндәге. *Көндәлек мәшәҡәт. Көндәлек норма. Көндәлек эш.*

**көндәлек**[2] **(көндәлеге)** *и.* **1.** Кешенең үҙ тормошон көндән-көнгә тасуирлап барған шәхси яҙмаһы һәм шуны яҙған дәфтәр. *Көндәлек яҙыу. Көндәлекте уҡыу. Сәйәхәтсе көндәлеге.* **2.** Бирелгән дәрес һәм уҡыусы алған баһаны яҙа

торған махсус дәфтәр. *Көндәлек тултырыу. Көндәлекте тикшереү. Көндәлеккә баһа ҡуйыу.*

**көндән-көн** *р.* Көн үткән һайын. *Көндән-көн яҡшыраҡ уҡый.*

**көндәш** *и.* Күп ҡатынлы ирҙең бер ҡатыны (икенселәренә ҡарата). *Көндәш өҫтөнә килеү. Көндәш менән йәшәү.*

**көнкүреш** *и.* **1.** Донъя көтөү, көн итеүгә бәйле тормош. *Көнкүреш әйберҙәре. Көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү.* **2.** Йәшәү шарттары, тормош хәле. *Көнкүреште яҡшыртыу. Халыҡтың көнкүреше.* ♦ **Көнкүреш йорто** донъя көтөү, көндәлек тормошҡа бәйле эштәрҙе башҡарыусы учреждение.

**көнлөк**[1] **(көнлөгө)** *и.* Төп һан менән килеп, билдәле бер ваҡыт араһын белдерә. *Айҙың өсөнсө биш көнлөгө. Тәүге ун көнлөк.*

**көнлөк**[2] *и.* Көн иҫәбенән түләнә торған ваҡытлы эш. *Көнлөктә йөрөү. Көнлөккә сығыу. Көнлөккә эшләү.*

**көнләшеү (көнләш-)** *ҡ.* **1.** Яратҡан кешенде икенсе берәүҙән ҡыҙғаныу. *Ҡатынды көнләшеү.* **2.** Берәй кешелә ниндәй ҙә булһа өҫтөнлөк күреп, эстән үртәнеү. *Кеше бәхетенән көнләшеү. Күршенән көнләшеү.*

**көнө(н)-төнө(н)** *р.* Тәүлек әйләнәһенә; һис туҡтауһыҙ, һәр ваҡыт. *Көнө-төнө эшләү.*

**көнсөл** с. **1.** Яратҡан кешеһен икенсе берәүҙән урынлы-урынһыҙ ҡыҙғаныусан. *Көнсөл ир. Көнсөл булыу.* **2.** Башҡаларҙа ниндәй ҙә булһа өҫтөнлөк күреп, эстән үртәнә торған. *Көнсөл ҡыҙ. Көнсөл ҡараш.*

**көнсығыш** *и.* **1.** Көнбайышҡа ҡапма-ҡаршы ятҡан, ҡояш ҡалҡҡан тараф. *Көнсығыштан иҫкән ел. Көнсығыш сик.* **2.** (баш хәреф менән) Ҡояш сыҡҡан тарафтағы ер һәм илдәр. *Алыҫ Көнсығыш. Көнсығыш илдәр.*

**көньяҡ (көньяғы)** *и.* **1.** Төньяҡҡа ҡаршы тараф. *Көньяҡҡа ҡараған тәҙрә.* **2.** Климаты йылы яҡ. *Көньяҡта ял итеү. Көньяҡ халҡы.*

**көп (көбө)** *и.* **1.** Уратып тотош ҡаплаған тыш йәки ябыу. *Корттоң көбө.* **2.** *анат.* Эске ағзаны ҡаплап торған яры. *Бауыр көбө. Йөрәк көбө.*

**көпләү (көплә-)** *ҡ.* Тышҡы яҡтан көп менән ҡаплау. *Ишекте көпләү.*

**көпшә** *и.* **1.** Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ингән ҡыуыш һабаҡлы бер төркөм үләндәрҙең дөйөм исеме. **2.** Балтырғандың ашай торған һабағы. *Көпшә йыйыу.* **3.** Ҡыуыш эсле таяҡ һымаҡ нәмә. *Быяла көпшә. Резина көпшә.*

**көр** *с.* **1.** Һимеҙ (хайуандарға ҡарата). *Көр мал. Көр булыу.* **2.** *күсм.* Күтәренке, баҙыҡ. *Көр тауыш. Күңеле көр.*

**көрөшкә** *и.* Стакан рәүешендәге тотҡалы һауыт. *Ҡалай көрөшкә. Көрөшкә менән эсеү.*

**көрпә** *и.* Ашлыҡтың он итеп тартҡанда онталмай ҡалған ҡабығы. *Көрпәле он. Малға көрпә ашатыу.*

**көрт** *и.* Ҡалын ҡар. *Көрт баҫыу. Көрт ярып барыу.*

**көртмәле: ҡара көртмәле** *и.* Йылтыр ваҡ япраҡлы, алһыу сәскәле, ҡыҫҡа һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек; ҡара еләк (ылыҫлы йәки ҡатнаш урмандарҙа, дымлы ерҙә була) һәм уның емеше. *Көртмәле сәскәһе. Көртмәле йыйыу.* **Ҡыҙыл көртмәле** ялтырап торған мәңге йәшел ваҡ япраҡлы, алһыу суҡ сәскәле, ергә түшәлеп үҫкән ҡыуаҡ үҫемлек; мүк еләге (төньяҡ урмандарында дымлы ерҙә була) һәм уның емеше.

**көрһөнөү (көрһөн-)** *ҡ.* Күңелһеҙ кисерештән тәрән итеп һулау. *Ауыр көрһөнөү. Тәрән итеп көрһөнөү.*

**көршәк (көршәге)** *и.* **1.** Балсыҡтан яндырып эшләгән йомро һауыт. *Оҙон муйынлы көршәк. Тотҡалы көршәк.* **2.** Түбә ябыу өсөн балсыҡтан яндырып яһалған һырлы плита. *Көршәк менән ябыу.* ♦ **Көршәк ватыу** йыйын, байрам ваҡытында ҡыҙыҡ өсөн үткәрелә торған ярыш (күҙе бәйләгән кеше бер нисә аҙым ерҙән туралап барып көршәккә һуға).

**көрәк (көрәге)** *и.* Ҡаҙыу, көрәү өсөн ҡулланылған яҫы башлы, оҙон һаплы ҡул ҡоралы. *Ағас көрәк. Тимер көрәк. Үткер көрәк. Көрәк һабы.*

**көрән** *с.* Ҡыҙҙырылған ҡәһүә төҫөндә, ҡыҙғылт ҡара. *Көрән күлдәк. Ҡара көрән. Ҡыҙыл көрән. Һары көрән.*

**көрәү (көрә-)** *и.* Көрәк менән һөҫөп алыу, таҙартыу. *Ҡар көрәү. Ситкә көрәү. Юл көрәү.*

**көрәш** *и.* **1.** Билдәле бер ҡағиҙә менән кем йығарҙан башҡарылған көс һынаш; алыш. *Ирекле көрәш. Классик көрәш. Милли көрәш. Көрәшкә сығыу.* **2.** Йәмғиәттең ҡапма-ҡаршы көстәре араһындағы алыш. *Сәйәси көрәш. Төрлө ағымдар көрәше.* **3.** Ниндәйҙер маҡсатҡа йүнәлтелгән йәки ауырлыҡты, ҡаршылыҡты еңеүгә,ниҙелер юҡ итеүгә, бөтөрөүгә йүнәлтелгән эш. *Тыныслыҡ өсөн көрәш. Тәртипһеҙлеккә ҡаршы көрәш. Эскелеккә ҡаршы көрәш.* **4.** *күсм.* Бәхәс, үҙ-ара әйтеш. *Һүҙ көрәше.*

**көрәшеү (көрәш-)** *ҡ.* **1.** Билдәле ҡағиҙә буйынса билдән алып көс һынашыу; алышыу. *Билғау һалып көрәшеү.* **2.** Ҡаршы торған ижтимағи көс менән алышыу. *Дошман менән көрәшеү.* **3.** Маҡсатҡа ирешеү өсөн ауырлыҡ, ҡаршылыҡ менән алышыу; еңеп сығырға көс һалыу. *Ғәҙеллек өсөн көрәшеү. Сифат өсөн көрәшеү. Наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәшеү.*

**көрәшсе** *и.* Көрәштә ҡатнашҡан кеше. *Көрәшселәр майҙанға сыҡты.*

**көрәштереү (көрәштер-)** *ҡ.* Үҙ-ара көрәшергә ыңғайлатыу, көс һынаштырыу. *Батырҙарҙы көрәштереү.* ♦ **Һүҙ көрәштереү** бәхәсләшеү, ҡаршы әйтеү.

**көрәштәш** *и.* Көрәштә бергә ҡатнашҡан кеше. *Көрәштәш булыу.*

**көс** *и.* **1.** Эш йәки хәрәкәт башҡара алыу мөмкинлеге, һәләте; ҡеүәт. *Көс бөтөү. Көс етеү. Көс кереү. Беләккә көс инеү. Бөтә көстө һалыу.* **2.** Нимәгәлер ҡаршы торор, тәьҫир итер сара; ҡеүәт. *Сихри көс. Дарыу көсө.* **3.** Ғәскәр, хәрби ҡеүәт. *Ҡоралллы көстәр.* ♦ **Көс килеү** ауырлыҡ килеү. **Көс ташлау** көсһөҙләнеү, хәлһеҙләнеү. **Күкрәк көсө** кешенең үҙ хәләл көсө, хеҙмәте.

**көскә** *р.* Ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ менән; саҡ. *Көскә атлау. Көскә күтәреү.*

**көслө** *с.* **1.** Физик көсө күп; ҡеүәтле. *Көслө кеше. Көслө ҡулдар. Көслө машина. Көслө булыу.* **2.** Рухи йәһәттән ныҡ; ныҡлы. *Көслө ихтыяр. Көслө характер.* **3.** Яҡшы ҡоралланған. *Көслө ғәскәр. Көслө ҡалға.* **4.** Ижтимағи көсө һәм иҡтисади мөмкинлеге ҙур булған; ҡеүәтле. *Көслө дәүләт. Көслө ил.* **5.** Йоғонто яһау һәләте ҙур. *Көслө дарыу. Көслө әҫәр.* **6.** Үҙ эшенең бөтә нескәлеген белгән; оҫта, һәләтле. *Көслө шахматсы. Көслө яҙыусы.*

**көсөк (көсөгө)** *и.* **1.** Эт балаһы. *Көсөк эйәртеү. Көсөк алыу. Этенән күреп көсөгө өрөр.* (Әйтем.) **2.** *эйл. ф.* **көсөгөм** балаға иркәләп әйтелә. **3.** *күсм. мыҫҡ.* Арттан ҡалмай эйәреп йөрөгән кешегә әйтелә. ♦ **Көсө еткәнгә көсөктәй** үҙенән көсһөҙ кешене йәберләгәндә әйтелә.

**көсөкләү (көсөкլә-)** *ҡ.* Балалау (эткә ҡарата). *Эт көсөкләгән.*

**көсөргәнеш** *и.* Эшкә һалынған йәки талап ителгән ҙур көс, тырышлыҡ. *Көсөргәнеш менән эшләү. Көсөргәнеш тойоу.*

**көсөргәнешле** *с.* **1.** Күп көс һалып, ҙур иғтибар менән башҡарылған йәки ошоно талап иткән. *Көсөргәнешле көрәш. Көсөргәнешле хеҙмәт.* **2.** Үҙ-ара мөнәсәбәт киҫкен хәлдә булған; ҡаршылыҡлы, ауыр. *Көсөргәнешле минуттар. Көсөргәнешле хәл.*

**көс-хәл** *и. йыйн.* Физик мөмкинлек; ҡеүәт. *Көс-хәл инеү.*

**көсһөҙ** *с.* **1.** Физик көсө аҙ; кәрһеҙ, хәлһеҙ. *Көсһөҙ ат. Көсһөҙ ҡул. Көсһөҙ көрәк һындырыр.* (Әйтем.) **2.** Ижтимағи көсө, иҡтисади ҡеүәте аҙ булған. *Көсһөҙ дәүләт. Көсһөҙ хужалыҡ.*

**көсәйеү (көсәй-)** *ҡ.* **1.** Физик көс-ҡеүәт артыу. *Көсәйеп китеү.* **2.** Ниндәйҙер эш башҡарырлыҡ көс артыу, көслөгә әйләнеү. *Ғәскәр көсәйҙе. Хужалыҡ көсәйә бара.*

**көтмәгәндә** *р.* Уйламағанда, ҡапыл. *Көтмәгәндә килеп инеү.*

**көтөү**[1] **(көт-)** *ҡ.* **1.** Килерен, булырын белеп, урында ҡалыу. *Көтөп тороу. Көтөп ултырыу. Хат көтөү. Хәбәр көтөү.* **2.** Нимәгәлер иҫәп тотоу, өмөтләнеү. *Күпте көтөп әҙҙән буш ҡалма.* (Әйтем.)

**көтөү**[2] **(көт-)** *ҡ.* Күмәк малды утлауҙа әйләп, ҡарап йөрөтөү. *Быҙау көтөү. Йылҡы көтөү.* ♦ **Донъя көтөү** тормош ҡороп йәшәү. **Өй көтөү** өй эштәрен ҡарау.

**көтөү**[3] *и.* **1.** Утлауҙа ҡараулы йөрөгән бер төркөм мал. *Ауыл көтөүе. Һыйыр көтөүе. Малды көтөүгә ҡыуыу.* **2.** Төркөмләнеп йөрөгән йәнлек, хайуан йәки ҡоштар; өйөр. *Бүреләр көтөүе. Көтөү-көтөү ҡыр өйрәктәре.* ♦ **Бер көтөү** бик күп, күмәк; бер өйөр. **Көтөүе менән** күмәк булып, өйөрөлөшөп.

**көтөүлек (көтөүлеге)** *и.* Мал көтә торған ер. *Малды көтөүлектә йөрөтөү.*

**көтөүсе** *и.* **1.** Көтөүҙе утлауҙа ҡарап йөрөткән, мал көткән кеше. *Һарыҡ көтөүсеһе. Һыйыр көтөүсеһе.* **2.** *һөйл.* Балалар уйынында хеҙмәтсе сифатын башҡарған яҡ. *Көтөүсе булыу. Көтөүсе һайлау.* ♦ **Көтөүсе муҡсаһы** аҡ сәскәле, ваҡ өскөл ҡуҙаҡлы дарыу үләне.

**көтәсәк (көтәсәге)** *и.* Үтес, бурыс. *Көтәсәккә алыу. Көтәсәкте биреү.*

**кран**[1] *и.* Торбанан килгән газ йәки шыйыҡлыҡты бороп бикләү һәм асыу өсөн ҡулланылған һемәк. *Газ краны. Һыу краны. Кранды асыу. Кранды ябыу.*

**кран**[2] *и.* Ҙур, ауыр нәмәләрҙе күтәреп күсерә торған механизм; йөк күтәргес машина. *Кранда эшләү. Кран менән күтәреү.*

**крахмал** *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙән (*мәҫ.,* дөгө, картуф, кукуруз һ. б.) алынып, химия сәнәғәтендә, кондитерлыҡ эшендә ҡулланыла торған аҡ онтаҡ. *Картуф крахмалы. Дөгө крахмалы.*

**кресло** *и.* Ҡул һалырға яндауыры, терһәге булған киң ултырғыс. *Йомшаҡ кресло. Үргән кресло.*

**крокодил** *и.* Тропик һыуҙарҙа йәшәй торған ҡалын ҡабырсаҡ тиреле, кеҫәрткегә оҡшаған ҙур йыртҡыс йәнлек. *Крокодил аулау. Крокодил тиреһе.*

**кроссворд** *и.* Нумерлы сатраштарға тейешле һүҙҙәр табып яҙыуҙы талап иткән башватҡыс. *Кроссворд сисеү. Кроссворд төҙөү.*

**крыжовник** *и.* Күрәнһыу йәшел төҫтәге әскелтем емешле сәнскәкле ҡыуаҡ һәм шунын емеше. *Крыжовник ултыртыу. Крыжовник ҡайнатмаһы. Крыжовник компоты. Крыжовник йыйыу.*

**крәҫтиән** *и.* Ауылда тороп, ауыл хужалығы менән шөғөлләнгән кеше. *Колхозсы крәҫтиән. Крәҫтиән хужалығы.*

**куб** *и.* Һәр яғы квадрат рәүешендәге алты ҡырлы геометрик есем.

**кубик (кубигы)** *и.* Өс яғы (буйы, арҡырыһы, бейеклеге) бер сантиметрға тиң булған дәүмәл үлсәү берәмеге.

**кубометр** *и.* Өс яғы (буйы, арҡырыһы, бейеклеге) берәр метрға тиң булған дәүмәл, үлсәү берәмеге. *Ун кубометр ағас.*

**кукуруз** *и.* Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған сәкән башлы, йыуан, оҙон һабаҡлы баҫыу үҫемлеге һәм шуның орлоғо. *Кукуруз сәкәне. Кукуруз үҫтереү. Кукуруз майы. Кукуруз оно.*

**кулак (кулагы)** *и.* Ярлы кеше көсөнән файҙаланған бай крәҫтиән. *Кулактарға эшләү.*

**культура** *и.* **1.** *ҡар.* **мәҙәниәт. 2.** Ниндәй ҙә булһа эшмәкәрлектең үҫеш кимәле, камиллыҡ дәрәжәһе. *Телмәр культураһы. Игенселек культураһы. Хеҙмәт культураһы өсөн көрәш.* **3.** Сәсеп үҫтерә, игелә торған үҫемлек. *Бөртөклө культуралар. Майлы культуралар.* ♦ **Техник культура** сәнәғәткә сеймал бирә торған үҫемлек. **Физик культура** физик күнегеүҙәр ярҙамында тәнде сыныҡтырыу, тәрбиәләү шөғөлө.

**куплет** *и.* Шиғри әҫәрҙең рифма менән берләштерелгән бер нисә юллыҡ бер өлөшө. *Ике куплетлы йыр.*

**куртка** *и.* Бил тиңендәге тышҡы кейем. *Күн куртка. Куртка кейеү.*

**күбек (күбеге)** *и.* Шыйыҡлыҡтан ҡыуыҡланып, өрөлөп сыҡҡан нәмә; күперек. *Һабын күбеге. Һөт күбеге.* ♦ **Аҡ күбеккә батыу** бик ныҡ тирләү (атҡа ҡарата).

**күбә** *и.* Бер нисә күтәремдән ослап һалынған бесән өйөмө. *Бер күбә бесән. Күбә тарттырыу. Күбә һалыу.*

**күбәйеү (күбәй-)** *ҡ.* Һан йәки күләм яғынан артыу. *Дуҫтар күбәйҙе. Майҙанда халыҡ күбәйҙе.*

**күбәләк (күбәләге)** *и.* Төрлө төҫтәге йомшаҡ ҡуш ҡанатлы, елпелдәп осҡан бөжәк. *Аҡ күбәләк. Сыбар күбәләк. Һары күбәләк.*

**күбәләү (күбәлә-)** *ҡ.* Күбә итеп өйөү, күбәгә һалыу. *Бесән күбәләү.*

**күгелйем** *с.* Күк төҫкә тартым; күкшел. *Күгелйем зәңгәр. Күгелйем төтөн.*

**күгән** *и.* **1.** Ишек, ҡапҡа кеүек нәмәнең бер яғын ҡуҙғалырлыҡ итеп беркетеп торған тимер. *Ҡапҡа күгәне. Һандыҡ күгәне.* **2.** Йоҙаҡ элеп йоҙаҡлай торған атлама тимер.

**күгәреү (күгәр-)** *ҡ.* **1.** Күк төҫкә инеү. *Алыҫтан тауҙар күгәреп күренә.* **2.** Үҙ төҫөн юғалтып, төҫһөҙләнеү; буҙарыу. *Ҡулдары өшөп, күгәреп бөткән.* **3.** Ҡан

һауып, күк төҫкә инеү. *Тән күгәреү.* **4.** Еүешкә боҙолоп күк алыу. *Күгәргән икмәк.*

**күгәрсен** *и.* Күберәк күкшел, күк йәки аҡ төҫтәге, ҙур бөрләтәүле гөрләй торған ҡош. *Аҡ күгәрсен. Ала күгәрсен. Ҡыр күгәрсене.* ♦ **Күгәрсен күҙе** ҡыҙыл күҙле ваҡ ҡына зәңгәр сәскә.

**күгәүен** *и.* Инәһе кеше һәм хайуандар ҡаны менән туҡлана торған ялтыр ҙур күҙле, ике ҡанатлы, себендән ҙурыраҡ бөжәк. *Ваҡ күгәүен. Ҡара күгәүен. Эре күгәүен. Күгәүен тешләү.*

**күҙ** *и.* **1.** Донъяны күреү, ҡарау ағзаһы. *Ҙур күҙ. Зәңгәр күҙ. Ҡара күҙ. Күҙ ҡабағы. Күҙгә йәш тулыу. Күҙ йылтырау. Күҙҙе асыу. Күҙҙе йомоу.* **2.** Энәнең, мәрйендең еп үткәрә торған тишеге; күҙәү. *Ҙур күҙле мәрйен. Энә күҙе.* **3.** Бәйләм бәйләгәндә яһалған элмәк. *Шәлдең күҙе китте. Күҙе төштө.* **4.** Картуфтағы бөрө урыны. *Картуфтың күҙен алыу.* **5.** Яуым-төшөм тамсыһы. *Ҡар күҙе. Ямғыр күҙе.* ♦ **Күҙ алмаһы** күҙҙең бөтә тумалағы. **Күҙ ҡойроғо** күҙҙең сикә яҡ осо. **Дүрт күҙ менән көтөү** бик ныҡ түҙемһеҙләнеп көтөү. **[Ике] күҙ дүрт булыу** бик ныҡ ғәжәпләнеү, аптырау. **Күҙҙең ағын әйләндереп ҡарау** асыу менән ҡарау. **Күҙ алдына килтереү** хәтерҙә уятып, һүрәтләндереү. **Күҙ алдына килеү (баҫыу)** хәтергә, уйға килеп һүрәтләнеү. **Күҙ алдынан китмәү** иҫтән, хәтерҙән сыҡмау. **Күҙ аҫҡыһыҙ** бик көслө (буранға ҡарата). **Күҙ асып йомғансы** бик тиҙ, тиҙ арала. **Күҙ буяу** насарлыҡты йәшереп, тыштан яҡшы күрһәтеү. **Күҙгә аҡ-ҡара күренмәү** ниндәйҙер тойғо, кисерешкә бирелеп, бер ни күрмәү, иғтибарһыҙға әйләнеү. **Күҙгә салыныу** яҙа-йоҙа ғына, әҙ-мәҙ генә күренеп ҡалыу. **Күҙгә төртһәң, күренмәҫлек** бик ныҡ ҡараңғы. **Күҙ(ҙең) яуын алыу** бик матур, сағыу булыу. **Күҙен дә йоммай** оялып, тартынып тормай (һөйләү, әйтеү, алдау). **Күҙ ҡыҫыу** *кемгә* һыңар күҙҙе ҡапыл йомоп алып, нимәгәлер ишара яһау. **Күҙ менән ҡаш араһында** ҡарап торғанда, ҡапыл ғына. **Күҙ тейеү** халыҡ ырымынса, кешенең ҡарашынан ауырыу йәки берәй төрлө зарар күреү. **Күҙ һалыу** 1) ҡарау; 2) оҡшатыу, иғтибар итеү. **Күҙ шарҙай булыу** аптырауҙан, ҡурҡыуҙан һ. б. күҙ ҙур асылыу. **Күҙ эйәрмәй** *нимәгә* күреп өлгөрә алмау (етеҙ хәрәкәткә ҡарата).

**күҙгәнәк (күҙгәнәге)** *и.* Тәҙрә быялаһының бер бүлкәте; өлгө. *Ҙур күҙгәнәк. Күҙгәнәкте алыштырыу.*

**күҙелдерек (күҙелдереге)** *и.* Күҙҙе төрлө нәмәнән һаҡлау өсөн кейә торған тирә-яғы көплө күҙлек. *Мотоциклсы күҙелдереге.*

**күҙлек (күҙлеге)** *и.* **1.** Күреү һәләтен яҡшыртыу йәки күҙҙе ҡояштан һаҡлау өсөн кейә торған ике быяланан торған оптик прибор. *Ҡара күҙлек. Күҙлек кейеү. Күҙлек быялаһы. Күҙлек тирәсе.* **2.** *күсм. сөйл. клш.* Нимәгәлер

нигеҙләнгән ҡараш, уй. *Иҡтисади күҙлектән ҡарағанда. Уҡыусылар күҙлегенән сығып баһалау.*

**күҙәнәк (күҙәнәге)** *и.* Тере организм төҙөлөшөндәге протоплазма, ядро һәм көптән торған иң ябай берәмек. *Нервы күҙәнәктәре. Күҙәнәктең бүленеше.*

**күҙәтеү (күҙәт-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәнендер эш-хәрәкәтен иғтибар менән оҙаҡ итеп ҡарау. *Аквариумдағы балыҡтарҙы күҙәтеү.* **2.** Ниндәйҙер эш-хәлдең башҡарылыу кимәлен, эшләнешен, булыуын ҡарау, тикшереү. *Тәртипте күҙәтеү. Эште күҙәтеү.*

**күк**[1] *с.* **1.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе; фиолет менән зәңгәр араһындағы төҫ. *Аҡһыл күк. Ҡара күк. Күк буяу. Күк күлдәк.* **2.** Йәшел (үләнгә ҡарата). *Күк үлән ҡалҡты. Мал күк үләнгә туйынды.* **3.** Аҡ (атҡа ҡарата). *Күк бейә. Күк юрға.*

**күк**[2] **(күге)** *и.* Ерҙән көмбәҙләнеп күренгән һауа, ерҙән юғары тараф. *Аяҙ күк. Зәңгәр күк. Күк йөҙө. Күк күкрәү.* ♦ **Күккә күтәреп маҡтау** бик шаштырып маҡтау. **Күккә ашыу (олғашыу)** 1) бик юғары күтәрелеү; 2) сик-саманан ашыу. **Түбә күккә тейеү** бик ныҡ ҡыуаныу. **Танауҙы күккә сөйөү** ныҡ маһайыу, эреләнеү.

**күкйөн** *и.* Ҡорбан балыҡтар ғаиләһенә ҡараған йәшел һыртлы йоҡа ғына йылтыр йылға балығы. *Ҡармаҡҡа күкйөн эләкте.*

**күкрәк (күкрәге)** *и.* **1.** Кәүҙәнең муйындан ҡорһаҡҡа тиклемге алғы өлөшө. *Күкрәк һөйәге. Күкрәккә ҡыҫыу. Күкрәк ҡыуышлығы. Күкрәк ситлеге.* **2.** Ҡатын-ҡыҙҙың түше; имсәк. *Күкрәк һөтө.* **3.** (*йәки* **күкрәк ағасы**) Арбаның алғы яҫтығы менән артҡы күсәрен тоташтырған ике буй ағас. *Ҡыҫҡа күкрәкле арба. Арба күкрәге.*

**күкрәү (күкрә-)** *ҡ.* **1.** (*йәки* **күк күкрәү**) Болоттарҙың зарядынан көслө дөбөр-шатыр тауыш сығыу. *Ер һелкетеп күк күкрәне.* **2.** Хәл ҡылымдың **-п** формаһында төп ҡылымға эйәреп «бик шәп», «шаулап, гөрләп» тигән мәғәнәләрҙе белдерә. *Күкрәп сәскә атыу. Күкрәп үҫеү.*

**күкһел** *с.* Күк төҫкә тартым; күкшел. *Күкһел зәңгәр. Күкһел ебәк күлдәк.*

**күкәй** *и.* **1.** Иркәктәрҙең енси күҙәнәктәр эшләп сығара торған ҡуш биҙе. **2.** Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең (*мәҫ.*, гөбөргәйел, крокодилдың) бала сығарыу өсөн һалған йомро яралғыһы; йомортҡа. *Ҡаҙ күкәйе. Тауыҡ күкәйе. Күкәй бешереү. Күкәй һалыу.* **3.** Ҡайһы бер бөжәк, селәүсен кеүектәрҙең оҙонсараҡ ваҡ бөртөксәләрҙән торған яралғыһы. *Ҡырмыҫҡа күкәйе.*

**күл** *и.* Тәбиғи һыу ятҡылығы. *Аҡҡан күл. Тоҙло күл. Түңәрәк күл. Тәрән күл. Күл балығы. Күл ҡамышы.*

**күлдәк (күлдәге)** *и.* Йоҡа тауарҙан махсус өлгө менән тегелгән, бер ҡатлы өҫ кейеме. *Ебәк күлдәк. Сатин күлдәк. Балалар күлдәге. Ирҙәр күлдәге. Ҡатын-ҡыҙ күлдәге.* ♦ **Эске күлдәк** эстән кейә торған еңһеҙ күлдәк. **Ялан күлдәк** күлдәксән.

**күләгә** *и.* **1.** Ниҙеңдер ышығындағы ҡояш төшмәгән урын. *Ағас күләгәһе. Өй күләгәһе. Күләгәлә ултырыу.* **2.** Кеше йәки берәй нәмәнең ут, ҡояштан төшкән шәүләһе. *Кеше күләгәһе. Күләгә төшөү.*

**күләм** *и.* **1.** Ниҙең дә булһа буйы, арҡырыһы һәм бейеклеге менән үлсәнгән ҙурлығы. *Куб күләме. Күләм үлсәү.* **2.** Ниҙең дә булһа һан иҫәбе менән билдәләнгән ҙурлығы. *Белем күләме. Эш күләме.* **3.** Берәй эш-хәлдең таралыш киңлеге. *Ҙур күләмдә. Ил күләмендә.*

**күләүек (күләүеге)** *и.* **1.** Бәләкәй күл. *Күләүектә балыҡ тотоу.* **2.** Соҡорҙа йыйылып ятҡан һыу. *Күләүек хасил булыу. Ҙур күләүек.*

**күмер** *и.* **1.** Һүнгән ҡуҙ һәм шул рәүештәге яғыулыҡ. *Ҡайын күмере. Күмер һүндереү. Самауырға күмер һалыу.* **2.** Үҫемлек ҡалдыҡтарынан барлыҡҡа килгән ҡаты ҡаҙылма яғыулыҡ. *Таш күмер. Һоро күмер. Күмер сығарыу. Күмер яғыу.*

**күмеү (күм-)** *ҡ.* **1.** Соҡор ҡаҙып, уның эсенә һалынған нәмәне өҫтән ҡаплау. *Балсыҡҡа күмеү. Комға күмеү. Һалам менән күмеү.* **2.** Ер ҡуйынына ҡуйыу (мәйетте); ерләү. *Ҡәбергә күмеү.* **3.** Тупраҡты йомшартып, үҫемлектең төбөнә өйөү. *Картуф күмеү. Сөгөлдөр күмеү.*

**күм-күк** *с.* Бик ныҡ күк төҫ. *Күм-күк сәскә. Ирендәре күм-күк.*

**күмәгәйеү (күмәгәй-)** *ҡ.* Һан яғынан артыу; күбәйеү.

**күмәк** *с.* **1.** Һаны ҙур булған, күп. *Күмәк бала. Күмәк мал. Күмәк халыҡ.* **2.** Коллектив менән алып барыла, башҡарыла торған, күп кеше ҡатнашлығындағы. *Күмәк бейеү. Күмәк хужалыҡ. Күмәк эш.*

**күмәкләү (күмәклә-)** *ҡ.* Күп булып берләшеү, йыйылыу. *Күмәкләп йырлау. Күмәкләп эшкә тотоноу.*

**күмәс** *и.* Һөткә, майға баҫып, тәмләп бешерелгән ваҡ икмәк. *Аҡ күмәс. Сөсө күмәс. Күмәс бешереү.* ♦ **Булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө күмәс** берәй нәмәне бик ныҡ эҙләп тә таба алмағанда әйтелә.

**күн** *и.* Йөнөн екетеп иләгән, эшкәртелгән тире. *Ҡара күн. Һары күн. Яһалма күн. Күн бейәләй. Күн итек.*

**күндереү (күндер-)** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер өндәп ыңғайлатыу; ризалатыу. *Йырларға күндереү.* **2.** Нимәгәлер өйрәтеп ыңғайлатыу, күнектереү. *Тәртипкә күндереү. Эшкә күндереү.*

**күндәм** *с.* Кеше ыңғайлы, тыңлаулы. *Күндәм кеше. Күндәм мал.*

**күнегеү (күнек-)** *ҡ.* **1.** Билдәле берәй шартҡа, хәлгә өйрәнеп китеү. *Тауышҡа күнегеү. Яңы урынға күнегеү.* **2.** Оҙаҡ эшләү һөҙөмтәһендә берәй эш-хәрәкәткә өйрәнеү; оҫтарыу. Эшкә күнегеү.

**күнекмә** *и.* **1.** Даими эш барышында тупланған тәжрибә. *Хеҙмәт күнекмәһе алыу.* **2.** Эшләргә өйрәнеү өсөн башҡарылған эш. *Физик күнекмә үткәреү.* **3.** Үткән дәресте нығытыу өсөн бирелгән эш. *Күнекмә эшләү. Орфографик күнекмәләр.*

**күнеү (күн-)** *ҡ.* **1.** Кемдеңдер өгөтләүенә ыңғайлау; ризалашыу. *Әйткәнгә күнеү.* **2.** Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә өйрәнеп, күңелдән ризалашыу. *Шартҡа күнеү.*

**күнәк (күнәге)** *и.* **1.** Һыу йәки башҡа нәмә ташый торған ҡылыслы тәрән ҡалай һауыт; биҙрә. *Буш күнәк. Һөт күнәге. Икмәк күнәге.* **2.** Ағастан йәки тиренән ыҫлап эшләнгән шундай уҡ һауыт. *Ҡымыҙ күнәге.*

**күңел** *и.* **1.** Кешенең эске рухи донъяһы, хис-тойғоһо, уй-фекере. *Күңел байлығы. Күңел йыуанысы. Ҡаты күңел. Нескә күңел. Саф күңел. Күңел һағышы.* **2.** Күргән-белгәнде башта һаҡлау һәләте; иҫ, хәтер. *Күңелгә һалыу. Күңелдә һаҡлау.* **3.** Кешенең билдәле бер ваҡыттағы рухи хәле; кәйеф. *Көр күңелле кеше. Күтәренке күңел.* ♦ **Асыҡ күңелле** алсаҡ мөнәсәбәтле, илгәҙәк. **Йомшаҡ күңелле** кешене йәлләп, илап барыусан. **Күңел асылыу** кәйеф күтәрелеү, күңелләнеү. **Күңел асыу** 1) уйнап-көлөп, кәйеф-сафа ҡороу; 2) ауыр тойғонан (уйҙан) арынып, йыуаныу. **Күңел тулыу** илағы килеү. **Күңелен һүреү** булған тойғоно, ихласлыҡты бөтөрөү. **Киң күңелле** кешенән тарыҡмай торған. **Тар күңелле** кешенән тарыға торған, көнсөл.

**күңелле** *с.* **1.** Төрлө мәрәкә менән күңелде күтәрерҙәй; уйын-көлкөлө, ҡыҙыҡ. *Күңелле байрам. Күңелле кисә. Күңелле булыу.* **2.** Шат тәбиғәтле; уйынсыл. *Күңелле кеше. Күңелле тауыш.*

**күңелһеҙ** *с.* **1.** Ҡыҙыҡлы түгел, ялҡытҡыс бер төрлө. *Күңелһеҙ кисә. Күңелһеҙ тормош.* **2.** Күңеле бойоҡ; кәйефһеҙ. *Күңелһеҙ кеше. Күңелһеҙ тауыш.*

**күп** *р.* **1.** Һаны, күләме ғәҙәттәгенән артыҡ; ҙур һанда һәм күләмдә. *Күп итеп алыу. Күп уйлау. Күп һөйләү.* **2.** *с. мәғ.* Һан иҫәбе, күләме яғынан ишле; *киреһе* аҙ. *Күп кеше. Күп мал. Күп эш. Күп мәғәнәле һүҙ. Күп ҡырлы мөйөш.*

**күпер** *и.* Йылға, соҡор йәки башҡа бер ҡаршылыҡ аша сығыу өсөн һалынған ҡоролма. *Ағас күпер. Таш күпер. Күпер аҫты. Күпер һалыу.*

**күпереү (күпер-)** *ҡ.* **1.** Ваҡ-ваҡ ҡына булып ҡыуыҡланып өрөлөү (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Һабын яҡшы күперә.* **2.** Ҡабарып күтәрелеү (йомшаҡ нәмәгә ҡарата). *Күпереп ятҡан бесән. Күпереп торған мендәр. Сәстәре күпереп*

*тора.* **3.** *р. мәғ.* Эш-хәлдең дауамы, күләме билдәле йәки сикле булмағанда әйтелә. *Күпме йөрөһәң дә була. Күпме хыялландым. Баҡырҙы күпме ағартһаң да көмөш булмаҫ.* (Мәҡәл.)

**күпмөйөш** *и.* Мөйөштәре дүрттән артыҡ булған геометрик есем. *Төҙөк булмаған күпмөйөш. Күпмөйөштөң майҙанын табыу.*

**күпселек** *с.* Һан яғынан өҫтөнлөк иткән яҡ, өлөш. *Күпселек ҡайҙа – көс шунда.* (Мәҡәл.)

**күптән** *р.* **1.** Күп ваҡыттар элек; күпкә алда. *Күптән булған ваҡиға.* **2.** Әллә ҡасандан бирле. *Күптән бында мин. Күптән уйлап йөрөгән уй.*

**күргәҙмә** *и.* Тамаша өсөн ҡуйылған төрлө нәмәләр һәм шул нәмәләр торған урын. *Китап күргәҙмәһе. Күргәҙмә ойоштороу. Күргәҙмәлә ҡатнашыу.*

**күрек (күреге)** *и.* **1.** Утҡа һауа өрҙөрә торған ҡулайлама. *Тимерсе күреге. Күрек өрҙөрөү.* **2.** Гармундың һуҙылмалы һырлы өлөшө. *Гармун күреге. Күректе һуҙыу.*

**күренекле** *с.* **1.** Күҙгә ташланып, иғтибарҙы тартып торған. *Күренекле урын.* **2.** Халыҡҡа танылған; билдәле, мәшһүр. *Күренекле яҙыусы.*

**күренеү (күрен-)** *ҡ.* **1.** Күҙ алдына тура килеп, күҙгә эләгеү. *Асыҡ күренеү. Алыҫтан күренеү. Күренмәй йөрөү.* **2.** Һаулыҡты тикшертеү өсөн ҡаралыу. *Табипҡа күренеү.* **3.** Ҡарағанда беленеү, һиҙелеү, тойолоу. *Йәш булып күренеү. Уңғанлығы күренеп тора. Уҫал күренеү.*

**күренеш** *и.* **1.** Күҙ алдындағы тамаша. *Матур тәбиғәт күренеше.* **2.** Бөтә булған ҡиәфәт; төҫ-баш. *Тышҡы күренеш.* **3.** Донъяла, тәбиғәттә була торған төрлө хәл, ваҡиға, осраҡ һ. б. *Тарихи күренештәр. Химик күренеш.* **4.** Сәхнә әҫәренең бер бүлеге. *Дүрт күренештән торған пьеса.*

**күреү (күр-)** *ҡ.* **1.** Күҙ менән ҡабул итеү, күҙгә алыу. *Алыҫтан күреү. Яҡшы күреү. Насар күреү. Күрмәй ҡалыу.* **2.** Тамаша итеү, ҡарау. *Күргән фильм.* **3.** Баштан үткәреү; кисереү. *Ауырлыҡ күреү. Рәхәт күреү. Яҙғанды күреү. Ҡәҙер күреү.* **4.** Кеше йәки хәл-ваҡиғаға ҡарата мөнәсәбәтте белдереү (башҡа һүҙҙәр менән килгәндә). *Дуҫ күреү. Тиң күреү. Яҡын күреү. Яман күреү.* ♦ **Алдан күреү** ни булырын белеп тороу. **Күреп туймаҫлыҡ** бик һылыу. **Күрмәҫтәй булып** ҡомһоҙланып (ашау һ. б.). **Күрә алмау** кем йәки нимәгәлер ҡарата нәфрәт тойғоһо тотоу; ныҡ яратмау.

**көрәшеү (көрәш-)** *ҡ.* **1.** Бер-берендә күреү; осрашыу. *Көн һайын күрешеү. Һирәк күрешеү.* **2.** Ҡул биреп иҫәнләшеү. *Ике ҡуллап күрешеү.*

**күрк** *и.* Төҫ биреп, биҙәп торған яҡшы сифат; матурлыҡ. *Батыр егет – яу күрке, сәсән егет – дау күрке.* (Мәҡәл.)

**күркә** *и.* **1.** Тауыҡ һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған эре йорт ҡошо (ите өсөн үрсетелә). *Ата күркә. Инә күркә.* **2.** *күсм.* Маҡтансыҡ кешегә ҡарата әйтелә.

**күркәм** *с.* **1.** Күренешкә матур, күңелгә ятышлы. *Төҫкә-башҡа күркәм. Күркәм булыу. Күркәм итеү.* **2.** *күсм.* Яҡшы сифаттарға бай, матур, һоҡланғыс. *Күркәм тормош. Күркәм йәшәү.*

**күрһәтеү (күрһәт-)** *ҡ.* **1.** Иғтибарҙы йүнәлтеү, ҡаратыу өсөн кемгә йәки нимәгәлер тоҫҡау, ишара яһау. *Төртөп күрһәтеү. Урын күрһәтеү. Ымлап күрһәтеү.* **2.** Күрергә мөмкинлек биреү. *Күҙлек яҡшы күрһәтә.* **3.** Ниндәйҙер сифатта сағылдырыу. *Матур итеп күрһәтеү. Ологайтып күрһәтеү.* **4.** Нимәнеңдер барлығын йәки юҡлығын әйтеү, күрһәтмәләр биреү. *Кәмселекте күрһәтеү. Кешенең яҡшы яғын күрһәтеү. Тормошҡа юл күрһәтеү.* **5.** Урынға һайлау йәки ҡуйыу өсөн тәҡдим итеү. *Депутатлыҡҡа күрһәтеү. Рәйес итеп күрһәтеү.* **6.** Ниҙеңдер иҫәбен, күләмен сағылдырыу. *Барометр ямғырҙы күрһәтә. Сәғәт өстө күрһәтә.* ♦ **Алла (Хоҙай) күрһәтмәһен** берәй насар хәлдең булыуын теләмәгәндә әйтелә. **Көн күрһәтмәү** интектереү, яфалау.

**күрһәткес** *и.* **1.** Берәй эштең торошон күрһәткән мәғлүмәт, билдә. *Иҡтисади күрһәткестәр. Сифат күрһәткестәре.* **2.** Эш-хеҙмәттең барышын күрһәткән һан, һыҙыҡ. *Уртаса күрһәткес. Һауым күрһәткесе.*

**күрше** *и.* **1.** Урыны, ере эргәләш булған. *Күрше ауыл. Күрше ил. Күрше булыу.* **2.** *и. мәғ.* Эргәләш өйҙәге, эргәләш урындағы кеше. *Күрше менән татыу йәшәү. Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы.* (Мәҡәл.)

**күрә** *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге сифат йәки үткән заман сифат ҡылымдан һуң килеп, эш-хәлдең сәбәбен белдерә. *Ныҡҡа күрә бирешмәй. Ҡурҡҡанға күрә күренмәне.* **2.** Төбәү килештәге эйәлек ялғаулы исемдәрҙән һуң килеп, алдағы төшөнсәнең уға ярашлы булыуын күрһәтә. *Заманына күрә уҡымышлы. Силәгенә күрә ҡапҡасы.* (Әйтем.)

**күрәҙәсе** *и.* **1.** Алдан күрә белгән кеше. **2.** Кешенең тормошон, яҙмышын кәрт, ноҡот һалып йәки башҡа юл менән юрап әйтеүсе.

**күрән** *и.* Дымлы урындарҙа үҫә торған суҡ тамырлы бейек, ҡаты ҡыяҡ үлән. *Йәш күрән. Күрән сабыу.*

**күрәсәк (күрәсәге)** *и.* Алда булаһы яҙмыш, башҡа киләсәк хәл (ғәҙәттә, ҡыйынлыҡ килгәндә әйтелә). *Күрәсәкте күрмәй гүргә инеп булмай.* (Әйтем.) ♦ **Күрәсәктәр бар икән** ауыр хәлгә ҡалғанда әйтелә.

**күрәһең** *инш.* Берәй нәмәгә ҡарата фараз итеп билдәле бер фекергә килгәндә әйтелә. *Күрәһең, иғтибар итмәгән.*

**күс** *и.* **1.** Бал ҡортоноң бер инә эргәһендәге ғаиләһе. *Бәләкәй күс. Оло күс. Күс ҡуныу.* **2.** Көтөү булып китеп барған йәнлек, ҡош-ҡорт, халыҡ төркөмө. *Ҡаҙ күсе. Күсәрем һынды тип, күстән ҡалма.* (Әйтем.)

**күсер**[1] *и.* Кеше ултыртып, ат тотоп барыусы; ат тотоусы. *Күсер булыу. Күсерһеҙ йөрөү.*

**күсер**[2] *с.* Көҙөн йылы яҡҡа осоп китә торған; күсмә. *Күсер ҡоштар.*

**күсереү (күсер-)** *ҡ.* **1.** Бер урындан икенсе урынға шылдырыу. *Өҫтәлде күсереү. Гөлдө күсереп ултыртыу. Сәғәттең телен күсереү.* **2.** Донъяһы, мал-мөлкәте менән бер ерҙән алып икенсе ергә урынлаштырыу. *Икенсе ауылға күсереү. Яңы йортҡа күсереү.* **3.** Билдәләнгән ваҡытын үҙгәртеү. *Имтиханды күсереү. Йыйылышты күсереү.* **4.** Яҙыуҙа һүҙҙәге ижекте икенсе юлға сығарыу. *Күсергәндә ижекте бүлергә ярамай.* **5.** Бер ҡағыҙҙан икенсеһенә ҡарап яҙыу. *Китаптан күсереү. Мәсьәләне иптәшеңдән күсереп эшләү.*

**күсермә** *и.* Берәй яҙманың, һүрәттең, һыҙманың күсереп алынған данаһы; копия. *Ҡулъяҙманың күсермәһе. Һүрәттең күсермәһе.*

**күсеү (күс-)** *ҡ.* **1.** Бер урындан икенсе урынға китеү; урын алыштырыу. *Күсеп ултырыу. Йәйләүгә күсеү.* **2.** Ниндәйҙер ҡарашты, фекерҙе ҡабул итеү. *Мосолман диненә күсеү.* **3.** Берәүҙән икенсегә таралыу, бирелеү. *Ауырыуың миңә күсте. Телдән телгә күсеү. Донъяһы улына күсте.* **4.** Ниндәйҙер эш-хәрәкәтте тамамлап йәки ташлап, икенсене башлау, эш рәүешен үҙгәртеү. *Һүҙҙән эшкә күсеү. Һөжүмгә күсеү. Ултыраҡ тормошҡа күсеү. Яңы шарттарға күсеү.*

**күсмә** *с.* **1.** Күсеп йөрөгән, ултыраҡ булмаған. *Күсмә халыҡ. Күсмә тормош.* **2.** Көҙөн йылы яҡҡа осоп китә торған; күсер. *Күсмә ҡоштар.* **3.** Эшен даими бер урында алып бармаған. *Күсмә китапхана. Күсмә театр.*

**күстәнәс** *и.* Бүләк итеп алып килгән йәки ебәрелгән ашамлыҡ. *Күстәнәс ебәреү. Күстәнәскә саҡырыу.* ♦ **Ҡуян күстәнәсе** ҡырҙан кире урап ҡайтҡан ашамлыҡ.

**күсәр** *и.* **1.** Тәгәрмәс кейҙерә торған үҙәк. *Алғы күсәр. Артҡы күсәр.* **2.** *күсм.* Үҙ тирәһендә әйләнгән күк есемдәренең фараз ителгән үҙәге. ♦ **Донъя күсәре** йәшәүҙең, тормоштоң тотҡаһы, төп шарты.

**күҫәк (күҫәге)** *и.* Йыуан ауыр таяҡ.

**күтәрелеү (күтәрел-)** *ҡ.* **1.** Ҡуҙғалып үрә тороу; ҡалҡыу. *Күтәрелеп баҫыу. Урындан күтәрелеү.* **2.** Ниндәйҙер эшкә дәррәү ҡуҙғалып, берҙәм тотоноу. *Һөжүмгә күтәрелеү.* **3.** Ҡуҙғалып осоп китеү, һауаға менеү. *Самолет күтәрелде.* **4.** Юғарыға ҡалҡыу; менеү. *Тауға күтәрелеү.* **5.** Офоҡ өҫтөнә сығыу, ҡалҡыу. (Ай, Ҡояш һ. б. ҡарата.) *Ай күтәрелде.*

**күтәренке** *с.* **1.** Ғәҙәттәге кимәл-дәрәжәнән бер аҙ юғары. **2.** *күсм.* Дәртле, көслө уй-тойғо менән рухланған. *Күтәренке күңел. Күтәренке тауыш.*

**күтәреү (күтәр-)** *ҡ.* **1.** Ауырлығы булған нәмәне ҡулға, иңгә алыу; тотоу, йөкмәү. *Күтәреп алыу. Күтәреп йөрөү. Тоҡто күтәреү.* **2.** Үрә торғоҙоу; ҡалҡытыу. *Көрәшкә күтәреү. Өй күтәреү. Яға күтәреү.* **3.** Юғарыраҡ хәлгә килтереү. *Аяҡты күтәреү.* **4.** Һауаға ҡалҡытыу; туҙҙырыу. *Туҙан күтәреү.* **5.** *күсм.* Һөҙөмтәлерәк, юғарыраҡ хәлгә килтереү. *Игендең уңышын күтәреү. Белемде күтәреү. Кешене хеҙмәт күтәрә. Күңел күтәреү.* ♦ **Баш күтәрмәй** ял белмәй, туҡтауһыҙ.

**күтәрмә** *и.* Өйгә инә торған таҡта баҫҡыс. *Бейек күтәрмә.*

**кәбеҫтә** *и.* **1.** Япрағы ҡат-ҡат булып йомарланып үҫкән йәшелсә. *Кәбеҫтә орлоғо. Кәбеҫтә ултыртыу.* **2.** Шул йәшелсәнең ашай торған итләс япрағы. *Кәбеҫтә ашы. Тоҙло кәбеҫтә.* ♦ **Диңгеҙ кәбеҫтәһе** ашарға яраҡлы, шифалы диңгеҙ үләне.

**кәбәк (кәбәге)** *и.* **1.** Иген орлоғон ҡаплап торған осоҡ көп (һуҡҡанда, елгәргәндә, һурҙырғанда төшә). *Бойҙай кәбәге. Һоло кәбәге.* **2.** Бесән, һалам вағы. ♦ **Кәбәк баш** аҡылһыҙ, ахмаҡ.

**кәбән** *и.* Түңәрәк итеп, ослап һалған ҙур бесән йәки көлтә өйөмө. *Бесән кәбәне. Кәбән түбә. Кәбән ослау. Кәбән һалыу.*

**кәзә** *и.* Мамығы, һөтө һәм ите өсөн аҫрала торған мөгөҙлө, ҡыҫҡа ғына ҡойроҡло ваҡ мал. *Бәрән кәзә. Оло кәзә. Кәзә бәрәсе. Кәзә тәкәһе. Кәзә дебете. Кәзә ҡымыҙы.*

**кәзә-һарыҡ** *и. йыйн.* Кәзә һәм һарыҡтар; ваҡ мал. *Кәзә-һарыҡ аҫрау.*

**кәйелеү (кәйел-)** *ҡ.* **1.** Ҡыялатып, урап килеп боролоу (күберәк осоуға ҡарата). *Кәйелеп осоу.* **2.** Боролғанда юлдан сығып, һарҡыуға тайып төшөү. *Саңғы кәйелә. Сана кәйелеп китте.*

**кәйеф** *и.* **1.** Күңел торошо, эске рухи хәл. *Яҡшы кәйеф. Кәйеф боҙолоу. Кәйеф насар булыу.* **2.** Күңел күтәренкелеге; ҡәнәғәтлек. *Кәйеф булыу. Кәйеф килеү. Кәйеф китеү.*

**кәкре** *с.* Бер яҡҡа бөгөлгән, тура булмаған, төҙ түгел. *Кәкре ағас. Кәкре таяҡ. Кәкре булыу.*

**кәкрәйеү (кәкрәй-)** *ҡ.* Кәкрегә әйләнеү, кәкре булыу. *Кәкрәйгән тимер. Кәкрәйеп йөрөү.*

**кәкүк (кәкүге)** *и.* Ҡанат-ҡойроғо оҙон, күкһел һыртлы, сыбар бауырлы урман ҡошо. *Кәкүк тауышы. Кәкүк саҡыра.*

**кәләш** *и.* **1.** Әйттерелгән ҡыҙ (кейәүенә ҡарата). *Кәләште оҙатып алыу. Кәләш алыу. Кәләш әйттереү.* **2.** Ҡатын (тәүге өйләнешкән йылдарҙа). *Кәләш менән татыу йәшәү.*

**кәм** *р.* **1.** Тейешле күләмдән, һандан әҙ; *киреһе* артыҡ. *Кәм булыу. Кәм сығыу.* **2.** Булмышы, сифаты яғынан насар; түбән. *Кәм күреү. Кәмгә һанау.* ♦ **Кәм тигәндә** иң әҙе; әҙ тигәндә, кәмендә. **Кәм һөйләм** ҡайһы киҫәге төшөп ҡалғаны аңлашылып торған ябай һөйләм.

**кәметеү (кәмет-)** *ҡ.* Күләмен, һанын әҙәйтеү; *киреһе* арттырыу. *Тиҙлекте кәметеү. Хаҡты кәметеү.*

**кәмеү (кәме-)** *ҡ.* Күләме, һаны әҙәйеү; *киреһе* артыу. *Көс кәмей. Һыу кәмей.*

**кәмселек (кәмселеге)** *и.* Тейешенсә булмаған күренеш, етешһеҙ яҡ; етешһеҙлек. *Кәмселектәрҙе бөтөрөү. Кәмселек булыу.*

**кәмә** *и.* Һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөү йәки һыу аша сығыу өсөн эсе соҡор итеп эшләнгән ҡорамал. *Елкәнле кәмә. Ишкәкле кәмә. Моторлы кәмә. Резина кәмә.* ♦ **Ике кәмә ҡойроғон тотоу** файҙа эҙләп, бер үк ваҡытта ике эш артынан ҡыуыу. **Кәмә ҡомға терәлеү** ауыр хәлдә ҡалыу. **Кәмәгә һыу кереү** ҡыйын, хәүефле хәлгә төшөү. **Тишек кәмәгә ултыртыу** һемәйтеү, отоу.

**кәнфит** *и.* Емеш һуты менән шәкәр йәки шоколадты ҡайнатып, ваҡ-ваҡ төрлө формаларҙа эшләгән татлы аҙыҡ. *Баллы кәнфит. Ҡағыҙлы кәнфит. Кәнфит ашау.*

**кәңәш** *и.* **1.** Нисек итергә өйрәтеп әйткән һүҙ. *Кәңәш биреү. Кәңәш һорау. Кешенең кәңәшен тотоу.* **2.** Нисек итергә үҙ-ара фекер алышыу рәүешендәге әңгәмә. *Кәңәш ҡороу. Кәңәшкә йыйылыу. Ике кәңәш бер булһа, илле егет йөҙ булыр.* (Мәҡәл.)

**кәңәшләшеү (кәңәшләш-)** *ҡ.* Кәңәш итешеү, һөйләшеү. *Ҡарттар менән кәңәшләшеү.*

**кәңәшмә** *и.* Һөйләшеү, кәңәшләшеү өсөн саҡырылған йыйылыш. *Уҡытыусылар кәңәшмәһе. Кәңәшмә үткәреү. Кәңәшмәлә ҡатнашыу.*

**кәңәшсе** *и.* **1.** Кәңәш биреүсе. *Кәңәшсең оло кеше булһын.* **2.** Эште аңлатыуға, юл-сараһын күрһәтеүгә бәйле вазифа һәм шул вазифаны үтәгән кеше. *Хәрби кәңәшсе. Илселек кәңәшсеһе. Кәңәшсе-тәрбиәсе.*

**кәпәс** *и.* Ирҙәрҙең йылы баш кейеме; бүрек. *Ҡуян кәпәс. Кәпәс кейеү. Кәпәс тектереү.*

**кәрзин** *и.* Тал сыбығы, ҡамыш һ. б. үреп яһаған һауыт. *Кәрзин үреү. Кәрзингә еләк йыйыу.*

**кәрниз** *и.* **1.** Йорттоң ҡыйығы аҫтынан буйлатып, киртләсләп ҡаҡ таҡта; ҡырлан. *Киртләсле кәрниз. Өй кәрнизе.* **2.** Мейестең иң өҫкө киртл өлөшө.

**кәрт** *и.* Дүрт төрлө һүрәт йәки тамғалар төшөрөлгән ҡатырға киҫәге торған уйын әйбере (ҡомарлы уйын уйнағанда, күрәҙәлек иткәндә ҡу нылa). *Кәрт таратыу. Кәрт уйнау. Кәрт һалыу.*

**кәртә** *и.* **1.** Ҡырҡып боталған нәҙек оҙон ағас; һайғау. *Оҙон кәртә. Ҡ кәртәһе. Кәртә ҡырҡыу.* **2.** Шул ағастан буй-буй тотоп яһалған аралы ҡо *Баҡса кәртәһе. Кәртә тотоу.* **3.** *күсм.* Эш-тормоштағы ҡаршылыҡ, тот лыҡ. *Кәртә ҡуйыу. Беҙҙе айырған кәртәләр емерелде.* **4.** Мал торлағы; ҡ *Кәртә башы. Кәртә эсе. Малды кәртәгә ябыу.* ♦ **Ялан кәртә** мал ябыр ө уратып алынған башы асыҡ урын.

**кәрәгеү (кәрәк-)** *ҡ.* Кәрәк булыу. *Кәрәккән нәмә. Кәрәгеп ҡуйыу.*

**кәрәҙ** *и.* Бал ҡорто менән иңкештең күҙәнәкле балауыҙы. *Бал кә Табаҡлы кәрәҙ.*

**кәрәк** *мөн.* **1.** Талап ителеү, мәжбүрилек, тейешлек төшөнсәһен белд *Кәрәк булыу. Кәрәк түгел. Барырға кәрәк. Белергә кәрәк. Кәрәк икән.* **2.** *с.* Талап ителгән, мотлаҡ, мәжбүри булған. *Кәрәк кеше. Кәрәк нәмә.* ♦ **Бул (булһа) кәрәк** фаразды белдергәндә әйтелә. **Йәнеңә ни кәрәк** байлыҡ, етеш те белдергәндә әйтелә. **Кәрәген биреү** 1) тейешле язаһын күрһәтеү; 2) сама аштырыу, ҡоһорон ҡайтарыу.

**кәрәкле** *с.* Кәрәк булған. *Кәрәкле нәмә.*

**кәрәк-яраҡ (кәрәк-ярағы)** *и. йыйн.* Төрлө кәрәк нәмә. *Кәрәк-яраҡтар а*

**кәрәсин** *и.* Нефттән алынған шыйыҡ яғыулыҡ. *Кәрәсин шәме. Кәр һибеү.*

**кәсеп (кәсебе)** *и.* **1.** Тормош сығанағы булған шөғөл; эш. *Төп кәсеп. Ур кәсебе.* **2.** Файҙалы, аҡсалы өҫтәлмә шөғөл. *Кәсепкә йөрөү.*

**кәтүк (кәтүге)** *и.* Баш-баштары түңәрәк, эсе ҡыуыш булған ҡыҫҡа ғ үҙәк рәүешендәге еп, сым һ. б. нәмәләрҙе ураy өсөн ҡулланылған ҡулайл сүре. *Епте кәтүккә урау. Кәтүкле еп.*

**кәүҙә** *и.* **1.** Йән эйәләренең баш-аяғынан башҡа төп тән өлөшө. *К кәүҙәһе.* **2.** Йән эйәләренең бөтә буйы; буй-һын. *Кәүҙәне тура тотоу.*

**кәүек** *с.* **1.** Тос түгел, еңел, осоҡ. *Кәүек бойҙай. Кәүек бесән.* **2.** Муртлан *Кәүек ағас.*

**кәфен** *и.* Мәйетте төрөп ерләй торған аҡ туҡыма. *Кәфенгә төрөү.*

**кәшмәк (кәшмәге)** *и.* Бер нисә бүрәнәнән бәйләнгән бәләкәй һал. *Кәшмәк бәйләү. Кәшмәк менән ағыу.*

**кәштә** *и.* Төрлө нәмә һалыу өсөн һикәлтәләп эшләнгән буй таҡта. *Китап кәштәһе. Һауыт-һаба кәштәһе.*

**кәшәнә** *и.* Ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған ҡоролма йәки уны уратып алған таш ҡойма. *Хөсәйенбәк кәшәнәһе. Кәшәнә ҡороу.*

# Ҡ

**ҡабаҡ**[1] **(ҡабағы)** *и.* **1.** Һөҙәкләнеп, үлән, ағас үҫеп бөткән яр; ҡашлаҡ. *Ҡабаҡ аҫты. Ҡабаҡ башы. Ҡабаҡҡа менеү.* **2.** (*йәки* **күҙ ҡабағы**). Күҙҙең ҡаштан түбәнге ҡабарып торған өлөшө. *Ҡабаҡты күтәреп ҡарау.* ♦ **Ҡабаҡ аҫтынан (ҡарау)** һөҙөп, асыу менән (ҡарау).

**ҡабаҡ**[2] *и.* Һары сәскәле эре йәшелсә биргән баҡса үҫемлеге. *Ҡабаҡ буҡкаһы. Ҡабаҡ бәлеше. Ҡабаҡ ултыртыу. Ашҡабаҡ.*

**ҡабалан** *с.* **1.** Йәһәт кенә; ашығыс. *Ҡабалан яуап. Ҡабалан кейенеү.* **2.** Ашығып эшләгән. *Ҡабалан кеше.*

**ҡабаланыу (ҡабалан-)** *ҡ.* Тиҙ-тиҙ, йәһәт эш итеү; ашығыу. *Ҡайтырға ҡабаланыу. Эшкә ҡабаланыу.*

**ҡабан (ҡабан сусҡаһы)** *и.* Ҡырағай сусҡа. *Ата ҡабан. Инә ҡабан. Ҡабан атыу.*

**ҡабартма** *и.* Әсе ҡамырҙан йәйеп, табала бешерелгән икмәк. *Ҡабартма бешереү.*

**ҡабарынҡы** *с.* Ҡабарып, ҡалҡып торған. *Ҡабарынҡы сәс. Ҡабарынҡы маңлай.*

**ҡабарыу (ҡабар-)** *ҡ.* **1.** Ҡапайып, ҡалҡып тороу. *Ҡабарып ятҡан бесән. Сәсе ҡабарып тора. Ҡул ҡабарыу.* **2.** Әсеп артыу, күтәрелеү (ҡамыр һ. б. тураһында). *Ҡамыр ҡабарып сыҡҡан.*

**ҡабат**[1] *и.* Тапҡыр, мәртәбә, ҡат. *Бер ҡабат. Күп ҡабат. Әллә нисә ҡабат әйтеү.*

**ҡабат**[2] *р.* Икенсегә, янынан, тағы. *Ҡабат килеү. Ҡабат эшләү. Ҡабат яҙыу. Ҡабат әйләнеп ҡайтмау.*

**ҡабатландыҡ (ҡабатландығы)** *и.* Ике һанды бер-береһенә ҡабатлағандан сыҡҡан һөҙөмтә. *Ҡабатландыҡты табыу.*

**ҡабатланыусы** *и.* Икенсе һандарға ҡабатланған һан.

**ҡабатлау (ҡабатла-)** *ҡ.* **1.** Икенсе тапҡыр башҡарыу. *Ҡабатлап әйтеү. Хатаны ҡабатлау. Һорауҙы ҡабатлау.* **2.** Хәтерҙә нығытыу өсөн ҡат-ҡат уҡыу, әйтеү һ. б. *Үткәнде ҡабатлау. Шиғырҙы көнөлдән ҡабатлау.* **3.** Бер һанды икенсе бер һанға арттырыу. *Ҡабатлау ғәмәле. Ҡабатлау таблицаһы (йәҙүәле). Икене икегә ҡабатлау.*

**ҡабатлаусы** *и.* Билдәле бер һанды нисә тапҡыр арттырырға кәрәклеген күрһәткән һан. *Өҫтәлмә ҡабатлаусы.*

**ҡабул: ҡабул булыу** тормошҡа ашыу, үтәлеү. *Теләк ҡабул булыу.* **Ҡабул итеү** 1) үҙ ҡарамағына, үҙ ҡулына күсереү; 2) берәй ойошмаға, уҡыу йортона һ. б. алыныу.

**ҡабыҡ (ҡабығы)** *и.* Үҫемлек, емеш һ. б. тыштан ҡаплап торған көбө. *Ағас ҡабығы. Йомортҡа ҡабығы. Картуф ҡабығы. Ҡабығын әрсеү.*

**ҡабым** *и.* Бер ҡабырлыҡ аҙыҡ киҫәге. *Бер ҡабым икмәк.*

**ҡабырға** *и.* Умыртҡа һөйәгенән күкрәккә дуғаланып тоташҡан тар ялпаҡ һөйәк. *Уң ҡабырғалар. Һул ҡабырғалар. Ҡабырға һөйәге.* ♦ **Ҡабырғаны һанау** туҡмау, дөмбәҫләү.

**ҡабырсаҡ (ҡабырсағы)** *и.* **1.** Әкәм-төкәмдәрҙең ҡаты ҡабығы. *Ҡусҡар ҡабырсағы.* **2.** Ике яҡҡа асылмалы таш кеүек ҡаты ҡабыҡлы әкәм-төкәм. *Диңгеҙ ҡабырсағы.*

**ҡабыу**[1] **(ҡап-)** *ҡ.* **1.** Ауыҙға алыу. *Икмәк ҡабыу. Өрөп ҡабыу. Ҡабып ебәреү.* **2.** Ҡармаҡҡа, ауға һ. б. эләгеү, тотолоу. *Балыҡ яҡшы ҡаба. Тоҙаҡҡа ҡабыу.*

**ҡабыу**[2] **(ҡап-)** *ҡ.* **1.** Янып китеү (утҡа ҡарата). *Һарайға ут ҡапты.* **2.** Тәьҫир итеп ауырттырыу; тейеү (башҡа ҡарата). *Башҡа эҫе ҡабыу.*

**ҡағиҙә** *и.* Төрлө күренеш, хәл, кешеләр һ. б. арҡаһындағы мөнәсәбәтте, законлылыҡты билдәләгән тәртип; ҡанун. *Грамматик ҡағиҙәләр. Математик ҡағиҙәләр. Урам хәрәкәте ҡағиҙәләре. Ҡағиҙәне боҙоу. Ҡағиҙәне тотоу.*

**ҡағыҙ** *и.* **1.** Яҙыу, китап баҫыу һ. б. өсөн ҡулланылған ағас, һалам кеүек нәмәләрҙән йоҡа итеп яһалған материал. *Аҡ ҡағыҙ. Төҫлө ҡағыҙ. Гәзит ҡағыҙы. Бер бит ҡағыҙ. Ҡағыҙға төрөү. Ҡағыҙ фабрикаһы.* **2.** Яҙылған яҙыу, документ. *Кәрәкле ҡағыҙ. Саҡырыу ҡағыҙы. Ҡағыҙға ҡул ҡуйыу.* ♦ **Ҡағыҙ аҡса** хөкүмәт тарафынан ҡағыҙға төшөрөп сығарылған тауар әйләнешендәге аҡса билдәһе. **Ҡара ҡағыҙ** һуғышта ҡорбан булғанды белдергән яҙыу (ғәҙәттә, ҡара һыҙыҡлы булған).

**ҡағыу (ҡаҡ-)** *ҡ.* **1.** Осло нәмәне һуғып индереү. *Ҡаҙаҡ ҡағыу. Сүкеш менән ҡағыу.* **2.** Ҡайтара һуғыу, ҡаҡлыҡтырыу. *Тупты ҡағыу.* **3.** Һуҡҡылап шаҡыл-

датыу. *Ҡапҡа ҡағыу. Барабан ҡағыу.* **4.** Һелккеләп, һуҡҡылап саң-туҙандан һ. б. таҙартыу. *Өҫ-башты ҡағыу. Келәмде ҡағыу.* **5.** Елпеү хәрәкәттәре яһау (ҡош ҡанаты тураһында). *Бөркөт ҡанат ҡаға.* ♦ **Йөрәк ҡағыу** елкенеү, ярһыу. **Йүкә сөй (шына) ҡағыу** юрамал осондорорға тырышып маҡтау. **Керпек (тә) ҡаҡмау** бөтөнләй йоҡламау, серем дә итмәү.

**ҡаҙ** *и.* Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған оҙон моронло эре һыу ҡошо һәм шуның ите. *Ата ҡаҙ. Инә ҡаҙ. Өй ҡаҙы. Ҡыр ҡаҙы. Ҡаҙ бәпкәһе. Ҡаҙ ите. Ҡаҙ майы. Ҡаҙ мамығы. Бешкән ҡаҙ. Ҡаҡлаған ҡаҙ.* ♦ **Ҡаҙ өмәһе** көҙөн күпләп ҡаҙ һуйған мәлдә ҡаҙ мамығын йолҡоу, итен тәрбиәләү өсөн үткәрелгән уйын-көлкөлө өмә.

**ҡаҙаҡ (ҡаҙағы)** *и.* Бик эре тимер сөй. *Ҡаҙаҡ ҡағыу. Ҡаҙаҡ башы.*

**ҡаҙалыу (ҡаҙал-)** *ҡ.* **1.** Осло нәмәгә нык итеп төртөлөү, тишеп инеү; сәнселеү. *Ҡулға энә ҡаҙалды. Аяҡҡа шырау ҡаҙалған.* **2.** Тәнгә йәбешеү, морон менән тишеү (бөжәктәргә ҡарата). *Талпан ҡаҙалған.*

**ҡаҙан** *и.* **1.** Аҫтына ут яғып, аш-һыу әҙерләй торған йәйенке ауыҙлы, йомро төплө һауыт. *Бәләкәй ҡаҙан. Оло ҡаҙан. Ҡолаҡлы ҡаҙан. Ҡаҙан ҡылысы.* **2.** Һыуҙы парға әйләндереү өсөн хеҙмәт иткән ябыҡ һауыт. *Паровоз ҡаҙаны.*

**ҡаҙаныш** *и.* Хеҙмәт, тырышлыҡ менән яулап алынған уңыш. *Мәҙәниәт ҡаҙанышы. Фәндәге ҡаҙаныштар. Ҡаҙанышҡа өлгәшеү.*

**ҡаҙау**[1] **(ҡаҙ-)** *ҡ.* **1.** Осло, үткер нәмәне төртөп индереү; сәнсеү. *Энәне ҡаҙау. Ҡорт ҡаяуын ҡаҙаны.* **2.** Нимәнелер батырып ултыртыу, сәнсеп ҡуйыу. *Флагты тау башына ҡаҙау. Түшкә миҙал ҡаҙау.*

**ҡаҙау**[2] *и.* Ваҡ тимер сөй. *Ҡаҙау ҡағыу. Ҡаҙауға элеү.*

**ҡаҙна** *и.* Дәүләттең бөтә байлығы; дәүләт милке. *Ҡаҙна аҡсаһы. Ҡаҙна милке. Ҡаҙна иҫәбенә уҡыу.*

**ҡаҙы** *и.* Йылҡы малының ҡабырға, ҡорһаҡ ите өҫтөнә үргән майы һәм шул майҙы эсәккә тултырып яһалған ашамлыҡ. *Ҡаҙы яһау. Ҡаҙы бешереү.*

**ҡаҙыҡ (ҡаҙығы)** *и.* Ослап ергә ҡаҡҡан нәҙек бағана. *Имән ҡаҙыҡ. Ҡаҙыҡ ҡағыу. Ҡаҙыҡ ослау.* ♦ **Ҡаҡҡан ҡаҙыҡ кеүек (тороу)** һынын туп-тура ғына тотҡан, эйелергә иренгән кешегә ҡарата асыу менән әйтелә.

**ҡаҙылдыҡ (ҡаҙылдығы)** *и.* Ер аҫтынан табылған байлыҡ. *Файҙалы ҡаҙылдыҡтар.*

**ҡаҙылма** *с.* Ер аҫтынан табыла торған. *Ҡаҙылма байлыҡтар.*

**ҡаҙыу (ҡаҙ-)** *ҡ.* **1.** Ерҙең өҫтөн аҡтарып өңөү; соҡоу. *Тәрән ҡаҙыу. Һай ҡаҙыу. Баҙ ҡаҙыу. Соҡор ҡаҙыу.* **2.** Ер аҫтынан соҡоп алыу, өҫкә сығарыу. *Селәүсен ҡаҙыу. Картуф ҡаҙыу.*

**ҡаза** *и.* Мал-мөлкәтенә зыян, кешегә ҡайғы килтергән бәлә. *Ҡаза күреү. Ҡазаға ҡалыу.*

**ҡайғы** *и.* **1.** Күңелде ғазаплағыс, йәнде әрнеткес ауыр тойғо, хәл-ваҡиға, хәсрәт. *Ауыр ҡайғы. Ҡаты ҡайғы. Башҡа ҡайғы төшөү. Ҡайғыны уртаҡлашыу.* **2.** Хәстәрҙән тыуған тынысһыҙ уй; хәстәрлек, мәшәҡәт. *Эш ҡайғыһы.*

**ҡайғырыу (ҡайғыр-)** *ҡ.* **1.** Ҡайғы-хәсрәт кисереү; хәсрәтләнеү. *Ҡайғырып көн үткәреү. Ныҡ ҡайғырыу.* **2.** Нимәләр, кемдер тураһында борсолоу. *Бала өсөн ҡайғырыу. Юҡҡа ҡайғырыу.*

**ҡайҙа** *a.* Кемдең, ниҙең урынын туранан-тура йәки ситләтеп һорағанды белдерә. *Ат ҡайҙа? Юл ҡайҙа? Ҡайҙа бараһың? Ҡайҙа йәшәгәнен беләһеңме? Ҡайҙа йөрөй икән?*

**ҡайҙан** *a.* Кемдең, нимәнең ни ерҙән, ҡайһы урындан икәнде һорағанда ҡулланыла. *Ҡайҙан килдегеҙ?*

**ҡаймаҡ (ҡаймағы)** *и.* Һөт өҫтөнә ултырған йәки һөттән айырып алынған ашамлыҡ. *Йылы ҡаймаҡ. Ҡуйы ҡаймаҡ. Шыйыҡ ҡаймаҡ. Ҡаймаҡ ашау.*

**ҡайнаға** *и.* Ирҙең ағаһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың ағаһы (иренә ҡарата). *Оло ҡайнаға. Бәләкәй ҡайнаға.*

**ҡайнар** *с.* **1.** Ҡайнап һыуымаған; эҫе. *Ҡайнар аш. Ҡайнар сәй.* **2.** Бик ҡыҙыу; эҫе. *Ҡайнар ҡояш.* **3.** *күсм.* Тәрән тойғоло, хискә бай. *Ҡайнар сәләм. Ҡайнар хис.*

**ҡайнатма** *и.* Емеш-еләктән шәкәр ҡушып ҡайнатылған тәм-том. *Ҡарағат ҡайнатмаһы. Ҡайнатма әҙерләү.*

**ҡайнатыу (ҡайнат-)** *ҡ.* **1.** Ҡайнар хәлгә еткереү. *Сәй ҡайнатыу. Һыу ҡайнатыу.* **2.** Бешереп, эҫелә тотоп әҙерләү. *Ҡорот ҡайнатыу. Дегет ҡайнатыу. Һабын ҡайнатыу.*

**ҡайнау (ҡайна-)** *ҡ.* Юғары эҫелек тәьҫирендә пар сығарып боғорлау. *Һыу ҡайнай. Ҡайнап сығыу. Самауыр ҡайнай. Ит ҡайнай.*

**ҡайраҡ (ҡайрағы)** *и.* Ҡорал-ҡорамалды үткерләй торған махсус таш. *Ҡайраҡ ташы. Ҡайраҡ менән ҡайрау.*

**ҡайрау (ҡайра-)** *ҡ.* Ҡайраҡ менән үткерләү. *Бысаҡ ҡайрау. Ҡылыс ҡайрау.*

**ҡайсы** *и.* Ҡара-ҡаршы ике ҡырҡҡыслы ҡорал. *Үткер ҡайсы. Ҡайсы менән ҡырҡыу.*

**ҡайтыу (ҡайт-)** *ҡ.* **1.** Торған, булған ергә кире килеү. *Ауылға ҡайтыу. Өйгә ҡайтыу. Машина менән ҡайтыу. Каникулға ҡайтыу. Ҡасып ҡайтыу.* **2.** Тәүге хәл-торошҡа яҡынан килеү. *Аҡылға ҡайтыу. Йылға ҡайта башланы.*

**ҡайтышлай** *р.* Ҡайтып барған саҡта, ҡайтҡан юл ыңғайында. *Ҡайтышлай инеп сығыу. Мәсеттән ҡайтышлай.*

**ҡайһы** *а.* Күптең араһынан береһен айырып белеү өсөн исем алдында ҡулланыла. *Ҡайһы йылда? Ҡайһы юлдан киттеләр?* ♦ **Әллә ҡайһы** ниндәйҙер билдәһеҙ.

**ҡайын** *и.* Беше аҡ туҙ ҡабыҡлы, эре япраҡлы ағас. *Аҡ ҡайын. Ҡуш ҡайын. Ҡайын бөрөһө. Ҡайын туҙы. Ҡайын утын. Ҡайын урманы. Ҡайын һыуы.*

**ҡайынлыҡ (ҡайынлығы)** *и.* Ҡайындар үҫкән урын, ҡайын урманы. *Ҡайынлыҡта еләк йыйыу. Ҡайынлыҡ аша үтеү.*

**ҡайыр** *и.* Ағастың һыҙырып алынған ҡаты ҡабығы. *Ҡайыр һыҙырыу.*

**ҡайыш** *и.* **1.** Иләнгән сей күн һәм шул күндән тегелгән бау. *Яҫы ҡайыш. Салбар ҡайышы. Саңғы ҡайышы. Һалдат ҡайышы. Ҡайыш менән быуыу.* **2.** *тех.* Машинаның, механизмдың төрлө өлөшөн әйләндерә торған остары ҡуша тегеүле киң таҫма йәки бау. *Комбайн ҡайышы.*

**ҡаҡ[1] (ҡағы)** *и.* Иҙеп, таҡтаға йәйеп киптерелгән емеш-еләк. *Алма ҡағы. Еләк ҡағы. Ҡарағат ҡағы. Ҡаҡ ҡойоу. Ҡаҡ менән сәй эсеү.*

**ҡаҡ[2] (ҡаҡ-ҡаҡ)** *оҡш.* Ҡаҙ тауышын белдергән һүҙ. *«Ҡаҡ-ҡаҡ», ти ҡаҙҙар.*

**ҡаҡлау (ҡаҡла-)** *ҡ.* Ҡояшҡа, елгә киптереү (итте, балыҡты һ. б.).

**ҡаҡса** *с.* Ит ҡунмаған, ябыҡ. *Ҡаҡса кеше. Ҡаҡса яңаҡ. Ҡаҡса булыу.*

**ҡаҡшатыу (ҡаҡшат-)** *ҡ.* **1.** Бушаҡ хәлгә килтереү. *Ишекте ҡаҡшатыу.* **2.** *күсм.* Эске ныҡлығын боҙоу. *Дуҫлыҡты ҡаҡшатыу.* **3.** *күсм.* Ауыр кисереш, төрлө ыҙа һ. б. менән йонсотоу, һаулыҡты алыу. *Ауыр эш ҡаҡшатты. Сәләмәтлекте ҡаҡшатыу.*

**ҡаҡшау (ҡаҡша-)** *ҡ.* **1.** Ныҡлығы бөтөп, һелкенеп тороу, бушау. *Арба ҡаҡшаған. Теш ҡаҡшаны.* **2.** *күсм.* Эске ныҡлығын юғалтыу, боҙолоу. *Дуҫлыҡтары ҡаҡшаны.* **3.** *күсм.* Ауыр кисереш, төрлө ыҙа һ. б. ныҡ йонсоу, хәлһеҙләнеү, һаулыҡ бөтөү. *Ҡайғынан ҡаҡшау. Нервы ҡаҡшаған.*

**ҡаҡы** *и.* Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған йыуан һабаҡлы, киртләс япраҡлы, һары сәскәле, әскелт тәмле ашай торған үҫемлек. *Ҡаҡы йыйыу. Ҡаҡы ашау.*

**ҡала** *и.* Сәнәғәт һәм мәҙәниәт үҙәге булған, күп халыҡ йәшәгән урын. *Ҙур ҡала. Яңы ҡала. Баш ҡала. Ҡала халҡы. Ҡала урамы. Өфө ҡалаһы.*

**ҡала-ара** *с.* Ҡалалар араһындағы, ҡала менән ҡала бәйләнешен тәьмин иткән. *Ҡала-ара автобус. Ҡала-ара телефон станцияһы.*

**ҡалай** *и.* Табаҡлы йоҡа тимер һәм шул тимерҙән эшләнгән нәмә. *Ҡалай башлы йорт. Ҡыйыҡты ҡалай менән ябыу. Сәй ҡалайы.*

**ҡалаҡ (ҡалағы)** *и.* Башы соҡор итеп эшләнгән һоҫоп алыу, ашау ҡоралы. *Ағас ҡалаҡ. Көмөш ҡалаҡ. Тимер ҡалаҡ. Ҡалаҡ менән ашау.* ♦ **Бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ** иҫ киткес матур (күберәк ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә).

**ҡалас** *и.* Күпереп торған ап-аҡ икмәк. *Ҡалас бешереү. Ҡалас һатып алыу.*

**ҡалдыҡ (ҡалдығы)** *и.* **1.** Берәй нәмәнең тотонғандан, файҙаланғандан һуң ҡалған өлөшө. *Аш-һыу ҡалдығы. Икмәк ҡалдығын йыйыу.* **2.** Ниҙеңдер эшкәрткәндән һуң ҡалған өлөшө. *Нефть ҡалдыҡтары. Сәнәғәт ҡалдыҡтары.* **3.** Бер һанды икенсе һанға бүлгәндә бүленмәй ҡалған өлөшө. *Ҡалдыҡ сығыу.*

**ҡалдырыу (ҡалдыр-)** *ҡ.* **1.** Хәрәкәт иткәндә арттан еткермәү. *Артҡа ҡалдырыу. Ҡалдырып елеү.* **2.** Үҙең менән бергә алмау. *Балаларҙы өйҙә ҡалдырыу. Ҡалдырып китеү.* **3.** Нисек булған, шул көйө тотоу. *Асыҡ ҡалдырыу. Яҙаһыҙ ҡалдырыу.* **4.** Онотмай, хәтерҙә һаҡлау, иҫтә тотоу. *Башта ҡалдырыу. Иҫтә ҡалдырыу.* **5.** Тейеш эште башҡармау. *Дәрес ҡалдырыу. Эш ҡалдырыу.* **6.** Әлеге мәлдән киләсәккә күсереү; кисектереү. *Аҙаҡҡа ҡалдырыу. Иртәнгә ҡалдырыу.*

**ҡалҡан** *и.* **1.** Ҡулға тотоп, уҡ-ҡылыстан һ. б. һаҡлана торған боронғо ҡорал. *Ағас ҡалҡан. Тимер ҡалҡан. Ҡалҡан менән һаҡланыу.* **2.** Туп, пулеметтың һ. б. атыу ҡоралдарының алдына ҡуйылған ҡорос ҡаплама. *Туп ҡалҡаны. Ҡалҡан артына йәшенеү.*

**ҡалҡытыу (ҡалҡыт-)** *ҡ.* **1.** Бер аҙ үргә күтәреү, күтәрә биреү. *Бүректе ҡалҡытыу. Башты ҡалҡытып ҡарау.* **2.** Тулыштырып ҡабартыу, күтәреү. *Күкрәкте ҡалҡытыу.*

**ҡалҡыу (ҡалҡ-)** *ҡ.* **1.** Ятҡан, ултырған урындан күтәрелеү. *Аяҡ өҫтө ҡалҡыу. Урындан ҡалҡыу.* **2.** Юғарыға, үргә менеү, үрләү. *Тауға ҡалҡыу. Ҡалҡып килеп сығыу.* **3.** Офоҡтан күтәрелеү, күренеү (күк есемдәренә, күренештәренә ҡарата). *Йондоҙ ҡалҡыу. Ҡояш ҡалҡып килә. Йәйғор ҡалҡыу. Шәфәҡ ҡалҡыу.*

**ҡалҡыулыҡ (ҡалҡыулығы)** *и.* Тирә-йүндән бейегерәк булып торған. *Бейек ҡалҡыулыҡ. Ҡалҡыулыҡҡа менеү.*

**ҡалҡыуыс** *и.* Ҡармаҡ ебенә, йылымға, ауға һ. б. балыҡ тотоу ҡоралдарының өҫкө бауына тағылған, һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөй торған ҡулайлама. *Ҡауырһын ҡалҡыуыс. Ҡармаҡ ҡалҡыуысы. Ауға ҡалҡыуыс ҡуйыу.*

**ҡалтырау (ҡалтыра-)** *ҡ.* **1.** Дер-дер һелкенеү, дерелдәү. *Быуын ҡалтырау. Ирен ҡалтырау. Тән ҡалтырау.* **2.** *күсм.* Ныҡ ҡурҡыу. *Ҡалтырап төшөү. Дер ҡалтырау.*

**ҡалын** *с.* **1.** Арҡыры киҫеме сағыштырмаса ҙур; *киреһе* йоҡа. *Ҡалын боҙ. Ҡалын быяла. Ҡалын китап. Ҡалын таҡта.* **2.** Тығыҙ булып үҫкән; ҡуйы. *Ҡалын йөн. Ҡалын сәс. Ҡалын урман.* **3.** Тоноҡ, түбән яңғырашлы (тауышҡа ҡарата). *Ҡалын тауыш.*

**ҡалынайтыу (ҡалынайт-)** *ҡ.* Йоҡаны ҡалынға әйләндереү, ҡалын итеү. *Стенаны ҡалынайтыу.*

**ҡалынайыу (ҡалынай-)** *ҡ.* Йоҡанан ҡалынға әйләнеү. *Боҙ ҡалынайыу. Ҡар ҡалынайыу.*

**ҡалып (ҡалыбы)** *и.* Ниҙелер бер рәүешле итеп, күпләп эшләү өсөн ҡулланылған ҡорамал. *Кирбес ҡалыбы. Ҡалып менән һуғыу.*

**ҡалыу (ҡал-)** *ҡ.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер тиҙлегенә өлгөрә алмау, артта булып сығыу. *Артҡа ҡалыу. Арып ҡалыу. Ҡала барыу. Кешенән ҡалмаҫҡа тырышыу.* **2.** Киткәнгә эйәрмәү, билдәле бер урында, хәлдә тороу. *Өйҙә ҡалыу. Тышта ҡалыу. Урында ҡалыу. Торған көйө ҡалыу.* **3.** Киткән йәки үлгән кешенән кемдеңдер ҡарамағына күсеү. *Ата-бабанан ҡалған мал. Әсәнән бала ҡалған. Тороп ҡалыу.* **4.** Ниндәйҙер хәлгә дусар булыу. *Ерһеҙ ҡалыу. Йәтим ҡалыу. Яңғыҙ ҡалыу.* **5.** Онотолмай хәтерҙә һаҡланыу. *Йөрәктә ҡалыу. Иҫтә ҡалыу.* **6.** Һан, күләм, дәүмәл йәһәтенән бөтмәй һаҡланыу. *Аҫҡа ҡалыу. Ваҡыт ҡалмау.* **7.** Ниҙәндер азат булыу, ҡотолоу. *Үлемдән саҡ ҡалыу. Хәрби хеҙмәттән ҡалыу.* **8.** Хәҙерге мәлдән кисегеү, һуңғараҡ күсеү. *Киҫкә ҡалыу. Ямғырға ҡалыу.* **9.** Исемдәр менән килеп шул һүҙ белдергән хәлгә төшөү мәғәнәһен бирә. *Аптырашҡа ҡалыу. Көлкөгә ҡалыу. Оятҡа ҡалыу.*

**ҡама** *и.* Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙон ҡойроҡло, ҡара көрән йөнлө йыртҡыс һыу йәнлеге һәм шуның тиреһе. *Ҡама аулау. Ай-һай тигән тауышҡа ҡама ҡасты ҡамышҡа.* (Халыҡ йырынан.) *Ҡама бүрек. Ҡама тун.*

**ҡамалау (ҡамала-)** *ҡ.* Төрлө яҡтан уратып алыу; ҡамау. *Атты ҡамалап тотоу.*

**ҡамасаулау (ҡамасаула-)** *ҡ.* Тоҡарлыҡ яһау, ҡамасаулыҡ итеү. *Йоҡларға ҡамасаулау. Эшләргә ҡамасаулау.*

**ҡамау[1] (ҡама-)** *ҡ.* Тирә-яҡлап уратып алыу, әйләндереп тотоу. *Көтөүҙе ҡамау. Юлды ҡамау.*

**ҡамау[2] (ҡама-)** *и.* Тирә-яҡтан уратып алынған хәл, ҡамалыш. *Ҡамауға эләгеү. Ҡамауҙа тороп ҡалыу. Ҡамауҙан сығыу.*

**ҡамашыу (ҡамаш-)** *ҡ.* **1.** Әсе, ҡырҡыу нәмәнән сағылып ауыртыу (тешкә ҡарата). *Тоҙло ҡыярҙан теш ҡамашыу.* **2.** Күҙ сағылйыу. *Яҡтынан күҙ ҡамаша.*

**ҡамғаҡ (ҡамғағы)** *и.* **1.** Орлоғо өлгөргәс, тамырынан ысҡынып, ел ыңғайына тәгәрләп китә торған ялбыр дала үҫемлеге. *Ҡамғаҡ елдә тәгәрләй.* **2.** *күсм.* Көйәләнеп, ҡауғалап йөрөүсән кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡамғаҡ кеше.*

**ҡамҡа** *и.* Ҡанат өҫтө ҡыҙыл йәки һары төҫлө, ҡара төрткөлө ваҡ ҡына ҡуңыҙ; ҡояш апай. *Ике төрткөлө ҡамҡа.*

**ҡамсат** *и.* Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған ҡыҫҡа аяҡлы, ҡара көрән йөнлө диңгеҙ йәнлеге һәм шуның тиреһе. *Ҡамсат аулау. Ҡамсат бүрек. Ҡамсат яға.*

**ҡамсы** *и.* Һыбай кеше йөрөтә торған ҡыҫҡа сыбыртҡы. *Ҡайыш ҡамсы. Ҡамсы үреү. Ҡамсы менән һуғыу. Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй.* (Әйтем.)

**ҡамсылау (ҡамсыла-)** *ҡ.* Ҡамсы менән туҡмау. *Атты ҡамсылау.*

**ҡамыл** *и.* Игенде урғас, төбөндә ултырып ҡалған һабағы. *Ҡамылды оҙон ҡалдырыу. Арыш ҡамылы.*

**ҡамыр** *и.* Бешереү өсөн баҫҡан он иҙмәһе. *Сөсө ҡамыр. Әсе ҡамыр. Билмән ҡамыры. Икмәк ҡамыры. Ҡамыр баҫыу. Ҡамыр әсетеү.*

**ҡамыт** *и.* Йөк тағып һөйрәтеү өсөн екке малдың муйынына кейҙерә торған ҡорамал. *Ҡайыш ҡамыт. Йүкә ҡамыт. Ҡамыт кейҙереү. Ҡамытын һалдырыу. Ҡамыт бауы.*

**ҡамыш** *и.* Күрәндәр ғаиләһенә ҡараған көпшәк һабаҡлы, эре һыу үҫемлеге. *Күл ҡамышы. Һаҙ ҡамышы. Йомро ҡамыш. Ҡырлы ҡамыш.* ♦ **Шәкәр ҡамышы** һабағынан шәкәр алына торған үҫемлек.

**ҡан** *и.* **1.** Тән буйлап күҙәнәктәрҙе туҡландырып йөрөгән ҡыҙыл шыйыҡса. *Артерия ҡаны. Вена ҡаны. Ҡан бөртөксәләре. Ҡан йөрөшө. Ҡан биреү. Ҡан ебәреү. Ҡан ағыу. Ҡан аҙлығы. Ҡан баҫымы. Ҡан тамыры.* **2.** *күсм.* Яҡын туғанлыҡ; нәҫел. *Ҡан ҡәрҙәш. Ҡан ҡатнашыу.*

**ҡанат** *и.* **1.** Ҡош, бөжәк һәм ҡайһы бер һөтимәр хайуандарҙың осоу өсөн хеҙмәт иткән ағзаһы. *Күбәләк ҡанаты. Ҡош ҡанаты. Ҡанат йәйеү. Ҡанат ҡағыу.* **2.** Самолеттың һауаға күтәрә торған яҫылыҡтары. *Киң ҡанат. Уң ҡанат. Һул ҡанат.* **3.** Балыҡтарҙың йөҙгөсө. *Ҡыҙыл ҡанатлы балыҡ. Яҫы ҡанат.* **4.** *күсм.* Тормоштағы, эштәге ярҙамсы; таяныс, терәк. *Бер-беребеҙгә ҡанат булайыҡ. Улы – атаһының ҡанаты.* ♦ **Ҡанат аҫтына алыу** кемделер яҡлау, ҡурсалау. **Ҡанат йәйеү** 1) таралып ҡаплап алыу; 2) киң үҫеш алыу.

**ҡанатланыу (ҡанатлан-)** *ҡ.* **1.** Ҡанат үҫеп сығыу. *Ҡанатланып осоу. Сыйырсыҡ балалары ҡанатланған.* **2.** *күсм.* Нимәнәндер рухланыу, дәртләнеү. *Күңел ҡанатлана. Ҡанатланып эшкә тотоноу.*

**ҡанатыу (ҡанат-)** *ҡ.* Йәрәхәтләп ҡанын сығарыу. *Аяҡты ҡанатыу. Танауын ҡанатыу. Һуғып ҡанатыу.*

**ҡанау (ҡана-)** *ҡ.* Йәрәхәтле урындан ҡан сығыу. *Танау ҡанау. Ҡанап тик тороу.*

**ҡандала** *и.* Кеше ҡаны менән туҡланған паразит бөжәк. *Ҡандала дарыуы. Ҡандала талау.*

**ҡанлы** *с.* **1.** Ҡанланған, ҡанға буялған, ҡан ҡатыш. *Ҡанлы бысаҡ. Ҡанлы кәүҙә. Ҡанлы төкөрөк.* **2.** Күп ҡорбан, үлем килтергән. *Ҡанлы бәрелеш. Ҡанлы һуғыш.* ♦ **Ҡыҙыу ҡанлы** үтә ярһыу тәбиғәтле. **Һалҡын ҡанлы** тиҙ генә ярһып бармаған, тыныс тәбиғәтле.

**ҡанун** *и.* **1.** Дин тотоу һәм көн итеү тәртибен билдәләгән дини ҡағиҙә. *Шәриғәт ҡанундары.* **2.** Тормош-көнкүрештә нығынған, бер тәртипкә әйләнгән ғәҙәт, йола, ҡағиҙә. *Йола ҡанундары. Ҡанун буйынса йәшәү.*

**ҡаңғылдау (ҡаңғылда-)** *ҡ.* Ҡаңҡ-ҡаңҡ итеү, ҡаңҡ иткән тауыш сығарыу. *Ҡаҙ ҡаңғылдай. Аҡҡоштар ҡаңғылдаша.*

**ҡаңғырыу (ҡаңғыр-)** *ҡ.* Ни уйларға, ни эшләргә белмәй аптырау. *Ҡаңғырып йөрөү. Ҡаңғырып бөтөү.*

**ҡап (ҡабы)** *и.* **1.** Нимәлер һалырға ҡулайлап эшләнгән һауыт. *Шырпы ҡабы. Ҡап яһау. Ҡапҡа һалыу.*

**ҡапҡа** *и.* **1.** Ишек алдына, кәртә-ҡураға һ. б. инеп-сығып йөрөү өсөн эшләнгән ҡоролма. *Ағас ҡапҡа. Тимер ҡапҡа. Баҡса ҡапҡаһы. Ҡапҡанан инеү. Ҡапҡанан сығыу. Ҡапҡаны асыу. Ҡапҡаны ябыу.* **2.** *спорт.* Футбол, хоккей кеүек уйындарҙағы тупты ҡыуып индереүҙән команда тарафынан һаҡлана торған махсус ҡоролма. *Ҡапҡаны һаҡлау. Ҡапҡаға һөжүм итеү.*

**ҡапҡан** *и.* Ике тимер дуғанан һәм сирткенән торған йәнлек аулау ҡоралы. *Бүре ҡапҡаны. Төлкө ҡапҡаны. Ҡапҡан һалыу. Ҡапҡанға эләгеү.*

**ҡапҡас** *и.* **1.** Ниҙәндер ауыҙына ҡаплай торған япма. *Күнәк ҡапҡасы. Ҡаҙан ҡапҡасы. Тәпән ҡапҡасы. Ҡапҡас менән ябыу.* **2.** Ишек һымаҡ эшләнгән күгәнле ябыу. *Баҙ ҡапҡасы. Тәҙрә ҡапҡасы. Шкаф ҡапҡасы.*

**ҡапланыу (ҡаплан-)** *ҡ.* Йөҙ түбән ятыу йәки йығылыу. *Мендәргә ҡапланыу. Тәҙрәгә ҡапланыу. Ҡапланып барып төшөү.*

**ҡаплау (ҡапла-)** *ҡ.* **1.** Икенсе бер нәмә менән ниҙәндер өҫтөн ябыу. *Ҡапҡас ҡаплау. Ризыҡты ашъяулыҡ менән ҡаплау. Яулыҡ ҡаплау.* **2.** Нимәнелер өҫтән тотош ябып, күренмәҫлек итеү. *Ерҙе ҡар ҡаплаған. Йылғаны боҙ ҡапланы. Ташты мүк ҡаплаған.* **3.** Ышыҡлау, ябыу. *Тәҙрәне ағас ҡаплаған. Күкте болот*

*ҡапланы. Күҙҙе йәш ҡаплай.* **4.** Һауыт-һабаның аҫтын-өҫкә әйләндереү; түңкәреү. *Сынаяҡты ҡаплау. Күнәкте ҡаплау.*

**ҡапма-ҡаршы** *с.* Бер-береһенә бөтөнләй тура килмәгән, бер-береһен кире ҡаҡҡан. *Ҡапма-ҡаршы яуап. Ҡапма-ҡаршы булыу.*

**ҡапсыҡ (ҡапсығы)** *и.* Бәләкәй тоҡ, тоҡсай. *Юл ҡапсығы. Ҡапсыҡҡа ризыҡ һалыу.* ♦ **Тот ҡапсығыңды (ҡапсығыңды киң тот)** *һөйл.* Нимәгәлер өмөтләнгән кешенең хыялынан көлөп әйтелә.

**ҡаптырма** *и.* Ике яғын яҫы итеп биҙәкләп, семәрләп эшләнгән элгес (кейемдә, ҡайышта һ. б.). *Көмөш ҡаптырма. Ҡаптырманы эләктереү.*

**ҡаптырыу**[1] **(ҡаптыр-)** *ҡ.* Ниҙелер кешенең ауыҙына ҡабырға биреү. *Дарыу ҡаптырыу. Кәнфит ҡаптырыу. Май ҡаптырыу.*

**ҡаптырыу**[2] **(ҡаптыр-)** *ҡ.* **1.** Төймә, элгес һ. б. шуның кеүек нәмәләрҙе эләктереү. *Төймәләрҙе ҡаптырыу.* **2.** Ҡармаҡҡа, ауға һ. б. эләктереү. *Балыҡ ҡаптырыу. Ҡапҡанға ҡаптырыу.*

**ҡапыл** *р.* **1.** Етеҙ, киҫкен хәрәкәт менән; кинәт. *Ҡапыл йүгереп китеү. Ҡапыл тартып алыу.* **2.** Көтмәгәндә, уйламағанда, иҫкәрмәҫтән. *Ҡапыл килеп сығыу. Ҡапыл уяныр китеү.*

**ҡар** *и.* Болоттан ап-аҡ булып ойошоп яуа торған яуым-төшөм. *Елбәҙәк ҡар. Епшек ҡар. Ҡар бөртөгө. Ҡар болото. Ҡарға батыу. Ҡар көрәү.* ♦ **Ҡыҙыл ҡар яуғас** бер ваҡытта ла булмай торған эш-хәлгә ҡарата көлөп әйтелә.

**ҡара**[1] *с.* **1.** Ҡором, күмер төҫөндәге; *киреһе* аҡ. *Ҡара болот. Ҡара сәс. Ҡара тупраҡ. Ҡара тәнле кеше.* **2.** Ҡары булмаған, асыҡ ятҡан. *Ҡара көҙ. Ҡара һыуыҡ. Ҡараға баҫыу. Ҡараға сығыу.* **3.** Керле, бысраҡ. *Бите ҡара. Ҡара ҡул.* **4.** *күсм.* Ҡыуаныс килтермәгән; ҡайғылы, ғазаплы. *Ҡара көндәр.* **5.** *күсм.* Үтә яуыз, мәкерле. *Ҡара уй. Ҡара ниәт.* ♦ **Йөҙгә ҡара яғыу** *ҡар.* **йөҙ. Күҙ ҡарам** иркәләп әйтелә; ҡәҙерлем, ғәзизем. **Күҙ ҡараһындай күреү** бик яҡын, ҡәҙерле һанау. **Ҡаранан аҡты (аҡтан ҡараны)** айырыу кемдең кем, ниҙең ни икәнен белеү. **Ҡара таныу** уҡый-яҙа белеү. **Тырнаҡ ҡараһындай** бик әҙ, бик бәләкәй (кәметеп күрһәткәндә әйтелә).

**ҡара**[2] *и.* Яҙыу өсөн ҡулланылған, буяулы шыйыҡлыҡ. *Ҡыҙыл ҡара. Ҡара ҡара. Ҡараға манып яҙыу. Ҡара һауыты.*

**ҡарабалыҡ (ҡарабалығы)** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған, һырты йәшкелт күл балығы.

**ҡарабаш (ҡарабаш турғай)** *и.* Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған, ҡара түбәле, һары түшле һайрар турғай.

**ҡарабойҙай** *и.* Баллы сәскәле, өс ҡырланып торған көрән орлоҡло иген үҫемлеге һәм шуның орлоғо. *Ҡарабойҙай баҫыуы. Ҡарабойҙай сәсеү. Ҡарабойҙай бутҡаһы.*

**ҡарағай** *и.* Оҙон ҡаты ылыҫлы, сайырға бай мәңге йәшел эре ағас. *Ҡарағай сайыры. Ҡарағай тубырсығы. Ҡарағай урманы. Ҡарағай бүрәнә.*

**ҡарағас** *и.* Көҙөн ҡойола торған йомшаҡ ылыҫлы, ҡаты ағас. *Ҡарағас сайыры. Ҡарағас тубырсығы. Себер ҡарағасы.*

**ҡарағат** *и.* Һыу буйҙарында, баҡсала үҫә торған әскелтем емешле ҡыуаҡ һәм шуның емеше. *Ҡара ҡарағат. Ҡыҙыл ҡарағат. Ҡарағат ултыртыу. Ҡарағат тиреү.*

**ҡарағош** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, ҡара төҫлө йыртҡыс ҡош. *Ҡарағош балаһы. Ҡарағош ояһы.*

**ҡарағура** *и. йыйн.* Далала үҫкән эре-торо, ҡаты үлән. *Ҡарағура бесән. Ҡарағура сабыу.*

**ҡарағусҡыл** *с.* Ҡараға тартым төҫтәге; ҡараһыу. *Ҡарағусҡыл буҫтау. Ҡарағусҡыл ҡыҙыл.*

**ҡарай** *бәйл.* Эш-хәрәкәттең йүнәлешен һәм башҡарылышы билдәле бер ваҡыт алдынан буласағын белдерә; табан. *Алға ҡарай. Күккә ҡарай. Байрамға ҡарай. Кискә ҡарай.*

**ҡарайтыу (ҡарайт-)** *ҡ.* **1.** Ҡара төҫкә индереү, ҡара итеү. *Таҡтаны ҡарайтыу.* **2.** Керләндереп бысратыу. *Иҙәнде ҡарайтыу. Күлдәкте ҡарайтыу.*

**ҡарайыу (ҡарай-)** *ҡ.* **1.** Ҡара төҫкә инеү, ҡаралыҡ яғылыу. *Ҡарайып бөтөү. Ҡарайып күренеү. Ҡарағат ҡарайҙы.* **2.** Кер ҡунып бысрау. *Күлдәк ҡарайған.*

**ҡараҡ (ҡарағы)** *и.* Урлашыу менән шөғөлләнгән әҙәм; бур. *Ат ҡарағы. Кеҫә ҡарағы. Ҡараҡтар шайкаһы. Ҡараҡты тотоу.*

**ҡаралама** *и.* Аҡҡа күсерелгән ҡулъяҙма. *Ҡараламаны уҡыу. Ҡараламаны күсереп яҙыу.*

**ҡаралды** *и.* **1.** Түшәп, ябына торған нәмәләр. *Урын ҡаралдыһы.* **2.** Өй эсендә булған төрлө кәрәк-яраҡ. *Өй ҡаралдыһы. Ҡаралды йыйыу.*

**ҡаралты** *и.* Ишек алдындағы йорт-ҡура һ. б. ҡоролмалар.

**ҡарама**[1] *и.* Йылалар ғаиләһенә ҡараған оҙонса япраҡлы, йәйенке ботаҡлы, бөгөлөп торған ағас. *Ҡарама ҡабығы. Ҡарама дуға.*

**ҡарама**[2] *и.* Сана табанының ҡара-ҡаршы тырнаҡтарын тоташтырған бөгәзе. *Баш ҡарама. Ҡарама бөгөү. Сана ҡарамаһы.*

**ҡарамаҫтан** *бәйл.* Төбәү килештәге исемгә ҡапма-ҡаршылыҡ мөнәсәбәтен бирә. *Йәш булыуға ҡарамаҫтан. Кеше күплеккә ҡарамаҫтан.*

**ҡараңғы** *с.* Яҡтылыҡ төшмәгән, яҡты булмаған; *киреһе* яҡты. *Көҙгө ҡараңғы төн. Ҡараңғы бүлмә. Дөм ҡараңғы. Ҡараңғы төшөү.*

**ҡараңғыланыу (ҡараңғылан-)** *ҡ.* **1.** Ҡараңғыға әйләнеү. *Көн ҡараңғыланды.* **2.** *күсм.* Ауыр хис баҫып алыу, күңелһеҙлек менән ҡапланыу. *Йөҙ ҡараңғыланыу.*

**ҡараңғылау (ҡараңғыла-)** *ҡ.* Яҡтылыҡты ҡаплап, ҡараңғы итеү. *Бүлмәне ҡараңғылау.*

**ҡарар** *и.* **1.** Уйлау, кәңәшләшеү һөҙөмтәһендә яһалған һығымта. *Ҡарарға килеү. Ҡарар итеү.* **2.** Рәсми һәм мәжбүри төҫ алған дөйөм фекер. *Йыйылыш ҡарары. Суд ҡарары. Ҡарар ҡабул итеү.*

**ҡараҫҡы** *и.* Ҡош-ҡортто өркөтөү өсөн, кеше рәүешендә яһап, баҡсаға, баҫыуға ҡуйған һын. *Ҡараҫҡы ҡуйыу. Ҡараҫҡы яһау.*

**ҡарау (ҡара-)** *ҡ.* **1.** Күҙ-ҡараштты ҡайҙалыр йәки нимәгәлер йүнәлтеү. *Алыҫҡа ҡарау. Боролоп ҡарау. Күтәрелеп ҡарау. Тура ҡарау. Теклəп ҡарау. Ҡарап алыу. Ҡарап тороу. Тәҙрәнән ҡарау. Кино ҡарау. Спектакль ҡарау. Һүрәт ҡарау.* **2.** Тикшереп асыҡлау. *Ғаризаны ҡарау.* **3.** Тейешле хеҙмәт күрһәтеү, тәрбиәләү. *Бала ҡарау. Мал ҡарау.* ♦ **Алды-артты ҡарамай** һис ни уйламай, һис ни күрмәй. **Күрә ҡарау** алыҫтан күрә алмаған кеше; күрәш. **Ҡарап туймаҫлыҡ** бик матур, һылыу. **Ҡара һин уны** берәй нәмәгә һоҡланғанда, аптырағанда әйтелә. **Ҡырын (күҙ) менән ҡарау** яратмау, үҙ итмәү. **Әҙәм ҡарағыһыҙ** бик ямаҡ, үтә йәмһеҙ.

**ҡараусы** *и.* Тәрбиә итеп, күҙәтеп торған кеше. *Ат ҡараусы. Бала ҡараусы. Мәктәп ҡараусы.*

**ҡарауыл** *и.* **1.** Ниҙеңдер именлеген, теүәллеген тәьмин итеү өсөн ҡуйылған һаҡ. *Ҡарауылға ҡуйыу. Ҡарауылда тороу. Ҡарауыл бүлмәһе. Ҡарауыл хеҙмәте.* **2.** Шул һаҡта торған кеше. *Ҡарауыл ҡуйыу. Ҡарауыл башлығы.*

**ҡарауыллау (ҡарауылла-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәнең теүәллеген, именлеген һаҡлау. *Баҡсаны ҡарауыллау. Ҡарауылларға ҡушыу.* **2.** Күҙ һалып һағалау, күҙәтеү. *Ҡарауыллап ятыу. Ҡуян ҡарауыллау.*

**ҡарауылсы** *и.* Һаҡҡа, ҡарауылға ҡуйылған кеше. *Баҡса ҡарауылсыһы. Төнгө ҡарауылсы. Урман ҡарауылсыһы.*

**ҡараш** *и.* **1.** Күҙҙең кемгә йәки нимәгәлер, ҡайҙалыр йүнәлтелеше. *Асыулы ҡараш. Уйсан ҡараш. Күҙ ҡарашы.* **2.** Берәй нәмәгә ҡарата булған мөнәсәбәт, уй-фекер. *Уҡыуға ҡараш. Эшкә ҡараш. Ҡарашты үҙгәртеү.* ♦ **Ҡараш ташлау** ҡапыл ғына ҡарап алыу.

**ҡарбуз** *и.* Ҡабаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡаты ҡабыҡлы, ҡыҙыл итле баҡса үҫемлеге һәм шуның емеше. *Ҡарбуз баҡсаһы. Ҡарбуз үҫтереү. Ҡарбуз тәме. Ҡарбуз телеү.*

**ҡарбуз-ҡауын** *и. йыйн.* Ҡарбуз һәм ҡауындар. *Ҡарбуз-ҡауын йыйыу.*

**ҡарға (ҡара ҡарға)** *и.* Ҡоҙғондар ғаиләһенә ҡараған йылтыр ҡара төҫтәге ҡош. *Ала ҡарға. Күк ҡарға. Ҡарға балаһы. Ҡарға ояһы. Ҡарға тауышы.*

**ҡарғау (ҡарға-)** *ҡ.* Яман теләк теләп әрләү. *Баланы ҡарғарға ярамай.*

**ҡарғыш** *и.* Яман теләк менән ҡарғап әйтелгән һүҙ. *Ҡара ҡарғыш. Ҡарғыш төшөү.* ♦ **Ҡара ҡарғышың ҡара башыңа (төшһөн)** ҡарғаған кешегә ҡарғышын ҡайтарыу өсөн әйтелә.

**ҡарҡ-ҡарҡ** *оҡш.* Ҡарға тауышын белдергән һүҙ. *Ҡарҡ-ҡарҡ килеү. Ҡарҡ-ҡарҡ ҡысҡырыу.*

**ҡарҡылдау (ҡарҡылда-)** *ҡ.* Ҡарҡ-ҡарҡ итеү. *Ҡарҡылдап ҡысҡырыу. Ҡарҡылдарға тотоноу.*

**ҡарлуғас** *и.* **(ҡара ҡарлуғас)** Ҡыйғас ҡара ҡанатлы, аса ҡойроҡло, кәйелеп шәп оса торған ҡош. *Ҡарлуғас ояһы. Яр ҡарлуғасы.*

**ҡармаҡ (ҡармағы)** *и.* Ем ҡуйып балыҡ тота торған һаплы ҡорал. *Суртан ҡармағы. Бәрҙе ҡармағы. Ҡармаҡ ебе. Ҡармаҡ сыбығы. Ҡармаҡ һалыу. Ҡармаҡҡа ҡабыу.*

**ҡармаҡлау (ҡармаҡла-)** *ҡ.* Ҡармаҡ менән тотоу. *Балыҡ ҡармаҡлау.*

**ҡарпыу (ҡарпы-)** *ҡ.* Һикереп һыу өҫтөнә сығыу (балыҡҡа ҡарата). *Сабаҡ ҡарпыны. Ҡарпып ем эләктереү.*

**ҡарпыш** *с.* Артҡа ятмай, тырпайып торған (ҡолаҡҡа ҡарата). *Ҡарпыш ҡолаҡ. Ҡарпыш булыу.*

**ҡарсыға** *и.* Уртаса ҙурлыҡтағы йыртҡыс ҡош. *Аҡ ҡарсыға. Күк ҡарсыға. Ҡарсыға өйрәтеү. Ҡарсыға сөйөү. Ҡарсыға ояһы.*

**ҡарт**[1] *с.* Оҙаҡ йәшәгән, оло йәшкә еткән; *киреһе* йәш. *Ҡарт кеше. Ҡарт бүре.*

**ҡарт**[2] *и.* **1.** Оло йәштәге ир кеше. *Аҡ һаҡаллы ҡарт. Ҡарттар һүҙе. Ауыл ҡарттары.* **2.** Оло йәштәге ҡатындың йәмәғәте; бабай. *Бөгөн ҡартым ҡайта.*

**ҡартайыу (ҡартай-)** *ҡ.* Оло йәшкә етеү, ҡартҡа әйләнеү; олоғайыу. *Ҡартайып бөтөү. Ҡартая белмәү. Ҡартая төшөү.*

**ҡартатай** *и.* Атайҙың атаһы.

**ҡарт-ҡоро** *и.* Бабай һәм әбейҙәр. *Ҡарт-ҡоро йыйылған.*

**ҡартлыҡ (ҡартлығы)** *и.* Ғүмерҙең оло йәшкә еткән осоро; *киреһе* йәшлек. *Ҡартлыҡ етеү. Ҡартлыҡ килеү. Ҡартлыҡ баҫыу. Ҡартлыҡ – түгел икән шатлыҡ.* (Әйтем.)

**ҡартәсәй** *и.* Атайҙың әсәһе.

**ҡарһылыу** *и.* Яңы йыл байрамында Ҡыш бабай менән бергә йөрөгән ҡыҙ.

**ҡаршы** *и.* **1.** Ниҙең дә булһа алғы яғындағы урын. *Көҙгө ҡаршыһы. Ҡаршыға баҫыу. Ҡаршыға ҡуйыу.* **2.** Тотҡан, барған йүнәлешкә кире тараф. *Ҡаршы барыу. Ҡаршы төшөү. Ҡаршы осрау.* **3.** Кемгә йәки нимәгәлер кире мөнәсәбәтле. *Ҡаршы булыу. Ҡаршы һөйләү.* ♦ **Ҡаршы алыу** килеүсенең алдына сығып хөрмәт менән ҡабул итеү.

**ҡаршылау (ҡаршыла-)** *ҡ.* Килеүсенең алдына сығып ҡабул итеү. *Ҡунаҡ ҡаршылау. Көтөүҙе ҡаршыларға сығыу.*

**ҡаршылыҡ (ҡаршылығы)** *и.* **1.** Кешенең ниәтенә, теләгенә ҡарата булған кире мөнәсәбәт һәм эшмәкәрлек. *Ҡаршылыҡ эшләү. Ҡаршылыҡ белдереү. Ҡаршылыҡ итеү.* **2.** Тормошҡа, эшкә ҡамасау иткән төрлө тотҡарлыҡ. *Ҡаршылыҡтарҙы еңеү. Ҡаршылыҡҡа осрау.*

**ҡарын** *и.* Тереклектәрҙең ризыҡ ҡабул итеп, эшкәртә торған эске ағзаһы, ашҡаҙан. *Бәләкәй ҡарын. Оло ҡарын. Малдың ҡарынын алыу.* ♦ **Ас ҡарынлай (ҡарынға)** ашамаған көйө, ас хәлдә.

**ҡарындаш** *и.* **1.** Бер әсә балалары (бер-береһенә ҡарата). *Ике ҡарындаш. Ҡарындаш булыу.* **2.** Ир-аттың үҙенән бәләкәй ҡатын-ҡыҙ туғаны. *Ул ҡыҙ минең ҡарындашым.*

**ҡарыш** *и.* Баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡтың киреп ҡуйылған араһына тиң булған үлсәү берәмеге. *Бер ҡарыш. Ҡарыш менән үлсәү.* ♦ **Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш** әкиәттәрҙәге яуыз сихри ҡарт тураһында әйтелә.

**ҡарышлауыҡ (ҡарышлауығы)** *и.* Күп аяҡлы, селәүсен һымаҡ йөнтәҫ ҡорт. *Йәшел ҡарышлауыҡ. Ҡарышлауыҡ аҙымы.*

**ҡарышыу (ҡарыш-)** *ҡ.* Ыңғайға килмәү, ҡаршы тороу; тиҫкәреләнеү. *Ҡарышып хәбәр һөйләү. Әйткәнгә ҡарышыу.*

**ҡасаҡ (ҡасағы)** *и.* **1.** Берәй төрлө афәт, һуғыш һ. б. бәхетһеҙлек арҡаһында йәшәгән ерен ташлап китергә мәжбүр кеше. *Ҡасаҡтар мәсьәләһе. Ҡасаҡтарҙы теркәү.* **2.** Ҡасып, йәшенеп йөрөгән кеше; ҡаҫҡын. *Ҡасаҡтарҙы тотоу.*

**ҡасан** *а.* **1.** Ваҡытты билдәләү, асыҡлау өсөн бирелгән һорауҙы белдерә. *Ҡасан киләһегеҙ? Атайым ҡасан ҡайта?* **2.** *р. мәғ.* Ваҡыты асыҡ ҡына

билдәләнмәгәндә йәки билдәле булмағанда әйтелә; ҡайһы ваҡытта. *Ҡасандан бирле. Ҡасан киләләр инде.* ♦ **Бер ҡасан да (һис ҡасан да)** бер ҙә, бер ваҡытта ла. **Ҡасан ғына булмаһын** һәр ваҡыт, һәр саҡ. **Ҡасан да булһа, ҡасан ғына булһа ла** берәй ваҡыт, ҡасандыр (булырҙай эш-хәл тураһында). **Һис ҡасан** һис бер ваҡыт (булмаҫтай эш-хәл тураһында). **Әллә ҡасан** бик күп ваҡыттан бирле; күптән.

**ҡасанғы** *а. һор.* Ниҙендер ҡайһы ваҡытҡа ҡарағанын белергә теләгәндә әйтелә. *Был ҡасанғы гәзит? Ҡасанғы хәбәр ул?*

**ҡасау** *и.* Ағасты соҡоу, тишеү, уйыу өсөн ҡулланылған яҫы үткер ҡорал. *Йомро ҡасау. Ҡасау менән тишеү.*

**ҡасҡын** *и.* Ҡасып, йәшенеп йөрөгән кеше. *Ҡасҡын булып йөрөү. Ҡасҡындар тураһында йырҙар.*

**ҡасыу (ҡас-)** *ҡ.* **1.** Кемдәндер, нимәнәндер ситкә йүгереп китеү. *Ҡасып ҡотолоу. Ҡурҡып ҡасыу. Ситкә ҡасыу.* **2.** Тейеш нәмәгә ҡатнашмай китеү, ситләшеү. *Дәрестән ҡасыу. Эштән ҡасыу. Яуаптан ҡасыу.* **3.** Кемдән йәки ҡайҙандыр йәшеренеп китеү. *Ҡасып ҡайтыу. Ҡасып йөрөү.*

**ҡат** *и.* **1.** Аҫлы-өҫлө булған бер нисә нәмә. *Ике ҡат юрған. Бер ҡат.* **2.** Аҫлы-өҫлө йорт йәки ҡоролманың айырым өлөшө. *Аҫҡы ҡат. Өҫкө ҡат. Биш ҡатлы йорт.* **3.** Эш-хәлдең башҡарылыш, үтәлеш һаны; мәртәбә, тапҡыр, ҡабат. *Өс ҡат әйтеү. Ҡат-ҡат ҡабатлау.*

**ҡата** *и.* Күндән тәрән итеп тегелгән боронғо аяҡ кейеме (ситек, сарыҡ, итек һ. б. өҫтөнән кейелгән). *Ҡуныслы ҡата.*

**ҡат-ҡат** *с.* **1.** Бер нисә ҡаттан торған, күп ҡатлы. *Ҡат-ҡат тауҙар. Ҡат-ҡат таҫма.* **2.** *р.* Бер нисә мәртәбә; ҡабат-ҡабат. *Ҡат-ҡат өйрәтеү. Ҡат-ҡат әйтеү.*

**ҡатлам** *и.* Йәйелеп, ҡаплап торған бер ҡат; ҡатлау. *Боҙ ҡатламы. Ерҙең өҫкө ҡатламы. Күмер ҡатламы.*

**ҡатлама** *и.* Әсе ҡамырҙан өҫтөнә май, йомортҡа һөртөп, йомарлап бешергән икмәк. *Ҡатлама бешереү. Ҡатлама менән һыйлау.*

**ҡатлау (ҡатла-)** *ҡ.* **1.** Өҫтө-өҫтөнә ҡуйып, бер нисә ҡатлы итеү. *Китаптарҙы ҡатлап өйөп ҡуйыу. Таҡталарҙы ҡатлап һалыу.* **2.** Бер ҡатлы нәмәгә икенсе ҡат өҫтәү. *Күлдәкте ҡатлап кейеү. Йөндө ҡатлап сиратыу.*

**ҡатлы** *с.* Бер нисә ҡаттан торған. *Бер ҡатлы тәҙрә. Ҡатлы-ҡатлы йорттар.*

**ҡатмарлы** *с.* **1.** Бер нисә айырым өлөштәрҙән, бүлектәрҙән торған; *киреһе* ябай. *Ҡатмарлы матдә. Ҡатмарлы булыу.* **2.** Күп яҡлы, күп өлөштәрҙән

торған. *Ҡатмарлы аппарат.* **3.** Башҡарылышы, хәл ителеше бик ауыр. *Ҡатмарлы мәсьәлә. Ҡатмарлы эш.*

**ҡатнаш** *с.* Төрлөһө бергә ҡушылған, ҡатыш. *Көл ҡатнаш тупраҡ. Ҡатнаш аҙыҡ.*

**ҡатнаштырыу (ҡатнаштыр-)** *ҡ.* **1.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә ҡушыу, аралаштырыу, бутау. *Һолоға борсаҡ ҡатнаштырып сәсеү.* **2.** Башҡалар менән бергә ниндәйҙер эшкә йәлеп итеү. *Йыйылышҡа ҡатнаштырыу. Концертҡа ҡатнаштырыу.*

**ҡатнашыу (ҡатнаш-)** *ҡ.* **1.** Икенсе бер нәмә менән ҡушылыу, аралашыу, буталыу. *Ярма менән он ҡатнашҡан.* **2.** Берәй эш-хәлдә, ваҡиғала башҡалар менән бергә эш итеү. *Йыйылышта ҡатнашыу. Һайлауға ҡатнашыу. Һуғышта ҡатнашыу.*

**ҡаты**[1] *с.* **1.** Үҙ формаһын, күләмен һаҡлай ала торған (физик есемдәр тураһында). *Ҡаты матдәләр.* **2.** Бөгөү, ҡыҫыу, йәнсеү кеүек тәьҫирҙәргә ауыр бирелгән; *киреһе* йомшаҡ. *Ҡаты таш.* **3.** Билдәле бер кимәлдән ҡуйы. *Ҡаты бал. Ҡаты ҡаймаҡ.* **4.** *күсм.* Көслө, ныҡ. *Ҡаты буран. Ҡаты ел. Ҡаты һыуыҡ. Ҡаты ҡайғы. Ҡаты ағыу.* **5.** *күсм.* Рухи яҡтан ныҡлы; көслө. *Ҡаты ихтыяр. Ҡаты тәбиғәтле. Ҡаты тороу.* **6.** Тәме ныҡ сыҡҡан, организмға тәьҫире көслө (сәйгә ҡарата). *Ҡаты сәй. Сәйҙе ҡаты итеп яһау.* ♦ **Ҡаты ҡолаҡ (ҡолаҡҡа ҡаты)** 1) ҡолағы насар ишеткән, һаңғырауыраҡ; 2) һүҙгә иғтибар бирмәй торған, иғтибарһыҙ. **Ҡаты ҡуллы** 1) талапсан, кешене ныҡ тота торған; 2) мәрхәмәтһеҙ, уҫал тәбиғәтле. **Ҡаты бәрелеү (ҡағылыу)** кешегә ауыр һүҙ әйтеү, тупаҫ мөғәмәлә итеү.

**ҡаты**[2] *и.* Ниҙең дә булһа кибеп ҡатҡан ҡыртышы. *Икмәк ҡатыһы. Тупраҡ ҡатыһы.*

**ҡатыҡ (ҡатығы)** *и.* Һөттө ҡайнатып, ойотҡо һалып ойотҡан аҙыҡ. *Сөсө ҡатыҡ. Әсе ҡатыҡ. Яңы ҡатыҡ. Ҡатыҡ ойотоу. Ҡатыҡ туҡыу. Ҡатыҡ эсеү.*

**ҡатыҡлау (ҡатыҡла-)** *ҡ.* Ашҡа, һурпаға ҡатыҡ һалыу. *Ашты ҡатыҡлау. Ҡатыҡлап ашарға яратыу.*

**ҡатын** *и.* Үҙенә айырым тәбиғи сифаттарға эйә булған енес кешеһе; иргә ҡапма-ҡаршы булған зат; бисә; *киреһе* ир. *Башҡорт ҡатыны. Йәш ҡатын. Оло ҡатын.*

**ҡатын-ҡыҙ** *и. йыйн.* **1.** Ирҙәргә ҡапма-ҡаршы заттағы кешеләр; ҡатындар һәм ҡыҙҙар. *Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы. Ҡатын-ҡыҙ нәфислеге. Эшсе ҡатын-ҡыҙ.* **2.** *купл.* Ҡатындар һәм ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте. Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме. Ҡатын-ҡыҙҙар магазины.*

**ҡатырға** *и.* Ҡалын ҡаты ҡағыҙ. *Ҡатырға менән тышлау. Ҡатырға ҡумта.*

**ҡатыу (ҡат-)** *ҡ.* **1.** Ҡаты йәки ҡатыраҡ хәлгә килеү. *Таш кеүек ҡатыу. Ҡамыр ҡатҡан.* **2.** Туң хәлгә килеү; туңыу. *Һыуыҡта ҡатып тороу. Шыҡрайып ҡатыу.* **3.** Дым, еүешлек етмәүҙән йә өлгөрөп ныҡ кибеү. *Үлән ҡатҡан. Тамаҡ ҡатыу.* **4.** Ныҡ керләнеү, бысраныу. *Кергә ҡатыу. Яғаһы керләнеп ҡатҡан.* ♦ **Баш ҡатыу** ауыр мәсьәләне ныҡ уйлау. **Шаҡ ҡатыу** бик нык аптырау; иҫ китеү.

**ҡатыш** *с.* Ни менәндер ҡушылған; ҡатнаш, аралаш. *Ҡар ҡатыш ямғыр. Һоло ҡатыш арыш.*

**ҡатышыу (ҡатыш-)** *ҡ.* **1.** Икенсе бер нәмәгә ҡушылыу; ҡатнашыу, аралашыу. *Төтөн менән быу ҡатышты.* **2.** Башҡалар менән бергә эш итеү; ҡатнашыу. *Туйға ҡатышыу. Эшкә ҡатышыу. Ҡатышып йәшәү.*

**ҡаушау (ҡауша-)** *ҡ.* Кемдәндер, ниҙәндер оялып, уңайһыҙланып юғалып ҡалыу, ни эшләргә белмәү. *Ҡаушай төшөү. Ҡаушап ҡалыу.*

**ҡауын** *и.* Ҡабаҡтар ғаиләһенә ҡараған еле һабаҡлы баҡса үҫемлеге һәм шуның татлы емеше. *Ҡауын баҡсаһы. Ҡауын үҫтереү. Ҡауын ашау. Ҡауын телеү.*

**ҡауырһын** *и.* Ҡош-ҡорттоң ҡаты үҙәкле эре йөнө. *Ҡанат ҡауырһыны. Ҡауырһын һыҙырыу.*

**ҡаһарман** *и.* Бик ҡыйыу йөрәкле кеше; батыр. *Һуғыш ҡаһарманы. Ҡаһарман булыу. Ҡаһарман ир.*

**ҡаш** *и.* **1.** Күҙ ҡабағының өҫтөнә һыҙылып үҫкән төктәр. *Ҡара ҡаш. Ҡыйғас ҡаш. Ҡулды ҡашҡа ҡуйыу.* **2.** Йөҙөк, беләҙек кеүек нәмәләргә биҙәү өсөн ҡуйылған аҫыл таш йәки затлы металл. *Аҡыҡ ҡаш. Беләҙек ҡашы. Йөҙөккә ҡаш ҡуйҙырыу.* ♦ **Күҙ менән ҡаш араһында** *ҡар.* **күҙ. Күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек** *ҡар.* **күҙ. Ҡаш төҙәтәм тип,** күҙ сығарыу бер эште эшләйем тигәнсе, икенсе эште боҙоу.

**ҡашҡа** *и.* Хайуандарҙың маңлай уртаһындағы аҡ тап. *Ерән ҡашҡа. Ҡашҡа ат. Ҡашҡа быҙау.* ♦ **Йондоҙ ҡашҡа** аттың маңлайындағы бәләкәй генә түңәрәк ҡашҡа һәм шундай ҡашҡаһы булған ат. **Сыбай ҡашҡа** һыҙылып төшкән оҙон ҡашҡа.

**ҡашлаҡ (ҡашлағы)** *и.* Һыу буйҙарындағы һөҙәкләнеп бөткән иҫке яр; ҡалҡыулыҡ. *Һөҙәк ҡашлаҡ. Ҡашлаҡҡа менеү. Ҡашлаҡ аҫты.*

**ҡашмау** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың мәрйен теҙеп, тәңкә, сулпылар баҫып, оҙон яҫы ҡойроҡ төшөрөп эшләнгән баш кейеме. *Ҡашмау ҡойроғо. Ҡашмау кейеү.*

**ҡая** *и.* Тауҙан сығып торған бейек таш. *Ҡая башы. Ҡая бите. Ҡаяға менеү. Ҡаяға үрмәләү.*

**ҡаяу** *и.* Саға торған төрлө бөжәк, ҡорт, йылан, саяндың ағыулы сәнскесе. *Йылан ҡаяуы. Саян ҡаяуы. Ҡорттоң ҡаяуын алыу.*

**ҡеүәт** *и.* **1.** Кешенең эш-хәрәкәткә һәләте, эш башҡарыу мөмкинлеге; ғәйрәт. *Ҡеүәте бар. Ҡеүәте юҡ. Ҡеүәт алыу. Ҡеүәт биреү. Ҡеүәт бөтөү.* **2.** Берәй ижтимағи күренештең, ил, йәмғиәттең һ. б. көсө. *Иҡтисади ҡеүәт. Хәрби ҡеүәт. Электр станцияһының ҡеүәте.*

**ҡеүәтле** *с.* **1.** Эш-хәрәкәткә ныҡлы, көслө; ҡөҙрәтле, ғәйрәтле. *Ҡеүәтле кеше. Ҡеүәтле булыу.* **2.** Эш башҡарыу мөмкинлеге ҙур. *Ҡеүәтле станция. Ҡеүәтле ракета.* **3.** Ҙур ижтимағи көскә эйә булған (дәүләт, ойошма һ. б.). *Ҡеүәтле дәүләт. Ҡеүәтле ил.*

**ҡиммәт** *с.* **1.** Хаҡы ҙур; ҡыйбат; *киреһе* арзан, осһоҙ. *Ҡиммәтле нәмә. Ҡиммәтле тауар. Ҡиммәт һатыу.* **2.** Тотҡан әһәмиәте ҙур, баһалы. *Һаулыҡ ҡиммәт. Шағирҙың һүҙе ҡиммәт.*

**ҡитға** *и.* Ерҙең океандар менән уратып алынған айырым бер ҙур өлөшө. *Донъяның ҡитғалары. Ҡитғаларҙы гиҙеү. Азия ҡитғаһы.*

**ҡобайыр** *и.* Тарихи ваҡиғаға йәки батырҙарҙы данлауға бағышланған боронғо шиғри әҫәр. *Ҡобайыр сығарыу. Ҡобайыр әйтеү.*

**ҡоҙа** *и.* Өйләнешкән ҡыҙ менән егеттең, ир менән ҡатындың аталары һәм ир туғандары (бер-береһенә һәм башҡа туғандарына ҡарата). *Оло ҡоҙа. Йәш ҡоҙа. Ҡоҙа булышыу. Баш ҡоҙа.*

**ҡоҙағый** *и.* Өйләнешкән ҡыҙ менән егеттең, ир менән ҡатындың әсәләре һәм оло ҡатын-ҡыҙ туғандары (бер-береһенә һәм башҡа туғандарына ҡарата). *Оло ҡоҙағый. Йәш ҡоҙағый.*

**ҡоҙалау (ҡоҙала-)** *ҡ.* Ҡыҙ һоратыу; яусылау. *Ҡоҙалап йөрөү.*

**ҡоҙаса** *и.* Өйләнешкән ҡыҙ менән егеттең йәки ир менән ҡатындың кесе ҡатын-ҡыҙ туғаны (бер-береһенә ҡарата). *Ҡоҙаса булыу. Ҡоҙасаны шаяртыу.*

**ҡоҙғон** *и.* Ялтыр ҡара йөнлө ҙур йыртҡыс ҡош. *Ҡоҙғон ояһы.*

**ҡоҙоҡ (ҡоҙоғо)** *и.* Һыу алыу өсөн ҡаҙылған, буралы тәрән соҡор. *Сиртмәле ҡоҙоҡ. Сығырлы ҡоҙоҡ. Ҡоҙоҡ ауыҙы. Ҡоҙоҡтан һыу алыу.*

**ҡойма** *и.* Нимәнелер уратып алған ҡоролма, кәртә. *Ağас ҡойма. Таш ҡойма. Ҡойма ҡойоу.*

**ҡоймаҡ (ҡоймағы)** *и.* Ондан туҡып, йоҡа итеп табала бешерелгән ашамлыҡ. *Сөсө ҡоймаҡ. Әсе ҡоймаҡ. Ҡоймаҡ ҡойоу.*

**ҡойолоу (ҡойол-)** *ҡ.* **1.** Берәй урындан туҡтауһыҙ ағып тороу. *Һыу ҡойолоу. Күҙҙән йәш ҡойолоу.* **2.** Үҫкән еренән өҙөлөп төшөп тороу. *Япраҡтар ҡойола. Сәскә ҡойола.*

**ҡойон** *и.* Өйөрөлөп өҫкә күтәрелгән көслө ел; өйөрмә. *Ҡойон күтәрелеү. Ҡойон ҡубыу. Ҡойон уйнау. Ҡойон эсендә ҡалыу.*

**ҡойоу (ҡой-)** *ҡ.* **1.** Шыйыҡ йә бөртөклө нәмәне һауыттан һауытҡа һалыу. *Сәй ҡойоу. Ҡомғанға һыу ҡойоу. Игенде тоҡҡа ҡойоу.* **2.** Ағып барып һыуға һ. б. төшөү, ҡушылып китеү. *Ағиҙел Камаға ҡоя. Шишмә йылғаға ҡоя.* **3.** Өҫтән күп итеп түгелеү, ағып тороу (ямғырға ҡарата). *Ямғыр көнө буйы ҡойҙо.* **4.** Күпләп өҙөлөп төшөү, түгелеү, йолҡолоп сығыу (орлоҡ, япраҡ, сәскә һ. б.). *Муйыл сәскәһен ҡойҙо. Аҡҡош йөнөн ҡойған.* ♦ **Йәш ҡойоу** түгелеп илау. **Ҡан ҡойоу** һуғышта, алышта ҡаты яраланыу.

**ҡойроҡ (ҡойроғо)** *и.* **1.** Йәнлек һәм бөжәктәрҙең артынан сығып торған тән өлөшө. *Оҙон ҡойроҡ. Ат ҡойроғо. Әтәс ҡойроғо. Ҡойроҡтан тотоу.* **2.** Төрлө ҡоролмаларҙың артҡы өлөшө. *Самолет ҡойроғо. Һал ҡойроғо.*

**ҡол** *и.* Тулыһынса хоҡуҡһыҙ булған, үҙ хужаһының милке һаналған кеше. *Ҡол биләүсе. Ҡол булыу. Ҡол итеү.*

**ҡолаҡ (ҡолағы)** *и.* **1.** Кешенең һәм умыртҡалы хайуандарҙың ишетеү ағзаһы. *Ҡолаҡ япрағы. Уң ҡолаҡ. Һул ҡолаҡ. Ҡолаҡ ауыртыу. Ҡолаҡтан тартыу. Ҡолаҡ тоноу. Ҡолаҡ асылыу.* **2.** Баш кейеменең ике яғынан төшөп торған өлөшө. *Бүрек ҡолағы. Ҡолаҡлы кәпәс. Бүректең ҡолағын күтәреп ҡуйыу.* **3.** Һыуҙың һуҙылып ярға инеп торған өлөшө. *Диңгеҙ ҡолағы. Йылға ҡолағы. Ҡолаҡта балыҡ тотоу.* ♦ **Бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға** һүҙҙе иҫәпкә алмай, тыңламай. **Кейеҙ ҡолаҡ (ҡолағы кейеҙ)** әйткәнде ишетмәгән, һаңғырауыраҡ. **Ҡаты ҡолаҡ (ҡолағы ҡаты)** ишетмәгәнерәк, һаңғырауыраҡ кешегә ҡарата әйтелә. **Ҡолаҡ итен ашау (сәйнәү)** бер үк нәмәне ҡабат-ҡабат һөйләү, туҡыу. **Ҡолаҡ ҡағыу** өмөт иткән, ниәтләнгән нәмәнән тороп ҡалыу, һемәйеү. **Ҡолаҡ һалыу** 1) һүҙгә, тауышҡа иғтибарҙы йүнәлтеү; 2) әйткәнде тыңлау, иғтибарға алыу. **Шеш ҡолаҡ** *ситл.* **ҡуян.**

**ҡолас** *и.* Йәйелгән ике ҡул осоноң araһы һәм шул аралыҡҡа тиң үлсәү берәмеге. *Ҡоласы киң. Ҡоласҡа алыу. Ҡолас йәйеү. Ике ҡолас йыуанлыҡ ағас. Ҡолас етмәҫ ер.*

**ҡолатыу (ҡолат-)** *ҡ.* Торған ерҙән, урындан ауҙарыу; йығыу. *Урындан ҡолатыу. Ҡолата һуғыу.*

**ҡолау (ҡола-)** *ҡ.* Торған ерҙән, урындан ауыу; тәгәрәү, йығылыу. *Арбанан ҡолау. Ҡолап китеү. Ҡолап ятыу. Салҡан ҡолау.*

**ҡолон** *и.* Йылҡы малының балаһы (бер йәшкә тиклем). *Айғыр ҡолон. Бейә ҡолон. Ҡолон бәйләү. Ҡолон имеҙеү.*

**ҡолонлау (ҡолонла-)** *ҡ.* Ҡолон тыуҙырыу. *Бейә ҡолонлаған.*

**ҡом** *и.* Ҡаты минералдарҙың ваҡ ҡына бөртөктәре. *Диңгеҙ ҡомо. Йылға ҡомо. Алтын ҡомо. Ҡом бураны. Ҡом иләү. Ҡом һибеү. Ҡомда ҡыҙыныу.*

**ҡомаҡ (ҡомағы)** *и.* Нәҙек оҙон ҡойроҡло, һоро кимереүсе йәнлек. *Ҡомаҡ ағыулау. Ҡомаҡ эйәләү.*

**ҡомалаҡ (ҡомалағы)** *и.* Тут һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, йәшкелт аҡ сәскәле, үрмәле үҫемлек (сәскәһенән әсетке ҡайнаталар). *Ҡомалаҡ сәскәһе. Ҡомалаҡ сүпрәһе. Ҡомалаҡ киптереү.*

**ҡомартҡы** *и.* Борондан ҡалған иҫтәлекле нәмә; мираҫ. *Археологик ҡомартҡы. Әҙәби ҡомартҡы. Ата-бабанан ҡалған ҡомартҡы. Ҡомартҡыларҙы һаҡлау.*

**ҡомған** *и.* Йыуыныу, сайыныу өсөн тәғәйенләнгән оҙон муйынлы һауыт. *Еҙ ҡомған. Ҡомған ҡапҡасы. Ҡомғанға һыу һалыу.*

**ҡомлоҡ (ҡомлоғо)** *и.* **1.** Ҡом күп булған урын. *Ҡомлоҡта ҡыҙыныу.* **2.** Тотош ҡом менән ҡапланған сүл.

**ҡомһоҙ** *с.* **1.** Аҡсаға, мал-мөлкәткә туймай торған. *Ҡомһоҙ кеше. Ҡомһоҙ булыу.* **2.** Ашау-эсеүгә туйыу белмәгән: мәскәй, ғуж. *Ҡомһоҙ бүре. Ҡомһоҙ, үҙе туйһа ла, күҙе туймай.* (Әйтем.)

**ҡондоҙ** *и.* Кимереүселәр төркөмөнә ҡараған көрән йөнлө, яҫы ҡойроҡло, тиреһе затлы һыу буйы йәнлеге. *Ҡондоҙ өңө. Ҡондоҙ тиреһе. Ҡондоҙ аулау. Ҡондоҙ бүрек.*

**ҡор** *и.* **1.** Оло кәңәш, һөйләшеү өсөн йыйылған йыйын. *Ҡор йыйыу. Ҡор башы.* **2.** Түңәрәкләп ултырған кешеләр төркөмө. *Ҡор булып ултырыу. Ирҙәр ҡоро.*

**ҡорал** *и.* **1.** Һуғыш өсөн махсус эшләнгән һәм ҡулланылған нәмә. *Атыу ҡоралдары. Ҡорал заводы. Ядро ҡоралы. Ҡулға ҡорал алыу. Ҡорал менән һаҡланыу.* **2.** *йыйн.* Эш башҡарғанда ҡулланыла торған ҡулайлама, инструмент һ. б. *Ауыл хужалығы ҡоралдары. Музыка ҡоралдары.*

**ҡоралай** *и.* Боландар ғаиләһенә ҡараған оҙон муйынлы, нәҙек аяҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло ҡырағай хайуан; илек. *Ҡоралай мөгөҙө. Ҡоралай тиреһе. Ҡоралай уйнауы. Ҡоралай аулау.*

**ҡоралланыу (ҡораллан-)** *к.* Һуғыш һәм эш ҡоралы менән тәьмин ителеү, ҡорал булдырыу. *Баштан-аяҡ ҡоралланыу. Ҡеүәтле техника менән ҡоралланыу.*

**ҡоралһыҙланыу (ҡоралһыҙлан-)** *к.* Ҡоралды кәметеү йәки бөтөрөү. *Ҡоралһыҙланыу сәйәсәте.*

**ҡорамал** *и. йыйн.* Эш өсөн кәрәкле һәр төрлө ҡорал. *Ауыл хужалығы ҡорамалдары. Ер быраулау ҡорамалдары. Нефть эшкәртеү ҡорамалдары.*

**ҡорбан**[1] *и.* **1.** Мосолмандарҙа Алла исеменә бағышлап салынған мал. *Ҡорбан ашы. Ҡорбан ите. Ҡорбан салыу.* **2.** Бәлә-ҡазанан зыян күргән кеше йәки башҡа йән эйәһе. *Һуғыш ҡорбаны. Ҡорбан булыу.* ♦ **Ҡорбан байрамы** ураҙанан һуң 70 көн үткәс, Зөлхизә айының унынсы көнөндә уҙғарылған дини байрам. **Ҡорбан ғәйете** Ҡорбан байрамында мәсеттә уҡылған намаҙ.

**ҡорбан**[2] *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған эре аҡ тәңкәле, яҫы, сөсө һыу балығы. *Ҡорбанға ҡармаҡ һалыу.*

**ҡорма** *и.* Ишеккә, тәҙрәгә ҡоролған нәмә. *Селтәр ҡорма. Ебәк ҡорма. Ҡорма элеү. Ҡорманы тартыу.*

**ҡоро** *и.* **1.** Һыу теймәгән, дымланмаған. *Ҡоро яр. Ҡоро кейем. Ҡоро тупраҡ. Ҡоро булыу.* **2.** Дымы сығып бөткән, кипкән. *Ҡоро бесән. Ҡоро утын.* **3.** Дымлы түгел, һыу парҙары булмаған. *Ҡоро ел. Ҡоро һауа. Ҡоро һыуыҡ. Ҡороға китеү. Ҡоро тороу. Көндәр ҡороға тарта.* **4.** Бер нәмә лә ҡушылмаған, бер төрлө генә булған. *Ҡоро икмәк. Ҡоро сәй.* ♦ **Ҡоро ҡалыу** ниҙәндер мәхрүм булыу, буш тороп ҡалыу. **Ҡоро ҡул** бер нәмәһеҙ, буш. **Ҡоро тел** ҡулынан эш килмәгән, буш хәбәр генә һөйләгән кеше.

**ҡороҡ (ҡороғо)** *и.* Ирекһәге мал-йәнлекте тотоу өсөн ҡулланылған мәскәүле ҡолға. *Ҡороҡ бауы. Ҡороҡ һабы. Ҡороҡ һалыу. Ҡороҡ менән ат тотоу.*

**ҡоролоҡ (ҡоролоғо)** *и.* Яуым-төшөм булмаған хәл. *Йылдың ҡоролоғо. Ҡоролоҡ килеү. Ҡоролоҡҡа сыҙамлы үҫемлектәр. Ҡоролоҡтан интегеү.*

**ҡоролтай** *и.* **1.** Бөтә ил вәкилдәре ҡатнашлығында үткәрелгән ижтимағи-сәйәси йыйылыш; конгресс. *Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы. Ҡоролтай вәкиле. Ҡоролтай йыйыу.* **2.** Вәкәләтле үҙәк идара. *Ҡоролтай төҙөү. Ҡоролтай ултырышы.*

**ҡором** *и.* Яғыулыҡтың утта яныр бөтмәй осоп тупланған саңы. *Мөрйәгә ҡором йыйылыу. Мейестең ҡоромон таҙартыу. Ҡоромға буялыу. Газдан ҡором алыу.*

**ҡорос** *и.* Тимер менән углерод һәм башҡа элементтарҙың иретмәһенән торған аҡһыл төҫтәге ҡаты металл. *Ҡорос иретеү. Ҡорос ҡайнатыу. Ҡорос ҡойоу. Ҡоростан ҡылыс эшләү. Ҡорос бысаҡ.*

**ҡорот** *и.* Эркеттән ҡайнатып яһалған әскелт ашамлыҡ. *Йәш ҡорот. Кипкән ҡорот. Ыҫланған ҡорот. Ҡорот ҡайнатыу. Ҡорот иҙеү.*

**ҡоротҡос** *и.* Тәбиғәткә, хужалыҡҡа зыян килтерә торған бөжәк, йәнлек йәки ҡош-ҡорт. *Ауыл хужалығы ҡоротҡостары. Урман ҡоротҡостары. Ҡоротҡостарға ҡаршы көрәш.*

**ҡоротоу (ҡорот-)** *ҡ.* **1.** Һыуын, дымын бөтөрөп, ҡоро итеү; киптереү. *Сепрәкте ҡоротоу. Ҡоротоп алыу. Ел ерҙе ҡорота.* **2.** Һыу сығанағын юҡҡа сығарыу. *Йылғаны ҡоротоу. Күлде ҡоротоу.* **3.** *күсм.* Юҡ итеү; бөтөрөү. *Донъяны ҡоротоу. Нәҫелде ҡоротоу. Тәбиғәтте ҡоротоу.*

**ҡороу**[1] **(ҡоро-)** *ҡ.* **1.** Булған дымы, һыуы бөтөп, артыҡ ҡороға әйләнеү; кибеү. *Ер ҡороу. Ҡороған ағас. Эҫенән үлән ҡорой.* **2.** Һыуы бөтөп, һыуһыҙ ҡалыу; кибеү (йылға, күл һ. б.). *Йылға ҡороно. Ҡороған күл.* **3.** *күсм.* Юҡҡа сығыу; бөтөү. *Нәҫел ҡороу. Тамыр ҡороу.*

**ҡороу**[2] **(ҡор-)** *ҡ.* **1.** Ҡаплау, ябыу өсөн элеп ҡуйыу. *Тәҙрәгә ҡорма ҡороу. Шаршау ҡороу.* **2.** Ябыулы, көпләүле итеп яһау. *Ҡыуыш ҡороу. Сатыр ҡороу. Йорт ҡороу. Оя ҡороу.* **3.** Атыу, аулау ҡоралдарын атырға, ауларға көйләү. *Мылтыҡ ҡороу. Тоҙаҡ ҡороу.* **4.** Булдырыу, төҙөү. *Ғаилә ҡороу. Донъя ҡороу. Табын ҡороу. Уйын ҡороу.* **5.** Уй-фекер менән билдәләү, төҙөү. *План ҡороу. Хәйлә ҡороу.* ♦ **Баҙар ҡороу** күмәкләшеп тауышланыу, сыр-сыу килеү.

**ҡорсаңғы** *и.* Ныҡ ҡысыттыра торған йоғошло тире ауырыуы. *Ҡоро ҡорсаңғы. Һыулы ҡорсаңғы. Ҡорсаңғы йоғоу. Ҡорсаңғы төшөү. Ҡорсаңғыны дауалау. Ҡорсаңғы ат эйәр һалдырмаҫ.* (Мәҡәл.)

**ҡорт** *и.* **1.** Бөжәктең йомортҡанан сыҡҡан селәүсен һымаҡ балаһы. *Ағас ҡорто. Кәбеҫтә ҡорто. Ярмаға ҡорт төшкән. Ҡортҡа дарыу һибеү.* **2. (бал ҡорто)** Бал йыя торған, хужалыҡта тотолған бөжәк. *Инә ҡорт. Эшсе ҡорт. Әре ҡорт. Ҡорт күсе. Ҡорт ҡаяуы. Ҡорт айырыу. Ҡорт ҡуныу. Ҡорт сағыу.* ♦ **Һоро ҡорт** кеше елкәһен кимереп, иҙеп, эшләмәй ятҡан кешегә ҡарата әйтелә.

**ҡортлау (ҡортла-)** *ҡ.* Ҡортлоға әйләнеү, ҡорт баҫыу. *Ҡортлап китеү. Ит үҙенән-үҙе ҡортлай.* (Мәҡәл.)

**ҡорһаҡ (ҡорһағы)** *и.* **1.** Йән эйәләренең бауыр, ашҡаҙан һ. б. ятҡан урыны; эс. *Ҡорһаҡ ҡыуышлығы. Ҡорһаҡ үҫеү. Ҡорһаҡ шешеү.* **2.** Аш үҙләштерә торған ағза; ашҡаҙан. *Ас ҡорһаҡ. Тук ҡорһаҡ.*

**ҡосаҡ (ҡосағы)** *и.* **1.** Иркәләп, һөйөп күкрәккә ҡыҫҡандағы ике ҡул торошо. *Ҡосаҡ йәйеү. Ҡосаҡҡа алыу. Ҡосаҡҡа инеү. Ҡосаҡтан ысҡыныу.* **2.** Тотонған ике ҡул араһы (яҡынса күләм). *Бер ҡосаҡ утын. Ҡосаҡҡа һыймау.*

**ҡосаҡлау (ҡосаҡла-)** *ҡ.* **1.** Иркәләп, һөйөп ҡулдар менән ҡыҫыу, ҡосаҡҡа алыу. *Ҡыҫып ҡосаҡлау. Билдән ҡосаҡлау. Ҡосаҡлап үбеү.* **2.** Ике ҡуллап ҡыҫып тотоу (әйберҙәргә ҡарата). *Бесән ҡосаҡлау. Мендәрҙе ҡосаҡлап ятыу. Утын ҡосаҡлап инеү.*

**ҡот** *и.* **1.** Тереклек биргән нәмә; йән. *Ҡот ҡалмау. Ҡот осоу.* **2.** Күңелгә кинәнес, йәм биргән, бәхет килтергән нәмә. *Өй ҡото. Тормош ҡото. Донъяның ҡотон ебәреү.* **3.** Уңыш, бәхет килтергән нәмә. *Мал ҡото. Һунар ҡото. Ҡот ҡуныу.* ♦ **Ҡот ҡойоу** ҡурҡыуҙан ауырыған кешене ырымлау, имләү. **Ҡот осоу** 1) бик ныҡ ҡурҡыу; 2) ныҡ ҡурҡыуҙан ауырыуға һабышыу.

**ҡотҡарыу (ҡотҡар-)** *ҡ.* **1.** Азатлыҡҡа, ireккә сығарыу; азат итеү. *Ҡотҡарып алыу. Ҡаланы дошмандан ҡотҡарыу.* **2.** Ауыр хәлдән сығарыу; ҡотолдороу. *Ауырыуҙан ҡотҡарыу. Бәләнән ҡотҡарыу. Үлемдән ҡотҡарыу.* **3.** Эштән, бурыстан бушатыу. *Хәрби хеҙмәттән ҡотҡарыу. Һалымдан ҡотҡарыу.*

**ҡотлау (ҡотла-)** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер ваҡиға уңайы менән яҡшы теләк белдереп тәбрикләү. *Байрам менән ҡотлау. Тыуған көн менән ҡотлау. Ҡотлау һүҙе. Ҡотлау хаты.* **2.** Ҡыуаныс белдереп мәжлес яһау; туйлау. *Бала ҡотлау. Өй ҡотлау.*

**ҡотло** *с.* **1.** Бәхет, муллыҡ килтергән. *Ҡотло ер. Ҡотло кеше. Ҡулы ҡотло.* **2.** Малдың үрсемлелеген, именлеген һаҡлаған. *Ҡотло мал.* ♦ **Ҡотло аяғың менән** йортҡа төшкән киленгә, килгән ҡунаҡҡа әйтелгән хуплау теләге. **Ҡотло булһын** яңы алған нәмәгә, малға ҡарата әйтелгән изге теләк һүҙе.

**ҡотолоу (ҡотол-)** *ҡ.* **1.** Азатлыҡҡа ирешеү, ireккә сығыу; азат булыу. *Ҡоллоҡтан ҡотолоу. Тотҡондан ҡотолоу. Ҡасып ҡотолоу.* **2.** Ауыр хәлдән, бәләнән арыныу. *Бәлә-ҡазанан ҡотолоу. Ҡайғы-хәсрәттән ҡотолоу. Үлемдән ҡотолоп ҡалыу.*

**ҡотороу (ҡотор-)** *ҡ.* **1.** Баш мейеһенә тейгән сирҙән аҡыл зәғифләнеп шашыу; тилереү. *Ҡоторған эт. Төлкө лә ҡотора.* **2.** *күсм.* Саманан тыш ярһып китеү; шашыу. *Балалар ҡоторop уйнай. Йә, ҡотормағыҙ әле, тыйылығыҙ!* **3.** *күсм.* Үтә ныҡ көсәйеп китеү (тәбиғәт күренештәренә ҡарата). *Буран ҡоторғандан ҡотора. Ел ҡотора.*

**ҡотортоу (ҡоторт-)** *ҡ.* **1.** Берәй эш-ҡылыҡҡа өндәп ҡуҙғытыу. *Ҡотортоп алып китеү. Түрәгә ҡаршы ҡотортоу.* **2.** Үтә буйлатып шаштырыу (ғәҙәттә, баланы). *Баланы ҡотортоу.* **3.** Булышып ҡыҙҙырыу, үсекләп ярһытыу. *Этте ҡотортоу.*

**ҡош** *и.* Умыртҡалылар төркөмөнә ҡараған ҡанатлы, ике аяҡлы, тәне ҡауырһын, йөн-мамыҡ менән ҡапланған йән эйәһе. *Ата ҡош. Инә ҡош. Йыртҡыс ҡош. Һайрар ҡош. Йорт ҡошо. Һунар ҡошо. Һыу ҡошо. Ҡош ите. Ҡош йомортҡаһы. Ҡош ояһы. Ҡош тубы.*

**ҡошсолоҡ (ҡошсолоғо)** *и.* Ауыл хужалығының ҡош үрсетеү тармағы. *Ҡошсолоҡ фермаһы. Ҡошсолоҡто үҫтереү.*

**ҡояш** *и.* **1.** Ҡыҙыу газдан торған шар формаһындағы яҡтылыҡ һәм йылылыҡ сығанағы булған Галактикалағы төп күк есеме. *Ҡояш байыу. Ҡояш ҡалҡыу. Ҡояш бите. Ҡояш нуры. Ҡояш яҡтыһы.* **2.** Шул есемдән килә торған яҡтылыҡ, йылылыҡ. *Ҡояшта йылыныу. Ҡояш төшөү.* ◆ **Ҡояш тотолоу** Айҙың Ер менән Ҡояш араһына тура килеп, уны ҡаплауы.

**ҡояшлы** *с.* Ҡояш яҡтыртып торған; аяҙ. *Ҡояшлы көн. Ҡояшлы яҙ.*

**Ҡөрьән** *и.* Ислам диненең нигеҙен, хоҡуҡи нормаларын билдәләгән изге китап. *Ҡөрьән сүрәләре. Ҡөрьән уҡыу. Ҡөрьән һүҙе.*

**ҡубыу (ҡуп-)** *ҡ.* **1.** Йәбешкән, тоташҡан ерҙән ысҡыныу. *Итектең уксәһе ҡупҡан. Ҡубып сығыу.* **2.** *күсм.* Дәррәү күтәрелеп, бер юлы хәрәкәткә килеү. *Халыҡ ҡупты. Ғауға ҡупты. Дауыл ҡуба.*

**ҡуҙ** *и.* Баҙлап янып торған утлы күмер. *Ҡуҙ төшөү. Ҡуҙға әйләнеү. Самауырға ҡуҙ һалыу. Усаҡтың ҡуҙы һүнгән.*

**ҡуҙаҡ (ҡуҙағы)** *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең эсендә орлоғо булған оҙонса ҡабығы. *Борсаҡ ҡуҙағы.*

**ҡуҙаҡланыу (ҡуҙаҡлан-)** *ҡ.* Ҡуҙаҡ ебәреү. *Борсаҡ ҡуҙаҡланған.*

**ҡуҙғалаҡ (ҡуҙғалағы)** *и.* Әскелтем япраҡлы күп йыллыҡ үҫемлек. *Ҡуҙғалаҡ япрағы. Ҡуҙғалаҡ ашы. Ҡуҙғалаҡ бәлеше. Ҡуҙғалаҡ йыйыу.*

**ҡуҙғалыу (ҡуҙғал-)** *ҡ.* **1.** Тик торған хәлдән хәрәкәтләнә башлау; ҡыймылдау. *Ҡуҙғала алмау. Ҡуҙғалып китеү.* **2.** Китер өсөн хәрәкәткә килеү. *Поезд ҡуҙғалды. Эшкә ҡуҙғалыу.*

**ҡуйы** *и.* **1.** Айырым берәмектәре бер-береһе менән бик тығыҙ; йыш; *киреһе* һирәк. *Ҡуйы ағаслыҡ. Ҡуйы сәс. Ҡуйы үлән.* **2.** Ҡатнашҡан, берләшкән нәмәләре урта йышлыҡтан артыҡ; *киреһе* шыйыҡ. *Ҡуйы аш. Ҡуйы ҡаймаҡ.* **3.** Яҡтылыҡ үткәреүсәнлеге түбән, тығыҙ. *Ҡуйы болот. Ҡуйы томан. Ҡуйы төтөн.*

**ҡуйылыҡ (ҡуйылығы)** *и.* **1.** Һөттөң май кимәлен билдәләй торған күрһәткес. *Һөттөң ҡуйылығын үлсәү.* **2.** Үҫеп ултырған үҫемлек һанының йышлығы. *Урмандың ҡуйылығы. Үҫемлектәрҙең ҡуйылығы.*

**ҡуйын** *и.* **1.** Түш менән ҡултыҡ араһындағы урын. *Ҡуйынды асыу. Ҡуйынға ел инә. Ҡуйынға тығыу.* **2.** Ҡолас эсе; ҡосаҡ. *Ҡуйынға алыу. Ҡуйынына инеү.*

**ҡуйырыу (ҡуйыр-)** *ҡ.* **1.** Ҡуйы хәлгә килеү; *киреһе* шыйыҡланыу. *Бутҡа ҡуйырҙы.* **2.** Айырым берәмектәре үҙ-ара яҡын хәлгә килеү, ныҡ ҡушылыу; йышайыу; *киреһе* һирәгәйеү. *Урман ҡуйырған.* **3.** Үтә күренмәҫлек хәлгә етеү, нык тығыҙланыу. *Болоттар ҡуйырҙы. Томан ҡуйыра бара.*

**ҡуйыу (ҡуй-)** *ҡ.* **1.** Ниҙе лә булһа берәй ергә урынлаштырыу. *Баҫҡысты стенаға ҡуйыу. Китапты кәштәгә ҡуйыу. Сынаяҡты өҫтәлгә ҡуйыу.* **2.** Бер нәмәне икенсеһенә беркетеү, урынлаштырыу. *Тәҙрәгә быяла ҡуйыу. Күлдәккә яға ҡуйыу. Һандыҡҡа йоҙаҡ ҡуйыу.* **3.** Бер төрлө эш-хеҙмәткә билдәләү, вазифаға тәғәйенләү. *Һаҡҡа ҡуйыу. Уҡытыусы итеп ҡуйыу.* **4.** Тән ағзаларын берәй торошҡа килтереү. *Ҡулды күкрәккә ҡуйыу. Үксәләрҙе бергә ҡуйыу.* **5.** Яҙыу, баҫма билдәһен һалыу. *Имза ҡуйыу. Нөктә ҡуйыу.* **6.** Ниндәйҙер мәсьәләне хәл итергә тәҡдим итеү. *Маҡсат ҡуйыу. Тауышҡа ҡуйыу. Һорау ҡуйыу. Шарт ҡуйыу.* **7.** Берәй тамашаны сәхнәгә сығарыу. *Концерт ҡуйыу. Театр ҡуйыу.*

**ҡул** *и.* **1.** Кеше кәүҙәһенең яурын башынан бармаҡ остарына тиклемге булған ике ағзаның береһе. *Уң ҡул. Һул ҡул. Һыңар ҡул. Ҡул болғау. Ҡулды һуҙыу. Ҡулға тотоу.* **2.** Ҡул көсө менән хәрәкәткә килтерелә торған ҡорамалдарҙы белдергән һүҙбәйләнештәр составында ҡулланыла. *Ҡул арбаһы. Ҡул бысҡыһы. Ҡул машинаһы. Ҡул тирмәне.* ♦ **Алтын ҡуллы** *ҡар.* **алтын. Ҡаты ҡуллы** бик аяуһыҙ, үтә талапсан. **Ҡул араһына инеү** эшкә ярап, ярҙамлаша башлау. **Оҫта ҡуллы** эшкә булдыҡлы, һөнәрле.

**ҡулай** *с.* Уңай килеп торған; яйлы, йәтеш. *Ҡулай урын. Ҡулай эш.*

**ҡулайлама** *и.* Эште еңелләштереү өсөн яһалған махсус ҡоролма. *Автоматик ҡулайлама. Ҡулайлама уйлап сығарыу.*

**ҡулбаш** *и.* Ҡулдың яурынға тоташҡан урыны; иңбаш. *Ҡулбаш быуыны. Ҡулбаш һөйәге. Ҡулбашҡа һалыу.*

**ҡуллама** *и.* Эре һалма менән тураған иткә тоҙлоҡ, һурпа ҡойоп әҙерләнгән аш; бишбармаҡ. *Ҡуллама бешереү. Ҡуллама менән һыйлау.*

**ҡулланма** *и.* Берәй төрлө эшкә өйрәткән, йүнәлеш биргән әсбап. *Ҡулланма итеп алыу. Ҡулланма яҙыу. Уҡыу ҡулланмаһы.*

**ҡулланыу (ҡуллан-)** *ҡ.* **1.** Кәрәк эшкә тотоноу; файҙаланыу. *Ашлама ҡулланыу. Электр энергияһын ҡулланыу.* **2.** Берәй эштә, эшмәкәрлектә файҙаланыу. *Ҡорал ҡулланыу. Яңы һүҙ ҡулланыу.*

**ҡулсатыр** *и.* Ямғыр, ҡояштан һаҡланып, баш осонда ҡулға тотоп йөрөй торған япма. *Ҡулсатыр һатып алыу.*

**ҡултамға** *и.* Кешенең үҙ шәхесен билдәләп яҙған исем-фамилияһы. *Ҡултамға ҡуйыу. Өндәмәгә ҡултамға һалыу. Ҡултамғалар йыйыу.*

**ҡултыҡ (ҡултығы)** *и.* **1.** Ҡул менән яурын тоташҡан урындың аҫҡы ҡыуышыраҡ эсе; ҡул төбө. *Ҡултыҡ аҫты. Ҡултыҡҡа алыу. Ҡултыҡҡа ҡыҫтырыу. Ҡултыҡҡа тығыу.* **2.** *күсм.* Һыуҙың ҡоро ергә оҙон булып инеп торған өлөшө. *Диңгеҙ ҡултығы. Йылға ҡултығы. Кәмәне ҡултыҡҡа индереп ҡуйыу.*

**ҡултыҡлау (ҡултыҡла-)** *ҡ.* **1.** Ҡултыҡтан эләктереп тотоу. *Ҡултыҡлап алыу. Ҡыҙҙы ҡултыҡлап атлау.* **2.** Ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырыу. *Төйөнсөк ҡултыҡлау.*

**ҡулъяҙма** *и.* Матбуғатта баҫылып сыҡмаған, ташҡа баҫылмаған яҙма. *Боронғо ҡулъяҙма. Ҡулъяҙмалар фонды. Ҡулъяҙмалар йыйыу. Ҡулъяҙма әҫәр.*

**ҡулъяулыҡ (ҡулъяулығы)** *и.* Битте, ҡулды һөртөү өсөн тотолған кеҫә яулығы. *Сигеүле ҡулъяулыҡ. Ҡулъяулыҡ бүләк итеү.*

**ҡумта** *и.* Ҡалайҙан, ҡатырғанан һ. б. яһалған бәләкәй һауыт. *Дарыу ҡумтаһы. Скрипка ҡумтаһы. Ҡумталы кәнфит. Ҡумтаны асыу.*

**ҡумыҙ** *и.* Ауыҙға ҡуйып, сиртеп уйнай торған, тимер һ. б. яһалған һыңар телле бәләкәй генә музыка ҡоралы. *Ағас ҡумыҙ. Тимер ҡумыҙ. Ҡумыҙ теле. Ҡумыҙ сиртеү. Ҡумыҙ уйнау.*

**ҡумыҙсы** *и.* Ҡумыҙҙа уйнаусы. *Ҡумыҙсылар ярышы.*

**ҡунаҡ (ҡунағы)** *и.* **1.** Һый-хөрмәт күрһәтер өсөн саҡырылған махсус мәжлес. *Ҡунаҡ йыйыу. Ҡунаҡҡа саҡырыу. Ҡунаҡҡа барыу. Ҡунаҡҡа йөрөү.* **2.** Ошондай мәжлескә саҡырылған йәки килгән хөрмәтле кеше. *Ҡунаҡ килеү. Ҡунаҡ алдына аш ҡуйыу. Ҡунаҡты хөрмәтләү.* ♦ **Ҡунаҡ йорто** ситтән килгән кешеләр төшә торған махсус өй йәки бүлмә.

**ҡунаҡхана** *и.* Килгән кеше төшә торған махсус йорт; ҡунаҡ йорто. *Ҡунаҡхана бүлмәһе. Ҡунаҡханаға урынлашыу.*

**ҡундырыу**[1] **(ҡундыр-)** *ҡ.* Ҡунырға ҡалдырыу, йоҡлатыу. *Ҡунаҡты ике кис ҡундырыу.*

**ҡундырыу**[2] **(ҡундыр-)** *ҡ.* Һәлмәк нәмә менән ныҡ итеп һуғыу; тондороу. *Башына ҡундырыу. Таяҡ менән ҡундырыу.*

**ҡуныс** *и.* Аяҡ кейеменең бәкәлдән юғары, ҡул кейеменең беләҙек тәңгәлендәге өлөшө. *Бийма ҡунысы. Итек ҡунысы. Бейәләй ҡунысы. Ҡуныcты таҙартыу.*

**ҡуныу**[1] **(ҡун-)** *ҡ.* Ҡайҙалыр туҡтап, йоҡлап төн үткәреү. *Бер төн ҡуныу. Юлда ҡуныу. Ҡунып китеү.*

**ҡуныу**[2] **(ҡун-)** *ҡ.* **1.** Осоп килеп ултырыу. *Ағасҡа ҡуныу. Ерғә ҡуныу. Талға ҡуныпhайрау.* **2.** Өҫтән төшөп йөҙөн ҡаплау. *Бәҫ ҡунды. Ҡар ҡунған. Туҙан иҙәнгә ҡунған.*

**ҡуңыҙ** *и.* Яры ҡанаттары тышында ҡаты ҡанаттары ла булған бөжәк. *Иген ҡуңыҙы. Күн ҡуңыҙы. Ҡабыҡ ҡуңыҙы. Тиреҫ ҡуңыҙы.*

**ҡуптарыу (ҡуптар-)** *ҡ.* **1.** Нығ береккән, йәбешкән нәмәне айырыу; аҡтарыу. *Иҙән таҡтаһын ҡуптарыу. Өй түбәһен ҡуптарыу.* **2.** *күсм.* Ыҙғыш, талаш, дау һ. б. ҡуҙғатып ебәреү. *Бола ҡуптарыу. Тауыш ҡуптарыу.*

**ҡупшы** *с.* **1.** Ҡарап тороуға матур; йәмле, күркәм. *Ҡупшы кәүҙә. Ҡупшы булыу. Ҡупшы йөрөү. Ҡупшы кейенеү.* **2.** Матур кейенеп, үҙен фырт тоторға яратҡан. *Ҡупшы кеше. Ҡупшы өшөмәҫ, ҡалтырар.* (Мәҡәл.)

**ҡура** *и.* **1.** Мал-тыуар тора торған ябыулы урын; һарай. *Ат ҡураһы. Һыйыр ҡураһы. Малды ҡураға ҡуйыу.* **2.** Ишек алды; ихата. *Ҡураға сығыу.*

**ҡурай**[1] *и.* **(ҡурай үләне)** Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған көпшә һабаҡлы эре үлән. *Ҡырлы ҡурай. Таҡыябаш ҡурай. Ҡурай сәскәһе.* ♦ **Айыу ҡурайы** *ҡар.* **көпшә (айыу көпшәһе).**

**ҡурай**[2] Башҡорт халҡының ҡурай үләненән һәм башҡа эсе көпшә нәмәләрҙән тишкеләп яһалған тынлы музыка ҡоралы. *Ағас ҡурай. Еҙ ҡурай. Үлән ҡурай. Ҡурай моңо. Ҡурай уйнау. Ҡурай тартыу.* ♦ **Сор ҡурай** һыҙғыртып уйнай торған ҡыҫҡа ҡурай; һыбыҙғы.

**ҡурайсы** *и.* Ҡурай уйнау оҫтаһы. Ҡурай тартыусы. *Ҡурайсылар ансамбле. Ҡурайсылар ярышы.*

**ҡурғаш** *и.* **1. (ҡара ҡурғаш)** Еңел сүкелә торған, тиҙ иреүсән ҡара күгелйем төҫлө ауыр металл. *Ҡурғаш табыу. Ҡурғаш иретеү.* **2. (аҡ ҡурғаш)** Аҡһыл төҫтәге, тиҙ сүкелеүсән еңел металл.

**ҡурҡаҡ** *с.* Ҡурҡыу тойғоһона тиҙ бирелеүсән. *Ҡурҡаҡ кеше. Ҡурҡаҡ булыу. Ҡурҡаҡ үҙ күләгәһенән дә ҡурҡа.* (Әйтем.)

**ҡурҡыныс** *с.* **1.** Күңелгә ҡурҡыу хисе һалған, хәүефле, хәтәр. *Ҡурҡыныс уй. Ҡурҡыныс хәбәр. Ҡурҡыныс дошман. Ҡурҡыныс булыу.* **2.** *и. мәғ.* Ауыр, хәүефле кисерештәргә дусар иткән хәл. *Аслыҡ ҡурҡынысы. Үлем ҡурҡынысы. Ҡурҡыныс тыуыу.*

**ҡурҡытыу (ҡурҡыт-)** *ҡ.* Ҡурҡыу хәленә, хәүеф-хафаға төшөрөү. *Ҡурҡытып йәшәү. Баланы ҡурҡытыу.*

**ҡурҡыу (ҡурҡ-) 1.** Хәүеф-хәтәр алдында ҡаушап төшөү; шөрләү. *Үлемдән ҡурҡыу. Язанан ҡурҡыу. Бушҡа ҡурҡыу. Ҡурҡып йәшәү. Ҡурҡып ҡасыу.*

**2.** Берәй шартҡа түҙмәү, бирешеп барыу (ҡош-ҡортҡа, үҫемлеккә ҡарата). *Ҡырауҙан ҡурҡҡан үҫемлектәр. Сиңерткәнән ҡурҡҡан – иген икмәгән.* (Әйтем.)

**ҡурмас** *и.* Бөтәүләй ҡыҙҙырылған бойҙай. *Ҡурмас ҡурыу. Ҡурмас төйөү. Ҡурмастан талҡан яһау.*

**ҡурсаҡ**[1] **(ҡурсағы)** *и.* Кеше һынына оҡшатып яһалған балалар уйынсығы. *Ҡурсаҡ уйнатыу. Ҡурсаҡ яһау.*

**ҡурсаҡ**[2] **(ҡурсағы)** *и.* Көплө ҡорт. *Күбәләк ҡурсағы. Ҡурсаҡҡа әйләнгән бөжәк.*

**ҡурыу (ҡур-)** *ҡ.* **1.** Утта ҡыҙҙырыу. *Борсаҡ ҡурыу. Ит ҡурыу. Ҡурмас ҡурыу. Йомортҡаны ҡурып ашау.* **2.** Киптереп бөрөштөрөү, ҡаҡландырыу. *Тамаҡты ҡурыу.* ♦ **Тынды ҡурыу** тын алышын ауырлаштырыу, ҡыҫыу.

**ҡусҡар** *и.* Лайлаланып торған ҡабырсаҡлы әкәм-төкәм. *Ҡусҡар ҡабырсағы.*

**ҡусты** *и.* Кесе ир туған; эне, мырҙа. *Бер туған ҡусты. Ике туған ҡусты. Уртансы ҡусты.*

**ҡутарыу (ҡутар-)** *ҡ.* **1.** Төбө-тамырынан әйләндереп сығарыу; аҡтарыу. *Ташты ҡутарыу. Урынынан ҡутарыу.* **2.** Аҫтын-өҫкә әйләндереү; болғатыу, бутау. *Һандыҡты ҡутарыу.*

**ҡутыр** *и.* Ҡысыу йәки яра өҫтөнә эренләп ҡатҡан тире. *Ҡутырға май һөртөү. Ҡутыр сығыу.*

**ҡутырлау (ҡутырла-)** *ҡ.* Ҡутырға әйләнеү, ҡутырланыу. *Баш ҡутырлау.*

**ҡуш** *с.* Үҙ-ара береккән, тоташ булған ике берәмектән торған. *Ҡуш ҡайын. Ҡуш мөгөҙ. Ҡуш булыу.*

**ҡуша** *р.* **1.** Бергә тоташтырып. *Ҡуша тегеү. Ҡуша һалыу. Ҡуша бәйләү.* **2.** Икеһе бергә, берлектә. *Ҡуша атлау. Ҡуша йөрөү.*

**ҡушамат** *и.* Кешегә тағылған исем. *Ҡушамат йөрөтөү. Ҡушамат тағыу.*

**ҡушбаш** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ингән эре йылға балығы; ажау. *Ҡушбаш тотоу. Ҡушбашҡа ҡармаҡ һалыу.*

**ҡушма** *с.* Бер нисә өлөштән ҡушылып яһалған ҡушма исем. *Ҡушма һандар. Ҡушма һөйләм.*

**ҡушылдыҡ**[1] **(ҡушылдығы)** *и.* Ҙурыраҡ һыуға ҡойған йылға. *Уң ҡушылдыҡ. Һул ҡушылдыҡ. Дим – Ағиҙелдең ҡушылдығы.*

**ҡушылдыҡ**[2] **(ҡушылдығы)** *и.* Ике һанды ҡушҡандан барлыҡҡа килгән һөҙөмтә. *Ҡушылдыҡты сығарыу.*

**ҡушылыусы** *и.* Ҡушылған һан.

**ҡушымта** *и.* **1.** Нимәгәләр ҡушылып аралашҡан, ҡатнашҡан нәмә. *Матдәне ҡушымталарҙан таҙартыу.* **2.** Төп нәмәгә өҫтәлгән нәмә; өҫтәмә. *Газетаға ҡушымта сығарыу.* **3.** Йырҙың һәр куплет аҙағында ҡабатлана торған өлөшө. *Йырҙың ҡушымтаһы. Ҡушымтаны ҡабатлау.*

**ҡушыу[1] (ҡуш-)** *ҡ.* **1.** Бер нәмәне икенсеһе менән беректереү. *Сәйгә шәкәр ҡушыу.* **2.** Бер һанға икенсе һанды өҫтәү. *Ҡушыу билдәһе. Һандарҙы ҡушыу.* **3.** Бергә берләштереү. *Ҡушып тегеү.* ♦ **Исем ҡушыу** 1) яңы тыуған балаға исем беркетеп ҡуйыу *(йола буйынса)*; 2) кешегә ҡушамат тағыу.

**ҡушыу[2] (ҡуш-)** *ҡ.* **1.** Ниҙер башҡарырға әйтеү; бойороу. *Йомош ҡушыу. Эш ҡушыу.* **2.** Ниҙер башҡарырға йәлеп итеү. *Бесән сабырға ҡушыу. Эшкә ҡушыу.*

**ҡуян** *и.* **1.** Кимереүселәр ғаиләһенә ҡараған ҡыҫҡа ҡойроҡло, оҙон шеш ҡолаҡлы йәнлек. *Ата ҡуян. Инә ҡуян. Бала ҡуян. Аҡ ҡуян. Һоро ҡуян. Үр ҡуяны. Ҡуян тиреһе. Ҡуянға тоҙаҡ ҡороу. Ҡуян кәпәс. Йорт ҡуяны.* **2.** Йортта аҫрала торған ҡыҫҡараҡ аяҡлы ҡуян. *Ҡуян аҫрау. Ҡуян фермаһы.* ♦ **Ҡуян йөрәкле** бик ҡурҡаҡ.

**ҡуянтубыҡ (ҡуянтубығы)** *и.* Кишергә оҡшап торған ашамлыҡ үлән. *Ҡуянтубыҡ соҡоу.*

**ҡыбырлау (ҡыбырла-)** *ҡ.* **1.** Әҙ генә хәрәкәтләнеү; ҡыймылдау. *Ҡыбырлай башлау. Ҡыбырламай ғына ултырыу.* **2.** *күсм.* Эш эшләгәндә, йөрөгәндә хәрәкәтләнеү. *Етеҙ ҡыбырлау. Әкрен ҡыбырлау.*

**ҡыҙ** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙ енесенән булған бала. *Ете йәшлек ҡыҙ. Еткән ҡыҙ. Матур ҡыҙ. Ҡыҙ үҫтереү.* **2.** Ата-әсәнең ҡатын-ҡыҙ енесенән булған балаһы. *Атаһы ҡыҙын иркәләй. Әсәһе ҡыҙын ныҡ ярата.*

**ҡыҙартыу (ҡыҙарт-)** *ҡ.* **1.** Ҡыҙыл төҫкә индереү, ҡыҙылға буяу. *Ҡояш офоҡто ҡыҙартты. Иренде ҡыҙартыу.* **2.** *күсм.* Уңайһыҙлыҡ хәленә төшөрөү, оялтып йөҙөн ҡыҙылландырыу. *Йөҙҙө ҡыҙартыу.*

**ҡыҙарыу (ҡыҙар-)** *ҡ.* **1.** Ҡыҙыл төҫкә инеү, ҡыҙылға әйләнеү. *Ҡыҙарып ҡояш ҡалҡа. Ҡыҙарып бешеү. Уттай ҡыҙарыу.* **2.** *күсм.* Уңайһыҙлыҡтан, оялыштан йөҙгә ҡыҙыл төҫ сығыу. *Оялыштан ҡыҙарыу.*

**ҡыҙғаныс** *с.* Йәлләү, үкенеү тойғоһо уятҡан, йөрәк әрнеткес. *Ҡыҙғаныс кеше. Ҡыҙғаныс хәл. Ҡыҙғаныс булыу.*

**ҡыҙғаныу (ҡыҙған-)** *ҡ.* **1.** Ауыр хәлдә күреп әсенеү; йәлләү, аяу. *Малды ҡыҙғаныу. Ҡыҙғаныу тойғоһо.* **2.** Ҡулдан ебәрергә, түгергә йәлләү. *Аҡсаны ҡыҙғаныу. Көстө ҡыҙғаныу.*

**ҡыҙғылт** *с.* Ҡыҙылға тартым. *Ҡыҙғылт нур. Ҡыҙғылт сәскә.*

**ҡыҙҙырыу (ҡыҙҙыр-)** *ҡ.* **1.** Ут яғып йәки утҡа тотоп эҫетеү. *Мейесте ҡыҙҙырыу. Табаны ҡыҙҙырыу. Тимерҙе ҡыҙҙырыу.* **2.** Ашамлыҡты утта һыуһыҙ бешереү; ҡурыу. *Ит ҡыҙҙырыу. Ҡурмас ҡыҙҙырыу.* **3.** Бик ныҡ эҫетеү. *Ҡояш ҡыҙҙыра.* **4.** *күсм.* Эшләтеп ебәреү; тоҡандырыу. *Машинаны ҡыҙҙырыу. Моторҙы ҡыҙҙырыу.* **5.** *күсм.* Ныҡ орошоу; ҡаты әрләү. *Дәрескә һуңлаған өсөн ҡыҙҙырыу.*

**ҡыҙ-ҡырҡын** *и. йыйн.* Ҡыҙҙар. *Ҡыҙ-ҡырҡын уйыны.*

**ҡыҙығыу (ҡыҙыҡ-)** *ҡ.* **1.** Күңел биреү, бирелеү; мауығыу. *Ҡыҙығып тыңлау. Ҡыҙығып уҡыу. Ҡыҙығып китеү. Йырға ҡыҙығыу.* **2.** Нимәнелер булдырыу, нимәгәлер эйә булыу теләге уяныу. *Аҡсаға ҡыҙығыу. Донъяға ҡыҙығыу. Малға ҡыҙығыу.*

**ҡыҙыҡ** *с.* **1.** Көлкөнө килтерә торған; мәрәкә. *Ҡыҙыҡ хәбәр. Ҡыҙыҡ һүҙ. Ҡыҙыҡ булыу. Ҡыҙыҡ күреү.* **2.** Күңелгә яраған; ирмәк. *Ҡыҙыҡ китап. Ҡыҙыҡ уйын. Ҡыҙыҡ эш.*

**ҡыҙыҡһындырыу (ҡыҙыҡһындыр-)** *ҡ.* Кемдәлер ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уятыу. *Эш менән ҡыҙыҡһындырыу.*

**ҡыҙыҡһыныу (ҡыҙыҡһын-)** *ҡ.* **1.** Мөһим һанап ныҡ иғтибар биреү; мауығыу. *Халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныу.* **2.** Нимәнелер белергә, айышына төшөнөргә тырышыу. *Ҡыҙыҡһыныу тыуыу. Шахматҡа ҡыҙыҡһыныу артыу.*

**ҡыҙыҡһыныусан** *с.* Һәр нәмә менән ҡыҙыҡһыныл, белергә тырышҡан. *Ҡыҙыҡһыныусан кеше.*

**ҡыҙыл** *с.* **1.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе; ҡан төҫө. *Ҡыҙыл байраҡ. Ҡыҙыл күлдәк. Ҡыҙыл сәскә.* **2.** Үҫемлек, йәнлек һәм айырым минерал атамаларының ҡатмарлы төҫ белдергән һүҙбәйләнештәрҙең тәүге өлөшө булып килә. *Ҡыҙыл бөрләгән. Ҡыҙыл ҡарағат. Ҡыҙыл мәк. Ҡыҙыл төлкө. Ҡыҙыл баҡыр. Ҡыҙыл яҡут. Ҡыҙыл күк. Ҡыҙыл һары.* **3.** *күсм.* Революцион көрәш, совет ҡоролошо һәм Ҡыҙыл Армияға бәйле; революция яҡлы. *Ҡыҙыл партизан. Ҡыҙыл һалдаттар. Ҡыҙыл юл.*

**ҡыҙылгүҙ** *и.* Карптар ғаиләһенә ҡараған ҡыҙыл күҙле аҡ балыҡ.

**ҡыҙылғанат** *и.* Карптар ғаиләһенә ҡараған ҡараһыу йәшел төҫлө, ҡыҙыл ҡанатлы балыҡ.

**ҡыҙылса** *и.* Тәнде алһыу һипкел ҡаплауҙан ғибәрәт булған, тәндә бик юғары температура тыуҙырған йоғошло ауырыу.

**ҡыҙылтүш** *и.* Алаҡас турғай һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, ата ҡоштоң түше ҡыҙыл булған урман турғайы.

**ҡыҙыныу (ҡыҙын-)** *ҡ.* Тәнде эҫегә ҡыҙҙырыу. *Ҡояшта ҡыҙыныу. Утҡа ҡыҙыныу. Ҡыҙынып ятыу.*

**ҡыҙыу**[1] **(ҡыҙ-)** *ҡ.* **1.** Ныҡ эҫе хәлгә килеү. *Мейес ҡыҙған. Тимер ҡыҙа. Тән ҡыҙа. Ҡыҙып яныу.* **2.** Еүеш көйө баҫырылып йылыныу; яныу, эҫеү. *Бесән ҡыҙа. Иген ҡыҙған. Тиреҫ ҡыҙа.* **3.** *күсм.* Ярһыу төҫ алыу, ныҡ көсәйеү, йәнләнеү. *Бәхәс ҡыҙа. Уйын ҡыҙған. Һуғыш ҡыҙҙы. Ҡыҙып һөйләшеү.* **4.** *күсм.* Асыу, нәфрәт менән ярһыу; ҡотороу, шашыныу. *Ҡыҙып китеү. Ҡыҙып әрләү.* ♦ **Күҙ ҡыҙыу** нимәгәлер һоҡланып ҡыҙығыу, үҙеңдеке итке килеү.

**ҡыҙыу**[2] *с.* **1.** Бик юғары температуралы, ныҡ эҫе. *Ҡыҙыу көн. Ҡыҙыу ҡояш. Ҡыҙыу мейес. Ҡыҙыу булыу.* **2.** *күсм.* Бик етеҙ, йылдам. *Ҡыҙыу аҙымдар. Ҡыҙыу хәрәкәт. Ҡыҙыу атлау.* **3.** *күсм.* Ярһыу хисле, тиҙ ярһып китеүсән. *Ҡыҙыу кеше. Ҡыҙыу холоҡло.*

**ҡыҙыулыҡ (ҡыҙыулығы)** *и.* **1.** Юғары температуралы булыу; эҫелек. *Ҡандың ҡыҙыулығы. Ҡыҙыулыҡ һүрелеү.* **2.** *күсм.* Тиҙ генә тоҡанып, үртәнеп китеү сифаты. *Ҡыҙыулыҡ күрһәтеү.*

**ҡый** *и.* **1.** Кәрәкһеҙ булған, ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә; сүп-сар. *Ҡыйҙы һеперәү. Ярманың ҡыйын таҙартыу.* **2.** Баҫыуҙа, иген араһында үҫкән төрлө-төрлө кәрәкһеҙ үҫемлек; сүп. *Игенде ҡый баҫҡан. Картуфтың ҡыйын утау.*

**ҡыйбат** *с.* Хаҡы ҙур аҡсаға торған, юғары баһалы; *киреһе* арзан. *Ҡыйбат хаҡҡа алыу. Ҡыйбат тороу. Ҡыйбат түләү.*

**ҡыйлау (ҡыйла-)** *ҡ.* Ҡыйлы итеү, ҡыйҙан баҫтырыу; сүпләү. *Иҙәнде ҡыйлау. Баҫыуҙы ҡыйлау.*

**ҡыймылдау (ҡыймылда-)** *ҡ.* Урындан ҡуҙғалыу, урында хәрәкәтләнеү, ҡуҙғалыу, ҡыбырлау. *Әкренләп ҡыймылдау. Ултырған ерҙән ҡыймылдау.*

**ҡыйратыу (ҡыйрат-)** *ҡ.* **1.** Ватыу, емереү, боҙоу. *Йортто ҡыйратыу. Ҡаланы ҡыйратыу. Арбаны ҡыйратыу.* **2.** Тар-мар итеү. *Дошман ғәскәрен ҡыйратыу. Ҡыйратып ташлау.*

**ҡыйрау (ҡыйра-)** *ҡ.* **1.** Емерек хәлгә килеү; емерелеү, ҡыйралыу. *Арба ҡыйраны. Ҡәлғә ҡыйраған.* **2.** Тар-мар булыу, юҡҡа сығыу. *Ғәскәр ҡыйраны.*

**ҡыйшайыу (ҡыйшай-)** *ҡ.* **1.** Ҡыйыш хәлгә килеү. *Бағана ҡыйшайған. Итек үксәһе ҡыйшайҙы. Ҡыйшайып ауыу.* **2.** *күсм.* Тиҙ генә үсегеү, үпкәләп барыу. *Ҡыйшайып барыу. Ҡыйшайып йөрөү.*

**ҡыйыҡ (ҡыйығы)** *и.* Йорт, ҡаралтының түбә ябыуы. *Өй ҡыйығы. Ҡыйыҡҡа менеү. Ҡыйыҡты ябыу.*

**ҡыйын** *с.* Хәл итеүе, кисереүе ҡатмарлы һәм яфалы; ауыр; *киреһе* анһат. *Ҡыйын мәсьәлә. Ҡыйын тормош. Ҡыйын хәл. Ҡыйын булыу. Ҡыйын күреү.*

**ҡыйынлыҡ (ҡыйынлығы)** *и.* Еңеүе, үтәүе ҡатмарлы, яфалы хәл; ауырлыҡ; *кирәһе* анһатлыҡ. *Ҡыйынлыҡ кисереү. Ҡыйынлыҡтарҙы еңеү. Ҡыйынлыҡҡа түҙеү. Ҡыйынлыҡ менән көн күреү.*

**ҡыйырһытыу (ҡыйырһыт-)** *ҡ.* Үҙ күрмәй ситкә тибеү; ситләтеү. *Ҡыйырһытырға бирмәү. Ҡыйырһытып йәшәтеү.*

**ҡыйыу** *с.* **1.** Оялып, тартынып тормаған; баҙнатсыл. *Ҡыйыу бала. Ҡыйыу булыу. Ҡыйыу тотоноу.* **2.** Ҡурҡыу белмәç; батыр йөрәкле. *Ҡыйыу егет. Ҡыйыу аҙым яһау.*

**ҡыйыулыҡ (ҡыйыулығы)** *и.* Ҡурҡмау, тәүәккәл булыу сифаты; батырлыҡ. *Ҡыйыулыҡ күрһәтеү. Ҡыйыулыҡ – ярты ырыҫ.* (Әйтем.)

**ҡыйыуһыҙ** *с.* Тартынып, оялып тороусан; баҙнатһыҙ. *Ҡыйыуһыҙ кеше. Ҡыйыуһыҙ булыу.*

**ҡыйыш** *с.* Тура йүнәлешкә, торошҡа тап килмәгән; кәкре, салыш, ауыш. *Ҡыйыш ауыҙ. Ҡыйыш мөрйә. Ҡыйыш булыу.*

**ҡыл** *и.* **1.** Аттың ялы, ҡойроғо һәм ҡайһы бер хайуандарҙың оҙон шырт йөнө. *Ат ҡылы. Ҡойроҡ ҡылын йолҡоу. Ҡыл арҡан. Ҡыл иләк.* **2.** Музыка ҡоралдарының сиртеп, һыҙып уйнала торған ебе. *Думбыра ҡылы. Ҡыллы музыка ҡоралдары.*

**ҡылансыҡ** *с.* Артыҡ борғолана, һырғалана торған, остоҡай. *Ҡылансыҡ ҡыҙ.*

**ҡыланыу (ҡылан-)** *ҡ.* **1.** Билдәле бер рәүештә, тәртиптә эш итеү. *Иркен ҡыланыу. Һаҡ ҡыланыу.* **2.** Үҙенең булмышына тап килмәгән сифатта күренергә тырышыу. *Меҫкен булып ҡыланыу. Эре ҡыланыу.* **3.** Үҙенә иғтибар иттерергә тырышып борғоланып-һырғаланыу. *Ҡыланып бейеү. Килешһеҙ ҡыланыу.*

**ҡыланыш** *и.* Эш-ҡылыҡ, холҡо, рәүеше. *Ағас емешенән, әҙәм ҡыланышынан беленер.* ( Әйтем.)

**ҡылған** *и.* Ялбыр сал башлы ҡыяҡ үлән. *Дала ҡылғаны. Тау ҡылғаны. Малды ҡылғанда йөрөтөү. Ҡылғанлы дала.*

**ҡылый** *и.* Икеһе ике яҡҡа ҡараған (күҙ). *Ҡылый күҙ. Ҡылый булыу.*

**ҡылсыҡ (ҡылсығы)** *и.* **1.** Йәнлек тиреһенең йомшаҡ йөнө араһындағы эре йөн; ҡыл. **2.** Иген башағының сәнскеле мыйығы. *Арпа ҡылсығы.* **3.** Балыҡтың ваҡ һөйәге. *Сабаҡтың ҡылсығы күп була.*

**ҡылыҡ (ҡылығы)** *и.* **1.** Башҡарған эш, ҡыланыш. *Йәмғиәткә файҙалы ҡылыҡ.* **2.** Кешенең булмышын билдәләй торған сифат. *Насар ҡылыҡлы кеше. Яҡшы ҡылыҡ ҡылыу.*

**ҡылым** *и. грам.* Эш-хәрәкәтте, хәлде белдергән, заман, зат, һан менән үҙгәрә торған һүҙ төркөмө. *Ҡылым категориялары. Ҡылымдың заман менән үҙгәреше.*

**ҡылыс** *и.* Сабыу, сәнсеү өсөн ҡулланылған үткер йөҙлө һуғыш ҡоралы. *Булат ҡылыс. Ҡылыс ҡыны.*

**ҡылыу (ҡыл-)** *ҡ.* **1.** Ниҙелер тормошҡа ашырыу, эш итеү. *Башбаштаҡлыҡ ҡылыу. Егетлек ҡылыу. Уҫаллыҡ ҡылыу.* **2.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында исемгә ҡушылып, шуның мәғәнәһендә ҡылым яһай. *Ғибәҙәт ҡылыу. Доға ҡылыу. Ҡабул ҡылыу. Тамаша ҡылыу. Фиҙа ҡылыу.*

**ҡымыҙ** *и.* Бейә (ҡәзә, дөйә, һыйыр) һөтөнән әсетеп яһалған эсемлек. *Сөсө ҡымыҙ. Әсе ҡымыҙ. Ҡымыҙ бешеү. Ҡымыҙ яһау. Ҡымыҙ эсеү.*

**ҡымыҙлыҡ (ҡымыҙлығы)** *и.* Ваҡ өлпө сәскәле, быуынтыҡ һабаҡлы әскелтем үлән. *Ҡырсын ҡымыҙлығы. Ялан ҡымыҙлығы. Ҡымыҙлыҡ япрағы.*

**ҡын** *и.* Билгә тағып йөрөй торған үткер ҡоралдың һауыты. *Бысаҡ ҡыны. Ҡылыс ҡыны. Хәнйәрҙе ҡынға тығыу.*

**ҡына[1] (ҡына гөлө)** *и.* Итләс һабаҡлы ҡыҙыл сәскәле бүлмә гөлө. *Ҡына гөлө үҫтереү.*

**ҡына[2] (кенә, ғына, генә)** *киҫ.* **1.** Һүҙҙең мәғәнәһен сикләй; тик. *Алға ғына ҡарау. Баҡсала ғына йөрөү. Эргәлә генә тотоу.* **2.** Айырым һүҙгә баҫым яһай. *Таңға табан ғына йоҡлап китеү. Бәләкәй генә һауыт.* **3.** Хис-тойғоға, хәрәкәткә көсәйтеү мәғәнәһе бирә. *Ҡайҙа ғына барманым. Ниҙәр генә күрмәнем. Ҡайтһын ғына әле.* **4.** Иркәләү, кесерәйтеү мәғәнәһен бирә. *Кемдең генә балаһы икән? Бит кенәһе янып тора.*

**ҡыңғырау** *и.* Шалтыраған тауыш сығарыу өсөн эсенә тел ҡуйып эшләнгән ҡыуыш нәмә. *Еҙ ҡыңғырау. Суйын ҡыңғырау. Ҡыңғырау тауышы. Ҡыңғырау тағыу.*

**ҡыр[1]** *и.* Арҡаһы тар ғына булып һуҙылған тау; һырт. *Ҡырға артылыу. Тау ҡыры.*

**ҡыр[2]** *и.* **1.** Ниҙең дә булһа сите, ситке өлөшө. *Күл ҡыры. Урман ҡыры.* **2.** Нимәнәндер ситтәге урын, сит. *Ҡырға ҡарау. Юлдан ҡырға сығыу. Ҡырға ташлау. Ҡырҙа булыу. Ҡырға китеү.* **3.** Кеше тарафынан ҡулға эйәләштерелмәгән, иректә йәшәгән (йәнлек, ҡош-ҡорт). *Ҡыр ҡәзәһе. Ҡыр ҡаҙы. Ҡыр өйрәге.* **4.** Кеше тарафынан сәсеп үҫтерелмәгән, культуралаштырылмаған (үҫемлек). *Ҡыр йыуаһы. Ҡыр сейәһе.* **5.** Тигеҙ ялан йәки иген сәскән ер. *Асыҡ ҡыр. Ҡыр буйлап барыу. Бойҙай ҡыры. Ҡыр эше.*

**ҡырағай** *с.* **1.** Кеше ҡарамаған, аҫрамаған, ҡулға эйәләштерелмәгән. *Ҡырағай хайуан. Ҡырағай бал ҡорто.* **2.** Кеше үҫтермәгән. *Ҡырағай алма. Ҡырағай үҫемлек.* **3.** Тәүтормош кимәлендә булған. *Ҡырағай халыҡ.* **4.** Кешегә ылыҡмаған; ҡырыҫ. *Ҡырағай булып үҫеү. Ҡырағай холоҡло.*

**ҡырағайланыу (ҡырағайлан-)** *ҡ.* **1.** Ҡырағайға әйләнеү. *Бесәй ҡырағайланған. Ҡырағайланып китеү.* **2.** Кешегә ылыҡмаҫ булып китеү; ҡырыҫланыу.

**ҡырау** *и.* Ҡарға әйләнеп һауанан төшкән ысыҡ. *Ҡырау төшөү. Үҫемлектәргә ҡырау тейеү.*

**ҡырҡбыуын** *и.* Быуынтыҡ һабаҡлы, ылыҫ кеүек нәҙек япраҡлы, юғары төҙөлөшлө һеркәле үҫемлек; шыршы үлән. *Урман ҡырҡбыуыны. Ялан ҡырҡбыуыны.*

**ҡырҡыу (ҡырҡ-)** *ҡ.* **1.** Үткер ҡорал менән ярыу, өҙөү. *Бысаҡ яҡшы ҡырҡа. Ҡайсы менән ҡырҡыу. Бауҙы ҡырҡыу.* **2.** Үткер нәмә менән тәнде йәрәхәтләү. *Аяҡты ҡырҡыу. Ҡулды ҡырҡыу. Тәрән ҡырҡыу.* **3.** Үткер ҡорал менән үҫемлектәрҙе киҫеп ауҙарыу, сабып алыу. *Ағасты ҡырҡыу. Ҡурай ҡырҡып алыу. Балта менән ҡырҡыу.* **4.** Үткер ҡорал менән өлөш-өлөшкә, киҫәк-киҫәккә бүлгеләү, турау. *Туҡмас ҡырҡыу. Утын ҡырҡыу.* **5.** *күсм.* Кимереп, йырғыслап ашау. *Бейманы көйә ҡырҡҡан.*

**ҡырмыҫҡа** *и.* Сүп-сарҙан оя өйөп, күс булып йәшәгән ер бөжәге. *Ҡара ҡырмыҫҡа. Һары ҡырмыҫҡа. Ҡанатлы ҡырмыҫҡа. Ҡырмыҫҡа иләүе.*

**ҡырпаҡ (ҡырпағы)** *и.* Ер туңғас төшкән йоҡа йәш ҡар һәм шул мәл. *Ҡырпаҡ ҡар. Ҡырпаҡ төшөү. Ҡырпаҡ ҡарҙан барыу.*

**ҡырсын** *и.* Һыу буйындағы шыма ваҡ таш һәм шундай ташлы урын. *Ҡырсын ҡаҙыу. Юлға ҡырсын түшәү. Ҡырсын ташы.*

**ҡырсынлыҡ (ҡырсынлығы)** *и.* Ҡырсынлы һыу ситe. *Ҡырсынлыҡта ҡаҙыныу.*

**ҡырт (ҡырт-ҡырт)** *оҡш.* **1.** Ҡаты йәки мурт нәмәне өҙгәндә, ҡырҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ҡырт итеп ҡалыу. Ҡырт иттереп тешләү. Ҡырт-ҡырт көйшәү.* **2.** *р. мәғ.* Ҡапыл, киҫкен хәрәкәт менән. *Ҡырт боролоу. Ҡырт туҡтау.*

**ҡырылыу (ҡырыл-)** *ҡ.* **1.** Ышҡылып, өйкәлеп ашалыу. *Аттың муйыны ҡырылған.* **2.** *күсм.* Күпләп үлеү. *Астан ҡырылыу. Ауырыуҙан күп мал ҡырылды.* ♦ **Себен кеүек ҡырылыу** бик күпләп үлеү. **Күңел ҡырылыу.**

**ҡырын** *с.* **1.** Бер яҡҡа ауыш, иңкеү. *Бүректе ҡырын кейеү.* **2.** *күсм.* Дөрөҫ йүнәлештән, тейешле тәртиптән ситкә киткән; насар. *Ҡырын һүҙ. Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә.* (Мәҡәл.) *Ҡырын һөйләү.*

**ҡырыныу (ҡырын-)** *ҡ.* Һаҡал-мыйыҡты ҡырыу. *Иртә һайын ҡырыныу. Ҡырынып алыу.*

**ҡырыҫ** *с.* **1.** Кешегә ҡарата мөнәсәбәттә ҡаты, ҡырҡыу. *Ҡырыҫ тәбиғәтле. Ҡырыҫ холоҡло. Ҡырыҫ булыу.* **2.** Ҡулға эйәләшеп бөтмәгән, ҡырағайырaҡ. *Ҡырыҫ ат.* **3.** Йәшәү өсөн ҡыйын булған. *Ҡырыҫ тәбиғәт.*

**ҡырыу (ҡыр-)** *ҡ.* **1.** Үткер нәмә менән ышҡып, низендер өҫкө ҡатлауын алыу, шымартыу. *Иҙәнде ҡырыу. Ҡулсаны станокта ҡырыу.* **2.** Тешле, үткер ҡорал менән ышҡып ваҡлау. *Алма ҡырыу. Кишер ҡырыу. Ҡырып таҙартыу.* **3.** Үткер ҡорал менән сәсте, мыйыҡ-һаҡалды алыу. **4.** *күсм.* Күпләп үлтереү, юҡ итеү. *Дошманды ҡырыу. Малды ҡырыу. Ҡырып һалыу.*

**ҡысҡырыу (ҡысҡыр-)** *ҡ.* Көслө тауыш сығарыу, һөрәнләү. *Ҡысҡырып йырлау. Ҡысҡырып көләү. Асыуланып ҡысҡырыу.*

**ҡысыу (ҡысы-)** *ҡ.* **1.** Тәндә нимәлер йыбырлаған һымаҡ булып, тырнағы килеү. *Баш ҡысыу. Танау ҡысыу. Ус ҡысыу.* **2.** *күсм.* Тик тороп сыҙамау, ҡыҙышыу; ҡысыныу. *Эшләргә ҡул ҡысыу. Ҡысып тороу.*

**ҡыҫала** *и.* Йоҡа ҡабырсаҡ менән ҡапланған быуынтыҡ кәүҙәле, йөҙгөс ҡойроҡло, ҡыҫҡыс аяҡлы сөсө һыу йәнлеге. *Ҡыҫала ояһы. Ҡыҫала тотоу.*

**ҡыҫан** *и.* Эсенә низер ҡуйыр өсөн тәғәйенләнгән тирәс; рам. *Тәҙрә ҡыҫаны. Ҡыҫанға рәсем ҡуйыу.*

**ҡыҫҡа** *с.* **1.** Оҙонлоғо, буйы, бейеклеге бер саманан кәм, бәләкәй; *киреһе* оҙон. *Ҡыҫҡа кейем. Ҡыҫҡа таяҡ. Ҡыҫҡа буйлы. Ҡыҫҡа ҡойроҡ.* **2.** Ваҡыт араһы әҙ булған; дауамһыҙ. *Ҡыҫҡа ғүмер. Ҡыҫҡа көн. Төн ҡыҫҡа булыу.* **3.** Йөкмәткеһе ҙур булмаған, бәләкәй күләмле. *Ҡыҫҡа мәҡәлә. Ҡыҫҡа хат. Ҡыҫҡа һөйләм.*

**ҡыҫҡартыу (ҡыҫҡарт-)** *ҡ.* **1.** Низендер буйын, һуҙымын кәметеү; ҡыҫҡа итеү. *Арҡанды ҡыҫҡартыу. Костюмды ҡыҫҡартыу. Ҡыҫҡартып тегеү.* **2.** Ваҡыт араһын, дауамын кәметеү. *Эш сәғәттәрен ҡыҫҡартыу. Ҡайғы ғүмерҙе ҡыҫҡарта.* **3.** Низендер күләмен, һанын кәметеү. *Докладты ҡыҫҡартыу. Ҡоралды ҡыҫҡартыу. Сәсеү ерен ҡыҫҡартыу.* **4.** *һөйл.* Хеҙмәткәрҙәр һанын кәметеп, эштән сығарыу. *Йыйыштырыусыларҙы ҡыҫҡартыу.*

**ҡыҫҡарыу (ҡыҫҡар-)** *ҡ.* **1.** Буйы, һуҙымы кәмеү; ҡыҫҡаға әйләнеү; *киреһе* оҙонайыу. *Бау өҙөлөп ҡыҫҡарҙы. Юлды ҡыҫҡартыу.* **2.** Ваҡыт араһы кәмеү. *Көндәр ҡыҫҡара. Дәрес ҡыҫҡарҙы. Штат ҡыҫҡарҙы.*

**ҡыҫҡаса** *и.* Оҙаҡҡа һуҙмай, ҡыҫҡа ғына итеп. *Ҡыҫҡаса аңлатыу. Ҡыҫҡаса яҙып биреү.*

**ҡыҫтау**[1] **(ҡыҫта-)** *ҡ.* **1.** Тар урынға көсләп, тығыҙлап һыйҙырыу. *Ҡыҫтап тултырыу. Ҡыҫтап тығыу.* **2.** Ниҙер эшләргә көсләү. *Ашарға ҡыҫтау. Ҡыҫтап сәй эсереү.*

**ҡыҫтау**[2] *с.* **1.** Ныҡ ҡыҫынҡы; тар; *киреһе* иркен. *Ҡыҫтау урын. Ҡыҫтау булыу.* **2.** Ваҡыт йәһәтенән тар; ашығыс. *Ҡыҫтау эш. Ваҡыт бик ҡыҫтау. Ҡыҫтауға тура килеү.*

**ҡыҫтыбый** *и.* **1.** Сөсө йәймәгә тары бутҡаһы, иҙгән картуф төрөп эшләнгән ашамлыҡ. *Ҡыҫтыбый ашау. Ҡыҫтыбый бешереү.* **2.** *күсм.* Юҡҡа-барға артыҡ тығылып барған кешегә ҡарата әйтелә.

**ҡыҫтырыу (ҡыҫтыр-)** *ҡ.* **1.** Ниҙендер ике араһына ҡуйып ҡыҫыу. *Аяҡ араһына ҡыҫтырыу. Бармаҡҡа ҡыҫтырыу.* **2.** Ике араға тығыу. *Еккә ҡыҫтырыу. Балтаны билгә ҡыҫтырыу. Итәкте ҡыҫтырып ҡуйыу.*

**ҡыҫыҡ** *с.* Ябылыр-ябылмаҫ килеш торған. *Ҡыҫыҡ ишек. Ҡыҫыҡ күҙ.*

**ҡыҫылыу (ҡыҫыл-)** **1.** Ниҙендер араһына эләгеп һығылыу. *Бармаҡ ишеккә ҡыҫылды. Халыҡ араһында ҡыҫылыу.* **2.** Ике араға тығылып инеү. *Тешкә ит ҡыҫылыу.* **3.** *күсм.* Урынлы-урынһыҙға эшкә, һүҙгә тығылыу. *Һүҙгә ҡыҫылыу. Ҡыҫылмаған ере юҡ.*

**ҡыҫынҡы** *и.* **1.** Тығыҙ, тар, ҡыҫтау. *Ҡыҫынҡы өй.* **2.** Кәрәк-яраҡ, аҙыҡ һ. б. йәһәтенән етешһеҙ. *Малға аҙыҡ ҡыҫынҡы.*

**ҡыҫыу (ҡыҫ-)** *ҡ.* **1.** Ике араға ҡуйып, уратып һығыу, ҡуша килтереү. *Ҡыҫаға ҡыҫыу. Теште ҡыҫыу. Билдән ҡыҫыу. Ҡыҫып бәйләү. Ҡыҫып тотоу.* **2.** Асылыр-асылмаҫ итеп ҡуйыу, яҡын килтереү. *Ишекте ҡыҫыу. Күҙҙе ҡыҫыу.* **3.** Сығыр-сыҡмаҫ итеп кәметеү. *Газды ҡыҫыу. Шәмде ҡыҫыу.* **4.** Тығыҙ, тар булыу. *Итек аяҡты ҡыҫа. Ҡайыш билде ҡыҫа.* **5.** Көс менән ирекһеҙләп ҡыҫырыҡлау. *Мөйөшкә ҡыҫыу. Ситкә ҡыҫыу.* **6.** *күсм.* Иркен, мул тотонмау, самалап тотоу. *Аҡсаны ҡыҫыу. Ашауҙы ҡыҫыу. Эш хаҡын ҡыҫыу.*

**ҡытаҡ-ҡытаҡ** *оҡш.* Тауыҡ ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ.

**ҡытҡылдау (ҡытҡылда-)** *ҡ.* Ҡыт-ҡыт итеү. *Тауыҡ ҡытҡылданы.*

**ҡыт-ҡыт** *оҡш.* Тауыҡ тауышын белдергән һүҙ.

**ҡытлыҡ (ҡытлығы)** *и.* **1.** Аҙыҡҡа, игенгә булған етешһеҙлек; йотлоҡ, аслыҡ; *киреһе* туҡлыҡ. *Ҡытлыҡ килеү. Ҡытлыҡ кисереү.* **2.** *күсм.* Нимәгәлер булған етешһеҙлек, ярлылыҡ; *киреһе* муллыҡ. *Аҡсаға ҡытлыҡ. Ҡағыҙға ҡытлыҡ.*

**ҡытыҡлау (ҡытыҡла-)** *ҡ.* **1.** Бармаҡ менән тәнде йыбырлатып көлкөнө килтереү. *Ҡытыҡлап көлдөрөү.* **2.** *күсм.* Наҙ менән рәхәт хис уятыу. *Аш еҫе танауҙы ҡытыҡлай.*

**ҡыуаҡ (ҡыуағы)** *и.* Төбөнән үк тармаҡланып үҫә торған ваҡ ағас. *Ҡарағат ҡыуағы. Сейә ҡыуағы.*

**ҡыуандырыу (ҡыуандыр-)** *ҡ.* Ҡыуаныrға сәбәп биреү; шатландырыу. *Баланы ҡыуандырыу. Әсәйҙе ҡыуандырырға тырышыу.*

**ҡыуаныс** *и.* Күңелгә ҙур ҡәнәғәтлек, рәхәтлек биргән хис; шатлыҡ, кинәнес, һөйөнөс; *киреһе* ҡайғы. *Ҡыуаныс кисереү. Ҡыуаныс булыу. Ҡыуаныс менән йәшәү.*

**ҡыуаныслы** *с.* Ҡыуаныс, шатлыҡ менән тулы; *киреһе* ҡайғылы. *Ҡыуаныслы тормош. Ҡыуаныслы хәбәр. Ҡыуаныслы булыу.*

**ҡыуаныу (ҡыуан-)** *ҡ.* Күңел ҡәнәғәтлеге кисереү; шатланыу; *киреһе* ҡайғырыу. *Ҡыуанып йәшәү. Ҡыуанып бөтә алмау.*

**ҡыуарыу (ҡыуар-)** *ҡ.* Ултырған көйө ҡороп кибеү (үҫемлектәргә ҡарата). *Ағас ҡыуарған. Үләндәр ҡыуара.*

**ҡыуыу (ҡыу-)** *ҡ.* **1.** Берәй урындан йәки эргәнән китергә талап итеү. *Ҡыуып ебәреү. Ҡыуып ҡайтарыу. Ауылдан ҡыуыу. Эштән ҡыуыу.* **2.** Ашығырға ҡыҫтау, тиҙләтеү. *Шәп ҡыуыу. Атты сыбыртҡы менән ҡыуыу.* **3.** Кемделер, ниҙелер тотор өсөн артынан шәпләп барыу; баҫтырыу. *Бүре ҡыуыу. Ҡыуа төшөү. Ҡыуып тотоу.* **4.** Нимәгәлер ирешергә тырышып ынтылыу. *Байлыҡ артынан ҡыуыу. Дан артынан ҡыуыу. Донъя ҡыуыу.* **5.** Әйләп бер яҡҡа алып барыу. *Малды йәйләүгә ҡыуыу. Һыйырҙы көтөүгә ҡыуыу.* **6.** *күсм.* Нисәлер йәште йәшәй башлау. *Етмеште ҡыуыу.* ♦ **Ел ҡыуыу** бушҡа ваҡыт үткәреү, эшһеҙ йөрөү.

**ҡыуыш** *и.* **1.** Ергә ултыртылған ҡыйыҡ рәүешендәге ваҡытлыса йәшәү урыны. *Ҡабыҡ ҡыуыш. Һалам ҡыуыш. Ҡыуыш ауыҙы. Ҡыуыш ҡороу. Ҡыуышта йәшәү.* **2.** Ниҙеңдер эсендәге тишек. *Ағас ҡыуышы. Тау ҡыуышы. Ҡыуышҡа инеү.*

**ҡыуышлыҡ (ҡыуышлығы)** *и.* **1.** Нимәнеңдер эсендә өңөлөп, эскә инеп торған тишек. *Тау ҡыуышлығы. Ҡыуышлыҡ яһалыу.* **2.** Организмда булған бушлыҡ йәки төрлө ағзалар урынлашҡан урын. *Ауыҙ ҡыуышлығы. Күкрәк ҡыуышлығы. Ҡорһаҡ ҡыуышлығы.*

**ҡыш** *и.* Йылдың көҙ менән яҙ араһындағы иң һыуыҡ миҙгеле. *Ҡыш айҙары. Ҡыш көнө. Ҡыш уртаһы. Ҡыш һалҡыны. Ҡышҡа инеү. Ҡышты сығыу. Ҡыш үтеү.* ♦ **Ҡыш бабай** *ҡар.* **бабай.**

**ҡышҡы** *с.* **1.** Ҡыш көнөндәге. *Ҡышҡы ҡояш. Ҡышҡы төн. Ҡышҡы һыуыҡ.* **2.** Ҡыш өсөн тәғәйенләнгән. *Ҡышҡы кейем.*

**ҡышлау (ҡышла-)** *ҡ.* Ҡыш сығыу, ҡышлыҡҡа урынлашыу. *Айыу өңдә ҡышлай. Ҡышлап ҡалыу.*

**ҡышын** *р.* Ҡыш көнө. *Ҡышын саңғыла йөрөү.*

**ҡыя** *с.* Тура йүнәлештән ситкә ауып торған, ҡыйыш; *кireһе* тура. *Ҡыя һыҙыҡ. Ҡыя юл.*

**ҡыяҡ (ҡыяғы)** *и.* Тар ғына оҙон үлән япрағы. *Иген ҡыяғы. Күрән ҡыяғы.*

**ҡыяҡлы** *с.* **1.** Ҡыяҡ япраҡлы. *Ҡыяҡлы үлән.* **2.** *и. мәғ.* **ҡыяҡлылар** *бот.* Япрағы ҡыяҡ рәүешендәге, быуын-быуын көпшә һабаҡлы бер өлөшлө үсемлектәр ғаиләһе исеме.

**ҡыяр** *и.* Ваҡ һары сәскәле, еле һабаҡлы, оҙонса йәшелсәле баҡса үсемлеге. *Ҡыяр орлоғо. Ҡыяр сәсеү. Йәш ҡыяр. Тоҙло ҡыяр.*

**ҡәбер** *и.* Үлгән кешене ерләй торған соҡор. *Ҡәбер ҡаҙыу. Ҡәбер ташы.*

**ҡәберлек (ҡәберлеге)** *и.* Үлгән кешеләрҙе ерләй торған махсус урын; зыярат. *Ҡәберлеккә ҡуйыу.*

**ҡәбилә** *и.* Бер нисә ырыуҙан торған, тел менән ер йәһәтенән бер берәмекте тәшкил иткән халыҡ төркөмө. *Ҡәбилә теле. Ҡәбилә тормошо. Ҡәбиләләр берләшмәһе. Меңдәр ҡәбиләһе.*

**ҡәбәхәт** *с.* **1.** Бысраҡ, ерәнгес. *Ҡәбәхәт булыу.* **2.** *күсм.* Бик оятһыҙ, әшәке. *Ҡәбәхәт кеше. Ҡәбәхәт һүҙ.*

**ҡәҙер** *и.* Тормоштағы урындан, әһәмиәттән килгән юғары баһа һәм хөрмәт. *Донъя ҡәҙерен белеү. Ҡәҙер итеү. Ҡәҙер күрһәтеү. Ҡәҙер күреү.*

**ҡәҙерле** *с.* Әһәмиәткә, юғары баһаға торошло; хөрмәтле. *Ҡәҙерле бүләк. Ҡәҙерле ҡомартҡы. Ҡәҙерле ҡунаҡ. Ҡәҙерле булыу.*

**ҡәҙерләү (ҡәҙерлә-)** *ҡ.* **1.** Әрһеҙләмәй, һаҡлап тотоу. *Ҡәҙерләп кейеү.* **2.** Ҡәҙер-хөрмәт итеү. *Ололарҙы ҡәҙерләү.*

**ҡәҙәр** *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге һүҙҙәр менән бергә ара, ваҡыт сиген белдерә; саҡлы, тиклем. *Ауылға ҡәҙәр. Йәйгә ҡәҙәр. Әлегә ҡәҙәр. Килгәнгә ҡәҙәр.* **2.** Ниҙеңдер яҡынса самаһын, иҫәбен күрһәтә. *Мөмкин ҡәҙәр. Хәлдән килгән ҡәҙәр.* ♦ **Был ҡәҙәр** был тиклем дә, бик ныҡ. **Шул ҡәҙәр(е)** шул тиклем үк, шулай уҡ (ҡаршы ҡуйып сағыштырғанда ҡулланыла). **Әллә ни ҡәҙәр (тиклем)** бик күп.

**ҡәйенһеңле** *и.* Ирҙең һеңлеһе (ҡатынына ҡарата).

**ҡәйнеш** *и.* Ирҙең ҡустыһы (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың ҡустыһы (иренә ҡарата).

**ҡәйнә** *и.* Ирҙең әсәһе (ҡатынына ҡарата) һәм ҡатындың әсәһе (иренә ҡарата).

**ҡәлғә** *и. иҫк.* Һөжүмдән һаҡланыу өсөн төҙөлгән нығытма. *Ҡәлғә һуғыу. Ҡәлғәне алыу.*

**ҡәләм** *и.* Нәҙек ағас эсенә буяулы үҙәк ҡуйылған яҙыу-һыҙыу ҡоралы. *Буяулы ҡәләм. Ҡәләм ослау. Төҫлө ҡәләм. Ҡәләм менән һыҙыу. Ҡәләм һауыты.*

**ҡәнәғәт** *с.* Эш-хәлгә, нәмәгә ҡарата ризалыҡлы. *Ҡәнәғәт кеше. Ҡәнәғәт булыу. Ҡәнәғәт йәшәү.*

**ҡәнәғәтлек (ҡәнәғәтлеге)** *и.* Ҡәнәғәт булған хәл. *Ҡәнәғәтлек тойғоһо. Ҡәнәғәтлек белдереү.*

**ҡәнәғәтләнеү (ҡәнәғәтлән-)** *ҡ.* Ҡәнәғәт булыу, ҡәнәғәтлек алыу. *Сәй менән ҡәнәғәтләнеү. Үҙ эшеңдән ҡәнәғәтләнеү.*

**ҡәнәфер** *и.* Оҙонса япраҡлы, аҡ, ал төҫлө ваҡ сәскәле мәңге йәшел тропик ағас һәм шул ағастың тәмләткес итеп ҡулланылған киптерелгән сәскә бөрөһө. *Ҡәнәфер сәскәһе. Ҡәнәфер майы. Ҡәнәфер сәйнәү.*

**ҡәрҙәш** *и.* Туған булған кеше; нәҫелдәш. *Алыҫ ҡәрҙәш. Яҡын ҡәрҙәш. Ҡәрҙәш булыу.*

**ҡәтғи** *с.* Кире ҡаҡҡыһыҙ ҡырҡыу булған; киҫкен, ҡаты. *Ҡәтғи бойороҡ. Ҡәтғи ҡарар. Ҡәтғи талап. Ҡәтғи һорау. Ҡәтғи булыу.*

**ҡәһүә** *и.* **1.** Орлоғонан айырым эсемлек әҙерләнә торған тропик ағас һәм шул ағастың орлоғо. *Ҡәһүә ағасы. Ҡәһүә йыйыу.* **2.** Шул орлоҡто онтап, ҡайнатып әҙерләгән эсемлек. *Ҡәһүә ҡайнатыу. Ҡәһүә эсеү.*

**ҡәһәр** *и.* **1.** Көслө йәбер, яуыз эш. *Ҡәһәр ҡылыу. Ҡәһәр эш.* **2.** Ҡаты ҡарғыш, ләғнәт. *Ҡәһәр уҡыу. Ҡәһәр төшөү.*

**ҡәһәрләү (ҡәһәрлә-)** *ҡ.* Яман теләк, ҡарғыш менән әрләү; ҡарғау, ләғнәтләү. *Кешене ҡәһәрләү. Һуғышты ҡәһәрләү.*

# Л

**ла[1] (лә)** *терк.* Һөйләмдәге ике тиң киҫәкте һәм һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәй. *Китабы ла дәфтәре генә. Ямғыр килә лә яуа.*

**ла[2] (лә)** *киҫ.* Баҫым яһап, һүҙҙең лексик йәки грамматик мәғәнәһен көсәйтә. *Иҫе лә китмәй. Уйлап та бирмәй.*

**лаборант** *и.* Лабораторияла студент һәм уҡыусыларға прибор, препараттар әҙерләп торған хеҙмәткәр. *Физика кабинеты лаборанты. Лаборант ҡыҙ.*

**лаборатория** *и.* Тәжрибәләр үткәреү өсөн ҡулайланған бина. *Химия лабораторияһы. Лаборатория ҡорамалдары.*

**лава** *и.* Вулкан атылғанда урғылып сыҡҡан утлы шыйыҡ минераль матдә. *Лава ағымы. Лава атылыу.*

**лавка** *и.* Ҙур булмаған магазин. *Күсмә китап лавкаһы. Лавкаға тауар килтереү.*

**лавр** *и.* Япрағы тәмләткес итеп ашҡа һалына торған хуш еҫле мәңге йәшел көньяҡ ағасы. *Лавр япрағы.*

**лавсан** *и.* Нефттән эшкәртеп алынған синтетик еп төрө һәм шул ептән һуғылған туҡыма. *Лавсан ебе. Лавсан костюм. Лавсан күлдәк.*

**лагерь (лагерҙа)** *и.* **1.** Ғәскәрҙең ҡырҙағы ваҡытлы торағы. *Лагерға күсеү.* **2.** Ваҡытлыса йәшәгән урын; тораҡ. *Лагерь ҡороу. Лагерҙа ял итеү. Спорт лагеры. Лагерь режимы.* **3.** Тотҡондар, әсирҙәр тотола торған урын. *Холоҡ төҙәтеү лагеры.*

**ладья** *и.* Манараға оҡшатып эшләнгән шахмат фигураһы; тура. *Ладья менән йөрөү. Ладья менән һаҡланыу.*

**лайла** *и.* Ҡайһы бер хайуан һәм үҫемлек күҙәнәктәре тарафынан бүленеп сығарылған, һуҙылып торған масса. *Йүкә лайлаһы. Лайлаға буялыу.*

**лайлаланыу (лайлалан-)** *ҡ.* Лайлалы булыу. *Һыулы йүкә ағасы лайлаланып тора.*

**лайнер** *и.* Билдәле бер маршрут менән йөрөгән диңгеҙ йәки һауа карабы. *Океан лайнеры. Һауа лайнеры. Пассажирҙар лайнеры.*

**лайыҡ** *с.* Ниндәйҙер талапҡа тулы яуап бирерлек, тап килерлек; ярарлыҡ, торошло. *Бүләккә лайыҡ булыу. Иғтибарға лайыҡ. Лайыҡ күреү. Лайыҡ табыу.*

**лайыҡлы** *с.* Лайыҡ булырлыҡ; лайыҡ. *Хөрмәткә лайыҡлы кеше. Лайыҡлы ҡартлыҡ. Лайыҡлы маҡталыу. Лайыҡлы табыу.*

**лак** *и.* Ыҫмаланың ағас, тимер һ. б. нәмәләрҙе ялтыратыу, боҙолоуҙан һаҡлау өсөн тыш яҡтан буяй торған иретмәһе. *Иҙән лагы. Лак һөртөү. Лак эретмәһе.*

**лаклау (лакла-)** *ҡ.* Лак менән буяу, лак һөртөү. *Иҙәнде лаклау. Лаклау цехы.*

**лампа** *и.* **1.** Яҡтырта торған төрлө төҙөлөшлө прибор; шәм. *Аҫмалы лампа. Етеле лампа. Кәрәсин лампаһы. Лампа заводы.* **2.** Төрлө эш өсөн махсус маҡсат менән эшләнгән прибор. *Йәбештергес лампа. Электрон лампа.*

**лампочка** *и.* Ток тәьҫирендә ҡыҙған сымдан яҡтылыҡ биргән быяла баллон. *Йөҙ ваттлы лампочка. Янған лампочка. Лампочканы бороп ҡуйыу.*

**ландшафт** *и.* **1.** Ер өҫтөнөң үҙенә генә хас рельефы, климаты, тупрағы, үҫемлек һәм хайуандар донъяһы булған бер өлөшө. *Тау ландшафы. Үҙәк ландшафы. Ландшафт картаһы.* **2.** Урындың дөйөм күренеше, һүрәтләнеше; пейзаж. *Ағиҙел буйының ландшафы.*

**лапаҫ** *и.* Бағаналар ултыртып, башы ағас түшәп кенә ябылған, стенаһыҙ кәртә. *Малды лапаҫ аҫтына ҡуйыу.*

**лар** *и.* Ашлыҡ, ярма, он һәм башҡа нәмә һалыу өсөн ҡулланылған ҙур таҡта һандыҡ; әрйә. *Иген лары. Ларға он тултырыу.*

**ларек (ларегы)** *и.* Ваҡ-төйәк һата торған бәләкәй магазин. *Күсмә ларек. Ларекта һатыу итеү.*

**лаҫҡылдау (лаҫҡылда-)** *ҡ.* Лаҫҡ итеү, лаҫҡ-лоҫҡ килеү. *Аяҡ аҫты еүеш, лаҫҡылдап ята.*

**латин** *и.* Егерменсе йылдар аҙағынан ҡырҡынсы йылдарға тиклем башҡорт телендә ҡулланылған алфавит. *Латин таныу. Латин уҡыу.*

**латинлаштырыу (латинлаштыр-)** *ҡ.* Яҙманы латин алфавитына күсереү. *Алфавитты латинлаштырыу.*

**латинса** *р.* Латин телендә. *Латинса уҡыу. Латинса яҙыу.*

**лау (лау-лау)** *оҡш.* Ғауғалап, ярһып өргән эт тауышын белдергән һүҙ. *Лау-лау өрөү.*

**лаулау (лаула-)** *ҡ.* Лау-лау итеү (эткә ҡарата). *Эт лаулап өрә.*

**лауреат** *и.* Фән, сәнғәт һәм әҙәбиәт өлкәһендәге ҙур хеҙмәт өсөн бирелә торған дәрәжә һәм шул дәрәжәне алған кеше. *Салауат Юлаев премияһы лауреаты. Ҡурайсылар бәйгеһе лауреаты. Лауреат булыу.*

**лауылдаҡ** *с.* Ҡысҡырып, шаулап барыусан. *Лауылдаҡ кеше.*

**лауылдау (лауылда-)** *ҡ.* **1.** Лау-лау итеү, лау-лау килеү (эткә ҡарата). *Лауылдап өрөү.* **2.** *күсм.* Тауыш күтәреү, шау-шыу килеү. *Лауылдай башлау.*

**лаштырлау (лаштырла-)** *ҡ.* Лаштыр-лоштор итеү, лаштыр-лоштор килеү. *Лаштырлап атлау.*

**лаштыр-лоштор** *окш.* Лыс һыу кейем менән барғанда йәки аяҡты һөйрәп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лаштыр-лоштор атлау. Лаштыр-лоштор килеү.*

**лебер-лебер** *окш.* Саҡ-саҡ ҡына һиҙелерлек тулҡынлы хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Лебер-лебер итеү. Лебер-лебер килеү.*

**леберләү (леберлә-)** *ҡ.* Лебер-лебер итеү, лебер-лебер килеү. *Леберләп тороу.*

**легенда** *и.* Ҡасандыр булып үткән йәки булғанға иҫәпләнгән ваҡиғалар нигеҙендә ижад ителгән фольклор әҫәре; риүәйәт, хикәйәт. *Тарихи легенда. Легенда һөйләү.*

**легендар** *с.* Үҙенең әһәмиәте, эше менән халыҡ араһында дан алған. *Легендар дивизия. Легендар командир.*

**лейка** *и.* Үҫемлектәргә һыу һибеү өсөн эшләнгән һемәкле көнәк; һиптергес. *Лейка менән һыу һибеү.*

**лейтенант** *и.* Армияла, флотта кесе лейтенанттан һуң килгән офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Лейтенант булып хеҙмәт итеү. Лейтенант дәрәжәһе. Кесе лейтенант. Өлкән лейтенант.*

**лексика** *и.* **1.** Телдең йәки диалекттың бөтә һүҙ байлығы. *Башҡорт лексикаһы. Диалект лексикаһы.* **2.** Берәй эш өлкәһендә йәки бер автор тарафынан ҡулланылған һүҙҙәр йыйылмаһы. *Профессиональ лексика. З. Биишева лексикаһы.*

**лексикограф** *и.* Лексикография өлкәһендәге белгес. *Башҡорт лексикографы.*

**лексикографик** *с.* Лексикографияға мөнәсәбәтле, лексикографияға бәйле. *Лексикографик эш.*

**лексикография** *и.* Һүҙлектәр төҙөү теорияһы һәм эше. *Башҡорт лексикографияһы. Лексикография ҡағиҙәләре.*

**лексиколог** *и.* Лексикология өлкәһендәге белгес.

**лексикологик** *с.* Лексикологияға мөнәсәбәтле, лексикологияға бәйле. *Лексикологик тикшеренеүҙәр.*

**лексикология** *и.* Тел ғилеменең лексиканы өйрәнә торған бүлеге. *Лексикология буйынса дәреслек. Лексикология проблемалары.*

**лектор** *и.* Лекция уҡыған кеше. *Оҫта лектор. Лектор сығышы. Лекторҙар төркөмө.*

**лекторий** *и.* Асыҡ лекциялар ойоштороу эше менән шөғөлләнгән ойошма һәм шул лекциялар уҡыла торған бина. *Лекторий асыу. Үҙәк лекторий.*

**лекция** *и.* Юғары уҡыу йортонда уҡытыусының студенттарға фәнде телдән һөйләп биреүе йәки ниндәйҙер теманың халыҡ алдында һөйләнелеүе. *Лекция уҡыу. Лекция яҙыу. Лекцияға йөрөү.*

**леп (леп-леп)** *оҡш.* Еңелсә елпеү хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Леп итеп һүнеү. Леп-леп оса күбәләк.*

**лепелдәү (лепелдә-)** *ҡ.* Леп-леп итеү, леп-леп килеү. *Йөрәк лепелдәй.*

**лепкә** *и.* Йәш баланың түбә ҡапҡасындағы ҡатып өлгөрмәгән урыны.

**летчик** *и.* Самолет йөрөтөүсе; осоусы. *Хәрби летчик. Һынаусы летчик.* ♦ **Летчик-космонавт** космосҡа бик мөһим осош яһаған космонавтарға бирелә торған исем.

**лимон** *и.* Көньяҡта үҫкән мәңге йәшел цитрус ағасы һәм шунын хуш еҫле әсе тәмле һары емеше. *Лимон үҫтереү. Лимон менән сәй эсеү.*

**лимонад** *и.* Лимон йәки башҡа емеш һуты ҡушылған тәмле алкоголһеҙ эсемлек. *Лимонад эсеү. Лимонад заводы.*

**лингафон** *и.:* **лингафон кабинеты** ниндәйҙер телде өйрәнеү курсы яҙылған пластинкалар тупланған һәм уҡытыуҙың техник саралары менән йыһазландырылған кабинет.

**линейка** *и.* **1.** Тура һыҙыҡ һыҙа торған үлсәмле планка. *Бүлемле линейка. Логарифмалы линейка. Масштаблы линейка. Линейка менән һыҙыу.* **2.** Бер шеренгалы саф. *Линейкаға теҙелеү. Лагерь линейкаһы. Линейка үткәреү.*

**лиризм** *и.* **1.** Сәнғәт әҫәрҙәрендә хис-тойғо сағылышы, поэтик әҫәрләнеү, ихласлыҡ. *Шиғырҙағы лиризм.* **2.** Лирик кәйеф. *Лиризмға бирелеү.*

**лирик** *и.* Ижадына лиризм хас булған шағир.

**лирик** *с.* **1.** Лирикаға мөнәсәбәтле. *Лирик шағир.* **2.** Шиғри тойғо, нескә хис менән һуғарылған. *Лирик көй. Лирик шиғыр.* **3.** *муз.* Йомшаҡ яңғырашлы, ағымлы. *Лирик сопрано. Лирик тенор.* ♦ **Лирик герой** авторҙың уй-тойғоһон йөкмәгән әҙәби образ.

**лирика** *и.* **1.** Авторҙың хис-тойғоһон, уй-кисерештәрен шиғри формала биреүсе әҙәби әҫәр төрө. *Шиғырҙағы лирика.* **2.** Ошо төргә ингән әҫәрҙәр. *Ғ. Сәләм лирикаһы.*

**лиро-эпик** *с.* Лирика һәм эпос элементтарын үҙ эсенә алған (әҙәби әҫәргә ҡарата). *Лиро-эпик поэма.*

**литр** *и.* Мең кубик сантиметрға тигеҙ булған шыйыҡлыҡ үлсәү берәмеге. *Эс литр һөт.*

**лифт** *и.* Күп ҡатлы йорттарҙа, шахтала үрле-түбәнле йөрөй торған күтәргес машина. *Лифтта күтәрелеү. Йөк лифты. Лифттар хужалығы.*

**лицей** *и.* **1.** Революцияға тиклемге Рәсәйҙә ир балалар өсөн тәғәйенләнгән өҫтөнлөклө урта йәки юғары уҡыу йорто. **2.** Урта уҡыу йорто. *Лицейҙа уҡыу. Лицей мәктәбе.*

**лобзик** *и.* Ағасты семәрләп бысыу өсөн тәғәйенләнгән ҡорал һәм шул ҡоралдың тар бысҡыһы. *Лобзик менән семәрләү.*

**логика** *и.* **1.** Фекерләү закондары һәм формалары тураһындағы фән. *Диалектик логика. Формаль логика.* **2.** Бәйләнешле фекер йөрөшө. *Тормош логикаһы. Логикаға ҡаршы килеү.* **3.** Эске законлылыҡ. *Ваҡиғалар логикаһы.*

**ложа** *и.* Тамашасылар залында стена буйында бүленеп эшләнгән бер нисә кешелек урын. *Икенсе ярустың ложаһы. Ложала ултырыу.*

**лозунг** *и.* **1.** Төп идея, бурысты йәки сәйәси талапты ҡыҫҡаса белдергән өндәмә. *Лозунг биреү. Лозунг ташлау. Лозунг стиле.* **2.** Шул өндәмә яҙылған плакат. *Лозунг элеү.*

**лом** *и.* Ҡаты нәмәне ватыу, аҡтарыу өсөн ҡулланылған осло башлы ауыр тимер таяҡ. *Лом менән таш аҡтарыу.*

**лото** *и.* Ҡатырғаға сатрашлап яҙылған һандарҙың йәки һүрәттәрҙең иғлан ителгән берен ҡаплап барып, кемдең алда бөтөүенә ҡарап еңеүсене билдәләгән отош уйыны. *Лото уйнау.*

**лоторея** *и.* **1.** Билет буйынса үткәрелгән аҡсалы-әйберле отош уйыны. *Аҡса-әйбер лотореяһы. Лоторея билеты.* **2.** *һөйл.* Шул отошто алырға хоҡуҡ биргән билет. *Лоторея һатып алыу. Лотореяға отоу.*

**лупа** *и.* Ҙурайтып күрһәтә торған тирәсле быяла. *Лупа аша ҡарау.*

**лығырлаҡ** *с.* Лығыр-лығыр итеп, күп һөйләгән. *Лығырлаҡ кеше.*

**лығырлау (лығырла-)** *ҡ.* **1.** Лығыр-лығыр итеү (ҡайнағанда). *Лығырлап аш ҡайнай.* **2.** *күсм.* Күп булып ҡайнашыу; мыжғыу. *Күлдә балыҡ лығырлап йөрөй.* **3.** *күсм.* Лығыр-лығыр һөйләү. *Туҡтауһыҙ лығырлау.*

**лығыр-лығыр** *оҡш.* **1.** Ҡуйыраҡ нәмә ҡайнағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Бутҡа лығыр-лығыр ҡайнай.* **2.** Бер яй менән өҙмәй һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. *Лығыр-лығыр һөйләнеү.*

**лыҡылдаҡ** *с.* Күп һөйләүсән. *Лыҡылдаҡ ҡатын. Лыҡылдаҡ булыу.*

**лыҡылдау**[1] **(лыҡылда-)** *ҡ. кәмһ.* Бик күп, артығын һөйләү. *Оҙаҡ лыҡылдау.*

**лыҡылдау**[2] *ҡ.* Бик ныҡ бысрап, иҙелеп ятыу. *Аяҡ аҫты лыҡылдап ята.*

**лырҡ (лырҡ-лырҡ)** *оҡш.* Һыулы, һаҙмат ергә аяҡ менән баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лырҡ-лырҡ итеү. Лырҡ-лырҡ килеү.*

**лырҡылдау (лырҡылда-)** *ҡ.* Лырҡ-лырҡ итеү, лырҡ-лырҡ килеү. *Аяҡ аҫты лырҡылдап ята.*

**лыс** *р.* Һарҡып ағып торорлоҡ, маныып алған кеүек; лысма. *Лыс май итеү. Лыс һыу булыу.*

**лысма** *р.* Һығып алмалы, маныып алған кеүек; лыс. *Лысма һыу булыу.*

**лыу** *и.* **аждаһа.** ♦ **Лыу йылы** *иҫк.* ун ике йыллыҡ мөсәлдең бишенсе йылы; аждаһа йылы.

**ләғнәт** *и.* Ҡарғыш, ҡәһәр. *Ләғнәт яуҙырыу. Ләғнәт ороу.* ♦ **Ләғнәт төшкөрө** ҡарғағанда әйтелә.

**ләғнәтле** *с.* Ләғнәтләнгән, ҡәһәрле, ҡарғышлы. *Ләғнәтле дошман. Ләғнәтле үлем.*

**ләғнәтләү (ләғнәтлә-)** *ҡ.* Ләғнәт уҡыу, бик ныҡ ҡарғау. *Һуғышты ләғнәтләү.*

**ләззәт** *и.* Рәхәтлек тойғоһо; кинәнес. *Ләззәт алыу. Ләззәт тойоу.*

**ләззәтлек (ләззәтлеге)** *и.* Рәхәтлек тойғоһо; күңел кинәнесе. *Йәшәү ләззәтлеге. Тәбиғәт биргән ләззәтлек.*

**ләззәтләнеү (ләззәтлән-)** *ҡ.* Ләззәт алып, рәхәтләнеү. *Тәбиғәт хозурлығына ләззәтләнеү. Ләззәтләнеү тойғоһо кисереү.*

**ләйсән** *и.:* **ләйсән ямғыры.** Яҙын яуған тәүге йылы ямғыр. *Ләйсән яуыу.* ♦ **Ләйсән һыуы** ләйсән ямғырынан йыйылған һыу.

**ләкин** *ҡарш. терк.* **1.** Мәғәнә яғынан бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләмде йәки һөйләм киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла; ә, әммә, әммә ләкин. *Бик күп ваҡыт сарыф ителде, ләкин файҙаһыҙ.* **2.** Ҡайһы бер башҡа ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре менән бергә килеп, ҡаршы ҡуйыу мәғәнәһен көсәйтә. *Бик барыр инем, әммә ләкин ваҡытым юҡ.*

**ләлә** *и.* Һуғанбаштар ғаиләһенә ҡараған, төрлө-төрлө төҫтәге ҡыңғырау сәскәле, шыма ҡыяҡ япраҡлы баҡса гөлө. *Һары ләлә.*

**ләм** *и.* Һыу төбөнә ултырған йомшаҡ тупраҡ һәм батҡаҡ. *Йылға төбө ләм менән ҡапланған. Ләм ҡатламы. Ләмгә ултырыу.*

**ләңкелдәк** *с.* **1.** Күп өрөүсән. *Ләңкелдәк эт.* **2.** *кусм.* Күп һөйләүсән. *Ләңкелдәк ҡатын.*

**ләңкелдәү (ләңкелдә-)** *ҡ.* **1.** Ләңк-ләңк итеү, ләңк-ләңк килеү. *Эттәр ләңкелдәй.* **2.** *кусм.* Күп һүҙгә етеү, күп һөйләнеү. *Ләңкелдәп тик ултырыу.*

**ләңк-ләңк** *оҡш.* **1.** Сәүек эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Ләңк-ләңк итеү.* **2.** *кусм.* Күп һүҙгә етешкәнде белдергән һүҙ. *Ләңк-ләңк тауыш сығыу.*

**ләпелдәк** *с.* Күп һөйләүсән. *Ләпелдәк бала.*

**ләпелдәү (ләпелдә-)** *ҡ.* Күп итеп һөйләү. *Ярты сәғәт ләпелдәү.*

**ләпәкәй** *и.:* **ләпәкәй себен** Ваҡ ҡына себен; һуҡыр себен. *Туғайҙа ләпәкәй һырый.*

**ләүк-ләүк** *оҡш.* Бәләкәй эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Көсөк ләүк-ләүк өрә.*

**ләүәш** *и.* Еләк-емештән бешерелгән өҫтө асыҡ бәлеш. *Еләктән ләүәш бешереү.*

**люк (люгы)** *и.* Аҫҡа төшөү йәки берәй нәмәнең эсенә инеү өсөн хеҙмәт иткән ҡапҡас менән ябылмалы тишек. *Люкты асыу. Люктан сығыу. Люкты ябыу.*

# М

**мавзолей** *и.* Ҡәбер өҫтөнә һалынған архитектура ҡоролмаһы. *В. И. Ленин мавзолейы. Хөсәйенбәк мавзолейы.*

**магазин** *и.* Халыҡҡа кәрәк-яраҡ һата торған сауҙа ойошмаһы һәм шул ойошма урынлашҡан бина. *Аҙыҡ-түлек магазины. Кейем-һалым магазины. Магазинға барыу.*

**магнит** *и.* Ҡайһы бер есемдәрҙе тартыу йәки этеү үҙенсәлегенә эйә булған есем. *Тәбиғи магнит. Яһалма магнит. Магнит мәғдәне.*

**магнитофон** *и.* Магнитлы таҫмаға йәки сымға тауышты яҙып, яңынан яңғырата торған аппарат. *Магнитофонға яҙыу.*

**мажара** *и.* Нимәгәлер бәйле ҡыҙыҡлы йәки ҡыҙғаныс шау-шыулы хәл-ваҡиға. *Юл мажаралары. Мажара сығарыу.*

**май**[1] *и.* **1.** Ҡаймаҡты туҡып, айранынан айырып алынған һөт аҙығы. *Аҡ май. Һары май. Күбек май. Йомғаҡлы май. Май таҫҡау. Май заводы.* **2.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең орлоғонан, сәскәһенән һәм емешенән һығып алынған шыйыҡ матдә. *Көнбағыш майы. Мамыҡ майы. Май һығыу.* **3.** Хайуан тәнендәге

махсус ҡатлам һәм шунан яһалған аҙыҡ. *Суҡа майы. Һарыҡтың эс майы.* **4.** Тәнгә һөртә торған шифалы ҡуйы матдә. *Бит майы.*

**май**[2] *и.* Календарь йылының бишенсе айы. *Май башы. Май аҙағы.*

**майҙан** *и.* **1.** Ҡала йәки ауыл эсендәге асыҡ тигеҙ урын. *Вокзал майҙаны. Ҡала майҙаны.* **2.** Берәй нәмә өсөн тәғәйенләнгән урын. *Спорт майҙаны. Төҙөлөш майҙаны.* **3.** *күсм.* Киң күләмдә алып барылған эш. *Көрәш майҙаны. Эш майҙаны.* **4.** Берәй нәмә биләп ятҡан йәки күп халыҡ йыйыла торған киң урын, ер. *Баҫыу майҙаны. Урман майҙаны. Һабантуй майҙаны. Майҙанға йыйылыу.*

**майка** *и.* Ҙур уйымлы, еңһеҙ, эстән кейә торған йоҡа бәйләм эс кейеме.

**майлағыс** *и.* **1.** Нимәне лә булһа майлай торған нәмә (сепрәк, ҡауырһын һ. б.); май һөрткөс. *Икмәк майлағыс. Таба майлағыс.* **2.** Машина майлай торған һемәкле һауыт.

**майлау (майла-)** *ҡ.* **1.** Майлы итеү, май яғыу. *Ҡоймаҡ майлау. Майлап ашау.* **2.** Май һөртөп тәрбиәләү. *Итекте майлау. Сәсте майлау. Тәгәрмәс майлау. Станокты майлау.*

**маймыл** *и.* **1.** Тән төҙөлөшө менән кешегә иң яҡын торған һөтимәр йәнлек. *Ата маймыл. Инә маймыл. Маймыл балаһы.* **2.** *күсм.* Ҡылансыҡ маймыл кеүек ҡылана торған кеше. ♦ **Маймыл йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең туғыҙынсы йылы.

**майонез** *и.* Йомортҡа һарыһы, гәрсис, һеркә, үҫемлек майы һәм башҡалар ҡатнаштырып яһалған аш тәмләткес. *Майонезлы салат.*

**майор** *и.* Капитандан юғары, полковниктан түбән булған хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге офицер. *Майор булыу.*

**макарон** *и.* Нәҙек көпшә рәүешендә ҡырҡып киптерелгән туҡмас төрө. *Макарон фабрикаһы. Макарон бешереү.*

**маҡсат** *и.* Алға ҡуйылған бурыс. *Маҡсат ҡуйыу. Маҡсатҡа ирешеү.*

**маҡтансыҡ** *с.* Үҙен үҙе шәпкә сығарып һөйләгән. *Маҡтансыҡ кеше. Маҡтансыҡ булыу.*

**маҡтаныу (маҡтан-)** *ҡ.* Үҙен, эшләгән хеҙмәтен шәп итеп күрһәтеү. *Эшең менән маҡтаныу.*

**маҡтау (маҡта-)** *ҡ.* Берәй кешене йәки уның хеҙмәтен хуплап шәпкә сығарыу. *Баланы маҡтау.*

**мал** *и.* **1.** Тормош кәрәге өсөн йортта аҫраған хайуан. *Вак мал. Йылкы малы. Мал үрсетеү.* **2.** Тормош-көнкүрештә ҡиммәте булған бөтә нәмә; мөлкәт, байлыҡ. *Донъя малы. Мал йыйыу. Хәләл мал.*

**малай** *и.* **1.** Кесе йәштәге ир бала. *Бәләкәй малай.* **2.** Атай-әсәйҙең ир затынан булған балаһы. *Малай үҫтереү.*

**малсы** *и.* **1.** Малсылыҡ эшендә эшләгән кеше; мал ҡараусы. *Совхоз малсылары.* **2.** Малсылыҡ буйынса белгес.

**малсылыҡ (малсылығы)** *и.* Ауыл хужалығының мал аҫрай торған тармағы. *Малсылыҡ фермаһы. Малсылыҡта эшләү.*

**мамонт** *и.* Филдәр ғаиләһенә ҡараған, хәҙер үлеп бөткән, ялбыр йөнлө бик эре хайуан. *Мамонт теше. Мамонт һөлдәһе.*

**мамыҡ (мамығы)** *и.* **1.** Тырнаҡ үлән һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған бер йыллыҡ көньяҡ үҫемлеге (еп алыу өсөн үҫтерелә). *Мамыҡ үләне. Мамыҡ орлоғо. Мамыҡ майы.* **2.** Шул үҫемлек орлоғонан алынған сүс. *Мамыҡ йыйыу.* **3.** Шул сүстең махсус рәүештә эшкәртелгән үтә нәфис, ҡабарып торған йомшаҡ массаһы (ғәҙәттә, медицинала һ. б. урында ҡулланыла). **4.** *с. мәғ.* Шул сүстән эшләнгән йәки һуғылған. *Мамыҡ еп. Мамыҡ туҡыма.* **5.** Ҡош-ҡорт һәм хайуандар тиреһендәге йомшаҡ йөн. *Ҡаз мамығы. Ҡуян мамығы.* **6.** *с. мәғ.* Шул йөндән эшләнгән. *Мамыҡ мендәр. Мамыҡ яҫтыҡ.*

**манара** *и.* **1.** Мәсеттең аҙан әйтә торған өҫкө бейек ҡоролмаһы. *Ике манаралы мәсет. Манараға менеү.* **2.** Тар ғына итеп эшләнгән бейек ҡоролма; башня. *Сиркәү манараһы.*

**мандолина** *и.* Оҙонса йәки түңәрәк ағас корпуслы, дүрт пар ҡыллы, сиртеп уйнай торған музыка ҡоралы. *Мандолина көйләү. Мандолина уйнау.*

**манеж** *и.* **1.** Һыбай йөрөү, ат уйнатыу өсөн ҡулайлаштырып эшләнгән ҙур йорт йәки майҙан. *Ҙур манеж. Манежда уйнау.* **2.** Цирк эсендәге майҙан. *Манежға сығыу.*

**манный** *и.* Бойҙайҙың үҙәгенән генә яһалған ваҡ ярма. *Манный ботҡаһы.*

**маңлай** *и.* Баштың күҙҙән, ҡаштан өҫтәге ҡаҡ өлөшө. *Киң маңлай. Текә маңлай.*

**марка** *и.* Хаҡы күрһәтелгән һүрәтле дүрт мөйөш рәүешендәге ҡағыҙҙан торған почта йәки башҡа йыйымдарҙың түләү билдәһе. *Почта маркаһы. Марка йәбештереү.*

**марля** *и.* Ғәҙәттә яраны бәйләү өсөн ҡулланылған йоҡа аҡ туҡыма. *Яраны марля менән бәйләү.*

**март** *и.* Календарь йылының өсөнсө айы. *Март айы. Март бураны. 8 Март – Әсәйҙәр байрамы.*

**маскарад** *и.* Битлек һәм төрлө ҡыҙыҡ кейемдәр кейеп үткәрелә торған байрам кисәһе, бал. *Маскарад костюмы. Маскарадта ҡатнашыу.*

**массаж** *и.* Дауалау йәки гигиена маҡсатында тәнде һылау-һыйпау. *Массаж щеткаһы. Массаж яһау.*

**мастер** *и.* **1.** *ҡар.* **оҫта. 2.** Производствоның бер бүлегендәге эш менән етәкселек иткән кеше. *Смена мастеры. Цех мастеры. Мастер ярҙамсыһы.* **3.** Күренекле спортсыларға бирелә торған дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Спорт мастеры.*

**матдә** *и.* Материяның үҙенсәлекле асылы. *Минераль матдә. Органик матдә.*

**математик**[1] *и.* **1.** Математика буйынса белгес. *Танылған математик.* **2.** Математика уҡытыусыһы. *Математик булып эшләү.*

**математик**[2] *с.* Математикаға мөнәсәбәтле. *Математик формула.*

**математика** *и.* Ысынбарлыҡтағы һанлы дәүмәлдәр араһындағы мөнәсәбәттәр һәм арауыҡтағы формаларҙы өйрәнә торған фән. *Элементар математика. Юғары математика. Математика дәресе.*

**материал** *и.* **1.** Берәй маҡсатҡа файҙаланыла торған төрлө матдә, сеймал һ. б. *Төҙөү материалы. Яғыулыҡ материалы.* **2.** Берәй нәмәне өйрәнеү өсөн нигеҙ булып хеҙмәт иткән сығанаҡ; мәғлүмәт. *Күргәҙмә материал. Тел материалы.* **3.** Туҡыма, тауар. *Пальтолыҡ материал. Материал һатып алыу.*

**матрос** *и.* Хәрби диңгеҙ флотындағы ябай хеҙмәткәр. *Матрос булып хеҙмәт итеү.*

**матур** *с.* **1.** Күрер күҙгә күркәм, килешле; гүзәл, сибәр. *Матур ҡыҙ. Матур сәскә. Матурҙарҙың матуры. Матур бейеү. Матур йырлау.* **2.** Ыңғай сифаттары менән үҙенә тартып торған; яғымлы, һөйкөмлө. *Матур кеше. Матур булыу.* **3.** Күңелгә рәхәтлек, йыуаныс биргән; йәмле. *Матур йәй. Матур көн. Матур йыр. Матур тауыш.* **4.** Теләк-маҡсатҡа ярашлы; яҡшы. *Матур донъя. Матур тормош. Матур фекер. Матур уй.* ♦ **Матур әҙәбиәт** художестволы образдар ярҙамында тормошто һүрәтләгән әҙәбиәт төрө.

**матурланыу (матурлан-)** *ҡ.* Матур булыу, матурға әйләнеү. *Көндәр матурланды.*

**матурлау (матурла-)** *ҡ.* Күркәм, килешле, матур, йәмле итеү; йәмләндереү. *Бүлмәне матурлау. Урамды матурлау. Үҙ-үҙеңде матурлау.*

**матурлыҡ (матурлығы)** *и.* **1.** Матур ҡиәфәт; сибәрлек. *Ҡыҙҙар матурлығы. Матурлыҡ биреү.* **2.** Гүзәллек. *Тәбиғәт матурлығы.*

**матч** *и.* Төрлө спорт буйынса ике арала үткәрелгән ярыш. *Шахмат матчы. Матч ойоштороу.*

**мауығыу (мауыҡ-)** *ҡ.* **1.** Иғтибарҙы берәй нәмәгә йүнәлтеү. *Мауығып ҡарау. Мауығып тыңлау.* **2.** Берәй нәмә менән ихлас ҡыҙыҡһыныу. *Китап менән мауығыу. Телевизор менән мауығыу.*

**махсус** *с.* **1.** Нимәгәлер тәғәйенләнгән, үҙенә бер төрлө. *Махсус кейем.* **2.** Айырым фән, техника, һөнәр, сәнғәт һ. б. өлкәләргә ҡараған. *Махсус белем. Махсус уҡыу йорто. Махсус һүҙлек.*

**маһайыу (маһай-)** *ҡ.* **1.** Үҙ-үҙенде ҙурға һанау, һауаланыу. *Маһайып йөрөү.* **2.** Ғорурлыҡ тойғоһо кисереү; ғорурланыу. *Атаһы менән маһайыу.*

**машина** *и.* **1.** Файҙалы эш башҡара торған механизм йәки механизмдар йыйылмаһы. *Пар машинаһы. Электронлы иҫәпләү машинаһы.* **2.** *һөйл.* Автомобиль. *Еңел машина. Йөк машинаһы. Машина йөрөтөү.*

**маяҡ (маяғы)** *и.* Сигнал уты менән караптарға юл күрһәтеү өсөн диңгеҙ ярҙарына эшләнгән бейек ҡоролма. *Маяҡ уты. Маяҡҡа ҡарап барыу.*

**мебель** *и.* Йорт эсенә ҡуйыла торған һәр төрлө йыһаз (ултырғыс, өҫтәл, шкаф, диван һ. б.). *Йомшаҡ мебель. Мебель магазины. Мәктәп мебеле.*

**маъмай** *и.* Эт, көсөк. *Маъмай һөт эсә.*

**медицина** *и.* Төрлө ауырыуҙар, уларҙы булдырмау һәм дауалау юлдары тураһындағы ғилем. *Медицина институты. Медицина ярҙамы.* ♦ **Халыҡ медицинаһы** халыҡтың күп быуат тәжрибәһе нигеҙендә тупланған дауалау ысулдары.

**мейе** *и.* Кешелә, хайуандарҙа баш ҡыуышында һәм умыртҡа буйында урынлашып, нервы күҙәнәктәре һәм туҡымаларынан торған нервы системаһының үҙәк бүлеге. *Баш мейеһе. Арҡа мейеһе. Кесе мейе. Мейе ҡумтаһы. Мейе һелкенеү.*

**мейес** *и.* **1.** Өй йылытыу йәки бешеренеү өсөн кирбес йәки тимерҙән яһалған ҡоролма. *Икмәк мейесе. Мейес ҡашағаһы. Мейес сығарыу. Мейескә яғыу.* **2.** Ҡыҙҙырып, төрлө материалдар эшкәртә торған ҡоролма. *Домна мейесе. Эзбиз мейесе.*

**менге** *с.* Һыбай йөрөтөүгә өйрәтелгән. *Менге ат. Менгегә өйрәтеү.*

**мендереү (мендер-)** *к.* **1.** Юғарыға алып менеү, өҫкә күтәреү. *Өй башына иендереү.* **2.** Юғарыға, бейек урынға күтәрелергә мәжбүр итеү; үрләтеү. *Баҡанға мендереү.* **3.** Һыбай атланырға мәжбүр итеү; атландырыу. *Атҡа мендереү.*

**мендәр** *и.* Эсенә мамыҡ йәки башҡа йомшаҡ нәмә тултырып баш аҫтына алыу өсөн яһалған урын ҡаралдыһы. *Мамыҡ мендәр. Мендәр тышы. Башты иендәргә һалыу.*

**менеү (мен-)** *к.* **1.** Юғарыға табан хәрәкәт итеү; үрләү. *Баҡанға менеү. Баҫҡыс буйлап менеү. Тауҙы менеү.* **2.** Ҡайҙалыр китеү өсөн транспортҡа ултыыу. *Вагонға менеү. Трамвайға менеү.* **3.** Һыбай атланыу. *Атҡа менеү. Тай иенән сабыу.*

**меҫкен** *с.* **1.** Ауыр, ҡыҙғаныс хәлдәге; бахыр. *Меҫкен бәндә. Меҫкен булыу.* . Йәлләү, ҡыҙғаныу тойғоһо уята торған; йәлләткес. *Меҫкен бала. Меҫкен киәфәт. Меҫкен тауыш.*

**металл** *и.* Йәнселеүсән, йылы һәм электрҙы яҡшы үткәргән йылтыр төҫлө бай химик матдә йәки иретмә. *Ҡара металдар. Төҫлө металдар.*

**метр** *и.* **1.** Йөҙ сантиметрға тиң оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. *Илле метр ара. Йөҙ иетрға йүгереш.* **2.** Шундай оҙонлоҡта сантиметр бүлемдәре төшөрөлгән инейка.

**метро** *и.* Ҙур ҡала эсендәге электрлы тимер юл (ғәҙәттә, ер аҫтынан үткәреләә). *Иәскәү метроһы.*

**механизатор** *и.* **1.** Механизация буйынса белгес. *Механизаторҙар курсы. Иеханизатор булып эшләү.* **2.** Машиналарҙы һәм механизмдарҙы хеҙмәтләндергән шсе. *Механизатор һөнәре.*

**миҙал** *и.* **1.** Хәрби батырлыҡ йәки хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн бирелә торған үрәт һәм яҙыу төшөрөлгән түңәрәк металл. *«Батырлыҡ өсөн» миҙалы. Миҙал тапшырыу.* **2.** Мәктәпте бик яҡшы тамамлаған йәки берәй ярыштағы уңышары өсөн бирелгән шундай уҡ билдә. *Алтын миҙал. Көмөш миҙал. Миҙал улау.* **3.** Ниндәйҙер тарихи ваҡиғаға йәки күренекле эшмәкәр иҫтәлегенә ығарылған шундай уҡ билдә.

**миҙгел** *и.* **1.** Билдәле бер ваҡыт, үҙенсәлекле осор, мәл. *Бесән миҙгеле. Ураҡ иҙгеле.* **2.** Тәбиғәттәге үҙгәреш менән билдәләнгән йылдың айырым бер осоро. *Ҡыш миҙгеле. Яҙ миҙгеле.*

**микроб** *и.* Микроскоп аша ғына күренә торған бер күҙәнәкле организм. *Йоғошло микроб. Сереткес микроб. Әсеткес микроб.*

**микроскоп (микроскобы)** *и.* Ҙурайтып күрһәтә торған махсус ҡорамал. *Электрон микроскобы. Микроскоптан ҡарау.*

**милек (милке)** *и.* Кемдендер ҡарамағында булып, матди хәлде билдәләгән бөтә байлыҡ; мөлкәт. *Шәхси милек. Хосуси милек. Дәүләт милке.*

**милиционер** *и.* Йәмғиәт тәртибен һаҡлаусы милиция хеҙмәткәре. *Участка милиционеры.*

**милиция** *и.* **1.** Рәсәйҙә йәмғиәт тәртибен һәм именлеген һаҡлау бурысы башҡарған дәүләт органы. *Тимер юл милицияһы.* **2.** Шул ойошманың урындағы идараһы һәм хеҙмәткәре. *Милиция начальнигы.*

**милли** *с.* **1.** Милләткә мөнәсәбәтле. *Милли мәсьәлә.* **2.** Билдәле бер илгә мөнәсәбәтле. *Милли байраҡ. Милли гимн.* **3.** Милләттең үҙенсәлеген сағылдырған; милләткә хас. *Милли йола. Милли телдәр.*

**милләт** *и.* Теле, ере, иҡтисади тормошо, психологик үҙенсәлектәре, мәҙәни һәм көнкүреш уртаҡлығы менән билдәләнгән, тарихи яҡтан бер бөтөн булып ойошҡан халыҡ. *Башҡорт милләте. Төрөк милләте.*

**миләш** *и.* Гөлйемеш сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған һарғылт ҡыҙыл төҫтәге әскелтем емешле ағас һәм шул ағастың емеше; мышар. *Миләш ағасы. Миләш йыйыу.*

**мин (минең, миңә, мине, минән, миндә)** *зат а.* Һөйләүсе үҙен һөйләгәндә, үҙен атағанда ҡулланыла. *Мин – уҡыусы. Миңә иптәшем килде.*

**мина** *и.* **1.** Һыуға йәки ергә ҡуйыла торған шартлатҡыс матдәле снаряд. *Танк минаһы. Мина ҡуйыу.* **2.** Минометтан ата торған шартлатҡыс снаряд. *Ярсыҡлы мина.*

**миндек (миндеге)** *и.* Мунсала сабыныу өсөн бәйләнгән ҡайын һ. б. ағастың япраҡлы ботағы; япраҡ. *Миндек бәйләү. Миндек бешереү.*

**минерал** *и.* Тау тоҡомо, мәғдән, метеорит эсенә инеп химик составы һәм физик үҙенсәлеге менән бер төрлөрәк булған тәбиғи есем.

**министр** *и.* Министрлыҡтың башында торған хөкүмәт ағзаһы. *Мәғариф министры. Министр вазифаһы.*

**минут** *и.* Сәғәттең алтмыштан бер өлөшөнә тигеҙ булған ваҡыт берәмеге; 60 секунд. *Биш минут. Минуттарҙы һанау.*

**миң** *и.* Тәндәге тыумыштан булған тап йәки төйөрсөк. *Ҡара миң. Ҡыҙыл миң.*

**мираҫ** *и.* **1.** Үлгән кешенән кемдеңдер ҡарамағына күскән мал-мөлкәт, байлыҡ. *Мираҫ алыу. Мираҫ ҡалдырыу. Мираҫ бүлеү.* **2.** Үткән быуындарҙан ҡалған сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт байлығы; ҡомартҡы. *Әҙәби мираҫ. Йыр мираҫы.*

**мисәт** *и.* Баҫҡанда яҙыуы йәки тамғаһы ҡала торған махсус нәмә һәм шул әмәнән төшкән яҙыу йәки тамға. *Герблы мисәт. Мисәт һуғыу.*

**миҫал** *и.* **1.** Кемдер өсөн үрнәк, өлгө булырлыҡ эш йәки күренеш. *Батырлыҡҡа миҫал. Миҫал булып тороу.* **2.** Нимәгәлер тап килеп, һүҙҙе, фекерҙе сыҡларлыҡ йәки дөрөҫләрлек үрнәк. *Миҫал килтереү. Миҫалдар ҡулланыу.* . Математик ғәмәлдә ҡулланырға өйрәнгәндә күнекмә өсөн алынған үрнәк. *Миҫалды эшләү.*

**моғайын** *мөн.* Һөйләмдең төрлө урынында килеп, ышаныслы фаразды елдерә.

**моң** *и.* Күңелде елкендереп тәрән хистәр уятҡан аһәңле тауыш; көй. *Йыр оңо. Ҡурай моңо.*

**моңайыу (моңай-)** *ҡ.* **1.** Ауыр уй, ҡайғы-һағыштан бойоғоу; яманһыулау. *Моңайып ултырыу.* **2.** Һағышланып үҙ алдыңа йырлау.

**моңһоу** *с.* **1.** Күңелһеҙ уй-тойҙо кисергән; бойоҡ. *Моңһоу кеше. Моңһоу караш. Моңһоу булыу.* **2.** Күңелгә моң һалған. *Моңһоу тауыш.*

**морон** *и.* **1.** Хайуандарҙың ауыҙ һәм танау өлөшө; томшоҡ. *Эт мороно.* **2.** Фил әм башҡа хайуандарҙың оҙон булып үҫкән томшоғо. *Фил мороно.* **3.** Һауытаба һеҙәге. *Сәйгүн мороно. Самауыр мороно.* **4.** Нәмәләрҙең ослайып алға сығып орған өлөшө. *Тау мороно.*

**моряк (морягы)** *и.* Флотта хеҙмәт иткән кеше. *Хәрби моряк. Сауҙа флоты морягы.*

**мосолман** *и.* Ислам динен тотҡан кеше. *Мосолман кешеһе. Мосолман булыу.*

**мотлаҡ** *с.* **1.** Һис һүҙһеҙ тейешле; кәрәкле. *Мотлаҡ шарт. Мотлаҡ булыу.* *р. мәғ.* Бер нәмәгә ҡарамаҫтан; һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ. *Мотлаҡ эшләү. Мотлаҡ һанау.*

**мотор** *и.* Һәр төрлө энергияны механик энергияға әйләндерә торған машиа; двигатель. *Трактор моторы. Моторҙы ремонтлау.*

**мохтаж** *с.* **1.** Нимәгәлер ихтыяж кисергән. *Ярҙамға мохтаж ғаилә.* **2.** *и. мәғ.* ормош-көнкүрештәге етешһеҙлек; нужа. *Мохтаж төшөү.*

**мөгөҙ** *и.* Ҡайһы бер хайуандарҙың маңлайындағы һөйәк матдәһенән орған ҡаты үҫенте. *Болан мөгөҙө. Мөгөҙ үҫеү.*

**мөйөш** *и.* **1.** Берәй нәмәнең яҡ-яғы, сит-сите ҡушылған урыны. *Китап өйөшө. Келәт мөйөшө.* **2.** Арҡыры ятҡан ике урам рәтенең ҡушылған ере. *рам мөйөшө.* **3.** Берәй нәмәнең яҡтары ҡушылған эске өлөшө. *Бүлмәнең*



1.0136.10

*мөйөшө. Мөйөштәге һандыҡ.* **4.** *мат.* Бер үк нөктәнән сыҡҡан ике тура һыҙыҡ араһындағы яҫылыҡ өлөшө. *Ҡыҫыҡ мөйөш. Тура мөйөш.*

**мөкиббән** **1.** *с.* Бөтә күңеле, йәне менән бирелгән. *Мөкиббән кеше.* **2.** *р.* Йән-тән менән; ихлас. *Мөкиббән китеү. Мөкиббән бирелеү.*

**мөлдөрәмә** *р.* Ситенән артыла яҙғанса, түгелеп китерҙәй; күҙенән. *Мөлдөрәмә ҡойоу. Мөлдөрәмә тулы.*

**мөлдөрәү (мөлдөрә-)** *ҡ.* **1.** Артыла, түгеләсә яҙғанса тулыу. *Мөлдөрәп тулған стакан.* **2.** *күсм.* Ниндәйҙер хис, тойғо менән тулыу (күҙгә ҡарата). *Мөлдөрәп торған күҙҙәр.*

**мөлкәт** *и.* Кемдеңдер ҡарамағында булған бөтә нәмә; милек, байлыҡ. *Халыҡ мөлкәте. Мөлкәт бүлешеү.*

**мөләйем** *с.* Йылмайып торған асыҡ йөҙлө; яғымлы. *Мөләйем йөҙлө. Мөләйем ҡыҙ. Мөләйем булыу. Мөләйем һөйләшеү. Мөләйем күренеү.*

**мөмкин** *мөн.* **1.** Шартына ҡарап эш-хәлдең үтәлеү ихтималлығын белдерә. *Буран булмаһа, юлға сығыуыбыҙ бик мөмкин.* **2.** Берәй эшкә рөхсәт биргәндә йәки һорағанда әйтелә. *Ҡайтырға мөмкин.* **3.** Һөйләмдәрҙә шарт мәғәнәһен көсәйтә. *Мөмкин булһа көнсөллөк менән үҫеп, күптән дөйә булыр ине бик күп көсөк* (С. Ҡудаш). **4.** *с. мәғ.* Булырҙай, булыуы ихтимал. *Мөмкин хәл. Мөмкин эш.*

**мөнәсәбәт** *и.* **1.** Кемгә йәки нимәгәлер ҡарата эске талаптан сығып күрһәтелгән ҡылыҡ; мөғәмәлә. *Яҡшы мөнәсәбәт. Насар мөнәсәбәт.* **2.** Төрлө өлкәләге бәйләнеш. *Ғаиләләге мөнәсәбәттәр.* **3.** Ниндәйҙер эш-хәлгә булған ҡатнашлыҡ. *Мөнәсәбәте булыу.*

**мөңрәү (мөңрә-)** *ҡ.* Бик үк нык ҡысҡырмай баҡырыу (һыйыр малына ҡарата). *Мөңрәй-мөңрәй көтөү ҡайта.*

**мөрйә** *и.* Төтөн сығарыу һәм һауа йөрөү өсөн хеҙмәт иткән торба; төтөн юлы. *Завод мөрйәһе. Мейес мөрйәһе. Мөрйәнән төтөн сыға.*

**мөрәжәғәт** *и.* Берәй кешегә йәки халыҡҡа йүнәлтелгән һүҙ. *Мөрәжәғәт һүҙе. Мөрәжәғәт иғлан итеү.*

**мөхәббәт** *и.* Кемгә йәки нимәгәлер булған яратыу тойғоһо; һөйөү. *Әсәгә булған мөхәббәт.*

**мөһабәт** *с.* **1.** Тышҡы күренеше менән ҙур һәм күркәм. *Мөһабәт һәйкәл.* **2.** Ҙур кәүҙәле, күркәм ҡиәфәтле; олпатлы. *Мөһабәт кеше.*

**мөһим** *с.* **1.** Ҙур әһәмиәткә эйә; әһәмиәтле. *Мөһим бурыс. Мөһим эш.* **2.** Ғорурлыҡ билдәһенә эйә; олпатлы. *Мөһим ҡиәфәт.*

**мөшкөл** *с.* Ҡыйын, ауыр; хөрт. *Мөшкөл хәл.*

**музей** *и.* Тарихи ҡомартҡыларҙы, сәнғәт әҫәрҙәрен һ. б. йыйып һаҡлай һәм үргәҙмәгә ҡуя торған махсус ойошма. *Тарихи музей. Мәктәп музейы.*

**музыка** *и.* **1.** Хис-тойғоно көйлө тауыш аша сағылдырған сәнғәт төрө. *лассик музыка. Музыка теорияһы. Музыка тыңлау.* **2.** Шул сәнғәткә ҡараған ҫәр. *Хөсәйен Әхмәтов музыкаһы.*

**музыкант** *и.* **1.** Музыка белгесе. *Күренекле музыкант.* **2.** Музыка ҡоралын-а уйнаған кеше. *Музыкант һөнәре.*

**муйыл** *и.* Гөлйемеш сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле, ваҡ ҡына ара емешле ағас һәм шуның емеше. *Муйыл ағасы. Муйыл бәлеше.*

**муйын** *и.* **1.** Башты кәүҙәгә тоташтырған тән өлөшө. *Йыуан муйын. Оҙон уйын. Муйынды бороу.* **2.** *геогр.* Ҡоро ер өлөштәрен тоташтырып торған тар ына ер һыҙаты.

**мул** *с.* **1.** Артығы менән, етерлек булған; күп. *Мул күстәнәс. Мул ашау.* . Бөтә нәмә етеш, иркен; бай. *Мул тормош. Мул йәшәү. Мул тотоноу.*

**мулла** *и.* Мосолман диненә хеҙмәт иткән уҡымышлы кеше. *Ауыл муллаһы. ‘казлы мулла. Мулла булып эшләү.*

**мунса** *и.* Парланып йәки сабынып йыуыныу өсөн эшләнгән махсус бина. *Іунса эләүкәһе. Мунса ташы. Мунса яғыу. Мунса инеү.*

**мунсаҡ (мунсағы)** *и.* Төрлө мәрйен теҙеп муйынға таға торған биҙәүес. *әрәбә мунсаҡ. Мунсаҡ тағыу.*

**мурҙа** *и.* Ауыҙын балыҡ кире сыҡмаҫлыҡ итеп талдан үргән балыҡ тотоу оралы. *Мурҙа үреү. Мурҙа һалыу.*

**мүк (мүге)** *и.* Кейеҙләнеп еүеш ергә түшәлеп үҫә торған тамырһыҙ һәм әскәһеҙ споралы үҫемлек. *Болан мүге. Таш мүге. Мүк йолҡоу.*

**мыйыҡ (мыйығы)** *и.* **1.** Ирендең өҫкө яғына үҫкән төк, шырт. *Ҡара мыйыҡ. Іыйыҡ үҫтереү. Бесәй мыйығы.* **2.** Ҡайһы бер йәнлектәрҙең ауыҙ-мороно ирәһендә оҙон үҫенте һымаҡ үҫкән еҫ тойоу ағзаһы. *Ҡыҫала мыйығы. Тараҡан ыйығы.* **3.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең һабаҡ осондағы уралып үрмәләй торған ҫенте. *Еләк мыйығы.*

**мылтыҡ (мылтығы)** *и.* Ҡулға тотоп ата торған оҙон көбәкле ҡорал. *Мыл-ыҡты тоҫҡау. Мылтыҡ атыу.*

**мышар** *и.* Ваҡ теҙмә япраҡлы һарғылт ҡыҙыл төҫтәге әскелтем емешле ағас әм уның емеше; миләш. *Мышар ағасы. Мышар ҡағы.*

**мышы** *и.* Болан һымаҡ оҙон аяҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, яҫы тарбаҡ мөгөҙлө ҡыр хайуаны. *Ата мышы. Мышы мөгөҙө.*

**мәғәнә** *и.* **1.** Һүҙҙең, атаманың эске йөкмәткеһе, эстәлеге. *Һүҙҙең мәғәнәһе. Мәғәнәләргә айырыу.* **2.** Әһәмиәт, яҡшы һөҙөмтә. *Тормоштоң мәғәнәһе. Уҡыуының мәғәнәһе булманы.*

**мәҙәниәт** *и.* **1.** Кешеләрҙең матди һәм рухи ҡаҙаныштары. *Милли мәҙәниәт.* **2.** Аң-белем кимәле, уҡымышлыҡ. *Мәҙәниәт таратыу.*

**мәжбүр** *с.* Сараһыҙҙан, ирекһеҙҙән нимәлер эшләргә тейешле булған. *Мәжбүр булыу.*

**мәйет** *и.* Үле кәүҙә; үлек. *Оло мәйет. Мәйетте ерләү.*

**мәк (мәге)** *и.* Йомро ҡуҙағы эсендә ваҡ ҡына ҡара орлоғо булған эре сәскәле үҫемлек һәм уның орлоғо. *Мәк сәскәһе. Мәк орлоғо. Мәк сәсеү.*

**мәке** *и.* Һыу алыу, мал эсереү өсөн боҙға уйылған тишек. *Мәке ауыҙы. Мәке уйыу.*

**мәктәп (мәктәбе)** *и.* **1.** Балаларға дөйөм белем, тәрбиә бирә торған уҡыу йорто һәм ул урынлашҡан бина. *Башланғыс мәктәп. Мәктәп директоры.* **2.** Махсус белем бирә торған уҡыу йорто. *Музыка мәктәбе. Һөнәрселәр мәктәбе.*

**мәҡәл** *и.* Тормош тәжрибәһенән сығып, ыҡсым ғына итеп әйтелгән тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙ. *Мәҡәл әйтеү. Һүҙ күрке – мәҡәл.*

**мәҡәлә** *и.* Газета-журналда, берәй йыйынтыҡта баҫылып сыҡҡан бәләкәй күләмле хәбәр. *Баш мәҡәлә. Мәҡәлә яҙыу.*

**мәл** *и.* **1.** Нимәлер өсөн билдәле бер ваҡыт. *Бесән мәле етеү. Сәсеү мәле. Ураҡ мәле.* **2.** Көн-тәүлектең нимә менәндер билдәләнгән ваҡыты; саҡ. *Йоҡларға ятҡан мәл. Уңай мәл.* **3.** Йылдың тәбиғәттәге үҙгәреш менән билдәләнгән айырым бер осоро; миҙгел. *Көҙ мәле. Ҡышҡы мәлдә.*

**мәмерйә** *и.* Ер аҫтында барлыҡҡа килгән ҡыуышлыҡ; тау тишеге. *Шүлгән мәмерйәһе. Мәмерйә ауыҙы.*

**мәңге** *р.* Дауамы сикләнмәгән ваҡыт буйына, ғүмер буйына. *Мәңге йәшәү. Мәңге маҡтау.*

**мәргән** *с.* Төҙ ата торған. *Мәргән кеше. Мәргән уҡсы.*

**мәрйен** *и.* **1.** Йылы диңгеҙ төбөндә төркөм-төркөм булып ҡаяларға йәбешеп хәрәкәтһеҙ торған, полиптар төрөнә ингән диңгеҙ йәнлеге. *Мәрйен колониялары.* **2.** Мәрйен колониялары ҡалдыҡтарынан торған төрлө төҫтәге таш. Шул таштарҙан эшкәртелгән бөртөктәр һәм муйынсаҡ. *Сын мәрйен. Ҡыҙыл мәрйен. Ваҡ мәрйен. Мәрйен теҙеү. Муйынға мәрйен тағыу.*

**мәрмәр** *и.* Скульптура һәм архитектура сәнғәтендә, төҙөлөштә ҡулланыла торған төрлө төҫтәге кристаллик таш. *Аҡ мәрмәр. Мәрмәр һәйкәл.*

**мәртәбә** *и.* Тапҡыр, ҡат. *Ике мәртәбә. Күп мәртәбә.*

**мәрәкә** *и.* **1.** Көлкө килтергес эш-хәл, ҡыҙыҡлы күренеш. *Мәрәкә табыу.* **2.** Көлкө килтергес һүҙ, көлкөлө хәбәр. *Мәрәкәләр тыңлау.*

**мәсет** *и.* Мосолмандарҙың йыйылып намаҙ уҡый торған махсус йорто. *Таш мәсет. Мәсет манараһы. Мәсет һалыу. Мәсеткә йөрөү.*

**мәскәй** *и.* **1.** (*йәки* **мәскәй әбей**). Дини хөрәфәтсә: төрлө сүрәткә инә алған, яуыз тәбиғәтле, сихырсы ҡатын-ҡыҙ заты. **2.** Туя белмәҫ кеше, убыр. **3.** Балалар уйыны исеме.

**мәсхәрә** *и.* Йөҙҙө ҡыҙартҡан хурлыҡлы хәл; хурлыҡ, мыҫҡыл. *Мәсхәрәгә төшмәү. Мәсхәрә итеү.*

**мәсьәлә** *и.* **1.** Ҡарау, хәл итеүҙе талап иткән нәмә. *Дөйөм мәсьәлә. Мәсьәләне хәл итеү.* **2.** *мат.* Ниндәйҙер шарттағы билдәле һандар ярҙамында тейешле тәртип буйынса билдәһеҙ һанды табыуға ҡоролған математик һорау. *Мәсьәлә сисеү.*

**мәшһүр** *с.* Халыҡ араһында танылған, шөһрәт ҡаҙанған, күренекле. *Мәшһүр ғалим.*

**мәшәҡәт** *и.* **1.** Ҡамасау яһап, эш-хәлде ҡатмарлаштырған ҡыйынлыҡ. *Мәшәҡәт сығарыу. Мәшәҡәт яһау.* **2.** Тынғыһыҙ, ығы-зығылы эш. *Йорт мәшәҡәте. Ҡунаҡ мәшәҡәте. Мәшәҡәт менән йәшәү.*

# Н

**на (на-а, на-на-на)** *ҡыу.* Атты тиҙләтеү өсөн әйтелә. *На-а, малҡай!*

**наган** *и.* Барабаны әйләнеп тормалы, махсус системалағы револьвер. *Нагандан атыу. Наган патроны.*

**наҙ** *и.* Тәнгә, йәнгә рәхәтлек биргән, иркәләгән, йомшаҡ тойғо. *Йөрәк наҙы. Ата-әсә наҙы.*

**наҙан** *с.* **1.** Уҡый-яҙа белмәгән, хәреф танымаған. *Наҙан кеше. Наҙан ҡалыу.* **2.** Уҡымышы бәләкәй, белеме әҙ. *Наҙан булыу.*

**наҙлау (наҙла-)** *ҡ.* Йылы хискә күмеү, иркәләү, ҡәҙерләү. *Баланы наҙлау. Наҙлап үҫтереү.*

**наҙлы** *с.* **1.** Үтә нескә, иркә, нәфис. *Наҙлы бала. Наҙлы тауыш.* **2.** Яҡшынан-яҡшыны ғына теләгән. *Наҙлы кеше. Наҙлы ҡунаҡ. Наҙлы булыу.*

**намаҙ** *и. дини.* Ислам динен тотоусылар өсөн тейешле ғәмәлдәрҙең береһе. *Намаҙға барыу. Намаҙ уҡыу.*

**намыҫ** *и.* Үҙенең эшләнгән эштәре өсөн эске баһа, үҙенең тәртибе өсөн яуаплылыҡ тойғоһо. *Ир намыҫы. Намыҫ эше. Намыҫ ҡушыуы буйынса.*

**насар** *с.* **1.** Тейешле талаптан, ыңғай баһанан түбән сифатлы; *киреһе* яҡшы. *Насар кейем. Насар уҡыу. Насар хәбәр. Насар уй.* **2.** Үҙ эшендә тәжрибәһе булмаған, оҫталығы етмәгән. *Насар етәксе.* **3.** Ауыр тәьҫир ҡалдырған, күңелһеҙ. *Насар һүҙ. Насар хәл.*

**насос** *и.* Шыйыҡлыҡты, газды һурыу, ҡыуыу өсөн ҡулланылған машина, аппарат һ. б. *Һауа насосы. Һыу һурҙырғыс насосы. Насос станцияһы.*

**нескә** *с.* **1.** Диаметры, арҡырыһы бик бәләкәй (оҙонса нәмәгә ҡарата); нәҙек; *киреһе* йыуан. *Нескә бил. Нескә буйлы. Нескә һыҙыҡ.* **2.** Юғары, нәҙек (тауышҡа ҡарата). *Нескә тауыш.* **3.** *күсм.* Бәләкәй генә тәьҫиргә лә һиҙгер; наҙлы. *Нескә күңелле. Нескә тәбиғәтле. Нескә хистәр.*

**нефть (нефткә)** *и.* Ер аҫтынан сыға торған ҡараһыу төҫтәге май һымаҡ минераль шыйыҡлыҡ; ер майы (яғыулыҡ итеп, шулай уҡ кәрәсин, бензин, парафин һ. б. алыу өсөн сеймал итеп файҙаланыла). *Нефть сығарыу. Нефть вышкаһы. Нефть ятҡылығы.*

**ни**[1] *һор. а.* **1.** Эш-хәл йәки бер нәмә тураһындағы һорауҙы белдерә; нимә? *Ни һөйләйһең? Ни эшләйһең? Ни кәрәк?* **2.** Эш-хәлдең ҡайһылай, нисек, күпме, ниндәй булыуын белер өсөн бирелгән һорауҙы белдерә. *Ни эшең бар? Ни хаҡ тора? Ни өсөн?* **3.** *и. мәғ.* Билдәләнмәгән нәмәне, хәлде белдереү өсөн ҡулланыла; нәмә. *Ни генә юҡ. Ниҙән һүҙ башларға белмәү. Бер ни эшләмәү.*

**ни**[2] *киҫ.* **1.** Һөйләмгә икеләнеү, ғәжәпһенеү төҫмөрө бирә. *Ҡайтҡанмы ни? Эшләйбеҙме ни?* **2.** Эш-хәлгә ыңғай мөнәсәбәтте белдергәндә ҡулланыла. *Эшләһә ни, әйҙә эшләһен.*

**ни**[3] *терк.* Тиң киҫәктәрҙе берләштереү өсөн ҡулланыла. *Ни атаһы, ни малайы белмәй.*

**нигеҙ** *и.* **1.** Йорт-биналарҙың аҫҡы ҡоролмаһы. *Өй нигеҙе. Нигеҙ һалыу. Нигеҙ ташы.* **2.** Ата-бабалар йәшәгән урын, төп йорт. *Ата нигеҙе. Ырыу нигеҙе.* **3.** Берәй нәмәнең асылы. *Тормош нигеҙе. Нигеҙ һалыусы. Нигеҙ булыу. Нигеҙен ҡаҡшатыу.* **4.** *мат.* Геометрик фигурала бейеклеккә ҡарата перпендикуляр булған яҡ. *Конустың нигеҙе. Түбәнге нигеҙ.* **5.** *грам.* Һүҙҙең лексик мәғәнәгә эйә булған өлөшө. *Һүҙҙең нигеҙе.*

**низә** *һор. а.* Атап күрһәтелмәгән эш-хәл йәки нәмәне белдереү өсөн ҡулланыла; нимәлә? *Эш низә?* ♦ **Әллә низә бер** бик һирәк (ваҡытҡа ҡарата).

**низән** *һор. а. һөйл.* Ниндәй сәбәптән? Ни сәбәпле? *Низән башланды?*

**никах** *и.* **1.** Өйләнешә торған ике араны шәриғәт менән нығытыу йолаһы. *Никах уҡыу. Никахта тороу. Никахты өҙөү.* **2.** Өйләнешкәнлекте рәсми рәүештә законлаштырыу тәртибе. *Никахҡа инеү. Никах ҡағыҙы. Никах йорто.*

**нимә** *һор. а* **1.** Эш-хәл йәки берәй нәмә тураһындағы һорауҙы белдерә; ни? *Нимә булды? Нимә ти? Нимә алғандар? Нимә һөйләй?* **2.** Билдәһеҙ эш-хәл йәки нәмәне белдереү өсөн ҡулланыла; ни. *Нимә генә эшләмәй. Нимә бойороп ултыра.*

**ниндәй** *һор. а.* Берәй кешенең, нәмәнең сифаты йәки эш-хәлдең рәүеше тураһындағы һорауҙы белдерә. *Ниндәй кеше ул? Ниндәй китап?*

**нисек** *һор. а.* **1.** Эш-хәрәкәт йәки хәлдең башҡарылыу рәүешен һорауҙы белдерә; ни рәүешле? *Нисек ҡайтып еттең? Уҡыуың нисек?* **2.** Эш-хәрәкәт йәки хәлдең билдәһеҙ рәүешен белдерә; ни рәүешле. *Нисек йәшәйҙәрҙер. Нисек тапҡандар.*

**нисә** *һор. а.* **1.** Күләм, дәүмәл, һан тураһындағы һорауҙы белдерә; күпме? *Нисә йәш? Нисә китап? Нисә көн?* **2.** Билдәһеҙ һанды белдереү өсөн ҡулланыла. *Нисә йылдар үтте.* ♦ **Бер нисә** иҫәбе билдәһеҙ, бер сама. **Әллә нисә** һаны билдәһеҙ; күп кенә.

**нисәнсе** *һор. а.* Берәй нәмәнең иҫәбен йәки урынлашыу тәртибен белеү өсөн бирелгән һорауҙы белдерә. *Нисәнсе класта уҡыйһың? Нисәнсе йылда? Нисәнсе өй?*

**нишләп** *һор. а.* Ни сәбәп менән; ни өсөн, ниңә. *Нишләп килмәнең? Нишләп уҡыманың?*

**нишләү (нишлә-)** *ҡ.* **1.** Билдәһеҙ эш-хәрәкәтте аңлата. *Нишләргә белмәү.* **2.** *һор. а. мәғ.* Эш-хәлде асыҡларға теләп һорағанды аңлата. *Нишләргә инде? Нишләргә уйлайһың?*

**номер** *и.* **1.** Бер иш нәмәләр теҙеменең рәт һаны. *Йорт номеры. Телефон номеры. Журналдың беренсе номеры.* **2.** Тамға итеп цифр менән билдәләнгән нәмә. *Машина номеры. Табель номеры.* **3.** Концерт йәки башҡа тамашаның айырым башҡарыла торған бер өлөшө. *Яңғыҙ номерҙар ҡуйыу.*

**нота** *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа музыкаль тауыштың шартлы график билдәһе. *Бас нотаһы. «До» нотаһы.* **2.** Музыка йәки йырҙағы тауыш. *Түбән нота. Юғары нота.*

**нәмә** *и.* **1.** Үҙ сифаты, рәүеше булған әйбер. *Ваҡ-төйәк нәмә. Затлы нәмә. Кеше нәмәһе. Кәрәк нәмә.* **2.** Ысынбарлыҡтағы бер күренеш, эш-хәл, факт. *Бер нәмәлә эше юҡ. Бер нәмәһеҙ ҡалыу. Юҡ нәмә менән булыу.* **3.** Кеше, әҙәм заты. *Йүнһеҙ нәмә. Моңһоҙ нәмә. Үҙ һүҙле нәмә.*

**нәҫел** *и.* Бер төптән, бер сығанаҡтан таралған кешеләр быуыны; зат; туған-ырыу. *Нәҫел башы. Яҡшы нәҫел. Нәҫелдән килеү. Нәҫелгә тартыу.*

**нәтижә** *и.* **1.** Берәй эш-хәлдең аҙағы; һөҙөмтә. *Ыңғай нәтижә. Нәтижә ығарыу. Нәтижәгә килеү.* **2.** Бер нисә һанды ҡушҡандан барлыҡҡа килгән ҙөйөм һан. *Һандың нәтижәһе.*

**нәфис** *с.* **1.** Күңелгә хуш килерлек матур, нескә; зифа. *Нәфис гөлдәр. Нәфис ҡыҙ.* **2.** Яңғырашы йомшаҡ; яғымлы. *Нәфис тауыш.* ♦ **Нәфис һүҙ** сәхнә әҫәре рәүешендә тасуири һөйләүҙән ғибәрәт сығыш. **Нәфис фильм** тормошто сәнғәт алымдары нигеҙендә тасуирлап биргән фильм.

**нәфрәт** *и.* Бик ҡаты асыу, күрә алмауханлыҡ тойғоһо. *Нәфрәт менән ҡарау. Нәфрәт белдереү. Нәфрәт тойғоһо.*

# О

**обой** *и.* Бинаның эске стенаһына йәбештерә торған биҙәкле, киң ҡағыҙ аҫма. *Обой йәбештереү. Обой ҡағыҙы.*

**оҙаҡ** *с.* Күп ваҡыт дауам иткән, күп ваҡытҡа һуҙылған, дауамлы; *киреһе* иҙ. *Оҙаҡ йәшәү. Оҙаҡ көтөү.*

**оҙаҡламай** *р.* Күп тә үтмәй; тиҙ арала; тиҙҙән. *Оҙаҡламай килеп етеү.*

**оҙаҡлау (оҙаҡла-)** *ҡ.* Оҙаҡ ваҡыт ҡыланыу, оҙаҡҡа һуҙыу. *Оҙаҡлап китеү. Килмәй оҙаҡлау.*

**оҙатыу (оҙат-)** *ҡ.* Киткән кеше менән хушлашып, артынан эйәрә биреп ҡалыу. *Оҙатып барыу. Оҙатып ҡалыу. Ҡунаҡ оҙатыу.*

**оҙон** *с.* **1.** Буй үлсәме ҙур; *киреһе* ҡыҫҡа. *Оҙон күлдәк. Оҙон сәс. Оҙон таяҡ.* **2.** Ҙур раға һуҙымлы; алыҫ аралы, алыҫ. *Оҙон юл.* **3.** Күп ваҡытҡа һуҙымлы; дауам-ы. *Оҙон ғүмер. Оҙон көн. Оҙон итеп һөйләү.*

**ойоҡ (ойоғо)** *и.* Еп, йөндән һ. б. бәйләнгән тубыҡ өҫтөнә сығып торған оҡа аяҡ кейеме. *Ебәк ойоҡ. Еп ойоҡ. Йөн ойоҡ.*

**ойоҡбаш** *и.* Ҡыҫҡа ҡуныслы ойоҡ; башалтай. *Йөн ойоҡбаш. Ойоҡбаш бәйләү. Ойоҡбаш кейеү.*

**ойоу (ойо-)** *к.* **1.** Әсеп, һөттән ҡатыҡҡа әйләнеү. *Ҡатыҡ ойоп сыҡҡан, һөт ойоған.* **2.** *күсм.* Ҡуйы хәлгә килеү (ҡан, аҡһымға ҡарата). *Ҡан ойоған.*

**ойошма** *и.* Дөйөм маҡсат йәки эш башҡарыу өсөн төҙөлгән берләшмә. *Йәмәғәт ойошмалары. Төҙөлөш ойошмалары.*

**ойоштороу (ойоштор-)** *к.* **1.** Бергә аралаштырып, уҡмаштырыу. *Йөндө ойоштороу. Ҡаты һыу сәсте ойоштора.* **2.** Берәй дөйөм маҡсатты үтәү, эште башҡарыу өсөн берләштереү. *Балаларҙы ойоштороу. Музей ойоштороу. Ярыш ойоштороу.*

**океан** *и.* Ерҙең бөтә материк һәм утрауҙарын уратып алған һыуҙар. *Атлантик океан. Тымыҡ океан. Океан балығы. Океан карабы.*

**октябрь (октябрҙә)** *и.* Календарь йылының унынсы айы. *Октябрь айы.*

**оҡшатыу (оҡшат-)** *к.* **1.** Кешенең йәки бер нәмәнең ниндәй ҙә булһа сифатын башҡа берәүҙеке йәки нәмәнеке тап килгән тип табыу. *Баланы әсәһенә оҡшатыу. Оҡшатып яҙыу.* **2.** Яҡшы тип ҡабул итеү, һәйбәт тип табыу, яҡын күреү; яратыу. *Улар бер-береһен оҡшата.*

**оҡшау (оҡша-)** *к.* **1.** Ҡайһылыр сифаты менән бер нәмәгә йәки кешегә яҡын булыу; оҡшаш булыу. *Алтынға оҡшаған. Әсәһенә оҡшаған.* **2.** Яҡшы булып күренеү. *Уҡыу оҡшай. Үҙенә оҡшаған күлдәге.*

**оҡшаш** *с.* Ҡайһылыр бер яғы менән тап килгән; оҡшаған. *Оҡшаш кешеләр. Оҡшаш хәл. Оҡшаш булыу.*

**олатай** *и.* **1.** Атай йәки әсәйҙең атаһы. *Олатайым бик ҡартайған.* **2.** Ата-әсәнән оло ир-ат. *Шәкир олатайҙың улдары.*

**оло** *с.* **1.** Кем менәндер сағыштырғанда йәш яғынан ҙур; өлкән, *кесеһе* кесе. *Оло ағай. Оло апай.* **2.** Оҙаҡ, күп йәшәгән; ҡарт. *Оло быуын кешеләре. Ололар һүҙе.* **3.** Күләмле, дәүмәле ҙур. *Оло өй. Оло юл.* **4.** Әһәмиәте ҙур булған. *Оло байрам. Оло ваҡиға.*

**олон** *и.* Ағастың төп, үҙәк өлөшө; һабаҡ. *Ағас олоно.*

**олоу** (оло-) *к.* **1.** Һуҙып-һуҙып шомло ҡысҡырыу (бүре менән эткә ҡарата). *Бүре олой. Эт олой.* **2.** Көслө, оҙон геүелдәгән тауыш сығарыу. *Буран олой. Ел олой.*

**олпат** *и.* **1.** Күркле, мөһабәт төҫ-ҡиәфәт. *Олпатты юғалтмау.* **2.** *с. мәғ.* Күркле, мөһабәт төҫкә йәки һынға эйә; олпатлы. *Олпат кәүҙә. Олпат атлау.*

**омоним** *и.* Әйтелеше тап килеп, мәғәнәһе тап килмәгән һүҙ. (*Мәҫ.,* аяҡ – атлап йөрөй торған ағза, **аяҡ** – һауыт.)

**он** *и.* Тартып, ныҡ ваҡланған ашлыҡ йәки башҡа нәмә. *Аҡ он. Бойҙай оно. Үлән оно. Он иләү. Он тартыу.*

**онотоу (онот-)** *ҡ.* **1.** Иҫтән, хәтерҙән сығарыу. *Беҙҙе оноттоң. Дәрес ҙерләргә онотоу. Әйткәнде онотоу.* **2.** Күнекмәне, тәжрибәне юғалтыу. *Гармун йнауҙы онотоу.* ♦ **Донъяны онотоу** бер нәмә тураһында ла уйламай, ниндәйҙер бер эшкә, уйға һ. б. мөкиббән бирелеү.

**онтаҡ (онтағы-)** *и.* Он һымаҡ итеп, ныҡ ваҡланған нәмә. *Шәкәр онтағы. Ылыҫ онтағы. Онтаҡ сода. Онтаҡ тоҙ.*

**опера** *и.* Инструменталь һәм вокаль музыканы берләштереп, театрҙа башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән ҙур музыкаль драма әҫәре. *«Салауат Юлаев» операһы. Опера яҙыу. Опера йырсыһы.*

**операция** *и.* **1.** Ауырыу йәки яралы кешегә хирургик юл менән күрһәтелгән ярҙам. *Ҡатмарлы операция. Операция яһау.* **2.** Технологик процесс барышында башҡарылған эштең айырым өлөшө. *Робот биш операция башҡара.*

**организм** *и.* **1.** Үҙ алдына йәшәү, үҫеү һәләте булған һәр төрлө тереклек (кеше, хайуан, үҫемлек). *Ябай организм. Хайуан организмы.* **2.** Айырым бер кешенең тән һәм йән үҙенсәлектәре йыйылмаһы. *Организмдың ныҡлығы.*

**орден** *и.* Хеҙмәттә, һуғышта һ. б. күрһәткән батырлыҡтары өсөн хөкүмәт тарафынан бирелә торған төрлө дәрәжәләге махсус бүләк билдәһе. *Дан ордены. Орден менән бүләкләнеү.*

**оркестр** *и.* **1.** Музыкаль әҫәрҙе бергә башҡарған төрлө музыка ҡоралы һәм төрлө музыка ҡоралында бер музыкаль әҫәрҙе башҡарған коллектив. *Симфоник оркестр. Тынлы оркестр. Оркестр музыкаһы.* **2.** Театрҙың сәхнә алдындағы музыканттар урыны.

**орлоҡ (орлоғо)** *и.* Үҫемлектең нәҫелен дауам итә торған емеше. *Бойҙай орлоғо. Ҡыяр орлоғо. Орлоҡ фонды.*

**орсоҡ (орсоғо)** *и.* Ҡул менән йөн, дебет һ. б. иләү өсөн ҡулланылған ҡорал (бер башы нәҙек, икенсе башы тупалсаҡ итеп яһалған таяҡ). *Дебет орсоғо. Йөн орсоғо.*

**орфография** *и.* Айырым телдәге дөйөм ҡабул ителгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре. *Орфография ҡағиҙәләре.*

**ос** *и.* **1.** Ниҙеңдер нәҙегәйеп барып бөткән ере. *Бысаҡ осо. Ҡәләм осо. Энә осо.* **2.** Оҙонға һуҙылған нәмәнең барып бөткән өлөшө. *Арҡан осо. Ауыл осо. Урам осо.* **3.** Эш-хәлдең йәки берәй нәмәнең һуңы, аҙағы. *Эштең осона сығыу.* ♦ **Осо сығыу** йәшерен берәй эштең сере асылыу, йөйө сығыу. **Тырнаҡ (энә) осондай** бик аҙ ғына, бәләкәй генә.

**оскон** *и.* **1.** Осоп-сәсрәп торған бөртөк-бөртөк ут. *Оскон осоу. Оскон сәсрәү.* **2.** *күсм.* Янған һымаҡ ялтырап торған бәләкәй генә нөктә. *Күҙҙәрендә оскон ялтырай.*

**ослау (осла-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәнең башын нәҙеккә әйләндереү, ос яһау; осло итеү. *Ҡаҙыҡ ослау. Ҡәләм ослау.* **2.** *күсм.* Аҙағына еткереп, тамамлау; бөтөрөү. *Һүҙҙе ослау. Эште ослау.*

**осор** *и.* Ниндәйҙер үҙенсәлектәрҙе, төрлө хәлдәрҙе үҙ эсенә алған билдәле бер ваҡыт арауығы. *Каникул осоронда. Яуаплы осор.*

**осороу (осор-)** *ҡ.* **1.** Осорға мөмкинселек биреү йәки мәжбүр итеү. *Шонҡар осороу. Ҡош балаларын осороп ебәреү.* **2.** Ниҙелер һауаға күтәреп алып китеү. *Ел япраҡтарҙы осорҙо.* ♦ **Бала осороу** балаһын осорға өйрәтеү (ҡоштарға ҡарата).

**осоу (ос-)** *ҡ.* **1.** Һауала хәрәкәт итеү. *Самолетта осоу.* **2.** Быуға әйләнеп таралып бөтөү. *Спирт осоп бөткән.* ♦ **Йоҡо осоу** йоҡо килмәү; йоҡо ҡасыу. **Ҡот осоу** ныҡ ҡурҡыу.

**осраҡ (осрағы)** *и.* Ниҙендер берәй хәле. *Был осраҡта. Күп осраҡтарҙа.*

**осратыу (осрат-)** *ҡ.* Тап итеү. *Урамда осратыу. Әхирәтте осратыу.*

**осрау (осра-)** *ҡ.* **1.** Китеп барғанда, юлда кемгә йәки нәмәгә тап булыу; тура килеү. *Таныш осраны. Юлда осрау.* **2.** Тормошта, донъяла күреү, белеү. *Йыраусыны осратыу.* **3.** Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға дусар булыу; юлығыу. *Буранға осрау. Һәләкәткә осрау.*

**осрашыу (осраш- )** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара ҡаршы килешеү; тап булышыу. *Ике осрашты. Театрҙа осрашыу.* **2.** Тормошта, донъяла ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға тарыу. **3.** Бергә ваҡыт үткәреү, әңгәмәләшеү һ. б. өсөн күрешеү. *Класташтар менән осрашыу. Осрашыу кисәһе.*

**осһоҙ** *с.* Хаҡы бик түбән; арзан; *киреһе* ҡыйбат. *Осһоҙ әйбер. Осһоҙға һатыу.*

**оҫта**[1] *и.* **1.** Эште бик яҡшы башҡарған кеше; һөнәр эйәһе. *Ҙур оҫта. Бөтә нәмәгә оҫта.* **2.** Ниндәйҙер эштең белгесе. *Мейес оҫтаһы. Сәнғәт оҫтаһы.*

**оҫта**[2] *с.* Берәй эште, һөнәрҙе еренә еткереп башҡара белгән. *Оҫта тегеүсе. Оҫта гармунсы. Оҫта һөйләү. Оҫта эшләү. Оҫта яуап биреү.*

**отличник (отличнигы)** *и.* **1.** Төп фәндәрҙән юғары баһа («5» билдәләре) алып уҡыған уҡыусы. *Уҡыу отличнигы.* **2.** Үҙ эшен бик яҡшы итеп үтәгән кеше. *Мәғариф отличнигы.*

**отоу**[1] **(от-)** *ҡ.* **1.** Уйында, ярышта артта ҡалдырыу, еңеү. *Ярышта отоу.* **2.** Шарт ҡуйып уйнала торған уйында еңеп, ниҙер алыу. *Аҡса отоу. Һыуытҡыс отоу.*

**отоу**[2] **(от-)** *ҡ.* Ниҙелер күреп йәки ишетеп хәтерҙә ҡалдырыу; өйрәнеү, ҙләштереү. *Йырҙы отоу. Отоп алыу.*

**отряд** *и.* Бер төрлө эште башҡарыу өсөн бергә ойошҡан кешеләр төркөмө. *Партизандар отряды. Отряд командиры.*

**офицер** *и.* Армия һәм флоттағы командирҙар составына ингән кеше. *Флот фицеры. Офицер погоны. Офицер хеҙмәте.*

**офоҡ (офоғо)** *и.* **1.** Күк менән ерҙең тоташҡан һымаҡ булып күренгән ызығы. *Ҡояш офоҡҡа инеп байыны. Офоҡ һыҙығы.* **2.** *күсм.* Эшмәкәрлек, илем киңлеге. *Ижади офоҡ.*

**ошаҡлау (ошаҡла-)** *ҡ.* Кеше өҫтөнән икенсе бер кешегә һүҙ еткереү. *Дуҫты шаҡлау. Ошаҡлашыу менән шөғөлләнеү.*

**ошо** *күрһ. а.* **1.** Билдәле бер нәмәне тоҫҡап күрһәтеү өсөн ҡулланыла. *Ошо ала. Ошо күлдәк.* **2.** Ваҡыттың әле генә булыуын белдереү өсөн ҡулланыла. *Ошо көндө. Ошо мәлдә.*

**ошолай** *р.* Ошо рәүешле. *Ошолай эшләйһең. Ошолайтырға кәрәк.*

**оя** *и.* **1.** Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлек, бөжәктәрҙең йәшәү, үрсеү өсөн һаған урыны. *Ҡош ояһы. Сыҫҡан ояһы. Һағыҙаҡ ояһы.* **2.** *күсм.* Кешенең әшәгән урыны, өйө, донъяһы. *Оя ҡороу.*

**оялау (ояла-)** *ҡ.* Оя яһап урынлашыу. *Сыйырсыҡ оялаған. Турғай ҡыйыҡҡа ялаған.*

**оялсан** *с.* Тиҙ уңайһыҙланып, оялып барыусан. *Оялсан ҡыҙ. Оялсан булыу.*

**оялыу (оял-)** *ҡ.* Уңайһыҙлыҡ тойоу; тартыныу. *Ояла белмәү. Оялып йөрөү.*

**оят** *и.* Уңайһыҙланыу, тартыныу тойғоһо. *Оят булыу. Оятҡа ҡалыу.*

**оятһыҙ** *с.* Тартына, ояла белмәгән; намыҫһыҙ. *Оятһыҙ кеше. Оятһыҙ булыу.*

# Ө

**өгөтләү (өгөтлә-)** *ҡ.* Нимәгәлер өндәп кәңәш биреү. *Баланы өгөтләү. Өгөтләп күндереү. Өгөтләү һүҙе.*

**өҙлөкһөҙ** *с.* Бер туҡтауһыҙ дауам иткән. *Өҙлөкһөҙ эш. Өҙлөкһөҙ ямғыр. Өҙлөкһөҙ илау.*

**өҙөк (өҙөгө)** *и.* **1.** Нимәнендер өҙөлгән урыны. *Бауҙың өҙөгө. Линияның өҙөгө.* **2.** *күсм.* Һүҙ, яҙма һ. б. нәмәнең бер өлөшө, киҫәге. *Пьесаның бер өҙөгө. Шиғырҙың өҙөгө.*

**өҙөү (өҙ-)** *к.* **1.** Көс менән тартып, киҫәккә айырыу. *Арҡанды өҙөү. Сынйырҙы өҙөү. Урталай өҙөү.* **2.** Берәй нәмәне тартып айырыу, йолҡоу. *Еләк өҙөү. Сәскә өҙөү.* **3.** Хәл-ваҡиғаны, эш-хәрәкәтте, мөнәсәбәтте туҡтатыу. *Дуҫлыҡты өҙөү. Йырҙы өҙөү. Уҡыуҙы өҙмәү.* ♦ **Ғүмерҙе өҙөү** үлтереү.

**өҙәңге** *и.* Эйәрҙең аяҡты кейҙереп, баҫып ултыра торған өлөшө. *Өҙәңгегә баҫыу. Өҙәңге бауы.*

**өй** *и.* **1.** Кеше йәшәү өсөн һалынған бина; йорт. *Кирбес өй. Өйгә инеү. Өй башы.* **2.** Кемдер йәшәгән урын; бүлмә, фатир. *Өй эсе. Өйҙө йыйыштырыу. Өйҙә ултырыу.* **3.** Кешенең төп йәшәгән урыны, ил, төбәк. *Өйгә ҡайтыу. Өйҙән хат алыу. Өйҙә булыу.*

**өйләнеү (өйлән-)** *к.* Кәләш алыу. *Күрше ҡыҙына өйләнеү. Иртә өйләнеү.*

**өйөр** *и.* **1.** Бер айғыр йөрөткән йылҡы көтөүе. *Йылҡы өйөрө. Өйөр айғыры. Өйөр булып йөрөү.* **2.** Бергә йөрөгән йыртҡыс йәнлектәр төркөмө. *Бүре өйөрө. Эт өйөрө.* **3.** Бергә йыйылған шау-шыулы кешеләр төркөмө. *Дошман өйөрө. Халыҡ өйөрө.*

**өйөү (өй-)** *к.* **1.** Бер төрлө нәмәләрҙе бергә йыйып, өйөм яһау. *Ашлыҡ өйөү. Балсыҡ өйөү. Һалам өйөү.* **2.** Берәй нәмәне күп итеп йәки өймәләмә итеп һалыу. *Ашамлыҡты өйөп ташлау. Итте өйөп һалыу.*

**өйрөлөү (өйрөл-)** *к.* **1.** Бер урынды уратып хәрәкәт итеү; әйләнеү. *Орсоҡ өйрөлә. Тәгәрмәс өйрөлә. Самолет өйрөлөп оса.* **2.** *күсм.* Кем йәки нимәнендер тирәһендә ығы-зығы килеү, ураланыу. *Әсә бала янында өйрөлә.*

**өйрәк (өйрәге)** *и.* Аяғы, муйыны ҡыҫҡа, суҡышы яҫы, бармаҡ аралары ярылы һыу ҡошо. *Ата өйрәк. Инә өйрәк. Йорт өйрәге.*

**өйрәнеү (өйрән-)** *к.* **1.** Берәй эште, һөнәрҙе башҡарырға күнекмә алыу. *Йырларға өйрәнеү. Рәсем төшөрөргә өйрәнеү. Тегергә өйрәнеү.* **2.** Берәй өлкә буйынса тейешле белемгә эйә булыу, мәғлүмәт алыу. *Алдынғы тәжрибәне өйрәнеү. Халыҡ ижадын өйрәнеү.* **3.** Кемгәләр эйәләшеү, нимәгәләр ғәҙәтләнеү. *Кешегә өйрәнеү. Яман ғәҙәткә өйрәнеү.*

**өйрәнсек (өйрәнсеге)** *и.* Эшкә, һөнәргә башлап өйрәнеп йөрөгән кеше. *Өйрәнсектә йөрөү. Өйрәнсеген маҡтау. Өйрәнсек малай.*

**өйрәтеү (өйрәт-)** *к.* **1.** Берәй эште, һөнәрҙе башҡарырға күнекмә, белем биреү. *Бейергә өйрәтеү. Уҡырға өйрәтеү. Яҙырға өйрәтеү.* **2.** Тейешле белем биреп, берәй эшкә, һөнәргә эйә итеү, мәғлүмәтле итеү. *Гармунға өйрәтеү. Уҡырға өйрәтеү. Юл өйрәтеү.* **3.** Нәмәнең асылын, мәғәнәһен кемгәләр еткереү, төшөндөрөү. *Алдынғы тәжрибәне өйрәтеү. Сабырлыҡҡа өйрәтеү. Тәртипкә өйрәтеү.* **4.** Нимәгәләр күнектереү. *Ат өйрәтеү. Ҡулға өйрәтеү. Эт өйрәтеү.*

**өйәңке** *и.* Тал һымаҡ бейек ағас. *Бөҙрә өйәңке. Ҡара өйәңке. Ялбыр өйәңке.*

**өкө** *и.* Ябалаҡҡа оҡшаған буй ҡара таплы, һорғолт ерән төҫтәге ҡолаҡлы ре йыртҡыс ҡош. *Бесәй башлы өкө. Поляр өкө.*

**өлгө** *и.* Тәҙрә күҙәнәктәренең бер өлөшө. *Тәҙрә өлгөһө. Тәҙрәгә өлгө ҡуйыу.*

**өлгөр** *с.* Бөтәһенә лә етешә алған, етеҙ, еңел хәрәкәтле. *Өлгөр егет. Өлгөр ыҙ.*

**өлгөрөү (өлгөр-)** *ҡ.* **1.** Билдәле бер ваҡытҡа ниҙелер башҡарыуға өлгәшеү. *әсеп өлгөрөү. Урырға өлгөрөү. Дәрескә өлгөрөү.* **2.** Файҙаланыуға яраҡлы имәлгә етеү, әҙер булыу. *Аш өлгөргән. Сәй өлгөргән. Мунса өлгөргән.* **3.** Бешеп теү (иген, емеш-еләк, йәшелсәгә ҡарата). *Ашлыҡ өлгөрҙө. Еләк-емеш өлгөрә. ыяр өлгөрҙө.*

**өлгәш** *и.* Уҡыусыларҙың дәрестэ үҙләштереү кимәле. *Юғары өлгәш. Өлгәш имәле. Өлгәш табеле.*

**өлгәшеү (өлгәш-)** *ҡ.* **1.** Көс, тырышлыҡ менән ниндәйҙер һөҙөмтәгә решеү, шуны тормошҡа ашырыу. *Маҡсатҡа өлгәшеү. Уңышҡа өлгәшеү.* . Дәрестэ тейешенсә үҙләштереү. *Уҡыуҙа өлгәшеү. Рус теленән өлгәшеү.*

**өлкә** *и.* **1.** Рәсәйҙәге эре административ-территориаль берәмек. *Ырымбур лкәһе. Өлкә советы.* **2.** Эш, тормош, мәҙәниәт һ. б. айырым бер тармағы. *Ауыл ужалығы өлкәһе. Шиғриәт өлкәһе.*

**өлкән** *с.* **1.** Кемгәлер ҡарағанда йәше оло. *Өлкән апай. Өлкән ул.* **2.** Күләме, әүмәле ҙур. *Өлкән ғаилә. Өлкән келәт. Өлкән күл.* **3.** Юғарыраҡ баҫҡыстағы уҡыу йорттарындағы класс һәм курстарға ҡарата). *Өлкән курстар. Өлкән ласс уҡыусыһы.*

**өлөш** *и.* **1.** Бөтөндөң бер киҫәге. *Ауылдың ярты өлөшө. Дүрттән бер өлөш. лөш алыу.* **2.** Уртаҡ, дөйөм һаналған эшкә индерелгән аҡса, һалынған хеҙмәт . б. *Өлөш индереү. Өлөшкә инеү. Өлөш һалыу.* **3.** Бер бөтөн әҫәр, хеҙмәт, ғилем-ең бер бүлеге. *Китаптың өлөшө. Мәҡәләнең тәнҡит өлөшө.*

**өләсәй** *и.* Әсәйҙең әсәһе. *Өләсәйҙең әкиәте.*

**өләшеү (өләш-)** *ҡ.* Өлөш-өлөш итеп бүлеп таратыу. *Өләшеп биреү. Ит ләшеү.*

**өмөт** *и.* Эш-хәлдең, уй-теләктең киләсәктә булырына ышаныс. *Өмөт итеү. мөт менән ҡарау. Өмөттө өҙөү.*

**өмөтләнеү (өмөтлән-)** *ҡ.* Ниҙеңдер булырына ышаныу; өмөт бағлау. *мөтләнеп йәшәү. Өмөтләнеп көтөү.*

**өмә** *и.* Ярҙам итеү ниәте менән күмәкләп башҡарылған эш. *Бесән өмәһе. Өй күтәрергә өмә итеү.*

**өн** *и.* **1.** Боғаҙҙан, тамаҡтан сыҡҡан тауыш. *Моңло өн.* **2.** Һүҙҙе әйткәндә сыҡҡан тауыш. *Өнһөҙ ҡалыу. Өнөң сыҡмаһын.* **3.** *лингв.* Әйтелгән һүҙҙең айырым бер мәғәнәгә эйә булған иң ваҡ киҫәге. *Аңҡау өндәре. Тартынҡы өн.*

**өндәү (өндә-)** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер өгөтләү, саҡырыу. *Ҡайтырға өндәү. Урамға сығырға өндәү. Эшкә өндәү.* **2.** Нимәгәлер саҡырып халыҡҡа мөрәжәғәт итеү. *Көрәшкә өндәү. Яуға өндәү. Өндәү яҙыу. Өндәү һүҙе.* ♦ **Өндәү билдәһе** көслө интонация менән әйтелгән һүҙ йәки һөйләмдәрҙән һуң ҡуйыла торған тыныш билдәһе.

**өндәш: өндәш һүҙ** *грам.* уй-фекерҙең кемгә йәки нимәгәлер төбәлгәнен белдергән, һөйләмгә [телмәргә] грамматик бәйләнеше булмаған һүҙ.

**өндәшеү (өндәш-)** *ҡ.* **1.** Кешегә мөрәжәғәт итеү, һүҙ ҡушыу. *Балаға өндәшеү. Әкрен генә өндәшеү. Өндәшмәй ултырыу.* **2.** Яуап итеп ыңғай йәки кире һүҙ әйтеү. *Өндәшмәй ҡалыу.*

**өң** *и.* Йәнлектәрҙең соҡоп яһалған ояһы. *Айыу өңө. Йомран өңө. Өңгә инеү.*

**өркөү (өрк-)** *к.* **1.** Ҡапыл ҡурҡып ҡасыу (йәнлек, хайуанға ҡарата). *Һарыҡтар өрктө.* **2.** *күсм.* Ҡурҡыуға төшөү (кешегә ҡарата); ҡурҡыу. *Өркөү белмәҫ егет.*

**өрөк (өрөгө)** *и.* **1.** Һары, итләс емеш бирә торған алһыу сәскәле, муйыл япраҡлы йылы яҡ ағасы һәм емеше. *Өрөк ағасы. Өрөк баҡсаһы.* **2.** Шул ағастың кипкән емеше. *Кипкән өрөк. Өрөк һөйәге.*

**өрөү**[1] **(өр-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәгә тын, һауа ебәреү. *Сәйҙе өрөп эсеү. Утҡа өрөү. Тупты өрөү.* **2.** Билдәле йүнәлештә хәрәкәт итеү (елгә ҡарата); иҫеү. *Ел өрә. Үтәнән-үтә өрөү.* ♦ **Йән өрөү** 1) хәл индереү, терелтеү; 2) күтәренкелек, йәнлелек биреү.

**өрөү**[2] **(өр-)** *ҡ.* **1.** Өҙөк-өҙөк итеп көслө тауыш биреү (эткә ҡарата). *Эт өрҙө. Абалап өрөү.* **2.** *күсм.* Асыуланып тауыш күтәреү, шаулашыу; әрләшеү. *Эт кеүек өрөп сығыу.*

**өсмөйөш** *и.* Өс эске мөйөш яһап үҙ-ара киҫешкән өс һыҙыҡ менән сикләнгән геометрик фигура. *Йәйенке өсмөйөш. Ҡыҫыҡ мөйөшлө өсмөйөш. Тура мөйөшлө өсмөйөш.*

**өсөн** *бәйл.* **1.** Эш-хәрәкәттең маҡсатын күрһәткәндә ҡулланыла. *Аҡса өсөн эшләү. Алып китер өсөн ҡайтыу. Күрер өсөн ҡайтыу.* **2.** Эш-хәлдең сәбәбен йәки сәбәп булған нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Изгелегең өсөн рәхмәт. Ҡышҡылыҡ өсөн бесән әҙерләү. Бала өсөн хафаланыу.* **3.** Нимәнелер башҡарыу сараһын, шартын белдергәндә ҡулланыла. *Мул уңыш бирһен өсөн. Ғәҙел хөкөм итеү өсөн.* ♦ **Исем өсөн** ысын итеп түгел, иҫәп өсөн генә (ниҙер эшләү).

**өҫ** *и.* **1.** Билдәле бер кимәлдән юғары булған тараф; *киреһе* аҫ. *Өҫкә күтәре-*
*еү. Өҫкә менеү. Өҫкә сөйөү.* **2.** Нимәнеңдер юғарғы янындағы урын, тышҡы
өҙ, яҡ. *Арба өҫтө. Ҡала өҫтө. Өҫкә кейеү.* **3.** Айырым бер эш-хәл барған йәки
ашҡарылған мәл. *Бесән өҫтө. Ураҡ өҫтө.*

**өҫкө** *с.* **1.** Ниҙәндер өҫтәрәк, юғарыраҡ урынлашҡан; юғарғы. *Өҫкө ҡат.*
*Өҫкө урам. Өҫкө яҡ.* **2.** Тыштан, нимәнеңдер өҫтөнән кейелә торған. *Өҫкө*
*ейем.*

**өҫтөн** *с.* **1.** Ниндәйҙер яғы менән башҡаларҙан юғарыраҡ торған. *Өҫтөн*
*еше. Өҫтөн класс.* **2.** *р. мәғ.* Бүтән нәмәнән юғары, артыҡ. *Өҫтөн булыу. Өҫтөн*
*ороу.*

**өҫтәл** *и.* **1.** Өҫтөнә таҡта йәйеп яһалған йыһаз. *Аш өҫтәле. Яҙыу өҫтәле.*
. Шул йыһаз өҫтөнә әҙерләп ултыртылған ашамлыҡ. *Өҫтәл әҙерләү. Бай*
*өҫтәл.* **3.** Махсус бер эш менән шөғөлләнгән ойошма йәки уның бер бүлеге.
*дрестар өҫтәле. Паспорт өҫтәле.*

**өҫтән** *р.* Эсенә инмәй, асылына, төбөнә төшмәй; тыштан. *Өҫтән ҡарау.*
*Өҫтән генә эшләү.*

**өҫтәү (өҫтә-)** *к.* Булған өҫтөнә тағы ҡушыу; арттырыу. *Аш өҫтәү. Сәй өҫтәү.*
*Өҫтәп биреү.*

**өтөр** *и.* Ҡойроҡло нөктә рәүешендәге тыныш билдәһе [,]. *Өтөр ҡуйыу.*
*Өтөрҙө һыҙыу.*

**өтөү (өт-)** *к.* **1.** Утҡа тотоп яндырыу (таҙартыу, бешереү). *Баш-тояҡты*
*өтөү. Балыҡ өтөү. Ҡылды өтөү.* **2.** *күсм.* Нығ әсеттереп, яндырыу. *Борос та-*
*аҡты өттө.* 3. Нығ өшөтөү йәки эсе булыу. *Әсе ел өтөп алды. Эсе ҡояш өтөп*
*ара.*

**өшөү (өшө-)** *к.* **1.** Һалҡынды тойоу. *Аяҡ өшөй. Ҡул өшөй. Өшөп йөрөү.*
. Һалҡындан һәләк булыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Алмалар өшөгән.* ♦ **Йөрәк**
**йән) өшөү** аяныс хәлдән ҡурҡыу.

# П

**пакет** *и.* **1.** Төрөп ҡуйылған нәмә; төргәк. *Бинт пакеты.* **2.** Берәй нәмә
алыу өсөн яһалған ҡағыҙ йәки полиэтилен тоҡсай. *Пакетҡа һалыу.*

**пальто** *и.* Оҙон сабыулы күлдәк, костюм һ. б. өҫтөнән кейә торған йылы
ейем. *Йоҡа пальто. Ҡышҡы пальто. Ҡаракүл яғалы пальто. Пальто кейеү.*

**папка** *и.* Ҡағыҙ һалыу өсөн ҡатырға, күн һ. б. нәмәнән эшләнгән тышлыҡ.
*ыҙыл тышлы папка. Папка эсенә һалыу.*

# П

**пар**[1] *и.* **1.** Юғары температура тәьҫирендә һыуҙың газға әүерелгән торошо; боҫ. *Пар сығарыу.* **2.** Дымлы һауа. *Мунса пары.*

**пар**[2] *и.* **1.** Бер бөтөндө тәшкил иткән ишле нәмә. *Бер пар ойоҡ.* **2.** Бергә йөрөгән, бергә ҡулланылған ишле ике нәмә. *Сынаяҡтың пары.* ♦ **Пар ат** ҡушлап егелгән ике ат.

**параграф** *и.* Тексттың айырым мәсьәләгә эйә булған бәләкәй бер өлөшө. *Беренсе параграф. Параграфты билдәләү.*

**парад** *и.* Берәй тактика уңайы менән ғәскәрҙең, физкультурниктарҙың... һ. б. тантаналы маршы. *Хәрби парад. Физкультурниктар параԁы.*

**парк** *и.* **1.** Йөрөр юлдары, ағастары, сәскәләре булған ял баҡсаһы. *Ҡала паркы. Фонтанлы парк. Паркка инеү.* **2.** Транспорт сараларының туҡтап тора һәм ремонтлана торған урыны. *Трамвай паркы.*

**парлау (парла-)** *ҡ.* Парға бешереү, пар менән бешекләү. *Һаламды парлау.*

**пароход** *и.* Пар двигателе менән эшләгән карап. *Диңгеҙ пароходы. Йылға пароходы. Пароходта йөҙөү.*

**парта** *и.* Өҫкө таҡтаһын ауыш итеп, эскәмйәһе менән тоташтырып яһалған уҡыусылар өсөн мәктәп өҫтәле. *Парта артында ултырыу. Парта эшләү.*

**пас** *и. спорт.* Туптың йәки шайбаның үҙ төркөмөндәге кешегә оҙатылыуы. *Пас биреү. Пасты алыу.*

**паспорт** *и.* **1.** Кешенең шәхесен, гражданлығын күрһәтә торған төп документ. *Сит ил паспорты. Паспорт алыу. Паспортҡа ҡушымта.* **2.** Ойошма, ҡоролма йәки башҡа нәмәләр тураһында мәғлүмәт биргән таныҭма. *Сәғәттең паспорты.*

**пассажир** *и.* Транспортта китеп барған кеше. *Автобус пассажиры. Самолет пассажирҙары.*

**патрон** *и.* **1.** Гильзаға һалынған дары менән пуля. *Патрон бөткәнсе атыу.* **2.** Лампаны селтәргә тоташтырыу өсөн бороп ҡуя торған махсус цилиндр. *Лампочканы патронға бороу.*

**патруль (патруле)** *и.* Тәртип һәм хәүефһеҙлек һаҡлау өсөн йөрөгән хәрби подразделение йәки милиция төркөмө. *Хәрби патруль. Патрулдә йөрөү.*

**педаль (педале)** *и.* Аяҡ баҫмағы. *Велосипед педале. Рояль педале.*

**пенал** *и.* Ҡәләм, ручка һаҡлау өсөн оҙонса һауыт. *Ағас пенал. Ҡәләмдәрҙе пеналға һалыу.*

**перәник (перәниге)** *и.* Ҡамырға бал-шәкәр һәм башҡа тәм-том ҡушып бешергән ваҡ икмәк. *Арыш перәниге.*

**печенье** *и.* Сөсө ҡамырҙан татлап, төрлөсә ҡырҡҡылап бешергән кондитер ашамлығы. *Печенье бешереү. Сәйгә печенье ҡушып эсеү.*

**пешка** *и.* Шахмат уйынындағы иң бәләкәй фигура. *Пешканы ферзгә сығарыу.*

**пианино** *и.* Ҡылдары өҫтән аҫҡа тартылған ҙур ағас ҡумта рәүешендәге баҫмаҡлы музыка ҡоралы. *Пианинола уйнау. Пианиноны көйләү.*

**пинжәк (пинжәге)** *и.* Ирҙәр костюмының төймәләргә ҡаптырмалы өҫкө өлөшө. *Күн пинжәк. Пинжәк кейеү.*

**пионер** *и.* **1.** Алыҫ, билдәһеҙ ергә (илгә) башлап барып ултырған кеше. **2.** *күсм.* Ниндәйҙер эшкә башланғыс һалған кеше. *Йыһан пионерҙары.*

**пистолет** *и.* Яҡындан ата торған ҡыҫҡа көбәкле ҡорал. *Пистолеттан атыу.*

**питомник (питомнигы)** *и.* Айырым үҫемлек йәки хайуандарҙы ҡарап үҫтерә торған махсус урын. *Ағас питомнигы. Балыҡ питомнигы.*

**план** *и.* **1.** Ниндәйҙер бер урындың, йорт-ҡорамалдың кесерәйтеп төшөрөлгән һыҙмаһы. *Йорттоң планы. Ҡаланың планы.* **2.** Ниндәйҙер эш сараларының алдан билдәләнгән тәртибе һәм күләме. *Планды үтәү.* **3.** Берәй эш буйынса алдан ҡоролған уй-ниәт. *План ҡороу. План төҙөү.* **4.** Берәй нәмәнең тамашасыға ҡарата биләгән урыны. *Алғы план. Артҡы план.*

**планета** *и.* Ҡояш йәки башҡа йондоҙ тирәләй әйләнеп йөрөгән эре күк есеме. *Эре планеталар.*

**пластилин** *и.* Балсыҡ, балауыҙ, май ҡатнаштырып, ҡатмай торған итеп эшләнгән, әүәләп ниҙер яһау өсөн ҡулланылған пластик масса. *Пластилиндан уйынсыҡтар яһау.*

**пластинка** *и.* Ҡаты матдәнән эшләнгән йоҡа яҫы киҫәк. *Быяла пластинка. Тимер пластинка.*

**пластмасса** *и.* Йылытҡанда кәрәкле формаға еңел килеп, һуңынан шул форманы һаҡлай алған полимер. *Пластмасса тараҡ. Пластмасса һауыт.*

**плащ** *и.* Ямғыр үткәрмәй торған еңел пальто. *Плащ кейеү. Ирҙәр плащы.*

**пленка** *и.* **1.** Фотоға һәм киноға төшөрә торған махсус таҫма. *Фотоаппарат пленкаһы.* **2.** Синтетик материалдан эшләнгән үтә күренмәле материал. *Түтәлде пленка менән ябыу.*

**пломбир** *и.* Төрлө емеш, һут ҡушып, ҡаймаҡтан эшләнгән туңдырма.

**плюс** *и.* **1.** *мат.* Ҡушыу ғәмәлен һәм ыңғай һанды булдырған тамға (+). *Плюс ҡуйыу.* **2.** Һауа һәм һыу температураһының нулдән юғары булған күрһәткесе.

**повесть (повесы)** *и.* Романға ҡарағанда йөкмәткеһе ябайыраҡ, күләме бәләкәйерәк әҙәби әҫәр. *Тарихи повесть. Повесть яҙыу.*

**погон** *и.* Формалы кейемдең яурынына таға торған дүрткел айырыу билдәһе. *Офицер погоны.*

**подъезд (подъезы)** *и.* Бинаға инеү урыны. *Өй подъезы. Подъезд ишеге.*

**поезд (поезы)** *и.* Локомотивҡа тағылған вагондар теҙмәһе. *Пассажир поезы. Тауар поезы.*

**полюс** *и.* **1.** Ер шарының фарази күсәре менән ер өҫтөнөң киҫешкән нөктәһе. *Көньяҡ полюс. Төньяҡ полюс.* **2.** *физ.* Электр теҙеме йәки магниттағы ҡапма-ҡаршы ике остоң береһе. *Кире полюс. Ыңғай полюс.*

**помидор** *и.* Баҡса үҫемлеге һәм уның йәшелсәһе. *Тоҙло помидор. Помидор һүтәле. Помидор үҫтереү.*

**порт** *и.* Караптар туҡтап бушатына, тейәнә, ремонтлана торған яр буйындағы махсус урын һәм шундай урыны булған диңгеҙ ярындағы ҡала. *Диңгеҙ порты. Йылға порты. Портҡа инеү.*

**портрет** *и.* **1.** Кеше рәсеме. *Портрет төшөрөү.* **2.** Әҙәби әҫәрҙәге персонаждың тышҡы күренешенең тасуирламаһы. *Әҙәби портрет. Портрет тыуҙырыу.*

**портфель (портфеле)** *и.* Китап, ҡағыҙ һ. б. һалып йөрөй торған ҡапҡаслы, дүрткел сумка. *Аҫып йөрөтмәле портфель. Күн портфель.*

**посылка** *и.* Төрөп йәки йәшниккә һалып почта аша ебәрелгән әйбер. *Посылка ебәреү. Посылка алыу.*

**поход** *и.* Ойошҡан төркөмдөң ниндәйҙер бер маҡсат менән башҡарған сәфәре. *Йәйәүле поход. Походҡа йыйыныу.*

**почта** *и.* **1.** Гәзит-журналдарҙы таратҡан, аҡса, хат кеүек нәмәне ебәреүҙе башҡарған элемтә ойошмаһы. *Почта бүлексәһе. Почта йәшниге.* **2.** Кәрәк нәмәнең шул ойошма аша ебәрелеүе. *Ашығыс почта. Почта менән ебәреү.*

**почтальон** *и.* Газета-журнал, хаттарҙы таратып йөрөгән почта хеҙмәткәре. *Почтальон булып эшләү. Почтальон сумкаһы.*

**поэма** *и.* Тарихи, героик йәки лирик темаға шиғыр менән яҙылған күләмле әҙәби әҫәр. *Лирик поэма. Эпик поэма.*

**президент** *и.* **1.** Республика формаһындағы дәүләттәрҙә билдәле ваҡытҡа һайланған хөкүмәт башлығы. *Башҡортостан Президенты.* **2.** Йәмғиәт йәки ғилми ойошмаларҙа етәкселек итеү өсөн һайланған рәйес. *Фәндәр академияһы президенты.*

**премия** *и.* Хеҙмәт өсөн рәсми рәүештә аҡсалата, ҡиммәтле нәмә һ. б. формаһында бирелгән бүләк. *Премия алыу. Премия биреү.*

**прибор** *и.* **1.** Төрлө хеҙмәттә етештереү, күҙәтеү, тикшереү, хисаплау эштәрен башҡара торған ҡорамал. *Үлсәү приборы. Газ приборы.* **2.** Билдәле бер эш өсөн ҡулланылған нәмәләр йыйымы. *Ҡырыныу приборы. Яҙыу приборы.*

**приз** *и.* Ярышта еңеүсегә бирелә торған бүләк. *Приз алыу. Приз тапшырыу.*

**программа** *и.* **1.** Алдағы эшмәкәрлектең планы. *Дәүләт программаһы. Үҫеш программаһы. Программа төҙөү.* **2.** Берәй сараны үткәреү, алып барыу планы. *Концерт программаһы. Съезд программаһы. Телевидение программаһы.* **3.** Уҡытылған фәндәрҙең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен, ысулын күрһәткән ҡулланма. *Башҡорт теле программаһы.*

**профессия** *и.* Кешенән тейешле әҙерлек талап иткән төп хеҙмәт, һөнәр. *Профессия алыу. Профессия һайлау.*

**пулемет** *и.* Пуля менән үтә тиҙ ата торған автоматик ҡорал. *Ҡул пулеметы. Пулемет таҫмаһы.*

**пульс** *и.* Ҡан тамырҙарының йөрәк тибеше менән ҡыуылған ҡан аша ғуғып тороуы. *Йышайған пульс. Пульсты ҡарау.*

**пуля** *и.* Мылтыҡ, винтовка, пулемет һәм пистолеттан атыла торған патронға беркетелгән бәләкәй ҡурғаш йәҙрә. *Винтовка пуляһы. Шартлай торған пуля.*

**пункт** *и.* **1.** Берәй төрлө әһәмиәте булған билдәле урын. *Күҙәтеү пункты. Иң бейек пункт.* **2.** Билдәле бер эш башҡарыусы учреждение йәки уның бүлеге. *Ветеринария пункты. Ҡабул итеү пункты. Медицина пункты.*

**путевка** *и.* Ҡайҙалыр ебәргәндә (эшкә, сәфәргә, уҡырға, ялға һ. б.) кешегә бирелә торған рәсми ҡағыҙ. *Шифаханаға путевка.*

**пәрҙә** *и.* **1.** Ниҙелер ҡаплап торған туҡыма; шаршау. *Ишек пәрҙәһе. Селтәр пәрҙә.* **2.** *күсм.* Ниҙелер ҡаплап, томалап торған нәмә. *Ҡараңғылыҡ пәрҙәһе. Төн пәрҙәһе.* **3.** *театр.* Сәхнә әҫәренең бер бүлеге. *Драманың икенсе пәрҙәһе.*

# Р

**радио** *и.* **1.** Тауышты алыҫ араға сымһыҙ тапшырыу һәм ҡабул итеү ысулы; шул ысулдағы элемтәне өйрәнгән фән һәм техника өлкәһе. *Радионы уйлап табыу.* **2.** Шул тулҡындар ярҙамында телмәрҙең, музыканың тапшырылышы һәм ҡорамалы. *Радио тыңлау. Радио аша яҙҙырыу.*

**радиоалғыс** *и.* Радиотапшырыуҙарҙы тапшыра һәм ҡабул итә торған аппарат. *Батареялы радиоалғыс. Лампалы радиоалғыс.*

**разведка** *и.* **1.** Тикшереп, ҡарап, ниҙеңдер барлығын, юҡлығын асыҡлау эше. *Геологик разведка. Разведка скважинаһы.* **2.** Дошман тураһында хәрби мәғлүмәт йыйыу эшен башҡарған ғәскәри төркөм. *Разведкаға барыу.* **3.** Башҡа дәүләттәрҙең иҡтисади, сәйәси хәле, хәрби ҡеүәте тураһында мәғлүмәт йыйыу менән шөғөлләнгән махсус ойошма. *Сит ил разведкаһы.*

**район** *и.* **1.** Географик, иҡтисади һ. б. билдәләре менән айырылып торған урын-ер. *Ауыл хужалығы районы. Эшселәр районы.* **2.** Рәсәйҙә: өлкә, край, союз һәм автономиялы республикаларҙың билдәле бер өлөшөн тәшкил иткән һәм ҡала эсендәге административ-территориаль берәмек. *Район газетаһы. Район үҙәге.* **3.** Эре ҡалалағы административ-территориаль берәмек. *Өфө ҡалаһының Киров районы.*

**ракета** *и.* **1.** Эсендәге ҡаты яғыулыҡтың яныуы арҡаһында һауаға атыла торған снаряд (фейерверк осороу һәм хәрби эштә сигнал биреү, ерҙе яҡтыртыу өсөн ҡулланыла). *Ҡыҙыл ракета. Ракета менән яҡтыртыу.* **2.** Яғыулыҡ янып, реактив көс барлыҡҡа килеү арҡаһында хәрәкәткә килә торған осоу аппараты. *Йыһан ракетаһы. Ракета ғәскәрҙәре.*

**рам** *и.* **1.** Эсенә һүрәт йәки башҡа нәмә ҡуйыу өсөн эшләнгән дүрткел, оҙонса һ. б. формалағы тирәс; ҡыҫан. *Көҙгө рамы. Тәҙрә рамы. Умарта рамы.* **2.** *махс.* Машина, механизм йәки ҡоролманың хәрәкәтһеҙ частарҙы бергә беркетеп, уларға терәк, нигеҙ булған өлөшө. *Автомашина рамы. Велосипед рамы.*

**раҫлау (раҫла-)** *ҡ.* Ғәмәлгә тап килгәнен күрһәтеү; дөрөҫ итеп билдәләү, дөрөҫләү. *Фекерҙе раҫлау. Һүҙҙе раҫлау.*

**ремонт** *и.* Боҙолған, һынған, иҫкергән һ. б. нәмәне йүнәтеү, төҙәтеү эше. *Капиталь ремонт. Ремонт яһау. Ремонт эштәре.*

**ремонтлау (ремонтла-)** *ҡ.* Ремонт үткәреү; төҙәтеү, йүнәтеү. *Трактор ремонтлау.*

**республика** *и.* Юғары хөкүмәт органдары билдәле ваҡытҡа һайлап ҡуйылған дәүләт идара формаһы һәм шундай идараһы булған ил. *Бойондороҡһоҙ республика. Демократик республика.*

**риза** *с.* Ниндәйҙер һүҙгә, тәҡдимгә, шартҡа ыңғай булған, ҡәнәғәт. *Риза* *булып йәшәү.*

**ризалашыу (ризалаш-)** *ҡ.* Риза булыу, килешеү, күнеү. *Барырға ризалашыу.*

**ризыҡ (ризығы)** *и.* **1.** Ислам диненсә, Алланың бәндәгә алдан, тыумаҫ борон уҡ билдәләп ҡуйған аҙығы. *Яҙған ризыҡ. Ризыҡ менән тыуыу.* **2.** Ашай торған ашамлыҡ; аҙыҡ. *Ризыҡтан яҙыу. Ризыҡ ҡабыу.*

**роль (ролгә)** *и.* Артист тарафынан сәхнәлә, кинола кәүҙәләндергән художестволы образ. *Комик роль. Ролгә инеү.*

**роман** *и.* Ҡатмарлы сюжетҡа ҡоролған ҙур күләмле сәсмә әҫәр. *Тарихи роман. Роман яҙыу.*

**рота** *и.* Батальон эсенә ингән ғәскәри бүлемек. *Беренсе рота. Рота командиры.*

**рөхсәт** *и.* **1.** Кемгәлер берәй нәмә эшләү өсөн бирелгән ризалыҡ. *Рөхсәт алыу. Рөхсәт биреү. Рөхсәт һорау.* **2.** Кемгәлер берәй нәмә эшләргә бирелгән хоҡуҡ; ирек, ихтыяр. *Рөхсәт итеү. Рөхсәт ҡуйыу.*

**руль (рулде)** *и.* Карап, самолет һәм төрлө машинаны бороп йөрөтә торған ҡулайлама. *Машина руле. Руль тәгәрмәсе.*

**рух** *и.* **1.** Дини ҡарашса, кеше һәм йәнлектәрҙе мәңге тере итә торған, матди булмаған үлемһеҙ башланғыс. *Изге рух. Ата-бабалар рухы.* **2.** Кешенең эске уй-тойғоһо; күңел, йән. *Кеше рухы. Рух төшөү.*

**ручка** *и.* Ҡара менән яҙа торған ҡәләм. Автомат ручка. Шариклы ручка.

**рәсем** *и.* Берәй нәмәнең ҡәләм, перо һ. б. менән һыҙып йәки буяу менән буяп үҙенә оҡшатып яһалған күсермәһе. *Төҫлө рәсем. Рәсем төшөрөү.*

**рәссам** *и.* Рәсем төшөрөү, һынлы сәнғәт оҫтаһы. *Билдәле рәссам.*

**рәт** *и.* **1.** Бер-бер артлы теҙелеп киткән нәмәләр йәки шундай уҡ тәртиптә баҫҡан кешеләр теҙеме. *Ағастар рәте. Рәт аралары. Рәтҡә баҫыу.* **2.** *күсм.* Билдәле бер тәртип, нимәнеңдер үҙ йәйы, үҙ ағышы. *Һүҙ рәте. Эш рәте белеү. Рәтенә төшөнөү.*

**рәтләү (рәтлә-)** *ҡ.* **1.** Билдәле бер тәртиптә урынлаштырыу, ипләп ҡуйыу. *Ҡағыҙҙарҙы рәтләү. Рәтләп ҡуйыу.* **2.** Насарҙы яҡшыртыу, һәйбәтләү, төҙәтеү, йүнәтеү, бар итеү. *Өйҙө рәтләү. Эште рәтләү.*

**рәхим** *и.* Аяу, ҡыҙғаныу хисе тыуҙырған мөнәсәбәт, мәрхәмәтлек, шәфҡәт. *Рәхим көтөү. Уның рәхименә ышаныу.* ♦ **Рәхим итегеҙ** әҙәп менән ниҙер тәҡдим иткәндә, нимәгәлер рөхсәт биргәндә, саҡырғанда әйтелә.

**рәхмәт** *и.* **1.** Аяу, ҡыҙғаныу хисе; мәрхәмәт, шәфҡәт, рәхим. *Рәхмәт күрһәтеү.* **2.** Яҡшылыҡ күрһәткәнгә булған ҡәнәғәтлек белдергән яуап тойғоһо. *Рәхмәт алыу. Рәхмәт белдереү.*

**рәхәт 1.** *и.* Йәшәү шарттарынан тыуған ҡәнәғәтлек тойғоһо. *Рәхәткә сығыу. Рәхәт табыу. Рәхәт күреү.* **2.** *с.* Хуш, ҡәнәғәт тойғоло, ләззәтле. *Рәхәт донъя. Рәхәт тормош.*

**рәхәтләнеү (рәхәтлән-)** *ҡ.* Рәхәтлек тойоу; кинәнеү, ләззәтләнеү. *Рәхәтләнеп ашау. Рәхәтләнеп йәшәү. Рәхәтләнеп йоҡлау.*

# С

**сабаҡ (сабағы)** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған күкһел һыртлы, аҡ ҡорһаҡлы, буҙ ҡойроҡло ваҡ йылға балығы. *Йомро сабаҡ. Сабаҡ көмбәҙе. Сабаҡ тотоу.*

**сабый** *и.* Йәш бала, имсәк бала. *Сабыйҙы ҡулға алыу. Сабый йоҡоһо. Сабый саҡ.*

**сабынлыҡ (сабынлығы)** *и.* Бесән саба торған ер. *Сабынлыҡта бесән сабыу. Сабынлыҡ ерҙәре.*

**сабыр 1.** *и.* Ҡыйынлыҡҡа түҙеү, сыҙау һәләтлеге, сыҙамлыҡ, түҙемлек. *Сабыр етмәү. Сабыр итеү.* **2.** *с.* Ҡыйын булған төрлө хәлгә түҙеүсән, ярһып, ҡыҙып бармаусан; тыныс, түҙемле. *Сабыр кеше. Сабыр тәбиғәтле. Сабыр булыу.*

**сабырлыҡ (сабырлығы)** *и.* Ҡыйынлыҡҡа түҙеү, сыҙау һәләтлеге; түҙемлек. *Хоҙай сабырлыҡ бирһен. Сабырлыҡ күрһәтеү.*

**сабыу**[1] *и.* Ҡаптырмалы өҫ кейеменең асылып ябылмалы итәге; салғыйы. *Бишмәт сабыуы. Сабыу асылып китеү.*

**сабыу**[2] **(сап-)** *ҡ.* **1.** Киҙәнеп ныҡ итеп һуғыу (биткә, яңаҡҡа һ. б.). *Сикәһенә сабып ебәреү.* **2.** Мунсала миндек менән тәнде һуҡҡылау. *Аяҡтарҙы сабыу. Билде сабыу.* ♦ **Ҡул сабыу** ҡотлап йәки шатланып усты уҫҡа һуғыу.

**сабыу**[3] **(сап-)** *ҡ.* **1.** Үткер ҡорал менән киҙәнеп ҡырҡыу. *Ағасҡа сабыу. Боҙ сабыу. Сабып өҙөү.* **2.** Үҫеп ултырған ашлыҡты, бесәнде йыйып алыр өсөн ҡырҡыу. *Ашлыҡ сабыу. Салғы менән сабыу.*

**сабышыу (сабыш-)** *ҡ.* Шәп сабыуҙа ярышыу. *Сабышып йөрөү. Бәйгелә сабышыу.*

**саған** *и.* Киртләс киң япраҡлы ҡаты ағас. *Ҡара саған. Тау сағаны. Саған япраҡтары. Саған саңғы.*

**сағылдырыу (сағылдыр-)** *и.* **1.** Яҡтылыҡ нурын йәки тауышты кире ҡайтарыу. *Көслө яҡтылыҡ күҙҙе сағылдыра.* **2.** Ниҙеңдер шәүләһен күрһәтеү (шыма, йылтыр яҫылыҡ өҫтөнә ҡарата).

**сағылыу (сағыл-)** *ҡ.* **1.** Һуғылып, кире ҡағылыу (яҡтылыҡ нурына йәки тауышҡа ҡарата). *Ҡояш нуры сағыла. Тауыш сағыла.* **2.** Көслө яҡтылыҡ төшөп, ҡарай алмай тороу. *Күҙ сағыла. Һыуҙа шәүлә сағыла.*

**сағыу**[1] **(саҡ-)** *ҡ.* **1.** Теш йәки ҡаяу батырып, ағыу ебәреү (йылан, ҡортҡа һ. б. ҡарата). *Йылан саҡҡан. Ҡорт саҡты.* **2.** Ҡағылған саҡта ағыулап әсеттереү, әрнетеү. *Кесерткән саға.*

**сағыу**[2] *с.* **1.** Күҙ сағылдырғыс, салт. *Сағыу ҡояш. Сағыу нур.* **2.** Яңғырауыҡлы, көслө, асыҡ. *Сағыу тауыш.*

**сағыштырыу (сағыштыр-)** *ҡ.* Оҡшашлығын һәм айырмаһын билдәләү өсөн нәмәләрҙе йәки күренештәрҙе тиңләштереү. *Сағыштырып ҡарау. Сағыштырып тикшереү. Ике телде сағыштырыу.*

**сайҡау**[1] **(сайҡа-)** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер көс тәьҫир итеп, төрлө яҡҡа һелкендереү, ҡуҙғатыу; бәүелтеү, сайҡалдырыу. *Ел ағас ботаҡтарын сайҡай. Тулҡын кәмәне сайҡай.* **2.** Ян-яҡҡа һелтәү; болғау. *Баш сайҡау. Ҡылыс сайҡау.*

**сайҡау**[2] **(сайҡа-)** *ҡ.* Һыу менән йыуҙырыу. *Ауыҙ сайҡау. Кер сайҡау. Ҡул сайҡау.*

**саҡ**[1] **(сағы)** *и.* Ниндәйҙер эш-хәл барған ваҡыт; мәл. *Бала саҡ. Йәш саҡ. Таң атҡан саҡ.* ♦ **Бер саҡ** билдәле бер мәл, бер ваҡыт. **Ҡай саҡ** ҡайһы бер ваҡытта; ҡай ваҡыт. **Һәр саҡ** гел генә; һәр ваҡыт.

**саҡ**[2] *р.* **1.** Әле генә, яңы ғына. *Эште саҡ башлау.* **2.** Көскә генә, көскә-көскә. *Саҡ килеп етеү. Саҡ өлгөрөү. Саҡ яҙып бөтөү. Саҡ онотмау.*

**саҡлы** *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге исемдәр, алмаштар менән килеп, ара, ваҡыт сиген белдерә; тиклем, хәтлем, ҡәҙәр. *Ҡалаға саҡлы. Ҡышҡа саҡлы. Таңға саҡлы.* **2.** Төп килештәге исемдәр, төп һәм эйәлек килештәге алмаштар менән килеп, сағыштырма күләм, дәрәжәне белдерә; хәтлем, ҡәҙәр. *Буйы саҡлы. Йоҙроҡ саҡлы.* ♦ **Был (шул) саҡлы** бик ныҡ, үтә.

**саҡрым** *и.* 1060 метрға тиң булған элекке алыҫлыҡ үлсәү берәмеге. *Биш саҡрым ара.*

**саҡыртыу (саҡырт-)** *ҡ.* Берәй эш йәки маҡсат менән ҡайҙалыр килергә ҡушыу, саҡырып килтереү. *Йыйылышҡа саҡыртыу. Кешеләрҙе саҡыртыу. Штабҡа саҡыртыу.*

**саҡырыу (саҡыр-)** *ҡ.* **1.** Тауыш йәки ым менән үҙ янына килергә өндәү. *Ҡысҡырып саҡырыу. Саҡырып алыу. Саҡырып сығарыу. Уйнарға саҡырыу.* **2.** Ниндәйҙер эш йәки маҡсатҡа ирешеү өсөн килергә ҡушыу. *Йыйылышҡа саҡырыу. Ҡунаҡҡа саҡырыу. Көрәшкә саҡырыу. Саҡырыу билеты. Саҡырыу ҡағыҙы.*

**сал** *с.* **1.** Үҙ төҫө юғалып, аҡ төҫкә ингән, ағарған (сәс, йөнгә ҡарата); аҡ. *Сал сәс. Сал һаҡал.* **2.** *күсм.* Аҡһыл төҫтәге. *Сал болот. Сал ҡылған. Сал томан.* **3.** *и. мәғ.* Сәс, һаҡалға төшкән аҡ төҫ. *Сал инеү. Сал ҡуныу. Сал төшөү.*

**салат** *и.* **1.** Ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ҡараған баҡса үҫемлеге (япрағын сей көйө ашайҙар). *Салат үҫтереү. Салат япрағы.* **2.** Төрлө йәшелсәнән турап әҙерләнгән һалҡын ашамлыҡ. *Йәшелсә салаты. Кәбеҫтә салаты. Салат әҙерләү.*

**салбар** *и.* Балаҡлы өҫ кейеме. *Һырыған салбар. Салбар кейеү. Салбар ҡайышы.*

**салғы** *и.* **1.** Ҡул менән бесән, иген сабыу өсөн оҙон һапҡа һапланған эш ҡоралы. *Ҡул салғыһы. Салғы йөҙө. Салғы сүкеү. Салғы яныу.* **2.** Иген, бесән саба торған машиналағы тешле ҡорал. *Биш салғы таҡҡан трактор.*

**салғый** *и.* Ҡаптырмалы өҫкө кейемдең билдән түбән ике яҡ алғы өлөшө; сабыу. *Оҙон салғый. Бишмәт салғыйы. Салғыйҙы ҡыҫтырыу.*

**салҡан** *р.* Арҡа менән аҫҡа, йөҙ менән өҫкә ҡарап. *Салҡан ятыу. Салҡан төшөү.*

**салыныу (салын-)** *ҡ.* Саҡ ҡына күрә биреп йәки ишетә биреп ҡуйыу. *Күҙгә салыныу. Ҡолаҡҡа моң салынды.*

**салыу[1] (сал-)** *ҡ.* Бысаҡ менән боғаҙҙан ҡырҡыу. *Мал салыу.*

**салыу[2] (сал-)** *ҡ.* **1.** Осон аша һалып, әләктереп алыу (бәйләгәндә). *Салып бәйләү. Салып сигеү.* **2.** Өҫтө-өҫтөнә ишеп һалыу (аяҡ-ҡулды). *Аяҡ салып ултырыу.*

**сама** *и.* **1.** Күләм, дәүмәл, ара һәм ваҡыттың яҡынса бер кимәле. *Бер ай самаһы. Бер саҡрым самаһы. Йәштәре бер сама. Ярты сәғәт самаһы.* **2.** Эш-хәл, тәртип-ҡылыҡтың мөмкинлек билдәләнгән бер үлсәме. *Сама белеү. Саманан сығыу. Самаһыҙ ҡыланыу.*

**самолет** *и.* Двигатель һәм ҡанат ярҙамында һауала хәрәкәт итә торған осоу аппараты; осҡос. *Самолетта осоу. Самолет моторы.*

**сана** *и.* Ҡарҙа шыуа торған ҡуш табанлы ҡышҡы транспорт сараһы. *Бәләкәй сана. Ҡашауай сана. Сана юлы.*

**сантиметр** *и.* **1.** Метрҙың йөҙҙән бер өлөшөнә тигеҙ булған оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. *Ун сантиметр.* **2.** Шул берәмеккә тиң һыҙыҡтар һыҙылған оҙонлоҡ үлсәй торған линейка, таҫма.

**саң** *и.* Ҡаты есемдәрҙең онтаҡ рәүешендәге бик ваҡ өлөшсәләре; туҙан. *Урам саңы. Саң бөртөгө. Саң баҫыу. Саң борҡоу.*

**саңғы** *и.* Ҡар өҫтөнән шыуа торған төрлө оҙонлоҡтағы кәкре башлы пар таҡта. *Яҫы саңғы. Һунарсы саңғыһы. Саңғы шыуыу.*

**сара** *и.* Нимәнелер башҡарыу, хәл итеү, үтәп сығыу өсөн мөмкин булған юл; ысул. *Сара күреү. Дауалау сараһы.*

**сарлаҡ (сарлағы)** *и.* Балыҡ тибеп туҡлана торған һыу ҡошо. *Аҡсарлаҡ. Ҡара сарлаҡ. Диңгеҙ сарлағы.*

**сатан** *с.* Аяғы зәғиф булған; аҡһаҡ. *Сатан аяҡлы. Сатан кеше. Сатан ҡалыу.*

**сатнау (сатна-)** *ҡ.* **1.** Һыҙылып ҡына ярылыу. *Быяла сатнаған. Йомортҡа сатнаған.* **2.** Артыҡ кибеп йәки туңып ярылыу (ергә һ. б. ҡарата). *Ирендәр сатнау. Ер сатнап ярылған.* **3.** Бик ныҡ шартлау, сарт-сорт итеү, сарт-сорт килеү. *Сатнап йәшен атыла.* **4.** *күсм.* Үҙәккә үтеп ауыртыу. *Баш сатнай. Сатнап ауыртыу. Сатнап һыҙлау.*

**сатыр** *и.* Һыу үткәрмәй торған беше туҡыманан ҡаҙыҡтарға тарттырып киреп, елдән, ямғырҙан ышыҡланыу өсөн эшләнгән еңел ҡоролма. *Сатыр ҡороу. Сатырҙа ышыҡланып тороу.*

**сауҙа** *и.* Һатыу-алыу шөғөлө; алыш-биреш. *Дәүләт сауҙаһы. Тышҡы сауҙа. Сауҙа бәйләнеше. Сауҙа әйләнеше.*

**сауҙагәр** *и.* Хосуси сауҙа менән шөғөлләнгән кеше. *Эре сауҙагәр.*

**саф**[1] *с.* Башҡа нәмә ҡушылмаған; ҡушылмаған, таҙа. *Саф алтын. Саф көмөш. Саф һауа.*

**саф**[2] *и.* **1.** Рәткә теҙелгән кешеләр төркөмө. *Һалдаттар сафы. Сафҡа баҫыу. Сафҡа теҙелеү. Сафҡа тороу.* **2.** Бер эш-маҡсат менән берләшкән төркөм. *Алдынғылар сафына баҫыу.*

**светофор** *и.* Юл хәрәкәтен, тәртибен һаҡлау өсөн ҡуйылған төрлө төҫтәге быялалы сигнал фонары. *Тимер юл светофоры. Светофорға ҡарап урам аша сығыу.*

**себен** *и.* Ике йәйенке ҡанатлы, йомро яланғас ҡорһаҡлы, йоғошло ауырыуҙар таратыусы бөжәк. *Көҙгө себен. Себен өйөрө.*

**себеш** *и.* Тауыҡтың йәки башҡа берәй ҡоштоң бәләкәй балаһы. *Күҙгә себеш. Тауыҡ себеше. Себеш сығарыу.*

**сей** *с.* **1.** Бешерелмәгән, бешереп еткерелмәгән. *Сей ит. Сей картуф. Сей икмәк.* **2.** Өлгөрөп етмәгән, бешеп өлгөрмәгән. *Сей бойҙай.*

**сейә** *и.* Ваҡ ҡына оҙонса шыма япраҡлы, ҡыҙыл емешле ағас йәки ҡыуаҡ һәм уларҙың емеше. *Баҡса сейәһе. Ялан сейәһе. Сейә ҡайнатмаһы.*

**секунд** *и.* Минуттың алтмыштан бер өлөшөнә тигеҙ булған ваҡыт берәмеге. *Бер секунд.*

**сел** *и.* Ҡор һымаҡ һорғолт сыбар төҫлө, башы супайлы урман ҡошо. *Инә сел. Сел һыҙғырыуы. Селгә һунар итеү.*

**селбәрә** *и.* **1.** Иң ваҡ йылға балығы. *Селбәрә сиртеүе. Селбәрә тотоу.* **2.** Ыуылдырыҡтан яңы сыҡҡан балыҡ; йотҡолоҡ. *Селбәрә көтөүе.*

**селек (селеге)** *и.* Ваҡ япраҡлы, һары сәскәле, ҡуҙаҡ орлоҡло ваҡ ҡыуаҡ йәки ағас. *Тау селеге. Селек һепертке.*

**селтәр** *и.* **1.** Биҙәк һалып туҡылған йәки бәйләнгән үтә күренмәле еңел туҡыма. *Тәҙрә селтәре. Селтәр элеү. Селтәр яға.* **2.** Металл киҫәктәренән биҙәкләп йәки арҡос-торҡос яһалған рәшәткә. *Күпер селтәре.*

**селәүсен** *и.* Йомро, оҙон, умыртҡаһыҙ ҡорт; селәү. *Ямғыр селәүсене. Тиреҫ селәүсене.*

**семтеү (семте-)** *ҡ.* **1.** Тәнде бармаҡ остары менән ныҡ итеп ҡыҫып ауырттырыу. *Семтеп алыу.* **2.** Бөртөклө әйберҙәрҙе бармаҡ остары менән генә ҡымтып тотоу. *Сәйҙе семтеп кенә һалыу.* **3.** Ныҡ һыуыҡтан ауыртып әсетеү. *Һыуыҡ битте семтей.*

**семәр** *и.* Шыма ағас, тимер йәки башҡа йөҙләккә соҡоп, уйып төшөргән биҙәк. *Семәр менән биҙәү.*

**сентябрь (сентябрҙә)** *и.* Ғәмәлдәге календарь буйынса йылдың туғыҙынсы айы. *Сентябрь айы. Сентябрҙә уҡыуҙар башлана.*

**сепрәк (сепрәге)** *и.* Иҫкереп, ҡулланылмай башлаған туҡыма киҫәге. *Ҡул сепрәге. Сепрәк менән һөртөү. Сепрәк киҫәге. Сепрәк балаҫ.*

**сер** *и.* **1.** Башҡалар белергә тейеш булмаған йәшерен мәғлүмәт һ. б. *Хәрби сер. Сер сисеү. Сер итеп һаҡлау.* **2.** Әлегә билдәле булмаған, беленмәгән, асылмаған нәмә. *Йыһан сере. Тәбиғәт сере.*

**серек (сереге)** **1.** *и.* Һыу, һауа тәьҫирендә булып, боҙолған, тарҡалған нәмә. *Алманың сереге. Сереккә әйләнеү.* **2.** *с. мәғ.* Һыу, һауа тәьҫиренән тәүге сифатын, ныҡлығын юғалтып боҙолған, тарҡалған. *Серек алма. Серек өй.*

**сереү (сере-)** *к.* Һыу, һауа тәьҫиренән боҙолоу, тарҡалыу. *Картуф баҙҙа серегән. Өй серегән. Сереү процесы.*

**серәкәй** *и.* Ике тар ҡанатлы, оҙон аяҡлы, томшоғон батырып ҡан һура торған бәләкәй генә бөжәк. *Һыу серәкәйе. Серәкәй талауы.*

**сеүәтә** *и.* Ҙур булмаған сөм һауыт. *Ағас сеүәтә. Тимер сеүәтә. Бер сеүәтә ҡатыҡ.*

**сибәр** *с.* Йөҙө һөйкөмлө; матур, һылыу (кешегә ҡарата). *Сибәр ҡыҙ.*

**сигеү** *и.* Кизе менән тегеп төшөрөлгән биҙәк. *Сигеү ысулдары.*

**сиҙәм** *и.* Бер ҙә һөрөлмәгән үләнле ер. *Сиҙәм үҙләштереү. Сиҙәмде һөрөү. Сиҙәм ер.*

**сик (сиге)** *и.* **1.** Берәй территорияның сите һаналған шартлы һыҙыҡ; айырыу һыҙығы. *Башҡортостан сиге. Дәүләт сиге.* **2.** Нимәнендер сите, барып бөткән өлөшө. *Баҫыу сиге. Ер сиге.*

**сикләнеү (сиклән-)** *к.* Бер сик менән айырылыу, сиктәш булыу. *Башҡортостан Ырымбур өлкәһе менән сикләнә.*

**сикһеҙ** *с.* **1.** Сиге, осо-ҡыры булмаған, күренмәгән. *Сикһеҙ дала. Сикһеҙ йыһан.* **2.** Сиккә, самаға һыймаған, саманан артыҡ. *Сикһеҙ байлыҡ. Сикһеҙ көс. Сикһеҙ мөхәббәт.*

**сикә** *и.* Баш һөйәгенең ҡолаҡтан маңлай һөйәгенә тиклем булған ике яҡ эргәһе. *Сикә ауыртыу. Сикә һөйәге.*

**синоним** *и.* Икенсе бер һүҙгә мәғәнә яғынан тап килгән йәки яҡын булған һүҙ. *Синоним һүҙҙәр.*

**синыф** *и.* Мәктәп курсындағы бер баҫҡыс. *Беренсе синыф. Бишенсе синыф.*

**сиңерткә** *и.* Оҙон артҡы аяғы менән һикереп йөрөй торған бөжәк.

**сир** *и.* **1.** Берәй ағза боҙолоп йәки шешеп, оҙаҡҡа һуҙылған ауырыу. *Ашҡаҙан сире. Йөрәк сире. Үпкә сире.* **2.** Емеш-йәшелсәнең, ағастың боҙолған, серегән ере. *Алма сире. Япраҡ сире.*

**сират** *и.* Ниҙер йомошлау өсөн булған эҙмә-эҙ тәртип. *Сират етеү. Сиратҡа баҫыу.*

**сирек (сиреге)** *и.* **1.** Ниндәйҙер күләмден дүрттән бер өлөшө. *Сирек метр. Сирек көн.* **2.** Мәктәптә уҡыу йылының дүрттән бер өлөшө. *Беренсе сирек. Сирек тамамланыу.*

**сирень (сиренде)** *и.* Шыма ҡуйы йәшел япраҡлы, күпереп торған аҡ йәки күк төҫтәге еҫле сәскәле декоратив ҡыуаҡ. *Ябай сирень. Сирень үҫтереү. Сирень сәскәһе.*

**сирләү (сирлә-)** *ҡ.* Ниндәйҙер сирҙән ауырыу. *Сирләп алыу. Сирләп тороу.*

**сиртеү (сирт-)** *ҡ.* **1.** Һуҡ йәки урта бармаҡты бөкләп, баш бармаҡ менән ҡыҫып, ҡапыл ысҡындырып, тырнаҡ менән һуғыу. *Маңлайға сиртеү.* **2.** Музыка ҡоралын уйнап, ҡылын тартыу. *Думбыра сиртеү. Мандолина сиртеү.* **3.** Ҡарпып ҡармаҡҡа ҡабыу (балыҡҡа ҡарата). *Балыҡ сиртә.* **4.** Ҡабығын ярып ашау. *Көнбағыш сиртеү. Сәтләүек сиртеү.*

**сисеү (сис-)** *ҡ.* **1.** Бәйләнгән ептең, бауҙың остарын ысҡындырыу. *Төйөндө сисеү. Сисеп ебәреү.* **2.** Кейгән кейемде өҫтән һалыу. *Итекте сисеү. Күлдәкте сисеү.* **3.** *күсм.* Эске асылын, мәғәнәһен билдәләп асыҡлау, хәл итеү. *Мәсьәлә сисеү.*

**система** *и.* **1.** Үҙ-ара бәйләнгән өлөштәрҙең берҙәмлеген тәшкил иткән ҡоролош, структура. *Ҡояш системаһы. Телдең грамматик системаһы. Мәғариф системаһы.* **2.** Эштәге, тормоштағы берәй нәмәнең ҡоролоу, ойошторолоу рәүеше, ысулы. *Дәүләт системаһы. Һайлау системаһы.*

**сит**[1] *и.* **1.** Нимәнеңдер барып еткән ере, сиге. *Ауыл ситe. Урман ситe.* **2.** Торған ерҙән бер аҙ ҡырҙа булған яҡын урын. *Ситтә тороу. Юлдан ситтә. Ситкә ҡарау.* **3.** Тыуған ерҙән, төйәктән алыҫ урын. *Ситтә йөрөү. Ситтә йәшәү.*

**сит**[2] *с.* **1.** Тыуған яҡ мөнәсәбәттәре менән бәйләнмәгән; ят. *Сит кеше. Сит халыҡ.* **2.** Тыуған йәки йәшәгән ере булып һаналмаған. *Сит ерҙәр. Сит ил.*

**ситлек (ситлеге)** *и.* Ҡош, йәнлек бикләү өсөн арҡыры-буй тимер тотоп яһалған оя йәки ҡоролма. *Ситлеккә ябыу. Ситлектә тотоу. Ситлектәге ҡош.*

**ситса** *и.* Бер төҫтәге йәки биҙәкле еңел кизе-мамыҡ туҡыма. *Биҙәкле ситса. Ситса күлдәк.*

**ситән** *и.* Талдан, сыбыҡтан үреп эшләнгән кәртә. *Бейек ситән. Ситән буйы. Ситән үреү. Ситән аласыҡ.*

**сифат**[1] *и.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер асылын билдәләгән үҙенсәлек. *Матур сифаттар. Ыңғай сифат. Кешелек сифаты.* **2.** Нәмәнең яҡшылыҡ, тотоноуға яраҡлыҡ дәрәжәһе. *Аҙыҡтың сифаты. Тауарҙың сифаты. Эштең сифаты.*

**сифат**[2] *и. грам.* Нәмәнең ниндәй ҙә булһа бер билдәһен белдергән һүҙ һәм уларҙы үҙ эсенә алған һүҙ төркөмө. *Төп сифат. Шартлы сифат.*

**слива** *и.* Емеш ағасы һәм шул ағастың ҡаты эре төшлө емеше. *Слива йыйыу. Слива ҡайнатмаһы.*

**соҡор** *и.* **1.** Ер өҫтөндә барлыҡҡа килгән уйынҡы урын. *Тәрән соҡор. Соҡорҙо сығыу.* **2.** Тәндең эскә батыңҡырап торған ере. *Бит соҡоро. Елкә соҡоро.* ♦ **Елкәһе соҡор** үтә ялҡау кешегә ҡарата әйтелә.

**соҡоу (соҡо-)** *ҡ.* **1.** Көрәк йәки башҡа ҡорал менән ерҙе ҡаҙыу. *Ер соҡоу. Окоп соҡоу.* **2.** Нәҙек осло йәки үткер нәмә менән ҡаҙып, тартып сығарыу. *Теш соҡоу. Яраны соҡоу.* **3.** Үткер ҡорал менән уйып, эсен соҡорлап, нимәлер яһау, эшләү. *Ялғаш соҡоу. Ташҡа соҡоп яҙыу.*

**солан** *и.* Өй ишеге алдына яһалған йылытылмай торған бүләкәй бүлмә. *Солан ишеге. Соланға сығыу.*

**сорт** *и.* **1.** Берәй тауарҙың сифаты, хаҡы буйынса билдәләнгән разряды, категорияһы. *Беренсе сортлы сәй. Юғары сортлы он.* **2.** Сәсеп үҫтерелгән үҫемлектең хужалыҡ яғынан әһәмиәт тотҡан төрө. *Мул уңышлы сорт. Игенде сорттарға айырыу.*

**сос** *с.* **1.** Тиҙ төшөнөп, етеҙ эшләүсән; булдыҡлы, уяу. *Сос егет. Эшкә сос.* **2.** Тиҙ генә һиҙеп алыусан; һиҙгер. *Сос ҡолаҡ.*

**состав** *и.* Ҡатмарлы бер бөтөндө барлыҡҡа килтергән нәмәләр, өлөштәр йыйылмаһы. *Телдең һүҙлек составы. Тупраҡтың составы. Һыуҙың составы.*

**сөгөлдөр** *и.* Тамыры ашамлыҡ һәм мал аҙығы итеп, айырым бер сорты шәкәр етештереүҙә ҡулланылған яҫы эре япраҡлы йәшелсә һәм шул үҫемлектең ашауға яраҡлы тамыры. *Сөгөлдөр йыйыу. Сөгөлдөр һуты. Сөгөлдөр яланы.*

**сөй** *и.* Тишеп ҡағып, нимәнелер ҡуша беркетә торған ағас йәки тимер. *Ағас сөй. Сөй ҡағыу.*

**сөнки** *терк.* Эйәртеүсе ҡушма һөйләмдә баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһындағы сәбәп мөнәсәбәтен белдерә. *Иртән урамға сыҡманым, сөнки һыуыҡ булды.*

**сөскөрөү (сөскөр-)** *ҡ.* Ауыҙ-морондан ирекһеҙ рәүештә лайла сығарып, тауыш менән ҡапыл ныҡ итеп тын бөркөү. *Оҙаҡ сөскөрөү. Сөскөрөп ебәреү.*

**сөсө** *с.* **1.** Тоҙо сыҡмаған йәки әсе булмаған. *Сөсө һыған.* **2.** Әсетке һалмай бешерелгән. *Сөсө икмәк. Сөсө ҡоймаҡ.* **3.** Ныҡ әсемәгән, ҡырҡыуланмаған. *Сөсө ҡатыҡ. Сөсө ҡымыҙ.*

**спектакль (спектаклдә)** *и.* Театр тамашаһы. *Балет спектакле. Телевизион спектакль ҡарау. Спектакль ҡуйыу.*

**спорт** *и.* Тәнде нығытыу, сыныҡтырыу маҡсатында үткәрелгән физик күнекмәләр (гимнастика, көрәш, туризм һ. б.) *Саңғы спорты. Спорт мастеры. Спорт костюмы.*

**стадион** *и.* Спорт буйынса күнегеүҙәр һәм уйындар үткәреү өсөн футбол майҙаны, башҡа майҙансыҡтары, йүгереү юлдары булған, тамашасылар өсөн трибуна менән уратып алынған ҡоролма. *Ябыҡ стадион. Мәктәп стадионы.*

**станция** *и.* **1.** Билдәле маршрут менән йөрөгән поездар һәм башҡа төр транспорт туҡтай торған урын. *Автобус станцияһы. Тимер юл станцияһы.* **2.** Билдәле бер территорияны берәй йәһәттән хеҙмәтләндергән йәки тикшереүнеү эше алып барған махсус учреждение. *Метеорологик станция. Сейсмик станция.*

**старт** *и.* **1.** Ярыштарҙың башланған мәле. *Саңғысылар старты. Стартҡа әҙерләнеү.* **2.** Берәй араны үтеү буйынса ярыш башланған урын. *Стартҡа баҫыу. Старт биреү.*

**стена** *и.* **1.** Йорт, баҙ, соҡор кеүек нәмәләрҙең вертикаль ҡабырғаһы. *Ҡалын стена. Өй стенаһы. Стена буйы.* **2.** Таштан, кирбестән һ. б. эшләнгән бейек ҡойма. *Кремль стенаһы. Ҡәлғә стенаһы.*

**суд** *и.* **1.** Граждандар, учреждениелар араһындағы төрлө низағ һәм енәйәт эшен ҡараған дәүләт органы. *Халыҡ суды. Судҡа биреү.* **2.** Шул органдың эште тикшереүе. *Суд булыу. Судта ҡарау. Суд ҡарары.*

**судья** *и.* **1.** Суд эше буйынса хөкөм сығарған, судта эшләгән вазифалы кеше. *Халыҡ судьяһы. Судьялар коллегияһы.* **2.** *спорт.* Уйын ҡағиҙәләренең һаҡланышын күҙәткән һәм килеп сыҡҡан бәхәстәрҙе хәл иткән кеше. *Футбол матчы судьяһы. Судья һыбыҙғыһы.*

**суйын** *и.* **1.** Тимер иретмәһе. *Суйын иретеү. Суйын күпер.* **2.** Шул иретмәнән ҡойолған сүлмәк. *Суйында аш бешереү. Суйын сүлмәк.*

**суҡмар** *и.* Йомро башлы күҫәк. *Бүре суҡмары. Суҡмар менән һуғыу.* ♦ **Һуғыш суҡмары** һуғышырға яратыусан кеше һ. б.

**суҡыу (суҡы-)** *ҡ.* Суҡыш менән эләктереп алыу йәки тартыу. *Ем суҡыу. Ҡаҙ суҡый.*

**суҡыш** *и.* Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең ослайып алға сыҡҡан ҡаты мороно. *Өйрәк суҡышы. Суҡышын шаҡылдатыу.*

**сулпы** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың уртаға ҡаш ҡуйып, өс буй тәңкә тояҡ төшөрөп яһаған биҙәүесе (сәсүрмескә, ҡашмауға тағыла). *Көйәнтәле сулпы. Ҡуш сулпы.*

**сумаҙан** *и.* Әйбер һалып юлға йөрөтөү өсөн эшләнгән ҡапҡаслы, тотҡалы, ҙур тартма рәүешендәге ҡулайлама. *Күн сумаҙан. Сумаҙанды бикләп ҡуйыу. Сумаҙан йоҙағы.*

**сумка** *и.* Әйбер һалып йөрөтөү өсөн күн һ. б. материалдан тегелгән тоҡсай. *Ҡул сумкаһы. Юл сумкаһы.*

**сумыу (сум-)** *ҡ.* **1.** Һыуға йәки бүтән шыйыҡ нәмәгә төшөп күмелеү. *Һыуға сумыу. Батҡаҡҡа сумыу. Сумып йөҙөү.* **2.** Берәй йомшаҡ нәмә эсенә инеп күмелеү. *Ҡарға сумыу. Креслоға сумып ултырыу. Мендәргә сумыу.* **3.** *күсм.* Нимәгәлер мулығыу, күпләп эйә булыу. *Аҡсаға сумыу. Байлыҡҡа сумыу.* **4.** Ниндәйҙер тойғо биләп алыу. *Уйға сумыу. Хыялға сумыу.*

**суртан** *и.* Ялпаҡ башлы, оҙонса кәүҙәле йыртҡыс йылға балығы. *Ала суртан. Ҡара суртан.*

**сусҡа** *и.* Ҡыҫҡа аяҡлы, йомшаҡ томшоҡло, шырт йөнлө, айыры тояҡлы имеҙеүсе хайуан. *Ҡыр сусҡаһы. Ата сусҡа. Инә сусҡа. Сусҡа аҫрау. Сусҡа майы.*

**сүкеү (сүке-)** *ҡ.* **1.** Сүкеш менән һуғып, салғының йөҙөн йоҡартыу. *Салғы сүкеү.* **2.** Сүкеш менән һуғып металдан йәки башҡа ҡаты нәмәнән нимәлер яһау; соҡоп ырыу. *Сүкеп биҙәк төшөрөү. Көмөшкә һыр сүкеү. Сүкеп йәбештереү.*

**сүкеш** *и.* Ҡағыу, сүкеү, йәнсеү һ. б. өсөн ҡулланылған ағас йәки тимер башлы, төҙ һаплы эш ҡоралы. *Ағас сүкеш. Тимер сүкеш. Геолог сүкеше. Сүкеш менән ҡағыу.*

**сүкәйеү (сүкәй-)** *ҡ.* Аяҡ быуындарын бөгөп, осаны ергә тейҙермәй, аяҡтарға ултырыу. *Бала сүкәйҙе. Сүкәйеп ултырыу.*

**сүл** *и.* Бик ҡоролоҡло, үҫемлеккә бик ярлы, ҡомло йәки ташлы киң дала. *Ҡом сүле. Сүл үҫемлеге.*

**сүмес** *и.* Аш-һыу һоҫа торған тотҡалы һауыт. *Ағас сүмес. Тимер сүмес. Аш сүмесе.*

**сүп (сүбе)** *и.* **1.** Ҡулланыуҙан сыҡҡан, ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә. *Сүпте сепереү. Сүпте ташлау. Сүпте таҙартыу. Сүп өйөмө.* **2.** Ваҡ ҡына бер ҡый киҫәге, остоҡ. *Күҙгә сүп төшөү. Ҡулға сүп инеү.*

**сүпләү**[1] **(сүплә-)** *ҡ.* Сүп төшөрөп, ташлап, сүпле итеү. *Бүлмәне сүпләү. Сүпләп бөтөрөү.*

**сүпләү**[2] **(сүплә-)** *ҡ.* Берәм-берәм алыу, берәмләп йыйыу. *Башаҡ сүпләү. Еләк сүпләү. Картуф сүпләү.*

**сыбар** *с.* Бер төҫтәге ерлеккә икенсе төҫ төшкән, ваҡ-ваҡ таплы. *Алма сыбар. Күк сыбар. Сыбар күлдәк. Сыбар яулыҡ.*

– 1.0136.10

**сыбыҡ (сыбығы)** *и.* **1.** Ҡырҡып, һындырып алынған нәҙек ботаҡ. *Муйыл сыбығы.* **2.** Теләһә ниндәй һынған ағас ботағы, сытыр. *Сыбыҡ йыйыу. Сыбыҡ яғыу.*

**сыбыртҡы** *и.* Мал ҡыуыр өсөн нәҙегәйтеп йүкәнән, ҡайыштан һ. б. ишеп йәки үреп, һапҡа беркетелгән бау. *Ҡайыш сыбыртҡы. Оҙон сыбыртҡы. Сыбыртҡы ишеү. Сыбыртҡы һабы. Яҡшы атҡа сыбыртҡы кәрәкмәй.* (Әйтем.)

**сығарыу (сығар-)** *ҡ.* **1.** Йорт, бүлмә һ. б. нәмәнең эсенән ҡайҙалыр ебәреү, оҙатыу. *Бүлмәнән сығарыу. Өйҙән сығарыу. Тышҡа сығарыу.* **2.** Ҡайҙандыр айырып икенсе урынға ебәреү, йүнәлтеү. *Таҡтаға сығарыу. Уҡытыуҙан сығарыу. Эшкә сығарыу.* **3.** Нимәлер аша йүнәлтеү, хәрәкәт иттереү. *Йылға аша сығарыу. Урам аша сығарыу. Урманды сығарыу.* **4.** Нимәнеңдер үҙенән, эсенән алыу, тышҡа йүнәлтеү. *Ҡаяу сығарыу. Йәш сығарыу. Телде сығарыу. Тир сығарыу.* **5.** Ниндәйҙер эште бойомға, тормошҡа ашырыу, ғәмәлгә индереү. *Бойороҡ сығарыу. Китап сығарыу. Ҡарар сығарыу.* **6.** Нимәнелер ижад итеү, ижад емеше булараҡ барлыҡҡа килтереү. *Йыр сығарыу. Көй сығарыу. Әкиәт сығарыу.*

**сығыу (сыҡ-)** *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер эсенән ситкә йүнәлеү. *Баҡсанан сығыу. Өйҙән сығыу. Төтөн сыға.* **2.** Ниндәйҙер маҡсатта берәй урынға йүнәлеү, барыу, килеү. *Сәхнәгә сығыу. Эшкә сығыу. Яланға сығыу.* **3.** Ҡайҙандыр эстән, төптән тышҡа ағыу, йүнәлеү. *Ағып сығыу. Күҙ йәше сығыу. Ҡаны сыҡҡан. Тир сығыу.* **4.** Ниндәйҙер эш-бойомға, тормошҡа ашырылыу, ғәмәлгә инеү. *Бойороҡ сыҡҡан. Ҡарар сыҡҡан. Китап сыҡҡан.* **5.** Ниндәйҙер эш-хәлдең барлыҡҡа килеүе, булыуы, таралыуы. *Буран сыҡҡан. Даны сыҡты. Тауыш сығыу. Яу сыҡты.* **6.** Кешенең тәнендә, йөҙөндә нимәлер барлыҡҡа килеү, яһалыу. *Йөҙөнә ҡыҙыл тап сығыу. Күҙенә арпа сығыу. Шешек сығыу.* **7.** Нимәнеңдер сығышы, тәме, таты беленеү. *Аштың тоҙо сыҡмаған. Сәй ныҡ сыҡҡан.*

**сығыш** *и.* **1.** Тыуып үҫкән ергә, ҡайһылыр милләткә һ. б. ҡарата булған бәйләнеш. *Сығышы менән Дим буйынан. Сығышы буйынса крәҫтиән.* **2.** Кеше иғтибарына һөйләгән һүҙ йәки яҙылған хәбәр. *Уның сығышын тыңланыҡ. Газета аша сығыш яһау. Мәҡәлә менән сығыш яһау. Сығыш әҙерләү.* **3.** Сәхнәнән күрһәтелгән тамаша. *Бейеү ансамбленең сығышы.* **4.** Нимәгәлер ҡаршы сыҡҡан күмәк хәрәкәт. *Ҡоралы сығыш.* **5.** Орлоҡтоң шытымы. *Орлоҡтоң сығышы.*

**сыҙау (сыҙа-)** *ҡ.* **1.** Ауырлыҡҡа, ҡыйынлыҡҡа түҙеү. *Ауырлыҡҡа сыҙау. Ауыртыуға сыҙау. Сыҙап тороу.* **2.** Үҙенең сифатын, ныҡлығын һ. б. күпмелер һаҡлау, күпмелер ваҡытҡа еткермәү. *Имән ҡаҙыҡ оҙаҡҡа сыҙай.*

**сыйылдау (сыйылда-)** *ҡ.* Әсе тауыш менән ҡысҡырыу. *Сыйылдап ҡысҡырыу. Бесәй сыйылдауы. Ел сыйылдай.*

**сыйырсыҡ (сыйырсығы)** *и.* Ҡара төҫтәге ҙур булмаған һайрай торған ҡош. *Сыйырсыҡ килеү. Сыйырсыҡ һайрай. Сыйырсыҡ бала сығара. Сыйырсыҡ ояһы.*

**сыйыу (сый-)** *ҡ.* **1.** Осло нәмә менән нимәгәлер эҙ һалыу. *Ҡәләм менән ҡағыҙға сыйыу. Сыбыҡ менән сыйыу.* **2.** Осло нәмә менән эҙ ҡалдырып, йәрәхәтләү. *Ҡулды сыйып ебәреү.*

**сылбыр** *и.* Ваҡ дүңгәләктәрҙе бер-береһенә үткәреп яһалған металл бау. *Алтын сылбыр. Көмөш сылбыр. Сәғәт сылбыры.*

**сым** *и.* Электр үткәрә торған тимерсыбыҡ. *Телефон сымы. Электр сымы. Сым һуҙыу.*

**сынаяҡ (сынаяғы)** *и.* Сәй эсеү өсөн сөм итеп эшләнгән фарфор йәки фаянс һауыт. *Бер пар сынаяҡ. Сынаяҡ менән сәй эсеү. Сынаяҡ аҫты.*

**сынйыр** *и.* Дүңгәләктәрҙе бер-береһенә үткәреп, теҙеп яһалған металл бау. *Тимер сынйыр. Сынйырҙағы эт. Сынйырға бәйләү. Сынйырҙы ысҡындырыу.*

**сынығыу (сыныҡ-)** *ҡ.* **1.** Юғары температурала ҡыҙҙырғандан һуң ҡапыл һыуытҡанда ҡатыға, ныҡҡа әйләнеү (металға һ. б. ҡарата). *Ҡорос сыныҡҡан.* **2.** Төрлө эш, күнегеүҙәр менән шөғөлләнеп, физик яҡтан нығыныу. *Эшләп сынығыу. Үҫә килә сынығыу. Сынығып китеү.*

**сыныҡтырыу (сыныҡтыр-)** *ҡ.* **1.** Юғары температурала ҡыҙҙырғандан һуң ҡапыл һыуытып, ҡатыға, ныҡҡа әйләндереү. *Ҡоросто сыныҡтырыу.* **2.** Эш, физик күнекмәләр менән шөғөлләнеп, тәнде физик яҡтан нығытыу, көслө итеү. *Баланы сыныҡтырыу.*

**сыңлау (сыңла-)** *ҡ.* **1.** Сың (сың-сың) итеү, сың-сың килеү. *Сыңлап китеү. Сыңлап тороу.* **2.** Яңғырап, сағыу булып ишетелеү (кешенең, музыка ҡоралдарының тауышына ҡарата). *Тауышы сыңлап тора. Ҡурай сыңлауы.*

**сыр[1]** *и.* Һөттән эшләнгән ҡаты ашамлыҡ. *Голланд сыры. Ыҫланған сыр. Сыр заводы.*

**сыр[2]: (сыр ялангас)** *с.* **1.** Кейемһеҙ, шыпа ялангас. *Сыр ялангас малай.* **2.** *күсм.* Кейем-һалымы булмаған. *Сыр ялангас ҡалыу.*

**сыра** *и.* **1.** Ут тоҡандырыу өсөн йоҡа итеп телгеләнгән ҡоро ағас. *Сыра телеү. Сыра яндырыу.* **2.** Өйҙө яҡтыртыу өсөн яндырылған ҡоро йоҡа ағас. *Сыра яҡтыһында уҡыу. Сыра яҡтыртыу.*

**сырай** *и.* Кешенең бите, йөҙө. *Асыҡ сырай. Көләс сырай. Ҡараңғы сырай.*

**сырмалсыҡ (сырмалсығы)** *и.* Сырмалып үҫкән оҙон һабаҡлы үлән. *Баҡсаны сырмалсыҡ баҫҡан.*

**сырмау (сырма-)** *ҡ.* **1.** Аралашып, уратып үҫеү. *Дегәнәк сырмаған.* **2.** Еп, бау һ. б. менән ҡат-ҡат бәйләү. *Бау менән сырмап бәйләү. Сырмап ташлау.*

**сыр-сыу** *и. йыйн.* Күмәк шау-шыу, сыр-сыр иткән тауыш. *Сыр-сыу килеү. Ҡоштар сыр-сыуы. Сыр-сыу тауыш.*

**сысҡан** *и.* Оҙон моронло, ҡыҫҡа шыма йөнлө бәләкәй генә кимереүсе йәнлек. *Баҫыу сысҡаны. Өй сысҡаны. Урман сысҡаны.*

**сытыр** *и.* Ваҡ ҡыу ағас; ағас ботаҡтары. *Сытыр өйөмө. Сытыр йыйыу.*

**сыуаҡ (сыуағы)** *и.* **1.** Асыҡ ҡояш яҡтыһы. *Көҙ сыуағы. Көн сыуағы.* **2.** *с. мәғ.* Асыҡ ҡояшлы, аяҙ. *Сыуаҡ көн.* ♦ **Әбейҙәр сыуағы** көҙ башындағы аяҙ йылы көндәр.

**сәбәп (сәбәбе)** *и.* Ниндәйҙер эш-хәлдең килеп сығыуына нигеҙ булған хәл, күренеш. *Ауырыуҙың сәбәбе. Сәбәбе күп. Сәбәп нимәлә?*

**сәғәт**[1] *и.* **1.** Тәүлектең егерме дүрттән бер өлөшөнә (алтмыш минутҡа) тигеҙ булған ваҡыт берәмеге. *Бер сәғәт. Сәғәт ярым ваҡыт. Сәғәт нисә?* **2.** Тәүлектең төн уртаһынан алып иҫәпләнгән ваҡыт берәмегенең һаны. *Төнгө сәғәт ике. Көндөҙгө ике сәғәттә.*

**сәғәт**[2] *и.* Тәүлек эсендәге ваҡыт берәмеген иҫәпләй торған прибор. *Кеҫә сәғәте. Ҡул сәғәте. Стена сәғәте. Сәғәт теле.*

**сәй** *и.* **1.** Киптерелгән үлән япраҡтарынан әҙерләнгән хуш еҫле эсемлек, мәңге йәшел ҡыуаҡ йәки шуның япрағы. *Сәй ҡыуағы. Сәй үҫтереү. Һинд сәйе. Цейлон сәйе.* ♦ **Йәшел (күк) сәй** бешергәндә йәшкелт булып сыҡҡан, әскелтем тәмле сәй төрө. **2.** Шул япраҡты төнәтеп яһалған эсемлек. *Ҡаты сәй. Шыйыҡ сәй. Сәй бешереү.* **3.** Сәй эсеү табыны. *Иртәнге сәй. Сәйгә саҡырыу.*

**сәйер** *с.* Ғәҙәттәгесә булмаған, ғәҙәттәгенән айырмалы, ят, ғәжәп, ҡыҙыҡ. *Сәйер кеше. Сәйер ҡыланыш. Сәйер уй. Сәйер күренеү. Сәйер ҡарау.*

**сәйнүк (сәйнүге)** *и.* **1.** Сәй өсөн һыу ҡайната торған ҙур металл һауыт. **2.** Сәй бешерә торған фарфор йәки фаянс һауыт. *Сәйнүккә һыу алыу. Сәйнүкте утҡа ҡуйыу. Сәйнүктең һеможе.*

**сәйнәү (сәйнә-)** *ҡ.* **1.** Тештәр менән ваҡлау, өҙгөләү. *Сәйнәп ашау. Һағыҙ сәйнәү. Оҙаҡ сәйнәү.* **2.** *күсм.* Өҙмәй ҙә ҡуймай бер нәмәне һөйләү. *Юҡты сәйнәү.* ♦ **Сәйнәп ҡаптырыу** кешенең үҙенә уйларға урын ҡалдырмай, тамам әҙер итеп, аңлатып биреү.

**сәйхана** *и.* Сәй эсеп, тамаҡ ялғап сыға торған урын.

**сәйәхәт** *и.* Ил, донъя гиҙеп йөрөү. *Алыҫ сәйәхәт. Сәйәхәткә китеү. Сәйәхәт итеү (ҡылыу).*

**сәкмән** *и.* **1.** Йөн туҡыманан итәк, яғалары сигелеп, биҙәлеп тегелгән киң илле тышҡы кейем. *Аҡ сәкмән. Буҫтау сәкмән. Уҡалы сәкмән.* **2.** Башҡортарҙың элекке ғәскәри кейеме.

**сәкән** *и.* **1.** Көҙ уйнай торған туп һуғыу уйыны. *Сәкән һуғыу.* **2.** *(йәки* **сәкән аяғы**). Шул уйынды уйнай торған кәкре башлы таяҡ. *Сәкән яһау. Сәкән менән уп һуғыу.*

**сәләм** *и.* **1.** Күрешкәндә иҫәнлек, именлек теләү һүҙе. *Сәләм, егеттәр.* . Кеше йәки хат аша ебәрелгән хәбәр. *Сәләм ебәреү. Сәләм тапшырыу. Сәләм ҙыу.*

**сәләмләү (сәләмлә-)** *ҡ.* Ололап, ҙур хөрмәт белдереп иҫәнләшеү. *Баш эйеп әләмләү. Сәләмләп ҡаршы алыу.*

**сәләмәт** *с.* Ауырымаған, сырхауһыҙ, иҫән-һау. *Сәләмәт бала. Сәләмәт еше. Сәләмәт йөрөү. Сәләмәт йәшәү.*

**сәләмәтлек (сәләмәтлеге)** *и.* Ауырымаған, таҙа хәл; иҫәнлек, һаулыҡ. *Ныҡлы сәләмәтлек. Сәләмәтлекте һаҡлау. Сәләмәтлекте ҡаҡшатыу. әләмәтлек йылы.*

**сәнғәт** *и.* Ысынбарлыҡты һынлы итеп сағылдырыу эше, художестволы жади эшмәкәрлек. *Йыр сәнғәте. Сәхнә сәнғәте. Һынлы сәнғәт. Сәнғәт әҫәре.*

**сәнсеү (сәнс-)** *ҡ.* **1.** Осло нәмәне нимәгәлер төртөп индереү; ҡаҙау. *Һәнәкте әнсеү. Сәнсеп алыу. Сәнсеп тишеү.* **2.** Нимәлер төртөлгәндәге кеүек ауыртыу иҙеү. *Арҡа сәнсә. Йөрәк сәнсә.*

**сәнскәк (сәнскәге)** *и.* **1.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең осло энә кеүек үҫентеһе. *әлйемеш сәнскәге. Энәлек сәнскәге.* **2.** Энәле үләндәр исеме. *Сәнскәк орлоғо.*

**сәңгелдәк (сәңгелдәге)** *и.* **1.** Йәш баланы һалыр өсөн элеп ҡуймалы итеп һалған ҡулайлама. *Сәңгелдәк элеү. Сәңгелдәккә һалыу.* **2.** Балаларға бәүелеп йнау өсөн тағылған бау йәки баулы таҡта. *Сәңгелдәк эйеү.*

**сәп (сәбе)** *и.* Тоҫҡап атыр өсөн ҡуйылған билдә. *Сәпкә атыу. Сәпкә төҙәү.*

**сәпсек (сәпсеге)** *и.* Бәләкәй оҙонсараҡ кәүҙәле, нәҙек оҙон ҡойроҡло, йүгеп йөрөгән турғай.

**сәс** *и.* Кешенең башында үҫә торған мөгөҙ матдәнән ғибәрәт нәҙек кенә еп ымаҡ төктәр шәлкеме. *Оҙон сәс. Ҡара сәсле. Сәс үреү.*

**сәсеү (сәс-)** *ҡ.* **1.** Үҫтереү өсөн орлоҡто эшкәртелгән ергә һибеү, ултыртыу. *ойҙай сәсеү. Сәсеү ваҡыты. Сәсеү эше.* **2.** Тирә-яҡҡа түгеү, таратыу (яҡтыыҡҡа, нурға, өҫкә һ. б. ҡарата). *Нур сәсеү.* ♦ **Ағыу сәсеү** уҫал ниәт менән әһәрле һүҙ һөйләү. **Ут сәсеү** 1) уҫаллыҡ күрһәтеү; 2) теремек, үткер булыу, нып тороу.

**сәсеүлек (сәсеүлеге)** *и.* Иген һ. б. менән сәселгән ер. *Сәсеүлекте тапау. Сәсеүлекте эшкәртеү.*

**сәскә** *и.* **1.** Үҫемлектең таж һәм инәлектең һеркә япраҡтарынан торған үҫеү ағзаһы. *Һары сәскә. Сәскә атыу.* **2.** Ошондай үрсеү ағзаһы булған үҫемлек. *Ялан сәскәһе. Сәскә ултыртыу.*

**сәсрәтеү (сәсрәт-)** *ҡ.* Шыйыҡлыҡты ҡапыл ситкә бөркөү, һирпеү. *Һыу сәсрәтеү.*

**сәсрәү (сәсрә-)** *ҡ.* **1.** Шыйыҡлыҡ ҡапыл ситкә бөркөлөү, һирпелеү. *Һыу сәсрәү. Төкөрөк сәсрәү.* **2.** Тирә-яҡҡа осоу, һибелеү (ҡаты нәмәләргә ҡарата). *Быяла ярсыҡтары тирә-яҡҡа сәсрәне.*

**сәсән** *и.* Шиғри һәләткә эйә булып, фәһемле оҫта һүҙе һәм ижады менән танылыҡ алған кеше. *Сәсән булыу. Сәсән кеше.*

**сәсәү (сәсә-)** *ҡ.* **1.** Һыуыҡ тейгәндән йәки тын юлына берәй нәмә китеп, тын ала алмай быуылып-быуылып йүткереү. *Сәсәп китеү. Төтөнгә сәсәү.* **2.** Бик шәп сапҡандан йәки йүгергәндән тын етмәйенсә быуылыу. *Сәсәп йығылыу.*

**сәтләүек (сәтләүеге)** *и.* Бармаҡ башынан ҙурыраҡ йәки ваҡыраҡ ҡаты ҡабыҡлы емеш бирә торған ағас. *Грек сәтләүеге. Урман сәтләүеге.*

**сәүкә** *и.* Буҙ башлы, ҡара кәүҙәле эре ҡош. *Сәүкәләр тубы. Сәүкә тауышы. Сәүкә ояһы.*

**сәфәр** *и.* Алыҫ юл; сәйәхәт. *Сәфәр китеү. Сәфәрҙән ҡайтыу. Сәфәр сығыу.*

**сәхнә** *и.* Тамаша күрһәтеү өсөн махсус эшләнгән бейек урын. *Сәхнә алды. Сәхнәлә бейеү. Сәхнәгә сығыу.*

# Т

**табаҡ (табағы)** *и.* Аш-һыу өсөн ҡулланылған киң ауыҙлы, ҙур, сөм һауыт. *Тимер табаҡ. Аш табағы. Бер табаҡ һурпа.*

**табан[1]** *и.* **1.** Аяҡтың ергә баҫа торған аҫҡы яғы. *Табан аҫты.* **2.** Аяҡ кейеменең аҫҡы өлөшө. *Итек табаны. Табан һалыу.* **3.** Сана йәки бүтән нәмәнең шыуып бара торған аҫҡы шыма өлөшө. *Сана табаны. Тимерле табан.*

**табан[2]** йәки **табан балыҡ** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған һары тәңкәле, ҡыҙғылт ҡанатлы, яҫы, ялпаҡ кәүҙәле күл балығы. *Ҡара табан. Һары табан. Табан балыҡ тотоу.*

**табип (табибы)** *и.* Ауырыуҙарҙы тикшереп дауалаусы. *Табип булыу. Табипка күренеү.*

**табын** *и.* **1.** Күмәк кешегә әҙерләп ҡуйылған ашамлыҡ һәм шул ашамлыҡ ҡуйылған ашау-эсеү урыны. *Табын әҙерләү. Табынға саҡырыу. Табынға ултырыу.* **2.** Аш-һыу тирәләп ултырған төркөм. *Ҙур табын. Табын ҡороп ултырыу.*

**табыу (тап-)** *ҡ.* **1.** Кемде йәки нимәнелер эҙләп, ҡарап алыу. *Атты табып алып ҡайтыу. Нефть табыу. Яуап табыу.* **2.** Эйәһеҙ йәки файҙаланылмай ятҡан нәмәгә юлығыу, уны күреп алыу. *Юлдан аҡса табыу. Тараҡ табыу.* **3.** Эшләп, көс түгеп байлыҡ булдырыу. *Мал табыу. Атай тапҡанды ашау.* **4.** Донъяға килтереү (баланы); тыуҙырыу. *Ҡыҙ табыу. Ул табыу.*

**табыш** *и.* **1.** Түгелгән көс йәки аҡсанан килгән өҫтәмә файҙа, төшөм. *Табыш алыу. Табыш биреү.* **2.** Эшләп, көс түгеп тапҡан нәмә. *Урмансының табышы. Һунарсы табышы.* **3.** Осрап, табып алған нәмә. *Табышҡа осрау.*

**тағараҡ (тағарағы)** *и.* Ҡоштарға ем һала торған аҫмалы таҡта. *Ағасҡа тағараҡ элеү.*

**тағатыу (тағат-)** *ҡ.* Уралған, ишелгән, йомарланған нәмәне һүтеү, таратыу. *Арҡанды тағатыу. Йомғаҡты тағатыу. Толомдо тағатыу.*

**тағы** *р.* **1. (тағы ла).** Яңынан, ҡабаттан; йәнә. *Тағы иҫкә төштө. Тағы итте.* **2.** *терк. мәғ.* Һаналып киткән тиң киҫәктәрҙе теркәй; йәнә. *Беҙҙең ауыл кешеләре, тағы күрше ауыл егеттәре булды.*

**тағыу (таҡ-)** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер ҡуша беркетеү. *Бауға тағыу. Ҡармаҡҡа ем тағыу.* **2.** Кәүҙәгә, кейемгә аҫып ҡуйыу, ҡаҙау, эләктереү. *Алҡа тағыу. Орден тағыу. Сәскә таҫма тағыу.*

**таҙа** *с.* **1.** Бысранмаған, керһеҙ, бысраҡ теймәгән. *Таҙа кейем. Таҙа иҙән. Таҙа йөрөү.* **2.** Сүп-сар, ҡый үләне булмаған. *Таҙа баҡса. Таҙа баҫыу. Таҙа бойҙай.* **3.** Башҡа нәмә ҡушылмаған; саф. *Таҙа алтын. Таҙа көмөш.*

**таҙалыҡ (таҙалығы)** *и.* **1.** Бысранмаған, керһеҙ, таҙа хәл. *Ҡала урамдарының таҙалығы.* **2.** Башҡа нәмә, матдә ҡатышмаған, таҙа хәл. *Орлоҡтоң таҙалығын тикшереү.*

**таҙартыу (таҙарт-)** *ҡ.* **1.** Керҙе, бысраҡты, сүп-сарҙы бөтөрөп, таҙа итеү. *Аяҡты таҙартып инеү. Балаҫты таҙартыу. Кейемде таҙартыу.* **2.** Ҡый үләнен, сүп-сарҙы алып ташлап таҙа итеү. *Баҡсаны алабутанан таҙартыу.* **3.** Ҡатышҡан, ҡушылған нәмәнән айырып таҙа итеү. *Игенде таҙартыу.* **4.** Аҙыҡты ашарға яраҡһыҙ өлөштәрҙән айырыу. *Балыҡ таҙартыу. Еләк таҙартыу.*

**таж** *и*. **1.** Батшалыҡ билдәһе итеп һаналған, аҫыл таштар менән биҙәлгән алтын баш кейеме. **2.** Япраҡ, сәскәнән үреп, башҡа кейеү өсөн яһалған нәмә. *Сәскәләрҙән таж үреп кейеү.* **3.** *(йәки* **таж япрағы)** Сәскәнең төҫлө япраҡтарҙан торған баш өлөшө. *Аҡ тажлы ләлә сәскәһе.*

**тай** *и*. Бер йәше тулып, икенсе йәшкә киткән йылҡы малы. *Ҡырҡмыш тай. Ябаға тай.*

**тайғаҡ** *с*. Баҫҡанда аяҡ шыуып торған; шыма. *Тайғаҡ боҙ. Тайғаҡ юл. Тайғаҡ булыу.*

**тайыу (тай-)** *ҡ*. **1.** Баҫҡан, таянған ерҙән шыуыу. *Тайып китеү. Тайып тәгәрәү.* **2.** *күсм.* Исемдәр менән килеп, физик йәки рухи көс һәләтен юғалтыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Иҫтән тайыу. Хәлдән тайыу.*

**таҡ** *с*. Икегә тигеҙ бүленмәгән (һанға ҡарата); *киреһе* йоп. *Таҡ һандар.*

**таҡмаҡ (таҡмағы)** *и*. Халыҡ ижадының бер төрө; еңел ҡыҫҡа көйгә һалып йырлана торған шиғри әҫәр, бейеү көйө. *Таҡмаҡ сығарыу. Таҡмаҡ әйтеү.*

**таҡта** *и*. **1.** Бүрәнәне ике яҡлап ярып йәки юнып йоҡартҡан яҫы ағас. *Йоҡа таҡта. Оҙон таҡта. Яҫы таҡта. Таҡта бысыу. Таҡта ярыу.* **2.** Нимәлер өсөн файҙаланылған, ағастан эшләнгән шыма йөҙлө нәмә. *Иҙән таҡтаһы. Түбә таҡтаһы. Туҡмас таҡтаһы.*

**таҡыя** *и*. **1.** Ирҙәрҙең йоҡа, еңел баш кейеме. *Бәрхәт таҡыя. Ҡара таҡыя. Сигеүле таҡыя.* **2.** Ҡыҙҙарҙың мәрйен-тәңкә менән биҙәлгән баш кейеме. *Таҡыя сигеү.*

**тал** *и*. Һыу буйында үҫә торған тар оҙон япраҡлы, көсөк сәскәле ҡыуаҡ ағас. *Йәш тал. Тал бөрөһө. Тал көсөгө.*

**талап (талабы)** *и*. **1.** Үтәлеше мотлаҡ итеп ҡуйылған ҡәтғи һорау, шарт. *Закон талабы. Талап ҡуйыу. Талапты үтәү.* **2.** Кем йәки нимәгәлер ҡарата ҡуйылған норма, шарттар. *Эш талабы. Мәҙәни талап.*

**талапсан** *с*. Ныҡ талап итеүсән, талапты ҡаты ҡуйыусан. *Талапсан етәксе. Талапсан булыу.*

**талау (тала-)** *ҡ*. **1.** Бирмәҫкә иткән кешенән нимәлер көс менән алырға тырышыу. *Талап алыу.* **2.** Ирекһеҙләп, көсләп мал-мөлкәтен алыу. *Магазинды талау. Талап йыйған мал.* **3.** Һөжүм итеп, күмәк ябырылып төрлө урындан тешләү. *Атты күгәүен талай. Себен талай. Серәкәй талай.*

**талашыу (талаш-)** *ҡ*. **1.** Үҙ-ара нимәгәлер дәғүәләшеү; тартышыу. *Ер өсөн талашыу. Урын өсөн талашыу.* **2.** Үҙ-ара әрләшеп, ҡысҡырышыу; ыҙғышыу. *Талашып китеү.*

**талғын** *с.* Яй ғына, бер көйгә тигеҙ рәүештә барған; һалмаҡ. *Талғын аҙым. Талғын ел. Талғын хәрәкәт.*

**талҡан** *и.* **1.** Ҡыҙҙырған бойҙай оно. *Талҡан тартыу.* **2.** Шул ондан ҡайнар өткә йәки һыуға болғатып, май ҡушып яһаған ашамлыҡ. *Талҡан ашау. Талҡан бешереү.*

**талпан** *и.* Йән эйәләренең тәненә ҡаҙалып ҡан һура торған, быуынтыҡ яҡлы ваҡ бөжәк. *Талпан ҡаҙалыу.*

**талыу (тал-)** *ҡ.* Дауамлы эш-хәрәкәттән хәлһеҙләнеү (айырым ағзаға ҡара-а); арыу. *Беләк тала. Күҙ тала. Ҡанаты талған ҡош. Ҡул тала.*

**тамаҡ (тамағы)** *и.* **1.** Ауыҙ ҡыуышлығын тын юлы һәм ҡыҙыл үңәс менән оташтырған урын. *Тамаҡ төбө. Тамаҡ кибеү. Тамаҡ сайҡау.* **2.** Туҡланыу ғзаһы. *Ас тамаҡ. Тамаҡҡа ашау. 3.* Йылға бөткән, ҡойған урын. *Ағиҙел тамағы. Дим тамағы. Йылға тамағы.*

**тамам** *р.* **1.** Бөтөнләй, тулыһынса, шыпа. *Тамам аптырау. Тамам ышаныу.* **.** Эш-хәлдең бөткәнен белдергәндә ҡулланыла. *Хат тамам. Әңгәмә тамам.*

**тамамланыу (тамамлан-)** *ҡ.* Берәй эш-хәлдең һуңы етеү; бөтөү. *Яҙғы эштәр тамамланды.*

**тамамлау (тамамла-)** *ҡ.* Эш-хәлде аҙағына еткереү; бөтөрөү. *Уҡыуҙы тамамлау. Эште тамамлау.*

**тамаша** *и.* **1.** Иғтибарҙы йәлеп итерлек күренеш. *Тамаша булыу. Тамаша ҡылыу.* **2.** Халыҡ алдында башҡарылған ҡыҙыҡлы уйын йәки сәхнә әҫәре. *Тамаша күрһәтеү. Тамаша ҡарау.*

**тамашасы** *и.* Тамаша ҡараусы. *Тамашасылар спектаклде яратып ҡараны. Тамашасылар залы.*

**тамға** *и.* **1.** Берәй ырыу йәки араның танытмаһы булған шартлы билдә. *Ара тамғаһы. Ырыу тамғаһы.* **2.** Кешенең үҙ шәхесен дөрөҫләү өсөн исем, фамилия урынына ҡуйылған билдә. *Тамға ҡуйыу. Тамға һалыу.* ♦ **Ҡул тамғаһы** кешенең үҙ шәхесен билдәләп яҙған фамилияһы. *Ҡул тамғаһы ҡуйыу.*

**тамсы** *и.* Шыйыҡлыҡтан бүленеп төшкән бәләкәй генә өлөш. *Ҡан тамсыһы. Ысыҡ тамсыһы. Ямғыр тамсыһы.*

**тамыр** *и.* **1.** Үҫемлектең һыу, тупраҡтан аҙыҡ һура торған ер эсендәге өлөшө. *Үҙәк тамыр. Үлән тамыры. Тамыр ебәреү.* **2.** Сәстең, тештең тәнгә инеп береккән өлөшө. *Сәс тамыры. Теш тамыры.* **3.** *(йәки* **ҡан тамыры)** Тән эсендәге ҡан йөрөй торған юл; ҡан юлы. *Йөрәк тамыры. Ҡул тамыры. Сикә тамыры. Тамыр тибеше.* **4.** *күсм.* Нимәнеңдер башланғысы, төбө; нигеҙ. *Тамырынан үҙгәртеү. Тамырынан ҡаҡшатыу.*

**тамыу (там-)** *ҡ.* **1.** Тамсы-тамсы булып төшөү. *Күҙҙән йәш тама. Ҡан тамыу. Тамсы тама.* **2.** *күсм.* Тулышып бөркөлөү; балҡыу. *Йөҙөнән нур тама.*

**танау** *и.* Тын алыу һәм еҫ һиҙеү ағзаһы. *Бәләкәй танау. Йәмшек танау. Тыржыҡ танау.*

**танк (танкыға)** *и.* Боролмалы башняһына туп һәм пулемет ҡуйылған, броня менән көпләнгән, ҡарышлауыҡлы хәрби машина. *Ауыр танк. Еңел танк. Танк ғәскәрҙәре.*

**танытма** *и.* Ниҙелер дөрөҫләгән рәсми ҡағыҙ. *Авторлыҡ танытмаһы.*

**таныу[1] (таны-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нәмә икәнен иҫләп алыу, белеү. *Кейемдән таныу. Тауыштан таныу.* **2.** Айырым бер үҙенсәлеккә нигеҙләнеп кем йәки нимәнендер асылын, төп сифатын билдәләй алыу, айыра белеү. *Дошманды таный белеү. Кешене таныրға өйрәнеү.* **3.** Уҡый белеү. *Хәреф таныу. Яҙыу таныу.*

**таныу[2] (тан-)** *ҡ.* Эшләгән эшендән йәки әйткән һүҙендән баш тартып, кире ҡағыу. *Танмай һөйләп биреү.*

**таныш** *с.* 1. Күреп, ишетеп белгән; билдәле. *Таныш исем. Таныш йыр. Таныш кеше. 2. и. мәғ.* Күргән-белгән кеше. *Уның таныштары күп. Танышты осратыу.*

**таныштырыу (таныштыр-)** *ҡ.* **1.** Кемдәрҙелер бер-береһенә әйтеп, күрһәтеп таныш итеү. *Уҡыусыларҙы таныштырыу.* **2.** Ниҙер тураһында мәғлүмәт биреп, билдәле итеү. *Эш менән таныштырыу.*

**танышыу (таныш-)** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара танышлыҡ булдырыу. *Яҡындан танышыу.* **2.** Ниҙер тураһында мәғлүмәт алыу; күреп, ишетеп белеү. *Ҡала менән танышыу. Эш менән танышыу.*

**таң** *и.* Тәүлектең ҡояш сығыр алдынан яҡтыра башлаған ваҡыты һәм шул саҡтағы көнсығыш тараф. *Таң алды. Таң еле. Таң менән. Иртә таңдан.*

**тап[1] (табы)** *и.* Ниҙер тейеүҙән, буялыуҙан ҡалған эҙ. *Буяу табы. Май табы. Тап тейеү.*

**тап[2]** *и.* Үткер нәмә менән сапҡанда йәки юнғанда төшкән ағас киҫәге. *Ҡоро тап. Тап йыйыу. Тап яғыу.*

**тап[3]**: **тап булыу** кем йәки нимәлер осрау, юлда тура килеү. **Тап итеү** осратыу, тура килтереү. **Тап килеү** 1) бер эш-хәлдең урыны, ваҡытына тура килеү; 2) сифат, рәүеш йәһәтенән тура килеү; 3) осрашыу, тап булыу. *Бүренән ҡасҡан айыуға тап булған.* (Мәҡәл.)

**тапау (тапа-)** *к.* **1.** Үткәндә йәки йөрөгәндә өҫтән баҫып үтеү. *Кейемде тапап йөрөү.* **2.** Өҫтөндә йөрөп иҙеү, боҙоу, өҫтөнән баҫып үтеп имгәтеү, һәләк итеү. *Игенде тапау. Ат тапаған. Машина менән тапау.*

**тапҡыр**[1] *и.* Кем йәки нимәгәлер ҡаршы ятҡан урын, кем йәки нимәнендер урыһы; тәңгәл. *Ауыл тапҡыры. Өй тапҡыры.*

**тапҡыр**[2] *и.* Һан һәм һорау алмаштары менән килеп, эш-хәлдең ҡабатланыу иҫәбен белдерә; ҡабат. *Беренсе тапҡыр. Өс-дүрт тапҡыр. Һуңғы тапҡыр.*

**тапшырыу (тапшыр-)** *к.* **1.** Кемдеңдер ҡулына, ҡарамағына биреү. *Аҡсаны тапшырыу. Ҡоралды тапшырыу. Хат тапшырыу.* **2.** Эш-белем кимәлен тикшергән һорауға яуап биреү. *Һынау тапшырыу.*

**тар** *с.* **1.** Иңе, киңлеге бәләкәй; *киреһе* киң. *Тар таҫма. Тар таҡта. Тар урам.* **2.** Ян-яғы ҡыҫынҡы; *киреһе* иркен. *Тар бүлмә. Урын тар булыу.* **3.** *күсм.* Ирек, мөмкинлек йәһәтенән сикле. *Ваҡыт тар булыу.*

**тараҡ (тарағы)** *и.* Сәсте тарап яҙа торған тешле-тешле ҡорал. *Тимер тараҡ. Ваҡ тараҡ.*

**тараҡан** *и.* Кеше торлағында йәшәгән ерән төҫтәге оҙон мыйыҡлы бөжәк.

**таралыу (тарал-)** *к.* **1.** Бер төркөмдән айырылып йәки йыйылған урындан ян-яҡҡа китеү. *Көтөү таралды. Туй таралды.* **2.** Кеше аша халыҡҡа ишетелеү, күптәргә билдәле булыу (һүҙ, хәбәр, яңылыҡ, исем һ. б. ҡарата). *Батырҙың даны таралды. Хәбәр таралды.* **3.** Төрлө урынға, күп кешегә күсеп, урын алыу. *Бер ырыуҙан таралған халыҡ. Ныҡ таралған ауырыу. Моң таралды.*

**таратыу (тарат-)** *к.* **1.** Бергә йыйылған, бер урында булған нәмәләрҙе башҡа-башҡа айырыу йәки төрлө яҡҡа ебәреү. *Бесәнде таратыу. Таратып киптереү. Таратып ашатыу. Таратып ебәреү.* **2.** Бер өйкөмдәге нәмәне йәки хәл-күренеште юҡҡа сығарыу. *Ел болотто таратты. Томанды таратыу. Ҡайғыны таратыу. Хәсрәтте таратыу.* **3.** Ниҙәлер күмәк кешегә берәм-берәм биреү; өләшеү. *Аҡса таратыу. Бүләк таратыу. Кәнфит таратыу.* **4.** Кеше аша халыҡҡа ишеттереү, күп кешегә билдәле итеү, еткереү (һүҙ, хәбәр һ. б.). *Ҡотҡо таратыу. Һүҙ таратыу.*

**тарау (тара-)** *к.* Тараҡ йәки башҡа нәмәне араһына батырып сәс, ял кеүектәрҙең бөртөктәрен аралап яҙыу, шымартыу. *Тараҡ менән тарау. Сәс тарау. Уртаға ярып тарау.*

**тарих** *и.* **1.** Үҫеш, үҙгәреш хәлендәге ысынбарлыҡ. *Тарих закондары.* **2.** Үткән тормоштағы төрлө ижтимағи хәл-ваҡиға һәм шул хәл-ваҡиғалар тураһындағы хәтирә. *Тарихты өйрәнеү. Тарихта ҡалыу.* **3.** Кешелек йәмғиәтенең үҫешен, үткән тормоштағы төрлө ижтимағи хәл-ваҡиғаны өйрәнгән фән. *Башҡортостан тарихы.*

**тарихи** *с.* **1.** Ысынбарлыҡта, тарихта булған, ысын булған. *Тарихи ваҡиға. Тарихи осор. Тарихи шәхес.* **2.** Үткән тормошта, тарихта булған хәл-ваҡиғаны сағылдырған. *Тарихи роман. Тарихи фильм. Тарихи әҫәр.* **3.** Тарих өсөн әһәмиәтле, тарихҡа инерлек. *Тарихи көн. Тарихи көрәш.*

**тар-мар**: **тар-мар итеү (килтереү)** *ҡ.* ҡыйратыу, емереү, юҡ итеү. *Дошманды тар-мар итеү. Тар-мар булыу.*

**тартма** *и.* Өҫтәл, шкаф кеүек нәмәнең тартып сығармалы эске ҡумтаһы. *Шкаф тартмаһы. Өҫтәл тартмаһы.*

**тартынҡы** *с. лингв.* Тел һәм теш ҡатнашлығында әйтелешле (өнгә ҡарата). *Тартынҡы өн.*

**тартыу (тарт-)** *ҡ.* **1.** Кемде, ниҙелер тотоп, эләктереп, үҙеңә йәки бер тарафҡа табан көс менән килтереү, үҙ артынан алып барыу, һөйрәү. *Арҡанды тартыу. Ҡулдан тартыу. Уңға тартыу. Баржаны тартыу. Сананы тартыу.* **2.** Һурыу көсө менән бер тарафҡа һөйрәү. *Мөрйә насар тарта. Упҡын төпкә тарта.* **3.** Эскә һурыу, эскә алыу. *Тынды тартыу. Тәмәке тартыу. Уртты эскә тартыу.* **4.** *һөйл.* Музыка ҡоралында уйнау. *Гармун тартыу. Ҡурай тартыу.* **5.** Игенде тирмәнгә һалып әйләндереү, онға әйләндереү. *Арыш тартыу. Бойҙай тартыу.*

**тары** *и.* Ваҡ ҡына йомро орлоҡло, киң ҡыя япраҡлы, ялбыр башаҡлы ашлыҡ һәм шуның орлоғо. *Тары баҫыуы. Тары сәсеү. Тары бөртөгө.*

**тас** *и.* Йәйенке һай һауыт (кер йыуыу һ. б. өсөн тотола). *Таста кер йыуыу.*

**тасуири** *с.* Матур һүрәтләнешле. *Тасуири һүҙ. Тасуири итеп һөйләү.* ♦ **Тасуири уҡыу** асыҡ, матур итеп интонация менән уҡыу.

**тасуирлау (тасуирла-)** *ҡ.* Бөтә сифатын, рәүешен күрһәтеү; һүрәтләү. *Тәбиғәтте тасуирлау.*

**таҫма** *и.* **1.** Тар ғына итеп һуғылған махсус туҡыма (сәс үреү, кейем биҙәү өсөн ҡулланыла). *Ебәк таҫма. Тар таҫма. Сәс таҫмаһы.* **2.** Шул рәүештә эшләнгән, киҫелгән төрлө оҙон, йоҡа, тар нәмәләр.

**таҫтамал** *и.* Бит, ҡул йәки һауыт-һабаны йыуғас һөртә торған махсус туҡыма әйбер. *Аҡ таҫтамал. Сигеүле таҫтамал. Ҡул таҫтамалы.*

**татлы** *с.* **1.** Шәкәр, бал тәме булған; шәрбәтле. *Татлы аҙыҡ.* **2.** Тәме яҡшы; тәмле. *Татлы һыйҙар.* **3.** *күсм.* Рәхәтлек биргән, ләззәтле. *Татлы өмөт. Татлы тойғо.*

**татыу** *с.* Үҙ-ара талаш-тартышһыҙ, яҡшы мөнәсәбәттә булған. *Татыу балалар. Татыу ғаилә.*

**тау** *и.* **1.** Бейеклеге менән тирә-яктағы кимәлдән айырылып торған ҡалҡыу урын. *Бейек тау. Һөҙәк тау. Тау итәге.* **2.** Бер урынға йыйылған, күп, бейек итеп өйөлгән нәмә. *Ҡар тауы. Ҡом тауы.*

**тауар** *и.* **1.** Һатыу өсөн етештерелгән әйбер, продукт. *Тауарҙың ҡиммәте. Тауар әйләнеше. Тауар алмашыу. Тауар етештереү.* **2.** Һатыуға тәғәйенләнгән нәмә. *Үтемле тауар. Тауар хаҡы. Тауар тейәү.*

**тауыҡ (тауығы)** *и.* Ите һәм йомортҡаһы өсөн аҫралған йорт ҡошо. *Баҫҡан тауыҡ. Тауыҡ ите. Тауыҡ себеше.*

**тауыш** *и.* **1.** Йән эйәләренең тамағынан сыҡҡан өн. *Бала тауышы. Көлгән тауыш. Ҡош тауышы.* **2.** Кеше тамағынан сыҡҡан музыкаль өн. *Моңло тауыш. Юғары тауыш. Тауышты юғалтыу.* **3.** Механик тирбәлештең ҡолаҡҡа ишетелгән сағылышы. *Гармун тауышы. Ҡурай тауышы. Шишмә тауышы.*

**таш** *и.* **1.** Тотош масса йәки айырым киҫәк рәүешендәге сүкелмәй, иремәй торған һәр тау тоҡомо. *Аҡбур ташы. Ҡая таш. Ҡырсын ташы.* **2.** Шул тау тоҡомоноң айырым киҫәге. *Аҫыл таш. Матур таш.*

**ташбаҡа** *и.* Ҡалын ҡабырсаҡлы, ҡыҫҡа аяҡлы эре ер-һыу йәнлеге; гөбөргәйел. *Диңгеҙ ташбаҡаһы. Һаҙ ташбаҡаһы.*

**ташбаш** *и.* Ҡара сыбар төҫтәге ваҡ йылға балығы; ҡомтөрткөс.

**ташҡын** *и.* Ҡар, боҙ иреп йәки оҙаҡ ямғыр яуып ташҡан һыу. *Көҙгө ташҡын. Яҙғы ташҡын.*

**ташлау (ташла-)** *ҡ.* **1.** Ҡул менән һелтәп осороп ебәреү; бәреү. *Таш ташлау. Ташлап ебәреү.* **2.** Бәйләнеште, мөнәсәбәтте өҙөп, ситтә ҡалдырыу. *Дуҫты ташлау. Өйҙө ташлау.*

**ташсы** *с.* Таш, кирбестән йорт, бина һалыусы. *Ташсылар бригадаһы.*

**ташыу**[1] **(ташы-)** *ҡ.* Өлөшләп-өлөшләп икенсе урынға алып барыу. *Бесән ташыу. Йөк ташыу. Һыу ташыу.*

**ташыу**[2] **(таш-)** *ҡ.* **1.** Билдәле кимәлдән артыу, ярҙан сығыу (һыуға ҡарата). *Йылға ташҡан.* **2.** Һауыт ситенән артып сығыу. *Ҡымыҙ таша. Һөт ташыу.* **3.** *күсм.* Ҙур күләм алыу (көскә, тойғоға һ. б. ҡарата); ярһыу. *Дәрт таша. Көсө ташып тора.*

**таяҡ (таяғы)** *и.* **1.** Ике башынан ҡырҡып ботағы шымартылған нәҙек ағас. *Йыуан таяҡ. Кәкре таяҡ. Оҙон таяҡ.* **2.** Таянып йөрөй торған нәмә. *Ҡул таяғы. Ҡултыҡ таяғы. Саңғы таяғы.*

**таяныу (таян-)** *ҡ.* **1.** Ҡул йәки башҡа нәмәгә терәлеп, кәүҙәнең ауырлығын һалыу. *Ергә таяныу. Терһәккә таяныу.* **2.** Ҡулды, усты кәүҙәнең берәй

элөшөнә терәү. *Бөйөргә таяныу. Яңакҡа таяныу.* **3.** *күсм.* Эш, ҡылыҡта терәк итеп, кемгәлер һалышыу; арҡаланыу. *Дуҫтарға таяныу.*

**театр** *и.* **1.** Тормош ваҡиғаларын драматик рәүештә кәүҙәләндергән сәхнә сәнғәте һәм ойошмаһы. *Драма театры. Ҡурсаҡ театры. Опера театры.* **2.** Спектакль һәм башҡа тамаша әҫәрҙәре ҡуйылған бина, шулай уҡ сәнғәт әҫәре, спектакль үҙе. *Театрға барыу. Театрҙа уйнау. Театр ҡарау. Театр залы.*

**теге** *а.* Иҫтә, һүҙҙә бер тапҡыр булған кеше йәки нәмәгә, төшөнсәгә ыңынан тоҫҡағанда әйтелә. *Теге ваҡыт. Теге ер. Теге кеше.*

**тегенсе** *и.* Тегеү эше менән шөғөлләнгән кеше. *Оҫта тегенсе. Тегенсе булып эшләү.*

**тегеү (тек-)** *ҡ.* **1.** Беселгән тауарҙы сит-ситенән энәле еп менән эләктереп, кейем-ҡаралды әҙерләү. *Итек тегеү. Күлдәк тегеү.* **2.** Бер нәмәнең сит-ситен йәки өлөш-өлөшөн еп, бау үткәреп беркетеү. *Ҡуша тегеү.*

**теҙген** *и.* Нуҡта, йүгәндең ат башын тота торған бауы. *Оҙон теҙген. Теҙгенде бәйләү. Теҙгендән тотоу.*

**теҙелеү (теҙел-)** *ҡ.* Бер буй булып урынлашыу. *Сафҡа теҙелеү. Теҙелеп ултырыу.*

**теҙеү (теҙ-)** *ҡ.* **1.** Еп, бауға, шешкә бер-бер артлы үткәреү. *Балыҡты шешкә теҙеү. Мәрйен теҙеү.* **2.** Бер буйға, рәткә урынлаштырыу. *Теҙеп таңҡә баҫыу. Һауыт-һабаны теҙеп ҡуйыу.*

**теҙмә** *и.* **1.** Теҙелеп торған бер төрлө нәмәләр йәки кешеләр буйы. *Күлдәр теҙмәһе. Ылауҙар теҙмәһе.* **2.** Теҙеп яҙылған исемлек. *Исемдәр теҙмәһе. Һүҙҙәр теҙмәһе.*

**тейҙереү (тейҙер-)** *ҡ.* **1.** Ныҡ яҡынайтып, ҡағылдырыу. *Ҡулды тейҙереү. Күҙгә сыбыҡ тейҙереү.* **2.** Нимәнендер тәьҫиренә дусар иттереү. *Балаға тымау тейҙереү. Башҡа еҫ тейҙереү.* **3.** Атҡанда, бәргәндә тура килтереп һуғылдырыу. *Атып тейҙереү.*

**тейен** *и.* **1.** Кимереүселәр төркөмөнә ҡараған, ағас ҡыуышына оялай торған өлтөк ҡойроҡло, затлы тиреле бәләкәй генә йәнлек һәм шуның тиреһе. *Тейен ояһы. Тейен тотоу.* **2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Тейен бүрек. Тейен тун.*

**тейеү (тей-)** *ҡ.* **1.** Ныҡ яҡынайып, ҡағылыу. *Болотҡа тейеп торған тауҙар.* **2.** Тәьҫир итеп, ниндәйҙер йоғонто биреү. *Зыяны тейеү. Файҙа тейеү. Һыуыҡ тейеү. Эҫе тейеү.* **3.** Атҡанда, бәргәндә тура килеп һуғылыу. *Таш тейеү. Уҡ тейеү.*

**тейешле** *с.* **1.** Билдәле бер эш-хәрәкәт өсөн махсус билдәләнгән, шуны башҡарыуға мөмкинлек бирә торған; кәрәкле. *Тейешле ваҡыт. Тейешле шарт. Тейешле кешеләр.* **2.** Түләргә, бирергә һ. б. алдан тәғәйенләнгән, билдәләнгән. *Тейешле аҡса.*

**тейәү (тейә-)** *ҡ.* Алып китеү өсөн транспорт сараһына тултырыу, һалыу. *Арбаға утын тейәү. Вагонға күмер тейәү. Машинаға иген тейәү.*

**текләү (текләп-)** *ҡ.* Күҙ-ҡарашты туп-тура йүнәлтеү, төбәү. *Текләп ҡарау. Күккә текләү.*

**текст (тексҡа)** *и.* **1.** Билдәле бер бәйләнештә, эҙмә-эҙлекле итеп яҙылған, баҫып сығарылған йәки хәтергә һеңдерелгән һүҙҙәр, һөйләмдәр. *Пьесаның тексы. Тексты тәржемә итеү. Ятланған текст.* **2.** Музыка әҫәренең һүҙҙәре. *Гимндың тексын яҙыу. Йыр тексы.*

**текә** *с.* Киҫкен үргә күтәрелгән; *кireһе* һөҙәк. *Текә баҫҡыс. Текә ҡая. Текә яр. Текә маңлай. Текә ял.*

**тел** *и.* **1.** Ҡайһы бер йән эйәләренең һәм кешенең ауыҙы эсендәге мускул үҫентеһе рәүешендә булып, аҙыҡ сәйнәүгә, йотоуға булышлыҡ итә, унын тәмен билдәләй торған хәрәкәтсән оҙонса ағза һәм кешелә телмәр ағзаһы. *Телде сығарыу. Тел осоноу.* **2.** Фекер йөрөтөп, үҙ-ара аралашыу хеҙмәтен үтәгән өндәр һәм лексик-грамматик саралар системаһы. *Башҡорт теле. Төрки телдәр.* **3.** Үҙенә хас билдәләре булған телмәр төрө. *Ғилми тел. Рәсми тел. Сәхнә теле. Һөйләү теле. Әҙәби тел.* **4.** Төрлө нәмәлә, механизмда, музыка ҡоралында бер осо беркетелгән хәрәкәтсән пластинка. *Барометр теле. Гармун теле. Компас теле. Сәғәт теле.*

**телевидение** *и.* Һүрәттең тауыш менән бергә электр сигналдары ярҙамында радио йәки сымдар аша алыҫҡа бирелеше. *Телевидение программаһы. Телевидение системаһы.*

**телевизор** *и.* Телевизион тапшырыуҙарҙы ҡабул итеп күрһәтеүсе экранлы ҡорамал. *Төҫлө телевизор. Телевизор экраны.*

**телеграмма** *и.* Телеграф аша тапшырылған хәбәр һәм шундай хәбәр яҙылған бланк. *Телеграмма алыу. Телеграмма биреү.*

**телеү (тел-)** *ҡ.* Оҙон, йоҡа итеп буйға ҡырҡыу; ярыу. *Икмәк телеү. Ҡайыш телеү.*

**телефон** *и.* **1.** Телмәрҙе алыҫ араға тапшырыуҙы тәьмин итә торған электр элемтәһе төрө, шундай тапшырыу өсөн булған техник йәйланмалар системаһы. *Ҡала-ара телефон. Телефон бәйләнеше. Телефон селтәре. Телефон үткәреү. Телефондан һөйләшеү.* **2.** Шул элемтә төрө ярҙамында һөйләшеү өсөн хеҙмәт иткән аппарат. *Телефон трубкаһы. Телефоны боҙолған.*

**телмәр** *и.* **1.** Халыҡ алдына сығып һөйләгән һүҙ; сығыш. *Телмәр тыңлау.* *Телмәр һөйләү.* **2.** Уй-фекерҙе эсенә алған һүҙ, һөйләгән һүҙ. *Телмәр үҫтереү.*

**теләк (теләге)** *и.* **1.** Ниҙер булдырырға, эшләргә тигән күңел ынтылышы. *Йәшәү теләге. Уҡыу теләге.* **2.** Ниҙер булыуын, эшләнеүен кәрәк һанап әйткән һүҙ. *Теләк теләү. Яҡшы теләк.*

**теләү (телә-)** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер күңел ынтылышы тойоу. *Күрергә теләү. Уҡырға теләү.* **2.** Ниҙендер булыуын, эшләнеүен кәрәкле һанап һүҙ әйтеү. *Теләк теләү. Хәйерле юл теләү. Һаулыҡ теләү.*

**тема** *и.* Хикәйәләү, һүрәтләү, тикшереү өсөн билдәләнгән мәсьәлә. *Бәхәсле тема. Ҡыҙыҡлы тема.*

**температура** *и.* **1.** Есемдең, матдәнең йылылыҡ кимәле. *Һауа температураһы. Һыуҙың ҡайнау температураһы.* **2.** Кешенең һаулығын, ауырыулығын күрһәткән тән йылыһы. *Температура күтәрелеү. Температура төшөү. Температураны үлсәү.*

**тере** *с.* Йәне булған, йәшәгән; йәнле; *киреһе* үле. *Тере кеше. Тере булыу. Тере ҡалыу.*

**терелеү (терел-)** *ҡ.* Киренән тере хәлгә килеү; йән инеү. *Үләндәр терелде.*

**тереләй** *р.* Тере көйө. *Тереләй күмеү. Тереләй тотоу.*

**теремек** *с.* Эш-хәрәкәткә етеҙ; хәрәкәтсән. *Теремек бала.*

**теркәүес** *и. лингв.* Һөйләм киҫәктәрен, һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәү өсөн ҡулланылған ярҙамсы һүҙ. *Аныҡлау теркәүестәре. Бүлеү теркәүестәре. Йыйыу теркәүестәре.*

**терпе** *и.* Һырты энә менән ҡапланған бәләкәй йәнлек. *Терпе зарарлы бөжәктәр, сысҡан ашай.*

**территория** *и.* Билдәле бер сиге булған ер майҙаны; ер. *Дәүләт территорияһы. Төҙөлөш территорияһы.*

**тертләү (тертлә-)** *ҡ.* Ҡурҡып, терт итеү. *Тертләп китеү.*

**терһәк (терһәге)** *и.* Беләктең быуынланып, артҡа сыҡҡан ере. *Терһәк быуыны. Терһәк һөйәге. Терһәккә таяныу.*

**терәк (терәге)** *и.* Аумаһын, төшмәһен өсөн берәй нәмәне терәтеп йәки күтәртеп ҡуйған нәмә; терәү. *Күпер терәге.*

**терәү (терә-)** *ҡ.* **1.** Аумаһын йәки төшмәһен өсөн бер нәмә менән таяу; терәтеү. *Ҡойманы терәү.* **2.** Ниҙең дә булһа бер яғын ныҡ итеп, ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп ҡуйыу. *Аяҡты терәү.* **3.** Ара ҡалдырмай яҡын килтереү; тейҙереү.

рҡаны терәү. **4.** *күсм.* Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә, сиккә килтереү. *Көрсөккә ерәү.*

**тетеү (тет-)** *ҡ.* Тартып-тартып берәмекләп, буй-буй айырыу. *Йыуғысҡа укә тетеү. Йөн тетеү.*

**тетрәтеү (тетрәт-)** *ҡ.* **1.** Киҫкен хәрәкәттәр менән дерелдәтеп һелкетеү, ҙур әмәләрҙе ҡуҙғатыу, бәүелтеү. *Тау-таштарҙы тетрәтеү.* **2.** *күсм.* Көслө хәүеф алыу, ҡурҡытып ҡалтырандырыу. *Донъяны тетрәтеү.* **3.** *күсм.* Ныҡ тәьсирәндереү, көслө тойғо, хис ҡуҙғатыу. *Күңелде тетрәтеү.*

**тетрәү (тетрә-)** *ҡ.* **1.** Киҫкен хәрәкәттәр менән ныҡ һелкенеү, ҡуҙғалыу, айҡалғандай булыу (ҙур күләмле нәмәләргә ҡарата). *Ер тетрәй. Тауҙар етрәй.* **2.** *күсм.* Күмәк халыҡ ҡатнашҡан көслө ваҡиғанан дер һелкенеү. . *күсм.* Ныҡ тәьсирләнеү, көслө тойғо, хис кисереү. *Ауыр хәбәрҙән тетрәү.*

**теүәл** *р.* Һан яғынан тулы, иҫәбе тулы. *Теүәл алтмыш йәш. Теүәл бер аҙна.*

**техника** *и.* **1.** Хеҙмәттә ҡулланылған төрлө эш ҡоралы, ҡорамалы, сарала-ы, шулай уҡ кеше эшмәкәрлегенең уларҙы яһау, ҡулланыу һәм камиллаш-ырыу менән бәйле өлкә. *Алдынғы техника. Техника үҫеше.* **2.** *йыйн.* Машина-ар, механик ҡоралдар, ҡорамалдар. *Техниканы һаҡлау. Яңы техника.*

**теш** *и.* **1.** Аҙыҡты ваҡлау һәм сәйнәү өсөн булған ауыҙ ҡыуышлығындағы өйәк үҫенте; ағза. *Алғы теш. Аҫҡы теш. Өҫкө теш.* **2.** Ҡорал-ҡорамалдың иртләсләнеп, осло булып сығып торған өлөшө. *Бысҡы теше. Тараҡ теше. ырма теше.*

**тешләү (тешлә-)** *ҡ.* **1.** Теште батыра ҡабып яралау. *Тешләп алыу. Тешләп анатыу. Тешләп ашау.* **2.** Ҡаяу, морон менән яралау (бөжәктәргә ҡарата). *ебен тешләй. Серәкәй тешләй.*

**тибеү (тип-)** *ҡ.* **1.** Аяҡ менән ҡапыл һелтәп һуғыу. *Ишекте тибеп асыу. ибеп йығыу. Тибеп осороу. Туп тибеү.* **2.** Шыҡыйып килеп тотоу (йыртҡыс ошҡа ҡарата). *Себеште төйләгән типкән.* **3.** Һулҡ-һулҡ итеп ҡағыу (йөрәккә, амырға ҡарата). *Дөпөлдәп тибеү. Йыш-йыш тибеү.* **4.** *күсм.* Үҙ итмәй, ситкә ағыу. *Баланы ситкә тибеү.*

**тигеҙ** *с.* **1.** Өҫкө йөҙө шыма, яҫы, соҡор-саҡыры булмаған. *Тигеҙ ер. Тигеҙ ҙән. Тигеҙ юл.* **2.** Оҙонлоғо, бейеклеге, ҙурлығы бер тиң булған. *Буйға бер игеҙ. Тигеҙ тауҙар.* **3.** Иҫәп, үлсәм яғынан бер тиң булған. *Тигеҙ өлөш. Тигеҙ теп бүлеү.* **4.** Көсө, һәләте яғынан, дәрәжәһе менән бер тиң булған. *Тигеҙ көс.*

**тигеҙлек (тигеҙлеге)** *и.* **1.** Киң, тигеҙ ер өҫтө. **2.** *мат.* Ике тигеҙ өлөштән орған математик формула. ♦ **Тигеҙлек билдәһе** математик тигеҙлекте белдерән билдә.

**тигеҙләү (тигеҙлә-)** *ҡ.* **1.** Ниҙендер өҫкө йөҙөн тигеҙ итеү. *Ерҙе тигеҙләү. Юлды тигеҙләү.* **2.** Ос-башын, оҙонлоҡ-бейеклеген, дәүмәлен бер тиң итеү. *Тигеҙләп ҡырҡыу. Тигеҙләп ултыртыу.* **3.** Иҫәп, үлсәмен бер итеү, тиң итеү. *Тигеҙләп бүлеү. Тигеҙләп өләшеү. Тигеҙләп үлсәү.*

**тиҙ** *р.* **1.** Ашығыс рәүештә; етеҙ, йәһәт. *Тиҙ атлау. Тиҙ ҡуҙғалыу. Тиҙ-тиҙ эшләү.* **2.** Ҡыҫҡа ваҡытта. *Тиҙ барып етеү. Тиҙ табып алыу.*

**тиҙҙән** *р.* Тиҙ арала, тиҙ ваҡыт эсендә, оҙаҡламай. *Тиҙҙән килерҙәр.*

**тиҙлек (тиҙлеге)** *и.* **1.** Эш-хәрәкәттең ҡыҫҡа ваҡытта, ашығыс башҡарылышы. *Эште тиҙлек менән башҡарыу. Күҙ эйәрмәҫ тиҙлек.* **2.** Машинаның йөрөшөн ваҡытҡа ҡарата билдәләгән дәрәжә. *Беренсе тиҙлек. Тиҙлекте кәметеү.* ♦ **Йәшен тиҙлеге менән** бик тиҙ.

**тиеү (ти-)** *ҡ.* **1.** Һүҙ менән уй-фекер белдереү; әйтеү. *Килгән, ти.* **2.** Уй; фараз итеү, уйлау. *Уҡырға кәрәк, тинек тә, ҡалаға килдек.* **3. тигән**. Атама һунынан килеп, «исемле», «шулай атала торған» мәғәнәһен белдерә. *Юлдыбай тигән ауыл. Таҙғара тигән ҡош.*

**тик**[1] *кире терк.* Ҡаршы ҡуйылған һүҙ йәки һөйләмде теркәй. *Ул яҙҙы, тик яуап булманы.*

**тик**[2] *киҫ.* Үҙенән һун килгән һүҙҙе айырып сикләү өсөн ҡулланыла. *Мин тик һине көттөм.*

**тик**[3] *р.* **1.** Бер ни эшләмәй, эш-хәрәкәтһеҙ. *Тик ултырыу.* **2.** Бер рәүешсә, бер ҡиәфәттә, бер ыңғайға. *Эшләп тик йөрөү.* ♦ **Тик торғанда** ерле юҡтан, сәбәпһеҙ-ниһеҙ, уйламағанда.

**тиклем** *бәйл.* Һүҙҙәр менән килеп, ара, ваҡыт сиген белдерә; ҡәҙәр, саҡлы. *Ауылға тиклем. Йәйгә тиклем.* ♦ **Бер ни тиклем** күпмелер, бер аҙ. **Был (шул) тиклем** бик нык, бик, үтә. **Әллә ни тиклем** бик күп.

**тикшереү**[1] **(тикшер-)** *ҡ.* **1.** Берәмтекләп, ентекләп, төпсөп күҙҙән үткәреү. *Билетты тикшереү. Документты тикшереү.* **2.** Асыҡлау өсөн төпсөп өйрәнеү, анализ яһау. *Ҡанды тикшереү. Орлоҡтоң сығышын тикшереү. Эште тикшереү.* **3.** Ултырышҡа, йыйылышҡа ҡуйып, фекер алышыу. *Ғаризаны тикшереү. Эштең ҡуйылышын тикшереү.*

**тикшереү**[2] *и.* **1.** Ултырышҡа, йыйылышҡа ҡуйып фекер алышыу эше. *Тикшереүгә ҡуйыу.* **2.** Енәйәткә бәйле хәл-ваҡиғаны тейешле органдар тарафынан асыҡлау эше. *Енәйәт буйынса тикшереү алып барыу.*

**тимер** *и.* **1.** Аҡ төҫтәге сүкелеүсән ауыр металл һәм шул металдан булған нәмә. *Тимер иретмәһе. Тимерҙән эшләү.* **2.** *с. мәғ.* Шул металдан эшләнгән. *Тимер көрәк. Тимер ҡапҡа.*

**тимерлек (тимерлеге)** *и.* Тимерҙән сүкеп төрлө нәмә эшләй торған урын. *Тимерлектә эшләү.*

**тимерсе** *и.* Тимерҙән сүкеп төрлө нәмә эшләү оҫтаһы. *Оҫта тимерсе. Тимерсе булыу.*

**тин** *и.* Бер һумдың йөҙҙән бер өлөшөнә торошло аҡса берәмеге. *Биш тин. Ун тин.*

**тинлек (тинлеге)** *и.* Нисәлер тингә торошло аҡса. *Тинлек кенә ҡалған.*

**тир**[1] *и.* Тире аҫтындағы махсус биҙҙәрҙән сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк һыу. *Тир биҙе. Тиргә батыу. Тир сығыу.*

**тир**[2] *и.* Сәп ҡуйып, атырға өйрәнә торған урын.

**тирбәлеү (тирбәл-)** *ҡ.* Ян-яҡҡа талғын ғына сайҡалыу; бәүелеү. *Тулҡын өҫтөндә тирбәлеү.*

**тире** *и.* **1.** Кеше, йәнлек һәм ҡош тәнен көп булып тыштан ҡаплаған ҡатлам. *Бит тиреһе. Тире һыҙырылыу.* **2.** Йәнлек, хайуандың тунап алған тышҡы көбө. *Айыу тиреһе. Бәрәс тиреһе. Төлкө тиреһе. Һарыҡ тиреһе. Тире иләү.*

**тиреҫ** *и.* Тиҙәк менән ҡалдыҡ бесән һәм һалам ҡатнашмаһы. *Серегән тиреҫ. Тиреҫ өйөү. Тиреҫ сығарыу.*

**тирләү (тирлә-)** *ҡ.* Тир сығыу, тирле булыу, тиргә төшөү.

**тирмә, тирмә өй** *и.* Таратып, йыйып алмалы еңел кейеҙ өй. *Тирмә кейеҙе. Тирмә ҡороу.*

**тирмән** *и.* Ашлыҡ тарта торған предприятие һәм шулай тарта торған ҡоролманмалары булған бина. *Һыу тирмәне. Тирмән ташы. Ҡул тирмәне.*

**тирмәнсе** *и.* Тирмән хужаһы йәки тирмәндә эшләгән кеше. *Тирмәнсе булып эшләү.*

**тирә** *и.* Әйләнәләге ер; урата. *Ауыл тирәһе. Күл тирәһе. Өй тирәһе. Тирәне көҙәтеү.*

**тирәк (тирәге)** *и.* Һыу буйында үҫә торған йәшкелт буҙ ҡабыҡлы, йәсколөрәк япраҡлы бик эре ағас. *Бейек тирәк. Тирәктең япраҡтары көмөш тәңкәләр кеүек ялтырай.*

**тирә-яҡ (тирә-яғы)** *и.* Әйләнәләге бөтә ер; ян-яҡ. *Тирә-яҡҡа ҡарау.*

**тиҫкәре** *с.* **1.** Тейешле йәки төп тарафҡа ҡаршы булған, ҡаршы йүнәлешлеге; кире. *Тиҫкәре яҡ.* **2.** Ыңғай, тейешле хәлгә ҡаршы; кире. *Тиҫкәре күренештәр.* **3.** Кеше ыңғайына ҡаршы килеүсән, кеше ыңғайлы булмаған; кире.

*Тиҫкәре кеше. Тиҫкәре булыу.* **4.** Йөҙ яғына, уң яғына ҡаршы (кейем, ҡаралдығa ҡарата). *Тиҫкәре яғын кейеү.*

**тиҫтер** *и.* Йәш яғынан тиң кеше; тиңдәш. *Тиҫтерҙәр менән осрашыу.*

**тиҫтә** *и.* Бер үк төрлө нәмәләрҙе унарлап иҫәпләү берәмеге. *Бер тиҫтә йомортҡа.*

**тишек (тишеге)** *и.* **1.** Тотош нәмә өҫтөндәге уйылып, соҡорланып йәки үтәнән-үтә асыҡ булып торған урын. *Ҡурайҙа тишек яһау.* **2.** Кейем-һалым, һауыт-һабаның бәләкәй булып тыуған, тишелгән урыны. *Күнәктең төбөндә тишек бар. Тишекте ямау.*

**тишек** *с.* **1.** Нимәлер өҫтөндә уйылып, үтәнән-үтә асыҡ булып торған. *Тишек ҡойма. Тишек түбә.* **2.** Тыуҙған, тишелгән. *Тишек итек. Тишек салбар. Тишек тоҡ.*

**тишеү (тиш-)** *ҡ.* **1.** Үтәнән-үтә соҡорлау, уйыу, үтә сәнсеү. *Боҙҙо тишеү. Иҙәнде тишеү. Стенаны тишеү. Тишек тишеү.* **2.** Үтәнән-үтә туҙҙырыу (кейемде). *Күлдәктең терһәген тишеү. Салбарҙың тубығын тишеү.*

**тоғро** *с.* **1.** Яҡшы теләкле, саф намыҫлы. *Тоғро кеше. Тоғро булыу.* **2.** Эштә, мөнәсәбәттә һ. б. ышаныслы булған, хыянат итмәгән. *Тоғро дуҫ. Һүҙгә тоғро булыу.*

**тоҙ** *и. (йәки* **аш тоҙо)** Аш-һыуҙы тәмләй торған әсе кристаллик есем. *Ваҡ тоҙ. Таш тоҙ. Аштың тоҙо әсе.*

**тоҙаҡ (тоҙағы)** *и.* **1.** Ҡош, йәнлек тота торған элмәк. *Тоҙаҡ һалыу. Тоҙаҡҡа ҡуян эләккән.* **2.** *күсм.* Ҡулға эләктереү өсөн алдан эшләнгән хәйлә. *Тоҙаҡ ҡороу. Тоҙаҡҡа эләгеү.*

**тоҙлау (тоҙла-)** *ҡ.* **1.** Тоҙло итеү, тоҙ ҡушыу. *Ашты тоҙлау. Тоҙлап ашау.* **2.** Боҙолмаһын өсөн тоҙ һибеү йәки тоҙ ҡушыу. *Ит тоҙлау. Йәшелсә тоҙлау. Кәбеҫтә тоҙлау. Ҡыяр тоҙлау.*

**тойғо** *и.* Кешенең бөтә булған психик һәм физик кисереше; хис. *Ауыр тойғо. Ғәрләнеү тойғоһо. Ҡурҡыу тойғоһо. Тойғоға бирелеү.*

**тойолоу (тойол-)** *ҡ.* **1.** Һиҙеү ағзаһына беленеү, һиҙелеү. *Булмәлә еҫ тойолмай.* **2.** Аңға, күңелгә нисек йәки ниндәйҙер булып күренеү; һиҙелеү. *Ғәжәп тойолоу. Ҡыҙыҡ тойолоу. Тар һымаҡ тойолоу.*

**тойоу (той-)** *ҡ.* **1.** Һиҙеү ағзаһы менән ҡабул итеп белеү. *Еҫте тойоу. Тәмде тойоу.* **2.** Аң, күңел менән ҡабул итеп белеү. *Бәлә яҡынлашҡанын тойоу.* **3.** Бер төрлө хис, тойғо кисереү. *Арығанды тойоу. Еңеллек тойоу. Рәхәтлек тойоу.*

**ток (тогы)** *и.* Есемдәрҙә һәм вакуумда электр зарядтарының тәртипкә килтерелгән ағымы. *Ток көсө.*

**тоҡ (тоғо)** *и.* **1.** Бөртөклө йәки онтаҡ һ. б. нәмәләрҙе һалып һаҡлау һәм бер урындан икенсе урынға ташыу өсөн туҡыманан, ҡағыҙҙан бер башы ғына асыҡ ҡалдырып тегелгән ҙур ҡап. *Киндер тоҡ. Ҡағыҙ тоҡ. Тоҡ тегеү.* **2.** Ваҡ нәмәләрҙе шул ҡап менән үлсәү берәмеге. *Бер тоҡ он. Ике тоҡ картуф. Ярты тоҡ бойҙай.*

**тоҡандырыу (тоҡандыр-)** *ҡ.* Ут төртөп яндырыу. *Газды тоҡандырыу. Ут тоҡандырыу.*

**тоҡаныу (тоҡан-)** *ҡ.* Ут тейеп янып китеү. *Утын тоҡана. Усаҡ тоҡана.*

**тоҡом** *и.* **1.** Бер тамырҙан, бер ата-бабанан сыҡҡан быуындар теҙеме һәм шул теҙемгә ингән вәкил. *Батырҙар тоҡомо.* **2.** Бер сығанаҡтан килгән йәнлек, ҡош-ҡортҡа һ. б. ҡарата. *Тоҡом малы. Һыйырҙың тоҡомо. Тоҡомдо ҡушыртыу.* **3.** Ниндәйҙер даими сифатҡа эйә булып, ер ҡабығының составына ингән минерал. *Тау тоҡомо.*

**тоҡсай** *и.* Бәләкәй генә тоҡ. *Тоҡсай тегеү. Юл тоҡсайы.*

**толом** *и.* Үрелгән оҙон сәс. *Оҙон толом. Ике толом итеп үреү. Толомдо тағатыу.*

**толоп (толобо)** *и.* Бейек шәл яғалы, киң, оҙон итеп тиренән теккән ҡышҡы кейем. *Бүре толоп. Толоп кейеү. Толопҡа ураныу.*

**толпар** *и.* **1.** Әкиәттәге ҡанатлы ат. *Толпар заты.* **2.** *күсм.* Бик яҡшы етеҙ ат; аргымаҡ.

**том** *и.* Әҫәр йәки баҫманың айырым китаптан торған өлөшө. *Беренсе том. Дүрт томдан торған роман.*

**томан** *и.* **1.** Атмосфераның түбәнге ҡатламында болот һымаҡ булып ерлыҡҡа килгән быу. *Аҡ томан. Күк томан. Томан тарала.* **2.** *күсм.* Асыҡ итеп күрһәтмәй, томалаған нәмә. *Күҙ алды томан менән ҡапланды.*

**томбойоҡ (томбойоғо)** *и.* Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, һыу өҫтөнә йәйелеп үҫкән эре түңәрәк япраҡлы, аҡ йәки һары төҫтәге эре сәскәле һыу үҫемлеге. *Аҡ томбойоҡ. Һары томбойоҡ. Томбойоҡло күл.*

**томра** *с.* **1.** Елһеҙ, эҫе һауалы; бөркөү. *Томра көн.* **2.** *и. мәғ.* Дымһыу, елһеҙ, эҫе һауа. *Көндөҙгө томра.*

**томшоҡ (томшоғо)** *и.* **1.** Йәнлектең, ҡоштоң оҙон мороно. *Оҙон томшоҡ.* **2.** *кәмһ.* Танау. *Томшоғона биреү.*

**тон** *и.* **1.** *муз.* Билдәле бер юғарылыҡтағы музыкаль тауыш. *Түбән тон. Юғары тон.* **2.** Һүҙҙең, телмәрҙең хис-мөнәсәбәтте сағылдырған әйтелеш рәүеше; тауыш. *Йомшаҡ тон. Ҡаты тон. Һалмаҡ тон.*

**тонна** *и.* Мең килограмға тиң ауырлыҡ үлсәү берәмеге. *Бер тонна нефть.*

**тоноҡ**[1] *с.* **1.** Тоноп таҙарған; буръяҡ түгел; таҙа. *Тоноҡ һыу.* **2.** Асыҡ күренмәгән, ялтыр түгел; томанлы һымаҡ. *Тоноҡ быяла. Тоноҡ төҫ.* **3.** Асыҡ, яңғырауыҡлы түгел; һаңғырау. *Тоноҡ тауыш.*

**тоноу**[1] **(тон-)** *ҡ.* Буръяҡлап торған нәмәләре төпкә ултырып таҙарыу. *Һыу тона.*

**тоноу**[2] **(тон-)** *ҡ.* **1.** Томанһыу, һүрәнке булыу, көсө, баҙыҡлығы кәмеү. *Күҙ тоноу.* **2.** Көпләнгән, тығылған һымаҡ булып, һиҙгерлеген юғалтыу. *Ҡолаҡ тоноу. Танау тона.*

**тонсоғоу (тонсоҡ-)** *ҡ.* Һауа етмәүҙән, саң, газдан тын ҡыҫылыу; быуылыу. *Тонсоғоп үлеү. Төтөнгә тонсоғоу.*

**тонсоу** *с.* Тын алыу өсөн ауыр, тын тарыҡтырғыс. *Тонсоу бүлмә. Тонсоу һауа.*

**торба** *и.* **1.** Шыйыҡлыҡ, газ, пар һ. б. йөрөү өсөн тәғәйенләнгән эсе ҡыуыш, ғәҙәттә, йомро оҙон нәмә йәки ҡоролма. *Газ торбаһы. Пар торбаһы. Һыу торбаһы.* **2.** Киң ауыҙлы, еҙ, тынлы музыка ҡоралы. *Еҙ торба. Торбала уйнау.*

**торғоҙоу (торғоҙ-)** *ҡ.* **1.** Аяҡҡа баҫтырыу, уятыу. *Иртә торғоҙоу. Йоҡонан торғоҙоу. Күтәреп торғоҙоу.* **2.** Берәй нәмәне вертикаль ҡуйыу. *Яғаны торғоҙоу.*

**торлаҡ (торлағы)** *и.* **1.** Тора торған урын. *Мал торлағы.* **2.** Кеше йәшәй торған бина; йорт. *Дөйөм торлаҡ. Торлаҡ майҙаны. Торлаҡ төҙөү.*

**тормош** *и.* **1.** Кешенең йәшәү осорон эсенә алған дәүер; ғүмер. *Тормош юлы.* **2.** Тереклек итеп, көн кисереү рәүеше; көнкүреш. *Ауыр тормош. Бәхетле тормош. Ауыл тормошо. Ғаилә тормошо.* **3.** Ғаилә рәүешендәге көнкүреш. *Тормош ҡороу. Тормошҡа сығыу. Тормошта булыу.*

**торна** *и.* Оҙон сираҡлылар ғаиләһенә ҡараған оҙон муйынлы, оҙон суҡышлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло эре күсәр һаҙ ҡошо. *Торна тауышы. Торналар тубы.*

**тороу (тор-)** *ҡ.* **1.** Аяҡ үрә баҫыу, аяҡҡа ҡалҡыу. *Һикереп тороу. Урындан тороу.* **2.** Баҫҡан хәлдә ниндәйҙер урында булыу. *Ағас төбөндә тороу. Ҡарауылда тороу. Сиратта тороу. Туҡталышта автобус тора.* **3.** *күсм.* Кемде йәки ниҙелер яҡлап, ниндәйҙер ҡарашта, фекерҙә булып, шуны тотоу. *Дөрөҫлөк яғында тороу.* **4.** *күсм.* Күҙ уңында, уйҙа, алда булыу. *Алда ауыр эш тора. Башта бер һорау тора.* **5.** Ғүмер итеү; йәшәү. *Ауылда тороу. Фатирҙа тороу.* **6.** Ниндәйҙер хаҡ, баһаға, әһәмиәткә эйә булыу. *Китап нисә һум тора?*

**торт** *и.* Һөт, май, шәкәр, йоморткаға баҫылған сөсө ҡамырға крем, еләкмеш һ. б. ҡушып бешергән татлы ашамлыҡ. *Торт бешереү. Торт менән сәй ...еү.*

**тоҫҡау (тоҫҡа-)** *ҡ.* Туралап йүнәлтеү, төбәү. *Мылтыҡты тоҫҡау. Тоҫҡап ...тыу.*

**тоташыу (тоташ-)** *ҡ.* Үҙ-ара ҡушылыу; ялғаныу. *Арҡандың остары ...оташҡан. Болоттарға барып тоташыу. Көн төнгә тоташа.*

**тотҡа** *и.* Һәр төрлө нәмәнең тотоп аса, күтәрә, эшләтә торған өлөшө. *Ишек ...отҡаһы.*

**тотҡон** *и.* **1.** Һаҡ аҫтындағы ирекһеҙ хәл. *Тотҡондағы кеше. Тотҡондан ...отҡарыу. Тотҡонға эләгеү.* **2.** Һаҡ аҫтындағы ирекһеҙ кеше. *Тотҡон булыу. ...отҡон итеү. Тотҡондарҙы ҡотҡарыу.*

**тотлоғоу (тотлоҡ-)** *ҡ.* Тел көрмәләнеп, һүҙҙе әйтә алмай туҡтап тороу. *Тот...ғоп һөйләү. Тотлоғоп уҡыу.*

**тотоноу (тотон-)** *ҡ.* **1.** Ысҡынмаҫлыҡ итеп ҡул менән эләктереү; йәбешеү. *...ке ҡуллап тотоноу. Тотоноп ултырыу.* **2.** Ни ҙә булһа эшләү өсөн ҡулға алыу; ...әбешеү. *Ҡоралға тотоноу. Ҡәләмгә тотоноу.* **3.** Эштә, тормошта ҡулланыу, ...әрәккә файҙаланыу. *Аҡсаны тотоноу. Мул тотоноу. Эшкә тотоноу.*

**тотоу (тот-)** *ҡ.* **1.** Бармаҡ йәки ус менән ҡыҫыу; ҡулға алыу. *Ҡорал тотоу. ...улдан тотоу. Ҡыҫып тотоу.* **2.** Ҡулға алып, эш башҡарыу. *Балта тоторға ...ирәнеү. Руль тотоу. Теҙген тотоу.* **3.** Ҡасҡан, иркендә йөрөгән ерҙән ҡулға ...ләктереү. *Баҫтырып тотоу. Тотоп бикләү. Ҡараҡты тотоу.* **4.** Һунар итеп ...улап, ҡулға эләктереү. *Балыҡ тотоу. Ҡуян тотоу. Тотоп ашау.* **5.** Ниндәйҙер ...ер хәлгә ҡуйып, үҙгәртмәй һаҡлау. *Ҡәүҙәне тура тотоу. Ҡулды юғары тотоу.* ... Ситкә сығармай, йомоп һаҡлау, күңелдә йөрөтөү. *Иҫтә тотоу. Сер итеп ...отоу. Асыу тотоу.* **7.** Хужалығында аҫрау йәки биләү. *Ҡош-ҡорт тотоу. Мал ...отоу. Эт тотоу.* **8.** *күсм.* Иғтибарға, күңелгә алыу, эш-тормош йүнәлеше ...теп алыу. *Ата һүҙен тотоу. Дин тотоу. Кәңәште тотоу.*

**тотош** *р.* **1.** Бөтә булған өлөш, берәмектәр күләмендә; тулыһынса. *Тотош ...ыуыу. Тотош ҡуҙғалыу. Тотош ҡырҡыу.* **2.** Тулы күләмдә; тулыһынса. *Тотош ...ыяла. Тотош сәскәгә күмелеү.*

**тояҡ (тояғы)** *и.* **1.** Мал аяғының осондағы ҡаты өлөшө. *Кәзә тояғы. Һыйыр ...ояғы. Тояҡ тауышы.* **2.** *(йәки* **сана тояғы**). Сананың табаны менән үрәсәһен ...таштырған ҡыҫҡа ағас. **3.** Ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәренең мәрйен теҙеп, осона ...ңкә тағып яһаған сәсәге.

**төҙ** *с.* Тегеләй-былай бөгөлмәгән, ҡыйшаймаған, кәкрәймәгән; тура. *Төҙ ...рмаҡ. Төҙ кәүҙә. Шәм кеүек төҙ шыршы.*

**төҙөлөш** *и.* **1.** Төрлө бина, ҡоролма һалыу эше. *Торлаҡ йорттар төҙөлөшө. Төҙөлөш майҙаны. Төҙөлөштә эшләү.* **2.** Өлөш-өлөштәрҙең эске бәйләнеше, ҡоролошо. *Ерҙең төҙөлөшө. Шиғыр төҙөлөшө.*

**төҙөү (төҙө-)** *ҡ.* **1.** Төрлө бина, ҡоролма һалыу. *Йорт төҙөү. Күпер төҙөү. Тимер юл төҙөү.* **2.** Эшләп, ойоштороп ғәмәлләштереү. *Ғәскәр төҙөү. Ойошма төҙөү.* **3.** Өлөштәрҙе теҙеп, берләштереп, бер бөтөн нәмә яһау. *Дәреслек төҙөү. Исемлек төҙөү. Һөйләм төҙөү. Һүҙлек төҙөү.*

**төҙөүсе** *и.* **1.** Бина, ҡоролмалар төҙөгән кеше. *Төҙөүсе булыу. Төҙөүселәр көнө.* **2.** Төрлө мәғлүмәтте йыйып, берләштереп бер нәмә яҙыусы. *Дәреслек төҙөүсе. Йыйынтыҡтың төҙөүсеһе.*

**төҙәлеү (төҙәл-)** *ҡ.* **1.** Кәмселек, етешһеҙлектән арынып, яҡшырыу. *Тәртибе төҙәлде. Төҙәлеп китеү.* **2.** Ауырыуҙан арынып, һауға әйләнеү; шәбәйеү, һауығыу. *Ауырыу төҙәлде.*

**төҙәтеү (төҙәт-)** *ҡ.* **1.** Боҙолғанды эшкә яраҡлы итеү; йүнәтеү. *Ишекте төҙәтеү. Машинаны төҙәтеү.* **2.** Эш-хәрәкәттәге, ҡылыҡтағы кәмселекте бөтөрөү. *Етешһеҙлекте төҙәтеү. Холоҡто төҙәтеү.* **3.** Тейешле, килешле рәүешкә килтереү. *Бүректе төҙәтеп кейеү. Мыйыҡты төҙәтеү. Төҙәтеп тегеү.*

**төҙәү (төҙә-)** *ҡ.* Сәпкә тура йүнәлтеү (туп, мылтыҡ һ. б. нәмәне); төбәү, тоçҡау. *Мылтыҡ төҙәү. Төҙәп атыу.*

**төйҙә** *и.* **1.** Үткер ҡоралдың йөҙөнә ҡаршы, тупаҡ яғы. *Балта төйҙәһе. Бысаҡ төйҙәһе.* **2.** Ҡулдан ата торған ҡорал һабының төп, тупаҡ яғы. *Автомат төйҙәһе. Мылтыҡ төйҙәһе.*

**төйлөгән** *и.* Оҙон киң ҡанатлы, киң ҡойроҡло, ҡара көрән төçлө йыртҡыс ҡош. *Төйлөгән тауыҡ себешен тибә.*

**төймә** *и.* **1.** Тышҡы кейемдә ҡаушырып элә торған тумалаҡ нәмә. *Еҙ төймә. Күлдәк төймәһе. Төймәне ысҡындырыу. Төймәне ҡаптырыу.* **2.** Уртанан тишеп, епкә йәки тимерсыбыҡҡа теҙгән йомро нәмә. *Счет төймәһе. Тиçбе төймәһе.*

**төйнәү (төйнә-)** *ҡ.* **1.** Төйөн яһау. *Еп төйнәү. Төйөн төйнәү.* **2.** Киң сепрәккә һалып, остарын ҡаушырып бәйләү. *Аҡсаны ҡулъяулыҡҡа төйнәү. Кейемде төйнәп алыу.* ♦ **Йоҙроҡ төйнәү (төйөү)** кемгәлер янап йоҙроҡто йомарлау.

**төйөн** *и.* Бауҙы салып алып тартҡандан йәки ике осон ҡуша бәйләгәндән барлыҡҡа килгән йомарлаҡ. *Арҡандың төйөнө. Төйөндө сисеү. Төйөн төйнәү.*

**төйөнсөк (төйөнсөгө)** *и.* Сепрәккә урап, остарын ҡаушырып бәйләгән нәмә. *Төйөнсөктәр төйнәү. Төйөнсөктө сисеү.*

**төйөр** *и.* Ғәҙәттә йомшаҡ, шыйыҡ нәмәләр эсендәге бергә йәбешеп уҡмашҡан киçәксәләр. *Ҡан төйөрҙәре. Он төйөрҙәре.*

**төйәк (төйәге)** *и.* **1.** Эйәләшеп, гел килеп торорға өйрәнгән урын. *Мал өйәге. Төйәк итеү. Төйәк һайлау.* **2.** Оҙаҡҡа урынлашып, ғүмер итеп торған ɔ. *Ата-баба төйәге. Тыуған төйәк. Төйәк ҡороу.*

**төк (төгө)** *и.* **1.** Кеше, йәнлек, хайуан тәнендәге ваҡ йөн. *Төк баҫыу.* . Үҫемлек һабағындағы еп кеүек үҫенте. *Кесерткән төктәре.*

**төкөрөк (төкөрөгө)** *и.* Ауыҙ эсен, ашаған аҙыҡты ебетеп торған ıыйыҡлыҡ. *Төкөрөк менән ебетеү.*

**төкөрөү (төкөр-)** *ҡ.* Ауыҙҙан шайыҡ сығарыу. *Лас иттереп төкөрөү. Сырт өкөрөү.*

**төкөү (төкө-)** *ҡ.* **1.** Ҡаты нәмәгә ныҡ итеп төртөү. *Терһәкте төкөү. убыҡты төкөү.* **2.** Мөгөҙ, маңлай менән ныҡ итеп төртә һуғыу, бәреү (кәзә, арыҡҡа ҡарата). *Кәзә төкөмәксе булды.*

**төкәлеү (төкәл-)** *ҡ.* Яҡынлап барып төртөлөү; терәлеү. *Ауыл урманға барып өкәлә.*

**төкәтеү (төкәт-)** *ҡ.* **1.** Яҡын алып барып төртөлдөрөү; терәтеү. *Төкәтеп уйыу.* **3.** Ҡушып, терәтеп һалыу (йорт-ҡаралтыны). *Бура төкәтеү.*

**төлкө** *и.* **1.** Эттәр ғаиләһенә ҡараған ослораҡ моронло, оҙон ялбыр ҡой-ɔҡло йыртҡыс йәнлек. *Күк төлкө. Ҡара төлкө. Ҡыҙыл төлкө. Төлкө тиреһе. өлкө эҙе.* **2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Төлкө тун.*

**төн** *и.* Тәүлектең ҡояш байығандан һуңғы ҡараңғы миҙгеле. *Йәйге төн. ҙон төн. Төн уртаһы.*

**төнгө** *с.* Төн миҙгелендәге. *Төнгө ваҡыт. Төнгө йоҡо. Төнгө ҡараңғылыҡ. өнгө поезд.*

**төндә** *р.* Төн ваҡытында; төнөн. *Төндә йөрөү. Төндә эшләү.*

**төньяҡ (төньяғы)** *и.* Ер йөҙөнөң көньяҡҡа ҡаршы тарафы. *Төньяҡтан иҫкән алҡын ел. Төньяҡҡа осҡан ҡоштар.*

**төнәү (төнә-)** *ҡ.* Төнгө йоҡоға китеү (ҡош-ҡортҡа ҡарата).

**төп[1] (төбө)** *и.* **1.** Соҡор-саҡыр, һыу, һауыт-һабаның һ. б. аҫты һәм аҫтын-ағы ер. *Йылға төбө. Кәмә төбө. Соҡор төбө. Тоҡ төбө.* **2.** Үҫемлектең иҫәп ·рәмеге. *Бер төп алма. Биш төп сейә.* **3.** Тән ағзаһының кәүҙә менән ɔташҡан урыны. *Бот төбө. Ҡолаҡ төбө.*

**төп[2]** *с.* **1.** Алдан ҡарағанда иң эстәге; төптәге, төпкө. *Төп яҡта ятыу.* . Нимәнендер нигеҙе, сығанағы булған; тәүге, башланғыс. *Төп йорт. Төп алыҡ.* **3.** Урын, дәрәжә буйынса беренсе кимәлдәге. *Төп ҡоҙа. Төп хужа.*

**төпкөл** *и.* Кеше аҙ йөрөгән алыҫ урын. *Урман төпкөлө. Төпкөлдә йәшәү. Төпкөлдән килеү.*

**төпләү (төплә-)** *к.* **1.** Төп ҡуйыу, төп һалыу. *Быйма төпләү.* **2.** Төбө, тамыры менән ерҙән ҡуптарыу. *Ағас төпләү. Урман төпләү.* **3.** Китап, дәфтәр һ. б. нәмәләрҙең биттәрен бергә тегеп, берәй төрлө ҡатырға, ҡалын ҡағыҙ һ. б. менән тышлау. *Китап төпләү.*

**төпһә** *и.* Ҡырҡылған йәки һынған үҫемлектең ерҙәге ҡалдығы; төп. *Ағас төпһәһе. Әрем төпһәһе.*

**төр** *и.* **1.** Дөйөм бер нәмәнең үҙенсәлекле айырым берәмеге. *Аш төрө. Ҡорал төрҙәре. Сәскә төрҙәре. Эш төрө.* **2.** *биол.* Бер төрлө сифаттарға эйә булған заттар йыйылмаһы, иң юғары берәмек иҫәпләнгән төркөмгә буйһонған йәнлек һәм үҫемлектәрҙе классификациялау берәмеге.

**төргәк (төргәге)** *и.* **1.** Сепрәккә, яулыҡҡа һалып, төрөп бәйләнгән нәмә; төйөнсөк. *Ҙур төргәк. Төргәкте сисеү.* **2.** Осонан осона тәгәрләтеп ураған тауар, ҡағыҙ. *Төргәк-төргәк ситса. Һыҙма төргәктәре.* **3.** Бергә һалынған, төрөлгән бер иш нәмәләр бәйләме. *Китаптар төргәге. Бер төргәк аҡса.*

**төркөм** *и.* **1.** Бер ергә тупланған бер нисә кеше йәки ҡош, йәнлек. *Ҙур төркөм. Ҡыҙҙар төркөмө.* **2.** Уртаҡ эш, маҡсат, сифат нигеҙендә берләшкән халыҡ йәки нәмәләр. *Төркөм етәксеһе. Төркөм туплау.* **3.** Тереклектәр системаһында бер нисә ғаиләне берләштергән биологик берәмек. *Йыртҡыстар төркөмө. Кимереүселәр төркөмө.*

▲ **төркөмләү (төркөмлә-)** *к.* Төркөм-төркөм итеү, төркөм-төркөм булыу. *Төркөмләп ултыртыу. Кешеләрҙе төркөмләп оҙатыу.*

**төрлө** *с.* **1.** Бер нисә төрҙә булған, күп төрҙәге. *Төрлө ағас. Төрлө төҫ. Төрлө уй.* **2.** Бер үк түгел, башҡа-башҡа, айырым-айырым. *Төрлө яҡҡа таралышыу. Төрлө юл менән китеү.*

**төрмә** *и.* Тотҡондарҙы бикләп тота торған ҡарауыллы махсус бина. *Төрмәгә ябыу. Төрмәлә ултырыу. Төрмәнән сығарыу.*

**төрөнөү (төрөн-)** *к.* **1.** Ян-яҡтан урап ҡымтыныу; ураныу. *Төрөнөп ятыу. Юрғанға төрөнөү.* **2.** *күсм.* Тотош солғаныу, эсендә ҡалыу; сумыу. *Томанға төрөнөү. Ҡараңғылыҡҡа төрөнөү. Нурға төрөнөү.*

**төрөү (төр-)** *к.* **1.** Сепрәк, ҡағыҙ кеүек нәмәгә һалып, осон, башын ян-яҡтан ҡайтарыу; урау. *Баланы юрғанға төрөү. Китапты ҡағыҙға төрөү.* **2.** Ситен эскә ҡайтарып, оҙонға урау. *Балаҫты төрөү.* **3.** Осонан, ситенән бөкләп-бөкләп, үргә ҡайтарыу (ең, балаҡ һ. б. нәмәне). *Балаҡты төрөү. Еңде төрөү.*

**төртөү (төрт-)** *к.* **1.** Ниҙеңдер осон бер нәмәгә тейҙереү. *Бармаҡ осо менән төртөп ҡарау. Нөктә төртөү.* **2.** Ниҙеңдер осо менән ҡапыл ҡағылыу. *Бөйөргә төртөү. Ҡабырғаға төртөү. Таяҡ менән төртөү. Төртөп уятыу.* **3.** Көс менән үҙендән ситкә этеү. *Төртөп ауҙарыу. Төртөп ебәреү. Төртөп йығыу. Төртөп сығарыу. Төртөп төшөрөү.*

**төҫ** *и.* **1.** Есемдәрҙең таралған йәки сағылған нурҙы күреү тойғоһо тыуҙыра торған үҙлеге. *Аҡ төҫ. Күк төҫ. Ҡара төҫ. Ҡыҙыл төҫ. Лимон төҫө. Һары төҫ.* **2.** Тышҡы ҡиәфәт, йөҙ-сырай. *Етди төҫ. Йонсоу төҫ. Ҡәнәғәт төҫ. Шат төҫ. Төҫкә йәш кеше. Төҫкә матур ҡыҙ. Төҫ ҡасыу. Төҫ ташлау.* **3.** Кемдеңдер, нимәнеңдер сифатын, һынын һаҡлаған иҫтәлек. *Батырҙың төҫө итеп ҡылысын һаҡлау.*

**төҫлө** *с.* **1.** Төрлө төҫтәге, төрлө төҫкә буяулы. *Төҫлө ҡағыҙҙар. Төҫлө сәләмдәр.* **2.** Ниндәй ҙә булһа бер рәүешле. *Бүтән төҫлө. Икенсе төҫлө.*

**төтөн** *и.* Ниҙер янғанда бүленеп сыҡҡан күк, ҡара томан. *Тәмәке төтөнө. Ҡуйы төтөн.*

**төш**[1] *и.* Йоҡола күргән төрлө күренеш. *Төш күреү. Төшкә инеү. Төш юрау.*

**төш**[2] *и.* Ҡояштың туп-тура көньяҡта булған ваҡыты, көн үҙәге. *Төш ваҡыты. Төшкә тиклем. Төштән һуң. Төш етеү.*

**төшкө** *с.* Төш ваҡытындағы. *Төшкө сәй. Төшкө һауын. Төшкө ял.*

**төшөндөрөү (төшөндөр-)** *к.* Ниҙеңдер асылын, мәғәнәһен аңлатыу. *Төшөндөрөп биреү. Мәсьәләне төшөндөрөү. Эште төшөндөрөү.*

**төшөнкөлөк (төшөнкөлөгө)** *и.* Бойоҡлоҡ, күңелһеҙлек. *Күңел төшөнкөлөгө.*

**төшөрөү (төшөр-)** *к.* **1.** Юғарынан йәки ниҙеңдер өҫтөнән аҫҡа, түбәнгә күсереп, урынын алмаштырыу. *Арбанан төшөрөү. Баланы ҡулдан төшөрөү. Түбәнерәк төшөрөү.* **2.** Берәй станцияла, туҡталышта һ. б. транспорттан сығарыу. *Юлаусыларҙы төшөрөп ҡалдырыу.* **3.** *күсм.* Бошонҡо, төшөнкө хәлгә ҡалдырыу, килтереү. *Күңелде төшөрөү. Кәйефте төшөрөү.* **4.** Ниндәйҙер хәлгә ҡалдырыу. *Бәләгә төшөрөү. Ҡайғыға төшөрөү. Ҡара тиргә төшөрөү.* **5.** Ҡулға эләктереү, табыу. *Аҡса төшөрөү. Мал төшөрөү.* **6.** Тотҡан урын, дәрәжәнән алыу, сығарыу, ниҙәндер ҡотолдороу. *Рәйеслектән төшөрөү. Урындан төшөрөү. Өҫтән бурысты төшөрөү.* **7.** Ҡәләм, буяу һ. б. ярҙамында ҡағыҙҙа һ. б. әмәлә ниҙелер кәүҙәләндереү. *Биҙәк төшөрөү. Рәсем төшөрөү. Фотоға төшөрөү.*

**төшөү (төш-)** *к.* **1.** Юғарынан йәки ниҙеңдер өҫтөнән аҫҡа, түбәнгә күсеп, урын алмаштырыу. *Арбанан төшөү. Баҫҡыстан төшөү. Яурынға тиклем төшкән сәс.* **2.** Берәй станцияла, туҡталышта һ. б. транспорттан сығыу. *Автобустан төшөү. Поездан төшөү.* **3.** Һауанан һ. б. сағылып, нимәгәлер ятыу.

*Күләгә төшә.* **4.** Ҡайһылыр урынға тура килеү (һүҙҙәге баҫымға ҡарата). *Баҫым һуңғы ижеккә төшә.* **5.** Ныҡлы тормағанлыҡтан, урынынан ҡубып сығыу. *Күнәктең төбө төшкән. Теш төшә.* **6.** Ниҙең дә булһа көсө, күләме һ. б. әҙәйеү, кәмеү; түбәнәйеү. *Ҡандың баҫымы төшә. Һыуҙың кимәле төшә.* **7.** *күсм.* Бошонҡо, төшөнкө хәлгә килеү. *Кәйеф төштө.* **8.** Ҡатын булып кейәү йортона килеү. *Килен төшә.* **9.** Ниндәйҙер эшкә тотоноу. *Бейергә төшөү. Бесәнгә төшөү. Ураҡҡа төшөү.*

**трактор** *и.* Тағылған йәки аҫылған төрлө машина-ҡорамалды хәрәкәткә килтереү өсөн тәғәйенләнгән тәгәрмәсле йәки ҡарышлауыҡлы үҙе йөрөмәле машина. *Ҡарышлауыҡлы трактор. Тәгәрмәсле трактор.*

**тракторсы** *и.* Трактор йөрөтөүсе. *Тракторсы булып эшләү.*

**трамвай** *и.* Ҡалала ер өҫтөндәге электрлы тимер юл һәм шул юлдан йөрөгән поезд. *Трамвай эшселәре. Трамвайға ултырыу. Трамвай менән барыу.*

**трамплин** *и.* Осоу, һикереү һ. б. алыҫлығын арттырыу өсөн этәргес булған спорт ҡоролмаһы йәки яйланмаһы. *Саңғы трамплины. Һыуға трамплиндан һикереү.*

**трико** *и.* **1.** Өҫкө кейем өсөн һырлап һуҡҡан йөн туҡыма. *Костюм трикоһы.* **2.** Бәйләнгән туҡыманан тәнгә һылаштырып тегелгән спорт йәки театр кейеме. *Трико кейеү.*

**троллейбус** *и.* Ҡалала кеше йөрөтә торған күп урынлы рельсһыҙ электр машинаһы. *Троллейбус маршруты. Троллейбус паркы.*

● **тубыҡ (тубығы)** *и.* Аяҡтың (малда алғы аяҡтың) бот һөйәге менән балтыр һөйәген тоташтырған быуыны. *Тубыҡ башы. Тубыҡ быуыны. Тубыҡ һөйәге. Тубыҡҡа һалыу.*

**тубыҡланыу (тубыҡлан-)** *ҡ.* Тубыҡты бөгөп, ергә сәнсеү. *Тубыҡланып тороу. Тубыҡланып ултырыу.*

**туғай** *и.* Һыу буйындағы ваҡ ағаслыҡ. *Туғай бесәне. Туғай сәскәһе. Тубыҡланып ултырыу.*

**туған** *и.* Ҡан ҡәрҙәш. *Алыҫ туған. Бер туған. Яҡын туған. Туған тейеш.*

**туғандаш** *и.* Дуҫлыҡ, яҡынлыҡ хисе менән бәйле, мәнфәғәттәре уртаҡ булған. *Туғандаш республикалар. Туғандаш халыҡтар.*

**туғарыу (туғар-)** *ҡ.* **1.** Малды егелгән хәленән бушатыу. *Атты туғарыу.* **2.** *күсм.* Эште, бурысты үҙеңдән кемгәлер тапшырыу.

**туҙ** *и.* Ҡайындың иң тышҡы аҡ ҡабығы. *Туҙ һыҙырыу. Туҙ яндырыу. Туҙ һағыҙы.*

**туҙан** *и.* Бик ваҡ онтаҡ рәүешендәге бысраҡ; саң. *Юл туҙаны. Туҙан тәреү. Туҙанды һөртөү.*

**туҙҙырыу (туҙҙыр-)** *ҡ.* **1.** Алама, иҫке, яраҡһыҙ хәлгә килтереү; иҫкертеү. *йемде туҙҙырыу.* **2.** Йыйнаҡһыҙ хәлгә килтереү; болартыу. *Нәмәләрҙе ҙҙырып ташлау. Йөн туҙҙырыу. Сәсте туҙҙырыу.* **3.** *күсм.* Әрәмгә, бушҡа эреп юҡ итеү. *Аҡса туҙҙырыу.*

**туҙыу (туҙ-)** *ҡ.* **1.** Тотоноу, ваҡыт үтеү арҡаһында алама, иҫке, яраҡһыҙ лгә килеү; иҫкереү. *Кейем туҙа.* **2.** Тарау, йыйнаҡһыҙ хәлгә килеү; боларыу. *н туҙа. Сәс туҙған. Туҙып ятҡан нәмәләр.* **3.** *күсм.* Асыуҙан ныҡ ярһып ләшеү. *Ҡарт туҙып китте.*

**туй** *и.* **1.** Шатлыҡлы ваҡиға хөрмәтенә ойошторолған тантана; байрам. *лес туйы. Еңеү туйы. Исем туйы.* **2.** Никахлашыу уңайы менән ойошто-лған мәжлес. *Туй бүләге. Туйға барыу. Туй яһау.*

**туйҙырыу (туйҙыр-)** *ҡ.* **1.** Аҙыҡ биреп туҡ итеү, туҡ хәлгә килтереү; ашатыу. *ланы туйҙырыу. Тамаҡты туйҙырыу.* **2.** *күсм.* Күңелде биҙҙереү; ялҡыты[illegible] этеү. *Бер төрлө эш туйҙырҙы.*

**туйыу (туй-)** *ҡ.* **1.** Аҙыҡланып туҡ хәлгә килеү, туҡ булыу. *Ашап туйыу. маҡ туйҙы. Сәй эсеп туйыу.* **2.** Нимәгәлер мулығыу, кинәнеү. *Икмәккә йыу. Кейемгә туйыу. Һаулыҡҡа туйыу.* **3.** *күсм.* Күңел биҙеү, ялҡыу. *Тыуған ҙән кем туйған?*

**туҡ** *с.* **1.** Ашап-эсеп алған, ас түгел. *Туҡ бала. Туҡ булыу.* **2.** Эсе буш түгел, лоҡ менән тулы. *Туҡ башаҡ. Туҡ бойҙай.*

**туҡланыу (туҡлан-)** *ҡ.* Аҙыҡланып, тереклек итеү; тамаҡ туйҙырыу. *Туҡла-у процесы.*

**туҡлыҡлы** *с.* **1.** Яҡшы туйҙырған. *Туҡлыҡлы аҙыҡ. Туҡлыҡлы аш.* **2.** Терек-к өсөн кәрәкле матдәләре булған. *Туҡлыҡлы матдә.*

**туҡмас** *и.* Ашҡа һалыр өсөн йоҡа ғына йәйеп, нәҙек оҙон итеп ҡырҡҡан сө ҡамыр. *Туҡмас баҫыу. Туҡмас йәйеү. Туҡмас ҡырҡыу.*

**туҡмау (туҡма-)** *ҡ.* Яза өсөн ныҡ итеп һуҡҡылау. *Туҡмап сығарыу. Туҡмап шлау. Ҡанға батырып туҡмау.*

**туҡталыш** *и.* **1.** Эш-хәрәкәттәге ваҡытлыса туҡтап тора торған ара. *Туҡта-ш яһау.* **2.** Пассажирҙарҙы ултыртып, төшөрөп китә торған махсус урын. *тобус туҡталышы. Туҡталышта трамвай көтөү.*

**туҡтатыу (туҡтат-)** *ҡ.* **1.** Кемдәндер йәки нимәнәндер алға йүнәлгән рәкәтен киҫеү, эш-хәрәкәттән тындырыу. *Атты туҡтатыу. Сәғәтте*

*туктатыу. Эште туктатыу.* **2.** Ниҙендер барышын, ағышын өҙөү. *Бәхәсте туктатыу. Уҡыуҙы туктатыу. Һуғышты туктатыу.*

**туктау (тукта-)** *к.* **1.** Алға йүнәлгән хәрәкәтте киҫеү, эш-хәрәкәттән тыныу. *Барып туктау. Килеп туктау. Туктап ҡалыу. Туктап тороу. Сәғәт туктаған. Уйындан туктау.* **2.** Ниҙендер барышы, булмышы өҙөлөү. *Бәхәс туктаны. Сауҙа туктаны. Эш туктаны.* **3.** Ваҡытлыса килеп урынлашыу. *Ҡунаҡханала туктау.*

**туҡыма** *и.* **1.** Туҡылған тауар. *Ебәк туҡыма. Йөн туҡыма. Кизе-мамыҡ туҡыма.* **2.** Бергә берләшеп, бер үк функция үтәгән бер төрлө күҙәнәктәр төркөмө. *Мускул туҡымаһы. Нервы туҡымаһы.*

**туҡыу (туҡы-)** *к.* Төйөр ҡалдырмай шыйыҡлау өсөн ҡалаҡ менән болғатыу. *Ҡаймаҡ туҡыу. Ҡатыҡ туҡыу. Ҡоймаҡ туҡыу.*

**тулау (тула-)** *к.* **1.** Үрле-ҡырлы һикереп, төрлө яҡҡа ташланыу. *Ат тулай.* **2.** Тегеләй-былай аунау. *Тулап йоҡлау.*

**тулҡын** *и.* **1.** Һыу өҫтөндәге сайҡалыш. *Диңгеҙ тулҡыны. Тулҡын ҡаға.* **2.** *күсм.* Нимәнеңдер көслө һәм сағыу сағылышына ҡарата; ташҡын. *Көрәш тулҡыны. Шатлыҡ тулҡыны.* **3.** *физ.* Физик мөхиттәге тирбәлеү хәрәкәте. *Радио тулҡыны. Тауыш тулҡыны. Электромагнит тулҡыны.*

**тулҡынланыу (тулҡынлан-)** *к.* **1.** Тулҡын-тулҡын булып тирбәлеү, сайҡалыу, тулҡыныу. *Иген баҫыуы тулҡынланып ята.* **2.** *күсм.* Тойғоло, тынысһыҙ хәлдә булыу; болоҡһоу, йөрәкһеү. *Күңел тулҡынлана. Тулҡынланып һөйләү.*

**тултырыу (тултыр-)** *к.* **1.** Һауыт, тоҡсай һ. б. нәмә эсенә һалыу. *Төйөп тултырыу. Кеҫәгә көнбағыш тултырыу. Ҡомғанға һыу тултырыу.* **2.** Һауыт кеүек нәмәнең эсен тулы итеү. *Тултырып ҡойоу. Тултырып һалыу. Күнәкте һыу менән тултырыу.* **3.** Буш ҡалдырылған урынға кәрәкле мәғлүмәтте яҙыу. *Анкета тултырыу. Шифахана картаһын тултырыу.* **4.** Билдәле күләм, дәүмәлгә еткереү. *Планды тултырыу.* **5.** Күпмелер йәште теүәлләү. *Илле йәште тултырыу.*

**тулы** *с.* **1.** Өҫтөнә, ситенә сыҡҡанса ниҙер һалынған йәки ҡойолған. *Тулы туҫтаҡ. Тулы һауыт.* **2.** Урын, майҙанды тотош биләгән. *Кәртә тулы мал. Өй халыҡ менән тулы. Урам тулы кеше.* **3.** Бөтә булмышты биләгән. *Күңелем тулы ҡайғы, уй менән.* **4.** Билдәле бер иҫәп, самаға тотош еткән. *Тулы бер эш көнө.* **5.** Итләс, йомро. *Тулы беләк. Тулы тән.*

**тулыу (тул-)** *к.* **1.** Һауытҡа һ. б. күп йыйылыу. *Бүлмәгә төтөн тулды. Күнәк тулған. Соҡорға һыу тулған.* *2.* Күп булып, бөтә урын, майҙанға таралыу. *Машина менән урам тулған. Клуб халыҡ менән тулды.* **3.** Билдәле иҫәп, һанға,

күләмгә етеү. *План тулды. Әйбер һатҡан аҡсаһы тулмай.* **4.** Күпмелер йәшкә етеү. *Утыҙ йәш тулды.*

**тулыһынса** *р.* **1.** Тулы көйө, бөтөнләйе менән; тотош. *Тулыһынса биреү. Тулыһынса файҙаланыу.* **2.** Бөтөнләйе менән, еренә еткереп. *Тулыһынса аңлау.*

**тумыртҡа** *и.* Оҙон үткер суҡышы менән ағасты соҡоп тапҡан ем менән туҡлана торған урман ҡошо. *Ала тумыртҡа. Ҡара тумыртҡа.*

**тун** *и.* Тиренән теккән ҡышҡы өҫ кейеме. *Бүре тун. Бәрән тун. Ҡама тун. Тейен тун. Төлкө тун. Тун кейеү.*

**тунау (туна-)** *ҡ.* Мал, йәнлектең тиреһен һыҙырыу; һуйыу. *Һарыҡ һуйып, тунап алыу.*

**туң**[1] *с.* **1.** Һыуыҡҡа ҡатҡан. *Туң ер. Туң тәҙрә.* **2.** *күсм.* Йылы хис-тойғоһоҙ; ҡаты. *Туң йөрәк. Туң күңелле кеше.*

**туң**[2] *и.* **1.** Ниҙеңдер һыуыҡҡа ҡатҡан хәле, торошо. *Ерҙең туңы ирей.* **2.** Һыуытып, аяҡ аҫты ҡатҡан мәл. *Иртәнге туң. Киске туң.*

**туңдырма** *и.* Ҡаймаҡ, һөт, еләк-емеш һуты һәм башҡа нәмә ҡушып туңдырған татлы ашамлыҡ. *Ҡаймаҡлы туңдырма. Шоколадлы туңдырма.*

**туңыу (туң-)** *ҡ.* **1.** Һыуыҡҡа ҡатыу. *Май туңа. Һыу туңа.* **2.** Нык өшөү. *Аяҡтар туңа. Ҡул туңды.* **3.** *күсм.* Хис-тойғоһоҙ булып ҡатыу; хисһеҙләнеү. *Йөрәк туңды. Күңел туңыу.*

**туп (тубы)** *и.* Берәй материалдан эсе бөтәш йәки ҡыуыш итеп яһалып, ҡаты нәмәгә бәргәндә, ғәҙәттә, һикерә торған шар. *Ағас туп. Йөн туп. Резина туп. Футбол тубы. Туп тәгәрләтеү.*

**тупаҫ** *с.* **1.** Тупар, үтмәҫ. *Тупаҫ кәйлә.* **2.** Төҫө, һыны ямаҡ; күркәм, нәфис түгел. *Тупаҫ эшләнгән көршәк.* **3.** *күсм.* Килешһеҙ, ҡаты ҡылыҡлы; ҡырыҫ. *Тупаҫ мөғәмәлә. Тупаҫ һүҙ. Тупаҫ яуап.*

**туплау (тупла-)** *ҡ.* **1.** Төркөмгә йыйыу. *Малды туплау.* **2.** Йыйып берләштереү. *Ғәскәр туплау. Халыҡты бергә туплау.* **3.** Йыя-йыя күбәйтеү. *Аҡса туплау. Байлыҡ туплау. Мәғлүмәт туплау.*

**тупраҡ (тупрағы)** *и.* **1.** Ерҙең өҫкө йомшаҡ ҡатламы. *Көлһыу тупраҡ. Ҡара тупраҡ. Тупраҡты йомшартыу.* **2.** *күсм.* Билдәле бер урын, ер. *Тыуған тупраҡ.*

**тупһа** *и.* **1.** Ишек йәки тәҙрә тирәсенең аҫҡы өлөшө. *Ишек тупһаһы. Тәҙрә тупһаһы. Тупһа аша атлау.* **2.** Ишек күгәнен ултырта торған сөйлө тимер.

**тура** *с.* **1.** Берәй йүнәлешкә бер тигеҙ тартылған; кәкре түгел, төҙ. *Тура һыҙыҡ. Тура юл.* **2.** *р. мәғ.* Юл ыңғайында бер ҡайҙа ла ҡағылмай, һуғылмай. *Тура эшкә барыу. Өйгә тура ҡайтыу.* **3.** Фекерҙе, тойғоно һ. б. асыҡтан-асыҡ

белдергән. *Тура һүҙле кеше. Тура яуап.* **4.** Дөрөҫ, ысын, тоғро булған. *Тура юлға төшөрөү.* **5.** Үҙгәртелмәгән, күсмәгә әйләндерелмәгән, төп; *кireһе* күсмә. *Һүҙҙең тура мәғәнәһе.*

**турағыс** *и.* Ниҙе лә булһа турай торған машина йәки ҡорамал. *Ит турағыс.* Силос турағыс. Һалам турағыс.

**турайыу (турай-)** *ҡ.* Төҙ хәлгә килеү. *Һуҡмаҡ турайҙы. Турайып ултырыу.*

**турала** *бәйл.* Эйәлек килештәге 1-се, 2-се зат алмаштары, төп килештәге күрһәтеү алмаштары менән уй, һүҙ объекты булған кеше йәки нәмәне билдәләү өсөн ҡулланыла; хаҡта. *Минең турала. Һеҙҙең турала. Шул турала.*

**туранан-тура** *р.* **1.** Ниндәйҙер башҡа бер эш-хәлгә, урын-ергә ҡағылышһыҙ; туп-тура. *Туранан-тура фронтҡа оҙаттылар.* **2.** Йәшереп тормай, асыҡтан-асыҡ. *Туранан-тура әйтеү.*

**турау (тура-)** *ҡ.* Киҫәк-киҫәк итеп ҡырҡҡылау, бүлгеләү; сапҡылау. *Ит турау. Картуф турау. Һалам турау.*

**тураһында** *бәйл.* Эйәлек килештәге 3-сө зат берлек алмашы, төп килештәге исем, 3-сө зат күплек алмашы һәм шуға тап килгән башҡа алмаштар менән уй, һүҙ объекты булған кеше йәки нәмәне билдәләү өсөн ҡулланыла; хаҡында. *Уның тураһында. Тегеләр тураһында. Уҡыу тураһында.*

**турғай** *и.* Сыбар көрән һыртлы, буҙ ҡорһаҡлы ваҡ ҡош. **Балыҡсы турғай** оҙон төҙ суҡышлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, йәшел һыртлы һыу буйы турғайы. **Буҙ турғай** *ҡар.* **һабан турғайы. Ҡамыш турғайы** һорғолт һыртлы, аҡһыл ҡорһаҡлы, аҡ ҡашлы һыу буйы турғайы. **Ҡарабаш турғай** ҡара башлы, һары ҡорһаҡлы, йәшкелт һыртлы турғай. **Ҡыҙылтүш турғай** арҡаһы күкһел, түбәһе, ҡойроғо, ҡанат осо ҡара, атаһының түше ҡыҙыл төҫтә булған урман турғайы. **Мышар турғайы** яҫы ғына супайлы, күкшел һыртлы, ҡойроҡ осо һары һыҙатлы эре турғай. **Һабан турғайы** күккә менеп һайрай торған һорғолт буҙ һыртлы эре турғай; буҙ турғай. ♦ **Турғай башындай** бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәткәндә әйтелә.

**турист (турисы)** *и.* Туризм менән шөғөлләнгән кеше. *Турист булып сит илгә сығыу. Туристар ярышы.*

**турник (турнигы)** *и.* Ике бағана менән арҡыры тимерҙән торған гимнастик снаряд. *Турникта уйнау.*

**турнир** *и.* Бөтә ҡатнашыусылар үҙ-ара берәр тапҡыр осраша торған спорт ярышы. *Хоккей турниры. Шахмат турниры.*

**туры** *с.* **1.** Ҡараһыу ҡыҙыл, ялы, ҡойроғо ҡара (йылҡы төҫөнә ҡарата). *Ҡара туры. Ҡыҙыл туры. Туры ат.* **2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат.

**тутыйғош** *и.* Асыҡ, матур төçлө, кәкре суҡышлы йылы яҡ ҡошо.

**туфли (туфлийы)** *и.* Аяҡты бәкәлгә еткәнсе генә ҡаплай торған һай аяҡ кейеме. *Бейек үксәле туфли. Ирҙәр туфлийы. Туфли кейеү.*

**түбә** *и.* **1.** Баштың иң өçкө өлөшө. *Түбә сәсе.* **2.** (*йәки* **тау түбәһе**). Тау башының иң өçкө өлөшө. *Түбәһе күккә олғашҡан тау. Тау түбәһенә менеү.* **3.** Йорт-ҡаралтының башы. *Өй түбәһе. Ҡалай түбәле йорт.*

**түбән** *с.* **1.** Ниндәйҙер бер кимәлдән аçтағы. *Түбән урын. Түбән ер.* **2.** Һаны, күсө, сифаты һ. б. йәһәтенән юғары түгел, әҙ, насар. *Түбән баçым. Түбән кимәл. Түбән күрһәткес. Түбән сортлы әйбер.* **3.** Башланғыс, тәүге баçҡыстағы (белем системаһында). *Түбән белем. Түбән класс уҡыусыһы.* **4.** *күсм.* Рухи, әхлаҡи яҡтан насар, бысраҡ. *Түбән кеше.*

**түбәнге** *с.* **1.** Ниндәйҙер кимәлдән аçтағы; аçҡы. *Түбәнге ҡат.* **2.** Урын дәрәжәһе иң бәләкәй. *Түбәнге баçҡыс.*

**түгел** *мөн.* **1.** Алдынан килгән һүҙҙе, фекерҙе инҡар итеү, кире ҡағыу һәм кире ҡуйыуҙы белдерә. *Ҙур түгел. Матур түгел. Насар түгел.* **2.** Һорау киçәксәһе менән килеп, фараз рәүешендәге һорауҙы белдерә. *Кемдер килә түгелме? Матур баçа түгелме?*

**түгеү (түк-)** *ҡ.* **1.** Һауыттан ҡойоу, ағыҙыу, һоçоп алып һибеү (шыйыҡ йәки ваҡ, бөртөклө нәмәләрҙе). *Биҙрәләге һыуҙы түгеү. Кәмәнең һыуын түгеү.* **2.** *күсм.* Мул, күп, иркен итеп ағылдырыу, тирә-яҡҡа сәсеү (йыр, нур һ. б. нәмәне). *Ергә ҡояш нурын түгә.* **3.** *күсм.* Күп итеп сарыф итеү, тотоноу. *Бушҡа аҡса түгеү. Көс түгеү.*

**түҙеү (түҙ-)** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер хәлгә, тәьçиргә, ҡыйынлыҡҡа һ. б. бирешмәй, ныҡлыҡ, сабырлыҡ һаҡлау; сыҙау. *Ауырлыҡҡа түҙеү. Һыуыҡҡа түҙеү. Кискә тиклем түҙеү.* **2.** Тышҡы тәьçиргә бирешмәй, тәүге хәл-рәүеште һаҡлау. *Ел-ямғырға түҙеү.*

**түләү**[1] **(түлә-)** *ҡ.* **1.** Хеҙмәт йәки нәмә хаҡын ҡаплау өсөн аҡса һ. б. нәмә биреү. *Аҡса түләү. Эш хаҡы түләү. Юл хаҡын түләү.* **2.** Ниндәйҙер йөкләмәне үтәү өсөн аҡса һ. б. нәмә биреү. *Бурыс түләү. Һалым түләү.*

**түләү**[2] *и.* **1.** Хеҙмәт йәки бирәй нәмә өсөн бирелә торған хаҡ. *Өçтәмә түләү.* **2.** Дәүләт файҙаһына бирелә торған мәжбүри йыйым, һалым. *Түләү түләтеү.*

**түңәрәк**[1] **(түңәрәге)** *и.* **1.** Бөтә нөктәләре үҙәктән бер тигеҙ алыçлыҡта булған һыҙыҡ һәм шунын менән сикләнгән яçылыҡ өлөшө. *Түңәрәктең майҙанын иçәпләп сығарыу. Түңәрәккә сығыу. Түңәрәк һыҙыу.* **2.** Эш-шөғөл өсөн берләшкән кешеләр ойошмаһы. *Драма түңәрәге. Әҙәби түңәрәк. Түңәрәк ойоштороу.*

**түңәрәк**[2] *с.* **1.** Бөтә нөктәләре үҙәктән бер тигеҙ алыҫлыкта булған һыҙыҡ менән сикләнгән; дүңгәләк. *Түңәрәк аҡлан. Түңәрәк икмәк. Түңәрәк күҙгө. Түңәрәк өҫтәл.* **2.** *күсм.* Һәр яҡлап теүәл; бөтөн, етеш. *Түңәрәк донъя.*

**түтәл** *и.* Йәшелсә ултыртыу өсөн ҡаҙып, йомшартып, бейегәйтеп ҡуйған ер. *Бер түтәл ҡыяр. Түтәл яһау.*

**түш** *и.* Кәүҙәнең муйындан ҡорһаҡҡа тиклемге алғы өлөшө; күкрәк. *Түш һөйәге. Түшкә ҡыҫыу.*

**түшәк (түшәге)** *и.* Ятҡанда аҫҡа түшәй торған ҡаралды. *Ҙур түшәк. Йомшаҡ түшәк. Түшәк тышы. Түшәк йәйеү.*

**түшәм** *и.* Өйҙөң, ҡураның бура өҫтөнә таҡтанан түшәп һалынған эске түбәһе; түбә таҡтаһы. *Түшәм таҡтаһы. Түшәм йәйеү.*

**түшәү (түшә-)** *ҡ.* **1.** Нимәнендер өҫтөнә икенсе нәмәне йәйеп һалыу. *Ашъяулыҡ түшәү. Аҫҡа бесән түшәү. Иҙәнгә балаҫ түшәү.* **2.** Берәй нәмә эшләгәндә таҡта йәки бүрәнәне теҙеп, ҡоршап һалыу. *Иҙән түшәү.* **3.** Таратып, тигеҙләп өҫтән йәйеү. *Бетон түшәү. Асфальт түшәү. Ҡырсын түшәү.*

**тыбырсыныу (тыбырсын-)** *ҡ.* **1.** Түҙемһеҙләнеп аяҡтарҙы алмаш-тилмәш баҫыу йәки ятҡан ерҙән аяҡтарҙы алмаш-тилмәш килтереп, тәртипһеҙ хәрәкәттәр яһау. *Бишектәге бала тыбырсынып уянды.* **2.** Ысҡынырға, ҡотолорға йәки торорға теләп аяҡ-ҡул, бөтә тән менән тәртипһеҙ хәрәкәттәр яһау; тулау. *Ысҡынырға тырышып тыбырсыныу.*

**тығыҙ** *с.* **1.** Йөрөү, тороу өсөн урыны әҙ, майҙаны бәләкәй; иркен түгел; ҡыҫыҡ, *киреһе* киң. *Тығыҙ бүлмә. Тығыҙ урын.* **2.** Ҡыҫып, кипсәлеп торған, иркен түгел; тар. *Тығыҙ аяҡ кейеме.* **3.** Өлгөрөү мөмкинлеге әҙ; ашығыс, ҡыҫтау. *Тығыҙ ваҡыт.*

**тығыу (тыҡ-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне һауыттың тар ауыҙына тығыҙлап индереү. *Мискәнең бөкөһөн тығыу. Шешәнең тығынын тығыу.* **2.** Ниҙелер бер аралыҡ, ҡыуышлыҡ эсенә индереү. *Ҡулды кеҫәгә тығыу.* **3.** Ниҙе лә булһа берәй аралыҡ, ҡыуышлыҡ эсенә һалыу, ҡуйыу. *Мейескә утын тығыу. Саңғыларҙы карауат аҫтына тығыу.* **4.** Шыйыҡлыҡ эсенә батырыу. *Аяҡты һыуға тығыу. Бармаҡты буяуға тығыу.*

**тыйнаҡ** *с.* Үҙен әҙәпле, тәртипле тотҡан; тотанаҡлы. *Тыйнаҡ бала. Тыйнаҡ булыу.*

**тыйыу (тый-)** *ҡ.* **1.** Тәртипһеҙ, тотанаҡһыҙ ҡылыҡҡа ирек ҡуймай тотоу, туҡтатыу. *Тыйып килеү. Тыйып тотоу. Насар ҡылыҡтан тыйыу.* **2.** Үҙеңдәге теләк, кисерешкә ирек бирмәй баҫыу. *Асыуҙы тыйыу. Күҙ йәшен тыйыу.* **3.** Рөхсәт итмәй туҡтатыу, ғәмәлдән алыу. *Урман ҡырҡыуҙы тыйыу. Һунарҙы*

*тыйыу.* ♦ **Ҡулды тыйыу** алыу, тотоу йәки һуғыу теләгенә ирек бирмәй баҫыу. **Телде тыйыу** әйтеү, һөйләү теләген баҫыу.

**тыҡрыҡ (тыҡрығы)** *и.* Өйҙәр араһынан оло урамға тура сыҡҡан бәләкәй ҡыҫҡа урам. *Тар тыҡрыҡ. Тыҡрыҡ аша сығыу.*

**тылсым** *и.* **1.** Хөрәфәт буйынса, тәбиғи булмаған мөғжизәле үҙенсәлек; сихыр. *Тылсым көсө. Тылсым тәьҫире.* **2.** Үҙенә арбап алған серле үҙенсәлек. *Йыр тылсымы. Тәбиғәт тылсымы.*

**тылсымлы** *с.* **1.** Тылсым көсөнә эйә. *Тылсымлы кейем. Тылсымлы таяҡ.* **2.** Тәьҫир көсө, сере менән үҙенә арбаған. *Тылсымлы тауыш.*

**тымау** *и.* Тын юлы шешеп, танау тоноп, сөскөртөп йонсотҡан ауырыу. *Ҡаты тымау. Тымау тейеү. Тымауҙан ҡотолоу.*

**тымыҡ** *с.* **1.** Елһеҙ, тыныс; тын. *Тымыҡ көн. Тымыҡ һауа.* **2.** Бик яй аҡҡан йәки тулҡынһыҙ тыныс ятҡан. *Тымыҡ күл. Тымыҡ һыу.*

**тымыу (тым-)** *ҡ.* **1.** Көсө кәмеп туҡтау, баҫылыу, тыныу (ел-ямғырға ҡарата). *Ел тыма. Ямғыр тымды.* **2.** Илауҙан туҡтау; шым булыу. *Бала тымды.*

**тын**[1] *и.* Тере йән эйәләрендә үпкә аша һауа алмашыныуы; һулыш. *Тын юлдары. Тын алыу. Тын етмәү. Тын ҡыҫылыу.* ♦ **Тын да алмай** ҙур иғтибар менән. **Тыны ла сыҡмай** кеше үҙен бик баҫалҡы, йыуаш тотҡанда әйтелә.

**тын**[2] *с.* **1.** Шау-шыу, тауыш булмаған, тынлыҡ урынлашҡан. *Тын иртә. Тын урман.* **2.** Бик яй хәрәкәтле йәки хәрәкәтһеҙ; тыныс. *Тын диңгеҙ. Тын күл.*

**тыныс** *с.* **1.** Ығы-зығыһыҙ, шау-шыуһыҙ; тын. *Тыныс ваҡыт. Тыныс урам. Өй эсе тыныс.* **2.** Ғауға, дау булмаған. *Тыныс донъя. Тыныс тормош.* **3.** Хәрби булмаған, имен. *Тыныс төҙөлөш. Тыныс хеҙмәт.* **4.** Төрлө хәүеф-хәтәр, борсоу, ҙур мәшәҡәттәре булмаған. *Тыныс эш. Тыныс ҡартлыҡ.* **5.** Сабыр тәбиғәтле, баҫалҡы. *Тыныс кеше. Тыныс холоҡ.* ♦ **Тыныс булығыҙ** борсолмаҫҡа йәки шауламаҫҡа өндәгәндә әйтелә. **Тыныс йоҡо** йоҡо алдынан әйтелә торған теләк һүҙе.

**тынысланыу (тыныслан-)** *ҡ.* **1.** Борсолған эш-хәлдән, ауыр кисерештән, ярһыуҙан бушанып, тыныс хәлгә килеү. *Асыуҙан тынысланыу. Күңел тынысланыу.* **2.** Ығы-зығы, шау-шыу туҡталып, тыныс хәлгә килеү. *Донъялар тынысланды. Халыҡ тынысланды.* **3.** Яй хәрәкәтле йәки хәрәкәтһеҙ хәлгә килеү, тыныу. *Диңгеҙ тынысланды.*

**тыныслыҡ (тыныслығы)** *и.* **1.** Төрлө хәрәкәт, ығы-зығы, мәшәҡәттәр булмаған, тауышһыҙ, шау-шыуһыҙ хәл. *Тыныслыҡты боҙоу. Тыныслыҡ һаҡлау. Тыныслыҡты алыу. Тыныслыҡ биреү. Тыныслыҡ табыу.* **2.** Яу, болалар булмаған тыныс хәл; именлек. *Ил тыныслығы. Тыныслыҡ өсөн көрәш.* **3.** Төрлө

кисерештәр менән борсолмаған, ғазапланмаған тыныс хәл. *Йән тыныслығы. Күңел тыныслығы. Тыныслыҡты юғалтыу. Эске тыныслыҡ.*

**тыныу (тын-)** *ҡ.* **1.** Һөйләү, ҡысҡырыу, һайрау, илауҙан һ. б. туҡтау, шым булыу. *Йырламай тынып тороу. Өндәшмәй тынып ҡалыу.* **2.** Хәрәкәт итеүҙән, эшләүҙән, йөрөүҙән туҡтау. *Мотор тынды. Сәғәт тынды.* **3.** Көсө кәмеп баҫылыу, тымыу (ел-ямғырға ҡарата). *Ел тынды. Ямғыр тынды.* **4.** Һуғыш, алыш, дау кеүек күренештәргә бәйле эш-хәрәкәттәр баҫылыу йәки ваҡытлыса туҡталып тороу. *Атыш тынды. Һуғыш тынды.*

**тыныш** *и.* Эштең, һүҙҙең һ. б. барышында аҙ ғына ваҡытҡа яһалған туҡталыш. *Тыныш яһау.* ♦ **Тыныш билдәһе** *грам.* Һөйләмдәге мәғәнә айырымлыҡтарын билдәләгән график тамға.

**тыңлау (тыңла-)** *ҡ.* **1.** Тауышҡа, һүҙгә ҡолаҡ һалыу. *Йыр тыңлау. Радио тыңлау. Тыңлап тороу.* **2.** Эске ағзаның эшен прибор аша ҡолаҡ һалып тикшереү. *Йөрәкте тыңлау. Үпкәне тыңлау.* **3.** Ҡушҡанды, үтенесте үтәү. *Һүҙ тыңлау. Бала йомошто тыңламаны.*

**тырма** *и.* **1.** Бесән йыя, түтәл йомшарта торған оҙон һаплы, эре тешле ҡорал. *Ағас тырма. Тимер тырма.* **2.** Һөргән ерҙе йомшарта торған ауыл хужалығы ҡоралы. *Ат тырмаһы. Трактор тырмаһы.* **3.** Шул ҡорал менән ер эшкәртеү эше. *Тырмаға сығыу.*

**тырматыу (тырмат-)** *ҡ.* **1.** Ҡул тырмаһы менән бесән йыйыу йәки ер йомшартыу. *Кәбән төбөн тырматыу. Түтәлде тырматыу.* **2.** Һөргән ерҙе йомшартыу. *Арҡырыға тырматыу.*

**тырнаҡ (тырнағы)** *и.* **1.** Бармаҡ осон өҫкө яҡтан ҡаплап үҫкән мөгөҙ матдә. *Аяҡ тырнағы. Ҡул тырнағы. Еткән тырнаҡ.* **2.** Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың бармаҡ остарына кәкрәйеп үҫкән мөгөҙ матдә. *Айыу тырнағы. Бесәй тырнағы. Бөркөт тырнағы.* **3.** Бағанаға һ. б. менеү өсөн аяҡҡа кейә торған ураҡ һымаҡ кәкре ҡорал. *Тимер тырнаҡ кейеп бағанаға үрләү.*

**тырнау (тырна-)** *ҡ.* **1.** Тырнаҡ менән ҡырыу, ышҡыу. *Башты тырнау. Елкәне тырнау.* **2.** Тырнаҡ менән эләктереп йыртыу, тырнаҡты батырып һыҙырыу. *Тырнап ҡанатыу. Бесәй тырнаған урын.* **3.** Аяҡ менән ерҙе тибеп соҡоу (ҡош-ҡорт, хайуандарға ҡарата). *Ерҙе тырнай-тырнай тибенеү.*

**тырр** *ымл.* Атты туҡтатырға теләгәндә әйтелә.

**тырыз** *и.* Ҡапҡаслап, бауҙан тотҡа тағып, туҙҙан яһаған һауыт. *Тырызға еләк тиреү. Тырыз яһау.*

**тырыш** *с.* Һәр эште лә бөтә күңелен биреп ихлас эшләй торған. *Донъя көтөүгә тырыш кеше. Уҡыуға тырыш бала. Эшкә тырыш булыу.*

**тырышлыҡ (тырышлығы)** *и.* Эшкә булған ныҡышмалыҡ, ихласлыҡ. *Тырышлыҡ күрһәтеү.*

**тырышыу (тырыш-)** *ҡ.* Тырышлыҡ күрһәтеү. *Тырышып уҡыу. Тырышып эшләү.*

**тыуған** *с.* Тыуып үҫкән һәм йәшәгән. *Тыуған ауыл. Тыуған ил. Тыуған төйәк.*

**тыуыу (тыу-)** *ҡ.* **1.** Донъяға килеү, донъялыҡта йәшәй башлау. *Бала тыуҙы.* **2.** Күңелдә барлыҡҡа килеү, уяныу (уй хис-тойғоға ҡарата). *Ихтирам тыуҙы. Һорау тыуҙы.* **3.** Күк йөҙөнә күтәрелеү, ҡалҡыу (күк есемдәренә ҡарата). *Ай тыуҙы.* **4.** Башланыу (ай, көн, йыл миҙгелдәренә ҡарата). *Сентябрь тыуҙы. Яңы көн тыуҙы.*

**тыш** *и.* **1.** Нимәнелер бысраныуҙан, туҙыуҙан һаҡлау, йылылыҡ һ. б. өсөн өҫтән ябып, ҡаплап торған көн. *Буҫтау тыш. Күн тыш. Китап тышы.* **2.** Эске яҡҡа ҡаршы яҡ, ниҙеңдер өҫтө, йөҙ яғы. *Конверт тышы. Һауыттың тышы биҙәкле.* **3.** Йорт, өй эсенән ситтә булған урын; асыҡ һауа, урам. *Тыштан бикләү. Тышта тороп ҡалыу. Тышҡа сығыу.*

**тышау**[1] **(тыша-)** *ҡ.* Ситкә китмәһен өсөн, малдың ике аяғын, ара ҡалдырып, ҡуша бәйләү. *Атты тышау. Дүрт аяғын да тышау.*

**тышау**[2] *и.* Малды тышай торған бау. *Ҡайыш тышау. Сүс тышау. Ҡыҫҡа тышау.*

**тышҡы** *с.* **1.** Өҫтән ҡаплап торған, көпләнгән; өҫкө. *Тышҡы кейем.* **2.** Нәмәнең өҫкө йөҙөнә мөнәсәбәтле. *Тышҡы матурлыҡ. Тышҡы үҙгәреш.* **3.** Сит ил менән аралашыуға бәйле. *Тышҡы баҙар. Тышҡы сауҙа.*

**тышлау (тышла-)** *ҡ.* Тыш ҡуйыу, тышлыҡ кейҙереү. *Китап тышлау. Күн менән тышлау.*

**тышлыҡ (тышлығы)** *и.* Ниҙелер тышлауға, көпләүгә тәғәйенләнгән нәмә. *Китап тышлығы. Тун тышлығы.*

**тәбиғи** *с.* **1.** Булмышы, сығышы менән тәбиғәткә бәйле, кеше тарафынан эшләнмәгән; яһалма түгел. *Тәбиғи аҙыҡ. Тәбиғи газ. Тәбиғи көтөүлек.* **2.** Өйрәнелгән даими тормошҡа бәйле; ғәҙәттәге, ғәҙәти. *Тәбиғи хәл. Тәбиғи эш.*

**тәбиғәт** *и.* **1.** Кешене уратып алған матди донъя, ер йөҙөндәге кеше эшмәкәрлегенән тыш булған бөтә төр нәмә һәм күренеш. *Тәбиғәт донъяһы.* **2.** Үҙенә айырым үҙенсәлектәре булған билдәле бер урын һәм шул урынға хас ер-һыу шарттары, хайуан һәм үҫемлектәр донъяһы. *Ҡышҡы тәбиғәт. Урал тәбиғәте.* **3.** Кешенең булмышына хас, тыумыштан килгән сифаттар. *Йом-*

*шаҡ тәбиғәтле кеше. Ҡаты тәбиғәтле. Ҡырыҫ тәбиғәтле.* ♦ **Тәбиғәт белеме** тәбиғәт күренештәрен өйрәнә торған фән.

**тәгәрләү (тәгәрлә-)** *ҡ.* **1.** Үҙ күсәре тирәһендә әйләнә-әйләнә билдәле бер йүнәлештә хәрәкәт итеү, тәгәрләү (түңәрәк, йомро нәмәләргә ҡарата). *Тәгәрмәс тәгәрләй. Тәгәрләп китеү.* **2.** Тамсы-тамсы булып ағып төшөү (тир, күҙ йәшенә ҡарата). *Бит буйлап күҙ йәштәре тәгәрләй.*

**тәгәрмәс** *и.* **1.** Арба, автомобиль, вагон һ. б. нәмәләрҙе тәгәрләтеп хәрәкәткә килтереү өсөн, уларҙың күсәренә кейҙерелгән көпсәкле түңәрәк ҡулайлама. *Алғы тәгәрмәс. Артҡы тәгәрмәс. Вагон тәгәрмәсе.* **2.** Төрлө механизмдарҙы әйләндереп хәрәкәткә килтерә торған түңәрәк ҡулайлама. *Тешле тәгәрмәс. Тирмән тәгәрмәсе.*

**тәгәрәтеү (тәгәрәт-)** *ҡ.* **1.** Түңәрәк, йомро нәмәне әйләндереп хәрәкәт иттереү. *Туп тәгәрәтеп уйнау.* **2.** Аяҡтан йығыу, ҡолатыу. *Тәгәрәтә һуғыу.*

**тәгәрәү (тәгәрә-)** *ҡ.* **1.** Үҙ күсәре тирәһендә әйләнә-әйләнә билдәле бер йүнәлештә хәрәкәт итеү, тәгәрләү (түңәрәк, йомро нәмәләргә ҡарата). *Тәгәрмәс тәгәрәй. Таш тау аҫтына тәгәрәне.* **2.** Тамсы-тамсы булып ағып төшөү, тәгәрләү (тир, күҙ йәшенә ҡарата). *Борсаҡ-борсаҡ тир тәгәрәй.* **3.** Аяҡтан ауыу; ҡолау, йығылыу. *Тәгәрәп китеү. Тәгәрәп төшөү.*

**тәҙрә** *и.* Яҡтылыҡ төшһөн, һауа инһен өсөн, ҡоролма стенаһына эшләнгән уйым һәм шул уйымға ҡуйылған ҡыҫанлы быяла. *Асмалы тәҙрә. Вагон тәҙрәһе. Тәҙрә быяланы. Тәҙрә төбө. Тәҙрә уйыу. Тәҙрәнән ҡарау.*

**тәжрибә** *и.* **1.** Тормошта, эштә үҙләштерелгән белем һәм күнекмәләр йыйылмаһы. *Алдынғы тәжрибә. Бай тәжрибә. Тәжрибә туплау. Тәжрибә уртаҡлашыу.* **2.** Берәй төрлө күренеште тикшереү һәм өйрәнеү өсөн билдәле бер шарттарҙа үткәрелгән һынау. *Химик тәжрибә. Тәжрибә яһау. Тәжрибәнән сыҡҡан һығымта.*

**тәжрибәле** *с.* Берәй эш өлкәһендә тәжрибәһе, эш күнекмәһе күп булған. *Тәжрибәле табип. Тәжрибәле уҡытыусы.*

**тәкмәс: тәкмәс атыу** баш аша әйләнеү. *Тәкмәс атып уйнау.*

**тәкә** *и.* Һарыҡ-кәзәнең иркәге. *Көйҙөрөлгән тәкә. Кәзә тәкәһе.*

**тәлгәш**[1] *и.* Бер һуҡталағы емеш суғы, бер һабаҡтағы суҡ япраҡ йәки сәскә. *Балан тәлгәше. Миләш тәлгәше. Сәскә тәлгәше.*

**тәлгәш**[2] *с.* Суҡланып торған емешле йәки япраҡлы; суҡ. *Тәлгәш ҡайын. Тәлгәш муйыл.*

**тәлмәрйен** *и.* Артҡы оҙон аяҡтары ерҙә һикереп йөрөүгә яраҡлашҡан, ҡойроҡһоҙ ер-һыу йәнлеге. *Йәшел тәлмәрйен. Һары тәлмәрйен. Ҡара тәлмәрйен.*

**тәм** *и.* **1.** Нәмәнең телгә беленгән үҙенсәлекле сифаты. *Бал тәме. Һөт тәме. Әсе тәм. Тәм һиҙеү органдары.* **2.** *күсм.* Ниҙер биргән яҡшы хис; ләззәт. *Тормош тәме. Эштән тәм табыу.*

**тәмле** *с.* Тәме яҡшы, йәнгә хуш. *Тәмле аш. Тәмле еҫ. Тәмле сәй. Тәмле һыу.*

**тәмләткес** *и.* Аш-һыуға үҙенсәлекле тәм йәки еҫ биреү өсөн ҡушылған нәмә (борос, ҡорот, лавр япрағы, ҡәнәфер һ. б.). *Итте тәмләткестәр һалып быҡтырыу.*

**тәмләү (тәмлә-)** *ҡ.* **1.** Яҡшы тәм өҫтәү, тәмле итеү. *Шәкәр һалып тәмләү.* **2.** Ауыҙға алып тәмен тикшереү. *Тәмләп ҡарау.* **3.** Хәл ҡылымдың **-п** формаһында аш-һыуҙың тәмен белеп, ләззәтләнеп ашағанды, берәй эштең ләззәтен табып башҡарғанды белдерә. *Тәмләп йоҡлау. Тәмләп сәй эсеү. Тәмләп һөйләү.*

**тәм-том** *и. йыйн.* Төрлө тәмле-татлы аҙыҡ. *Тәм-том менән сәй эсеү.*

**тәмһеҙ** *с.* Тәме насар. *Тәмһеҙ еҫ.*

**тән** *и.* **1.** Кеше һәм башҡа бөтә йән эйәләренең тотош организмы, тышҡы ағзалары һәм кәүҙәһенән торған булмышы. *Тән ағзалары. Тән төҙөлөшө.* **2.** Кеше һәм хайуандарҙың кәүҙәһендәге мускул, ит. *Тығыҙ тән.* ♦ **Эҫе (йылы) тәнеңдә туҙһын** яңы кейемде ҡотлап әйтелә.

**тәнәфес** *и.* Йыйылыш, тамаша барғанда, шулай уҡ дәрес араһында ял итеү өсөн туҡтау, ял ваҡыты. *Ҙур тәнәфес. Тәнәфес иғлан итеү. Тәнәфескә сығыу.*

**тәңкә** *и.* **1.** Йөҙ тингә торошло аҡса берәмеге; һум. *Ҡағыҙ бер тәңкә. Биш тәңкә. Илле тәңкә. Ун тинлек тәңкә.* **2.** Ҡатын-ҡыҙҙың кейеменә, сәсенә төрлө көмөш аҡсанан йәки йылтыр ҡалайҙан тишеп таҡҡан биҙәүес. *Көмөш тәңкә. Тәңкә баҫыу.* **3.** Балыҡтың тәнен ҡаплаған түңәрәк ваҡ ҡабырсаҡтар рәүешендәге йылтыр йоҡа мөгөҙ матдә. *Ваҡ тәңкәле балыҡ.*

**тәпке** *и.* **1.** Үткер тимер башлы ер эшкәрткес ҡорал; кәтмән. *Тәпке менән утау.* **2.** Сапҡылап, ит-йәшелсә тураҡлай торған ҡыҫҡа һаплы айбалта рәүешендәге үткер ҡорал. *Кәбеҫтәне тәпке менән тапау.*

**тәпәй** *и.* Ҡоштарҙың һәм тырнаҡлы йәнлектәрҙең аяғы. *Ҡаҙ тәпәйе.* ♦ **Тәпәй баҫыу (тороу)** аяҡҡа баҫыу, тороу (балаға ҡарата).

**тәпәйләү (тәпәйлә-)** *ҡ.* **1.** Үҙ аяғы менән йөрөү (балаға ҡарата). **2.** *һөйл.* Йәйәү атлау. *Тәпәйләп барыу.*

**тәпән** *и.* **1.** Бал, май кеүек нәмә һалыу өсөн йыуан ағастың эсен соҡоп яһаған тәпәшәк һауыт. *Оло тәпән.* **2.** Шул тәпәнгә тиң үлсәү берәмеге. *Бер тәпән май.*

**тәпәш** *с.* Түбәндән юғарыға булған араһы бәләкәй; *киреһе* бейек. *Тәпәш өй. Тәпәш ҡойма. Тәпәш ултырғыс.*

**тәпәшәк** *с.* Бейеклек үлсәме бәләкәй (ғәҙәттә, сағыштырыу рәүешендә әйтелә). *Тәпәшәк өҫтәл. Тәпәшәк тау.*

**тәрбиә** *и.* **1.** Тейешле тәртипкә, әҙәп ҡағиҙәләренә, эш күнекмәләренә өйрәтеүгә, аң-белем биреүгә йүнәлтелгән эш. *Ғаилә тәрбиәһе. Мәктәп тәрбиәһе.* **2.** Кемгәлер йәшәү шарттары булдырып, үҙ ҡулында аҫрау, бағыу эше. *Ата тәрбиәһе күрмәү. Әсә тәрбиәһендә үҫеү.*

**тәрбиәле** *с.* Яҡшы тәрбиә алған, әҙәп белгән, тәртипле. *Тәрбиәле бала. Тәрбиәле булыу.*

**тәрбиәләү (тәрбиәлә-)** *ҡ.* **1.** Тейешле тәртипкә, әҙәп ҡағиҙәләренә, эш күнекмәләренә өйрәтеү, аң-белем биреү. *Йәш быуынды тәрбиәләү. Эшкә һөйөү тәрбиәләү.* **2.** Кемгәлер йәшәү шарттары булдырып, аҫрау, хәстәрлек күрһәтеү. *Тәрбиәләп үҫтереү. Алты бала тәрбиәләү.*

**тәрбиәсе** *и.* Тәрбиә эше менән шөғөлләнгән кеше. *Балалар тәрбиәсеһе. Тәрбиәсе булып эшләү.*

**тәрбиәһеҙ** *с.* Әҙәп, тәртип ҡағиҙәләренә буйһонмаған, насар тәрбиәләнгән. *Тәрбиәһеҙ бала.*

**тәржемә** *и.* **1.** Бер телдән икенсе телгә әйләндереү эше. *Тәржемә менән шөғөлләнеү.* **2.** Бер телдән икенсе телгә әйләндерелгән яҙма текст. *Китаптың тәржемәһе. Мәҡәләне рус теленә тәржемә итеү.*

**тәржемәләү (тәржемәлә-)** *ҡ.* Бер телдән икенсе телгә күсереү, тәржемә итеү. *Әҫәрҙе тәржемәләү.*

**тәрилкә** *и.* Йәйенке һай һауыт; таштабаҡ. *Таш тәрилкә. Ваҡ тәрилкә. Эре тәрилкә.*

**тәртип (тәртибе)** *и.* **1.** Талапҡа ярашлы таҙа, төҙөк булған, йыйнаҡ, яҡшы хәл. *Бүлмәлә тәртип булдырыу.* **2.** Эштә, тормошта урын алған билдәле бер ҡағиҙә, үтәлеше мотлаҡ һаналған норма. *Эске тәртип. Тәртипкә буйһоноу. Тәртип урынлаштырыу.* **3.** Нимәнеңдер ҡуйылышындағы, торошондағы билдәле бер система, эҙмә-эҙлелек. *Алфавит тәртибе. Һөйләгән һүҙенең тәртибе юҡ.* **4.** Ниҙелер башҡарыу, үтәү алымы, ҡағиҙәһе, ысулы. *Йыйылыш тәртибе. Уйындың тәртибе. Эш тәртибе.*

**тәртипле** *с.* Үҙ-үҙен тотоуҙа дөйөм ҡағиҙәгә буйһонған, яҡшы ҡылыҡлы. *Тәртипле бала. Тәртипле булыу.*

**тәртипһеҙ** *с.* **1.** Тейешле талапты үтәмәгән, дөйөм ҡағиҙәгә буйһонмаған, насар ҡылыҡлы. *Тәртипһеҙ бала. Тәртипһеҙ уҡыусы. Тәртипһеҙ булыу.* **2.** Тейешле тәртипте һаҡламаған, буталсыҡ. *Тәртипһеҙ эш.*

**тәртә** *и.* Арба-сананың екке малды егә торған оҙон ағасы. *Арба тәртәһе. Сана тәртәһе. Тәртә башы. Тәртә төбө. Тәртә һыныу.* ♦ **Ерек тәртә** үпкәсел, үсексән кешегә ҡарата әйтелә.

**тәрән** *с.* **1.** Өҫкө кимәлдән, өҫкө ситенән төпкә тиклемге ара үлсәме ҙур булған; *киреһе* һай. *Тәрән баҙ. Тәрән күл. Тәрән соҡор.* **2.** Бик ныҡ алынған (һулыш, тынға ҡарата). *Тәрән һулыш. Тәрән итеп тын алыу.* **3.** *күсм.* Эстәлеге менән бай, ныҡлы, төплө. *Тәрән аҡыл. Тәрән белем. Тәрән мәғәнә.* **4.** *күсм.* Юғары дәрәжәле; бик көслө, ныҡ. *Тәрән ихтирам. Тәрән ҡайғы. Тәрән тойғо.*

**тәү** *р.* **1.** Беренсе мәртәбә. *Тәү барғанда. Тәү килгән саҡта. Тәү күргәндәй.* **2.** Ниндәйҙер эштән элек, башта; тәүҙә. *Иң тәү һаулыҡ һорашты.*

**тәүге** *с.* **1.** Ғәмәлләшеүҙә ваҡыт яғынан беренсе булған. *Тәүге йыл. Тәүге көн. Тәүге ҡырау. Тәүге тапҡыр.* **2.** *р. мәғ.* Беренсе мәртәбә. *Тәүге күреү. Тәүге осрашыу.*

**тәүҙә** *р.* Нимәнеңдер башланған ваҡытында, ниндәй ҙә булһа бер эштән элек, тәү мәлдә, башта. *Тәүҙә белем алырға кәрәк. Тәүҙә мине саҡырттылар.*

**тәүлек (тәүлеге)** *и.* 24 сәғәткә тиң булған ваҡыт үлсәү берәмеге; көн һәм төндө эсенә алған ваҡыт араһы. *Тәүлек әйләнәһенә эшләү.*

**тәхет** *и.* Хөкүмәт эштәрен башҡарғанда батша йәки король ултырыу өсөн ҡалҡыу урынға ҡуйылған аҫыл биҙәкле ултырғыс һәм шуның символы. *Алтын тәхет. Тәхеттә ултырыу. Тәхеттән төшөү.*

# У

**уба** *и.* Бәләкәй генә түмәләс тау, ҡалҡыу ер. *Боронғо убалар. Убаны ҡаҙыу.*

**убыр** *и.* **1.** *миф.* Төрлөсә яуызлыҡ ҡыла торған ҡурҡыныс әбей ҡиәфәтендәге яуыз мифик зат, мәскәй. *Убыр баҫтырған.* **2.** *күсм.* Туймаҫ тамаҡ, күп ашаусы (кеше, хайуан, ҡош-ҡортҡа ҡарата).

**уҙғарыу (уҙғар-)** *ҡ.* **1.** Эргәһенән, алдына йәки берәй нәмә аша үткәреү. *Алға уҙғарыу. Ишектән уҙғарыу.* **2.** Берәй хәл-ваҡиғаны кисереү; үткәреү. *Ауырыуҙы уҙғарып ебәреү. Ҡаты һыуыҡты уҙғарып ебәреү.* **3.** Ниндәйҙер эш, сараны һ. б. тормошҡа ашырыу, башҡарыу; үткәреү. *Байрам уҙғарыу. Йыйылыш уҙғарыу.*

**уҙыу (уҙ-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер эргәһенән, ашаһынан йәки артҡа ҡалдырып үтеп китеү. *Ишектән уҙыу. Машина уҙып китте. Эргәһенән уҙыу.* **2.** Хәл-ваҡиға, ваҡыт үтеү. *Йәшенле ямғыр уҙған. Төн уҙҙы.* **3.** Күпмелер ваҡыт арауығы үтеү. *Аҙна уҙҙы. Йәше уҙған.*

**уҙыш** *и. спорт.* Ат сабыштырыу, йүгереү һ. б. ярышта һәр төркөмдөң айырым сығышы. *Юртаҡтар уҙышы. Уҙышта ҡатнашыу.*

**ужым** *и.* Көҙ сәселгән иген. *Ужым ашлығы. Ужым арышы. Ужым баҫыуы.*

**уй**[1] *и.* Кеше аңын биләп торған фекер. *Уйға батыу. Уйҙы белдереү. Уй уйлау.*

**уй**[2] *и.* Һуҙылып киткән түбән ер; уйһыу, уяҙ. *Тауҙар араһындағы уй. Уй буйлап барыу.*

**уйламағанда** *р.* Абайламаҫтан, көтмәгәндә. *Уйламағанда килеп сығыу.*

**уйланыу (уйлан-)** *ҡ.* Үҙ алдына ниҙер уйлау; уйға батыу, уйға ҡалыу. *Уйланып йөрөү. Уйланып ултырыу.*

**уйлау (уйла-)** *ҡ.* Нимәлер тураһында уй кисереү, фекер йөрөтөү. *Оҙаҡ уйлау. Уйлап йөрөү. Уйлап эшләү.* ♦ **Бер уйлағанда (уйлаһаң)** *инш.* икенсе бер күҙлектән ҡарағанда, былай ҡарағанда **Уйлап сығарыу.** 1) булмағанды бар тип һөйләү; 2) яңылыҡ асыу.

**уйнау (уйна-)** *ҡ.* **1.** Төрлө-төрлө уйындар менән булыу. *Ҡурсаҡ уйнау. Туп уйнау.* **2.** Күңел асыу, шаярыу. *Ҡыҙҙар менән уйнау. Йәштәр уйнай.* **3.** Музыка ҡоралы менән шөғөлләнеү. *Гармунда уйнау. Ҡурай уйнау.*

**уйсан** *с.* Уйға бирелеүсән, күп уйлаусан. *Уйсан кеше. Уйсан күҙҙәр. Уйсан булыу.*

**уй-фекер** *и. йыйн.* Уйлаған бөтә уй һәм фекер. *Уй-фекер йөрөтөү.*

**уйһыу** *и.* Түбәнерәк булып ятҡан ҙур, иркен ер. *Уйһыуҙарҙа ята аҡ томан.*

**уйын** *и.* **1.** Күңелгә ҡыуаныс, йыуаныс бирә торған балалар шөғөлө. *Балалар уйыны. Ҡурсаҡ уйыны.* **2.** Спорт йәки хәрби күнекмә шөғөлө. *Волейбол уйыны. Футбол уйыны. Хәрби уйын.* **3.** Йырлау, бейеү, күңел асыу өсөн үткәрелгән йыйын. *Уйынға барыу. Уйынға сығыу.*

**уйын-көлкө** *и. йыйн.* Кәйеф асыу өсөн эшләнгән төрлө ҡыҙыҡ, мәрәкә. *Уйын-көлкө башланды. Уйын-көлкөгә әүәҫ.*

**уйынсыҡ (уйынсығы)** *и.* Балалар уйната торған нәмә, тәтәй. *Йомшаҡ уйынсыҡ. Уйынсыҡ һатып алыу.*

**уйыу (уй-)** *ҡ.* **1.** Кәрәкле ҙурлыҡта һәм формала тишек яһау. *Мәке уйыу. Тәҙрә уйыу.* **2.** Ни менәндер эҙ ҡалдырыу, соҡоу, ярыу. *Ташҡа уйып яҙыу.*

**укол** *и.* Тире аҫтына, венаға һ. б. ергә шприц менән ебәрелә торған дарыу. *Укол ҡаҙау. Укол һалдырыу.*

**укроп (укробы)** *и.* Тарау япраҡлы, һары сатыр сәскәле баҡса үләне (япрағы һәм орлоғо аш-һыуҙы тәмләтеү өсөн ҡулланыла). *Укроп орлоғо. Укроп үҫтереү.*

**уҡ**[1] **(уғы)** *и.* **1.** Янға ҡуйып ата торған төҙ нәҙек таяҡ. *Уҡ башағы. Уҡ атыу.* **2.** Тирмәнең көмбәҙендәге нәҙек таяҡтарҙың береһе. **3.** Күтәргес крандың әйләнеп торған оҙон өлөшө, шулай уҡ ауыр нәмәләрҙе күтәреү өсөн махсус яйланма. *Крандың уғы.* ♦ **Атҡан уҡ кеүек** бик тиҙ, шәп.

**уҡ**[2] **(үк)** *киҫ.* **1.** Эш-хәрәкәттең ваҡытын, урынын күрһәтә, оҡшашлыҡтарын билдәләй. *Бала саҡтан уҡ. Таңдан уҡ.* **2.** Алдындағы һүҙҙең мәғәнәһен йомшартып йәки көсәйтеп килә. *Яҡшы уҡ. Улай уҡ түгел.*

**уҡлау** *и.* Ҡамыр йәйә торған йомро таяҡ. *Уҡлау менән ҡамыр йәйеү.*

**уҡсы** *и.* Уҡ атыусы. *Мәргән уҡсы.*

**уҡытыусы** *и.* Уҡытыу эше менән шөғөлләнгән кеше. *Башҡорт теле уҡытыусыһы. Уҡытыусы булып эшләү.*

**уҡыу**[1] **(уҡы-)** *ҡ.* **1.** Яҙылғанды ҡысҡырып йәки үҙ алдыңа үҙләштереү, танышыу. *Китап уҡыу. Ҡысҡырып уҡыу.* **2.** Ниндәйҙер уҡыу йортонда уҡыусы булып, белем алыу, берәй һөнәргә эйә булыу. *Мәктәптә уҡыу. Икенсе класта уҡыу.*

**уҡыу**[2] **(уҡы-)** *и.* **1.** Яҙылғанды таныу, үҙләштереү өсөн булған күнекмә. *Уҡыу дәресе. Уҡыу китабы.* **2.** Белем алыу эше. *Уҡыуға барыу. Уҡыуға инеү. Уҡыуҙы тамамлау.*

**уҡыусы** *и.* **1.** Башланғыс йәки урта уҡыу йортонда уҡыған бала. *Алдынғы уҡыусы. Беренсе класс уҡыусыһы.* **2.** Китап, газета, журнал уҡыған кеше. *Шиғыр уҡыусы. Уҡыусылар конференцияһы.*

**ул** *и.* **1.** Ир бала (ата-әсәһенә ҡарата). *Оло улым. Кесе улдары.* **2.** Ил, халыҡтың ир затынан булған бер вәкиле. *Башҡорт улы. Ил улдары.*

**улай** *р.* Ниндәйҙер рәүешле. *Улай алдашма. Улай эшләмә.* ♦ **Улай икән** кешенең һүҙенә йәки хәленә һығымта яһаған һымаҡ иткәндә әйтелә.

**улайһа** *инш. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Улай булһа. *Улайһа, беҙ ҡуҙғалдыҡ.*

**улар (уларҙың, уларға, уларҙы, уларҙан, уларҙа)** *зат. а.* Хикәйәләүҙә күплек исемде алмаштырып килгән һүҙ. *Уларҙың апаһы. Улар ҡайтты. Уларҙы күрҙем.*

**ултырғыс** *и.* Бер кеше ултырыу өсөн эшләнгән урын. *Артлы ултырғыс. Ултырғысҡа ултырыу.*

**ултырыу (ултыр-)** *к.* **1.** Кәүҙә менән осаға терәлеп, берәй ергә урынлашыу. *Атҡа ултырыу. Ултырғысҡа ултырыу.* **2.** Ниндәйҙер эш башҡарыу өсөн йәтешләп урынлашыу. *Ашҡа ултырыу. Уҡыуға ултырыу.* **3.** Тәғәйен ерҙә булыу. *Мәжлестә ултырыу. Өйҙә ултырыу.* **4.** Йәшәр, торор өсөн төпләнеп урынлашыу. *Ауыл һыу буйында ултыра. Ырыу-ырыу булып ултырыу. Өй ултырған. Тамаҡҡа саң ултыра. Юшҡын ултыра.*

**умарта** *и.* Бал ҡорттары өсөн таҡтанан йәки түмәрҙе соҡоп яһалған оя. *Солоҡ умартаһы. Умарта баҙы.*

**умарталыҡ (умарталығы)** *и.* Умарталар торған урын. *Умарталыҡ тотоу. Умарталыҡта эшләү.*

**умартасы** *и.* Ҡорт ҡарау эше менән шөғөлләнгән кеше. *Умартасы булып эшләү. Умартасылар мәктәбе.*

**умырзая** *и.* Иртә яҙ сәскә ата торған тарау япраҡлы, эре сәскәле үлән. *Һары умырзая. Умырзая сәскәһе.*

**умыртҡа, умыртҡа һөйәге** *и.* Арҡа һөйәгенең бер өлөшө.

**университет** *и.* Төрлө тәбиғәт һәм йәмғиәт фәндәре буйынса айырым бүлектәре булған юғары уҡыу йорто. *Башҡорт дәүләт университеты. Университетта уҡыу.*

**уң** *с.* **1.** Һул яҡҡа ҡаршы яҡ. *Уң ҡул. Уң яҡ.* **2.** Тышҡы, өҫкө (тауар йәки кейемдә). *Күлдәктең уңы. Уң яғына әйләндереү. Тауарҙың уңы.*

**уңай**[1] *и.* **1.** Йәтешле, ярашлы хәл, осраҡ. *Уңайы тура килеү. Уңайы сығыу.* **2.** Ниндәйҙер эш-хәлгә мөнәсәбәтле шарт. *Байрам уңайы. Тыуған көн уңайы менән.*

**уңай**[2] *с.* Эш-хәрәкәт өсөн ярашлы; яйлы, йәтеш. *Уңай булыу. Уңай килеп тороу.*

**уңайлы** *с.* Эш-хәл өсөн ярашлы; яйлы, йәтешле, ҡулайлы. *Уңайлы шарттар. Юл йөрөү уңайлы.*

**уңайһыҙ** *с.* Эш-хәл өсөн ярашһыҙ; яйһыҙ, ҡулайһыҙ. *Уңайһыҙ ваҡыт. Уңайһыҙ ер.* **2.** *күсм.* Ауыр, ҡыйын, күңелһеҙ. *Уңайһыҙ хәлдә ҡалыу.*

**уңалыу (уңал-)** *к.* Тәндә яраланған, боҙолған урындың төҙәлеүе. *Аяғы уңалыу. Яра уңалыу.*

**уңған** *с.* Эшкә шәп; егәрле, эшсән. *Уңған бала. Уңған булыу.*

**уңдырышлы** *с.* Үҫемлекте яҡшы үҫтереү, уныш биреү сифатына эйә. *Уңдырышлы тупраҡ.*

**уңыу**[1] **(уң-)** *ҡ.* **1.** Яҡшы, изге ниәткә ирешеү. *Юл уңыу.* **2.** Мул булып үҫеү. *Еләк уңыу. Иген уңған.* **3.** Яҡшы сифатлы булып өлгөрөү. *Икмәк уңған. Ҡамыр уңа.*

**уңыу**[2] **(уң-)** *ҡ.* Тәүге асыҡ төҫтө юғалтыу. *Күлдәге уңған. Яулығым уңды.*

**уңыш** *и.* **1.** Эштә, тормошта ирешкән яҡшы һөҙөмтә. *Эштәге уңыштар. Уңышҡа ирешеү.* **2.** Иген, емеш-йәшелсәнән алынған мул йыйым. *Мул уңыш. Уңыш алыу.*

**уңышлы** *с.* **1.** Ыңғай, яҡшы һөҙөмтәле. *Уңышлы хеҙмәт. Уңышлы һунар.* **2.** Мул уңыш алына торған. *Уңышлы йыл. Уңышлы сорт.*

**упҡын** *и.* **1.** Текә ярлы бик тәрән соҡор. *Упҡын ситенән барыу.* **2.** Убып, тартып ала торған батҡыл урын. *Тәрән упҡын. Упҡындан сығыу.*

**ура** *ымл.* **1.** Һөжүмгә ташланғанда ҡысҡыра торған оран. *Ура тауыштары. Ура ҡысҡырыу.* **2.** Берәй нәмәгә шатланғанда, һоҡланғанда әйтелә. *Ура! Беҙҙең команда еңде.*

**ураҙа** *и.* Мосолмандарҙың билдәле бер ай йәки көндө иртә тандан ҡояш байығанса ашамай-эсмәй тороу йолаһы. *Ураҙа байрамы. Ураҙа тотоу.*

**ураҡ (урағы)** *и.* **1.** Ҡул менән иген, үлән ура торған ваҡ тешле кәкре эш ҡоралы. *Ураҡ һабы. Ураҡ менән урыу.* **2.** Иген урыу эше. *Ураҡ ваҡыты. Ураҡҡа төшөү.* ♦ **Ураҡ өҫтө** ашлыҡ урған ваҡыт.

**урам** *и.* Ике рәт булып теҙелеп ултырған өйҙәр аралығының һуҙымы. *Артҡы урам. Аҫҡы урам. Ауыл урамы.*

**уратыу (урат-)** *ҡ.* **1.** Тирә-яғын әйләндереү, тирәләй солғау. *Ишек алдын ҡойма менән уратыу.* **2.** Ҡамауға алыу; ҡамау. *Ҡаланы уратып алыу.* **3.** Эргәһенә барып етмәй, ситтән әйләнеү. *Ауылды уратып үтеү.*

**урау (ура-)** *ҡ.* **1.** Нимәнелер тирәләй әйләндереп сырмау. *Епте урау. Муйынға шарф урау.* **2.** Тирәләй әйләнеп сығыу, ҡыҙырып әйләнеү. *Башҡортостанды урап сығыу. Ауылды урап килеү.* **3.** Туранан үтмәй, ситтән әйләнеү. *Күперҙән урау. Урап үтеү.*

**урлау (урла-)** *ҡ.* Кешенекен йәшереп алып китеү; сәлдереү. *Иген урлау. Урлап алыу. Урлап байыу. Урлап тотолоу.*

**урман** *и.* Ҙур майҙанды алып торған ҡуйы эре ағаслыҡ. *Ҡуйы урман. Шыршы урманы.*

**урта** *и.* **1.** Берәй нәмәнең ике яҡ сит-ҡырҙарынан тигеҙерәк алыҫлыҡта ятҡан урын. *Иҙән уртаһы. Ҡала уртаһы.* **2.** Ваҡыт арауығының башы менән аҙағынан бер тигеҙерәк алыҫлыҡтағы мәл. *Аҙна уртаһы. Йәй уртаһы.*

**уртаҡ** *с.* Икәү йәки күмәк кеше өсөн дөйөм булған. *Уртаҡ мал. Уртаҡ шатлыҡ.*

**уртаҡлыҡ (уртаҡлығы-)** *и.* Уртаҡ, оҡшаш яҡ; дөйөмлөк. *Ҡараштар уртаҡлығы. Фекерҙәр уртаҡлығы.*

**уртансы** *с.* Өс баланың йәш буйынса икенсеһе. *Уртансы апай. Уртансы ул.*

**уртаса** *с.* **1.** Үлсәүе, миҡдары һ. б. буйынса урта кимәлдә булған. *Уртаса кимәл. Уртаса уңыш.* **2.** Яҡшы ла, насар ҙа түгел. *Уртаса билдәһе. Уртаса белем.*

**урын** *и.* **1.** Берәй нәмә алып торған ер. *Буш урын. Өй урыны.* **2.** Билдәле булған йәки ниҙер өсөн тәғәйенләнгән ер. *Аш урыны. Эш урыны.* **3.** Эш йәки ярыш буйынса тотҡан урын, әһәмиәт. *Етәксе урын. Яуаплы урын.* **4.** Йоҡлау өсөн кәрәкле түшәк. *Урын һалыу (йәйеү). Урын йыйыу.*

**урынлашыу (урынлаш-)** *ҡ.* **1.** Тороу, йәшәү йәки ваҡытлыса туҡтау өсөн урын алыу. *Ҡунаҡханаға урынлашыу. Яланда урынлашыу.* **2.** Ни менәндер шөғөлләнеү өсөн бер урынға инеү. *Уҡырға урынлашыу. Эшкә урынлашыу.*

**урынлы** *с.* **1.** Урыны тура килгән, кәрәкле ваҡытта булған. *Урынлы һүҙ.* **2.** Ҡалған, эшләгән берәй эш-хәрәкәткә ярашлы булған; хаҡлы. *Урынлы маҡтау. Урынлы шелтә.*

**урыу (ур-)** *ҡ.* Игенде урғыс менән сабып йәки ураҡ менән урып йыйып алыу. *Иген урыу. Урыу эштәре.*

**ус** *и.* **1.** Ҡулдың эс яғы. *Ус эсе. Усҡа йомарлау. Усҡа һалыу.* **2.** Шуның һыйышы менән билдәләнгән үлсәү берәмеге. *Бер ус көнбағыш. Берәр ус һалыу.*

**усаҡ (усағы)** *и.* Мейестең ҡаҙан аҫтына яғыла торған өлөшө. *Усаҡ аҫты. Усаҡҡа яғыу.*

**услау (усла-)** *ҡ.* Усҡа йомоу, усҡа алыу. *Услап алыу. Услап тотоу.*

**уҫаҡ (уҫағы)** *и.* Аҡһыл йәшел ҡабыҡлы, ялтыр түңәрәк япраҡлы эре ағас. *Аҡ уҫаҡ. Ҡара уҫаҡ. Уҫаҡ урманы.*

**уҫал** *с.* **1.** Үткер, ҡаты тәбиғәтле. *Уҫал кеше. Уҫал эт. Уҫал булыу.* **2.** Хаслыҡҡа, яуыҙлыҡҡа ҡоролған, яуыҙлыҡ менән һуғарылған. *Уҫал уй. Уҫал телле.*

**ут** *и.* **1.** Янғандан сыҡҡан эҫе ялҡын. *Ҡыҙыу ут. Ут тоҡандырыу. Ут яғыу.* **2.** Шәм, сыраҡ яҡтыһы. *Шәмгә ут алыу. Электр уты.*

**утау (ута-)** *ҡ.* Игенде, йәшелсәне һ. б. ҡый үләненән таҙартыу. *Ашлыҡ утау. Картуф утау. Утап сығыу.*

**утрау** *и.* Бөтә яҡтан һыу менән уратылған ҡоро ер. *Бәләкәй утрау. Утрауҙа йәшәү.*

**утын** *и.* Яғыу өсөн әҙерләнгән ағас. *Ҡайын утын. Ҡоро утын.*

**уфтаныу (уфтан-)** *к.* Ауыр хис-тойғоно уф итеп тышҡа сығарыу. *Ауыр уфтаныу.*

**уяныу (уян-)** *к.* **1.** Йоҡо хәленән арынып, уяу хәлгә килеү. *Йоҡонан уяныу. Иртә уяныу.* **2.** *күсм.* Барлыҡҡа килеү, тыуыу (аңға, тойғоға ҡарата). *Тойғо уяныу. Шик уяныу.*

**уяу** *с.* Йоҡо хәленән арынған; йоҡоһоҙ. *Бала уяу ине. Төндө уяу үткәреү. Уяу ятыу.*

# Y

**үбеү (үп-)** *к.* Йылы тойғо белдереп, ирен тейҙереп һурыу. *Биттән үбеү. Ирендән үбеү.*

**үгеҙ** *и.* Айыры тояҡлы эре хайуандарҙың иркәге. *Нәҫел үгеҙе. Тоҡом үгеҙе.*

**үгәй** *с.* Үҙенеке булмаған, ҡан яғынан ят (атай, әсәй, балаға ҡарата). *Үгәй атай. Үгәй әсәй. Үгәй бала. Үгәй ҡулына ҡалыу.*

**үҙ-ара** *с.* Бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәттәш. *Үҙ-ара бәйләнеш. Үҙ-ара дуҫлыҡ.*

**үҙгәреү (үҙгәр-)** *к.* **1.** Башҡа бер төрлөгә, икенсе төрлөгә әйләнеү. *Тормош үҙгәрҙе. Төҫ үҙгәреү. Көндөң үҙгәреүе. Халыҡ-ара хәлдең үҙгәреүе.* **2.** *грам.* Килеш, заман, зат, һан һ. б. грамматик ялғауҙарҙы ҡабул итеү. *Зат менән үҙгәреү. Килеш менән үҙгәреү.*

**үҙенсәлек (үҙенсәлеге)** *и.* Бер нәмәнең йәки кешенең үҙенә генә хас сифаты. *Милли үҙенсәлек. Яҡшы үҙенсәлектәргә эйә булыу. Холоҡ үҙенсәлеге.*

**үҙәк (үҙәге)** *и.* **1.** Үҫемлектең йәки ниҙең дә булһа иң уртаһынан һабаҡ йәки һабаҡ һымаҡ булып үткән өлөшө. *Ағастың үҙәге. Кәбеҫтәнең үҙәге.* **2.** Ниндәйҙер бер нәмәнең йәки майҙандың урталығындағы урын. *Ҡаланың үҙәге. Майҙан үҙәге. Үҙәк баҙар.* ♦ **Үҙәккә үтеү** 1) ныҡ әрнетеү; 2) ныҡ йонсотоу, биҙрәтеү. **Үҙәк өҙөлөү** үҙенә урын таба алмай болоҡһоу.

**үҙән** *и.* **1.** Һыу аҡҡан йырын, һыу юлы. *Иҫке үҙән. Тәрән үҙән. Йылға үҙәне.* **2.** Йылғаның ике яғынан һуҙылған түбән ер. *Тау үҙәне. Үҙән буйы. Үҙән еле.*

**үкенесле** *с.* Үкенеү тойғоһо уятҡан. *Үкенесле ғүмер. Үкенесле яҙмыш. Көн үкенесле үтте.*

**үкенеү (үкен-)** *ҡ.* Ниндәйҙер эш-хәлдең булған йәки булмағанына ҡарата риза булмау, бошоноу хисе кисереү. *Ебәргән хаталарға үкенеү. Үкенеү тойғоһо.*

**үксә** *и.* **1.** Аяҡтың бәкәлдән түбәнге артҡы өлөшө. *Үксә ауыртыу.* **2.** Аяҡ кейеменең артҡы табанының бейегәйтеп ҡуйылған өлөшө. *Бейек үксә. Тәпәшәк үксәле туфли.* ♦ **Үксә ялтыратыу (күтәреү)** тиҙ генә китеү; ҡасыу. **Үксәһе ергә теймәү** бик шәп йүгереү, һыпыртыу.

**үле** *с.* Тере булмаған, үлгән, йәнһеҙ; *киреһе* тере. *Үле балыҡ. Үле хәбәре. Үлене терелтеү.* ♦ **Ни үле, ни тере түгел** ныҡ ҡурҡып, ҡатып ҡалған хәлдә булыу.

**үлек** *и.* Үлгән кешенең кәүҙәһе; мәйет. *Үлекте күмеү.*

**үлем** *и.* Йән эйәләренең тереклек итеүҙән туҡтаған хәле; үле хәл. *Аңһыҙ үлем. Ваҡытһыҙ үлем. Фажиғәле үлем. Үлем ғазабы.*

**үлеү (үл-)** *ҡ.* **1.** Тереклек итеүҙән, йәшәүҙән туҡтау; йән биреү. *Астан үлеү. Ауырып үлеү. Ваҡытһыҙ үлеү.* **2.** Бик ныҡ яратыу, йәнеңде бирергә әҙер булыу. *Бала өсөн үлеү. Кеше өсөн үлеп тороу. Эш тип үлеү.*

**үлсәү (үлсә-)** *ҡ.* **1.** Төрлө ҡорамал менән ниҙең дә булһа оҙонлоғон, дәүмәлен, миҡдарын, майҙанын билдәләү. *Ауырлыҡты үлсәү. Ер үлсәү. Оҙонлоҡто үлсәү. Көстө үлсәү.* **2.** *күсм.* Төрлө яҡтан уйлап самалау. *Үлсәп һөйләү.*

**үлтереү (үлтер-)** *ҡ.* **1.** Тереклек итеүҙән, йәшәүҙән туҡтатыу; йәнен алыу. *Атып үлтереү. Үлтереп китеү.* **2.** *күсм.* Хис-тойғо, дәрт, илһамды юҡ итеү. *Кеше һүҙе кеше үлтерә.* (Әйтем.) *Ҡарашы менән үлтерә.*

**үлән** *и.* Йыл һайын яңынан шытып үҫә торған йәшел үҫемлек. *Йәшел үлән. Күп йыллыҡ үлән. Дарыу үләне. Ҡый үләне. Үлән сәсеү.*

**үңәс** *и.* **1.** Муйындың алғы яғы. *Үңәс тамырҙары. Үңәскә йәбешеү.* ♦ **Ҡыҙыл үңәс** ашҡаҙанға төшкән аш юлы.

**үпкә[1]** *и.* Кеше, хайуан, ҡош-ҡорттарҙың күкрәк ҡыуышлығында урынлашҡан тын алыу ағзаһы. *Уң яҡ үпкә. Һул үпкә. Үпкә шешеү. Үпкә ауырыуы.* ♦ **Ауыҙын асһа, үпкәһе күренә** бик ярлы кешегә ҡарата әйтелә.

**үпкә[2]** *и.* Берәй нәмәгә йәберһенеү, рәнйеү тойғоһо. *Үпкә белдереү. Үпкә һаҡлау. Үпкә һүҙе әйтеү.*

**үпкәләү (үпкәлә-)** *ҡ.* Үпкә[2] тойғоһо кисереү, үпкә тотоу; рәнйеү. *Тиҙ генә үпкәләп барыу. Миңә үпкәләмә. Үпкәләп йөрөү.*

**үр** *и.* **1.** Ҡалҡыу урынға күтәрелгән ер. *Текә үр. Тау үренә күтәрелеү. Үрҙе менеү.* **2.** Юғарғы тараф; өҫ. *Ҡулды үргә күтәреү. Үргә ҡарау. Үрҙән ҡолау.* **3.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлешенә ҡарата яҡ. *Ауылдың үр яғы. Йылға үре.*

**үреү (үр-)** *ҡ.* Бер нисә тындан төрлөсә ишеп, салыштырып бер нәмә яһау. *Ау үреү. Мурҙа үреү. Сабата үреү. Сәс үреү.*

**үрләү (үрлә-)** *ҡ.* Үргә күтәрелеү; менеү. *Тауға үрләү. Үргә үрләү. Һауаға үрләү.*

**үрмәксе** *и.* Ау үреп, бөжәк тотоп туҡлана торған быуынтыҡ аяҡлы ваҡ йән эйәһе. *Үрмәксе ауы. Үрмәксе ептәре.* ♦ **Үрмәксенән күрмәксе** берәүһенән күреп, шуға эйәреп эшләгәндә әйтелә.

**үрмәләү (үрмәлә-)** *ҡ.* **1.** Ҡул-аяҡтар менән тотоноп, йәбешеп өҫкә менеү. *Ағасҡа үрмәләү. Ҡаяға үрмәләү. Тауға үрмәләү.* **2.** Уралып, сырмалып үргә үрләү (үҫемлеккә ҡарата). *Гөлдәр үрмәләне.*

**үрнәк (үрнәге)** *и.* **1.** Яҡшы холоҡ-ғәҙәт, эш-ҡылыҡтың миҫалы; өлгө. *Батырлыҡтың үрнәге. Үрнәк алыу. Үрнәк булыу. Үрнәк күрһәтеү. Үрнәк мәктәп.* **2.** Бер үк төрлө нәмәләрҙең араһынан алынған дана; өлгө. *Аҫыл таш үрнәктәре.*

**үрсетеү (үрсет-)** *ҡ.* Кешене, мал һәм ҡош-ҡортто яңы тыуғандары иҫәбенә ишәйтеп, тәрбиәләп үҫтереү. *Ат үрсетеү. Балыҡ үрсетеү. Мал үрсетеү.*

**үрсеү (үрсе-)** *ҡ.* Тыуыу, донъяға яралыу менән һан яғынан артыу, ишәйеү. *Балыҡ үрсей. Ҡош-ҡорт үрсей. Орлоҡтан үрсеү.*

**үртәү (үртә-)** *ҡ.* **1.** Ут төртөп яндырыу. *Сүп үртәү. Һаламды үртәү. Утта үртәү.* **2.** *күсм.* Күңелгә ятмаған эш-ҡылыҡ менән йәнен көйҙөрөү; әсендереү, көйөндөрөү. *Йөрәкте үртәү. Йәнде үртәү.*

**үрә** *р.* Туп-тура үргә табан, үргә күтәрелгән хәлдә. *Үрә ҡатыу. Башты үрә сөйөү.* ♦ **Сәс үрә тороу** ҡурҡыштан ҡот осоу.

**үс** *и.* Яманлыҡҡа яманлыҡ менән яуап биреү теләге. *Үс тотоу. Үс һаҡлау.* ♦ **Үс алыу (ҡайтарыу)** яманлыҡҡа ҡаршы яманлыҡ эшләү.

**үсегеү (үсек-)** *ҡ.* Кемдеңдер һүҙенә йәки эш-ҡылығына асыуланыу, үпкәләү. *Үсегеп йөрөү. Үсегеп эшләү. Үсеккән кеүек. Беткә үсегеп, тунын утҡа яҡҡан.* (Әйтем.)

**үсекләү (үсеклә-)** *ҡ.* Төрлө һүҙ йәки ҡыланыш менән үртәү. *Малайҙы үсекләү. Телен сығарып үсекләне.*

**үсексән** *с.* Һүҙ күтәрмәй, шаяртҡанды ла аңламай, үсегеп барыусан. *Үсексән бала. Үсексән кеше.*

**үҫемлек (үҫемлеге-)** *и.* Һауа һәм тупраҡтың төрлө матдәләре менән туҡланып, органик матдәләр булдырыуға һәләтле организм. *Бер йыллыҡ үҫемлек. Күп йыллыҡ үҫемлек. Ҡырағай үҫемлектәр. Үҫемлектәр донъяһы.*

**үҫенте** *и.* **1.** Үҫемлектең үҫеп сыҡҡан яңы яралғыһы. *Үҫентеләр шытып сыҡты. Яңы үҫентеләр күренде.* **2.** Күсереп ултыртыу өсөн махсус үҫтерелгән йәш үҫемлек. *Алма үҫентеләре. Ике йыллыҡ үҫентеләр. Йәш үҫентеләр.*

**үҫеү (үҫ-)** *ҡ.* **1.** Тереклек итеү барышында артыу, ҙурайыу, бейегерәк, оҙонораҡ, ҙурыраҡ булыу (кеше, хайуан, үҫемлек һ. б. ҡарата). Ашлыҡ үҫә. *Буйға үҫеү.* **2.** Күләм, дәүмәл, һан, кимәл, дәрәжә яғынан артыу. *Байлыҡ үҫә. Вазифа үҫеү. Шатлыҡ үҫә. Рух үҫә. Хужалыҡ үҫә. Хаҡтар үҫә.*

**үҫмер** *и.* Үҫеп, етеп килгән бала. *Йәш үҫмер. Үҫмерҙәр клубы. Үҫмер ҡыҙ. Үҫмер малай.*

**үҫтереү (үҫтер-)** *ҡ.* **1.** Ҡарап, тәрбиәләп, кемдең йәки ниҙеңдер тейешле кимәлгә үҫеп етеүен тәьмин итеү. *Балалар үҫтереү. Ҡаҙ үҫтереү. Сәскәләр үҫтереү. Мыйыҡ үҫтереү.* **2.** Күләм, дәүмәл һәм кимәл, дәрәжә, сифат яғынан арттырыу, күтәреү. *Белемде үҫтереү. Талантты үҫтереү.*

**үт** *и.* Бауырҙа эшләп сығарылған, эсәккә барған йәшкелт һары төҫтәге әсе шыйыҡлыҡ. *Үт ҡыуығы. Үт юлы.*

**үтек (үтеге)** *и.* Йыуылған кейем-һалымды эҫе менән яҙып шымалау өсөн ҡулланылған прибор. *Электр үтеге. Үтекте ҡыҙҙырыу.*

**үтенес** *и.* Үтенеү мөрәжәғәте. *Үтенес белдереү. Үтенес тапшырыу.*

**үтенеү (үтен-)** *ҡ.* Ниҙер эшләтеү маҡсаты менән кешегә түбәнселекле рәүештә мөрәжәғәт итеү. *Ғәфү үтенеү. Үтенеп һорау. Үтенеп әйтеү.*

**үтеү[1] (үт-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер эргәһенән йәки аша барыу; уҙыу, китеү. *Баҡса эргәһенән үтеү. Йылға аша үтеү. Поезд үтте.* **2.** Һеңеп, һарҡып ниҙелер аша сығыу. *Өй башынан ямғыр үтә. Һыуыҡ елеккә үтте. Йөрәгенә үтте.* **3.** Нимәнеңдер һөҙөмтәһе нигеҙендә ҡабул ителеү, алыныу, һайланыу. *Бер тауыштан үтеү. Конкурстан үтеү.* **4.** Ваҡыт, хәл-ваҡиға артта ҡалыу. *Ауырлыҡтарҙы үтеү. Ғүмер үтеү. Йыл үтә.* **5.** Нимәгәлер уҡып өйрәнеү йәки эшләп бөтөрөү. *Программаны үтеү. Теманы үтеү.*

**үтеү[2] (үт-)** *ҡ.* Яҡшы ҡырҡыу йәки үтеү. *Балта үтә. Салғы үтмәй.*

**үткер** *с.* **1.** Йөҙө бик йоҡа йәки осло; яҡшы үтеүсән. *Үткер балта. Үткер бысаҡ. Үткер ҡайсы.* **2.** *күсм.* Ҡыйыу һәм сос. *Үткер егет. Үткер малай.*

**үткерләү (үткерлә-)** *ҡ.* Ҡайрап, иғәп үткергә әйләндереү; үткер итеү. *Балта үткерләү. Бысаҡ үткерләү.*

**үткәреү (үткәр-)** *к.* **1.** Ситкә тайпылып юл биреү, үтергә мөмкинлек тыуҙырыу. *Баланы үткәреү. Машинаны үткәреү. Ишектән үткәреү. Түргә үткәреү.* **2.** Һеңдереп, һарҡытып үҙе аша сығарыу. *Итек һыу үткәрә. Өй башы һыу үткәрә. Туп ел үткәрмәй.* **3.** Һуҙымы булған нәмәне билдәле бер йүнәлештә дауам итеү, һалыу, ҡороу, төҙөү. *Өйгә газ үткәреү. Телефон үткәреү.* **4.** Хәл-ваҡиғаны, ваҡытты, ауырыуҙы һ. б. баштан кисереү, уҙғарыу. *Ауырлыҡтарҙы үткәреү. Ауырыуҙы үткәреү. Баштан ҡайғы үткәреү. Ваҡыт үткәреү. Ғүмер үткәреү. Дәрес үткәреү. Тыуған көн үткәреү.* **5.** Һыҙыу, билдәләү. *Сик үткәреү. Тура һыҙыҡ үткәреү. Ыҙан үткәреү.* ♦ **Энәнән-ептән (энә күҙенән) үткәреү** бик ентекләп тикшереү.

**үтмәҫ** *с.* **1.** Үткер булмаған, киҫмәгән, тупаҡ. *Үтмәҫ бысаҡ. Үтмәҫ балта.* **2.** *күсм.* Ауыр һатылған, һорау булмаған. *Үтмәҫ мал.* ♦ **Үтмәҫ тауар** бер ҡайҙа ла һыймаған кешегә ҡарата әйтелә.

**үтә** *р.* Бер яғынан икенсе яғына сыҡҡансы; ашанан-аша. *Таҡтаны үтә тишеү. Үтә ағып төшөү.* **2.** Сиктән тыш, бик, ифрат. *Үтә матур. Үтә һәйбәт. Үтә асыҡ кеше.*

**үтәнән-үтә** *р.* Бер яғынан икенсе яғына сыҡҡансы; үтә. *Үтәнән-үтә күреү. Үтәнән-үтә тишеү.*

**үтәү (үтә-)** *к.* Ғәмәлгә ашырыу. *Вәғәҙәне үтәү. Йомошто үтәү. Приказды үтәү. Планды үтәү.*

# Ф

**фабрика** *и.* Машиналар ярҙамында төрлө тауарҙар етештерә торған сәнәғәт предприятиеһы. *Ҡағыҙ фабрикаһы. Фабрикала эшләү.*

**файҙа** *и.* **1.** Кем йәки нимә өсөндөр кәрәкле һөҙөмтә, яҡшы нәтижә. *Файҙаһы тейеү. Үҙ файҙаңды ҡарау.* **2.** Алыш-бирештән йәки берәй эштән килгән сығымдан ҡалған өҫтәмә мал; төшөм. *Файҙа алыу. Файҙа килтереү.*

**файҙалы** *с.* **1.** Яҡшы, кәрәкле һөҙөмтә биргән, файҙаһы булған. *Файҙалы аҙыҡ. Файҙалы булыу. Файҙалы һүҙ. Файҙалы эш.* **2.** Өҫтәмә мал, аҡса килтергән. *Файҙалы сауҙа. Файҙалы һөнәр.*

**фамилия** *и.* Кешенең исеменә ҡушып йөрөтөлә торған ғаилә тамғаһы. *Үҙ фамилияһында йөрөү. Данлыҡлы фамилия.*

**фанер** *и.* Ҡатлы-ҡатлы итеп яһалған киң йоҡа таҡта. *Фанер менән көпләү. Фанер фабрикаһы.*

**фантазия** *и.* Нимәнелер уйлап сығарыу, күҙ алдына килтерә алыу һәләте; ижади хыял. *Фантазияға бай булыу. Фантазияға бирелеү.*

**фарман** *и.* Ҡулында хакимлыҡ булған кеше тарафынан бирелгән күрһәтмә; каз. *Фарман биреү. Фарман сығарыу.*

**фатир** *и.* Торлаҡ йорттоң башлыса бер ғаиләлек итеп эшләнгән өлөшө һәм аҡытлыса йәшәр, ҡуныр өсөн ингән өй. *Ике бүлмәле фатир. Фатир алыу.*

**февраль (февралдә)** *и.* Календарь йылының икенсе айы. *Февраль айы. Февраль бураны.*

**фекер** *и.* **1.** Башта тыуған уй. *Ҡыҙыҡлы фекер. Фекерҙе асыҡ белдереү.* . Берәй нәмәгә ҡарата булған уй, ҡараш. *Үҙ фекереңде белдереү.*

**ферма** *и.* Малсылыҡ, ҡошсолоҡ менән шөғөлләнгән хосуси йәки коллекив хужалыҡ. *Йылҡысылыҡ фермаһы. Ҡошсолоҡ фермаһы. Фермала эшләү.*

**фермер** *и.* Шәхси ферма хужаһы йәки арендаға ер алыусы. *Фермер булып итеү. Фермерҙар хужалығы.*

**фестиваль (фестивалдә)** *и.* Сәнғәттең ниндәйҙер төрөн күрһәтеүгә бағышап ойошторолған байрам. *Бөтә донъя фестивале. Музыка фестивале. Фестиаль көндәре.*

**физкультура** *и.* Физик күнекмәләр ярҙамында тәнде нығытыу ысулы; физик культура. *Физкультура менән шөғөлләнеү. Физкультура күнекмәләре.*

**фил** *и.* Тропик Африкала һәм Азияла үлән менән туҡланған, оҙон омшоҡло, ике оҙон ҡаҙыҡ тешле бик ҙур һөтимәр хайуан. *Африка филдәре. Фил балаһы. Фил томшоғо.*

**фильм** *и.* Экранда күрһәтеү өсөн киноға төшөрөлгән әҫәр. *Документаль фильм. Нәфис фильм.*

**фирма** *и.* Үҙ маркаһы менән тауар эшләргә һәм һатырға юридик хоҡуғы улған сауҙа йәки сәнәғәт предприятиеһы. *Сауҙа фирмаһы. Фирма магазины.*

**флаг** *и.* Төҫө һәм формаһы рәсми билдәләнеп, нимәнеңдер билдәһе итеп абул ителгән эмблемалы туҡыма киҫәге; байраҡ. *Ҡыҙыл флаг. Дәүләт флагы.*

**фляга** *и.* **1.** Бер нисә күнәк һыйҙырышлы, ҡапҡасын эләктереп ныҡ итеп пмалы, ике яҡтан тотҡалы һауыт. *Һөт флягаһы. Һыу флягаһы.* **2.** Билгә тағып өрөтөлә торған, шыйыҡлыҡ һалыу өсөн эшләнгән ҙур булмаған ялпаҡ ауыт. *Һалдат флягаһы.*

**фонетика** *и.* **1.** Телдең өндәр төҙөлөшө, өндәр составы. *Башҡорт теленең фонетикаһы.* **2.** Тел ғилеменең өндәрҙе төрлө яҡлап өйрәнә торған бүлеге. *Эксперименталь фонетика. Фонетика закондары.*

**фонтан** *и.* Юғары баҫым аҫтында йәки ҙур көс менән үргә атылып торған һыу һәм башҡа нәмә. *Һыу фонтаны. Нефть фонтаны.*

**форма** *и.* **1.** Берәй нәмәнең тышҡы күренеше; рәүеш. *Ай формаһында. Шар формаһында.* **2.** Нимәнеңдер билдәле йөкмәткеһенән аңлашылған төҙөлөшө, структураһы, рәүеше. *Ойоштороу формаһы.* **3.** *лингв.* Грамматик категорияларҙы, һүҙ һәм һөйләмдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен тышҡы яҡтан билдәләй торған сара. *Килеш формаһы. Күплек формаһы. Эйәлек формаһы.* **4.** Айырым эш-шөғөл тармағында эшләгәндәр өсөн билдәләнгән махсус кейем. *Милиция формаһы. Мәктәп формаһы. Һалдат формаһы.*

**фотоаппарат** *и.* Фотоға төшөрә торған аппарат.

**фотография** *и.* **1.** Махсус оптик аппарат ярҙамында яҡтылыҡҡа һиҙгер материалға кешенең йәки ниҙеңдер һүрәтен төшөрөү ысулы. *Фотография менән шөғөлләнеү.* **2.** Шул юл менән төшөрөлгән һүрәт. *Фотографияға төшөү.*

**фронт** *и.* **1.** Ғәскәрҙең дошманға ҡаршы торған сафы һәм улар биләгән урын. *Фронт буйы. Фронт һыҙығы.* **2.** Хәрәкәттәге ғәскәр биләгән стратегик район, яу ҡыры. *Фронтҡа ебәреү. Фронттан ҡайтыу.*

**футбол** *и.* Ҡара-ҡаршы яҡтарҙың ҡапҡаһына аяҡ менән тибеп туп индереүҙе маҡсат итеп ҡуйған спорт уйыны. *Футбол уйнау. Футбол командаһы.*

**фәҡир** *с.* Мохтажлыҡта йәшәгән, ярлы; *киреһе* бай. *Фәҡир кеше. Фәҡир өй.*

**фән** *и.* **1.** Тәбиғәт йәки йәмғиәттең үҫешендәге законлыҡты һәм тирә-йүнгә тәьҫир итеү сараларын асып бирә торған белем системаһы; ғилем. *Фәнде планлы үҫтереү. Фән менән шөғөлләнеү. Филология фәне.* **2.** Мәктәптә, уҡыу йортонда уҡытылған айырым белем тармағы. *Башҡорт теле фәне. Тәбиғәт фәндәре.*

# Х

**хазина** *и.* **1.** Йыйылған, тупланған баһалы йәки йәшереп һаҡланған аҫыл нәмә; байлыҡ. *Хазина йыйыу. Хазинаны туҙҙырыу. Хазина табыу. Хазина эҙләү.* **2.** Ер аҫтындағы төрлө тәбиғи байлыҡ; мәғдән. *Ер аҫты хазиналары.*

**хайран** *с.* **1.** Аптырарлыҡ, таң ҡалырлыҡ; ғәжәп. *Хайран кеше.* **2.** *р. мәғ.* Бик, сикһеҙ. *Хайран матур.* ♦ **Хайран булыу (ҡалыу)** нык аптырау; ғәжәпкә ҡалыу.

**хайуан** *и.* **1.** Ер йөҙөндә йәшәгән йән эйәләре (кеше, ҡош-ҡорт, бөжәктән башҡаһы). *Ер-һыу хайуандары. Йорт хайуандары. Ҡырағай хайуандар.* **2.** *күсм.* Тәрбиәһеҙ, наҙан, тупаҫ кешегә ҡарата әйтелә.

**хакимиәт** *и.* Хөкүмәт, власть. *Хакимиәт башында тороу. Район хакимиәте.*

**хаҡ**[1] *с.* **1.** Ысынға тап килгән; дөрөҫ. *Хаҡ һүҙ.* **2.** Дөрөҫлөк, тоғролоҡ эшөнсәһенә ярашлы; ғәҙел. *Хаҡ эш.* **3.** *и. мәғ.* Нимәлер ҡылырға йәки эшләрә хоҡуҡ, ирек. *Китергә хаҡы юҡ.*

**хаҡ**[2] *и.* **1.** Нәмәнең һатыу-алыуҙа аҡсалата билдәләнгән ҡиммәте; баһа. *рзан хаҡ. Баҙар хаҡы. Хаҡ ҡуйыу.* **2.** Эшләгән эшкә, түккән көскә аҡсалата уйылған баһа. *Хеҙмәт хаҡы.* **3.** Кеше нәмәһе, кеше өлөшө. *Кеше хаҡын ашау.* **Тамаҡ хаҡы (ялы)** ашау-эсеү иҫәбенә.

**хаҡлы**[1] *с.* **1.** Уй-фекере, һүҙе, ҡылған эше ысын хәлгә, дөрөҫлөккә ярашы; дөрөҫ булған. *Хаҡлы булып сығыу.* **2.** Урынлы, тейешле. *Хаҡлы һорау.*

**хаҡлы**[2] *с.* Хаҡы, хоҡуғы булған; хоҡуҡлы. *Хаҡлы эш.*

**хаҡында** *бәйл.* Төп килештәге исемде һәм эйәлек килештәге алмашты эйләп килә; тураһында, турында. *Эш хаҡында һөйләшеү. Уның хаҡында.*

**халат** *и.* Алдан йәки арттан эленмәле итеп тегелгән өйҙә йәки эштә кейә рған өҫ кейеме. *Аҡ халат. Сатин халат. Ҡатын-ҡыҙ халаты.*

**халыҡ (халҡы)** *и.* **1.** Билдәле бер илдә йәки дәүләттә йәшәгән кешеләр. *ашҡортостан халҡы. Рәсәй халҡы.* **2.** Илдә йәшәүселәрҙең төп өлөшөн ошкил итеүсе хеҙмәт эйәләре. *Ауыл халҡы. Ҡала халҡы. Халыҡ менән эш итеү. алыҡҡа таяныу.*

**халыҡ-ара** *с.* Төрлө ил, төрлө халыҡ араһындағы бәйләнешкә өнәсәбәтле. *Халыҡ-ара хәл. Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө.*

**хан** *и. тар.* Төрки һәм монгол халыҡтарында дәүләт башлығы титулы һәм ул титулды йөрөткән кеше. *Хан һарайы. Хан булыу. Ханға баш эйеү.* ♦ **Хан манындағы, хан заманынан ҡалған** әллә ҡасанғы, күптәнге. **Хан ҡыҙы** (*йәки* ете) бик иркә эш яратмай торған ҡыҙға йәки егеткә ҡарата әйтелә.

**ханлыҡ (ханлығы)** *и. тар.* **1.** Хан булыу хәле. **2.** Хан идара иткән дәүләт. *тын урҙа ханлығы.*

**харап** *с.* **1.** Эш-хәл бик мөшкөл, насар. *Эштәр харап.* **2.** *р. мәғ.* Бик, үтә. *рап егәрле. Харап матур.* ♦ **Харап булыу** һәләк булыу, юҡҡа сығыу. **Харап теү** һәләк итеү, юҡҡа сығарыу.

**хас** *с.* Үҙенә бер төрлө, үҙенсәлекле. *Йәштәргә хас дәрт. Ҡыҙҙарға хас лсанлыҡ. Халыҡтың үҙенә генә хас йолалары.*

**хат** *и.* Хәбәр алышыу йәки хәл белешеү өсөн кемгәлер тәғәйенләп яҙылған ағыҙ. *Рәсми хат. Һалдат хаты. Яуап хаты. Хат алыу. Хат яҙыу.*

**хата** *и.* **1.** Иҫәпләүҙә, яҙыуҙа һ. б. ебәрелгән яңылышлыҡ. *Орфографик хата. Пунктуацион хата. Хата ебәреү. Хата яҙыу.* **2.** Дөрөҫ булмаған эш, ҡылыҡ, яңылыш ҡыланыш. *Эштәге хата. Үҙ хатаңды аңлау.*

**хафаланыу (хафалан-)** *ҡ.* Күңел тыныслығын юғалтыу; хафаға ҡалыу; борсолоу. *Бушҡа хафаланыу. Хафаланып йөрөү.*

**хеҙмәт** *и.* **1.** Кешенең билдәле бер маҡсатҡа йүнәлтелгән, махсус сиктә башҡарылған эшмәкәрлеге; эш. *Аҡыл хеҙмәте. Физик хеҙмәт. Хеҙмәт алдынғыһы.* **2.** Рәсми урындағы эш һәм эш урыны; вазифа. *Хеҙмәт урыны. Хеҙмәт кешеһе.* **3.** Ниндәйҙер бер илдең ҡоралл көстәре; армия. *Ғәскәри хеҙмәт. Хеҙмәткә алыу. Хеҙмәттән ҡайтыу.* **4.** Маҡсатлы эшмәкәрлек һөҙөмтәһе булараҡ кемдер тарафынан яҙылған нәмә; эш, әҫәр. *Баҫма хеҙмәт. Ғилми хеҙмәт.*

**хеҙмәткәр** *и.* Берәй учреждениела, ойошмала эшләгән кеше. *Ғилми хеҙмәткәр. Хәрби хеҙмәткәр.*

**хеҙмәтсе** *и.* Байға хеҙмәт иткән кеше; ялсы. *Хеҙмәтсе булып ялланыу.*

**хеҙмәтсән** *с.* Эшләгән, хеҙмәт иткән. *Хеҙмәтсән халыҡ.*

**хикмәт** *и.* Ниҙеңдер асылын тәшкил иткән эске мәғәнә, йәшерен сәбәп; ғиллә. *Бында ниндәйҙер хикмәт бар. Хикмәт нимәлә?* ♦ **Был ни хикмәт** аптырағанда әйтелә.

**хикмәтле** *с.* **1.** Йәшерен мәғәнәле, серле. *Хикмәтле йоҙаҡ.* **2.** *күсм.* Бик мәрәкә, ҡыҙыҡ; мажаралы. *Хикмәтле тамаша.*

**хикәйә** *и.* Тормоштағы бер ваҡиғаға арналған бәләкәй сәсмә әҙәби әҫәр. *Балалар өсөн яҙылған хикәйә. Юмористик хикәйә.* ♦ **Хикәйә итеү** тасуирлап һөйләү.

**хикәйәт** *и.* Легендаларға нигеҙләнеп яҙылған әҙәби әҫәр. *Хикәйәт яҙыу.*

**хис** *и.* **1.** Ысынбарлыҡты күңел менән һиҙеү һәләте; тойғо. *Нескә хис. Тәрән хис. Хискә бирелеү.* **2.** Күңелдән килгән мөнәсәбәт нигеҙендә тыуған кисереш. *Йылы хис. Мөхәббәт хисе. Шатлыҡ хисе.* ♦ **Хис итеү** һиҙеү, тойоу.

**Хоҙай** *и.* **1.** (*йәки* **Хоҙай тәғәлә**) Дин буйынса бөтә донъяны яратҡан, уға идара иткән юғары зат; Алла, Тәңре. *Хоҙайға табыныу. Хоҙайҙан өмөт итеү.* **2.** *эйл. ф.* **хоҙайым** *ымл. мәғ.* Ҡапыл ҡурҡҡанда, ныҡ аптырағанда әйтелә.

**хоккей** *и.* Боҙ өҫтөндә, сирәмдә ҡара-ҡаршы туп йәки шайба һуғып уйнай торған спорт уйыны. *Шайбалы хоккей. Хоккей уйнау. Хоккей буйынса чемпионат.*

**хоккейсы** *и.* Хоккей уйнаусы. *Хоккейсылар командаһы. Башҡортостан оккейсылары.*

**хоҡуҡ (хоҡуғы)** *и.* **1.** Йәмғиәт төҙөлөшө, тормошо һәм эшмәкәрлегенә рашлы рәүештә дәүләт тарафынан билдәләнә һәм һаҡлана торған ижтимағи әртип ҡағиҙәләре. *Граждандлыҡ хоҡуғы. Һайлау хоҡуғы.* **2.** Нимәлер эшләргә емгәлер бирелгән һәм закон, ҡарар менән нығытылған ирек, рөхсәт. *Эшкә оҡуҡ. Ялға хоҡуҡ. Тулы хоҡуҡ. Хоҡуҡ алыу.*

**холоҡ (холҡо)** *и.* Кешенең ҡылығында сағылған тотороҡло рухи һәм сихик үҙенсәлектәр; характер. *Баҫалҡы холоҡло кеше. Тиҫкәре холоҡло бала.*

**холоҡһоҙ** *с.* Яман холоҡло, тәртибе насар булған; ҡылыҡһыҙ. *Холоҡһоҙ еше. Холоҡһоҙ булыу.*

**хор** *и.* Бергәләп музыкаль әҫәр башҡарған йырсылар төркөмө. *Балалар оры. Хор дирижеры. Хор түңәрәге.*

**хөкөм** *и.* **1.** Дәүләт менән идара итеү хоҡуғы; власть. *Батша хөкөмө. әкөмгә алыу.* **2.** Төрлө бәхәстәрҙе хәл иткән, енәйәт эштәрен ҡараған дәүләт рганы; суд һәм уның тарафынан сығарылған ҡәтғи ҡарар. *Хөкөмгә тарттыыу. Хөкөм алдына баҫыу. Ғәҙел хөкөм. Хөкөм сығарыу.* **3.** Берәй эште хәл итеүгә емгәлер ҡуйылған ирек, ихтыяр, ҡарамаҡ. *Уҡыусылар хөкөмөнә тапшырыу.*

**хөкүмәт** *и.* Дәүләт менән идара иткән юғары орган. *Батша хөкүмәте. әкүмәт ағзалары. Хөкүмәт төҙөү.*

**хөрмәт** *и.* Кемгәлер күрһәтелгән ҡәҙер, ихтирам. *Хөрмәт күрһәтеү. Хөрмәт енән ҡаршылау.*

**хөрмәтләү (хөрмәтлә-)** *ҡ.* Ололап хөрмәт күрһәтеү; ихтирам итеү. *әрмәтләп ҡаршы алыу.*

**хөрт** *с.* Ыңғай баһаға торошһоҙ; насар; *киреһе* яҡшы. *Хөрт кеше. Хөрт эш.*

**хужа** *и.* **1.** Берәй нәмәнең биләүсеһе; эйә. *Ер хужаһы.* **2.** Йорт, ғаилә ашлығы. *Өй хужаһы.* **3.** Хужалыҡ йәки ойошманың етәксеһе; башлыҡ.

**хужабикә** *и.* Йорт хужаһының ҡатыны; хужа ҡатын. *Хужабикә табын ерләй.*

**хужалыҡ (хужалығы)** *и.* **1.** Эшләп сығарыу, етештереү өлкәһендәге бөтә әмә йыйылмаһы. *Халыҡ хужалығы.* **2.** Етештереүҙең бер тармағы. *Ауыл ужалығы.* **3.** Ер-һыуы, мал-мөлкәте, ҡорал-ҡорамалы булып, игенселек, алсылыҡ менән шөғөлләнгән айырым берәмек. *Ваҡ крәҫтиән хужалыҡары. Яңғыҙаҡ хужалыҡ.*

**хуплау (хупла-)** *к.* Дөрөҫ, яҡшы тип табыу; яҡшы күреү. *Фекерҙе хуплау. Һүҙҙе хуплау.*

**хур** *с.* Кеше алдында түбән, кәм; ҡәҙерһеҙ. *Ил барҙа ир хур булмаҫ, ир барҙа ил хур булмаҫ.* (Мәҡәл.) ♦ **Хур булыу** 1) оятҡа ҡалыу; 2) ҡәҙерһеҙ хәлгә ҡалыу. **Хур итеү (ҡылыу)** 1) кеше алдында оятлы итеү; мәсхәрәгә ҡалдырыу; 2) ҡәҙерһеҙ хәлгә ҡалдырыу; мыҫҡыллау.

**хурлау (хурла-)** *к.* **1.** Мыҫҡыл итеү, мәсхәрәләү. **2.** Ғәйеп табып кәмһетеү; яманлау. *Аш хурлама – ҡоҫторор, ир хурлама – боҫторор.* (Әйтем.)

**хуш**[1] *с.* **1.** Йәнгә-тәнгә ләззәт бирерлек; яҡшы, тәмле (еҫкә ҡарата). *Хуш еҫ.* **2.** Ҡәнәғәт булған; күтәренке, яҡшы (күңелгә ҡарата) *Хуш күңел. Хуш кәйеф.*

**хуш**[2] *и.* (*йәки* **хушығыҙ)** Хушлашҡанда, һаубуллашҡанда әйтелгән әҙәп һүҙе. *Хуш, иҫән бул.* ♦ **Хуш итеү** 1) *дини* ашап бөткәс, амин тотоу; фатиха ҡылыу; 2) хужаға рәхмәт әйтеп һаубуллашыу. **Хуш килдең (киләһең, килдегеҙ)** хөрмәтләп ҡаршылағанда әйтелә.

**хушбуй** *и.* Өҫ-башҡа һөртә торған хуш еҫле шыйыҡ нәмә; еҫле май. *Хушбуй еҫе. Хушбуй һөртөү. Хушбуй һатып алыу.*

**хушлашыу (хушлаш-)** *к.* Айырылышҡанда иҫәнлек-һаулыҡ теләү; һаубуллашыу. *Хушлашып китеү. Хушлашыу кисәһе.*

**хыял** *и.* **1.** Ысынбарлыҡта булмаған, күңелдә генә барлыҡҡа килгән уй-теләк. *Буш хыял. Матур хыял. Татлы хыял.* **2.** Күҙ алдына килтерелгән образдарҙың уйҙа, күңелдә барлыҡҡа килеүе. *Хыялға батыу. Хыялда һаҡлау.* **3.** Күңел теләгән уй, фекер, мауыҡтырған нәмә; теләк, ынтылыш. *Хыял тормошҡа ашыу. Уҡырға булған хыял.*

**хыялый** *с.* **1.** Ысынбарлыҡҡа тура килмәгән, хыял тыуҙырған. *Хыялый донъя.* **2.** Хыялға бирелгән, хискә иҫергән. *Хыялый ҡыҙ.* **3.** Күп уйлау арҡаһында аҡылына зыян килгән, аҡылдан яҙған. *Хыялыйға әйләнеү. Хыялый итеү.*

**хәбәр** *и.* **1.** Ниҙер тураһында ишетелгән йәки ишеттерелгән һүҙ, мәғлүмәт. *Шатлыҡлы хәбәр. Ҡайғылы хәбәр. Хәбәр алып килеү.* **2.** Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға бәйле яңылыҡ. *Фронт хәбәрҙәре. Ялан хәбәрҙәре.* **3.** *грам.* Һөйләмдең эйә тураһында ни ҙә булһа белдергән баш киҫәге. *Ҡушма хәбәр. Ябай хәбәр. Хәбәр булып килеү.*

**хәбәрсе** *и.* 1. Ниҙер тураһында хәбәр килтереүсе. *Хәбәрсе булып килеү.* **2.** Ваҡытлы матбуғатҡа, радиоға, телевидениеға хәбәрҙәр яҙыусы. *Хәбәрсе булып эшләү.*

**хәҙер** *р.* **1.** Һөйләү процесы барған ваҡытта, ошо мәлдә. **2.** Тиҙҙән, ошо яҡын арала. *Хәҙер килер.*

**хәҙерге** *с.* **1.** Һөйләү процесы барған саҡтағы, ошо мәлдәге, әлеге. *Хәҙерге минутта.* **2.** Ошо дәүерҙәге, был заманға ҡараған. *Хәҙерге башҡорт теле.* **3.** Бөгөнгө көндәге, әле йәшәп килгән. *Хәҙерге йәштәр. Хәҙерге ауыл тормошо.*

**хәйерле** *с.* **1.** Яҡшы, файҙалы, уңышлы. *Хәйерле эш. Хәйерле юлға сығыу.* **2.** Сәләмләгәндә йәки яҡшы теләк белдергәндә әйтелә. *Хәйерле кис! Хәйерле юл!*

**хәйлә** *и.* **1.** Мутлыҡҡа, алдаҡҡа ҡоролған аҫтыртын эш. *Хәйлә ҡороу.* **2.** Ниҙер эшләү өсөн уйланған әмәл. *Хәйлә өйрәтеү.* **3.** Ялған сәбәп; һылтау. *Хәйлә табыу. Хәйлә эҙләү.* ♦ **Хәйлә тоҡсайы** хәйләгә оҫта, йылмаяҡ кеше.

**хәйләкәр** *и.* **1.** Хәйлә менән эш итеүсән, аҫтыртын, мут холоҡло. *Хәйләкәр кеше.* **2.** Хәйлә сағылған. *Хәйләкәр ҡараш.*

**хәл** *и.* **1.** Физик яҡтан килгән мөмкинлек; көс. *Хәл бөтөү. Хәл ҡалмау.* **2.** Матди көстән килгән мөмкинлек; байлыҡ кимәле. *Туй яһарлыҡ хәл юҡ.* **3.** Тормошта булған төрлө күренеш, ваҡиға. *Ғәжәп хәл. Күңелһеҙ хәл. Ҡыуаныслы хәл.* **4.** *грам.* Һөйләмдә эштең башҡарылыу ваҡытын, урынын, сәбәбен, маҡсатын, шартын белдергән эйәрсән киҫәк. *Ваҡыт хәле. Кире хәл. Маҡсат хәле. Сәбәп хәле. Урын хәле. Шарт хәле.* ♦ **Хәл алыу** 1) ял итеп көс йыйыу; 2) төрлө кисереш-ауырлыҡтан арынып, иркенләү. **Хәлгә кереү** ауыр хәлдәге кешегә ярҙам ҡулы һуҙыу, яҡшылыҡ эшләү. **Хәлдән килеү** ниҙер эшләргә булдырыу; ҡулдан килеү.

**хәнйәр** *и.* Ике яғы ла үткер осло бысаҡ. *Көмөш һаплы хәнйәр.*

**хәрби** *с.* **1.** Һуғышҡа бәйләнеше булған. *Хәрби хәл.* **2.** Армия менән бәйле булған; ғәскәри хеҙмәткә һәм ғәскәри кешегә мөнәсәбәтле булған. *Хәрби училище. Хәрби бурыс. Хәрби хеҙмәт.*

**хәреф** *и.* Телдәге өндөң яҙма билдәһе. *Баҫма хәреф. Баш хәреф.* ♦ **Хәреф таныу (айырыу)** уҡый-яҙа белеү.

**хәрәкәт** *и.* **1.** Нәмәнең йәки уның өлөштәренең үҙ торошон үҙгәртеүе. *Хәрәкәт яһау. Хәрәкәтһеҙ ҡалыу.* **2.** Ниндәйҙер бер йүнәлеш буйынса (күмәк) ҡуҙғалыш, йөрөш. *Ғәскәр хәрәкәте. Поездар хәрәкәте. Хәрәкәт көсәйеү.* **3.** Тәндең йәки тән ағзаларының торошондағы үҙгәреш, ҡуҙғалыш. *Ҡул хәрәкәте. Хәрәкәт яһау.*

**хәсрәт** *и.* **1.** Йөрәккә ғазап һалған ауыр кисереш; рухи ғазап; ҡайғы. *Хәсрәт утында яныу.* **2.** Ғазап сиктергән һәр төрлө ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ. *Хәсрәт күреү.*

**хәстәхана** *и.* Дауалау йорто; больница. *Хәстәханала ятыу.*

**хәтер** *и.* **1.** Күргән-белгәнде онотмай башта һаҡлау һәм иҫкә төшөрә алыу һәләте; иҫ. *Яҡшы хәтер. Хәтерҙә тотоу. Хәтер томаланыу.* **2.** Кешенең билдәле бер ваҡыттағы рухи хәле; күңел, кәйеф. *Хәтер ҡалыу. Хәтер һаҡлау.*

**хәтерләү (хәтерлә-)** *к.* **1.** Онотмай, иҫтә тотоу. *Үткәндәрҙе хәтерләү.* **2.** Иҫкә, хәтергә төшөрөү.

**хәтле(м)** *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп, урын-ваҡыт арауығының сиген белдерә; саҡлы, тиклем. *Кискә хәтле. Өйгә хәтле.* **2.** Сағыштырмаса ҙурлыҡты, күләм-дәрәжәне белдерә. *Ат башы хәтлем.* ♦ **Был (шул) хәтле** әйтелгән фекерҙе көсәйтеп килә; шул тиклем, шундай. **Әллә ни хәтле** бик күп, иҫәпһеҙ.

**хәтфә** *и.* **1.** Уң яғы ҡыҫҡа ғына ҡуйы өбөрөлө итеп һуғылған йылтыр туҡыма; бәрхәт. *Йәшел хәтфә. Хәтфә камзул.* **2.** *күсм.* Күпереп йәшәреп торған нәмәгә, болонға ҡарата әйтелә. *Хәтфә болон. Хәтфә ялан.*

# Һ

**һабаҡ (һабағы)** *и.* **1.** Үҫемлектең япрағы, сәскәһе, емеше урынлашҡан өҫкө өлөшө. *Картуф һабағы. Үлән һабағы.* **2.** Билдәле бер оҙонлоҡтағы тегәр еп; һаплам. *Бер һабаҡ еп.*

**һабан** *и.* **1.** Ер һөрә торған ауыл хужалығы ҡоралы. *Бер төрәнле һабан. Күп төрәнле һабан. Һабан һөрөү.* **2.** Ер һөрөү эше. *Көҙгө һабан. Яҙғы һабан. Һабанға төшөү.*

**һабантуй** *и.* Яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас үткәрелә торған ҙур милли байрам. *Һабантуй үткәреү. Һабантуйҙа көрәшеү.*

**һабын** *и.* Йыуыныу, кер йыуыу өсөн зәһәр һелтелә майҙы ҡайнатып яһаған матдә. *Еҫле һабын. Кер һабыны. Күҙ һабыны.*

**һағайыу (һағай-)** *к.* **1.** Ниҙелер яҡшыраҡ ишетеү, һиҙеү өсөн иғтибарҙы йыйыу. *Һағайып тыңлау.* **2.** Ниҙәндер шикләнеп, уға иғтибарҙы арттырыу; һаҡ булыу. *Эт һағайҙы.*

**һағалау (һағала-)** *к.* **1.** Осратыу, тотоу маҡсатында аҫтыртын күҙәтеү. *Һағалап йөрөү. Һағалап тороу.* **2.** Һаҡлап, ҡурсып, ҡарап йөрөү. *Эт йорт-ҡураны һағалай.*

**һағыҙ** *и.* Сәйнәү өсөн ҡулланылған һуҙылып торған матдә. *Һағыҙ ҡайнатыу. Һағыҙ сәйнәү.*

**һағыҙаҡ (һағыҙағы)** *и.* **1.** Ярыҡанатлылар ғаиләһенә ҡараған буй-буй һары һыҙатлы, ҡара төҫтәге саға торған бөжәк. *Һары һағыҙаҡ. Һағыҙаҡ ояһы.* **2.** *күсм.* Бәйләнсек кешегә ҡарата әйтелә.

**һағыныу (һағын-)** *к.* Осрашҡы, күрге килеүҙән зар булыу. *Дуҫты һағыныу. Һағынып көтөү. Һағынып ҡайтыу.*

**һағыш** *и.* Һағыныу, моңайыу тойғоһо. ♦ **Һары һағыш** бик көслө һағыш.

**һаҙ** *и.* Аҫтан һыу йыйылып ятҡан батҡаҡ ер. *Һаҙ үләне. Һаҙға батыу.*

**һаҙан** *и.* Эре һарғылт төңкәле, ҡылсыҡлы сөсө һыу балығы. *Һаҙан ҡармаҡлау. Һаҙан үрсетеү.*

**һаҙлыҡ (һаҙлығы)** *и.* **1.** Һаҙлы ер, һаҙ. *Һаҙлыҡты киптереү. Һаҙлыҡ үләне.* **2.** Батып, бысрап ятҡан урын; батҡаҡлыҡ. *Ямғырҙан һуң юл һаҙлыҡҡа әүерелде.*

**һай**[1] *с.* **1.** Өҫкө һәм аҫҡы кимәл араһы бәләкәй, тәрән түгел (һыуға, соҡорға ҡарата). *Һай йылға. Һай соҡор.* **2.** *күсм.* Төплө түгел, нигеҙһеҙ. *Унын белеме һай.*

**һай**[2] *ымл.* Нимәгәлер һоҡланғанда, үкенгәндә, борсолғанда, ризаһыҙлыҡ белдереп шелтәләгәндә әйтелә. *Һай, афарин! Һай, ғүмерҙәр үтә бит. Һай, ахмаҡ ...*

**һайлау**[1] **(һайла-)** *ҡ.* **1.** Күп нәмә, күмәк кеше араһынан үҙенә яраҡанын айырып билдәләү. *Урын һайлау. Һайлап алыу.* **2.** Берәй эшкә, вазифаға ҡуйыр өсөн күмәкләп тауыш биреү юлы менән кемделер айырып билдәләү. *Вәкил һайлау. Депутат итеп һайлау.*

**һайлау**[2] *и.* Берәй эшкә, вазифаға ҡуйыр өсөн күмәкләп тауыш биреү юлы менән кемделер айырып билдәләү эше. *Һайлауҙа ҡатнашыу. Һайлау үткәреү. Һайлауға әҙерләнеү.*

**һайрау (һайра-)** *ҡ.* Төрлө матур, моңло тауыш менән көйләү (ҡоштарға ҡарата). *Яңғыратып һайрау. Һандуғас һайрауы.*

**һайын** *бәйл.* **1.** Урын-ваҡытты, эш-хәрәкәтте белдергән төп һәм эйәлек килештәге һүҙҙәр менән килеп, ниҙеңдер ҡабатланыуын белдерә. *Ай һайын. Ауыл һайын.* **2.** Сифат ҡылымдың **-ған/-гән** формаһы менән килеп, эш-хәрәкәттең йәки берәй хәлдең көсәйә барыуын белдерә. *Йөрөгән һайын. Уҡыған һайын.*

**һайыҫҡан** *и.* Ҡоҙғондар ғаиләһенә ҡараған оҙон ҡойроҡло ҡара ала ҡош. *Һайыҫҡан ояһы. Һайыҫҡан шыҡырлауы.*

**һаҡ**[1] *с.* **1.** Тирә-йүндәге эш-хәлгә, ҡурҡынысҡа иғтибары көслө; абай, һиҙгер. *Һаҡ йоҡо. Һаҡ кеше. Һаҡ булыу.* **2.** Кем йәки ниҙер өсөн борсолған, ҡайғыртыусан, хәстәрле. *Һаҡ мөнәсәбәт.*

**һаҡ**[2] **(һағы)** *и.* Кем йәки нимәнелер һаҡлау, ҡарауыллау, күҙәтеү өсөн ҡуйылған ҡоралды көс йәки кеше; ҡарауыл. *Һаҡ ҡуйыу. Һаҡта тороу.*

**һаҡал** *и.* Ирҙәрҙең эйәгенә, сикәһенә үҫкән йөн. *Аҡ һаҡал. Һаҡал үҫтереү.*

**һаҡлау (һаҡла-)** *ҡ.* Нимәнелер үҙ сифаты, рәүеше менән имен-аман хәлдә тотоу. *Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау. Тәбиғәтте һаҡлау.* **2.** Юҡҡа сығыуға,

боҙолоу-зарарланыуға юл ҡуймай, имен тотоу. *Елдән һаҡлау. Һыуыҡтан һаҡлау.* **3.** Яу, һөжүмдән, төрлө хаслыҡ менән ил тыныслығын боҙорға теләүселәрҙән ҡурсалау, именлекте тәьмин итеү. *Ватанды һаҡлау. Ил һаҡлау. Сик һаҡлау.* **4.** Онотмай иҫтә тотоу, күңелдә йөрөтөү. *Асыу һаҡлау. Үс һаҡлау. Сер һаҡлау.*

**һаҡлыҡ (һаҡлығы)** *и.* **1.** Хәүеф-хәтәр, төрлө шик, шомдан һаҡланыуға йүнәлтелгән уяулыҡ. *Һаҡлыҡ күрһәтеү.* **2.** Ҡылыҡтағы әҙәплелек; иплелек. *Һаҡлыҡ менән генә тотоноу.* **3.** Бик кәрәк саҡта тотонор өсөн йыйып ҡуйған нәмә. *Һаҡлыҡһыҙ йәшәү.*

**һаҡсы** *и.* **1.** Һаҡта торған ҡоралды кеше. *Ил һаҡсыһы. Ватан һаҡсылары көнө.* **2.** Нимәнеңдер именлеген, теүәллеген һаҡлаған кеше, ҡарауылсы. *Тәбиғәт һаҡсыһы.* **3.** *спорт.* Футбол, хоккей кеүек уйын уйнағанда ҡапҡаны һаҡлаусы. *Ҡапҡа һаҡсыһы.*

**һаҡсыл** *с.* Нәмәне һаҡлап, әрәм-шәрәм итмәй тотоусан. *Һаҡсыл хужабикә. Һаҡсыл булыу.*

**һал** *и.* Һыуҙан ағыҙыу өсөн буй-буй теҙеп, бер нисә быуын итеп бәйләнгән бүрәнәләр. *Ике быуынлы һал. Һал ағыҙыу.*

**һалам** *и.* Бөртөклө ашлыҡтың һуҡҡандан һуң ҡалған һабағы. *Арыш һаламы. Һоло һаламы. Һалам ташыу.*

**һалдат** *и.* Армияла хеҙмәт итеүсе хәрби дәрәжәһе булмаған кеше. *Һалдат кейеме. Һалдат хеҙмәте. Һалдат булыу.*

**һалҡын**[1] *с.* **1.** Һыуыҡлығы үтә көслө түгел, бер аҙ һыуыҡ. *Һалҡын ел. Һалҡын һыу. Һалҡын булыу.* **2.** *күсм.* Йылы тойғоһоҙ, ихлас булмаған. *Һалҡын ҡараш. Һалҡын мөнәсәбәт.*

**һалҡын**[2] *и.* Көслө һыуыҡ булмаған һауа. *Иртәнге һалҡын.*

**һалҡынайыу (һалҡынай-)** *ҡ.* **1.** Һалҡынға әйләнеү, һалҡын булыу. *Һауа һалҡыная төштө.* **2.** *күсм.* Нимәгәлер ихласлыҡ тойғоһо кәмеү; һыуыныу. *Уҡыуға һалҡынайыу.*

**һалҡынса** *с.* Әҙ генә һалҡын; еләҫ. *Һалҡынса һауа. Һалҡынса булыу.*

**һалмаҡ** *с.* **1.** Йәй, әкрен хәрәкәтле. *Һалмаҡ аҙым. Һалмаҡ хәрәкәт.* **2.** Әкрен, бер тигеҙ генә, тыныс, баҫалҡы. *Һалмаҡ йыр. Һалмаҡ тауыш.*

**һалыу (һал-)** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне билдәле бер урынға ҡуйыу. *Баланы карауатҡа һалыу. Китапты өҫтәлгә һалыу. Яурынға шәл һалыу.* **2.** Билдәле бер маҡсат менән урынлаштырыу. *Ауырыуҙы хәстәханаға һалыу.* **3.** Төҙөү, ҡороу, эшләү. *Күпер һалыу. Өй һалыу. Әҫкерт һалыу.* **4.** Ниндәйҙер бер билдә, тамға ҡуйыу. *Имза һалыу. Тамға һалыу.* **5.** Бешерергә ҡуйыу. *Аш һалыу. Бәлеш һалыу.*

*Икмәк һалыу.* **6.** Дауалау, төҙәтеү маҡсатында тәндең берәй еренә нимәлер ҡуйыу, ебәреү, тамыҙыу. *Гипс һалыу. Күҙгә дарыу һалыу. Яраға дарыу һалып бәйләү.* **7.** Нимәнелер ситкә почта аша ебәреү. *Аҡса һалыу. Посылка һалыу. Хат һалыу.* **8.** Кейгән кейемде, таҡҡан нәмәне сисеү. *Кейемде һалыу. Сәғәтте һалыу.*

**һаман (һаман да)** *р.* Ошо ваҡытҡа тиклем, ошоға ҡәҙәр. *Һаман килмәй. Һаман юҡ.*

**һан** *и.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер берәмекле иҫәбе. *Халыҡ һаны. Нәмәнең һанына сығыу.* **2.** Рәт иҫәбе менән билдәләнгән нәмә. *Журналдың тәүге һаны.* **3.** *мат.* Берәмекле иҫәп миҡдарын белдергән төшөнсә. *Аралаш һандар. Йоп һан. Таҡ һан.* **4.** *грам.* Нәмәне иҫәп яғынан аныҡлаған һүҙ төркөмө. *Ҡушма һандар. Төп һандар. Рәт һандары. Ябай һандар.*

**һанау (һана-)** *ҡ.* **1.** Һандарҙы билдәле тәртибе менән әйтеү. *Йөҙгә ҡәҙәр һанау. Һанай белеү.* **2.** Берәмекләп ниҙеңдер иҫәбен сығарыу; хисаплау. *Аҡса һанау.* **3.** Бер төрлө итеп баһалау, ниндәйҙер баһа менән ҡарау. *Аҡыллыға һанау. Бәхеткә һанау. Кешегә һанау.*

**һандуғас** *и.* Барҡылдаҡтар ғаиләһенә ҡараған матур һайрай торған бәләкәй күсәр ҡош. *Һандуғас тауышы. Һары һандуғас.*

**һандыҡ (һандығы)** *и.* Нәмәләрҙе һаҡлай торған ҡапҡаслы ҙур ҡумта. *Семәрле һандыҡ. Тимерле һандыҡ. Һандыҡҡа һалыу.*

**һаңғырау** *с.* **1.** Ишетеү һәләте түбән йәки бөтөнләй булмаған. *Һаңғырау кеше. Һаңғырау булыу.* **2.** Тоноҡ яңғыраған. *Һаңғырау тауыш.* **3.** *лингв.* Тауыш ҡатнашмай, шау ярҙамында яһалған. *Һаңғырау тартынҡы.*

**һап (һабы)** *и.* Эш ҡоралдарының тотоу өсөн ҡулайлаштырылған өлөшө. *Балта һабы. Көрәк һабы. Сыбыртҡы һабы.*

**һарай[1]** *и.* **1.** Батшалар, хандар, дәүләт башлыҡтары йәшәй торған ҙур йорт. *Батша һарайы.* **2.** Махсус йәмәғәт ойошмаһы урынлашҡан ҙур бина. *Мәҙәниәт һарайы. Спорт һарайы.*

**һарай[2]** *и.* Мал-тыуар аҫрай торған йорт ҡаралтыһы; ҡура. *Ат һарайы. Һарай һалыу.*

**һаран** *с.* Үҙ нәмәһен кешегә бирергә ҡыҙғаныусан, ҡулдан ебәрмәҫкә тырышыусан. *Һаран кеше. Һаран булыу.*

**һарғайыу (һарғай-)** *ҡ.* **1.** Һары төҫкә әйләнеү, һары булыу. *Япраҡ һарғая.* **2.** Һарыға һабышыу. *Ҡайғынан һарғайыу.*

**һары** *с.* Ҡыҙыл менән йәшел араһындағы, алтын төҫөндәге, төҫ спектрында иң төп төҫтәрҙең береһе. *Һары буяу. Һары таҫма. Һары япраҡ.*

**һарыҡ (һарығы)** *и.* Ите, йөнө өсөн аҫралған көйшәүсе ваҡ йорт малы. *Аҡ һарыҡ. Ҡара һарыҡ. Һарыҡ бәрәсе. Һарыҡ һуйыу.*

**һарымһаҡ (һарымһағы)** *и.* **1.** Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡыяҡ япраҡлы баҡса үҫемлеге. *Һарымһаҡ үҫтереү.* **2.** Шул йәшелсәнең үтә еҫле, бүлкәт-бүлкәт һуған һымаҡ башы. *Эре һарымһаҡ. Һарымһаҡ турау.*

**һаҫыҡ** *с.* Насар, боҙоҡ еҫле. *Һаҫыҡ һаҙ. Һаҫыҡ булыу.*

**һаташыу (һаташ-)** *ҡ.* **1.** Йоҡлағанда йәки ҡаты ауырығанда аңһыҙ рәүештә һөйләнеү йәки нимәләр ҡыланыу. *Һаташып йоҡлау.* **2.** *күсм.* Яңылышыу, буталыу. *Әллә һаташа башланыңмы?*

**һатыу (һат-)** *ҡ.* **1.** Нимәнелер билдәле бер хаҡҡа биреү. *Ит һатыу. Һыйыр һатыу. Һатып ебәреү. Арзанға һатыу.* **2.** *күсм.* Кемгәлер, нимәгәлер тоғролоғоңдо боҙоу, хыянат итеү. *Дуҫты һатыу. Илде һатыу. Иманды һатыу. Намыҫты һатыу.*

**һатыусы** *и.* Магазинда йәки берәй сауҙа үҙәгендә, ойошмаһында һатыу иткән кеше. *Һатыусы булып эшләү.*

**һау** *с.* **1.** Ауырыуы булмаған, сирле түгел; сәләмәт. *Һау кеше. Һау булыу.* **2.** Теүәл, зарарланмаған. ♦ **Һау бул(ығыҙ)** һаубуллашыу, хушлашыу һүҙе.

**һауа** *и.* **1.** Кеше, хайуан һәм үҫемлектәрҙең тереклеге өсөн кәрәк булған, күбеһенсә азот менән кислородтан торған ерҙең атмосфераһындағы газдар ҡатнашмаһы. *Саф һауа. Һауа баҫымы.* **2.** Ер өҫтөндәге иркен бушлыҡ; күк йөҙө. *Һауаға осоу. Һауалағы болот.* **3.** Билдәле бер ваҡыттағы көн торошо. *Һауа торошо. Һауа шарттары. Һауа боҙолоу.*

**һаулашыу (һаулаш-)** *ҡ.* Осрашҡанда күрешеү, сәләм бирешеү; иҫәнләшеү йәки айырылышҡанда хушлашыу. *Һаулашып сығыу.*

**һаулыҡ (һаулығы)** *ҡ.* Ауырыуы, сире булмаған, һау булған хәл. *Һаулығы яҡшы. Һаулыҡты һаҡлау. Һаулыҡ – байлыҡ.* (Әйтем.)

**һау-сәләмәт** *с. йыйн.* Иҫән-һау. *Һау-сәләмәт булыу.*

**һауығыу (һауыҡ-)** *ҡ.* Ауырығандан һуң төҙәлеү; шәбәйеү. *Һауығып китеү.*

**һауынсы** *и.* Һыйыр һауыусы. *Һауынсы булыу.*

**һауыт** *и.* Эсенә нимәләр ҡойоп, һалып була торған нәмә. *Ағас һауыт. Бәләкәй һауыт. Быяла һауыт.*

**һауыт-һаба** *и. йыйн.* Аш-һыу әҙерләү, һаҡлау һ. б. өсөн ҡулланылған төрлө һауыт. *Һауыт-һаба йыуыу. Һауыт-һаба магазины.*

**һауыу (һау-)** *к.* Имсәкте ҡыҫып, тартып елендәге һөттө ағыҙып сығарыу. *Һыйыр һауыу. Ҡул менән һауыу. Машина менән һауыу.* ♦ **Ҡан һауыу** 1) тән туҡымаһының берәй еренә ҡан тулышыу. 2) *күсм.* ауыр кисерештән ныҡ әрнеү.

**һейҙек (һейҙеге)** *и.* Матдәләр алмашыныу арҡаһында бөйөрҙән бүленеп сығарылып, организмдан кесе ярау булып сыға торған шыйыҡлыҡ; бәүел. *Һейҙек ҡыуығы.*

**һелкенеү (һелкен-)** *к.* Урындағы көйө тегеләй-былай ҡуҙғалыу; киҫкен ҡалтыраныу. *Арбала һелкенеү. Һелкенеп ҡуйыу.* ♦ **Дер һелкенеү** ныҡ һелкенеү.

**һелкетеү (һелкет-)** *к.* Тегеләй-былай ҡуҙғатыу, киҫкен ҡалтыратыу, ҡыймылдатыу. *Ел үләнде һелкетә. Яурынды һелкетеү. Һелкетә тартыу.* ♦ **Ер һелкетеү** бик көслө, бик шәп хәрәкәт итеү; ярһыу.

**һелкеү (һелк-)** *к.* Киҫкен итеп, тегеләй-былай ҡуҙғатыу. *Баш һелкеү. Яулыҡ һелкеү. Һелкеп төшөрөү.*

**һелтәү (һелтә-)** *к.* **1.** Һауала тегеләй-былай болғау. *Ҡамсы һелтәү. Ҡылыс һелтәү.* **2.** Киҙәнеп бәреү, ырғытыу, һуғыу. *Таш һелтәү. Һелтәп ебәреү.* **3.** *күсм.* Кеше нәмәһен һорамай алып китеү; урлау.

**һеләүһен** *и.* Бесәйҙәр ғаиләһенә ҡараған һарғылт һоро төҫтәге ҡырағай йыртҡыс йәнлек. *Һеләүһен атыу. Һеләүһен табышына ағас башынан һикерә.*

**һеңдереү (һеңдер-)** *к.* **1.** Шыйыҡ йәки газ хәлендәге нәмәне үҙ эсенә тартыу; һурыу. *Дым һеңдереү. Еҫ һеңдереү. Мамыҡҡа дарыу һеңдереү.* **2.** Аҙыҡты үҙләштереү. *Аш һеңдереү.* **3.** *күсм.* Нимәнелер аңлап, хәтерҙә ныҡ ҡалдырыу. *Башҡа һеңдереү. Күңелгә һеңдереү.*

**һеңер** *и.* Быуындарҙы тоташтырып торған һары төҫтәге ныҡ туҡыма. *Һеңер өҙөлөү.*

**һеңеү (һең-)** *к.* **1.** Берәй нәмәнең эсенә шыйыҡ йәки газ хәлендәге нәмәләрҙең үтәнән-үтә үтеп инеүе, ҡурылыу. *Еҫ һеңә. Төтөн һеңә. Һеңеп бөтөү.* **2.** Аҙыҡ үҙләштерелеү. *Аш һеңеү процесы.* **3.** *күсм.* Күңелдә ныҡлап урынлашыу. *Йөрәккә һеңеү. Хәтергә һеңеү.*

**һеңле** *и.* Үҙеңдән кесе ҡыҙ туған.

**һепереү (һепер-)** *к.* Һепертке менән сүп-сарҙан таҙартыу. *Иҙән һепереү. Ишек алдын һепереү.*

**һепертке** *и.* Селек йәки сыбыҡтарҙы бергә бәйләп яһалған һеперә торған нәмә. *Селек һепертке. Һепертке бәйләү.*

**һеркә**[1] *и.* Әсе, ҡырҡыу еҫле, төҫһөҙ шыйыҡлыҡ (аш-һыуҙа ҡулланыла). *Билмәнгә һеркә һалыу.*

**һеркә**[2] *и.* Беттең йомортҡаһы.

**һеркә**[3] *и.* Сәскәле үҫемлектәрҙең саң кеүек ваҡ ҡына аталыҡ орлоғо.

**һибеү (һип-)** *ҡ.* **1.** Өҫтән сәсрәтеп һирпеү (ваҡ бөртөклө нәмәне). *Ем һибеү. Ҡом һибеү. Тоҙ һибеү.* **2.** Ниндәйҙер яҡтылыҡ сығанағынан һирпелеү. *Ҡояш нур һибә.* **3.** Шыйыҡ нәмәне сәсрәтеп өҫтән түгеү, һирпеү. *Гөлгә һыу һибеү. Утҡа кәрәсин һибеү.*

**һиҙгер** *с.* Нимәнелер еңел аңлаған, алдан тоя белгән. *Һиҙгер кеше. Һиҙгер булыу.*

**һиҙеү (һиҙ-)** *ҡ.* **1.** Тойоу ағзалары ярҙамында ниҙелер белеү. *Еҫ һиҙеү. Тәм һиҙеү.* **2.** Аң, күңел менән самалап белеү; алдан тойоу. *Кешенең уйын һиҙеү. Хәйләне һиҙеп ҡалыу.*

**һиҙәп (һиҙәбе)** *и.* Кейем-һалымға ҡаҙай торған ваҡ төймә. *Һиҙәп төшөү. Һиҙәпте элеү.*

**һикереү (һикер-)** *ҡ.* **1.** Кәүҙәне бер урындан икенсе урынға ынтылдырып ташлау. *Атҡа һикереп менеү. Һыуға һикереү. Һикереп төшөү.* **2.** Үрле-түбәнле киҫкен хәрәкәт итеү. *Туп һикерә.*

**һимеҙ** *с.* **1.** Тулы, йомро, йыуан. *Һимеҙ кеше. Һимеҙ булыу.* **2.** Майы күп, майлы (иткә, ашҡа ҡарата). *Һимеҙ ит. Һимеҙ һурпа.*

**һирпеү (һирп-)** *ҡ.* **1.** Ҡапыл һелтәп түгеү, һибеү (шыйыҡ йәки ваҡ нәмәне). *Һирпеп ебәреү. Һыу һирпеү.* **2.** *күсм.* Бөркөү, һибеү, таратыу (яҡтылыҡ, нурҙы һ. б.). *Нур һирпеү.* ♦ **Күҙ һирпеү** ҡапыл ҡарап алыу, ҡараш ташлау.

**һирәгәйеү (һирәгәй-)** *ҡ.* **1.** Һирәккә әйләнеү, һирәк булыу. *Урман һирәгәйә.* **2.** Нимәнеңдер кәмеүе, әҙәйеүе. *Осрашыу һирәгәйҙе.*

**һирәк** *с.* **1.** Бер-береһенән алыҫ, аралы урынлашҡан; ҡуйы түгел. *Һирәк ағас. Һирәк булыу.* **2.** Бик әҙ осрай торған. *Һирәк моң. Һирәк үҫемлектәр.* **3.** Күп ваҡыт үткәс ҡабатлана, була торған; *киреһе* йыш. *Һирәк ҡунаҡ.*

**һирәк-һаяҡ** *р.* Бик һирәк; һирәк-мирәк. *Һирәк-һаяҡ булыу.*

**һис** *киҫ.* **1.** Юҡлыҡ мәғәнәһенә ҡаты ҡәтғилек бирә; бөтөнләй, бер ҙә. *Һис уйламай. Һис ғәйепһеҙ.* **2.** Төрлө һүҙҙәр менән килеп, тулыһынса кире ҡағыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Һис бер. Һис ваҡыт. Һис ҡасан. Һис бер нәмә.*

**һиҫкәнеү (һиҫкән-)** *ҡ.* Нимәнәндер ҡапыл ҡурҡҡан һымаҡ булыу. *Һиҫкәнеп китеү.*

**hоҡланғыс** *с.* Һоҡланыу хисе уятырлыҡ; матур. *Һоҡланғыс кеше. Һоҡланғыс тәбиғәт.*

**hоҡланыу (hоҡлан-)** *ҡ.* Бик яҡшы, матур нәмәгә таң ҡалып, кинәнеп, шатланып ҡарау. *Һоҡланып ҡарау. Күреп hоҡланыу. Тәбиғәткә hоҡланыу.*

**hоло** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған ялбыр башаҡлы, көплө орлоҡло ашлыҡ һәм шуның орлоғо. *Һоло баҫыуы. Һоло сәсеү.*

**hомғол** *с.* Нәҙек оҙон, ҡупшы, зифа буйлы. *Һомғол ҡыҙ. Һомғол кәүҙә. Һомғол ҡарағай.*

**hорау**[1] **(hора-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәләр тураһында мәғлүмәт алыу маҡсатында кешегә мөрәжәғәт итеү. *Дәрес hорау. Юл hорау.* **2.** Нимәләр алырға теләп мөрәжәғәт итеү. *Аҡса hорау. Ашарға hорау. Һыу hорау.* **3.** Кемдәндер нимәләр эшләүҙе үтенеү. *Рөхсәт hорау. Үтенеп hорау.*

**hорау**[2] *и.* **1.** Яуап алыу маҡсатында әйтелгән һүҙ. *Һорау биреү. Һорауға яуап ҡайтарыу.* **2.** Тауарға h. б. булған ихтыяж, талап. *Аҙыҡҡа hорау. Кейемһалымға hорау.* **3.** Ниҙер теләп белдерелгән үтенес. *Һорауҙы кире ҡағыу. Һорауҙы үтәү.*

**hоро** *с.* Ҡара һәм аҡ төҫтәрҙең ҡушылдығынан торған буҙ төҫ, көл төҫө. *Һоро болот. Һоро йылан. Һоро шинель.*

**hоҫҡо** *и.* **1.** Ҡуҙ, көл йәки бүтән төрлө ваҡ нәмәне hоҫоп, йыйып ала торған ҡорамал. *Тимер hоҫҡо.* **2.** Ер соҡоусы машинаның балсыҡ-ташты hоҫа торған сүмесе. *Экскаватор hоҫҡоhо.*

**hөҙөмтә** *и.* Нимәнеңдер иң һуңынан дөйөмләштереп яһалған фекер, йомғаҡ; нәтижә. *Кире hөҙөмтә. Ыңғай hөҙөмтә. Һөҙөмтә яһау.*

**hөҙөү**[1] **(hөҙ-)** *ҡ.* Мөгөҙ менән төртөү (һыйыр малына ҡарата). *Үгеҙ hөҙҙө.*

**hөҙөү**[2] **(hөҙ-)** *ҡ.* **1.** Шыйыҡ нәмәне таҙартыу өсөн нимәләр аша үткәреү. *Һөт hөҙөү. Һурпаны hөҙөү.* **2.** Ау, йылым кеүек нәмә менән һыуҙан балыҡ тотоу. *Балыҡ hөҙөү. Һөҙгө менән hөҙөү.*

**hөҙәк** *с.* Әҙләп кенә үргә күтәрелгән йәки түбәнгә төшкән; *киреhе* текә. *Һөҙәк тау. Һөҙәк урын. Һөҙәк булыу.*

**hөжүм** *и.* **1.** Хәрби көстәрҙең алға хәрәкәтен тәьмин итеү өсөн дошманға ҡаршы йүнәлтелгән һуғыш. *Көслө hөжүм. Һөжүм башлау. Һөжүмгә күсеү.* **2.** *спорт.* Спорт уйындарында ҡаршы яҡты ҡыҫырыҡлау. *Беҙҙең хоккейсылар hөжүмгә күсте.*

**hөйкөмлө** *с.* Күңелгә ятышлы, күңелде тартып, яраттырып торған. *Һөйкөмлө бала. Һөйкөмлө ҡыҙ. Һөйкөмлө булыу.*

**һөйләм** *и. грам.* Бер бөтөн уй аңлатып грамматик һәм интонацион яҡтан ойошҡан һүҙ йәки һүҙҙәр бәйләнеше. *Ҡушма һөйләм. Ябай һөйләм. Һөйләм төҙөү.*

**һөйләү (һөйлә-)** *ҡ.* **1.** Уй-фекереңде телдән әйтеп биреү. *Хәбәр һөйләү. Матур һөйләү.* **2.** Ниндәйҙер хәл, ваҡиға тураһында хәбәр итеү. *Тарих һөйләү. Әкиәт һөйләү.* **3.** Кемдер тураһында һүҙ, хәбәр таратыу. *Кешене һөйләү.*

**һөйләшеү**[1] **(һөйләш-)** *ҡ.* **1.** Тел ярҙамында аралашыу, бер-береңә үҙ уй-фекереңде әйтеү. *Дуҫтарса һөйләшеү. Йылмайып һөйләшеү. Һөйләшеп алыу. Һөйләшеп килешеү. Һөйләшеп эшләү.* **2.** Баланың һүҙҙәр әйтә башлауы. *Һөйләшә башлау. Һөйләшә белеү.*

**һөйләшеү**[2] *и.* Үҙ-ара уртаҡ фекергә килер өсөн алып барылған һүҙ. *Һөйләшеү алып барыу. Һөйләшеүҙә ҡатнашыу.*

**һөйөклө** *с.* **1.** Күңелгә яҡын булған, тоғролоҡ, яҡынлыҡ тойғоларын уятҡан; һөйгән. *Һөйөклө бала. Һөйөклө илем. Һөйөклө әсә.* **2.** Һөйөү хисе, яратыу, мөхәббәт уятҡан. *Һөйөклө кәләш. Һөйөклө булыу.*

**һөйөнөс** *и.* Һөйөнөү, кинәнеү тойғоһо; ҡыуаныс, шатлыҡ. *Ҙур һөйөнөс. Һөйөнөс килтереү.*

**һөйөнөү (һөйөн-)** *ҡ.* Күңелгә ризалыҡ, рәхәтлек биргән ҡыуаныслы тойғо кисереү; шатланыу. *Ныҡ һөйөнөү. Һөйөнөп бөтә алмау.*

**һөйөнсө** *и.* **1.** Шатлыҡлы яңылыҡты хәбәр итеү алдынан әйтелә торған һүҙ (яуап итеп бүләк бирелә). *Һөйөнсөһөнә нимә бирәһең?* **2.** Шуға яуап итеп бирелгән бүләк. *Һөйөнсө биреү. Һөйөнсө һорау.*

**һөйөү**[1] **(һөй-)** *ҡ.* **1.** Күңелгә яҡын, үҙ күреү; яратыу. *Тыуған илде һөйөү.* **2.** Икенсе енес кешеһенә мөхәббәт тойғоһо кисереү; яратыу. *Ҡыҙҙы һөйөү. Өҙөлөп һөйөү.* **3.** Иркәләтеп, ҡосаҡлап, һыйпап наҙлау. *Бала һөйөү.*

**һөйөү**[2] *и.* Икенсе енес кешеһенә булған тәрән яратыу хисе; мөхәббәт. *Тәүге һөйөү. Ысын һөйөү. Һөйөү хисе.*

**һөйрәү (һөйрә-)** *ҡ.* Ерҙән һ. б. урындан күтәрмәй генә тартып хәрәкәт иттереү. *Арба һөйрәү. Һөйрәп сығарыу.* ♦ **Аяҡты саҡ һөйрәү** хәлһеҙ ҡалып көскә йөрөү.

**һөйәк (һөйәге)** *и.* **1.** Умыртҡалы хайуандарҙың һәм кешенең һөлдәһен тәшкил иткән ҡаты өлөшө. *Арҡа һөйәге. Бот һөйәге. Мал һөйәге.* **2.** Ит түшкәһенең бер киҫәге. *Бер һөйәк ит. Һөйәк кимереү.*

**һөйәнеү (һөйән-)** *ҡ.* Ҡыйшая биреп нимәгәлер терәлеү. *Ағасҡа һөйәнеү. Һөйәнеп тороу.*

**һөйәү (һөйә-)** *к.* Ауыш йәки текә баҫтырып үрге яғын нимәгәлер терәү. *Ағасты һөйәп ҡуйыу. Ҡоймаға һөйәү.*

**һөлдә** *и.* **1.** Кеше һәм йәнлектәр тәненең тотоноп тороуын тәьмин иткән һөйәктәр берекмәһе. *Кеше һөлдәһе. Балыҡ һөлдәһе.* **2.** *күсм.* Төҙөлә, ҡорола торған нәмәнең нигеҙен тәшкил иткән төп ҡоролма. *Өй һөлдәһе.*

**һөлөк (һөлөгө)** *и.* Тәнгә йәбешеп ҡан һура торған һыу йәнлеге. *Ҡара һөлөк. Шифалы һөлөк. Һөлөк һалыу.*

**һөнәр** *и.* **1.** Билдәле бер эш, шөғөл өлкәһе. *Һөнәргә өйрәнеү. Һөнәр белеү.* **2.** Билдәле бер нәмәгә булған тәбиғи һәләт. *Һөнәре күп. Һөнәр күрһәтеү.*

**һөнәрле** *с.* Ниндәй ҙә булһа бер һөнәргә эйә булған. *Һөнәрле кеше.*

**һөңгө** *и.* Тимер осло, оҙон һаплы боронғо яу ҡоралы. *Һөңгө менән сәнсеү.*

**һөргөн** *и.* Ғәйепләнгән кешене алыҫ төпкөлгә ебәреү язаһы һәм шул язаны үткәргән урын. *Һөргөнгә ебәреү. Һөргөндә булыу. Һөргөндән ҡайтыу.*

**һөрөү**[1] **(һөр-)** *к.* Һабан менән ер өҫтөн аҡтарып йомшартыу. *Һөргән ер. Ер һөрөү. Һабан һөрөү.*

**һөрөү**[2] **(һөр-)** *к.* **1.** Ашыҡтырып, ҡыҙыулатып ҡыуыу. *Һөрөп сығарыу.* **2.** Яза рәүешендә алыҫ, төпкөл урынға оҙатыу; һөргөнгә ебәреү. *Илдән һөрөү.*

**һөртөү (һөрт-)** *к.* **1.** Йомшаҡ нәмә менән ниҙелер ышҡып таҙартыу йәки ҡоротоу. *Иҙәнде һөртөү. Күҙ йәшен һөртөү. Ҡулды һөртөү.* **2.** Өҫтән йөрөтөп ниҙер һылау; яғыу. *Биткә кершән һөртөү. Дарыу һөртөү.*

**һөрән** *и.* Халыҡҡа ишеттереп йәки халыҡты саҡырып ҡысҡырған көслө тауыш. ♦ **Һөрән һалыу** нык ҡысҡырыу.

**һөрәнләү (һөрәнлә-)** *к.* Халыҡҡа ишеттереп йәки халыҡты саҡырып, нык ҡысҡырыу.

**һөт** *и.* **1.** Ҡатындарҙың һәм инә һөтимәр хайуандарҙың күкрәк биҙенән бүленеп сыҡҡан, яңы тыуған балаһын туйындырыу өсөн хеҙмәт иткән аҡ шыйыҡ матдә. *Һөт биҙе. Әсә һөтө.* **2.** Аҙыҡ өсөн һыйырҙан, кәзәнән һ. б. хайуандарҙан һауып алынған шыйыҡлыҡ. *Һыйыр һөтө. Ҡуйы һөт. Әсегән һөт. Һөт ҡайнатыу. Һөт эсеү.* **3.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙә йәки үҫемлектең орлоғонда була торған ҡуйы һут. *Кокос һөтө. Һөтләгәндең һөтө.*

**һуған** *и.* **1.** Эсе ҡыуыш ҡыяҡ япраҡлы, йомро төплө әсе тәмле йәшелсә. *Һуған сәсеү. Һуған үҫтереү.* ♦ **Ҡара һуған** һыуыҡҡа сыҙамлы күп йыллыҡ төпһөҙ һуған. **Орлоҡ һуғаны** орлоҡ сәсеп үҫтерелгән ваҡ һуған. **2.** Шул йәшелсәнең ашай торған һабағы йәки төбө. *Бер бау һуған. Йәшел һуған. Ашҡа һуған һалыу.*

**һуғыу (һуҡ-)** *ҡ.* **1.** Ҡул менән йәки башҡа берәр нәмә менән ныҡ ҡағыу; тондороу, бәреү. *Арҡаға һуғыу. Йоҙроҡлап һуғыу. Йыға һуғыу.* **2.** Ергә йәки башҡа бер нәмәгә ҡуша бәреү. *Күтәреп һуғыу.* **3.** Тауыш сығарып ҡағыу. *Барабан һуғыу. Сәғәт һуҡты.* **4.** Һулҡ-һулҡ итеп ҡағыу, тибеү (йөрәк, тамырға ҡарата). *Йөрәк һуға. Тамыр һуға.* **5.** Бәреп йәки төртөп уйнау. *Сәкән һуғыу. Туп һуғыу.* **6.** Электр, йәшен йәки тәбиғәттең тәьҫир көсө тейеп зарарлау. *Йәшен һуғыу. Боҙ һуғыу. Монар һуғыу. Ток һуғыу.* **7.** *күсм.* Нимәнеңдер һаулыҡты зыянлауы. *Зәхмәт һуғыу.*

**һуғыш** *и.* **1.** Ил, дәүләт йәки ижтимағи кластар араһындағы ҡоралды көрәш. *Бөйөк Ватан һуғышы. Һуғыш асыу. Һуғышҡа китеү.* **2.** Талаш-тартыштан сыҡҡан үҙ-ара туҡмаш. *Һуғыш сығыу.*

**һуғышсы** *и.* Һуғышта ҡатнашыусы; яугир. *Батыр һуғышсы.*

**һуғышыу (һуғыш-)** *ҡ.* **1.** Берәй ил, халыҡ менән һуғыш алып барыу. *Азатлыҡ өсөн һуғышыу.* **2.** Үҙ-ара һуғышыу. *Һуғышып китеү. Урын өсөн һуғышыу.*

**һуҙылыу (һуҙыл-)** *ҡ.* **1.** Тартҡандан, киргәндән оҙонайыу. *Бау һуҙыла. Кирелеп һуҙылыу.* **2.** Буйҙан-буйға, оҙон булып теҙелеү, тартылыу. *Йылға буйлап баҡсалар һуҙылған.* **3.** Оҙаҡ дауам ителеү. *Оҙаҡҡа һуҙылыу. Эштәр һуҙылды.*

**һуҙынҡы** *с. лингв.* Һауаны ауыҙҙан иркен үткәреп, һуҙып әйтелә торған. *Һуҙынҡы өндәр. Ҡалын һуҙынҡылар. Нәҙек һуҙынҡылар.*

**һуҙыу (һуҙ-)** *ҡ.* **1.** Тартып, киреп оҙонайтыу. *Резинаны һуҙыу.* **2.** Турайтыу, төҙ рәүешкә килтереү; яҙыу. *Аяҡты һуҙып ултырыу.* **3.** Берәй нәмәне алыу йәки биреү өсөн ынтылыу; һоноу. *Ҡул һуҙыу. Сәскә һуҙыу.* **4.** Оҙонлоҡҡа тартыу йәки оҙонлоҡҡа нимәлер үткәреү. *Һуҙып һалыу. Һыу торбаһы һуҙыу.*

**һуйыр** *и.* Ҡорҙар ғаиләһенә ҡараған эре урман ҡошо. *Буҙ һуйыр. Ҡара һуйыр. Һуйыр урыны.*

**һуйыу (һуй-)** *ҡ.* **1.** Малды салып, тейешенсә эшкәртеү. *Һыйыр һуйыу.* **2.** Ҡуптарып һыҙырыу; тунау (мал, йәнлектең тиреһен, ағастың ҡабығын һ. б.). *Йүкә һуйыу.*

**һуҡмаҡ (һуҡмағы)** *и.* Йәйәү кеше йәки мал йөрөй торған тар юл. *Һуҡмаҡ һалыу. Һуҡмаҡтан йөрөү.*

**һуҡыр** *с.* Күреү һәләтенән мәхрүм. *Һуҡыр кеше. Һуҡыр күҙ. Һуҡыр булыу.* ♦ **Һуҡыр (бер) тин** бик әҙ генә нәмә. **Һуҡыр сысҡан** ер аҫтынан юл йырып йөрөй торған осло моронло, тарбаҡ ҡыҫҡа аяҡлы хайуан.

**һуҡырайыу (һуҡырай-)** *ҡ.* Һуҡырға әйләнеү, һуҡыр булыу. *Һуҡырайып ҡалыу.*

**һул** *с.* **1.** Кәүҙәнең йөрәк яғындағы өлөшө. *Һул аяҡ. Һул күҙ. Һул ҡул.* **2.** Тиҫкәре. *Кейемдең һул яғы. Һул яғын әйләндереү.*

**һулаҡай** *с.* **1.** Һул ҡул менән эшләгән. *Һулаҡай кеше. Һулаҡай булыу.* **2.** *ҡар.* **һул.** *Һулаҡай ҡул. Һулаҡай аяҡ. Кейемдең һулаҡай яғы.*

**һулау (һула-)** *ҡ.* Үпкәгә һауа алып тын сығарыу; тын алыу. *Еңел һулау. Тәрән һулау.*

**һулыу (һулы-)** *ҡ.* Кибеү, шиңеү (үҫемлектәргә ҡарата). *Ҡояшта һулыу. Сәскәләр һулып бөттө.*

**һулыш** *и.* **1.** Тереклектәрҙең үпкәһендәге һауа алмашыныуы; тын алыш. *Иркен һулыш. Һулышһыҙ ҡалыу.* **2.** *күсм.* Нимәнендер яһаған тәьҫире, йоғонтоһо. *Заман һулышы. Яҙ һулышы.*

**һум** *и.* Йөҙ тингә тиң булған аҡса берәмеге; тәңкә. *Биш һум. Ун һум.*

**һунар** *и.* Ҡырағай ҡош йәки йәнлектәрҙе аулау, атыу эше; ау. *Төлкө һунары. Һунар мылтығы. Һунарға сығыу.*

**һунарсы** *и.* Һунар менән шөғөлләнеүсе, һунар итеүсе. *Оҫта һунарсы. Һунарсы булыу.*

**һуң**[1] *р.* Тейешле ваҡыттан аҙаҡ, артҡа ҡалып (эшләү, хәрәкәт итеү һ. б.). *Һуң тороу. Һуң ҡайтыу. Яҙ һуң килде.*

**һуң**[2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, билдәле бер хәл-ваҡиғаның, ваҡыттың аҙағын белдерә. *Төштән һуң. Эштән һуң. Ямғырҙан һуң.*

**һуңғы** *с.* **1.** Төрлө нәмәнең йәки эш-хәлдең иң аҙаҡҡыһы. *Һуңғы дәрес. Һуңғы осрашыу. Һуңғы тин.* **2.** Әле генә донъяға сыҡҡан, иң яңы. *Һуңғы хәбәрҙәр. Журналдың һуңғы һаны.*

**һуңлау (һуңла-)** *ҡ.* Тейешле ваҡытҡа өлгөрмәү; һуңға ҡалыу. *Дәрескә һуңлау. Һуңлап йөрөү.*

**һуңынан** *р.* Күпмелер ваҡыттан һуң, аҙаҡтан. *Һуңынан килеү.*

**һурыу (һур-)** *ҡ.* **1.** Кейҙерелгән, тығылған ерҙән тартып алыу, ысҡындырыу. *Ҡындан ҡылысты һурыу. Сөйҙө һурыу. Теште һурыу.* **2.** Тел, ирен ярҙамында нимәнелер имеү. *Бармаҡты һурыу. Кәнфит һурыу.* **3.** Үҙенә тартып һөйрәү. *Насостар нефть һура.* **4.** Тамыр аша туҡланыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Ерҙән дым һурыу.*

**һут** *и.* **1.** Үҫемлек, емеш-еләк туҡымаһындағы шыйыҡлыҡ. *Емеш һуты. Кишер һуты. Һут эсеү.* **2.** Кеше һәм тереклектәрҙең аш ҡайнатыу ағзаларындағы шыйыҡлыҡ. *Ашҡаҙан һуты.*

**һүҙ** *и.* **1.** Ысынбарлыҡтағы берәй предметты, күренеште, төшөнсәне аңлатҡан өндәр теҙмәһе. *Һүҙҙең мәғәнәһе. Һүҙ яһалышы.* **2.** Ике арала йәки халыҡ алдында һөйләнгән хәбәр. *Ҡаты һүҙ. Һүҙ һөйләү. Һүҙ әйтеү. Йылы һүҙ — йән аҙығы.* (Әйтем.) **3.** Кем йәки ниҙер хаҡында халыҡ араһында йөрөгән төрлө хәбәр. *Һүҙ ишетеү. Һүҙ йөрөтөү. Яҡшы һүҙ йөрөү.* **4.** Ниҙер хаҡындағы вәғәҙә. *Һүҙ биреү. Һүҙ ҡуйышыу. Һүҙҙә тороу.* ♦ **Бер һүҙле булыу** 1) әйткән фекерҙә ныҡ тороу; 2) кәмәкләп бер һүҙҙе һөйләү, бер фекерҙә булыу. **Ҡара һүҙ** 1) халыҡ ижадындағы сәсмә әҫәр; 2) әкиәт.

**һүҙбәйләнеш** *и. лингв.* Мәғәнәүи һәм грамматик яҡтан үҙ-ара бәйләнештә булған һүҙҙәр ҡушылмаһы.

**һүҙлек (һүҙлеге)** *и.* **1.** Һүҙҙәрҙе алфавит тәртибендә мәғәнәләрен аңлатып йәки икенсе телгә тәржемә итеп төҙөлгән китап. *Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. Башҡортса-русса һүҙлек.* **2.** Кемдер тарафынан йәки ниндәйҙер эш өлкәһендә ҡулланылған һүҙҙәр йыйылмаһы. *Телдең һүҙлек составы.*

**һүҙмә-һүҙ** *р.* Әйтелгән йәки яҙылғанды һис үҙгәртмәйенсә. *Һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү.*

**һүҙьяһалыш** *и. лингв.* Тел ғилемендәге яһалма һүҙҙәрҙең барлыҡҡа килеүен, үҫешен өйрәнә торған өлкә.

**һүлпән** *с.* **1.** Эштә, хәрәкәттә ауыр, яй ҡуҙғалыусан, дәртһеҙ эшләгән. *Һүлпән кеше.* **2.** Яй, дәртһеҙ башҡарылған. *Һүлпән аҙым. Һүлпән эш.*

**һүнеү (һүн-)** *ҡ.* **1.** Янныуҙан, яҡтыртыуҙан туҡтау. *Йондоҙ һүнә. Усаҡ һүнә. Ут һүнә. Шәм һүнә.* **2.** *күсм.* Юҡҡа сығыу, бөтөү. *Дәрт һүнеү. Өмөт һүнеү. Теләк һүнеү.*

**һүрелеү (һүрел-)** *ҡ.* **1.** Ялҡынлап, баҙлап янған хәлдән көсө кәмеү, һүнергә, һыуырға яҡынлау. *Ҡуҙ һүрелә. Мейес һүрелә.* **2.** *күсм.* Хис-тойғо нык көсәйгән йәки ҡыҙған хәлдән баҫылыу, һүлпәнәйеү. *Асыу һүрелә. Дәрт һүрелә. Күңел һүрелеү.*

**һүрәт** *и.* Ниҙеңдер төҫ-килбәтен, рәүешен сағылдырып, ҡулдан яһаған күсермә, рәсем. *Кеше һүрәте. Өй һүрәте. Һүрәт төшөрөү.*

**һүрәтләү (һүрәтлә-)** *ҡ.* **1.** Һүрәт итеп төшөрөү. *Диңгеҙҙе һүрәтләү. Тәбиғәтте һүрәтләү.* **2.** Художестволы формала тасуирлау, күрһәтеү (әҙәбиәттә, сәнғәттә һ. б.). *Тарихты һүрәтләү. Автор романда үҙ тормошон һүрәтләй.*

**һүтеү (һүт-)** *ҡ.* **1.** Тегелгән, ишелгән, уралған нәмәне тағатыу. *Йомғаҡты һүтеү. Күлдәкте һүтеү.* **2.** Ҡороп, яһап ҡуйған нәмәне таратыу, боҙоу. *Ҡойманы һүтеү. Моторҙы һүтеү. Өйҙө һүтеү.*

**һыбай** *с.* **1.** Атҡа менгән, атҡа атланған. *Һыбай кеше.* **2.** *р. мәғ.* Ат менгән рәүештә. *Һыбай йөрөү. Һыбай сабыу.*

**һығылыу (һығыл-)** *ҡ.* Көс тәьҫирендә эйелеп, бөгөлөп, кәкре хәлгә килеү; бөгөлөү. *Һығылып тороу.*

**һығымта** *и.* Уйлап, фекер йөрөтөп, сағыштырыу нәтижәһендә барлыҡҡа килгән дөйөм фекер; йомғаҡ. *Һығымта сығарыу. Һығымта яһау.*

**һығыу (һыҡ-)** *ҡ.* **1.** Уратып ҡыҫыу, быуыу. *Билде һығып бәйләү. Муйынды һығыу. Һығып ҡосаҡлау.* **2.** Бороп, ҡыҫып һарҡытыу, һыуын сығарыу. *Керҙе һығыу. Һығып сығарыу.*

**һыҙғаныу (һыҙған-)** *ҡ.* Итәк-ең, балаҡ, сабыуҙы йыйып күтәреү; төрөү. *Балаҡ һыҙғаныу. Ең һыҙғаныу.*

**һыҙғыртҡыс** *и.* Өрөп һыҙғырта торған нәмә. *Балалар һыҙғыртҡысы. Милиционер һыҙғыртҡысы.*

**һыҙғыртыу (һыҙғырт-)** *ҡ.* Өрөп һыҙғырған тауыш сығартыу. *Һыҙғыртҡыс һыҙғыртыу.*

**һыҙғырыу (һыҙғыр-)** *ҡ.* **1.** Теш, ирен араһынан өрөп тауыш сығарыу. *Көй һыҙғырыу. Әсе итеп һыҙғырыу.* **2.** Әсе тауыш сығарыу. *Буран һыҙғыра. Пулялар һыҙғырып оса.*

**һыҙғыс** *и.* **1.** Скрипка ҡылдарын ышҡып уйнай торған ҡыллы ҡорамал. *Скрипка һыҙғысы.* **2.** Ҡәләм менән туралап һыҙыу өсөн ҡулланылған төҙ, йоҡа ҡорамал, линейка. *Һыҙғыс ҡуйып һыҙыу.*

**һыҙлау (һыҙла-)** *ҡ.* **1.** Тәнгә, үҙәккә үтеп, һыҙып ауыртыу. *Аяҡ һыҙлай. Быуындар һыҙлай. Теш һыҙлай.* **2.** *күсм.* Ҡайғынан һ. б. әрнеү; әсенеү. *Йөрәк һыҙлай. Күңел һыҙлай.*

**һыҙыҡ (һыҙығы)** *и.* **1.** Бик тар ғына итеп нимәгәлер оҙонға төшөрөлгән эҙ. *Тура һыҙыҡ. Һыҙыҡ һыҙыу.* **2.** Ике араны бүлгән, нимәнендер сиген билдәләгән ысын йәки шартлы буй. *Офоҡ һыҙығы. Сик һыҙығы. Фронт һыҙығы.*

**һыҙырыу (һыҙыр-)** *ҡ.* **1.** Ҡуптарып, айырыу; әрсеү, тунау. *Ағастың ҡабығын һыҙырыу. Туҙ һыҙырыу.* **2.** Сыйып, тирене йәрәхәтләү. *Ҡулды һыҙырыу.* **3.** *күсм.* Сыбыҡ йәки сыбыртҡы менән нıҡ итеп туҡмау. *Ҡайыш менән һыҙырыу.*

**һыҙыу (һыҙ-)** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер тар һәм оҙон буй итеп эҙ үткәреү. *Ҡәләм менән һыҙыу. Тура һыҙыҡ һыҙыу.* **2.** Ниҙендер шартлы һүрәтен йәки һүрәттең тәүге өлгөһөн яһау. *Эскиз һыҙыу. Һыҙма һыҙыу.* **3.** Кәрәкһеҙ тип һанап алып ташлау. *Исемлектән һыҙыу. Һыҙып ташлау.* **4.** *күсм. һөйл.* Тиҙ генә ҡасыу. *Йыйылыштан һыҙыу. Урманға һыҙыу.*

**һый** *и.* Кешене хөрмәтләп әҙерләнгән яҡшы аҙыҡ. *Һый әҙерләү. Һый ултыртыу.*

**һыйлау (һыйла-)** *ҡ.* **1.** Аш-һыу әҙерләп хөрмәт менән ҡунаҡ итеү. *Ҡунаҡ һыйлау. Саҡырып һыйлау.* **2.** Бүләк итеп биреү. *Китабыңды миңә һыйла әле.*

**һыйпау (һыйпа-)** *ҡ.* Ус менән нимәнеңдер өҫтөнән йомшаҡ ҡына йөрөтөү. *Башты һыйпау. Һаҡалды һыйпау.*

**һый-хөрмәт** *и. йыйн.* Ҡунаҡ өсөн әҙерләнгән аҙыҡ-түлек. *Һый-хөрмәт әҙерләү.*

**һыйыр** *и.* Һөт, ит өсөн аҫралған айры тояҡлы эре мөгөҙлө инә мал. *Ала һыйыр. Оло һыйыр. Тана һыйыр. Һауын һыйыр. Һөтлө һыйыр. Һыйыр һауыу.*

**һыйыу (һый-)** *ҡ.* **1.** Дәүмәле, күләме тап килеү. *Ҡумтаға һыйыу. Мейескә һыйыу.* **2.** Таман булыу. *Был бүрек миңә һыя.* ♦ **Аҡылға (башҡа) һыймау** нимәнеңдер шулай булыуына ышанмау. **Донъяға һыймау** шашып, бөтә кешене рәнйетеп йөрөү.

**һылау (һыла-)** *ҡ.* Нимәгәлер йомшаҡ, һыулы нәмә йәбештереү. *Балсыҡ һылау. Һылап ҡуйыу. Мейес һылау. Өй һылау.*

**һылтау[1] (һылта-)** *ҡ.* Ғәйепте йәки сәбәпте кемгәлер, нимәгәлер ауҙарыу. *Авторға һылтау. Ғәйепте кешегә һылтау.*

**һылтау[2]** *и.* Аҡлау, аҡланыу өсөн тапҡан сәбәп. *Һылтау итеү. Һылтау эҙләү. Һылтау табыу.* ♦ **Юҡ һылтауҙы бар итеү** сәбәп юҡта сәбәп тапҡан булыу.

**һылыу** *с.* Тышҡы булмышы күңелгә ятышлы; матур, сибәр. *Һылыу егет. Һылыу ҡыҙ.*

**һымаҡ** *бәйл.* Нимәнеңдер сифатын, ҡылығын икенсе нәмәгә оҡшатҡанда, сағыштырғанда ҡулланыла. *Диңгеҙ һымаҡ ҙур. Әсәй һымаҡ күреү.*

**һын** *и.* **1.** Тышҡы тән төҙөлөшө; кәүҙә, буй. *Һыны матур. Һылыу һын. Олпат һынлы.* **2.** Иҫтәлек өсөн таш, гранит һ. б. нәмәнән яһалған нимәнеңдер кәүҙәһе. *Болан һынын яһау. Һалдат һыны.* ♦ **Һын ҡатыу** тын ҡыҫылыу. **Һын теймәү** оҡшатмау, күңелгә ятмау.

**һынамыш** *и.* Халыҡта һаҡланып, быуындан быуынға күсеп килгән тәбиғәт күренештәре, йәшәү һәм тормош тәжрибәһе һ. б. тураһындағы күҙәтеүҙәр. *Һынамыштар йыйыу. Һынамышҡа таяныу. Һынамыштарға ышаныу.*

**һынау[1] (һына-)** *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер сифатын, мөмкинлеген белеү өсөн тәжрибә үткәреү. *Машинаны һынау. Һынап ҡарау.* **2.** Күҙәтеп кемдең йәки нимәнеңдер һәләтен, ҡылығын, холҡон асыҡлау. *Дуҫты һынау. Һынап йөрөй.*

**һынау**[2] *и.* **1.** Нимәнендер берәй сифатын, мөмкинлеген билдәләү өсөн үткәрелгән тәжрибә. *Һынау үткәреү.* **2.** Үҙләштерелгән белемде билдәләү өсөн алынған һорау. *Күҙгә һынау. Һынау биреү. Һынау көндәре.*

**һындырыу (һындыр-)** *к.* **1.** Ҡаты нәмәне бөгөп, өлөшкә айырыу. *Таяҡты һындырыу. Һындырып алыу. Һындырып сығарыу.* **2.** *күсм.* Кешенең эске көсөн ҡаҡшатыу. *Кешенең рухын һындырыу.* **3.** *күсм.* Йылытыу (көнгә ҡарата). *Көн һындырҙы.*

**һынлы** *с.* Зифа буйлы, һомғол матур кәүҙәле. *Һынлы буй.* ♦ **Һынлы сәнғәт** ысынбарлыҡты яҫылыҡта йәки күләмле итеп һүрәтләү сәнғәтенең (живопись, графика, скульптура) дөйөм атамаһы.

**һыныҡ** *с.* **1.** Һынып боҙолған, кителгән, бөтөн түгел. *Һыныҡ салғы.* **2.** *и. мәғ.* Һынған бер өлөш, киҫәк. *Металл һыныҡтары йыйыу.*

**һыныу (һын-)** *к.* **1.** Ҡырҡа бөгөлөү, шаҡарылыу арҡаһында өлөшкә айырылыу (ҡаты нәмәгә ҡарата). *Батырҙың ҡылысы һынмаһын. Тырманың теше һынған. Ҡанаты һынған ҡош.* **2.** *күсм.* Ҡыҫымға түҙмәй еңелеү. *Йәш кеше һыныуы бар.* **3.** *күсм.* Ҡаты һыуыҡ йомшарыу. *Ғинуар һыуығы һыныу.*

**һыңар** *и.* Ишле, ҡуш нәмәнең береһе. *Бейәләйҙең һыңары.*

**һыпырыу (һыпыр-)** *к.* **1.** Ҡул менән ниҙеңдер өҫтөнән үткәреү; һыйпау. *Арҡанан һыпырыу. Мыйыҡты һыпырыу. Саңды һыпырыу. Ус менән һыпырыу.* **2.** Ябылған, кейелгән нәмәне бер юлы систереү, һалдырыу, алыу. *Аттың йүгәнен һыпырыу. Өҫтән юрғанды һыпырып алыу.* ♦ **Ыңғайға һыпырыу** кешегә ҡаршы өндәшмәй ыңғайына, яйына тороу.

**һыр** *и.* **1.** Ағас һ. б. ҡаты нәмәләргә уйып, соҡоп яһаған биҙәк. *Һыр һалыу. Һыр яһау.* **2.** Бер буйы соҡорланып, бер буйы киртләсләнеп торған буй-буй һыҙат. *Һырҙар менән эшләнгән ваза.* **3.** Кешенең битендәге йыйырсыҡ. *Маңлай һырҙары. Һырҙар менән ҡапланыу.*

**һырға** *и.* **1.** Ҡолаҡҡа матурлыҡ өсөн тағыла торған биҙәүес. *Алтын һырға. Көмөш һырға. Һырға тағыу.* **2.** *күсм.* Ҡайһы бер ағастың һалынып торған сәскә бөрөһө. *Ерек һырғаһы. Ҡайын һырғаһы.* **3.** Тәңкә теҙелгән суҡлы муйынсаҡ. *Һырға тағыу.*

**һырғалаҡ (һырғалағы)** *и.* Сана шыуып уйнай торған ҡалҡыу урын. *Һырғалаҡ шыуыу. Һырғалаҡ эйеү.*

**һырт** *и.* **1.** Йәнлек-хайуандың буйҙан-буй үткән арҡа үҙәге. *Һырт буйы. Һыртына эйәр һалыу.* **2.** (*йәки* **тау һырты**) Тауҙың оҙон булып һуҙылған өҫкө буйы. *Урал һырты. Һыртҡа менеү.* **3.** Ниҙеңдер алғы, йөҙ яғына ҡаршы булған өлөшө. *Бысаҡтың һырты. Ураҡтың һырты.* ♦ **Һырт менән тороу** ҡаршы булыу.

**һырыу**[1] **(һыры-)** *к.* **1.** Эсенә йөн, мамыҡ һымаҡ нәмә һалып, үтә сәнсеп тегеү. *Юрған һырыу.* **2.** Кирегә аша сәнсеп тегеү.

**һырыу**[2] **(һыры-)** *к.* **1.** Күп булып йәбешеү. *Дегәнәк һырыу. Йөн һырыу.* **2.** Күмәк булып уратыу. *Балалар һырып алды.*

**һытыу (һыт-)** *к.* **1.** Ҡыҫып, һығып, эсендәге шыйыҡ нәмәһен сығарыу. *Баланды һытыу. Йомортҡа һытыу. Шешекте һытыу.* **2.** *күсм.* Асыулы, йәмһеҙ төҫ биреп йөҙҙө, сырайҙы боҙоу. *Сырай һытыу.*

**һыу** *и.* **1.** Үтә күренмәле төҫһөҙ шыйыҡлыҡ. *Бер йотом һыу. Шишмә һыуы.* **2.** Шул төҫһөҙ шыйыҡлыҡтан торған йылға, күл, диңгеҙ. *Һыуҙы аша сығыу. Һыу буйында йөрөү.* ♦ **Тере һыу** *миф.* әкиәттәрҙәге үлгән кешене кире терелтә торған изге һыу. **Һыуға баткандай юҡ булыу** эҙһеҙ-хәбәрһеҙ юғалтыу. **Һыуҙан ҡоро сығыу** ғәйепле хәлдән яуапһыҙ, анһат ҡотолоу. **Һыу кеүек эсеү** бик күп белеү, яҡшы уҡыу.

**һыулау (һыула-)** *к.* **1.** Һыуға мансыу, һыу итеү; еүешләү. *Кейемде һыулау.* **2.** Һыуға болғатыу, һыулы итеү. *Ҡорот һыулап эсеү.*

**һыуһар** *и.* **1.** Ялбыр ҡойроҡло, көрән төҫтәге ҡиммәт тиреле ҙур булмаған йыртҡыс йәнлек. *Һыуһар тотоу. Һыуһарға һунар итеү.* **2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Һыуһар яға.*

**һыуһау (һыуһа-)** *к.* **1.** Һыу эске килеү. *Беҙ һыуһаныҡ.* **2.** *күсм.* Ныҡ зарығыу, көслө күңел талабын һиҙеп нимәгәлер ынтылыу. *Белемгә һыуһау.*

**һыуыҡ**[1] *с.* Ғәҙәттәгенән ныҡ түбән температуралы; *киреһе* йылы. *Һыуыҡ ел. Һыуыҡ көн. Һыуыҡ ҡыш. Һыуыҡ һыу.*

**һыуыҡ**[2] **(һыуығы)** *и.* Ғәҙәттәгенән ныҡ түбән температуралы һауа. *Көҙгө һыуыҡ. Ҡышҡы һыуыҡ. Сатнама һыуыҡ.* ♦ **Һыуыҡ тейеү** һалҡын тәьҫиренән ауырыу.

**һыуыныу (һыуын-)** *к.* **1.** Эҫелеге кәмеү, һалҡынайыу. *Көндәр һыуынды. Сәй һыуынды.* **2.** Ярһыу ҡайтыу; тынысланыу.

**һыуытҡыс** *и.* Тиҙ боҙола торған ашамлыҡтарҙы һаҡлау өсөн түбән температура булдырылған махсус ҡоролма. *Итте һыуытҡыста һаҡлау.*

**һыуытыу (һыуыт-)** *к.* Һыуыҡ хәлгә килтереү, йылылығын бөтөрөү. *Сәйҙе һыуытыу.*

**һәйбәт** *с.* Яҡшы. *Һәйбәт кеше. Һәйбәт китап. Һәйбәт көн.*

**һәйбәтләү (һәйбәтлә-)** *к.* Һәйбәт итеү. *Һәйбәтләп ашау. Һәйбәтләп эшләү.*

**һәйкәл** *и.* Ҙур тарихи ваҡиға йәки танылы кешегә бағышлап ҡуйылған архитектура йәки скульптор ҡоролма. *Мәрмәр һәйкәл. Салауат Юлаев һәйкәле. Һәйкәл ҡуйыу.*

**һәләк: һәләк булыу** юҡҡа сығыу, бөтөү, үлеү. *Күп кеше һәләк булды.* **Һәләк итеү** юҡҡа сығарыу, бөтөрөү.

**һәләт** *и.* Кешегә тыумыштан бирелгән нимәнелер эшләү, булдыра алыу, ижад итеү ҡеүәһе, булдыҡлылыҡ. *Бейеү һәләте. Музыкаға булған һәләт. Һәләтте үҫтереү.*

**һәм** *йыйыу терк.* Тиң дәрәжәле һүҙ һәм һөйләмдәрҙе йыйып теркәй. *Ай һәм ҡояш. Ер һәм күк. Егеттәр һәм ҡыҙҙар.*

**һәнәк (һәнәге)** *и.* Бесән, һалам һ. б. сәнсеп алыу, өйөү, таратыу өсөн хужалыҡта ҡулланылған оҙон һаплы, саталы эш ҡоралы. *Ағас һәнәк. Тимер һәнәк. Һәнәк һабы.*

**һәрмәү (һәрмә-)** *ҡ.* Күрмәгән көйө ниҙелер табыу йәки тотоп ҡарау өсөн ҡул йөрөтөү. *Һәрмәп ҡарау. Һәрмәп табыу. Һәрмәп тотоу.*

# Ц

**цемент** *и.* Һыуға болғатҡанда таш булып ҡата торған минераль онтаҡ сифатындағы төҙөлөш материалы. *Цемент әҙерләү. Цемент заводы. Цемент иҙмәһе.*

**центнер** *и.* Йөҙ килограмға торошло ауырлыҡ үлсәү берәмеге. *Утыҙ центнер иген.*

**цех** *и.* Сәнәғәт предприятиеһындағы төп етештереү берәмеге һәм шул берәмек урынлашҡан бина. *Мартен цехы. Цех конторы. Цехта эшләү.*

**цирк** *и.* **1.** Хайуандар менән сығыш яһауҙан һәм акробатика, клоунада, эквилибристика кеүек жанрҙарҙан торған сәнғәт төрө. *Циркты яратыу. Цирк мәктәбе.* **2.** Шул сәнғәт төрөн тамашасыға күрһәтеү менән шөғөлләнгән ойошма һәм уның бинаһы. *Циркта эшләү. Цирк артисы.*

**циркуль (циркуле)** *и.* Түңәрәк һыҙа һәм һыҙыҡтарҙың оҙонлоғон үлсәй торған ике саталы ҡорал; йәзбә. *Циркуль менән һыҙыу. Циркуль энәһе.*

**циферблат** *и.* Үлсәү ҡорамалдарының, сәғәттәрҙең һан күрһәткесле пластинкаһы. *Компас циферблаты. Сәғәт циферблаты. Циферблат түңәрәге.*

**цифр** *и.* Һанды белдергән билдә. *Ғәрәп цифры. Рим цифры. Цифрҙар менән күрһәтеү.*

# Ч

**часть (часы)** *и.* **1.** Айырым бер ғәскәри берәмек. *Авиация часы. Хәрби часть. Үҙ часына барып етеү.* **2.** Бөтөндө, системаны тәшкил иткән нәмәнең (организм, механизм һ. б.) бер өлөшө. *Запас часть. Сәғәт частары.*

**чек (чегы)** *и.* Тауар хаҡын түләгәнлеккә кассанан бирелгән ҡағыҙ. *Чек алыу. Чек биреү. Чек кенәгәһе.*

**чемпион** *и.* Спорт ярыштарында еңеп, беренселекте алған өсөн бирелә торған исем һәм шул исемде яулаған кеше йәки команда. *Донъя чемпионы. Йөҙөү буйынса чемпион. Чемпион дәрәжәһе. Чемпион призы.*

**чемпионат** *и.* Спорттың бер төрө буйынса беренселек өсөн үткәрелгән ярыш. *Ирекле көрәш буйынса донъя чемпионаты. Шахмат чемпионаты.*

# Ш

**шабырлау (шабырла-)** *ҡ.* Шабыр итеү, шабыр-шобор килеү. *Шабырлап ағыу. Шабырлап ҡойолоу.*

**шағир** *и.* Шиғыр яҙған кеше. *Билдәле шағир. Йәш шағир. Шағирҙар менән осрашыу.*

**шағирә** *и.* Шиғыр яҙған ҡатын-ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙ шағир. *Башҡорт шағирәләре.*

**шайтан** *и.* **1.** Мосолман мифологияһында төрлө рәүешкә инә алған мифик зат; ен. *Шайтан балаһы.* **2.** Әрләгәндә, һуҡранғанда әйтелә. *Ах, шайтан, онотто бит.*

**шаҡарыу (шаҡар-)** *ҡ.* **1.** Аяҡ-ҡулды, башты көс менән артҡа, кирегә ҡайырыу. *Аяҡты шаҡарыу. Ҡулды шаҡарыу.* **2.** Артҡа ҡайтарып ҡуйыу. *Яулыҡты шаҡарып бәйләү.* **3.** Икенсе йүнәлешкә бороу, ҡайырыу. *Атты уңға шаҡарыу.*

**шаҡмаҡ (шаҡмағы)** *и.* **1.** Тигеҙ алты яҡлы куб формаһындағы нәмә. *Шәкәр шаҡмағы.* **2.** Ниндәйҙер яҫылыҡтағы тура мөйөш, квадрат. *Шахмат таҡтаһының шаҡмағы. Шаҡмаҡ һыҙыу.*

**шаҡыу (шаҡы-)** *ҡ.* Шаҡ-шоҡ итеп һуғыу; шаҡылдатыу. *Ишек шаҡыу. Ҡапҡа шаҡыу.*

**шалҡан** *и.* Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ике йыллыҡ үҫемлек, йәшелсә һәм шуның ашай торған тамыр өлөшө. *Шалҡан орлоғо. Шалҡан*

*сәсеү. Аҡ шалҡан. Һары шалҡан.* ♦ **Шалҡан кеүек** бик сәләмәт, тулы тәнле балаға ҡарата әйтелә.

**шама** *и.* Бешереп эскәндән һуң ҡалған сәй төпрәһе. *Шаманы түгеү.*

**шамбы** *и.* Ҡараһыу һыртлы, йомро кәүҙәле балыҡ. *Шамбы тотоу. Шамбы һурпаһы.*

**шампунь (шампунгә)** *и.* Сәс йыуа торған хуш еҫле шыйыҡса. *Шампунь менән йыуыу.*

**шар** *и.* **1.** Түңәрәктең үҙ диаметры тирәһендә әйләнеүенән барлыҡҡа килгән геометрик есем. *Шар йөҙө. Шар майҙаны. Шар радиусы.* **2.** Шул есем рәүешендәге нәмә. *Бильярд шары. Шар ырғытыу.* ♦ **Ер шары** Ер планетаһы.

**шарлауыҡ (шарлауығы)** *и.* **1.** Текә ҡаянан, бейек һикәлтәнән киҫә ағып төшкән һыу. *Тау шарлауығы. Шарлауыҡ тауышы.* **2.** Йылғаның шәп аҡҡан урыны; шаршы. *Шарлауыҡта бәрҙе була.*

**шарт** *и.* **1.** Нимәнелер эшләү, үтәү өсөн тейешле булған талап. *Шарт ҡуйыу. Шартты боҙоу. Шартты үтәү.* **2.** Ниҙендер булмышын, тормошон билдәләгән хәл. *Ауыр шарт. Тәбиғи шарт. Тормош шарты. Эш шарты.* ♦ **Шартына килтереү** талапҡа тейешле, тәртипкә ярашлы итеү; еренә еткереү.

**шартлау (шартла-)** *ҡ.* **1.** Ҡаты нәмәләр бәрелгәндә, һынғанда көслө тауыш сығыу. *Ағас шартлап һынды.* **2.** Эске емергес көс менән сайрап ярылыу (снаряд, мина һ. б. ҡарата). *Бомба шартланы. Мылтыҡ шартланы. Туптар шартланы.* **3.** Тышҡы көбө ярылыу, йыртылыу. *Бөрө шартлай. Һуҡыр эсәге шартлаған.*

**шартлы** *с.* Шарты алдан билдәләнгән. *Шартлы билдә. Шартлы сигнал.*

**шаршамбы** *и.* Аҙнаның өсөнсө көнө. *Шаршамбы етеү. Шаршамбыла осрашыу.*

**шаршау** *и.* **1.** Ниҙелер ышыҡлап элә торған ҡорма. *Биш иңле шаршау. Карауат шаршауы. Сәңгелдәк шаршауы.* **2.** Күҙ алдын томалаған нәмә (ҡараңғылыҡ, томан, төтөн һ. б. ҡарата). *Төн шаршауы.* **3.** *театр.* Сәхнә әҫәренең айырым бер бүлеге. *Өс шаршаулы спектакль.*

**шат** *с.* Ҡыуаныс, шатлыҡ кисергән. *Шат йөҙ. Шат күҙҙәр. Шат ҡыҙ.*

**шатланыу (шатлан-)** *ҡ.* Шатлыҡ кисереү, шат булыу. *Бала шатлана. Әсәһе шатланған. Шатланһын халыҡ.*

**шатлыҡ (шатлығы)** *и.* Йәнгә рәхәтлек, күңелгә күтәренке рух биргән тойғо; ҡыуаныс. *Ҙур шатлыҡ. Шатлыҡ тауыштары. Шатлыҡ кисереү.*

**шау** *окш.* Бер төрлө генә тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Шау итеү. Шау килеү.*

**шаулау (шаула-)** *ҡ.* **1.** Тауыш сығарыу, бер төрлө генә шау килеү; геүләү, гөжләү. *Шаулап йөрөү. Урман шаулай.* **2.** Ауырыу сәбәпле баш, ҡолаҡ геү итеп тороу. *Баш шаулай. Ҡолаҡ шаулай.* **3.** Һөйләп ишеттереү, кешегә таратыу. *Был турала шаулама. Кешегә шаулап йөрөү.*

**шау-шыу** *окш.* Күмәк тауышты белдергән һүҙ. *Ҡала шау-шыуы. Шау-шыу күтәреү. Шау-шыу тыныу.*

**шахмат** *и.* 64 шаҡмаҡтан торған таҡтаға аҡ һәм ҡара фигуралар менән ҡара-ҡаршы уйнай торған уйын. *Шахмат фигуралары. Шахмат уйнау.*

**шахматсы** *и.* Шахмат уйнаусы. *Разрядлы шахматсы. Шахматсылар ярышы.*

**шахта** *и.* Ер аҫтынан ҡаҙылма байлыҡ сығара йәки ер аҫты эштәре алып бара торған урын. *Шахта ҡаҙыу. Шахтаға төшөү. Шахтала эшләү.*

**шахтер** *и.* Шахтала эшләгән тау эшсеһе.

**шаһит** *и.* Ниндәйҙер эш-хәл, эш-ваҡиға тураһында үҙе күргән мәғлүмәтте һөйләп биргән кеше. *Шаһит булыу. Шаһиттан һорау алыу. Тарихи ваҡиғалар шаһиты.*

**шаян** *с.* **1.** Шаярырға, уйнарға яратыусан, уйын-көлкөгә әүәҫ. *Шаян ҡыҙ. Шаян күҙҙәр. Шаян һүҙ.* **2.** Шаярыуға, уйынға хас. *Шаян нурҙар. Шаян бейеү. Шаян йыр.*

**шаярыу (шаяр-)** *ҡ.* **1.** Төрлө уйын менән күңел асыу. *Балалар шаяра. Һыу менән шаярыу. Эт менән шаярыу.* **2.** Уйын-көлкөгә бороу, уйынсалау, мәрәкәләү. *Шаярып һөйләшеү. Шаярып әйтеү.*

**шеш** *и.* **1.** Елһенеп, ҡыҙара биреп һыҙлап торған урын. *Быуын шеше. Шеш ҡайтыу.* **2.** Ағза туҡымаһының аҙып үҫеүенән барлыҡҡа килгән сир. *Йомшаҡ шеш. Ҡаты шеш. Шеш һытылыу.*

**шешеү (шеш-)** *ҡ.* Сир йәки башҡа сәбәптән тән ҡыҙарып тулышыу, ҡабарыу; шеш барлыҡҡа килеү. *Бармаҡ шешеү. Үпкә шешеү. Эренләп шешеү.*

**шешә** *и.* Тар муйынлы оҙонса быяла һауыт. *Бәләкәй шешә. Ярты литрлы шешә. Бер шешә ҡымыҙ.*

**шиғыр** *и.* Ритмик үлсәмгә нигеҙләнеп ижад ителгән әҙәби әҫәр; теҙмә әҫәр; *киреһе* проза. *Шиғыр уҡыу. Шиғыр яҙыу. Шиғыр үлсәме.*

**шик (шиге)** *и.* Нимәгәлер икеләнеү, хәүефләнеү, һағайыу тойғоһо. *Шик төшөрөү. Шик һалыу. Шик уятыу.* ♦ **Шик юҡ** *инш.* фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлай, ышанысла булыуын белдерә.

**шикелле 1.** *бәйл.* Төп килештәге исемдәр менән килеп, оҡшатыу, сағыштырыуҙы белдерә. *Зөһрә ҡыҙ шикелле һылыу. Ут шикелле ҡыҙыу. Һыуҙағы балыҡ шикелле.* **2.** *мөн.* Икеләнеүҙе белдергәндә ҡулланыла. *Уҡып булмаҫ шикелле. Ҡайтып булмаҫ шикелле.*

**шикләнеү (шикләң-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәгәлер ҡарата шик тотоу. *Шикләнеп ҡарау. Шикләнеп ҡуйыу. Һүҙҙең дөрөҫлөгөнә шикләнеү.* **2.** Бер аҙ ҡурҡыу, шөрләү. *Әллә ниҙән шикләнәм. Шикләнеп артҡа ҡарау.*

**шинель (шинеле)** *и.* Арттан йыйырсыҡ һалып, биллек ҡуйып бүҫтауҙан тегелгән хеҙмәт кешеләренең өҫ кейеме. *Һалдат шинеле. Шинель кейеү.*

**шиңеү (шиң-)** *ҡ.* **1.** Тереклек итеүҙән туҡтау (үҫемлектәргә ҡарата). *Сәскә шиңгән. Үлән шиңгән.* **2.** Күләме кәмеү, кесерәйеү. *Ашҡаҙан шиңгән. Кәбән шиңгән.* **3.** *күсм.* Көс-дәрте, ҡөҙрәте бөтөү. *Дәрте шиңгән. Егет шиңеп ҡалды.*

**шифа** *и.* Һаулыҡ өсөн файҙалы тәьҫир; сихәт. *Шифаһы тейеү. Шифаһын табыу.*

**шифахана** *и.* Тәбиғәт факторҙарын файҙаланып ял итә, дауалана торған урын; санаторий. *Шифаханала ял итеү. «Янғантау» шифаханаһы.*

**шишмә** *и.* **1.** Ер аҫтынан урғылып сығып ағып ятҡан һыу; инеш. *Һалҡын шишмә. Шишмә башы. Шишмә һыуы.* **2.** *күсм.* Берәй нәмәнең сығанағы. *Илһам шишмәһе. Моң шишмәһе.*

**шишәмбе** *и.* Аҙнаның икенсе көнө. *Шишәмбе етеү.*

**шкаф** *и.* Эсенә төрлө нәмә ҡуйыу өсөн эшләнгән асылып ябылмалы йыһаз. *Кейем шкафы. Китап шкафы. Һауыт-һаба шкафы.*

**шом** *и.* Күңел тыныслығын боҙған, ҡурҡыу тойғоһо уятҡан хәл; хәүеф. *Күңелгә шом һалыу. Шомға ҡалыу. Шом төшөү.*

**шоңҡар** *и.* Күкшел буҙ йәки аҡ төҫтәге, ҡарғанан ҙур йыртҡыс ата ҡош. *Аҡ шоңҡар. Күк шоңҡар. Шоңҡар сөйөү.*

**шофер** *и.* Автомобиль йөрөтөүсе. *Шофер булыу. Шоферға уҡыу.*

**шөрләү (шөрлә-)** *ҡ.* Ҡурҡыуға төшөү; ҡурҡыу. *Айыуҙан шөрләү. Шөрләп ҡуйыу.*

**шөрөп (шөрөбө)** *и.* Бороп ҡуймалы тимер ҡаҙыҡ; бормалы ҡаҙау. *Шөрөп менән нығытыу.* ♦ **Шөрөп бушау** *һөйл.* ғәйрәт ҡайтыу, йүнһеҙгә әйләнеү.

**штаб** *и.* Төрлө ғәскәри берәмектәргә етәкселек итеү органы һәм шунда ингән кешеләр төркөмө. *Дивизия штабы. Штабта хеҙмәт итеү.*

**штраф** *и.* Ниндәйҙер эш, ҡылыҡ өсөн яза рәүешендә түләтелгән һалым. *Штраф түләтеү. Штраф һалыу.*

**шуҡ** *с.* Шаярырға яратҡан, хәрәкәтсән, шаян. *Шуҡ кеше. Шуҡ малай.* ♦ **Шуҡ ҡуллы** *йәки* **ҡулы шуҡ** кеше нәмәһенә тейеп барыусан, ҡулсыр.

**шүрәле** *и. миф.* Кешеләрҙе ҡытыҡлап үлтерә торған, урман төпкөлөндә йәшәүсе мифик зат. *Оҙон бармаҡлы шүрәле. Шүрәле тауышы.*

**шыбырлау (шыбырла-)** *ҡ.* **1.** Шым ғына шаулау. *Япраҡтар шыбырлай. Ямғыр шыбырлап яуа.* **2.** Шым ғына, саҡ ишеттереп әйтеү. *Ҡолаҡҡа шыбырлау. Шыбырлап әйтеү.*

**шығырым** *р.* Нышып тултырылған һымаҡ, туп-тулы, тығыҙ. *Шығырым тулы халыҡ.*

**шығырлау (шығырла-)** *ҡ.* Шығыр итеү, шығыр-шығыр килеү. *Ишек шығырлай. Иҙән таҡталары шығырлай.*

**шыйыҡ** *с.* **1.** Ҡуйы булмаған, ағырлыҡ, тамырлыҡ хәлдә булған. *Шыйыҡ кислород. Шыйыҡ бутҡа.* **2.** Үтәнән-үтә күренеп, яҡтылыҡ үткәреп торған. *Шыйыҡ болот. Шыйыҡ томан. Шыйыҡ төтөн.* **3.** Бөгөлөп-һығылып торған; йәш. *Шыйыҡ тал сыбығы.* **4.** *күсм.* Нығынып етмәгән, көскә ултырмаған. *Шыйыҡ егет. Кәүҙәгә шыйыҡ кеше.*

**шыйыҡса** *и.* Төрлө иретмә ҡатнашҡан ҡатмарлы төҙөлөшлө шыйыҡлыҡ. *Шыйыҡса яһау.*

**шылдырау (шылдыр-)** *ҡ.* **1.** Ниҙелер этеп йәки күтәреп урынынан күсереү; шыуҙырыу. *Артҡа шылдырыу. Ситкә шылдырыу. Шылдырып ҡуйыу.* **2.** *күсм.* Дөрөҫлөктән ситләштереү; алдау. *Шылдырып һөйләү. Шылдырып әйтеү.*

**шылтырау (шылтыр-)** *ҡ.* **1.** Шылтыр итеү, шылтыр-шылтыр килеү. *Сәғәт шылтырай. Шылтырап китеү.* **2.** Тауыш биреү (телефондан). *Телефон шылтыраны.*

**шылыу (шыл-)** *ҡ.* **1.** Ултырған көйө бер урындан икенсе урынға күсеү. *Шылып ултырыу. Ситкә шылыу. Яҡыныраҡ шылыу.* **2.** *күсм.* Һиҙҙермәй генә касыу; тайыу, ысҡыныу. *Тиҙерәк шылыу. Урманға шылды. Шылыу яғын ҡарау.*

**шым[1], шым ғына** *р.* Тауыш-тынһыҙ, кешегә һиҙҙермәй, өндәшмәй. *Шым ғына тыңлау. Шым ғына эшләү. Шым ғына инеү.*

**шым[2]** *с.* Уй-ниәтен кешегә белдермәгән, аҫтыртын; тыныс. *Шым бала. Шым кеше. Шым йылға.*

**шыма** *с.* **1.** Йөҙө, өҫтө ҡытыршы булмаған, тип-тигеҙ. *Шыма боҙ. Шыма таҡта. Шыма таш. Шыма итеп йышыу.* **2.** *күсм.* Логик яҡтан бәйләнешле,

1 – 1.0136.10

оҫта итеп төҙөлгән. *Шыма доклад. Шыма мәҡәлә.* **3.** *күсм.* Төрлө хәйләгә оҫта; йышылған, мут. *Шыма кеше. Шыма булыу.*

**шымыу (шым-)** *ҡ.* Өнһөҙ-һүҙһеҙ булыу; тымып ҡалыу, тыныу. *Шымып йөрөү. Шымып ҡалыу. Ел шымды. Дауыл шымды.*

**шыңшыу (шыңшы-)** *ҡ.* **1.** Илаған һымаҡ сыйылдау (эт-бүрегә ҡарата). *Эт шыңшый. Бүре балалары шыңшый.* **2.** *күсм.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеү; илаулау. *Шыңшып йөрөү. Шыңшып өйрәнмә.*

**шыптырлау (шыптырла-)** *ҡ.* Шыптыр-шыптыр итеү, шыптыр-шыптыр килеү. *Үлән шыптырлай. Ямғыр шыптырлай.*

**шырлыҡ (шырлығы)** *и.* Үтеп сыҡҡыһыҙ ҡуйы ағаслыҡ. *Шырлыҡҡа инеү. Уҫаҡ шырлығы.*

**шырпы** *и.* Ут тоҡандыра торған көкөрт башлы бәләкәй генә ағас сыйғыс. *Шырпы башы. Шырпы ҡабы. Шырпы һыҙыу.*

**шыршы** *и.* **1.** Сатыры конус формаһында булған ҡыҫҡа, ҡаты ылыҫлы мәңге йәшел ағас. *Шыршы ултыртыу. Шыршы ботаҡтары. Шыршы энәһе.* **2.** Яңы йыл байрамына биҙәп ҡуйылған ылыҫлы ағас. *Шыршы биҙәү. Шыршы тирәләй әйләнеү. Шыршы уйынсыҡтары.*

**шытыу (шыт-)** *ҡ.* Морон төртөп орлоҡ яралғыһы сығыу; үҫенте биреү. *Орлоҡ шытҡан. Картуф шытҡан. Шытып сығыу.*

**шыуыу (шыу-)** *ҡ.* Шыма, тайғаҡ булыу сәбәпле, тоткарлыҡһыҙ хәрәкәт итеү. *Шыуып китеү. Шыуып сығыу. Шыуып төшөү.* **2.** Сана, саңғы кеүек нәмә менән хәрәкәт итеү. *Саңғы шыуыу. Санала шыуыу. Конькиҙа шыуыу.* **3.** *күсм.* Бер яҡҡа табан яй ғына хәрәкәт итеү. *Болот шыуҙы. Томан шыуа.*

**шыуышыу (шыуыш-)** *ҡ.* **1.** Шыуып хәрәкәт итеү. *Түш менән шыуышыу.* **2.** *күсм.* Бер яҡҡа табан яй ғына хәрәкәт итеү. *Болот шыуыша. Томан шыуыша.*

**шәбәйеү (шәбәй-)** *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер тиҙлеге артыу; ҡыҙыуланыу. *Аҙымдарҙы шәбәйтеү. Шәбәйә барыу.* **2.** Көсәйеү. *Буран шәбәйеү. Ел шәбәйҙе.* **3.** Һауығыу. *Шәбәйә башланы. Бала шәбәйҙе.*

**шәжәрә** *и.* Билдәле бер нәҫел-ырыуҙың килеп сығышын, таралышын күрһәткән генеалогик яҙма. *Ырыу шәжәрәһе. Шәжәрәгә инеү. Шәжәрәне төҙөү. Шәжәрә китабы.* ♦ **Шәжәрә ағасы** нәҫел-ырыуҙың тармаҡланып китеүен күрһәткән һыҙма.

**шәйләү (шәйлә-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимә икәнен абайлау. *Бүрене шәйләү. Шәйләп алыу. Кем икәнен шәйләп булмай.* **2.** Һиҙеү, аңғарыу. *Ҡурҡынысты шәйләмәү.*

**шәкәр** *и.* Татлы сөгөлдөр йәки ҡамыштан алынған шәрбәтле аҡ кристаллик матдә. *Ваҡ шәкәр. Шаҡмаҡлы шәкәр. Шәкәр ашау.*

**шәл** *и.* Бәйләнгән йәки һуғылған ҙур яулыҡ. *Дебет шәл. Ҙур шәл. Шәл бәйләү. Шәл ябыныу.*

**шәм** *и.* Парафин, балауыҙ уртаһына милтә ҡуйып яһалған яҡтыртҡыс. *Май шәм. Шәм яҡтыһы.*

**шәмбе** *и.* Аҙнаның алтынсы көнө. *Шәмбе көн. Иртәгә – шәмбе.*

**шәп** *р.* **1.** Тиҙ, ҡыҙыу итеп, йәһәт; *киреһе* әкрен. *Шәп атлау. Шәп ашау. Шәп йүгереү.* **2.** *с.* Маҡтауға лайыҡлы; яҡшы, һәйбәт; *киреһе* насар. *Шәп кеше. Шәп китап. Шәп йырсы. Шәп уҡытыусы.* **3.** *с.* Сәләмәтлеге, хәл-әхүәле яҡшы, һау-сәләмәт. *Шәп әле ул.*

**шәүлә** *и.* **1.** Кеше йәки берәй нәмәнең ут, ҡояш яҡтыһынан төшкән һыны, һүрәте; күләгә. *Ағас шәүләһе. Ай шәүләһе. Кеше шәүләләре.* **2.** *күсм.* Уй-кисерештең йөҙҙәге сағылышы. *Өмөт шәүләһе. Йөҙөнә ҡара шәүлә ятыу.*

**шәфҡәтле** *с.* Мәрхәмәтле, яҡшы күңелле. *Шәфҡәтле кеше. Шәфҡәтле төбәк.*

**шәшке** *и.* Һуҫарҙар ғаиләһенә ҡараған затлы тиреле йылтыр көрән йөнлө, ҡыҫҡа аяҡлы йәнлек (һыу буйында, өңдә йәшәй). *Шәшкегә һунарға барыу. Шәшке алыу.*

# Щ

**щетка** *и.* Нимәнелер таҙартыу өсөн бәләкәй тар таҡта йәки пластик материалға шырт ҡыл ултыртып яһалған нәмә. *Аяҡ кейеме щеткаһы. Кейем щеткаһы. Теш щеткаһы.*

**щеткалау (щеткала-)** *ҡ.* Щетка менән таҙартыу. *Кейемде щеткалау.*

**щи** *и.* Кәбеҫтәнән, ҡуҙғалаҡтан, шпинаттан бешерелгән аш. *Щи бешереү.*

# Э

**эҙ** *и.* **1.** Кемдер, ниҙер баҫҡандан йәки үткәндән ерҙә ҡалған билге. *Аяҡ эҙе. Тәгәрмәс эҙе. Ҡуян эҙе.* **2.** *күсм.* Үткән эш-хәл, тормош ваҡиғаларынан күңелдә ҡалған билге. *Үткән йылдар эҙе. Һуғыш эҙе.* ♦ **Эҙең булмаһын** эргәнән ҡыуғанда асыу менән әйтелә. **Эҙһеҙ юғалыу** хәбәр-хәтәрһеҙ юҡ булыу.

**эҙләнеү (эҙлән-)** *к.* **1.** Ниҙер табырға, билдәләргә тырышып төрлө урынды ҡарау. *Эҙләнеп йөрөү.* **2.** Белеү, асыҡлау өсөн төпсөнөп тикшереү, тикшеренеү. *Фәнни эҙләнеүҙәр. Даими эҙләнеү.*

**эҙләү (эҙлә-)** *к.* **1.** Кемде йәки нимәнелер табырға теләп, төрлө ерҙе ҡарау. *Кисеү эҙләү. Мал эҙләү. Юғалған балдаҡты эҙләү.* **2.** Теләк-маҡсатҡа ирешергә тырышыу. *Фатир эҙләү. Эш эҙләү. Алтын эҙләү.* **3.** Белергә, төшөнөргә тырышыу. *Сара эҙләү. Яуап эҙләү.*

**эҙәрләү (эҙәрлә-)** *к.* **1.** Арттан ҡалмай ҡыуыу йәки күҙәтеү. *Дошманды эҙәрләү. Эҙәрләп йөрөү. Һәр аҙымды эҙәрләү.* **2.** *күсм.* Ирек бирмәй ҡайғыртыу. *Кешене эҙәрләү.*

**эҙәрмән** *и.* Үткән тарих, ваҡиға һәм шуға мөнәсәбәтле кешеләр юлын тикшереп эҙләнгән кеше. *Эҙәрмәндәр төркөмө.*

**эзбиз** *и.* Карбонатлы тау тоҡомдарын яндырып эшкәртеү юлы менән алынған матдәләр.

**эйе** *мөн.* **1.** Кеше һүҙен хуплағанды, раҫлағанды белдерә. *Эйе шул. Эйе лә.* **2.** Һүҙ башында фекерҙе, һығымтаны нығытыр өсөн ҡулланыла. *Эйе, дөрөҫ әйттегеҙ.*

**эйелеү (эйел-)** *к.* **1.** Баш йәки кәүҙәне аҫҡа, алға бөгөү. *Эйелеп нәмә алыу. Эйелеп һыу эсеү. Башы эйелеп төшкән.* **2.** Ниндәйҙер ауырлыҡ тәьҫирендә аҫҡа бөгөлөү, һығылыу. *Иҙән эйелгән. Китап кәштәһе эйелгән.*

**эйеү (эй-)** *к.* **1.** Бөгөп аҫҡа табан төшөрөү, ауыштырыу. *Муйылды эйеү.* **2.** Билдән бөгөп кәүҙәне алға ауыштырыу. *Кәүҙәне эйеү.* ♦ **Баш эйеү** 1) ихтирам йөҙөнән башты аҫҡа баҫыу; 2) буйһоноу.

**эйә** *и.* **1.** Нимәгәлер хужа кеше. *Ат эйәһе. Йорт эйәһе. Эйә булыу.* **2.** Ниҙелер үҙ хөкөмөндә тотҡан кеше; башлыҡ. *Власть эйәһе. Хөкүмәт эйәһе.* **3.** Ниндәйҙер һөнәргә, дәрәжәгә ирешкән кеше. *Аҡыл эйәһе. Белем эйәһе. Ғилем эйәһе. Закон эйәһе.* **4.** *грам.* Һөйләмдең башҡарыусыны белдергән баш киҫәге.

**эйәк (эйәге-)** *и.* Кешенең аҫҡы яңағының йомроланыбыраҡ торған алғы сығынҡы өлөшө. *Осло эйәк. Эйәк аҫты.*

**эйәлек (эйәлеге)** *лингв. и.* Нәмәнең кемдеке йәки нимәнеке икәнен белдергән грамматик категория. *Эйәлек алмашы. Эйәлек категорияһы. Эйәлек килеше. Эйәлек ялғауы.*

**эйәләшеү (эйәләш-)** *к.* Кемгә йәки нимәгәлер өйрәнеү, яҡынлау; эҫенеү, эйәләү. *Эйәләшеп алыу. Эйәләшеп китеү. Ауылға эйәләште.*

**эйәр** *и.* Һыбай йөрөү өсөн менге малдың һыртына һала торған ҡулайлама. *Ирҙәр эйәре. Ҡатын-ҡыҙ эйәре. Эйәр ҡашы.*

**эйәреү (эйәр-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки ниҙеңдер артынан хәрәкәт итеү. *Эйәреп барыу. Эйәреп йөрөү. Кешегә эйәреү.* **2.** Йыр йәки көйҙө башлап ебәреүсегә ҡушылыу. *Кешегә эйәреп йырлау. Йырға эйәреп уйнау.* **3.** *грам.* Берәй һүҙ йәки һөйләмдең икенсе һүҙ йәки һөйләмгә буйһоноуын, бәйләнеүен күрһәтә. *Исемгә эйәреп килгән ҡылымдар.*

**эйәрләү (эйәрлә-)** *ҡ.* Менге малға эйәр һалыу, эйәрле итеү. *Ат эйәрләү. Эйәрләп менеү.*

**эйәрсен** *и.* **1.** Кемдер артынан эйәреп йөрөгән кеше. *Рәйестең эйәрсендәре. Эйәрсендәре менән йөрөү.* **2.** Икенсе иргә сыҡҡан ҡатын артынан эйәреп килгән бала. *Эйәрсене менән килеү. Эйәрсен булып барыу.* **3.** *астр.* Планета йондоҙҙарҙың береһе икенсеһенә эйәреп йөрөгән юлдашы. *Ай – Ерҙең эйәрсене. Ерҙең яһалма эйәрсене.* **4.** *с. мәғ. грам.* Һөйләмдең төп һүҙенә, төп өлөшөнә буйһонған.

**эйәртеү (эйәрт-)** *ҡ.* **1.** Ҡайҙалыр барғанда үҙең менән бергә алыу, бергә йөрөтөү. *Иптәште эйәртеп барыу. Эт эйәртеү. Эйәртеп алыу.* **2.** Барған, киткән кеше менән бергә оҙатыу. *Кешегә эйәртеү. Эйәртеп ебәреү. Мал эйәртеп башҡа сығарыу.*

**экзамен** *и.* Белем кимәлен билдәләү маҡсатында үткәрелгән һынау; имтихан. *Экзамен алыу. Экзамен биреү. Экзаменға әҙерләнеү.*

**экскурсия** *и.* Танышыу, күреп белеү маҡсатында күмәк кешенең бергәләп ҡайҙалыр сәйәхәте. *Экскурсияға барыу. Экскурсия яһау. Экскурсия бюроһы.*

**экспедиция** *и.* Берәй эш башҡарыу өсөн махсус ойошторолған төркөм. *Археологик экспедиция. Геологик экспедиция. Экспедиция етәксеһе.*

**элгес** *и.* **1.** Кейем элеү өсөн ҡағылған ырғаҡ йәки ырғаҡлы нәмә. *Элгескә элеү. Кейем элгесе.* **2.** Кейем елкәһенә тағылған элмәк. *Тун элгесе.*

**элеватор** *и.* Игенде ҡабул итеү һәм оҙаҡ һаҡлау өсөн махсус эшләнгән, күпләп тейәү, таҙартыу, киптереү мөмкинлектәре булған ҙур ҡоролма; иген һаҡлағыс. *Элеваторға иген тапшырыу. Элеватор башняһы.*

**элек** *р.* **1.** Хәҙерге мәлдән күп алда; әүәле. *Аҙна элек. Бынан күп йылдар элек. Ҡайтмаҫ элек.* **2.** Башта иң тәүҙә. *Элек уйла, шунан әйт. Иң элек ҡулыңды йыу.*

**элекке** *с.* **1.** Элек булған, үткәндәге, әүәлге. *Элекке заман. Элекке йола. Элекке тормош.* **2.** Башта булған, әүәлге. *Элекке гәҙәт. Элекке артист. Элекке партизан.*

**электр** *и.* **1.** Зарядлы өлөшсәләрҙең хәрәкәтенән, үҙ-ара тәьҫиренән ғибәрәт күренештәр йыйылмаһы. *Электр тураһындағы тәғлимәт. Электр үткәреү. Электрҙы һүндереү.* **2.** Шул күренеш энергияһынан алынған яҡтылыҡ. *Электр уты. Электр лампаһы.*

**электән** *р.* Күптәнге ваҡыттан; күптән. *Электән белеү. Электән таныш.*

**элемтә** *и.* **1.** Үҙ-ара ҡатнашыу, аралашыу мөнәсәбәте; бәйләнеш. *Иҡтисади элемтә. Ауыл менән ҡала араһындағы элемтә.* **2.** Шул бәйләнеште булдырыусы, тәьмин итеүсе учреждениелар йыйылмаһы. *Элемтә бүлеге. Элемтә өлкәһендә эшләү.*

**элеү (эл-)** *ҡ.* **1.** Нимәнелер берәй ергә аша һалып йәки эләктереп аҫып ҡуйыу. *Керҙе киптерергә элеү. Тәҙрәгә ҡорған элеү. Пальтоны элгескә элеү.* **2.** Эләктереү, ҡаптырыу (төймә, элмәккә ҡарата). *Төймәне элеү.* **3.** Элгес менән бикләү. *Ишекте элеү.*

**эләгеү (эләк-)** *ҡ.* **1.** Бер нәмә икенсеһенә тейеп ысҡынмай тороу. *Эләгеп тороу. Ботаҡҡа эләгеү. Аяҡҡа эләгеү.* **2.** Ауға, тоҙаҡҡа ҡабыу. *Ауға эләгеү. Ҡапҡанға эләгеү. Тоҙаҡҡа эләгеү.* **3.** Енәйәткә, насар хәлгә дусар булыу. *Бәләгә эләгеү. Төрмәгә эләгеү. Күҙәтеү аҫтына эләгеү.* **4.** Тейеү, төшөү (төрлө яза, шелтә, ауыр һүҙ һ. б. ҡарата). *Атайҙан эләгеү. Хужанан эләгеү.* **5.** Низеңдер тәьҫиренә дусар булыу. *Ел-дауылға эләгеү. Ямғырға эләгеү.*

**эләктереү (эләктер-)** *ҡ.* **1.** Хәрәкәт иткәндә, яңылыш тейеп, бер нәмәне төшөрөү йәки үҙең менән эйәртеү һ. б. *Эләктереп йыртыу. Эләктереп алып китеү.* **2.** Осло, кәкре нәмә менән элеп алыу. *Багор менән эләктереү. Һәнәк менән эләктереү.* **3.** Кейемдең төймәһен йәки бик, элгесте ҡаптырыу. *Йоҙаҡты эләктереү. Төймәне эләктереү. Элгесте эләктереү.* **4.** Ҡапыл тотоп алыу. *Беләктән эләктереү. Билдән эләктереү. Һаҡалынан эләктереү.* **5.** Ҡулға төшөрөү. *Яҡшы тун эләктереү. Арзан тауар эләктереү.*

**эне** *и.* **1.** Кесе ир туған. *Бер туған эне. Ике туған эне.* **2.** Йәшкә кесе булған ир заты.

**энә** *и.* **1.** Үткер осло, бер башы күҙәүле бәйләү, тегеү һәм үреү өсөн нәҙек ҡорал. *Бәләкәй энә. Энә һабаҡлау. Ойоҡ энәһе.* **2.** *кусм.* Ҡайһы бер хайуандарҙың сәнскәк шырт йөнө һәм ҡайһы бер үҫемлектәрҙең үткер осло үҫентеһе. *Балыҡ энәһе. Гөлйемеш энәһе. Шыршы энәһе.* ♦ **Энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу** эштең үтә ауырлығын күрһәтергә теләгәндә әйтелә. **Энә осондай** бик бәләкәй.

**эңер** *и.* Ҡояш байып, ҡараңғы төшкәнгә тиклемге ваҡыт. *Эңер ваҡыты. Эңер төшөү.*

**эргә** *и.* Кеше йәки берәй нәмәнең уң йәки һул яғы, ҡабырға яҡ. *Өй эргәһе. Эргәлә булыу. Эргәнән атлау.*

**эргәһендә** *бәйл. функцияһында.* Төп килеш исемдәрҙән һуң килеп, эш-хәрәкәттең кемгә йәки нимәгә төбәлгәнен, йүнәлгәнен белдерә. *Әсәй эргәһенә ҡайтыу. Мәктәп эргәһенә килеү.*

**эре** *с.* **1.** Күләм-дәүмәле, буй-һыны ҙур булған; *киреһе* ваҡ. *Эре балыҡ. Эре һыған. Эре мал.* **2.** Составы ҙур булған. *Эре хужалыҡ. Эре ҡалалар.* **3.** Ҡиммәте, баһаһы, әһәмиәте ҙур булған. *Эре аҡса.* **4.** *күсм.* Үҙен башҡаларҙан өҫтөн һанаған, һауалы. *Эре кеше. Эре һөйләнеү.*

**эремсек (эремсеге)** *и.* Һөттө эретеп эшләнгән ашамлыҡ. *Ҡыҙыл эремсек. Эремсек эшләү. Эремсек бәрәмесе.*

**эрен** *и.* Боҙолған урынға йыйылған еҫле шыйыҡлыҡ. *Эрен йыйылыу.*

**эреү (эре-)** *ҡ.* Әсегән һөт ҡайнағанда эремсеккә әйләнеү. *Һөт эрене.*

**эркелеү (эркел-)** *ҡ.* Бер юлы бер урынға күпләп йыйылыу. *Һыу эркелеү. Күҙ йәштәре эркелде. Халыҡ эркелде.*

**эс** *и.* **1.** Кеше һәм хайуандарҙың бауыр, бөйөр, тамаҡ ашҡаҙаны, эсәктәр һ. б. урынлашҡан кәүҙә өлөшө. *Эс ауыртыу. Эскә ярамау. Эсте ыуыу.* **2.** Нимәнеңдер ҡыуыш ере. *Ауыҙ эсе. Биҙрә эсе. Ҡауын эсе.* **3.** Берәй нәмәнең араһы йәки урталығы. *Китап эсе. Кәртә эсе. Өй эсе. Һыу эсе.* **4.** Нимәнеңдер йөҙөнә тиҫкәре яғы. *Пальто эсе. Эсе сатин юрған.* ♦ **Ҡара эсле** насар уйлы, эскерле. **Эс ҡатып көлөү** рәхәтләнеп нык итеп көлөү. **Эсендәге тышында** уй-кисерештәрен йәшерә, тыя белмәгән.

**эсемлек (эсемлеге)** *и.* Эсеү өсөн әҙерләнгән шыйыҡлыҡ. *Иҫерткес эсемлек.*

**эсендә** *бәйл. функцияһында* **1.** Төп килеш исемдәр менән эш-хәлдең урынын, хәлен белдерә. *Өй эсендә. Сәскә эсендә. Һуғыш эсендә. Шомло уй эсендә.* **2.** Төп килештәге ваҡыт төшөнсәле һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең ниндәй ваҡыт аралығында булыуын белдерә. *Бер аҙна эсендә. Биш йыл эсендә. Ғүмер эсендә.*

**эсенә** *бәйл. функцияһында.* Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең урынын, торошон белдерә. *Урман эсенә инеү. Уйын-көлкө эсенә килеп инеү.*

**эсенән** *бәйл. функцияһында* **1.** Төп килеш исем менән эш-хәлдең ҡайҙан, кем, нимә араһынан булыуын белдерә. *Мәмерйә эсенән. Халыҡ эсенән сыҡҡан әҙип. Яу эсенән сығыу.* **2.** Ҡатлап кейелгән кейемдең аҫтынан кейелгәнен белдерә. *Кофта эсенән кейеү.* ♦ **Ауыҙ эсенән** ҡысҡырмай, эстән генә.

**эсереү (эсер-)** *ҡ.* **1.** Эсергә биреү. *Ҡымыҙ эсереү. Сәй эсереү. Һыу эсереү.* **2.** Малды һыуға ҡыуыу йәки эсеү өсөн малға һыу ҡуйыу. *Ат эсереү. Мал эсерер ваҡыт етте.*

**эсеү (эс-)** *к.* **1.** Шыйыҡ нәмәне йотоу. *Ҡатыҡ эсеү. Сәй эсеү. Эске килеү.* **2.** *күсм.* Шатлыҡ-ҡайғы кисереү. *Ҡыуаныстарын эсеү. Хәсрәт эсеү.*

**эске** *с.* **1.** Эс яҡтағы, эстәге. *Эске күлдәк. Эске тәҙрә.* **2.** Тән, кәүҙә эсендәге. *Эске ағзалар.* **3.** Кешенең рухи донъяһына ҡараған, күңеле менән бәйле булған. *Эске донъя. Эске кисереш.* **4.** Нимәнендер нигеҙен, асылын сағылдырған. *Ваҡиғаларҙың эске бәйләнеше. Есемдең эске энергияһы.*

**эстафета** *и.* Йүгереү, йөҙөү һ. б. спорт ярыштарында билдәле бер араны үтеп, берен-бере алмаштырғанда, шартлы бер нәмә тапшырыуға ҡараған команда ярышы. *Эстафета ярышы. Эстафетала ҡатнашыу.*

**эсәк (эсәге)** *и.* **1.** Йән эйәләрендә (кеше, хайуан, ҡош-ҡорт һ. б.) аҙыҡ үҙләштереү ағзаһының оҙон көпшә рәүешендәге өлөшө. *Эсәк ауырыуы. Эсәк сейәлеү.* **2.** Резина йәки полиэтилен көпшә. *Резина эсәктәр.*

**эҫе** *с.* **1.** Утта ҡыҙған юғары температуралы. *Эҫе аш. Эҫе һыу.* **2.** Ғәҙәттәгенән юғары температуралы. *Эҫе йәй. Эҫе көн.* **3.** *күсм.* Хискә тулы; ҡайнар. *Эҫе күҙ йәше.* **4.** *и. мәғ.* Һауаның юғары температураһы; ҡыҙыулыҡ. *Көн эҫеһе. Ҡояш эҫеһе.*

**эҫеү (эҫе-)** *к.* **1.** Эҫе хәлгә килеү, эҫе булыу. *Өй эҫене. Һыу эҫегән.* **2.** Эҫегә әйләнеү, эҫе булыу (көнгә ҡарата). *Көн эҫене.*

**эҫкерт** *и.* Бейек, оҙон итеп һалынған бесән, һалам һ. б. өйөмө. *Эҫкерт һалыу. Һалам эҫкерте.*

**эт** *и.* **1.** Йорт һаҡлау, һунар өсөн ҡулға эйәләштерелгән йәнлек. *Йорт эте. Һунар эте. Эт аҫрау.* **2.** *күсм.* Яуыз кешегә ҡарата әйтелә. *Эт кеше. Эт икән ул.* **3.** *һөйл.* Көсәйтеү киҫәксәһе менән «бер кем дә» тигән мәғәнәне бирә. *Этем дә белмәй. Эт тә күрмәне.*

**этеү (эт-)** *к.* Көс менән үҙенән ситкә йүнәлтеү, ҡуҙғатыу, этәреү. *Алға этеү. Ситкә этеү. Арттан этеү.*

**этлек (этлеге)** *и.* **1.** Яуыз, насар эш-ҡылыҡ. *Этлек ҡылыу. Этлек уйлау. Этлек эшләү.* **2.** *күсм.* Күргән, кисергән михнәт, яфа. *Этлек күреү. Этлек менән үҫеү.*

**этләү (этлә-)** *к.* Ыҙа сиктереү, михнәт күрһәтеү, интегеү. *Ауыр эш менән этләү.*

**эш** *и.* **1.** Кешенең ниҙер яһау, етештереү, ижад итеү һ. б. менән мәшғүллеге; хеҙмәт. *Ижади эш. Эшкә тотоноу. Эш яратыу.* **2.** Махсус белем, һөнәр, эшмәкәрлек өлкәһе. *Инженерлыҡ эше. Хәрби эш. Нәшриәт эше.* **3.** Билдәле бер урында башҡарыла торған вазифа; хеҙмәт һәм шуның һөҙөмтәһе. *Эш урыны.*

*Эшкә инеү. Яҙма эш.* ♦ **Эште боҙоу** нимәнеңдер барышына, хәл ителешенә ҡамасаулау. **Эштән сыҡҡан** бик яман, насар (кеше).

**эшкәртеү (эшкәрт-)** *ҡ.* **1.** Берәй ысул менән нәмәнең сифатын үҙгәртеү. *Күн эшкәртеү. Кислота менән эшкәртеү.* **2.** Эшләп еренә еткереү, эшкә ярарлыҡ хәлгә килтереү. *Ерҙе эшкәртеү. Шәкәр сөгөлдөрөн эшкәртеү. Нефть эшкәртеү.*

**эшлекле** *с.* Эшкә бирелгән, уңған, булдыҡлы. *Эшлекле ҡыҙ. Эшлекле булыу.*

**эшләпә** *и.* Киң яҫы тирәсле, бейек түбәле баш кейеме. *Фетр эшләпә. Һалам эшләпә. Эшләпә кейеү.*

**эшләү (эшлә-)** *ҡ.* **1.** Хеҙмәт менән шөғөлләнеү, эш башҡарыу. *Мәктәптә эшләү. Төҙөлөштә эшләү. Тырышып эшләү.* **2.** Физик йәки рухи көс һалып нимәнелер барлыҡҡа килтереү, булдырыу. *Арба эшләү. Мебель эшләү. Эшләп сығарыу.* **3.** Хәрәкәттә, эштә булыу (ғәҙәттә машина, механизм). *Мотор эшләп тора. Станок эшләй.*

**эшсе** *и.* Завод-фабрикала, төҙөлөштә һәм сәнәғәттең башҡа тармаҡтарында ҡул көсө менән эшләгән кеше. *Эшселәр синыфы. Эшсе булыу. Минең атайым эшсе.*

**эшсән** *с.* **1.** Эшкә тырыш, уңған, егәрле. *Эшсән егет. Эшсән булыу.* **2.** *и. мәғ.* Эш кешеһе, хеҙмәт эйәһе. *Ауыл эшсәндәре. Баҫыу эшсәндәре.*

**эшһеҙ** *с.* **1.** Эш менән шөғөлләнмәгән, эше булмаған. *Эшһеҙ кеше.* **2.** *и. мәғ.* Эш тапмай, эш менән шөғөлләнә алмаған. *Эшһеҙҙәр төркөмө.*

**эшһөйәр** *с.* Эш яратҡан, эш өсөн янып йөрөгән. *Эшһөйәр егет. Эшһөйәр булыу.*

# Ә

**ә**[1] *терк.* Бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған һөйләмдәрҙе йәки һөйләмдең киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла. *Сәғәт булды, ә ул һаман юҡ.*

**ә**[2] **(ә-ә-ә)** *ымл.* **1.** Нимәнелер иҫкә төшөргәндә, һиҙенгәндә, аптырағанда һ. б. әйтелә. *Ә-ә шулаймы ни?* **2.** Асыу ҡатыш ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. *Ә-ә, һин әле шулай һөйләшәһеңме?*

**әбей** *и.* **1.** Оло йәштәге ҡатын кеше. *Ауыл әбейҙәре. Йөҙ йәшәр әбей.* **2.** Оло йәштәге кешенең ҡатыны һәм уға иренең өндәшеү һүҙе. *Ҡарттың әбейе һыуға киткән.* ♦ **Кендек әбейе** *ҡар.* **кендек. Әбейҙәр сыуағы** *ҡар.* **сыуаҡ.**

**әгәр** *терк.* **1.** Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәп, шартлылыҡ төшөнсәһен көсәйтә. *Әгәр балалар тырышып уҡыһа, ата-әсә шат.* **2.** Инеш

һөйләм ҡылымының шартлылыҡ мәғәнәһен көсәйтә. *Ҡыҙҙар, әгәр ишеткән булһалар, хәҙер килеп етерҙәр.* **3.** Һөйләмдең башында килеп, ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә. *Әгәр килмәһә?*

**әҙ** *р.* Һаны, күләме ғәҙәттәгенән кәм; аҙ. *Әҙ һөйләү.*

**әҙер** *с.* **1.** Файҙаланыуға яраҡлы хәлгә килгән. *Әҙер өй. Әҙер табын. Әҙер малға хужа булыу.* **2.** Алдан уйланылған. *Әҙер фекер. Әҙер яуап.* **3.** Ниндәйҙер эште йәһәт кенә башҡарырға торғанды белдерә. *Әҙер булыу.*

**әҙерлек (әҙерлеге)** *и.* **1.** Нимәнелер булдырырға тырышып башҡарылған төрлө эш, хәстәрлек һәм уларҙың үтәлеше. *Әҙерлек саралары. Әҙерлек алып барыу.* **2.** Уҡып алған, эш барышында үҙләштереп алған махсус белем, тәжрибә. *Теоретик әҙерлек. Әҙерлек кимәле.*

**әҙерләү (әҙерлә-)** *ҡ.* **1.** Тотоноу, ҡулланыу өсөн бар итеү, әҙер итеү. *Аҡса әҙерләү. Бүләк әҙерләү.* **2.** Билдәле бер эшкә, маҡсатҡа әҙер итеү. *Кешене юлға әҙерләү. Мәктәпте уҡыу йылына әҙерләү.* **3.** Ашау, туҡланыу өсөн нимәләр булдырыу, әҙер итеү. *Ашарға әҙерләү. Тамаҡҡа әҙерләү. Әҙерләп ашау.*

**әҙләп** *р.* Әҙ-әҙ генә итеп. *Әҙләп ашау. Әҙләп өйрәнеү.*

**әҙ-мәҙ** *р.* Әҙ генә, саҡ ҡына; бер аҙ. *Әҙ-мәҙ аҡса эшләү.*

**әҙәбиәт** *и.* **1.** Билдәле бер халыҡ, айырым дәүер йәки ғөмүмән кешелек донъяһы тыуҙырған ғилми, әҙәби, фәлсәфәүи һ. б. төр әҫәрҙәрҙең йыйылмаһы. *Башҡорт әҙәбиәте. Боронғо әҙәбиәт.* **2.** Тел ярҙамында һынлы образдар тыуҙыра торған сәнғәт төрө. *Матур әҙәбиәт. Әҙәбиәт ғилеме. Әҙәбиәт өлкәһендә эшләү.*

**әҙәйеү (әҙәй-)** *ҡ.* Күләм йәки һан яғынан кәмеү; аҙайыу. *Аҡса әҙәйҙе. Бесән әҙәйә.*

**әҙәм** *и.* **1.** Фекерләй, һөйләй, эш ҡоралдары яһап, уны хеҙмәт процесында файҙалана белгән иң юғары аҡыл көсөнә эйә булған йән эйәһе; кеше. *Әҙәм аҡылы. Әҙәм балаһы.* **2.** Юғары рухи һәм әхлаҡи сифаттарға эйә булған шәхес. ♦ **Әҙәм булыу** 1) үҫеп етеп тормош көтөр хәлгә килеү. 2) ауырыуҙан һуң хәл алып, шәбәйеү. **Әҙәм итеү** 1) тормош көтөр хәлгә килтереү, аяҡҡа баҫтырыу. 2) ауырыу хәлдән шәбәйтеү.

**әҙәп (әҙәбе)** *и.* Кеше араһында үҙеңде дөрөҫ тота белеүҙән килгән тыйнаҡлыҡ. *Әҙәп ҡағиҙәләрен белеү. Әҙәпкә өйрәтеү. Әҙәп һаҡлау.*

**әй** *ымл.* **1.** Нимәгәлер шатланғанды, һоҡланғанды, хуплауҙы, үкенгәнде, көйөнөп борсолғанды һ. б. белдерә. *Әй, рәхәт донья! Әй, бөтмәҫ шуларҙың эше. Әй, миңә барыбер.* **2.** Халыҡ йырҙарында ижек һанын тултырып, хис-тойғо биреү өсөн ҡулланыла.

**әйҙә** *ымл.* Ҡайҙалыр барырға саҡырғанда, ниҙер эшләргә өндәгәндә әйтелә. *Әйҙәгеҙ, йырлап ебәрәйек. Әйҙә киттек.*

**әйләнеү (әйлән-)** *ҡ.* **1.** Үҙ күсәре тирәһендә хәрәкәт итеү, өйөрөлөү. *Тәгәрмәс әйләнә.* **2.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа, аҫ яғы өҫкә, эсе тышҡа, уң яғы һулға боролоу. *Йөҙ түбән әйләнеү. Кәмә әйләнгән. Күлдәктең тиҫкәре яғы әйләнгән. Әйләнеп ҡарау.* **3.** Нимәнелер түңәрәтеп урау, түңәрәк яһау. *Ауылды бер әйләнеү. Тауҙы әйләнеү.*

**әйләнеш** *и.* **1.** Нимәнеңдер үҙ күсәре тирәһендә йәки йомоҡ һыҙыҡ буйынса яһаған тулы бер хәрәкәте. *Бер әйләнеш. Әйләнеш яһау.* **2.** Ниндәйҙер эштәге ҡабатланған тулы бер цикл. *Сәсеү әйләнеше.*

**әйләнә** *и.* **1.** Нимәнелер ситтән, тыш яҡтан ураткан урын. *Өй әйләнәһе. Урман әйләнәһе.* **2.** Бер йыл, тәүлекте һ. б. эсенә алған ваҡытҡа ҡарата әйтелә. *Йыл әйләнәһе. Тәүлек әйләнәһе.*

**әйтелеш** *и.* Өндө, һүҙҙе әйтеү рәүеше; өндөң, һүҙҙең яңғырашы. *Әйтелешен үҙләштереү.*

**әйтем** *и.* Башҡорт фольклорында тормоштоң айырым бер күренешенә ситләтеп, кинәйәләп йәки образлы итеп баһа биргән тотороҡло һүҙбәйләнеш.

**әйтеү[1] (әйт-)** *ҡ.* **1.** Уйҙы, фекерҙе тел аша башҡаларға еткереү, хәбәр итеү; нимәлер һөйләү. *Рәхмәт әйтеү. Һүҙ әйтеү. Әйткәнде тыңлау. Әйтеп биреү. Әйтергә теләү.* **2.** Өҫкә ниндәйҙер бурыс алғанды белдерә. *Күлдәк әйтеү.* **3.** Ҡайҙалыр нимәгәлер саҡырыу. *Ашҡа әйтеү. Сәйгә әйтеү. Эшкә әйтеү.*

**әйтеү[2]** *и.* Бирелгән һүҙ, ант, вәғәҙә. *Әйтеү әйтеү. Әйтеүҙе үтәү.*

**әйткәнсә** *р.* Өйрәткәнсә, ҡушҡанса. *Үҙе әйткәнсә.*

**әйтмешләй** *инш.* Кемдеңдер һүҙенә таянғанда, һүҙҙең, фекерҙең сығанағын белдергәндә әйтелә. *Атай әйтмешләй.*

**әйтәйек** *инш.* Миҫал, фараз рәүешендә берәй фекер әйткәндә ҡулланыла. *Әйтәйек, бөгөндән үк тотонһаҡ?*

**әйтәм** *инш.* Эштең нимәлә икәнен аңлап ҡалғанда, сәбәбен ҡапыл асҡанда әйтелә. *Әйтәм, бөгөн кәйефе юҡ.*

**әкиәт** *и.* Халыҡ ижадында тылсымлы көстәр, сихырсылар ҡатнашлығында барған төрлө уйҙырма ваҡиғаларға ҡоролған сәсмә әҫәр. *Тылсымлы әкиәт. Әкиәт һөйләү.*

**әкрен** *р.* Тиҙлеге бик бәләкәй; яй; *киреһе* тиҙ. *Әкрен әйләнеү. Әкрен генә ҡояш ҡалҡа.* **2.** Талғын ғына иҫкән; еңелсә (ел тураһында). *Әкрен генә иҫкән таң еле.* **3.** Ишетелер ишетелмәҫ; тын ғына. *Әкрен һөйләшә.*

**әлбиттә** **1.** *мөн.* Фекерҙең ысынбарлыҡҡа тура килеүен, раҫ булыуын, дөрөҫләгән белдерә; һис шикһеҙ. *Әсәһен ныҡ ярата, әлбиттә.* **2.** *инш.* Эш-хәлдең тәбиғи, ғәҙәти булғанын белдереү өсөн ҡулланыла; билдәле. *Әлбиттә, мин дәфтәргә ҡағылманым.*

**әлдә** *мөн.* Нимәнелер урынлы, ваҡытлы тип тапҡанда, риза булып ҡыуанғанды белдергәндә ҡулланыла; ярай әле, яҡшы. *Әлдә һин бар әле.*

**әле**[1] *р.* **1.** Һүҙ барған ваҡытты, ошо мәлде белдерә; хәҙер. **2.** Ошо көнгәсә, ошоға тиклем; хәҙергәсә. *Әле ҡайтманымы ни? Әле һаман йоҡламай ята.*

**әле**[2] *терк.* Теҙмә ҡушма һөйләм йәки тиң киҫәктәр алдынан килеп, бер-бер артлы килгән күренештәрҙе һанап сыҡҡанда ҡулланыла. *Бала әле әсәһенә, әле атаһына йүгерә. Әле ҡар, әле ямғыр яуа.*

**әлеге** *р.* **1.** Ошо мәлдә булған, ошо ваҡытта барған; хәҙерге. *Әлеге көндә.* **2.** Телгә алынған, бығаса билдәле булған; баяғы. *Әлеге бер аш. Әлеге бер һүҙ.*

**әлегә** *р.* **1.** Хәҙерге ваҡытта, әле. *Әлегә күренгәне юҡ.* **2.** Ваҡытлыса, хәҙергә. *Әлегә әйтмәй тор.*

**әленән-әле** *р.* Ваҡыты-ваҡыты менән, ваҡыт-ваҡыт. *Әленән-әле килә лә тора.*

**әлифба** *и.* Тәүге белем биреү, уҡырға, яҙырға өйрәтеү китабы. *Әлифба өйрәнеү. Әлифба китабы. Әлифба төҙөү.*

**әллә**[1] *киҫ.* **1.** Ни уйларға белмәй икеләнгәнде аңлата. *Әллә килеп тә еткәнме? Әллә танымаһыңмы? Әллә икенсе кеше тип уйланы инде.* **2.** Һорау алмашы менән килеп, билдәһеҙ алмаш яһай. *Әллә кем? Әллә ҡайҙа? Әллә нимә? Әллә нисә?* **3.** Эш-хәл тураһында тойҙо менән әйткәндә ҡулланыла. *Әйтмәй әллә.* ♦ **Әллә кем булыу** маһайыу, эреләнеү. **Әллә күпме** бик күп. **Әллә ҡайҙан** нисектер, ҡайҙандыр. **Әллә ҡасан** күптән. **Әллә ни** ул хәтле үк. **Әллә ни арала** көтмәгәндә, бик тиҙ ваҡыт эсендә. **Әллә ни тиклем (хәтле, саҡлы)** бик күп.

**әллә**[2] *инш.* Нимәлер хаҡында асыҡ белмәй икеләнеп әйткәндә ҡулланыла. *Әллә, уның тураһында хәбәр юҡ.*

**әлләсе** *инш.* Ниндәйҙер һорауға икеләнеп, тартынып ҡына яуап биргәндә ҡулланыла. *Әлләсе, нисек булыр икән?*

**әмер** *и.* Ҡәтғи бойороҡ. *Батша әмере. Әмер биреү. Әмерҙе үтәү.*

**әммә** *терк.* Мәғәнә яғынан бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләмде йәки һөйләм киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла; ләкин. ♦ **Әммә ләкин (мәгәр)** шулай булһа ла, шуға ҡарамаҫтан. *Күп күрҙем, әммә ләкин аҙ белдем.*

**әмәл** *и.* **1.** Нимәнелер эшләү, башҡарыу юлы; сара. *Әмәлен табыу. Көтөр әмәл ҡалманы. Күҙ асыр әмәл юҡ.* **2.** Дауалау, имләү саралары; им, им-том. *Әмәл итеү. Әмәл яһау.*

**әңгәмә** *и.* **1.** Ике йәки күмәк кеше һөйләшкән һүҙ. *Әңгәмә ҡороу. Әңгәмә үткәреү.* **2.** Төрлө хәл тураһында һөйләгән хәбәр. *Әңгәмә тыңлау. Әңгәмә үткәреү. Әңгәмә һөйләү.*

**әрем** *и.* Әсе тәмле, ҡырҡыу еҫле, аҡһыл йәшел тетмәкәй япраҡлы эре үлән. *Ваҡ әрем.*

**әрләү (әрлә-)** *ҡ.* Асыуланып ауыр һүҙҙәр әйтеү; һүгеү. *Баланы әрләү.*

**әрмәнде** *и.* Суғырмаҡ тәнле, тәлмәрйенгә оҡшаған ер-һыу йәнлеге.

**әрнеү (әрне-)** *ҡ.* Янған һымаҡ итеп, әсеттереп ауыртыу. *Әрнеп һыҙлау.*

**әрсеү (әрсе-)** *ҡ.* **1.** Нимәнендер ҡабығын һыҙырып алыу. *Алма әрсеү. Картуф әрсеү. Йоҡа итеп әрсеү.* **2.** Ҡаплап, ябып торған нәмәнән таҙартыу. *Иртә яҙ ерҙе әрсей.*

**әрһеҙ** *с.* **1.** Төрлө эшкә, йәшәү шарттарына түҙемле булған. *Эшкә әрһеҙ. Әрһеҙ булыу.* **2.** Оялыуҙы, тартынып тороуҙы белмәгән. *Әрһеҙ кеше.*

**әрәм** *с.* Файҙаһыҙға, бушҡа сыҡҡан. *Әрәм аҡса. Әрәм көс.*

**әрәмә** *и.* Ғәҙәттә туғайҙа, дымлы, уйпат ерҙә үҫкән ваҡ ҡыуаҡлыҡ. *Әрәмәлә ҡоштар һайрай.*

**әсбап (әсбабы)** *и.* Уҡыу-уҡытыу, тәрбиә өсөн кәрәк булған төрлө нәмә. *Күргәҙмә әсбаптары. Уҡыу әсбаптары.*

**әсе** *с.* **1.** Тәме лимон, борос, тоҙ кеүек нәмәләргә хас үткер булған. *Әсе алма. Әсе балан. Әсе лимон. Әсе ҡамыр. Әсе ҡатыҡ.* **2.** Һиҙеү ағзаларына киҫкен тәьҫир иткән; ҡырҡыу. *Әсе еҫ. Әсе төтөн. Әсе тауыш.* **3.** Үҙәккә үтерлек һыуыҡ. *Әсе ел. Әсе һыуыҡ.*

**әсенеү (әсен-)** *ҡ.* Кем йәки нимәнелер уйлап ныҡ борсолоу, өҙгөләнеү, ҡайғырыу. *Әсенеп һөйләү. Йөрәк әсенә.*

**әсетеү (әсет-)** *ҡ.* **1.** Янған һымаҡ итеп әрнетеү. *Боростан тел әсетә. Йодтан йәрәхәт әсетә. Төтөндән күҙ әсетә.* **2.** Әсетке ярҙамында органик матдәләрҙе тарҡатып, әсе тәм индереү. *Бал әсетеү. Буҙа әсетеү. Ҡамыр әсетеү. Ҡымыҙ әсетеү.*

**әсетке** *и.* Нимәнелер әсетер өсөн ҡулланылған ҡур. *Әсетке һалыу. Әсетке яһау.*

**әсеү (әсе-)** *ҡ.* Әсе тәм алыу; әсегә әйләнеү. *Әсегән ҡатыҡ. Һөт әсегән.*

**әсир** *и.* **1.** Яуҙа ҡулға төшкән дошман һалдаты. *Әсир булыу. Әсир итеү. Әсиргә төшөү.* **2.** *күсм.* Бөтә күңелдән яратып һоҡланыу, бирелеү. *Йырсының моңо тамашасыларҙы әсир итте. Тауышына әсир булыу.*

**әскелт** *с.* Әҙ генә әсе тәм йәки еҫ булған. *Әскелт сейә тәме.*

**әстәғәфирулла** *ымл.* «Хоҙай үҙе һаҡлаһын» тигән мәғәнәлә Аллаға һыйынғанды белдерә. *Әстәғәфирулла, күҙ теймәһен!*

**әсә** *и.* Балалы ҡатын. *Әсә булыу. Әсә йөрәге. Әсә һөтө. Бер әсә балалары.* ♦ **Үгәй әсә** үҙ әсәһе үлгәндән һуң, атаһы алған икенсе ҡатын.

**әсәй** *и.* Баланың әсәһенә өндәшеү һүҙе. *Хуш бул, әсәй!*

**әҫәр**[1] *и.* Тел өлкәһенә, әҙәбиәткә, әҙәбиәт ғилеменә ҡараған ижади эш. *Сәсмә әҫәр. Фольклор әҫәр. Тарихи әҫәр. Яҙыусының әҫәре.*

**әҫәр**[2] *и.* Нимәгәлер хас һыҙат, уның сағылышы; эҙ, билдә. *Йөҙөндә ризаһыҙлыҡ әҫәре күренмәне. Күҙенә йоҡо әҫәре килмәне. Ауырыуҙың әҫәре лә ҡалманы.*

**әтәс** *и.* **1.** Тауыҡтар ғаиләһенә ҡараған оҙон дуға ҡойроҡло, ҙур ҡыҙыл кикрекле, типке тырнаҡлы ата енесле ҡош. *Әтәс кикреге. Әтәс ҡойроғо. Әтәс ҡысҡыра.* **2.** *күсм.* Юҡҡа ғына ҡыҙып барған, һуғышырға әҙер торған кешегә әйтелә.

**әү** *ымл.* Кеше өндәшкәндә, яуап итеп әйтелә. *Әү, әсәй!*

**әүерелеү (әүерел-)** *ҡ.* **1.** Ғәмәлдәге хәле үҙгәреп, икенсе сифат, башҡа төҫ алыу, башҡаға әйләнеү. *Ташҡа әүерелеү. Осҡон ялҡынға әүерелде.* **2.** *миф.* Сихри көс ярҙамында кеше йәки берәй нәмәнең икенсе рәүеш алыуы. *Аждаһаға әүерелеү. Ҡошҡа әүерелеү.*

**әүрәү (әүрә-)** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәгәлер бөтә күңел менән бирелеү, мауығыу, онотолоу. *Уйынға әүрәү. Һүҙгә әүрәү.* **2.** Кем йәки нимә менәндер йыуаныу, шуның менән мәшғүл булып онотолоу. *Балаларға әүрәп йәшәү. Бала уйынсыҡҡа әүрәп йоҡлап китте.*

**әүәл** *р.* **1.** Тәү башлап; тәүҙә, башта. *Әүәл үҙе килһен.* **2.** Үткән заманда; элек, борон. *Әүәл заманда.*

**әүәлге** *с.* **1.** Элек булған, баштағы; элекке. *Әүәлге шаянлыҡ билдәһе юҡ. Әүәлгегә ҡарағанда аҡыллыраҡ.* **2.** Бик күптәнге, боронғо. *Әүәлге заман. Әүәлге ғөрөф-ғәҙәт.*

**әүәләү (әүәлә-)** *ҡ.* **1.** Баҫҡылап, устан уҫҡа алып йомарлау, билдәле бер рәүешкә килтереү. *Балсыҡты әүәләү.* **2.** Берәй онтаҡ нәмә өҫтөндә тәгәрәтеп

алыу. *Ҡамырҙы онда әүәләү. Котлетты шөкәрә онтағында әүәләү.* **3.** *күсм.* Өҫтән-мөҫтән генә, арлы-бирле эшләү. *Ашыҡ-бошоҡ әүәләнгән шиғыр.*

**әфлисун** *и.* Цитрус үҫемлектәргә ҡараған оҙонсараҡ япраҡлы мәңге йәшел көньяҡ ағасы һәм уның ҡыҙғылт һары һутлы емеше. *Әфлисун үҫтереү. Әфлисун ашау.*

**әфәнде** *и.* Кешегә ололап өндәшеү һүҙе.

**әхирәт** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың мәңгелеккә вәғәҙәләшкән, бүләк бирешкән дуҫы. *Әхирәт булышыу. Әхирәткә сер һөйләү.*

**әһә** *ымл.* **1.** Берәй эш-хәлгә ҡәнәғәт булғанды белдерә. *Әһә, эләктеңме? Әһә, булды былай булғас.* **2.** Нимәнелер ҡапыл ғына һиҙеп, аңлап алғанды белдерә. *Әһә, аңлашылды.*

**әһәмиәт** *и.* **1.** Нимәнеңдер тормошта тапҡан урыны, ижтимағи баһаһы. *Мәсьәләнең әһәмиәте. Эштең әһәмиәте.* **2.** Нимәнеңдер кәрәклеге, мөһимлеге; файҙаһы. *Әһәмиәт биреү. Әһәмиәте юҡ.*

**әшәке** *с.*Таҙа түгел, бысраҡҡа буялған. *Әшәке кейем. Әшәке ҡул. Әшәке өй.*

# Ю

**юбилей** *и.* Берәй ваҡиғаның йәки кеше ғүмеренең, эшмәкәрлегенең, ойошма, ауыл, ҡалаларҙа нигеҙ һалыныу йыллығы (*тиҫтә йылдар менән иҫәпләнә*). *Юбилей датаһы. Юбилейҙы билдәләү. Юбилей кисәһе.*

**юбка** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың билдән түбән кейелә торған өҫ кейеме; итәк. *Киң итәкле юбка. Ҡара юбка.*

**юғалтыу (юғалт-)** *ҡ.* **1.** Абайһыҙҙан онотоп, төшөрөп ҡалдырып, юҡҡа сығарыу. *Документтарҙы юғалтыу. Китапты юғалтыу. Сәғәтте юғалтыу.* **2.** Кем йәки нимәнәндер яҙыу. *Абруйҙы юғалтыу. Дуҫтарҙы юғалтыу. Өмөттө юғалтыу.*

**юғалыу (юғал-)** *ҡ.* **1.** Абайһыҙҙан онотолоп, төшөп ҡалып, юҡҡа сығыу. *Аҡса юғалған. Юғалған сәғәт.* **2.** Күҙҙән юҡ булыу; ғәйеп булыу. *Сығып юғалыу. Хәбәрһеҙ юғалыу. Эҙһеҙ юғалыу.* ♦ **Баш юғалыу** һәләк булыу. **Юғалып ҡалыу** ни эшләргә белмәй аптырап ҡалыу.

**юғары** *с.* **1.** Ерҙән билдәле бер кимәлдә өҫтәге. *Юғары тараф. Юғары урын.* **2.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлешенә ҡаршы яғындағы. *Юғары ос. Юғары яҡ.* **3.** Һаны, көсө һ. б. йәһәттән күп. *Юғары күрһәткес. Юғары температура. Юғары уңыш.* **4.** Баш булған, етәкселек иткән. *Дәүләт власының юғары органдары. Юғары суд инстанцияһы.*

**юғиһә** *карш. терк.* Мәғәнә яғынан бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләм йәки һөйләм киҫәген теркәү өсөн ҡулланыла; юҡһа.

**юйғыс** *и.* Яҙғанды юя торған резина. *Ҡара юйғысы. Ҡәләм юйғысы.*

**юйыу (юй-)** *ҡ.* **1.** Һөртөп, ҡырып юҡ итеү; бөтөрөү. *Яҙғанды юйыу. Юйып ташлау.* **2.** Ниндәйҙер хәл йәки сифатты юҡҡа сығарыу; бөтөрөү. *Аҡылды юйыу. Аңды юйыу. Гонаһты юйыу.*

**юҡ** *мөн.* **1.** Кемдең йәки ниҙеңдер ғәмәлдә булмағанлығын белдерә; *киреһе бар. Бер нәмә лә юҡ. Сәбәп юҡ.* **2.** Яуап рәүешендә килеп, кире ҡаҡҡанды белдерә; *киреһе* эйе. **3.** Һөйләмдәге эш-хәрәкәттең инҡар ителеүен аңлатып, кире мәғәнә бирә. *Күргәнем юҡ. Ҡайтаһым юҡ.* ♦ **Юҡҡа сығыу** 1) тамам бөтөү, юҡ булыу; 2) мөһим сифат-рәүеште юғалтыу.

**юҡ-бар** *и. йыйн.* **1.** Ваҡ-төйәк, әһәмиәтһеҙ нәмәләр. *Юҡ-бар менән булыу. Юҡ-барҙы күреү.* **2.** Буш, ялған һүҙ. *Юҡ-бар һөйләү.*

**юҡҡа** *р.* **1.** Һис кәрәкһеҙгә, бушҡа. *Юҡҡа булышыу. Юҡҡа тырышыу.* **2.** Сәбәпһеҙҙән; бушҡа. *Юҡҡа илау. Юҡҡа хафаланыу.* **3.** Үкенес белдергәндә әйтелә. *Юҡҡа барғанмын.*

**юҡлыҡ (юҡлығы)** *и.* **1.** Ғәмәлдә булмаған хәл. *Урын юҡлығы. Ышаныс юҡлығы.* **2.** Тормоштағы етешһеҙлек; ярлылыҡ. *Халыҡ юҡлыҡта йәшәй.*

**юҡһа** *карш. терк.* Мәғәнәһе яғынан бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләмде йәки һөйләм киҫәген теркәү өсөн ҡулланыла; юғиһә.

**юл** *и.* **1.** Йөрөү өсөн хеҙмәт иткән, даими рәүештә хәрәкәт барған урын. *Машина юлы. Оло юл. Таш юл.* **2.** Тәндең ниҙер йөрөй, үтә торған эсе ҡыуыш ағзаһы. *Аш юлы. Тын юлы. Үт юлы.* **3.** Бер һыҙыҡҡа яҙылған һүҙҙәр йәки башҡа тамғалар рәте. *Китап юлы. Юлдағы һүҙҙәр.* ♦ **Ҡыҙыл юл** яңы юл. **Яңы юл** яҙманың баштан башлап, эскә тартып яҙған юлы.

**юлаҡ (юлағы)** *и.* **1.** Буй булып төшкән һыҙат. *Юлаҡ-юлаҡ тир.* **2.** Һыу йырып яһаған эҙ. *Һыу юлағы.*

**юлбарыҫ** *и.* **1.** Бесәйҙәр ғаиләһенә ҡараған ҡара һыҙатлы, ҡыҙғылт һары төҫтәге һөтимәр эре йыртҡыс йәнлек. *Ата юлбарыҫ. Инә юлбарыҫ. Юлбарыҫ балаһы.* **2.** *күсм.* Батыр, ҡурҡыу белмәгән ир-атҡа ҡарата әйтелә.

**юлдаш** *и.* **1.** Юлда бергә барған кеше. *Юлдаш булыу.* **2.** *күсм.* Бер рух, теләкле кеше. *Юлдаш табыу. Ғүмерлек юлдаш. Ышанислы юлдаш.* ♦ **Тормош юлдашы** тормош юлын бергә үткән, бергә йәшәгән кеше.

**юлсы** *и.* **1.** Юл йөрөгән кеше. *Төнгө юлсы.* **2.** Юл эше менән шөғөлләнгән кеше. *Юлсы булып эшләү.* ♦ **Тимер юлсы** тимер юл хеҙмәткәре.

**юлығыу (юлыҡ-)** *ҡ.* **1.** Юлда барғанда тап булыу; осрау. *Дуҫ-иштәргә юлығыу.* **2.** Тәғәйен кешегә барып етеү. *Хат хужаһына юлыҡманы.*

**юмор** *и.* Ниҙелер көлкөлө итеп күрһәтеү оҫталығы. *Юмор менән һөйләү.*

**юнысҡы** *и.* Йышҡанда, юнғанда сыҡҡан тап. *Ағас юнысҡыһы.*

**юныу (юн-)** *ҡ.* **1.** Йоҡа итеп, буйҙан-буйға һыҙырып алыу. *Ағасты юныу. Балта менән юныу. Бысаҡ менән юныу.* **2.** Һыҙыра ҡырҡып ниҙер яһау. *Көрәк юныу.*

**юрамал** *р.* **1.** Эстән уйлаған бер кире ниәт менән. *Юрамал килеү. Юрамал эшләү.* **2.** Бушты ысын иткән булып, шаяртып. *Юрамал йоҡлаған булыу. Юрамал ҡыланыу. Юрамал белмәмешкә һалышыу.*

**юрға 1.** *с.* Юрғалай торған йөрөшлө. *Юрға ат. Юрға булыу.* **2.** *и. мәғ* Шундай йөрөшлө ат. *Күк юрға. Ҡара юрға.*

**юрған** *и.* Ябынып ятыу өсөн эсенә мамыҡ йәки башҡа нәмә һалып һырылған ҡаралды. *Мамыҡ юрған. Юрған һырыу. Юрған ябыныу.*

**юртаҡ (юртағы) 1.** *с.* Юртыуға шәп, яҡшы юртыусан. *Юртаҡ ат.* **2.** *и. мәғ* Юртыуға шәп ат. *Юртаҡҡа менеү. Юртаҡтар ярышы.*

**юртыу (юрт-)** *ҡ.* Аяҡты етеҙ алып, шәп хәрәкәт итеү *(атҡа һәм башҡа хайуанға ҡарата). Әкрен генә юртыу.*

**юхалау (юхала-)** *ҡ.* Татлы телләнеү, матур һүҙҙәр һөйләп әүрәтеү. *Юхалап үҙенә ҡаратыу. Юхалауға оҫта.*

# Я

**ябай** *с.* **1.** Бер яғы менән дә башҡаларҙан айырылмаған, ғәҙәттәге. *Ябай кейем. Ябай күренеш. Ябай тормош.* **2.** Төҙөлөшө, составы ҡатмарлы булмаған, аңлауға, башҡарыуға еңел булған. *Ябай һүҙ. Ябай эш. Ябай юл.* **3.** Башҡа кешеләрҙән өҫтөн тормаған, дәрәжәһе булмаған. *Ябай халыҡ. Ябай эшсе. Ябай һалдат.*

**ябалаҡ (ябалағы)** *и.* Йомро башлы, ҙур түңәрәк күҙле, сыбар төҫлө төнгө йыртҡыс ҡош. *Аҡ ябалаҡ. Ябалаҡ балаһы.* ♦ **Ябалаҡ ҡар** эре күҙле йомшаҡ ҡар.

**ябалаҡлау (ябалаҡла-)** *ҡ.* Эре, йомшаҡ күҙле (ҡар). *Ябалаҡлап ҡарҙар яуа.*

**ябығыу (ябыҡ-)** *ҡ.* Ит-май кәмеп, тән йоҡарыу, ҡаҡсаға әйләнеү. *Ауырып ябығыу. Бик ныҡ ябығыу. Ябығып китеү.*

**ябыҡ**[1] *с.* Май ҡатламы булмаған, ҡаҡса, йоҡа тәнле; *киреһе* һимеҙ. *Ябыҡ кеше. Ябыҡ мал. Ябыҡ булыу.*

**ябыҡ**[2] *с.* Ябып ҡуйылған, ябылған; *киреһе* асыҡ. *Ябыҡ ишек. Ябыҡ тәҙрә.*

**ябыныу (ябын-)** *ҡ.* **1.** Башҡа ябыу, башҡа бәйләү. *Яулыҡ ябыныу. Бөркәнсек ябыныу.* **2.** Өҫкә ябыу, ҡаплау. *Ябынмай йоҡлай. Ябынып ятыу.*

**ябырылыу (ябырыл-)** *ҡ.* **1.** Күмәк булып, өйөлөшөп хәрәкәт итеү, ҡайҙалыр йүнәлеү, ташланыу. *Балалар өҫтәл эргәһенә ябырылды. Халыҡ баҙарға ябырылды.* **2.** Күп һанда һөжүм итеү, яу булып ташланыу. *Дошманға ябырылыу. Ябырылып килгән ғәскәр.*

**ябыу (яп-)** *ҡ.* **1.** Асыҡ торған нәмәләрҙе ҡаплау, өҫтән ҡаплау. *Ҡапҡаны ябыу. Һандыҡты ябыу. Өҫкә юрған ябыу.* **2.** Нимәнеңдер эшен, хәрәкәтен, ағышын туҡтатыу. *Ашхананы ябыу. Газды ябыу. Кранды ябыу.* **3.** Ҡайҙалыр индереп бикләү. *Ситлеккә ябыу. Төрмәгә ябыу.*

**яға** *и.* Кейемдең муйын тирәләй уратып торған өлөшө. *Аҡ яға. Бейек яға. Селтәр яға.*

**яғымлы** *с.* **1.** Йылы тойғо белдергән, иркәләгән. *Яғымлы ҡараш. Яғымлы тауыш. Яғымлы һүҙ.* **2.** Кешегә алсаҡ, йомшаҡ һүҙле, мөләйем. *Яғымлы бала.*

**яғыу**[1] **(яҡ-)** *ҡ.* **1.** Усаҡҡа, мейескә утын, күмер һ. б. һалып ут тоҡандырыу. *Ҡаҙан аҫтына яғыу. Мейескә ут яғыу.* **2.** Ут ярҙамында йылытыу. *Мунса яғыу. Яҡмаған өй.*

**яғыу**[2] **(яҡ-)** *ҡ.* **1.** Өҫтән буяп һылау. *Биткә кершән яғыу. Икмәккә май яғыу.* **2.** *күсм.* Кемгәлер ғәйеп ташлау, тағыу. *Бәлә яғыу. Яла яғыу.*

**яғыулыҡ (яғыулығы)** *и.* Йылылыҡ энергияһы алыу өсөн файҙаланылған нәмәләрҙең дөйөм атамаһы. *Дизель яғыулығы. Шыйыҡ яғыулыҡ.*

**яҙ** *и.* Йылдың ҡыш менән йәй араһындағы йылы миҙгеле. *Иртә яҙ. Яҙ башы. Яҙ ҡояшы. Яҙға сығыу.*

**яҙа** *р.* Тейешле урындан ситкә. *Яҙа атыу. Яҙа баҫыу. Яҙа һалыу.*

**яҙғы** *с.* Яҙ ваҡытындағы. *Яҙғы боҙ. Яҙғы сәсеү. Яҙғы ташҡын.*

**яҙлы-көҙлө** *р.* Яҙғы һәм көҙгө ваҡытта. *Яҙлы-көҙлө ауырыу.*

**яҙма** *и.* **1.** График тамғалар системаһы. *Боронғо яҙма. Хәҙерге яҙма.* **2.** Ҡағыҙға яҙылған яҙыу. *Тарихи яҙма. Юл яҙмаһы.*

**яҙмыш** *и.* **1.** Юғары көс тарафынан алдан уҡ билдәләнгән күрәсәк; тәҡдир. *Яҙмышҡа буйһоноу. Яҙмышҡа күнеү.* **2.** Кешенең йәки нимәнеңдер йәшәү рәүешен, үҫеү тарихын, булмышын күрһәткән хәл. *Ауыр яҙмыш. Ил яҙмышы.*

**яҙылыу (яҙыл-)** *ҡ.* **1.** *төш. йүн. ҡар.* **яҙыу.** *Башҡортса яҙылған китап. Ҡәләм менән яҙылған.* **2.** Ҡайҙалыр үҙенде яҙҙырыу, нимәнеңдер һанына инеү. *Исемлеккә яҙылыу.* **3.** Ваҡытлы матбуғат алдырыу, билдәле ваҡытта килтереү шарты менән алдан хаҡ түләү. *Гәзиткә яҙылыу. Журналға яҙылыу.*

**яҙылыш** *и.* Нимәнеңдер яҙыуҙағы бирелеше, яҙылыу рәүеше. *Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы.*

**яҙыу**[1] **(яҙ-)** *ҡ.* **1.** Ҡағыҙ йәки башҡа нәмәгә һан, хәреф, һүҙ һ. б. төшөрөү, теркәү. *Дөрөҫ яҙыу. Матур яҙыу. Нота яҙыу.* **2.** Нимәнеңдер иҫәбенә индереп исемлеккә теркәү. *Исемлеккә яҙыу. Эшкә яҙыу.* **3.** Ниндәй ҙә булһа әҫәр ижад итеү. *Китап яҙыу. Музыка яҙыу. Хикәйә яҙыу.* **4.** Махсус аппарат ярҙамында тауышты көйтабаҡҡа, магнитофон таҫмаһына, дискыға күсереү. *Концертты яҙыу. Магнитофонға яҙыу.*

**яҙыу**[2] *и.* Ҡағыҙ йәки башҡа нәмәгә махсус ҡорал ярҙамында график тамғалар төшөрөү эше. *Яҙыу дәресе. Яҙыуы матур. Яҙыу эше.* **2.** Нимәлер яҙылған ҡағыҙ. *Яҙыу ҡалдырыу. Юғарынан килгән яҙыу.* **3.** Яҙғанда ҡулланылған график тамғалар системаһы. *Ғәрәп яҙыуы. Латин яҙыуы.*

**яҙыу**[3] **(яҙ-)** *ҡ.* **1.** Бөкләнгән, йомолған, йыйырылған хәлдән төҙ, тигеҙ хәлгә ҡайтарыу, турайтыу. *Аяҡты яҙыу. Бармаҡтарҙы яҙыу. Билде яҙыу.* **2.** Бешеп, туҡып айран, май яһау. *Май яҙыу.*

**яҙыу**[4] **(яҙ-)** *ҡ.* Нимәнәндер мәхрүм булыу, нимәнелер юғалтыу. *Аҡылдан яҙыу. Ер-һыуҙан яҙыу. Иҫтән яҙыу. Ризыҡтан яҙыу. Телдән яҙыу.*

**яҙыусы** *и.* Әҙәби әҫәр яҙыу менән шөғөлләнгән кеше, ижадсы. *Йәш яҙыусы. Талантлы яҙыусы.*

**яза** *и.* Ҡылған енәйәт, ғәйеп өсөн ҡулланылған сара. *Ҡаты яза. Үлем язаһы. Язаға тарттырыу.*

**язалау (язала-)** *ҡ.* Тән йәки йән ғазабы сараларын ҡулланыу; яза биреү. *Язалап үлтереү.*

**яй**[1] *и.* **1.** Нимәнелер башҡарыуға уңайлы мәл. *Яйы сыҡҡанда. Яйын тура килтереү. Яйын эҙләү.* **2.** Кешенең нимәгәлер булған ихтыяры, теләге (ғәҙәттә теләгенә ҡаршы килмәгәндә әйтелә). *Баланы үҙ яйына ҡуйыу. Үҙ яйыңды ҡарау.* **3.** Нимәнеңдер тейешле тәртибе, көйө. *Эште яйға һалыу.*

**яй**[2] *с.* Ғәҙәттәгенән әкрен. *Яй хәрәкәт. Яй йөрөү. Яй эшләү.*

**яйлау (яйла-)** *ҡ.* Ашыҡмай, әкрен ҡуҙғалыу. *Яйлап йөрөү. Яйлап ҡайтыу.*

**яйлы** *с.* **1.** Файҙаланыу өсөн уңайлы, йәтеш булған; ҡулайлы. *Яйлы урын.* **2.** Нимәлер өсөн яҡшы, уңайлы булған. *Яйлы ваҡыт. Яйлы тормош. Яйлы эш.*

**яйһыҙ** *с.* **1.** Файҙаланыу өсөн уңайһыҙ булған; ҡулайһыҙ. *Яйһыҙ балта. Яйһыҙ урын.* **2.** Ниндәйҙер эш өсөн уңайһыҙ булған, ҡамасаулаған. *Яйһыҙ ваҡытта килеү.*

**якорь (якорҙы)** *и.* Карап, маяҡ кеүек нәмәләрҙе бер урында тотоу өсөн һыу төбөнә төшөрөлә торған ауыр ырғаҡ. *Якорь ташлау. Якорҙан ысҡыныу.*

**яҡ (яғы)** *и.* **1.** Билдәле бер йүнәлеш, тараф һәм шул тарафтағы урын. *Алғы яҡ. Артҡы яҡ. Тау яғы. Уң яҡ.* **2.** Билдәле бер урын; өлкә, ил. *Белмәгән яҡ. Тыуған яҡ. Ялан яғы.* **3.** Йорт, бинаның бер өлөшө, бүлеге. *Түр яҡ. Төп яҡ.* **4.** Нәмәнең ҡайһылыр тарафының йөҙө. *Ҡулдың һырт яғы. Тауарҙың тиҫкәре яғы.* **5.** Берәй кеше йәки нәмәләге айырым бер сифатты, үҙенсәлекте күрһәткән һыҙат, билдә. *Етешһеҙ яҡ. Халыҡтың яҡшы яҡтары. Һәр яҡтан етешле.*

**яҡлау**[1] **(яҡла-)** *ҡ.* Кемделер йәберләргә, ҡыйырһытырға ирек бирмәй, ҡурсыу. *Баланы яҡлау. Яҡлап алып ҡалыу. Яҡлап сығыу. Яҡлап һөйләү.*

**яҡлау**[2] **(яҡла-)** *ҡ.* Хәл ҡылымдың -п формаһында төрлө һүҙгә эйәреп, эш-хәлдең урынын, тарафын белдереп рәүеш яһай. *Дүрт яҡлап уратып алыу. Тау яҡлап ҡайтыу. Һәр яҡлап тикшереү.*

**яҡлы** *с.* **1.** Күпмелер яғы булған. **2.** Кем йәки нимәнелер яҡлаған. *Тыныслыҡ яҡлы. Халыҡ яҡлы.*

**яҡташ** *и.* Кем менәндер бер яҡтан булған кеше. *Яҡташтар менән осрашыу. Яҡташтар йәмғиәте.*

**яҡты** *с.* **1.** Ҡояш, ай, ут нуры төшкән; нурға тулы. *Яҡты бүлмә. Яҡты көн. Яҡты төн.* **2.** *күсм.* Бәхетле, шатлыҡлы. *Яҡты киләсәк. Яҡты хыял.*

**яҡтылыҡ (яҡтылығы)** *и.* **1.** Күҙгә күренгән һәм тирә-яҡты күренерлек иткән электромагнит нуры. *Көн яҡтылығы. Яҡтылыҡ төшөү.* **2.** *күсм.* Бәхетле, ҡыуаныслы тормош. *Яҡтылыҡҡа ынтылыу.*

**яҡтыртыу (яҡтырт-)** *ҡ.* **1.** Яҡтылыҡ биреү, яҡты итеү. *Бүлмәне яҡтыртыу. Ҡояш яҡтырта. Шәм яҡтырта.* **2.** *күсм.* Сағылдырыу, тасуирлап күрһәтеү (сәнғәттә, әҙәби әҫәрҙә һ. б.). *Журналда яҡтыртыу.* **3.** *күсм.* Йөҙгә, сырайға алсаҡ төҫ сығарыу. *Йөҙҙө яҡтыртыу.*

**яҡтырыу (яҡтыр-)** *ҡ.* **1.** Төн үтеп, таң атыу, көн яҡтыһы килеү. *Яҡтырта башлау. Яҡтырғанды көтөү. Донъя яҡтырҙы.* **2.** Яҡтылыҡ биреү, нур сәсеп балҡыу. *Ай яҡтыра. Алыҫтан яҡтырып күренеү.*

**яҡшы** *с.* Юғары сифатлы, ыңғай баһалы, талапҡа ярашлы; *киреһе* насар. *Яҡшы аҙыҡ. Яҡшы ат. Яҡшы кейем.* **2.** Ыңғай эстәлекле, күңелгә яткан. *Яҡшы*

*китап. Яҡшы теләк. Яҡшы һүҙ.* **3.** Теләккә ярашлы; матур, һәйбәт. *Яҡшы киләсәк. Яҡшы тормош.*

**яҡшылыҡ (яҡшылығы)** *и.* Кемгәлер йәки нимәгәлер ҡарата эшләнгән яҡшы эш. *Яҡшылыҡ көтөү. Яҡшылыҡ менән. Яҡшылыҡ эшләү.*

**яҡын** *с.* **1.** Араһы бәләкәй, йәнәш; *киреһе* алыҫ. *Яҡын ауыл. Яҡын ер.* **2.** Ваҡыт араһы бәләкәй, тиҙҙән буласаҡ. *Яҡын киләсәк. Яҡын көндәрҙә.* **3.** Үҙ-ара йылы мөнәсәбәттә, тығыҙ бәйләнештә булған. *Яҡын дуҫ. Яҡын таныш. Яҡын туған.*

**яҡынайыу (яҡынай-)** *ҡ.* **1.** Ике аралағы алыҫлыҡ кәмеү. *Ауылға яҡынайыу.* **2.** Ваҡыт арауығы кәмеү; яҡынлау. *Ҡыш яҡыная.*

**яҡында** *р.* Яҡын урында. *Яҡында ғына тороу.*

**яҡындағы** *с.* Яҡын-тирәләге. *Яҡындағы күл.*

**яҡынлашыу (яҡынлаш-)** *ҡ.* **1.** Хәрәкәт итеп араны ҡыҫҡартыу; яҡынайыу. *Ауылға яҡынлашыу.* **2.** Ваҡыт араһы кәмеү; яҡынлау. *Байрам яҡынлаша. Көҙ яҡынлаша.* **3.** Билдәле бер һан күләменә, ниндәйҙер дәүмәлгә сама менән яҡын килеү. *Алтмышҡа яҡынлашыу.*

**яҡынса** *р.* **1.** Сама менән. *Яҡынса алғанда. Яҡынса иҫәпләгәндә.* **2.** Әҙ-мәҙ, бер сама. *Яҡынса белеү.*

**ял**[1] *и.* **1.** Көс йыйыу, хәл алыу өсөн эш-хәрәкәттән туҡтап торған ваҡыт арауығы. *Ял сәғәте. Ял биреү. Ялға туҡтау. Ял көнө.* **2.** *күсм.* Күңел тыныслығы, ҡәнәғәтлек тойғоһо. *Күңелгә ял булыу.*

**ял**[2] *и.* **1.** Ҡайһы бер хайуандарҙың елкә буйында оҙон булып үҫкән ҡыл. *Арыҫлан ялы. Ат ялы.* **2.** Йылҡы малының елкә буйындағы май ҡатламы. *Ҡаҡлаған ял. Ҡаҙы-ял ашау.*

**ял**[3] *и.* Эшләгән эш өсөн бирелгән түләү. *Тамаҡ ялына эшләү.*

**ялағай**[1] *и.* Бик алыҫта, офоҡта күк күкрәмәй генә ялтлаған йәшен уты. *Ялағай уйнай.*

**ялағай**[2] *с.* Кемгәлер яҡшы күренергә, ярарға тырышҡан; ярамһаҡ. *Ялағай кеше. Ялағай булыу.*

**ялан**[1] *и.* Асыҡ, тигеҙ урын-ер. *Киң ялан. Ялан яғы.*

**ялан**[2] *с.* Өҫтән кейем, көп менән ҡапланмаған. *Ялан аяҡ. Ялан баш. Ялан ҡул. Ялан өҫ.*

**ялан ғас** *с.* **1.** Өҫтөндә бер төрлө лә кейем, көп булмаған. *Яланғас ҡул. Яланғас тән. Яланғас ҡалыу.* **2.** Үҫемлеге йәки япрағы булмаған. *Яланғас ағас.*

*Ялан*ғ*ас тау.* **3.** Бер ни менән дә йыһазландырылмаған; буш. *Ялан*ғ*ас өй. Ялан*ғ*ас стена.*

**ялау (яла-)** *ҡ.* Нимәнендер өҫтөн тел менән һыпырыу. *Иренде ялау. Ҡалаҡ ялау. Тоҙ ялау.*

**ялбарыу (ялбар-)** *ҡ.* Түбәнселек менән бик ныҡ үтенеп мөрәжәғәт итеү; ялыныу. *Аллаға ялбарыу. Ялбарып ҡарау. Ярҙам һорап ялбарыу.*

**ялбыр** *с.* Ян-яҡҡа таралып торған оҙон ҡуйы йөнлө йәки ҡыллы. *Ялбыр ҡойроҡ. Ялбыр сәс. Ялбыр эт.*

**ялған** *с.* **1.** Ысын булмаған, алдаҡ. *Ялған хәбәр. Ялған һөйләү.* **2.** Алдау маҡсатында ысынға оҡшатып яһалған. *Ялған аҡса. Ялған документ.*

**ялғау**[1] **(ялға-)** *ҡ.* **1.** Өҙөк йәки айырым нәмәне бер-береһенә ҡуша беркетеү. *Бауҙы ялғау. Емеш ағастарын ялғау. Һынған нәмәне ялғау.* **2.** Алда булған эш-хәл, күренеш менән бәйләп, ҡушып дауам иттереү. *Һүҙҙе ялғап алып китеү. Уйҙарҙы ялғау.*

**ялғау**[2] *и.* **1.** Оҙонайтыу, киңәйтеү өсөн ҡуйылған өҫтәмә. *Итәккә ялғау һалыу. Ялғау ҡушыу.* **2.** Һүҙҙең тамырына йәки нигеҙенә ҡушылып, лексик йәки грамматик мәғәнә биргән киҫәк. *Зат ялғауы. Килеш ялғауы. Үҙгәртеүсе ялғау. Яһаусы ялғау.*

**ялҡау** *с.* Эш һөймәҫ. *Ялҡау кеше. Ялҡау булыу. Ялҡауға әйләнеү.*

**ялҡауланыу (ялҡаулан-)** *ҡ.* Ялҡауға әйләнеү, ялҡау булыу. *Ялҡауланып йөрөү.*

**ялҡын** *и.* **1.** Янғанда барлыҡҡа килгән ут көлтәһе, ялпылдап торған ут. *Көслө ялҡын. Ялҡын теле. Ялҡын күтәрелеү.* **2.** *күсм.* Көслө хис, дәрт. *Көрәш ялҡыны. Һөйөү ялҡыны.*

**ялҡытҡыс** *с.* Күңелгә оҡшамаған, биҙҙергес. *Ялҡытҡыс эш.*

**ялҡытыу (ялҡыт-)** *ҡ.* Гел бер төрлө булып, йонсотоу, теңкәгә тейеү. *Ялҡытып бөтөү. Ямғыр ялҡытты.*

**ялҡыу (ялҡ-)** *ҡ.* Гел бер төрлө булып торған нәмәнән биҙеү. *Эшһеҙ ятып ялҡыу. Бер төрлө аштан ялҡыу.*

**ялланыу (яллан-)** *ҡ.* Билдәле бер шартҡа, хаҡҡа килешеп эш башҡарыу. *Көтөү көтөргә ялланыу. Эшкә ялланыу. Ялланып эшләү.*

**ялмау (ялма-) 1.** Уратып алып эләктереү, аймап алыу, ҡармау. *Ялмап тотоу.* **2.** Солғап, биләп алыу. *Өйҙө ут ялманы. Күңелде ялмау.*

**ялсы** *и.* Бай кеше хужалығында хеҙмәт иткән кеше; хеҙмәтсе. *Ялсы булыу. Ялсы итеп тотоу.*

**ялтлау (ялтла-)** *к.* Яҡты, асыҡ булып ҡапыл балҡыу. *Йәшен ялтланы.*

**ялтыр** *с.* **1.** Ялтлап торған; йылтыр. *Ялтыр бот. Ялтыр итек.* **2.** Шыпшыма, таҡыр. *Ялтыр баш.*

**ялтыратыу (ялтырат-)** *к.* **1.** Яҡты итеп балҡытыу. *Ҡылысты ялтыратыу.* **2.** Эске тойғо менән балҡытыу, нурландырыу. *Күҙҙәрҙе ялтыратыу.* **3.** Ышҡып, таҙартып, буяп һ. б. юлдар менән ялтыр итеү. *Йышып ялтыратыу. Май һөртөп ялтыратыу.*

**ялтырау (ялтыра-)** *к.* **1.** Ялт итеп балҡыу, нур сәсеү. *Алыҫта ут ялтырай. Йәшен ялтырай.* **2.** Эске тойғонан балҡыу (күҙгә ҡарата). *Ҡыуаныстан күҙҙәре ялтырай.*

**ялыныу (ялын-)** *к.* Түбәнселек менән ни хаҡындалыр үтенеп мөрәжәғәт итеү. *Ялынып һорау.*

**яман** *с.* **1.** Булмышы, асылы, сифаты, йөкмәткеһе насар. *Яман ғәҙәт. Яман кеше. Яман уй. Яман һүҙ. Яман булыу.* **2.** Ҡурҡыныс тойғоһо уятҡан. *Яман тауыш.* **3.** *р. мәғ.* Ифрат, бик. *Яман көслө. Яман матур. Яман уҫал.*

**яманлау (яманла-)** *к.* Яман итеп күрһәтеү; насарлау, хурлау. *Яманлап һөйләү. Яманлап яҙыу.*

**ямау**[1] **(яма-)** *к.* Кейем-һалым һ. б. нәмәнең тишелгән, туҙған еренә нимәлер һалып тегеү. *Тоҡ ямау. Ямап кейеү.*

**ямау**[2] *и.* Туҙған, тишелгән ерҙе бөтәйтеү өсөн һалған нәмә киҫәге. *Ямау һалыу.*

**ямғыр** *и.* Болоттарҙан һыу тамсылары рәүешендә яуа торған яуым-төшөм. *Быҫҡаҡ ямғыр. Ваҡ ямғыр. Ҡойма ямғыр. Ләйсән ямғыры. Ямғыр яуыу.*

**ян**[1] *и.* **1.** Бөгөп кереш тартҡан боронғо уҡ атыу ҡоралы; йәйә. *Мөгөҙ ян. Әҙернә ян. Ян керешен тартыу.* **2.** Ағастан бөгөп, тарамыштан кереш тартып яһаған йөн теткес. *Ян менән йөн тетеү.*

**ян**[2] *и.* **1.** Кемдендер, нимәнендер эргәһе. *Өй яны. Янға килеү. Янда ятыу.* **2.** *с. мәғ.* Шул яҡта булған, урынлашҡан. *Ян кеҫә. Ян ҡапҡа. Ян тәҙрә.*

**янау (яна-)** *к.* Насарлыҡ эшләү, үс алыу тураһында алдан ҡурҡытып, иҫкәртеп әйтеү. *Бармаҡ янау. Йоҙроҡ янау. Эштән ҡыуыу менән янау.*

**янғын** *и.* Йорт-ҡаралтыны ялмап алған ут, ялҡын. *Янғынға ҡаршы көрәш. Янғын сығыу.*

**яндырыу (яндыр-)** *к.* **1.** Утта үртәү. *Ағас яндырыу. Өйҙәрҙе яндырыу.* **2.** Утлы итеү, тоҡандырыу. *Шәм яндырыу. Усаҡ яндырыу.* **3.** Утта ҡыҙҙырып сыныҡтырыу. *Кирбес яндырыу. Көршәк яндырыу.* **4.** Дымлы көйө өйөп, ҡыҙҙырыу, серетеү. *Бесәнде яндырыу. Игенде яндырыу.* **5.** *күсм.* Эске кисерештәр уятыу, әрнетеү. *Йөрәкте яндырыу.*

**януар** *и.* Ҡырағай хайуан. *Януар эҙе.*

**яныу**[1] **(ян-)** *к.* **1.** Ут тәьҫирендә юҡҡа сығыу. *Яна башлау. Янып бөтөү.* **2.** Уты булыу. *Мейес янып ята.* **3.** Дымлы көйө баҫылып ятыуҙан ныҡ ҡыҙып, сереү, боҙолоу. *Бесән яныу. Иген яныу.* **4.** Оҙаҡ ҡулланыуҙан, ныҡ ҡыҙыуҙан боҙолоу. *Лампочка янған. Үтек янды, эшләмәй.* **5.** Яҡтылыҡ таратыу, ялтырап тороу. *Йондоҙ яна. Лампа яна. Күҙҙәре янып тора.*

**яныу**[2] **(яны-)** *к.* Бысаҡ, ҡылыс һ. б. ҡоралдарҙы ышҡып үткерләү; йөҙөн сығарыу. *Бәкене яныу. Салғы яныу.*

**яныуыс** *и.* Салғы яный торған ҡорал. *Ҡом яныуыс. Яныуыс менән яныу.*

**яңаҡ**[1] **(яңағы)** *и.* Биттең ике сикәнән түбәнге тештәр урынлашҡан өлөшө; яҡ. *Ас яңаҡ. Яңаҡ һөйәге. Яңаҡҡа таяныу.*

**яңаҡ**[2] **(яңағы)** *и.* Ишек, тәҙрә уйымының ян ағасы; яҡ. *Ишек яңағы. Тәҙрә яңағы.*

**яңғыҙ** *с.* **1.** Башҡаларҙан айырым, үҙенә бер башҡа. *Яңғыҙ ҡайын. Яңғыҙ өй.* **2.** Дуҫ-иш, туған-тыумасаһыҙ, бер бөртөк. *Яңғыҙ бала. Яңғыҙ әсә. Яңғыҙ йәшәү. Яңғыҙ эшләү.*

**яңғыҙлыҡ (яңғыҙлығы)** *и.* Яңғыҙ булған хәл. *Яңғыҙлыҡта йәшәү.* ♦ **Яңғыҙлыҡ исемдәр** кемдеңдер йәки нимәнеңдер айырым атамаһын белдергән исем.

**яңғыратыу (яңғырат-)** *к.* Көслө, асыҡ итеп сығарыу (тауышҡа ҡарата). *Яңғыратып йырлау. Урман яңғыратып ҡысҡырыу.*

**яңғырау (яңғыра-)** *к.* **1.** Көслө, асыҡ булып сағылыу (тауышҡа ҡарата). *Йыр яңғырай. Мылтыҡ тауышы яңғыраны.* **2.** *күсм.* Күп ерҙәргә таралыу, билдәле булыу. *Исеме донъяға яңғырай.*

**яңы**[1] *с.* **1.** Әле генә эшләнеп, бер ҙә тотонолмаған. *Яңы кейем. Яңы машина. Яңы шкаф.* **2.** Әле барлыҡҡа килгән; һуңғы. *Яңы дарыу. Яңы йыр. Яңы фекер. Яңы ысул.* **3.** Яҡын осорҙағы, һуңғы ваҡыттағы. *Яңы быуын. Яңы тормош. Яңы әҙәбиәт.*

**яңы**[2] *р.* Әле генә, күптән түгел. *Кино яңы башланды. Яңы иҫемә төштө. Яңы ғына килдем.*

**яңылыҡ (яңылығы)** *и.* **1.** Элек билдәле булмаған яңы нәмә. *Фән яңылыҡтары. Яңылыҡ асыу. Яңылыҡ индереү.* **2.** Күптән түгел алынған яңы хәбәр. *Һуңғы яңылыҡтар. Яңылыҡ һөйләү.*

**яңылыш** *с.* **1.** Дөрөҫкә, ысынға тура килмәгән, дөрөҫ түгел. *Яңылыш фекер. Яңылыш яуап. Яңылыш булыу.* **2.** Йүнәлеше дөрөҫ булмаған; хата. *Яңылыш яҡҡа китеү.* **3.** Тейешле тәртип ҡанундарынан ситләшкән. *Яңылыш юлға баҫыу. Яңылыш эш эшләү.*

**яңылышыу (яңылыш-)** *ҡ.* **1.** Янылышлыҡ ебәреү; хаталаныу. *Фекер яңылышыу. Яңылышып китеү. Яңылышып уҡыу.* **2.** Тейешле йүнәлешенән тайпылыу. *Юлдан яңылышыу. Яңылышып йөрөү.*

**яңынан** *р.* Тағы бер тапҡыр; ҡабаттан. *Яңынан башлау. Яңынан күсереү. Яңынан эшләтеү.*

**яңыртыу (яңырт-)** *ҡ.* **1.** Яңыға әйләндереү; яңы итеү. *Кейемде яңыртыу. Өйҙө яңыртыу.* **2.** Ҡабаттан, яңынан әҙерләү. *Самауыр яңыртыу.*

**яңырыу (яңыр-)** *ҡ.* Яңыға әйләнеү, яңы булыу. *Ауыл яңыра. Репертуар яңыра.*

**яңыса** *р.* **1.** Хәҙерге заманса, хәҙергесә. *Яңыса йәшәү.* **2.** Яңы алым, яңы ысул менән. *Яңыса эшләү. Эште яңыса ойоштороу.*

**япраҡ (япрағы)** *и.* Үҫемлектең, ҡояш нуры ярҙамында углекислота һәм һыуҙы шәкәр матдәһенә әйләндереп, туҡланыу өсөн хеҙмәт иткән төрлө формалағы йәшел йоҡа өлөшө. *Ағас япрағы. Үлән япрағы. Йәшел япраҡ. Һары япраҡ. Япраҡ ярыу.*

**япраҡлы** *с.* **1.** Япрағы булған. *Япраҡлы ботаҡ.* **2.** Япраҡ яра торған. *Тар япраҡлы. Түңәрәк япраҡлы ағас.*

**яр** *и.* Һыуға килеп терәлгән ҡоро ер ситe. *Диңгеҙ яры. Йылға яры. Текә яр. Яр аҫты.*

**яра** *и.* **1.** Тәндәге йәки эске бер ағзалағы зыянланған урын; йәрәхәт. *Асыҡ яра. Мылтыҡ яраһы. Тәрән яра. Яраны бәйләү.* **2.** *күсм.* Ауыр кисереш, рухи ғазап. *Йөрәк яраһы. Тән яраһы.*

**ярай** *киҫ.* **1.** Ни менәндер килешкәнде, риза булғанды белдерә; ярар. *Ярай, һеҙҙеңсә булһын.* **2.** *мөн.* Ниҙелер бер төрлө итеп уйлағанда, фараз иткәндә әйтелә. *Ярай, күргән дә икән ти.* ♦ **Ярай ҙа** берәй эш-хәлгә икеләнгәндә әйтелә. **Ярай инде** теләмәй генә риза булғанда әйтелә. **Ярай әле** ниҙеңдер һөҙөмтәһе менән ҡәнәғәт булғанда әйтелә.

**ярaҡлы** *с.* Нимә өсөндөр ҡулланырлыҡ. *Эшкә яраҡлы.*

**яраланыу (яралан-)** *ҡ.* Яра алыу, яралы булыу. *Ҡаты яраланыу. Һуғышта яраланыу.*

**яралау (ярала-)** *ҡ.* Яра һалыу, яралы итеү. *Еңелсә яралау.*

**яратыу[1] (ярат-)** *ҡ.* **1.** Кемде йәки ниҙелер үҙ итеп, ныҡ яҡын күреү. *Баланы яратыу. Тыуған илде яратыу. Тәбиғәт яратыу.* **2.** Икенсе енестәге кешегә мөхәббәт тойғоһо кисереү; һөйөү. *Ятраҡан егет. Яратҡан ҡыҙ. Яратып йөрөү.* **3.** Нимә менәндер мауығыу, ныҡ теләп шөғөлләнеү. *Китап яратыу. Эш яратыу.*

**яратыу[2] (ярат-)** *ҡ.* Барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу. *Тәбиғәт шулай яратҡан.*

**ярау[1] (яра-)** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер маҡсатҡа, эшкә файҙаланыу өсөн яраҡлы булыу, билдәле бер талапҡа яуап биреү. *Һалдатҡа ярау. Эшкә ярау.* **2.** Таман булыу, тап килеү. *Аяҡҡа итек яраны. Күлдәк ҡыҙға яраны.* **3.** Әҙәп-тәртипкә, ғөрөф-ғәҙәткә ярашлы булыу. *Тәмәке тартырға ярамай.* **4.** Эш-ҡылығың менән кемгәлер оҡшау. *Ололарға ярарға тырышыу. Түрәгә ярау.*

**ярау[2]** *и.* Тәбиғи йомош; хәжәт. *Кесе ярау. Оло ярау. Ярау итеү.*

**ярғанат** *и.* Һөтимәрҙәр ғаиләһенә ҡараған ҙур яры ҡанатлы төнгө йәнлек.

**ярҙам** *и.* Матди йәки рухи йәһәттән күтәреү рәүешендә күргән сара. *Ярҙам күрһәтеү. Ярҙамға мохтаж булыу. Ашығыс ярҙам.*

**ярҙамлашыу (ярҙамлаш-)** *ҡ.* Ярҙам күрһәтеү, ярҙам итеү. *Уҡыуҙа ярҙамлашыу. Эштә ярҙамлашыу.*

**ярҙамлыҡ** *с.* Һөйләм һәм һүҙҙәр араһындағы төрлө грамматик бәйләнеште үтәгән. *Ярҙамлыҡ исем. Ярҙамлыҡ ҡылым. Ярҙамлыҡ һүҙ.*

**ярҙамсы** *и.* Эштә, тормошта ярҙам иткән кеше. *Ярҙамсы итеп алыу. Капитан ярҙамсыһы. Ярҙамсы булыу.*

**ярҙамсыл** *с.* Кешегә ихлас ярҙам итеүсән. *Ярҙамсыл кеше. Ярҙамсыл булыу.*

**ярлы** *с.* Мохтажлыҡта йәшәгән; фәҡир. *Ярлы кеше. Ярлы тормош. Ярлы халыҡ.*

**ярлы-ябағай** *и. йыйн.* Ярлы халыҡ.

**ярма** *и.* Төрлө бөртөклө ашлыҡтың орлоғон төйөп, һурҙырып, ярып йәки бөтөн көйө әҙерләнгән аҙыҡ. *Дөгө ярмаһы. Һоло ярмаһы. Тары ярмаһы.*

**ярсыҡ (ярсығы)** *и.* Нимәнәндер ярылып бүленгән киҫәк. *Бомба ярсығы. Быяла ярсығы. Сынаяҡ ярсығы.*

**ярты** *и.* **1.** Нимәнеңдер тигеҙ итеп икегә, уртаға бүлгәс, барлыҡҡа килгән өлөшө. *Айҙың яртыһы. Алманың яртыһы. Ҡыштың яртыһы.* **2.** Сәғәттең 30 минутҡа тура килгән ваҡыт дәүмәле. *Өсөнсө ярты.*

**ярты-йорто** *с.* **1.** Тейешле күләм-дәүмәле кәм, тулы булмаған. *Ярты-йорто биҙрә һыу.* **2.** *күсм.* Сифаты насар, кәмселекле. *Ярты-йорто эш.*

**яртылаш** *р.* **1.** Ярты күләмдә, яртыһына хәтле. *Сәсеү яртылаш бөттө.* **2.** Бер ни тиклем, өлөшләтә. *Яртылаш башҡортса, яртылаш русса һөйләшеү.*

**ярһытыу (ярһыт-)** *ҡ.* Көслө тойғо менән ҡыҙҙырыу. *Йөрәкте ярһытыу.*

**ярһыу**[1] **(ярһы-)** *ҡ.* **1.** Көслө тойғонан дәртләнеү, ашҡынып шашыу. *Ярһыған йөрәк.* **2.** *күсм.* Ҙур көс менән ашҡыныу. *Ярһып ағыу.*

**ярһыу**[2] *с.* **1.** Көслө тойғоға, дәрткә бирелеп, ныҡ шашҡан. *Ярһыу йөрәк. Ярһыу күңел.* **2.** *күсм.* Ҙур көс менән ашҡынып ағыусан. *Ярһыу йылға.*

**ярыҡ**[1] **(ярығы)** *и.* Тар, буй тишек. *Иҙән ярығы. Ярыҡты һылау.*

**ярыҡ**[2] *с.* Ярығы булған. *Ярыҡ бүрәнә. Ярыҡ сынаяҡ.*

**ярылыу (ярыл-)** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ярыу.** *Ярылған утын.* **2.** Киҫәккә йәки буйға сатнау. *Быяла ярыла. Уртаға ярылыу.* **3.** Ҡытыршыланып, кибеп сатнау (тирегә, иренгә ҡарата). *Ирен ярыла. Ҡул ярыла.*

**ярым** *һ.* **1.** Бер бөтөндөң икенән бере. *Бот ярым. Йыл ярым.* **2.** *р. мәғ.* Яртылаш. *Ярым яланғас. Ярым ҡараңғы өй.*

**ярыу (яр-)** *ҡ.* **1.** Сатнатып, бөтөнлөгөн юғалтыу; ватыу. *Сынаяҡты ярыу. Тәҙрәне ярыу.* **2.** Буй-буй өлөшкә бүлеү. *Таҡта ярыу. Утын ярыу.* **3.** *күсм.* Ныҡ итеп туҡмау; һыҙырыу. *Сыбыртҡы менән ярыу.* ♦ **Япраҡ ярыу** яҙ көнө япраҡ сығарыу (ағасҡа ҡарата). **Ярып һалыу** күҙгә ҡарап дөрөҫөн әйтеү.

**ярыш** *и.* Эштә йәки уйында алға сығырға тырышып уҙғарылған көрәш. *Саңғы ярышы. Һүҙ ярышы. Ярыш үткәреү.*

**ярышыу (ярыш-)** *ҡ.* Уйында йәки эштә алға сығыр өсөн көрәшеү, алышыу. *Ярышып эшләү. Ярышып уҡыу.*

**яҫы** *с.* Арҡырыһы, иңе ҙур; киң; *киреһе* тар. *Яҫы таҡта. Яҫы маңлай.*

**ят** *с.* **1.** Иптәшлек-ҡәрҙәшлек мөнәсәбәте менән бәйләнмәгән; сит. *Ят кеше.* **2.** Тыуған йәки торған ерең түгел; сит. *Ят ер. Ят ҡала.*

**ятка** *р.* Иҫтә ҡалғанса, яттан. *Ятҡа белеү. Ятҡа һөйләү.*

**ятлау (ятла-)** *ҡ.* Хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ниҙелер ҡат-ҡат ҡабатлау. *Шиғыр ятлау. Ятлап алыу.*

**яттан** *р.* Иҫтә ҡалғанса, ятҡа. *Яттан иҫәпләү. Яттан һөйләү.*

**ятһыныу (ятһын-)** *ҡ.* Ят күреү, ятҡа һанау; ят итеү. *Ятһынып йөрөү. Ятһынып тороу.*

**ятыу**[1] **(ят-)** *ҡ.* **1.** Тотош кәүҙә менән горизонталь хәлдә урынлашыу. *Ҡырын ятыу. Салҡан ятыу.* **2.** Һалған, урынлаштырылған хәлдә булыу. *Аҫҡыс өҫтәлдә ята. Кейем һандыҡта ята.* **3.** Йоҡлар өсөн урынлашыу. *Иртә ятыу. Һуң ятыу.* **4.** Ғәҙәттәге тормошта йөрөү, йәшәү. *Ауылда ятыу. Буш ятыу. Ҡунаҡта ятыу. Өйҙә ятыу.*

**ятыу**[2] *и.* Йылғаның әкрен генә аҡҡан тәрән урыны. *Йылға ятыуы. Ятыуҙа һыу инеү.*

**яу** *и.* **1.** Берәй ил, дәүләткә ҡаршы ойошторолған һуғыш хәрәкәте. *Дошман яуы. Яу сабыу.* **2.** Ғәскәр менән ғәскәр араһында ойошторолған ҡоралллы алыш. *Изге яу. Яу ҡоралы. Яуҙан ҡайтыу.* **3.** Ҡоралллы ғәскәр. *Атлы яу. Батша яуы.* ♦ **Күҙ(ҙең) яуын алыу** матурлығы менән күҙҙе сағылдырыу. **Ҡара яу** күмәк, көслө ҙур ғәскәр.

**яуап (яуабы)** *и.* **1.** Һорауға, мөрәжәғәткә ҡайтарып әйтелгән һүҙ. *Дөрөҫ яуап. Яуап ҡайтарыу. Яуап биреү.* **2.** Йомаҡтың, математик миҫалдың йәки мәсьәләнең сиселгән һөҙөмтәһе. *Йомаҡтың яуабы. Мәсьәләнең яуабы. Яуабын табыу.* **3.** Кемдеңдер берәй эшенә, ҡылығына йәки бер нәмәгә мөнәсәбәт белдереп, ҡаршы эшләнгән эш. *Яуап хаты.* ♦ **Яуап алыу** нимәнелер асыҡлау өсөн шаһиттарҙан йәки ғәйепленән һорашып мәғлүмәт туплау. **Яуап биреү** 1) ғәйепле кеше йәки шаһит булып нимәлер тураһында мәғлүмәт биреү; 2) ниндәйҙер эштең, ҡылыҡтың һөҙөмтәһе өсөн бурыслы булыу.

**яуаплы** *с.* **1.** Ниҙендер булмышы, үтәлеше өсөн яуап тоторға тейешле. *Яуаплы кеше. Яуаплы мөхәррир.* **2.** Бик әһәмиәтле. *Яуаплы осор. Яуаплы эш.*

**яугир** *и.* Яуҙа, һуғышта ҡатнашҡан кеше; һуғышсы. *Һәләк булған яугирҙар. Яугир иптәш.*

**яулау (яула-)** *ҡ.* **1.** Яу сабыу, яу менән кемгәлер ҡаршы сығыу. *Еңеү яулау.* **2.** Нимәлер өсөн көрәшеү. *Азатлыҡ яулау. Бәхет яулау. Уңыш яулау.* **3.** *күсм.* Ниндәйҙер тойғо уятыу. *Ихтирам яулау.*

**яулыҡ (яулығы)** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың дүрткел йоҡа баш бәйләмесе. *Кешмир яулыҡ. Яулыҡ ябыныу.*

**яурын** *и.* Тәндең ҡулбаштан елкәгә ҡәҙәрге урыны; иңбаш. *Киң яурынлы. Яурын һөйәге. Яурынға һалыу.*

**яуыз** *с.* Кешегә насарлыҡ, яманлыҡ ҡылыусан; уҫал. *Яуыз кеше. Яуыз булыу.*

**яуызлыҡ (яуызлығы)** *и.* Яуыз ҡылыҡ, уҫаллыҡ. *Кешенең яуызлығы. Яуызлыҡ ҡылыу.*

**яуым-төшөм** *и.* Ҡар, ямғыр һ. б. атмосфера күренештәре. *Яуым-төшөм күп булыу.*

**яуыу (яу-)** *ҡ.* **1.** Һауанан һибелеп төшөү (ҡар, ямғыр һ. б. күренешкә ҡарата). *Бысҡаҡлап яуыу. Ҡойоп яуыу. Һибәләп яуыу.* **2.** *күсм.* Бер-бер артлы күпләп килеү. *Рәхмәт яуа. Хат яуа.*

**яһалма** *с.* **1.** Тәбиғи сифатына, ысын булмышына оҡшатып, шуға яҡын итеп эшләнгән. *Яһалма ебәк. Яһалма күн.* **2.** Ысын күңелдән булмаған. *Яһалма йылмайыу.*

**яһау (яһа-)** *ҡ.* **1.** Тейешле сифатҡа, маҡсатҡа ярашлы нимәләр эшләү. *Арба яһау. Көрәк яһау. Ҡымыҙ яһау.* **2.** Ниндәйҙер сараны ойоштороу; үткәреү. *Байрам яһау. Туй яһау.* **3.** Исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған эште башҡарғанды белдерә. *Доклад яһау. Һығымта яһау.*

## ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ

Башҡорт теленең һүҙлеге. Ике томда. Мәскәү: «Русский язык», 1993. Коллектив тарафынан әҙерләнгән.

Башҡортса-урыҫса һүҙлек. Мәскәү: «Русский язык – Дигора», 1996. Коллектив тарафынан төҙөлгән.

*Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Суфьянова Н. Ф.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан энциклопедияһы нәшриәте, 2002.

*Пахомова Т. Л.* Толковый словарь русского языка для школьников. М.: «Лист-Нью», 2002.

*Ураҡсин З. Ғ.* Башҡорт теленең фразеология һүҙлеге. Өфө: «Китап», 1996.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге. Өфө, 2004.

*Сиразитдинов З. Ә.* Башҡорт теленең йышлыҡ һүҙлеге. Т. 1. (фәнни әҙәбиәт буйынса). Өфө: «Ғилем», 1997.

*Сиразитдинов З. Ә.* Башҡорт теленең йышлыҡ һүҙлеге. Т. 2. (проза буйынса). Өфө: «Ғилем», 2002.

Учебное издание

**СУФЬЯНОВА Насима Фатиховна**
**СИРАЗИТДИНОВ Зиннур Амирович**
**УРАКСИН Зиннур Газизович**

**ТОЛКОВЫЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА**

**для учащихся средних и старших классов**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Сәйҙә Рәхимова*
Мөхәррире *Хафиза Биккужина*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Надия Пятаева*
Корректорҙары *Ләйсән Саниева,*
*Гөлсирә Таһирова,*
*Айгөл Хәкимова*